# БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ

# 8





# БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ

# 8

**Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

КИТАП

Өфө • 2017

УДК 373.167.1:82
ББК 83.3 (2 Рос=Баш)-922
Б28

*Автор-төҙөүселәре:*
М. Б. Юлмөхәмәтов, М. Х. Иҙелбаев

**Шартлы тамғалар:**

Һорауҙар һәм эштәр

Хәтергә төшөрәбеҙ

Телмәрегеҙҙе байытығыҙ

Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Фонохрестоматия

Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ

Төркөмдә йәки парлашып эшләгеҙ

Ижади эш

Интернеттан мәғлүмәт табабыҙ

**Башҡорт әҙәбиәте:** уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып
Б28 барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 8-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы / [авт.-төҙ.: М. Б. Юлмөхәмәтов, М. Х. Иҙелбаев]. – Өфө : Китап, 2017. – Һүрәттәре менән 400 бит.
ISBN 978-5-295-06770-9

**УДК 373.167.1:82**
**ББК 83.3 (2 Рос=Баш)-922**

**ТП – 083/17**

**ISBN 978-5-295-06770-9**

© Юлмөхәмәтов М. Б., Иҙелбаев М. Х., 2017
© Василов А. Ә., дизайн, 2017
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис.
Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

## Ҡәҙерле уҡыусылар!

7-се кластың «Башҡорт әҙәбиәте» уҡыу ҡулланмаһы буйынса һеҙ башҡорт халҡының боронғо ҡомартҡылары – тарихи йырҙары, легенда-риүәйәттәре, йола фольклоры һәм шулай уҡ әҙәбиәтебеҙҙең йондоҙҙары М. Аҡмулла, М. Ғафури, Ш. Бабич, Д. Юлтый, Һ. Дәүләтшина, Р. Ниғмәти, М. Кәрим, Ғ. Хөсәйенов, Я. Хамматов, Р. Өмөтбаевтарҙың әҫәрҙәре менән таныштығыҙ. Унда һеҙ тәрән аҡыллы, фәлсәфәле халыҡ ижады әҫәрҙәрен тыуҙырыусыларҙың һәм яҙыусыларыбыҙҙың художество оҫталығын күрҙегеҙ. Шулай уҡ рус әҙәбиәтенең күренекле вәкилдәренең, туғандаш халыҡтар яҙыусыларының ижад өлгөләрен өйрәндегеҙ.

8-се кластың «Башҡорт әҙәбиәте» уҡыу ҡулланмаһы һеҙҙе әҙәбиәт донъяһының ғәжәп биттәре буйлап сәйәхәткә алып сығасаҡ. Ул башҡорт һүҙ сәнғәте өсөн генә хас булған әйтеш һәм ҡобайыр жанрҙарының үҙенсәлекле өлгөһөн күрһәтер, башҡорт әҙәбиәтенең абруйлы яҙыусыларының хикәйәләре, романдарынан өҙөктәре, драмалары менән һөйөндөрөр. Ә инде нескә хисле, тойғоло шиғырҙар, поэмалар һеҙҙе матурлыҡ донъяһына алып инер, күңелдәрегеҙгә дәрт, шатлыҡ өҫтәр.

Әйҙәгеҙ, әҙәбиәт донъяһына рәхим итегеҙ, уңыштар һеҙгә!

*Автор-төҙөүселәр*

*Рәшит НАЗАРОВ*

## БАШҠОРТ

Кисәгең дә, бөгөнгөләй,
Күңелемә яҡын минең.

*М. Кәрим*

Бөгөнгөләй, унаң үткәне лә
Уйылып ҡалған Урал ташына…
…Ҡурай осонан һыҙылып тамған моңо
Ал ҡан булып ташҡа яғылған.

Ҡайғыларҙан ҡайылып сигелһә лә
Тирмәләрҙең һоро биҙәге,
Йөрәгендә ятҡан эйәрле ат
Шылтыратҡан, сапсып, йүгәнен.

«Уралым!» – тип оран ташлап ауһа,
Күмгәндә лә тупраҡ-ер үҙен,
Йөрәгенән сығып, эйәрле ат
Сапҡан яуға,
Ир данына биреп теҙгенен.

Үткәнеләй, бөгөнө лә данлы,
Тик ҡайымай данды ҡайғы, ҡан:
Яурынында бәхет ҡошо һайрай,
Эйәренә ҡунып килә таң!

**Фонохрестоматия**

Актёр башҡарыуында тыңлағыҙ.

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Шиғырҙың тәүге ике юлы ниндәй халыҡ йырҙарын иҫкә төшөрә?
**2.** Эйәрле ат образы шиғырҙа ниндәй мәғәнәгә эйә? Ошоға бәйле ниндәй башҡорт халыҡ мәҡәлен беләһегеҙ?
**3.** Аҙаҡҡы дүрт юлдың мәғәнәһен аңлатып бирегеҙ.

*Абдулхаҡ ИГЕБАЕВ*

## БАШҠОРТОСТАН

Ҡырлас тауҙар иле Башҡортостан –
Ата-бабаларҙың баш йорто,
Баш йортҡайын яҡлап яуға сапҡан
Күк Уралдың ҡыйыу башҡорто.

Башҡортостан – беҙҙең азатлыҡтың,
Берҙәмлектең ныҡлы ҡалҡаны,
Уралдағы барлыҡ милләттәргә
Һин, атайсал, дуҫлыҡ Ватаны.

Сал бөркөттәр оҫҡан Башҡортостан –
Салауаттай ирҙәр төйәге,
Нисә быуын яугир ҡаһармандар
Россияның булды терәге.

Мең ғазаптар йотҡан Башҡортостан –
Ҡанһырап та баҡҡан ергенәм,
Ни күрһәң дә, ниҙәр кисерһәң дә,
Бөгөлмә һин, Тыуған илгенәм.

Башҡортостан – беҙҙең азатлыҡтың,
Берҙәмлектең ныҡлы ҡалҡаны,
Уралдағы барлыҡ милләттәргә
Һин, атайсал, дуҫлыҡ Ватаны!

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

## ?

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шиғырҙың идея-тематикаһын билдәләгеҙ.
**2.** «Башҡортостан – ата-бабаларҙың баш йорто» тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ, үҙ һүҙҙәрегеҙ менән аңлатып бирегеҙ.
**3.** Шиғырҙан метафораларҙы табығыҙ һәм уҡып күрһәтегеҙ.
**4.** «Россияның булды терәге» тигән юлдарҙың нимә аңлатыуын асыҡлағыҙ.

*Хәким ҒИЛӘЖЕВ*

## БАШҠОРТ ТЕЛЕ

Беҙҙе илле иткән тел ул;
Беҙҙе билле иткән тел ул;
Беҙҙе йәнле иткән тел ул;
Беҙҙе йүнле иткән тел ул, –
Һай, афарин[1], башҡорт теле!

Беҙҙе батыр иткән тел ул;
Беҙҙе матур иткән тел ул;
Беҙҙе сабыр иткән тел ул;
Беҙҙе ғорур иткән тел ул, –
Һай, афарин, башҡорт теле!

Уралды төйәк иткән тел ул;
Беҙҙе һөйәк иткән тел ул;
Беҙҙе көйөк иткән тел ул;
Беҙҙе бөйөк иткән тел ул, –
Һай, афарин, башҡорт теле!

Йөҙ халыҡты аңлар тел ул;
Изгелекте һаҡлар тел ул;
Моңло, йырлы сәсән тел ул;
Утты-һыуҙы кискән тел ул, –
Һай, афарин, башҡорт теле!

Мең-мең йылдар үткән тел ул;
Мең киҫелеп үҫкән тел ул;
Ҡылды ҡырҡҡа киҫкән тел ул;

---

[1] *Афарин* – хуплау, данлау, һоҡланыу мәғәнәһендә.

Дуҫлыҡты аманат иткән тел ул, –
Һай, афарин, башҡорт теле!

Йөрәгемде һулҡылдатҡан
Ҡан тамыры менән бер ул!..
Мәғдән йәшеренгән ер ул,
Әле асылмаған сер ул…
Һай, афарин, башҡорт теле!

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

Шағир башҡорт теле тураһында нимәләр яҙа, үҙ һүҙҙәрегеҙ менән әйтеп бирегеҙ.

**Телмәрегеҙҙе байытығыҙ**

«Мәғдән» һүҙенең мәғәнәһен аңлатығыҙ, телмәрҙә ҡулланырға өйрәнегеҙ. Уҡылған әҫәрҙәрҙән миҫалдар килтерегеҙ.

*Хәсән НАЗАР*

## БАШҠОРТ ТЕЛЕ

Башҡорт теле! Уралымда
Затым өсөн һин – рух түле.
Миңә һин – яҙмыш, ә кемгә –
Сәхнәләгесә роль теле.

Башҡорт теле! Тарихында
Бер кемгә лә юҡ ләғнәте.
Тик үҙенсә иретмәктә
Көсәнмәне кем лөғәте.

Башҡорт теле! Һин – аҡбуҙат,
Һин – һандуғас, һин – ыласын.
Һәр өнөң ҡурай моңолай,
Барыһы тәбиғи, ысын.

Башҡорт теле! Салауат теле,
Һәҙиә теле, Мостай теле.
Уларға бит «Урал батыр»
Иң шөһрәтле остаз ине.

Башҡорт теле! Мәктәптәрҙә –
Һаман ҡыҫырыҡлау еле.
Донъя тармы?! Былай ҙа бит
Вазифалы урыҫ теле.

Башҡорт теле! Быуаттарҙы
Үтеп тә һин, сарланып та,
Яҙҙыртаһың минән шиғыр,
Ғорурланып, зарланып та.

Башҡорт теле! Уралымда
Затым өсөн һин – рух түле.
Һин бит беҙҙең хәтер иле,
Мәңге йәшә, башҡорт теле!

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шиғырҙың идея йөкмәткеһен билдәләгеҙ.
**2.** «Уралымда башҡорт теле – рух түле» тигәнде нисек аңлайһығыҙ?

### Хәтергә төшөрәбеҙ

5-се, 6-сы кластарҙа туған тел тураһында ниндәй шиғри әҫәрҙәр менән таныштығыҙ, иҫегеҙҙә ҡалғандары тураһында һөйләгеҙ.

*Мәүлит ЯМАЛЕТДИНОВ*

## ХАЛҠЫМ ХАЗИНАҺЫ

Туған телде, күҙ ҡараһы кеүек,
Һаҡлайыҡсы, ҡыҙҙар, егеттәр!
Ҡарғалар күп, ә беҙ һирәкбеҙ, тип
Ҡарҡылдауға күсмәй бөркөттәр.

Ерҙә һәр тел – ғүмер буйы йыйған
Хазинаһы бит ул халыҡтың,
Хаҡыбыҙ юҡ беҙҙең юғалтырға
Бөртөгөн дә ошо байлыҡтың.

Бәғзеләрҙең бөгөн шул мираҫты
Тәләф итеүҙәре хуп түгел.
Ғазап сигеп үҙең тапмағанды
Туҙҙырыуы, эйе, бик еңел.

Туған телде, күҙ қараһы кеүек,
Һаҡлайыҡсы, ҡыҙҙар, егеттәр!
Ҡарғалар күп, ә беҙ һирәкбеҙ, тип
Ҡарҡылдауға күсмәй бөркөттәр.

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шағир нимәне халҡыбыҙҙың хазинаһы исеменә индерә? Һеҙ шул раҫлау менән ризаһығыҙмы? Риза булмаһағыҙ, фекерегеҙҙе еткерегеҙ.
**2.** «Ҡарғалар күп» тигәнде нисек аңлайһығыҙ?

### Төркөмдә йәки парлашып эшләгеҙ

«Туған телде, күҙ ҡараһы кеүек, һаҡлайыҡсы, ҡыҙҙар, егеттәр!» темаһына бәхәс ойоштороғоҙ.

*Мәхмүт ХӨСӘЙЕН**

## БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҒОРУР ЯҢҒЫРАЙ

Башҡорт халҡы матур ғүмер итә
Ағиҙелдә, тыуған иләндә.
Һайраша ул тарих күкрәгенән
Урғып сыҡҡан туған телендә.

---

* Шағир Мәхмүт Хөсәйен (Мәхмүт Хафиз улы Хөсәйенов) (1923–1993) хәҙерге Ҡаҙағстан Республикаһының Көнбайыш Ҡаҙағстан өлкәһе Яңы ҡала төбәгендәге Урҙа исемле ауылда донъяға килә. Ҡыҙылъяр ҡалаһындағы мәктәпте тамамлағас, пионерҙар ойошмаһында, гәзит редакцияһында әҙәби хеҙмәткәр, «Экпенды» тигән сәнәғәт артелендә мәҙәни эштәр етәксеһе булып эшләй. Һуғыш башланғас та, үҙ теләге менән фронтҡа китергә ғариза бирә. Батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары һәм миҙалдар менән бүләкләнә. Һуғыш бөткәс, Ҡазан дәүләт университетына уҡырға инә. Һуңынан Татарстан китап нәшриәтендә эшләй. Беренсе шиғырҙар йыйынтығы («Тыуған ил өсөн») Ленинград хәрби нәшриәтендә баҫыла. Шунан һуң әҙип 48 йыл әүҙем ижад эшмәкәрлеге менән шөғөлләнә. Әҙәбиәт һәм матбуғат өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн уға 1983 йылда «Татарстандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре» тигән маҡтаулы исем бирелә.

Башҡорт теле күркәм – Һаҡмарҙарҙа
Көләмһөрәп атҡан таң һымаҡ,
Башҡорт теле ғорур – ҡаялары
Күккә ашҡан Уралтау һымаҡ.

Ҡурайҙарҙан моң һәм аһәң алған,
Ҡанат алған шоңҡар ҡоштан ул.
Салауаттың талмаç толпарында
Ирек даулап алға осҡан ул!..

Ағиҙелдең ҡыйғыр бөркөттәрен
Ғорурлығы иткән Кутузов…
Башҡорт теле күргән Париждарҙы,
Походтарҙа оҙон юл уҙып…

Октябрҙең ҡайнар көндәрендә
Балҡыш алып яҡты таңдарҙан,
Даһийыбыҙ Ильич яҡтыһында
Тыуған кеүек булған яңынан!..

Һәм шул көндән бирле бөгөнгәсә
Алғы һыҙығында тормоштоң,
Ҡоласын киң йәйеп, тау менә ул,
Кем һуң тоймай уның һулышын?!

Моңһоу йөрөгән урам саттары…
Шәйехзада күлдә ҡармаҡ һала,
Тик әле ул ниндәй кескенә!
Тауҙа күрәм сабый Ғәлимйәнде –
Ибраһимов тигән титан булып
Ҡалҡасағын уйлар кем генә!

Ивановтың дөм-дөм урмандары
Сәләм бирә төçлө бөгөлөп…
Һыуҙар һибеп Нарспи ҡәберенә,
«Пирен Ялта…» тиеп көйләй-көйләй,
Бала Ухсай ҡайта йүгереп.

Серен һөйләй миңә бала Фатих,
Кәрим булыр сағын иçәпләп –
Тел сығарып, мине үртәй-үртәй,
Ялан аяҡ ялт-йолт сабып үтте
Бала Ҡудаш, бала Иçәнбәт…

Һинең даның, гүзәл Башҡортостан,
Һуғышсы һәм йырсы Салауат.
Һинең йәнең – эштә, көрәштәрҙә,
Ирәндеккәй һыуҙың башын тапҡан,
Бәхет тапҡан тырыш Азамат.

Төшөп ҡалды минең тәүге эҙҙәр
Дуҫтарымдың тыуған ерендә.
Башҡорт иле, бөгөн һиндә гиҙәм,
Үҙем хәҙер – шиғыр донъяһында,
Үҙем хәҙер – йырҙар илендә!

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Башҡортостан ере ниндәй күренекле кешеләрҙе биргән? Шиғырҙа кемдәр тураһында әйтелә?
**2.** Ғәлимйән Ибраһимов, Константин Иванов, Яков Ухсай, Нәҡи Иҫәнбәт ҡайһы халыҡтарҙың әҙиптәре? Улар был шиғырҙа ни өсөн телгә алына?
**3.** Башҡорт теленең «күргән һәм ишеткән» тарихи юлдары тураһында нимә әйтелә?

### Телмәрегеҙҙе байытығыҙ

Шиғырҙа бик күп тасуири саралар ҡулланылған, шуларҙы табып уҡығыҙ һәм төрҙәрен билдәләгеҙ.

*Валентин РАСПУТИН**

## ФРАНЦУЗ ТЕЛЕ ДӘРЕСТӘРЕ

*Анастасия Прокопьевна Копыловаға*

Сәйер: нишләп беҙ улай, атай-әсәйҙәр алдындағы һымаҡ, уҡытыусылар алдында ла йыш ҡына үҙебеҙҙе ғәйепле тоябыҙ икән? Юҡ, мәктәптәге хәл-ваҡиғалар өсөн түгел, мәктәптән һуң йәшәлгән ғүмер өсөн.

* Күренекле рус яҙыусыһы Валентин Григорьевич Распутин (1937– 2015) хәҙерге Иркутск өлкәһенең Усть-Уда ауылында тыуған.
Иркутск дәүләт университетының тарих-филология факультетын тамамлай. Иркутск, Красноярск, Мәскәү ҡалаларында йәшәп ижад итә.

Бишенсе класҡа мин ҡырҡ һигеҙенсе йылда барҙым. «Барҙым» тип әйтеүе дөрөҫ үк булмаҫ, сөнки беҙҙең ауылда мәктәп башланғыс ҡына ине, шуға ла артабан уҡыу өсөн ауылдан илле саҡрым алыҫлыҡтағы район үҙәгенә юлланырға тура килде. Тәүҙә, уҡыу башланырға бер аҙна ҡалғас, әсәйем барып ҡайтты: таныш ҡатыны менән һөйләшеп, ризалығын алған – унда фатирҙа торасаҡмын – һәм августың һуңғы көнөндә колхоздың берҙән-бер йөк машинаһының шофёры Ваня ағай мине ултыртып алып китте лә Подкаменный тип аталған урамға килтереп төшөрҙө; түшәкте, ваҡ-төйәк төрөлгән төйөнсөктө өйгә индереште, хушлашҡанда яурынға хуплап һуҡҡылаңы ла китеп барҙы. Шулай итеп, ун бер йәштә минең үҙ аллы тормошом башланды.

Аслыҡ ул йылды бөтөп етмәгәйне әле, әсәйемдең өс бала, мин – иң олоһо. Яҙын, үтә лә ауыр саҡта, һабағы үҫкән картуфтың күҙҙәрен, һоло, арыш бөртөктәрен ашайым, һеңлемә лә бирәм: йәнәһе, беҙ уларҙы ашҡаҙанға сәсәбеҙ – тамаҡ ҡайғыһы бер аҙға булһа ла онотолоп тора. Ашар орлоҡтарҙы беҙ йәй буйы тырышып Ангара һыуы менән һуғарҙыҡ, тик уңышын көтөп ала алманыҡ, йә ул беҙ һиҙмәҫлек аҙ миҡдарҙа булғандыр, күрәһең. Шулай ҙа был эш бөтөнләй файҙаһыҙ түгелдер, бының кешегә ҡасан да булһа кәрәге тейер, ә беҙ тәжрибәһеҙлектән нимәнелер еренә еткереп башҡармағанбыҙҙыр, тип уйлайым.

---

«Мария өсөн аҡсалар», «Йәшә һәм иҫеңдә тот», «Матёра менән хушлашыу», «Янғын» повестары, бик күп хикәйәләр һәм очерктар авторы. Уның әҫәрҙәре буйынса «Француз теле дәрестәре», «Осрашыу», «Айыу тиреһе һатыла», «Хушлашыу», «Василий һәм Василиса», «Йәшә һәм иҫеңдә тот» исемле кинофильмдар төшөрөлгән. СССР-ҙың һәм Рәсәй Федерацияһының Дәүләт премиялары лауреаты, Социалистик Хеҙмәт Геройы.

Буласаҡ яҙыусы тыуған ауылында башланғыс мәктәпте тамамлағас, бала ғына көйө илле саҡрым алыҫлыҡтағы урта мәктәпле ауылға йөрөп белем ала. Ошо ваҡыттар уның «Француз теле дәрестәре» хикәйәһендә сағылдырылған. Был әҫәрҙе автор француз теле уҡытыусыһына арнай. Хикәйә тәүге тапҡыр яҙыусының әҫәрҙәр йыйынтығында баҫылғас, уның шул саҡтағы уҡытыусыһы үҙен Лидия Михайловна образында танып, авторға хат яҙа. Артабанғы аралашыуҙан асыҡланыуынса, уҡытыусы әҫәрҙең төп геройы прототибына – уҡыусы малайға посылка менән макарондар һалыуын хәтерләмәй икән. Был хәлде яҙыусы үҙе китап уҡыусыларға шулай тип аңлата: «Байтаҡ уйланып йөрөгәс, бында ғәжәпләнерлек бер нәмә лә юҡлығын аңланым: изгелек тәғәйенләнгән кешегә ҡарағанда башҡарған кеше аңында бәләкәйерәк хәтер булып йәшәй икән…»

Бында ла уҡыуым яҡшы барҙы. Шулай булмайса: уҡыр өсөн килгәнмен, уҡыуҙан башҡа эшем юҡ, ә үҙемә алған бурысты илке-һалҡы башҡарырға ул саҡта белмәй инем әле. Бер дәресем әҙерләнеп бөтмәһә лә, мәктәпкә барырға ҡыйыулығым етмәй, шуға ла бөтә фәндәрҙән – француз теленән башҡа – «бишле» билдәләре алып килдем.

Ә француз теле менән дуҫ булмауыма өндәрҙе дөрөҫ әйтмәүем ғәйепле. Мин айырым һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе еңел отам, тиҙ тәржемә итәм, яҙмалағы ҡыйынлыҡтарҙы сос үҙләштерәм. Әммә шуларҙың бөтәһен дә минең Ангара малайы булыуым юҡҡа сығара ла ҡуя, ә унда ете быуынға тиклем бер кем дә сит тел һүҙҙәрен әйтмәгән – ер йөҙөндә уларҙың барлығын белһәләр әле. Мин француз телендә үҙебеҙҙең ауылса һөйләшәм, етмәһә, ярты әйтелеште кәрәкмәгәнгә һанап «йотам». Икенсе яртыһын, өргән кеүек, ҡыҫҡа-ҡыҫҡа өҙөктәр менән ҡысҡырып сығарам. Лидия Михайловна, француз теле уҡытыусыһы, мине тыңлай башлау менән сырайын һыта, күҙҙәрен йома. Бындайҙы бер ҡасан да ишеткәне булмаған, күрәһең. Ул ҡат-ҡат аңҡау өндәренең әйтелешен, һуҙынҡы өндәрҙең теҙмәһен аңлата, шунан үҙе артынан ҡабатларға ҡуша – мин юғалып ҡалам, тулҡынланам, телем ағасҡа әйләнә лә ҡуҙғалмай. Бөтәһе лә бушҡа. Шулай ҙа иң ҡурҡынысы мин мәктәптән ҡайтҡас башлана. Мәктәптә ирекһеҙҙән онотолам, унда ни ҙә булһа эшләргә, башҡарырға мәжбүрмен: иптәштәр йолҡҡолай, теләһәң-теләмәһәң дә улар менән уйнарға, хәрәкәтләнергә, ә дәрестәрҙә – әҙерләнергә, уҡырға тейешһең. Әммә яңғыҙ ҡалыуым була, һағыш солғап ала – өйҙө, ауылды уйлай башлайым. Элек хатта бер көнгә лә ғаиләнән айырылғаным юҡ ине, шуға ла ят кешеләр араһында йәшәүгә әҙер түгелмен. Шул ҡәҙәре ҡыйын, күңелһеҙ – ауырып йығылыуҙан да хәтәрерәк. Бер генә теләк, бер генә хыял күңелдә – ҡайтырға. Ябығып та киттем. Сентябрь аҙағында әсәйем килгәс, күреп ҡото осто. Мин уның алдында бирешмәҫкә, зарланмаҫҡа тырыштым, иламаным, тик ул ҡайтырға сыҡҡас, түҙмәнем, ҡысҡырып илай-илай машина артынан йүгерҙем. Әсәйем, йүгермә, ҡал, тип машина башынан ҡул болғай, мин бер нәмә лә аңламайишетмәй йүгерәм дә йүгерәм. Шунан ул кабина башына һуғып машинаны туҡтатырға мәжбүр булды.

– Бар, йыйын, – тине ул, мин ахылдап машина янына килеп еткәс. – Етте, уҡының, теләмәйһең икән, ҡайтайыҡ.

Мин аңыма килдем дә кире йүгерҙем – ҡайҙа инде ул уҡырға теләмәү!

Ябығыуым өйҙә, ауылды һағынғандан ғына түгел, туйғансы ашамауҙан да. Көҙөн, Ваня ағай машинаһында район үҙәгенә яҡын заготзерноға иген ташығанда, ашарға йыш ебәреп торалар ине, аҙнаһына бер тапҡыр тигәндәй. Бөтә бәлә шунда: ул да етмәне. Төйөнсөктә икмәк, картуфтан башҡа ризыҡ юҡ, һирәкләп әсәй банка менән эремсек һала, уныһын берәйһенән берәй нәмәгә алыштырып алалыр, сөнки һыйырыбыҙ юҡ. Ебәргәндәре күп тә һымаҡ, ике көндән ҡараһаң – бөткән. Тиҙҙән икмәгемдең яртыһы сәйер рәүештә юғалғанын шәйләнем. Юрамал тикшерҙем, ысынлап та шулай: мәктәпкә киткәндә була, ҡайтыуыма – елдәр иҫкән. Картуф менән дә шул уҡ хәл. Кем урлай – өс бәләкәй балаһынан арыған-алйыған, гел генә ҡысҡырып, тауышланып, әрләшеп йөрөүсе Надя апаймы, әллә оло ҡыҙҙарының береһеме, әллә иң бәләкәйе Федька – белә алманым, күҙәтеп тороу түгел, хатта был турала уйларға ла ҡурҡтым. Шуныһы ғына аяныс: әсәйем үҙенән, һеңлем менән энемдең ауыҙынан өҙөп миңә ебәрә, ә аҙыҡтың күп өлөшө үҙем торған фатир хужаларына эләгә. Мин үҙемде быға ла күнергә мәжбүр иттем. Был хаҡта әсәйгә лә ошаҡлай алмайым – ауыр кисерәсәк.

Бер көн, сентябрҙә әле, Федька минән былай тип һорай:

– Һин «чика» уйнарға ҡурҡмайһыңмы?

– Ниндәй «чика»? – Мин аңламаным.

– Шундай уйын бар. Аҡсаға уйнайҙар. Аҡсаң булһа, әйҙә, барайыҡ, уйнайыҡ.

– Аҡсам юҡ.

– Минең дә юҡ. Улайһа, былай ғына барайыҡ, ҡарап булһа ла торорбоҙ.

Федька мине баҡсалар артына алып китте. Беҙ орлоҡтары ҡарайып, бер-береһенә уралып-сырмалып үҫкән суҡ тәлгәшле бейек кесерткән баҫҡан ҡалҡыулыҡ ситенән үттек, иҫке сүплектәге өйөмдәргә баҫып һикергеләнек һәм уйпатлыҡта, ҙур булмаған таҙа, тигеҙ аҡланда бер төркөм малайҙарҙы күрҙек. Яҡын килдек. Малайҙар һағайҙы. Уларҙың барыһы ла йәшкә минең тирә ине, тик береһе – оҙон һәм таҙа кәүҙәле, башҡалар алдында үҙенең көсө менән дә, власы менән дә өҫтөнлөк иткән оҙон ерән сәсле малай. Төҫмөрләнем: етенсе класта уҡый булһа кәрәк.

– Быны ниңә алып килдең? – тине әлеге оҙон малай Федькаға ҡәнәғәтһеҙ генә.

– Вадик, ул беҙҙең егет… – тип аҡлана башланы Федька. – Ул беҙҙә йәшәй.

– Уйнайһыңмы? – тип һораны Вадик минән.

– Аҡсам юҡ.

– Беҙҙең бында йыйылғанды берәйһенә әйтәһе булма!

– Нишләп әйтә ти? – Мин үпкәләгәндәй иттем.

Миңә бүтәнсә иғтибар итмәнеләр – ситкәрәк баҫтым да уйынды күҙәтә башланым. Барыһы ла уйнамай, алтауы, етәүме генә уйнай, башҡалар минең һымаҡ ҡарап тора һәм, нигеҙҙә, Вадиктың уйынын күҙәтә. Бында ул хужа икәнен мин шундуҡ аңланым.

Уйын ҡатмарлы түгел. Һәр кем өйөмгә унар тин һала ла, ошо аҡса өйөмөн решка яғы менән өҫкә ҡаратып, кассанан ике метр самаһы алыҫлыҡта ҡалын һыҙыҡ менән уратып алынған майҙансыҡҡа төшөрәләр, икенсе яҡтан, ергә һеңешкән ҙур таш өҫтөнә баҫып, шайбаға оҡшаған йомро ташты әлеге аҡса өйөмөнә бәрәләр. Шайбаны шулай итеп бәрергә кәрәк, ул ҡалын һыҙыҡҡа мөмкин тиклем яҡынырaҡ ятһын, әммә һыҙыҡтан ситкә лә сыҡмаһын – ана шул саҡта һиңә кассаны беренсе булып ватыу хоҡуғы бирелә. Кассаны ла шул уҡ шайба менән кәксетәләр. Маҡсат – аҡсаны орёл яғына әйләндереү. Әйләндергәнсе һуҡһаң – һинеке, артабан да һуҡ, әйләндерә алмайһың икән – сират икенсе кешегә күсә. Йәнә бер мөһим шарты бар: шайба менән аҡсаларҙы ҡаплатыу. Әгәр аҡсаларҙың береһе генә лә орёл яғына әйләнһә, бөтә касса шундуҡ һинең кеҫәңә күсә лә ҡуя. Уйын яңынан башлана: йәнә унар тин һалаһың, йәнә бәрәһең…

Күреп торам: Вадик хәйләләшә. Ул иң һуңғы булып ташлай. Сират уның күҙ алдынан үтеп бөтә, шунлыҡтан бар уйын уның күҙ алдында, шайбаны ҡайҙа кәйҙерергә кәрәклеген бик яҡшы самалай. Аҡсаны күпселектә тәүҙә башлағандар ала, аҙаҡҡыларға бик һирәк эләгә. Вадиктың хәйләләшеүен барыһы ла күреп-белеп тора, әммә әйтергә бер кемдең дә ҡыйыулығы етмәй. Әлбиттә, ул оҫта ла уйнай. Ташлар алдынан тубыҡтарын бөгөп, саҡ ҡына эйелә төшә, күҙҙәрен ҡыҫып шайбаны сәпкә тоҫҡай һәм яй ғына һынын турайта – таш уның ҡулынан шылып сығып тоҫҡалған урынға оса. Киҫкен хәрәкәт менән маңлайына төшкән оҙон ерән сәстәрен өҫкә һелкә, «эш эшләнде» тигән ҡиәфәттә теш араһынан төкөрөп ҡуя, шунан ғына ялҡау, юрамал яй аҙымдар менән аҡса өйөмөнә йүнәлә. Аҡса бер урында өйөлөп ятһа – ул ташты киҫкен, ныҡ итеп,

ә айырым-айырым ятһа, тәңкәләр һикереп һауала күп әйләнмәһен өсөн, һаҡ, этәреп кенә тигәндәй бәрә – улар йәпле генә икенсе яғына әйләнә лә ята. Унан башҡа берәү ҙә был алымды булдыра алмай. Малайҙар бөтә көстәренә, нисек етте шулай бәрә. Һөҙөмтәлә кассаға яңынан аҡса һалыр өсөн кеҫәләренә тығыла, аҡсалары бөткәндәр тамашасы роленә күсә.

Аҡсам булһа, мин дә уйнай алыр инем, тип уйлайым. Ауылда баҡай (бабки) уйнай торғайныҡ – унда ла күҙ үткерлеге, күҙ зирәклеге кәрәк. Унан тыш, мин мәргән бәреү буйынса төрлө уйындар уйлап сығарырға әүәҫ инем: бер сама дәүмәлдәге таштарҙы йыям да, сәп ҡуйып, ун бәреүҙән ун тейҙереүгә өлгәшкәнсе серәшәм. Өҫтән дә бәрәм, яурын аша ла, аҫтан да киҙәйем. Шуға күрә минең бер ни тиклем тәжрибәм бар – әлеге уйын менән минең уйын араһында ниндәйҙер уртаҡлыҡ күрәм. Аҡса ғына юҡ.

Әсәйем, кеҫәһендә аҡса йөрөтмәһен тип, икмәк ебәрә лә инде, аҡса булһа, мин икмәкте бында ла һатып ала алыр инем. Колхозда ҡайҙан инде ул аҡса? Шулай ҙа ул миңә, һөт алып эс тип, ике тапҡыр хат араһына бишәрлектәр һалып ебәрҙе. Хәҙергесә илле тин. Күп түгел, шулай ҙа аҡса. Баҙарҙа уға ярты литрлы биш банка һөт алып була. Миңә һөттө ҡан әҙ булған өсөн эсергә ҡушалар, сөнки йыш ҡына тиктомалдан баш әйләнергә тотона.

Биш һумды өсөнсө тапҡыр алғас, мин һөткә барманым, ваҡланым да малайҙар уйнаған ергә киттем. Әйтергә лә түгел, уйын өсөн яҡшы урын һайланғайны: ҡалҡыулыҡтар менән уратылған аҡлан тирә-яҡтан бөтөнләй күренмәй. Ауылда, ололар күреп ҡалһа, бындай уйын өсөн ҡыуалар, директор, милиция менән ҡурҡыталар ине. Ә бында бер кем дә ҡамасауламай, йәшәгән урындан йыраҡ та түгел, ун минутта йүгереп килеп етеп була.

Беренсе уйнағанда туҡһан тин отторҙом, икенсеһендә – алтмыш. Аҡса йәл, әлбиттә, шулай ҙа уйнарға өйрәнә башлағанымды тойҙом: ҡулым яйлап таш шайбаға күнегә, ул кәрәкле урынға барып төшһөн өсөн ташлағанда күпме көс талап ителгәнен самалай. Кистәрен, малайҙар таралышҡас, аҡланға яңынан киләм, Вадик йәшергән шайбаны ҙур таш аҫтынан алам да, кеҫәмдән ваҡ аҡсаларымды сығарып һалып, ҡараңғы төшкәнсе ташлайым. Тиҙ арала яҡшы ғына һөҙөмтә күрһәтә башланым: ун бәреүҙән өсәүһе йәки дүртәүһе аҡсаға төшә.

Ниһайәт, отҡан көнөм дә килде.

Хәҙер мин мәктәптә дәрестәр тамамланыу менән уйнарға киләм. Малайҙар алмашына: берәүҙәр килә, икенселәр китә. Вадик ҡына бер уйынды ла ҡалдырмай. Хәйер, уйын ул килмәйенсә башланмай ҙа. Вадик артынан, уның шәүләһе кеүек, сәсе машинка менән алынған, дәү башлы, йыуан кәүҙәле Птаха ҡушаматлы малай эйәреп йөрөй. Мәктәптә мин уны быға тиклем ниңәлер бер ҙә осратҡаным булманы. Алға китеп әйтәйем, өсөнсө сиректә, башҡа төшкән ҡар кеүек, ул беҙҙең класҡа төшөп ултырасаҡ. Баҡһаң, бишенсе класта күсмәй ҡалған да ниндәйҙер мөғжизә менәндер үҙенә ғинуарға тиклем каникул яһаған икән. Птаха шулай уҡ ота. Вадик һымаҡ уҡ булмаһа ла – ота, тик әҙерәк. Сөнки Вадик уның яҡлы һәм шым ғына «күләгәһенә» ярҙам итә.

Беҙҙең кластан аҡланға тиктормаҫ, асалаҡ-йомалаҡ күҙле, дәрестә ҡул күтәрергә яратҡан Тишкин да килгеләй. Беләме, белмәйме – барыбер күтәрә ҡулын. Таҡта янына саҡырһалар – өндәшмәй.

– Ниңә ҡул күтәрҙең һуң? – тип һорайҙар Тишкиндан. Ул күҙҙәрен бер аса, бер йома...

– Белә инем, бында сыҡҡансы оноттом да ҡуйҙым.

Уның менән аралашманым. Оялыуҙан, ауыл тәрбиәһенән килгән йомоҡлоҡтан, унан да бигерәк – өйҙө үлеп һағыныуҙан ошоға тиклем малайҙарҙың береһе менән дә дуҫлаша алманым. Улар ҙа миңә тартылманы, шунлыҡтан мин яңғыҙ, сөнки өйҙә, ауылда түгелмен, ситтәмен. Ауылда иптәштәр күп.

Тишкин да миңә иғтибар итмәне. Тиҙ генә отола ла юғала, оҙаҡҡа юғала, бер көн килеп йәнә пәйҙә була.

Ә мин отам. Даими рәүештә, көн һайын ота башланым. Үҙемдең хәйлә бар: тәүге булып һуғыу өсөн шайбаны майҙансыҡ буйлап тәгәрәтергә кәрәкмәй, уйнаусылар күп саҡта был еңел эш түгел: һыҙыҡҡа яҡыныраҡ һонолған һайын, уға яңылыш баҫыу, яҙа үтеү ҡурҡынысы бар, тимәк, иң аҙаҡҡа тороп ҡалыуыңды көт тә тор. Ташты кассаны һаҡларлыҡ итеп ташларға кәрәк. Мин шулай итергә тырышам да. Әлбиттә, хәүеф бар, әммә минең тәжрибә менән был – аҡланырлыҡ эш. Мин өс, дүрт уйынды рәттән оттора алам, уның ҡарауы, бишенсеһендә, кассаны тотош отоп алып, отторған аҡсаны өсләтә ҡайтарам. Йәнә отолам, йәнә ҡайтарам. Аҡсаларға мин һирәк бәрәм, бында ла үҙемдең алым бар: Вадик алға һонолоп тәгәрәтеберәк бәрһә, мин, киреһенсә, ҡайҡайып үҙемдән этәреп ебәрәм – былай ауыр, ләкин шайба тәңкәгә һикерергә ирек

бирмәй һәм, йомшаҡ бәрелеп ҡаҡлыҡҡас, үҙенең артынан икенсе яғына әйләндереп һалып ҡуя.

Хәҙер мин аҡсалы. Шулай ҙа уйынға баш юғалтып бирелмәйем, миңә көнөнә бер һум етә. Бер һумды отам да ҡасам, баҙарға барып бер банка һөт һатып алам (минең йәмшәйгән, кәксәйгән, бысраҡ тиндәрҙе күреп әбейҙәр аптырай, мыжый, шулай ҙа һөт ҡойоп бирәләр), ҡайтып төшкөнө ашайым һәм дәрес әҙерләргә ултырам. Туйғансы ашау мөмкинлеге юҡ, исмаһам, һөт эсәм бит әле, тигән уй миңә көс бирә, аслыҡ тойғоһон баҫа. Хәҙер башым да әҙерәк әйләнгән һымаҡ.

Минең отоуҙарҙы Вадик тәүҙә тыныс ҡабул итте. Сөнки үҙе лә еңелеп ҡалмай, уның кеҫәһенән мин берәй тин ала алдыммы икән? Ҡай саҡ маҡтап та ебәрә: ҡыйыш ҡулдар, нисек ташларға кәрәклеген өйрәнегеҙ, ана. Әммә бер көндө уйындан үҙемә кәрәкле ваҡытта сыҡҡанымды һиҙҙе лә туҡтатты бит:

– Һин нимә, кассаны алдың да ҡасырғамы? Һай, ниндәй аҡыллы баш! Уйна, давай!

– Миңә дәрес әҙерләргә кәрәк, Вадик, – тим.

– Кемгә дәрес әҙерләргә кәрәк – ул бында йөрөмәй.

Уны Птаха эләктереп алды:

– Аҡсаға улай уйнамайҙар, белдеңме? Уның өсөн әҙерәк бәргесләп алырға ла була.

Бынан ары Вадик миңә шайбаны үҙенән алда тотторманы. Ул оҫта бәрҙе, миңә, ташты ҡулға алырға ла өлгөрмәй, йыш ҡына аҡса артынан кеҫәгә тығылырға тура килде. Шулай ҙа миңә ырғытыу мөмкинлеге бирелһә, шайба магнитланған кеүек аҡсалар өйөмөнә оса. Мәргәнлегемә үҙем дә аптырайым, әҙерәк хәйләләшергә, гел генә кассаға бәрергә кәрәк булмаған да бит, ә мин, киреһенсә, кассаны аяуһыҙ дөмбәҫләүемде дауам иттем. Үҙ эшендә кем дә булһа алға сыҡһа йәки уңышҡа өлгәшһә, ул кешенең иптәштәре тарафынан бер ҡасан да ғәфү ителмәҫен мин ҡайҙан беләйем? Бер кем дә яҡлау, йәлләү көтмәһен, башҡалар өсөн ул – дәғүәсе, уны иң ныҡ күрә алмағаны – уның артынан килгән кеше. Был аҡылды миңә ул көҙҙө үҙемдең елкәлә ныҡ татырға тура килде.

Мин йәнә бәрҙем дә – был юлы ла уңышлы бәрҙем – һәм кассанан аҡсаларҙы йыяйым тип ҡуҙғалғанда, Вадиктың тирәяҡҡа сәселгән тәңкәләрҙең береһенә баҫҡанын шәйләнем. Аҡсалар бөтәһе лә решка яғы менән өҫтә ята. Бындай осраҡта ташты бәргәндә, ғәҙәттә, «өйөмгә!» тип ҡысҡыралар – әгәр орёл яғы сыҡмаһа, сираттағы ташлау өсөн тәңкәләрҙе бер өйөмгә

йыялар – әммә мин, һәр ваҡыттағыса, үҙемдең уңышлы ташларыма ныҡ ышанып, ҡысҡырып торманым.

– Өйөмгә түгел! – тип иғлан итте Вадик.

Уның янына барҙым да аяғын аҡсанан күтәрергә маташтым, тик ул мине этеп, күҙ асып йомғансы эйелеп аҡсаны ерҙән алды ла, решка яғын күрһәтте. Ә мин уның орёл яғы менән ятҡанын шәйләп өлгөргәйнем – киреһенсә булһа, аяғы менән ҡаплап та маташмаҫ ине бит.

– Һин уны әйләндерҙең! – тинем. – Мин күрҙем, орёл яғы менән ята ине.

Вадик минең танауға йоҙроғон терәне.

– Ә быны күрҙеңме? Еҫкә әле, нимә еҫе сыға?

Мин ризалашырға мәжбүр булдым. Үҙеңдекен иҫбатлап маташыуҙан мәғәнә юҡ: әгәр түпәләргә тотонһалар, бер кем дә, эргәлә өйөрөлгән Тишкин да, яҡлашмаясаҡ.

Вадиктың уҫал күҙҙәре миңә тишерҙәй итеп ҡарай. Эйелеп, яҡыныраҡ аҡсаға йомшаҡ ҡына бәрҙем – теге әйләнеп ятты, унан икенсеһен... «Барыбер бөтәһен дә алам», – тип уйланым, сәмләнеп, шайбаны тағы сойорғоторға әҙерләндем, әммә өлгөрмәнем: кемдер тубығы менән артыма ныҡ итеп төрттө, алға эйелгән көйө башым менән ергә барып ҡаҙалдым. Барыһы ла шарҡылдап көлдө.

Артымда зәһәр йылмайып Птаха тора ине.

– Һин типтеңме?

– Кем әйтә мин тип? – ғәжәпләнгән кеше булды Птаха. – Төшөңдә күрҙеңме әллә?

– Бир бында! – Вадик шайбаға һоnолдо, бирмәнем. Үпкә ҡурҡыуҙы еңде, ошо минутта мине бер нәмә лә ҡурҡыта алмай ине. Ни өсөн үсләшәләр? Уларға мин ниндәй насарлыҡ эшләнем?

– Шайбаны бир! – тип талап итте Вадик.

– Аҡсаны һин әйләндерҙең! – тип ҡысҡырҙым мин уға. – Күреп торҙом. Күрҙем!

– Тағы ҡабатла әле! – Вадик миңә табан килә башланы.

– Әйләндерҙең, – тинем мин йәнә. Тауышым был юлы ул ҡәҙәре көр сыҡманы – артабан ни булырын бик яҡшы самалай инем.

Беренсе булып, йәнә арттан, Птаха һуҡты. Мин Вадик ҡаршыһына остом, ул эйелә бирҙе лә башын йөҙөмә төкөнө. Салҡан ауҙым, танауымдан ҡан китте. Көскә ҡалҡынғайным, Птаха килеп йәбеште. Уның ҡулынан ысҡынып ҡасырға

мөмкинлек бар ине әле, тик ниңәлер ул турала уйламаным да. Птаха мине йәнә Вадикка этте. Вадик – Птахаға... Ҡан аҡҡан танауҙы бер ҡул менән ҡаплаған көйө мин Птаха менән Вадик араһында алмаш-тилмәш һуғылдым, һаҡланырға мөмкинлек тә булманы. Үҙем һаман бер үк һүҙҙе ярһып ҡысҡырам да ҡысҡырам:

– Әйләндерҙең! Әйләндерҙең! Әйләндерҙең!

Улар мине сиратлап бәргесләне, тәүҙә береһе, унан икенсеһе... Өсөнсөһө, малайҙарҙың ҡайһыһы булғандыр, бәләкәйерәктәрҙән берәү, ых та ых килеп аяҡҡа типте (аяҡ һуңынан ҡара көйөп сыҡты). Нисек тә йығылмаҫҡа тырышам, «йығылһам, иң ояты шул буласаҡ», тип уйлайым, ниңәлер. Туп урынына бәргесләп йөрөтә торғас, йыҡтылар барыбер. Йыҡтылар ҙа шып туҡтанылар.

– Тере сағыңда тай бынан! – тип бойорҙо Вадик. – Тиҙ бул!

Мин ҡалҡындым, шешкән, таш кеүек ҡатҡан танауҙы тарта-тарта ҡалҡыулыҡҡа атланым.

– Берәйһенә ошаҡлаһаң – үлтерәбеҙ! – тип ҡалды артымдан Вадик.

Өндәшмәнем. Асыу, рәнйеү быуҙы, үҙемдән һүҙ һығып сығарырға хәл ҡалмағайны. Ҡалҡыулыҡҡа күтәрелгәс кенә, түҙмәнем, аҡылынан яҙған кеше һымаҡ, бар көсөмә һөрәнләнем:

– Әйләндерҙең!

Птаха арттан йүгерә башлағайны ла, ҡапыл туҡтаны – былай ҙа кәрәген алды, тип, Вадик баҫтырмаҫҡа ҡушҡандыр. Яңынан башланған уйынға бер нисә минут ҡарап торҙом, ҡалҡыулыҡтың икенсе яғына төштөм, бейек кесерткәнлек менән уратылған бәләкәй генә уйпатлыҡтағы һарғайған ҡоро үләнгә йығылып, күҙ йәштәремә тығыла-тығыла үкереп иланым.

Ул көндө донъяла минән дә бәхетһеҙерәк кеше юҡ ине.

Иртәнсәк йоҡонан уяныу менән ҡотом осоп көҙгөгә ҡараным: танау шеш, һул күҙ төбөндә күк, битемдә ҙур яра. Был йөҙ менән нисек мәктәпкә барырға һуң? Әммә барырға кәрәк, ниндәй сәбәп менән булһа ла, дәрес ҡалдырырға ярамай.

Күҙҙе ҡул менән ҡаплап шым ғына класҡа инеп ултырҙым да башымды эйҙем. Тәүге дәрес, юрамал кеүек, – француз теле. Был фәнде уҡытыусынан тыш, Лидия Михайловна – класс етәксеһе лә. Ул беҙҙең хәл-әхүәл менән күберәк ҡыҙыҡһына, унан нимәнелер йәшереүе мөмкин түгел. Класҡа керә, иҫәнләшә, беҙ

баҫабыҙ, урындарыбыҙға кире ултырғансы һәр ҡайһыбыҙҙың тигәндәй йөҙөнә иғтибар менән баға һәм, ғәҙәттә, беренсе ҡарашҡа шаярыбыраҡ әйтелһә лә, мотлаҡ үтәлергә тейешле күрһәтмәләр бирә. Йөҙөмдәге билдәләрҙе, мин күпме генә йәшерергә тырышһам да, ул, әлбиттә, шундуҡ күрҙе: мин быны класташтарымдың үҙемә боролғандарынан аңланым.

– Беҙҙең арала яралылар ҙа бар икән, – тине Лидия Михайловна, урынына ултырып журналды асҡанда.

Класс шырҡылдашты. Лидия Михайловна ҡарашын йәнә миңә күсерҙе. Уның күҙҙәре саҡ ҡына ҡылыйыраҡ, ҡайҙалыр ситкә ҡараған һымаҡ, шулай ҙа беҙ уның ҡараштарының беҙгә төбәлгәненә өйрәнгәйнек инде.

– Йә, әйт, нимә булды? – тип һораны ул.

– Йығылдым, – тип мөңгөрләнем, үҙем алдан ышандырырҙай берәй сәбәп уйлап килмәгәнемә үкендем.

– Ой, нисек йәпһеҙ йығылғанһың. Кисә йығылдыңмы әллә бөгөнмө?

– Бөгөн. Юҡ, кисә, ҡараңғы төшкәс.

– Хи, йығылған, имеш, берәү, – тип шатлығынан сәсәй-сәсәй ҡысҡырҙы Тишкин. – Етенсе кластағы Вадик тондорҙо. Улар аҡсаға уйнаны, ә был бәхәсләшә башланы, шуға эләкте. Мин күреп торҙом. Йығылдым, тигән була. Хи-хи.

Былдай хыянатты һис көтмәгәйнем. Тишкин бер нәмә лә аңламаймы, әллә юрамал ошаҡлаймы? Аҡсаға уйнаған өсөн беҙҙе һөйләшеп тә тормай мәктәптән ҡыуыуҙары ихтимал. Был бысый күҙ малай минең ҡыуылыуымды теләй, тимәк. Ҡурҡышымдан баш геүләп әйләнә башланы: бөттө, бөтәһе лә бөттө. Үәт, Тишкин, Тишкин, мәсьәләгә асыҡлыҡ индерҙе. Кем белә, әйтмәһә, үтеп тә китер ине, бәлки, «йығылғанды» бер кем дә күреп-ҡарап торманы бит.

– Һинән, Тишкин, мин бөтөнләй икенсе нәмә тураһында һорарға теләгәйнем, – тине Лидия Михайловна, Тишкиндың хәбәрен туҡтатып, бер ҙә аптырамай һәм тыныс ҡына итеп. – Һөйләй башлағанһың икән, әйҙә, таҡтаға сыҡ та яуап бирергә әҙерлән. – Лидия Михайловна бөтөнләй юғалып ҡалған, үҙен ныҡ бәхетһеҙ итеп хис иткән малайҙың таҡта янына сыҡҡанын сабыр ғына көтөп алды ла миңә әйтеп ҡуйҙы: – Дәрестән һуң ҡалырһың.

Дәрестәр бөткәс, ҡурҡыуҙан ҡалтырап, Лидия Михайловнаны мин коридорҙа көтөп торҙом. Ул уҡытыусылар бүлмәһенән сыҡты, баш ҡағып ҡына класҡа ишараланы. Өҫтәле

артына ултырҙы, мин өсөнсө рәттәге партаға урынлашырға иткәйнем дә, беренсе рәткә, үҙенең алдына, күрһәтте.

– Һин ысынлап та аҡсаға уйнайһыңмы? – тип шундуҡ башланы ул.

Ул быны ҡысҡырып тигәндәй һораны, миңә ҡалһа, был турала мәктәптә шыбырлап ҡына һөйләшергә кәрәк, шуға ла ҡурҡыуым тағы ла арта төштө. Алдашыуҙан мәғәнә юҡ – бысый күҙ Тишкин башым-тояғым менән һатты бит инде.

– Эйе, – тип мөңгөрләнем мин.

– Нисек, отаһыңмы? Әллә отолаһыңмы? Дөрөҫөн генә һөйлә.

Мин нимә тип әйтергә белмәй юғалып ҡалдым.

– Отам.

– Отҡас, яҡшы. Ә аҡсаларыңды нишләтәһең?

Тәүге көндәрҙә мин Лидия Михайловнаның тауышына өйрәнә, күнегә алмай йонсоном. Беҙҙең ауылда һүҙҙәрҙе күкрәктән, тәрәндән сығаралар, шуғалыр ҙа улар баҙыҡ, һаңғырау яңғырай, ә Лидия Михайловнаның, нисектер, сыңғырап, еңел сыға. Бына әле лә уҡытыусы яңғырауыҡлы тауыш менән һорай, шул уҡ ваҡытта миңә әллә ни иғтибар итмәй, тағы ла мөһимерәк икенсе эш менән шөғөлләнгән, икенсе уй уйлаған һымаҡ, тик һорауҙан барыбер ситкә китеп булмай.

– Йә, әйт, ул отҡан аҡсаларҙы ҡайҙа ҡуяһың? Кәнфит алаһыңмы? Әллә китапмы? Әллә йыяһыңмы? Хәҙер байтаҡ йыйылғандыр бит инде, ә?

– Юҡ, күп түгел. Мин көнөнә бер генә һум отам.

– Шунан ары уйнамайһыңмы?

– Уйнамайым.

– Ә ниңә бер генә һум? Уны нишләтәһең?

– Һөт алам.

– Һөт?

Алдымдағы сибәр, аҡыллы, кейеме менән дә, үҙенең йәшлеге менән дә күркәм уҡытыусымдан тәмле хушбуй еҫе килә, мин быны ул һулаған һауалыр тип уйлайым, етмәһә, ул ниндәйҙер арифметика йәки тарих уҡытыусыһы түгел, ә серле француз теле уҡытыусыһы. Ул телдә лә, әкиәттәге ише, ниндәйҙер аңлашылмаҫ сер бар. Һәр хәлдә, миңә шулай тойола. Уға күтәрелеп ҡарарға ла ҡурҡып ултырам, шунлыҡтан алдай ҙа алмайым. Хәйер, нишләп мин уны ояламай алдап ултырырға тейеш һуң әле?!

Ул бүтәнсә һорау бирмәне, оҙаҡ итеп һынсыл ҡарап торҙо. Мин бөтә тәнем менән уның иғтибарлы ҡарашы аҫтында ғәйе-

бемдең арта, ҙурая барғанын тоям. Эйе, уға аптырап ҡарарлыҡ нәмә бар шул: парта артында ҡобараһы осҡан, әсәй ҡарауы булмағас, бигүк таҙа булмаған, яурындары һәленеп төшкән иҫке пинжәкле, атай галифеһынан тегелгән ыштан кейгән ҡырыҫ, яшыҡ малай борғолана. Аяҡ кейемемә бигерәк тә иғтибарлап ҡарағанын элек тә тойғаным бар ине. Класта мин бер үҙем чиркала йөрөйөм шул. Тик икенсе көҙгә мин мәктәпкә уны кейеп барыуҙан ҡырҡа баш тартҡас ҡына, әсәйем беҙҙең берҙән-бер байлыҡты – теген машинаһын һатты ла миңә кирза итектәр алып бирҙе.

– Шулай ҙа аҡсаға уйнарға ярамай, – тине Лидия Михайловна уйсан ғына. – Уйнамай булдыра алаһыңмы? Әллә ныҡлап өйрәндеңме?

– Булдыра алам.

Дөрөҫөн әйткәндә, ул көндәрҙә миңә ифрат ауыр ине. Көҙ сыуаҡ торғанлыҡтан, уңыш йыйыу тиҙ тамамланды – беҙҙең колхоз игенде иртүк тапшырып бөткәнлектән, Ваня ағай районға башҡа килмәне. Әсәйемдең минең өсөн борсолоп үҙенә урын таба алмай йөрөгәнен һиҙенәм, әммә бынан миңә һис тә еңелерәк түгел. Һуңғы тапҡыр Ваня ағай килтергән картуф тиҙ бөттө, әйтерһең дә, беҙ уны малға ашаттыҡ. Ярай әле, баш етеп, һуңғы мәл мин уның бер өлөшөн ихаталағы ташландыҡ һарайға индереп йәшереп өлгөргәйнем һәм бына хәҙер шуның арҡаһында ғына иҫән йөрөйөм. Мәктәптән һуң, бур кеүек тирәяғыма ҡаранғылап, шым ғына һарайға инеп китәм дә, кеҫәгә бер нисә картуфты һалып, урамға атылам, әлеге ҡалҡыулыҡтар араһындағы соҡорораҡ ерҙә усаҡ яғам да шуларҙы өтөп ашайым. Гел генә ашағы килә, хатта төшкә лә төрлө ризыҡ керәп, ашҡаҙан тартышып йонсота.

Яңы уйынсылар табыу өмөтө менән мин яйлап күрше урамдарҙы ҡарай-тикшерергә тотондом, ташландыҡ ерҙәрҙе гиҙҙем, ҡалҡыулыҡтарға күтәрелгән малайҙарҙы күҙәттем. Бөтәһе лә бушҡа – сезон бөттө, һалҡын октябрь елдәре иҫә башланы. Беҙҙең туғайлыҡта ғына йыйылалар ине әле. Йыраҡтан уларҙы күҙәттем, ҡояш нурында шайбаның ялтлап киткәнен, Вадиктың ҡулдарын һелтәй-һелтәй бойороҡтар биргәнен, таныш һындарҙың кассаға эйелгәнен күрҙем.

Түҙмәнем, уратып-суратып йөрөй торғас, туғайлыҡҡа төшөргә мәжбүр булдым. Кәмһетелеүгә барғанымды беләм, әммә мине туҡмап ҡыуып ебәреүҙәре менән килешеп йәшәү унан бер ҙә кәм хурлыҡ түгел. Минең яңынан пәйҙә бу-

лыуымды Вадик менән Птаханың нисек ҡабул итеүе, үҙемде улар алдында нисек тота алыуым шулай уҡ ҡыҙыҡ. Асыҡмаһам, әлбиттә, аяҡ та баҫмаҫ инем. Миңә бер генә һум кәрәк, барлығы бер һум, хәҙер инде һөткә түгел – икмәккә. Икмәк табыуҙың башҡа юлын мин белмәйем.

Уйын туҡталды, бөтәһе лә бәзрәйешеп миңә баҡты. Птаха ҡолаҡсындары өҫкә күтәреп бәйләнгән бүректә, ҡыҫҡа еңле шаҡмаҡлы күлдәген салбар тышынан сығарып ебәргән, башҡа кейеме лә килешле; Вадик – заманса ҡалын матур курткала. Тәртипһеҙ өйөлөшөп фуфайкалар, пальтолар ята, шулар өҫтөндә елгә бөршәйеп биш-алты йәштәрҙәге бер малай ултыра.

Беренсе булып Птаха һүҙ ҡушты:

– Ниңә килдең? Күптән туҡмалғаның юҡмы?

– Уйнарға килдем, – тип яуапланым мин, мөмкин тиклем тынысыраҡ булырға тырышып, һәм Вадикка ҡараным.

– Кем һинең менән уйнар икән? – Птаха һүгенде. – Вадик, нишләйбеҙ, хәҙер үк туҡмайбыҙмы, әллә һуңғараҡмы?

– Птаха, ниңә бәйләнәһең әле кешегә? – тине Вадик, йөҙөн сырылдырып миңә ҡараны. – Кеше уйнарға килгән. Ул, бәлки, һинең менән минән унар һум оторға килгәндер?

– Һеҙҙең унар һум аҡсағыҙ юҡ, – тинем мин, былар алдында ҡурҡаҡ булып күренмәҫкә тырышып.

– Беҙҙә һинең төшөңә лә инмәгән аҡса бар, белгең килһә. Птаха – ҡыҙыу кеше, ул асыуланғансы һал аҡсаңды, һөйләнмә.

– Берҙе тамыҙып алайыммы әллә, Вадик?

– Кәрәкмәй. Уйнаһын әйҙә. – Вадик малайҙарға күҙ ҡыҫты. – Ул шәп уйнай, беҙ уның олтораһына ла тормайбыҙ.

Хәҙер мин аҡыллы инем инде, Вадиктың «миһырбанлығын» бик яҡшы аңлайым. Уға, күрәһең, аң-тоң белмәгән, аңра малайҙар менән уйнау күптән ялҡытҡан, шуға ла үҙенең нервыһын ҡытыҡлау, ысын уйын сәмен яңынан тойоу өсөн мине, ярайһы ғына уйнай белгән кешене, ҡабаттан ылыҡтырырға ҡарар итте. Ғәрлегенә тейеү менән, ул мине йәнә бәргесләйәсәк. Ә бәйләнергә сәбәбен табасаҡ, тапҡас инде Птахаға бер ымлауы етә.

Мин һаҡ уйнарға, кассалағы аҡсаға ымһынмаҫҡа ҡарар иттем. Яңылыштан аҡсаға тейеп ҡуймаҫ өсөн шайбаны башҡалар һымаҡ шыуҙырып ҡына ташланым, Птаха артҡа килеп баҫмағанмы тип тикшергәс кенә һуҡтым. Тәүге көндәрҙә бер һум хаҡында хыялланманым да, икмәк алырлыҡ егерме, утыҙ тин дә еткән.

Иртәме-һуңмы булырға тейешлеһе булды барыбер. Дүртенсе көнөнә бер һум оттом да, китергә йыйынғас, тағы туҡманылар. Дөрөҫ, был юлы тәүгеһе кеүек ныҡ итеп түгел, шулай ҙа бер эҙ ҡалды: ҡалын булып иренем шешеп сыҡты. Мәктәптә уны гел генә эскә тартып тешләп йөрөргә мәжбүр булдым. Әммә нисек кенә йәшерһәм дә, Лидия Михайловна күрҙе барыбер ҙә. Ул мине юрамал ғына янына саҡырҙы ла текст уҡырға ҡушты. Мин тексты һау ун ирен менән дә дөрөҫ уҡый алмаҫ инем, шеш бер ирен менән инде әйтәһе лә түгел.

– Етте, ой, етте, туҡта! – Ҡурҡҡан кеше ҡиәфәтендә ҡулдарын болғаны Лидия Михайловна. – Нимә булды һиңә? Юҡ, һинең менән айырым шөғөлләнергә тура килер, ахыры, башҡа юл юҡ.

Минең өсөн ғазаплы һәм уңайһыҙ көндәр шулай башланды. Хәҙер иртәнсәктән алып Лидия Михайловна менән яңғыҙ ҡалыу һәм телде һындыра-һындыра, яза өсөн генә уйлап табылған, әйтеү өсөн уңайһыҙ һүҙҙәрҙе уҡытыусы артынан ҡабатлау сәғәтен ҡотом осоп көтәм. Өс һуҙынҡыны бер ҡалын тауышҡа ҡушыуҙы, «о» хәрефен әйтеүҙе, мәҫәлән, beaucoup (много), нисек итеп кешенән көлөү тип ҡабул итмәйһең инде? Тауышты ниңә һыҙғырта-һыҙғырта танау тишектәре аша үткәрергә? Танау бит кешегә бөтөнләй икенсе ихтыяж өсөн бирелгән. Дөйөм ҡабул ителгән ниндәйҙер сиктәр булырға тейеш тәһә... Мин тирләйем, ҡыҙарам, тыным ҡыҫыла, ә Лидия Михайловна бер ҙә генә лә йәлләмәй, әйләнмәҫ телемдең бирә генә кәрәген, ялһыҙ-ниһеҙ. Ә ниңә бер мине генә? Мәктәптә француз телен минән күпкә хөртөрәк белгән малайҙар быуа быуырлыҡ, әммә улар иректә йөрөй, нимә теләй шуны эшләй, ә мин бөтәһе өсөн бер үҙем яфаланам.

Дәрестән ҡалып өҫтәлмә уҡыу иң ҡурҡынысы булмаған икән әле. Лидия Михайловна ҡапыл, икенсе сменалағы дәрестәргә тиклем ваҡыт әҙ ҡалғанлыҡтан, оҙаҡ ултырып булмай, тип, миңә кистәрен өйөнә килергә ҡушты. Ул мәктәпкә яҡын ғына, күпселек уҡытыусылар йәшәгән йортта тора ине. Лидия Михайловна йортоноң ҙурыраҡ икенсе яғында директор үҙе йәшәй.

Язаға барған кеүек барам уҡытыусыма. Тәбиғәтем йыуаш һәм оялсан булғас, уҡытыусының таҙа фатирында мин тәүге мәлдәрҙә тын алырға ла ҡурҡып, таш кеүек ҡата торғайным. Мотлаҡ, «сисен, бүлмәгә үт, ултыр», тип әйтергә кәрәк миңә – әйбер кеүек шыуҙырырға һәм көс менән ауыҙҙан һүҙ тартып

сығарырға тейеш Лидия Михайловна. Ғәжәп, мәктәптәгегә ҡарағанда беҙ бында әҙерәк тә шөғөлләндек, өҫтәүенә, Лидия Михайловна шул арала йорт эштәре башҡара йәки үҙе хаҡында һөйләй, минән һораша. Мәктәптә уҡығанда уға ла француз теле ауыр бирелгән икән, ә инде был телде башҡалар һымаҡ уҡ үҙләштерә алыуын үҙенә үҙе иҫбат итер өсөн генә француз теле факультетына уҡырға инеүен минең өсөн юрамал уйлап сығарғандыр тип шикләнәм.

Мөйөшкә һырлығып, «ҡасан ҡайтара инде» тип көтәм. Китап күп, тәҙрә янындағы тумбочкала ҙур проигрыватель менән ҙур радиоалғыс ултыра – ул заман өсөн һирәк әйбер. Минең өсөн инде быға тиклем бөтөнләй күрмәгән мөғжизә. Лидия Михайловна проигрывателгә пластинкалар ҡуя һәм ир тауышы миңә йәнә француз телен өйрәтә. Шулай, был телдән һис ҡотолорлоҡ түгел! Лидия Михайловна ябай ғына күлдәктә, йомшаҡ кейеҙ туфлиҙа йөрөй, миңә яҡынлап бөтөнләй ҡотто ала, тертләп, тын алырға ла ҡурҡып ҡалам. Мин уның фатирында ултырғаныма һис ышана алмайым, бында барыһы ла көтөлмәгәнсә. Ғәжәп, хатта һауа ла мин белгән, мин һулаған һауа түгел – икенсе, нисектер еңел, таныш булмаған еҫтәр менән тулы. Мин был ят тормошҡа ситтән, бөтөнләй икенсе яҡтан ҡарайым һәм оялыштан, уңайһыҙланыуҙан иҫке пинжәгем эсенә йомарланам.

Лидия Михайловнаға ул саҡта егерме биш йәштәр самаһы, һәр хәлдә, шул тирә булғандыр. Мин уның дөрөҫ йөҙ һыҙаттарын, шунлыҡтандыр ҙа бигүк йәнле, илгәҙәк булмаған йөҙөн, ҡылыйлығын йәшерер өсөн ҡыҫыбыраҡ ҡараған күҙҙәрен, тыйнаҡ йылмайыуын, ҡыҫҡа ғына ҡалдырып киҫелгән ҡара сәстәрен яҡшы хәтерләйем. Шулай ҙа уҫаллыҡ юҡ ине йөҙөндә, ә үҙенә тәғәйенләнгән, үҙенә әйтелгән, «мин бында нисек килеп юлыҡтым, мин бында ни эшләйем», тигән һымаҡ ниндәйҙер һағайыу, самими аптырау бар ине.

Дәрес бөтөп, Лидия Михайловна мине киске ашҡа саҡырғанда, нисек ҡурҡыуымды һәм юғалып ҡалыуымды иҫләһәм – бөгөн дә оят. Мең тапҡыр ас булһам да, аппетит пуля һымаҡ сығып оса торғайны бит ул өҫтәлгә әйҙәй башлаһа. Лидия Михайловна менән бер өҫтәл артына ултырырға? Юҡ! Мин иртәгәһе көнгә бөтә француз телен ятлап бөтөргә риза, тик был фатирға башҡаса килергә генә булмаһын. Икмәк киҫәге тамаҡҡа торор ине ысынлап та. Мин уҡытыусымдың, бүтәндәр һымаҡ, ябай ғына аҙыҡтар менән туҡланғанын башҡа ла

индермәй инем – ул быға тиклем бер кемгә лә оҡшамаған мөғжизә кеүек ҡабул ителә ине.

Ҡалтыранып һикереп торам да, мин туҡ, ашағым килмәй, тип мөгөрләй-мөгөрләй стена буйлап ишек яғына шыуышам. Лидия Михайловна миңә берсә аптырап, берсә үпкәләп ҡарай, тик мине теләгемдән һис туҡтатырлыҡ түгел. Ҡасам, ысын мәғәнәһендә ҡасам. Бер нисә тапҡыр ҡабатланды шулай, Лидия Михайловна тамам өмөтһөҙлөккә бирелеп, ниһайәт, мине ашарға саҡырыуҙан төңөлдө. Мин еңел тын алдым.

Бер ваҡыт аҫта, кейем элеү бүлмәһендә, миңә посылка барлығын әйттеләр. Ниндәйҙер ир кеше ҡалдырып киткән икән. Кем булһын, әлбиттә, шофёр Ваня ағай, бүтән ниндәй ир тағы? Мин торған йорт бикле, тимәк, ҡайтҡанды көтә алмаған һәм әсәйем ебәргән посылканы мәктәпкә килтереп кейем элеү бүлмәһенә ҡалдырып китергә мәжбүр булған. Дәрестәр бөтөүен саҡ көтөп алдым, ҡыңғырау шылтырау менән аҫҡа йомолдом. Вера апай, йыйыштырыусы, мөйөштә торған аҡ фанер йәшниккә күрһәтте. Бәй, нишләп йәшник икән һуң? Әсәйем, ғәҙәттә, ябай тоҡҡа һалып ебәрә торғайны, посылка, бәлки, миңә түгелдер? Улай тиһәң, йәшник ҡапҡасына минең класс, минең фамилия яҙылған. Ваня ағай, күрәһең, бында килгәс кенә яҙған. Әсәйем ниңә улай ризыҡты йәшниккә һалып ебәрергә уйланы икән? Ғәжәп.

Эсендә нимә икәнен белмәйсә мин уны алып ҡайта алмай инем – түҙемлек етмәй. Картуф түгеллеге көн кеүек асыҡ. Икмәк өсөн һауыты бәләкәй, уңайһыҙ ҙа. Унан килеп икмәкте яңы ғына ебәрҙеләр, әҙерәк бар әле. Нимә икән һуң улайһа? Баҫҡыс аҫтындағы утындар араһында балта ятҡанын хәтерләп, эҙләп таптым һәм посылканың ҡапҡасын ҡайырып астым. Баҫҡыс аҫтында ҡараңғы ине. Мин, бур һымаҡ, тирәяғыма ҡарана-ҡарана кире сыҡтым һәм йәшникте яҡындағы тәҙрә төбөнә алып барып ултырттым.

Посылка эсенә күҙ һалыу менән шаҡ ҡаттым: ҙур аҡ ҡағыҙ аҫтында макарондар ята ине. Оҙон, һарғылт көпшәләр тигеҙ, тәртипле теҙелгән, тәҙрәләрҙән төшкән яҡтылыҡ был байлыҡты шул ҡәҙәре яҡтыртып ебәрҙе – миңә ошо минутта унан да ҙурыраҡ хазина юҡ һымаҡ тойолдо. Хәҙер аңлашыла: әсәйем улар һынмаһын, онталмаһын һәм шулай бөтөн килеп етһен өсөн йәшниккә һалған. Мин ул макарондарҙың береһен һаҡ ҡына алдым да ҡулымда әйләндергеләп ҡараным, бер башынан өрҙөм, шунан, түҙмәй, шытырлатып ашарға тотон-

дом. Унан – икенсеһен, өсөнсөһөн, ә үҙем, был байлыҡ хужабикәнең кәбәркәһендәге ас сысҡандарға эләкмәһен өсөн, йәшникте ҡайҙа йәшерергә икән тип уйлайым. Юҡ, улай еңел генә хушлашырға был һиңә картуф түгел!

Шулай ашай торғас, макарон ҡапыл тамаҡҡа тығылғандай булды. Туҡта, әсәйем уны ҡайҙан тапты икән һуң? Ауылда был байлыҡтың ғүмерҙә лә булғаны юҡ, әллә күпме аҡса түләп тә уны беҙгә һатып алыу мөмкин түгел. Мин, тамам аптырауға, хатта ҡурҡыуға төшөп, төбөндә яҙыу-фәлән ятмаймы, тигән өмөт менән макарондарҙы аҡтарырға тотондом һәм эре генә бер нисә киҫәк шәкәр, ике плитка гематоген таптым. Гематоген аңыма асыҡлыҡ индерҙе: посылканы әсәйем һалмаған! Улайһа, кем? Йәшник ҡапҡасына яңынан күҙ һалдым: минең класс, минең фамилия... Туҡта...

Мин ҡапҡасы менән бергә һурылып сыҡҡан ваҡ ҡаҙаҡтарҙы кире тишектәренә тура килтереп ҡаҡтым да, уны тәҙрә төбөндә ҡалдырып, икенсе ҡатҡа күтәрелдем һәм уҡытыусылар бүлмәһенең ишеген шаҡыным. Лидия Михайловна киткәйне. Нисауа, табырбыҙ, ҡайҙа йәшәгәнен беләбеҙ, булғаныбыҙ бар. Тимәк, миндә ашарға теләмәһәң, ризыҡты өйөңә ал! Шулай килеп сыға. Улай булмай торһон әле. Унан башҡа миңә берәү ҙә посылка һалмаҫ. Ул, тик ул. Әсәйем түгел, ул булһа, берәй записка һалырға ла онотмаҫ, был байлыҡтың ҡайҙан килгәнлеген дә яҙыр ине.

Посылканы күтәреп, ҡабырғам менән ишеккә саҡ һыйып килеп ингәс, Лидия Михайловна мине, бер нәмә лә аңламайым, тигән ҡиәфәттә ҡаршы алды. Иҙән уртаһына ултыртҡан йәшниккә ғәжәпләнеп ҡараны ла:

– Был нимә, һин нимә килтерҙең? – тип һораны.

– Быны һеҙ ебәргәнһегеҙ, һеҙ! – тинем мин, ҡалтыраныулы тауышты саҡ сығарып.

– Нимә ебәргәнмен? Һин нимә тураһында һөйләйһең? Мин бер ни ҙә аңламайым.

– Мәктәпкә был посылканы һеҙ ебәргәнһегеҙ. Мин беләм, һеҙ!

Лидия Михайловнаның йөҙө ҡыҙарғанын һәм уңайһыҙланғанын шәйләнем. Уның күҙҙәренә беренсе тапҡыр тартынмай, оялмай ҡарай инем. Был минутта ул уҡытыусымы әллә өс туған апайыммы – минең өсөн барыбер. Был юлы ул һорамай, мин һорайым, французса түгел, ә русса, бында уның артикле юҡ, әйҙә яуап тотһон.

– Уны нишләп мин һалған тип уйлайһың?

– Сөнки беҙҙә макарон юҡ. Гематоген да булмай.

– Нисек, бөтөнләй юҡмы? – Ул ихлас аптыраны, шул аптырауы менән үҙен тамам һатты ла ҡуйҙы.

– Бөтөнләй юҡ. Белергә кәрәк ине.

Лидия Михайловна ҡапыл көлөп ебәрҙе, яныма килеп ҡосаҡларға иткәйне лә, мин артыма сигендем.

– Ысынлап та белергә кәрәк булған икән шул. Нисек уйлап еткермәгәнмен? – Ул бер ауыҡ һүҙһеҙ ҡалды. – Мин бит ҡала кешеһе, ауылда макарон булмағанын күҙ алдына ла килтермәйемсе, ысын әйтәм. Улайһа, нимә бар һуң?

– Борсаҡ. Шалҡан.

– Борсаҡ, шалҡан. Ә беҙҙең Кубандә алма күп. Ох, хәҙер алма күптер инде. Мин бит шунда ҡайтырмын тип уйлағайным, ниңәлер юл бында төштө лә ҡуйҙы. – Лидия Михайловна көрһөндө лә миңә ҡараны. – Ә һин асыуланма. Мин бит ярҙам йөҙөнән. Макарон менән тотолормон тип кем уйлаған. Ярар, бынан ары аҡыллыраҡ булырмын. Ә һин макарондарҙы ал...

– Алмайым! – тинем мин, уны бүлдереп.

– Нишләп алмайһың? Асыҡҡаныңды беләм бит. Мин яңғыҙ йәшәйем, нимә теләйем шуны һатып алыу мөмкинлегем бар. Хәйер, яңғыҙ башыма күп тә кәрәкмәй. Әҙ ашайым, йыуанайыуҙан ҡурҡам.

– Мин ас түгел.

– Бәхәсләшмә, зинһар, минең менән. Мин һинең хужабикәң менән һөйләштем. Һин ошо макарондарҙы алып ҡайтып, бөгөн мул ғына төшкө аш бешереп ашаһаң, насар булмаҫ ине. Һиңә үҙ ғүмеремдә бер тапҡыр ярҙам итә алмайыммы ни? Посылка менән ҡабат булашмаҫҡа вәғәҙә бирәм. Ә быны ал. Уҡыу өсөн һиңә туйғансы ашап йөрөргә кәрәк. Ҡара, бер нәмә лә аңламаған, аңларға ла теләмәгән һәм аңламаясаҡ та күпме туҡ туң баш йөрөй мәктәптә, һин булдыра алаһың, башың эшләй, уҡыуҙы һис тә ташларға ярамай.

Уҡытыусының тауышы миңә арбағыс тәьҫир итә ине; ул мине посылканы алырға өгөтләп ризалатыр тип ҡурҡтым һәм, Лидия Михайловнаның хаҡлығын, шул уҡ ваҡытта уны аңламаҫҡа ныҡышыуымды тойоп, башты һелкә-һелкә, танау аҫтынан ниҙер мөғөрләй-мөғөрләй тышҡа атылдым.

...Был ваҡиғанан һуң да беҙҙең дәрестәр туҡтаманы, мин Лидия Михайловнаға йөрөүемде дауам иттем. Хәҙер ул миңә ныҡлап тотондо. Ярҙамымды ҡабул итмәгәс, француз теленә

баҫымды көсәйтәйем, тип хәл итте, күрәһең. Оҙаҡламай һөҙөмтә лә күренә башланы: мин француз һүҙҙәрен дөрөҫ әйтәм, хәҙер улар ауыр таш рәүешендә аяҡ аҫтына төшөп туҡталмай, һикерә-сыңлай ары осорға тырыша.

– Насар түгел, – тип кәйефте күтәрә Лидия Михайловна. – Был сиректә «бишле» булыуын булмаҫ, киләһендә – мотлаҡ.

Посылканы бүтән хәтергә төшөрмәнек, шулай ҙа мин үҙемде һаҡ тоттом. Тағы әллә нимәләр уйлап сығарыр әле Лидия Михайловна, һиҙмәй ҙә ҡалырһың! Үҙемдән беләм: барып сыҡмаған әйберҙе берәй саҡ барыбер ҙә килтереп сығарырға тырышаһың, ниәттән еңел генә баш тартып булмай. Шуға ла Лидия Михайловна миңә гел генә һағайып, нимәлер көтөп, хатта минең ҡырағайлыҡтан көлөбөрәк ҡараған да һымаҡ, ә мин быны һайын асыуланам, ғәжәп, ошо асыу, рәнйеү уҡытыусым алдында үҙемде ышаныслыраҡ тоторға ярҙам итә. Мин инде хәҙер һәр аҙымды ҡурҡып баҫҡан һүҙһеҙ һәм яуапһыҙ ҡалған малай түгел, ә Лидия Михайловнаның үҙенә лә, уның фатирына ла тамам өйрәнеп, күнегеп киләм. Әлбиттә, мин һаман оялам, мөйөшкә һырығам, ултырғанда аяҡ кейемемде ултырғыс аҫтынараҡ тығам, әммә тәүге көндәрҙәге тартыныу юҡ инде. Хәҙер мин Лидия Михайловнаға үҙем дә һорау бирәм, ҡайһы саҡ хатта бәхәсләшеп тә китәм. Ул мине йәнә бер тапҡыр өҫтәл артына ашарға ултыртырға тырышып ҡараны, тик элеккесә ҡырҡа ҡаршы торҙом – миндәге тиҫкәрелек ун кешегә етерлек ине.

Өйөндә дәрес алыуҙы туҡтатҡанда ла булыр ине, сөнки минең тел байтаҡҡа йомшарҙы, еңелләште, ҡалған етешһеҙлектәрҙе мәктәптәге дәрестәр ҙә төҙәтә алыр ине әле. Алда күпме йылдар бар – бөтәһен дә бер юлы ятлап, баштан алып аҙағына тиклем белеп бөтһәм, артабан нишләрмен? Тик был турала уҡытыусыма әйтергә ҡыйманым, ә ул беҙҙең уҡыу программаһы үтеп бөтөлмәгән тип иҫәпләп, һаман да ныҡышып өйрәтеүен белә. Нисектер, үҙем дә һиҙмәҫтән, әлеге сит телгә ихтирамым артты, буш минуттарымда, уҡытыусының әйтеүен дә, мәжбүр итеүен дә көтмәй, үҙ алдыма һүҙлеккә, китаптың артҡы яғындағы текстарға күҙ һалғылай башланым. Яза ҡыуанысҡа әйләнде. Етмәһә, шул да сәмгә тейә ине: быға тиклем ауыр ине – алдағы көндәрҙә еңелләшәсәк һәм иң яҡшы уҡығандарҙан бер ҙә кәм булмаясаҡмын! Бүтән ҡамырҙанмы әллә мин? Лидия Михайловнаның өйөнә йөрөргә булмаһа, бигерәк тә яҡшы булыр ине. Үҙем, үҙем осона сығасаҡмын барыбер был ят телдең!..

Бер ваҡыт, посылка тарихынан ике аҙна самаһы үткәс, Лидия Михайловна йылмайып ҡарап ҡуйҙы бит:

– Йә, аҡсаға уйнамайһыңмы бүтән? Әллә кеше күҙенән ҡасып ҡына барыбер ҙә уйнайһығыҙмы?

– Хәҙер нисек уйнайһың? – тип яуапланым мин ҡарашым менән тәҙрә артында ятҡан ҡарға ымлап.

– Ә ул ниндәй уйын һуң?

– Ул һеҙгә нимәгә кәрәк? – Мин һағайҙым.

– Ҡыҙыҡ бит. Бала саҡта беҙ ҙә уйнай торғайныҡ. Шуға ла белгем килә: беҙ уйнаған уйынмы икән, әллә икенсеме? Әйт, әйт, ҡурҡма.

– Миңә ниңә ҡурҡырға? Ҡурҡмайым.

Вадик, Птаха һәм уйын мәлендә үҙем ҡулланған бәләкәй генә хәйләләрҙе төшөрөп ҡалдырып, бөтәһен дә һөйләп бирҙем.

– Юҡ. – Лидия Михайловна баш сайҡаны. – Беҙ уйнаған уйын түгел. Беҙ «пристенок» тигәнде уйнай торғайныҡ. Беләһеңме?

– Белмәйем.

– Улайһа, ҡара. – Ул өҫтәл артынан еңел генә сыҡты ла бәләкәй сумкаһынан ваҡ аҡсалар алып, ултырғысты стена буйынан бүлмә эсенәрәк шыуҙырҙы. – Яҡыныраҡ кил, ҡарап тор. Мин аҡсаны стенаға бәрәм. – Лидия Михайловна аҡсаны еңелсә генә стенаға бәрҙе, тәңкә ҙур түңәрәк яһап иҙәнгә килеп төштө лә һикергеләп тынып ҡалды. – Хәҙер, – уҡытыусы икенсе тәңкәне миңә тотторҙо, – һин бәрәһең. Уйындың бөтә мәғәнәһе шунда: һин үҙеңдең аҡсаны минекенә мөмкин тиклем яҡыныраҡ ятҡырырға тейешһең. Аҡсалар араһы ике бармаҡ менән ҡарышлап үлсәнә. Еткерә алһаң, һин еңеүсе, юҡ икән – отолаһың. Әйҙә, бәреп ҡара.

Мин аҡсаны стенаға кәксеттем – ул ҡабырғаһына төштө лә мөйөшкә тиклем тәгәрәп китте.

– О-о, – тип ҡулын һелтәне Лидия Михайловна. – Йыраҡ. Шуны ла бел: минең аҡса һинекенә тейһә, мин икеләтә отам. Аңлайһыңмы? Саҡ ҡына, бер ҡырыйы менән генә тейһә лә.

– Нимәһен аңламаҫҡа? Аңлайым.

– Тимәк, уйнайбыҙ!

Мин үҙ ҡолаҡтарыма үҙем ышанманым:

– Һеҙҙең менән мин нисек уйнайым?

– Ә нишләп уйнамай ти?

– Һеҙ бит – уҡытыусы.

– Булһа һуң. Уҡытыусы икенсе кешеме әллә? Уҡытыусы булып йөрөү ҙә ялҡытып китә – уҡыт та уҡыт, имеш. Үҙеңде,

бынының ярамай, тегенеһе ярамай, тип гел генә тыйып тор. – Лидия Михайловна башҡа ваҡыттарға ҡарағанда ла күҙен нығыраҡ ҡыҫты ла уйсан ғына тышҡа ҡараны. – Ҡай саҡ үҙеңдең уҡытыусы икәнеңде онотоп тороу ҙа файҙаға – тере кешеләргә һинең менән үтә күңелһеҙ булып китеүе лә ихтимал бит. Миңә ҡалһа, уҡытыусы өсөн иң мөһиме – үҙ-үҙеңә етди ҡарамау, үҙеңдең уҡыусыға бөтәһен дә өйрәтә алмауыңды аңлау. – Ул ҡапыл күңелләнеп китте. – Бала саҡта мин сая, тәүәккәл ҡыҙ инем, атай-әсәйемде байтаҡ йонсоттом. Минең хәҙер ҙә һикергем, йүгергем, ҡайҙалыр елдергем, программаға, расписаниеға инмәгән нәмәлер эшләгем килә, йыш ҡына бүлмәлә шуларҙы эшләйем дә. Кеше олоғайғас түгел, балалығын ташлағас ҡартая. Бына стена аша Василий Андреевич йәшәмәһә, мин көн һайын кинәнеп һикерәнләр инем. Ифрат етди кеше. Беҙҙең уйнағанды ул һис белергә тейеш түгел.

– Беҙ бит уйнамайбыҙ, һеҙ күрһәттегеҙ генә.

– Беҙ ысынлап түгел, юрамал ғына уйнай алабыҙ. Һин мине Василий Андреевичҡа ошаҡлап ҡуйма.

Вәт донъя! Ошонан һуң һин уны аңлап ҡара! Яңы ғына тигәндәй аҡсаға уйнағаным өсөн Лидия Михайловна мине директорға алып инә инде тип ҡурҡа инем, бөгөн килеп, ул үҙен директорға һатмауымды һорай. Мин берсә ҡурҡып, берсә аптырап, берсә шикләнеп, күҙҙәремде сылт-сылт йомғолайым.

– Йә, уйнап ҡарайбыҙмы? Оҡшамаһа, ташларбыҙ.

– Әйҙәгеҙ һуң, – тим ҡыйыуһыҙ ғына.

– Башла, улайһа.

Аҡсаларҙы усҡа йомдоҡ. Лидия Михайловнаның, ысынлап та, ҡасандыр уйнағанын самалап була ине. Ә минең өсөн бөтөнләй яңы уйын. Тәңкәне стенаға ни рәүешлерәк – ҡабырғаһы менәнме, йөҙө менәнме, ниндәй бейеклектә, ниндәй көс һалып бәрергә икәнлеген дә белмәйем. Минең ташлауҙар һуҡырҙарса, әгәр беҙ иҫәпкә йәки аҡсаға уйнаһаҡ, уйында әллә ни хәйлә кәрәк булмаһа ла, тәүге минуттарҙан уҡ ҙур иҫәп менән отолор инем. Әлбиттә, мине асылда Лидия Михайловна менән уйнауым оялдыра, уңайһыҙландыра, тартындыра ине. Төшкә лә кермәҫтәй, иң алама уйға ла инмәҫтәй ваҡиға ине был минең өсөн. Оҙаҡ сыға алмай йонсоном был тәьҫир баҫымынан, уйындың серенә төшөнә генә башлағайным, Лидия Михайловна туҡтата:

– Былай ҡыҙыҡ түгел, – тине ул, һынын турайтып, йөҙөнә төшкән сәстәрен артҡа һыпырҙы. – Уйнағас, ысынлап уйнарға кәрәк, әтеү беҙ өс йәшлек бәпестәр кеүек…

– Аҡсаға уйнаһаҡ ҡына ысын уйын була, – тинем ҡыйыуһыҙ ғына.

– Әлбиттә. Уйын аҡсаға булһа ғына ҡыҙыҡ. Беҙ бәләкәй ставкаға һөйләшһәк тә, ҡыҙыҡ буласаҡ, сәм уянасаҡ.

Мин ни тип яуапларға ла белмәйем.

– Ҡурҡаһыңмы әллә?

– Ҡурҡмайымсы, нишләп ҡурҡа ти?

Бер аҙ ваҡ аҡсам бар ине кеҫәмдә. Лидия Михайловнаға уның аҡсаһын ҡайтарып бирҙем дә үҙемдекен алдым. Теләгегеҙ булғас, әйҙәгеҙ, Лидия Михайловна, ысынлап уйнайыҡ. Үҙегеҙ башланығыҙ, һеҙҙең ниәт, минеке түгел. Вадиктың да тәүҙә миңә иғтибары ноль ине, унан иҫенә килде, кем менән уйнағанын аңланы, аңлағас, йоҙроғон эшкә ҡушты. Тегендә өйрәнгәнде, бында ла өйрәнермен. Был француз теле түгел. Мин ул француз телен дә оҙаҡламай еңәсәкмен әле.

Лидия Михайловнаның бер шартын ҡабул итергә тура килде: минекенә ҡарағанда уның ҡулы һәм бармаҡтары оҙонораҡ булғанлыҡтан, аҡсалар араһын ул баш һәм урта бармағы менән үлсәйәсәк, ә мин – баш һәм сәтәкәй бармаҡ менән. Был ғәҙел шарт ине һәм мин ризалаштым.

Бүлмә алдына, дөрөҫөрәге, дөйөм коридорға сыҡтыҡ та тигеҙ таҡта стенаға бәрә башланыҡ. Бында иркенерәк, киңерәк. Бәрҙек, тубыҡланып, бер-беребеҙҙе этә-төртә иҙән буйлап шыуыштыҡ, аҡсалар араһындағы аралыҡты үлсәп бармаҡтарҙы кирҙек, унан йәнә ҡалҡындыҡ һәм Лидия Михайловна иҫәпте иғлан итте. Уҡытыусым шаулы уйнай ине: ҡысҡырып ебәрә, сәпәкәй итә, мине сәмләндерә – ҡыҫҡаһы, үҙен уҡытыусы итеп тоймай, ябай бер ҡыҙыҡай һымаҡ ҡылана. Шулай ҙа күберәк ул ота, ә мин отолам. Аңға килеп өлгөрмәнем, һикһән тин отторҙом да, шунан уны ҙур ауырлыҡ менән утыҙ тингә ҡәҙәр кәметә алдым, тик Лидия Михайловна аҡсаһын йыраҡтан минекенә тейҙергәс, утыҙ тин илле тингә менде лә китте. Борсола башланым, сөнки беҙ уйын тамамланыу менән иҫәп-хисапты түләргә тип килешкәйнек. Эштәр әлеге ише хөрт барһа, минең аҡса етмәйәсәк – кеҫәлә барлығы бер һумдан саҡ ҡына күберәк тинлектәр ята. Тимәк, бер һумдан артыҡ отолорға ярамай. Бурысты түләмәй ҡайтһам, ояты ни тора!

Көтмәгәндә Лидия Михайловнаның мине һис тә оторға тырышмағанын шәйләнем бит. Аҡсалар араһын үлсәгәндә бармаҡтары кәкрәйә, улар бөтә оҙонлоғонда яҙылмай, дуға кеүек бөкләнә, минең бармаҡтар еткәнде, ул еткерә алмай йонсой.

Был хәл мине аптыратты, хатта намыҫҡа тейҙе, һәм мин тубыҡланған еремдән аяғүрә баҫтым.

– Юҡ, мин уйнамайым. Һеҙ нишләп миңә ярҙам итәһегеҙ? Был ғәҙел түгел.

– Мин ысынлап та бармаҡтарҙы уға еткерә алмайым, – тип аҡлана башланы ул. – Бармаҡтарым ағас һымаҡ булды ла ҡуйҙысы, һис турайтып булмай.

– Була, нишләп булмаһын?

– Яҡшы, мин тырышырмын.

Иртәгеһенә Лидия Михайловнаның мин күрмәгәндә аҡсаны үҙенең бармаҡтарына яҡыныраҡ шыуҙырғанын күргәс, тамам шаҡ ҡаттым. Үҙе миңә ҡарай, үҙе, минең дә уға ҡарағанымды күрмәмешкә һалышып, бер ни булмағандай, аҡсаны һаман үҙенә шыуҙырыуын дауам итә.

– Һеҙ нишләйһегеҙ? – тинем, асыуым килеп.

– Мин?.. Ә мин нимә эшләйем?

– Һеҙ аҡсаны шыуҙырҙығыҙ бит.

– Юҡсы. Нишләп шыуҙырайым ти? Ул шунда ята ине, мин уға ҡағылманым да, – тип яуаплай Лидия Михайловна оятһыҙ рәүештә, ҡыланышы Вадик йәки Птаханан бер ҙә кәм түгел. Бына һиңә уҡытыусы! Егерме сантиметр алыҫлыҡта ятҡан аҡсаларҙы шыуҙырғанын үҙ күҙҙәрем менән күреп торҙом, ә ул «ҡағылманым» тип ышандырырға тырыша, етмәһә, минән көлә. Әллә мине һуҡыр тип уйлай, әллә бәләкәй балаға һанай. Француз телен уҡыта икән берәү.

Ул көндө беҙ француз теле менән ун биш-егерме минут тирәһе генә шөғөлләндек, тора-бара – унан да әҙерәк. Беҙ бүтән шөғөл уйлап таптыҡ. Лидия Михайловна бер өҙөк уҡырға ҡуша, шул өҙөктө уҡығас, иҫкәрмәләр яһай, иҫкәрмәләр буйынса йәнә уҡыта, ҡәнәғәт ҡалһа, беҙ шундуҡ уйынға күсәбеҙ. Ҙур булмаған ике отолоуҙан һуң мин ота башланым. Тиҙ өйрәндем был «замеряшки» (үлсәшеү) тигән уйынға, бөтә серхәйләләренә йәһәт төшөндөм, нисегерәк һәм ҡайҙа һуғырға, үлсәүгә эләктермәҫ өсөн аҡсаны ҡайһы тирәгерәк төшөрөргә икәнен белдем. Кеҫәмә йәнә аҡса керҙе. Йәнә баҙарға йүгереп барам да һөт һатып алам – хәҙер туңдырылған көрөшкәләрҙә. Көрөшкәнең өҫтөндәге ҡаймаҡты һаҡ ҡына ҡырып алам да таралып торған туң киҫәктәрҙе ауыҙға һалам һәм тәмле шәрбәттең бөтә тәнем буйлап таралғанын тойоп, рәхәтлектән күҙҙәремде йомам. Шунан көрөшкәне әйләндерәм, бысаҡ алып шәрбәтле туң һөттө соҡойом. Ирегәнен икмәк менән эсеп ҡуям.

Йәшәргә була, оҙаҡламай, һуғыш яраларынан бөтөнләй арынһаҡ, бөтәбеҙгә лә бәхетле тормош вәғәҙә иттеләр.

Әлбиттә, Лидия Михайловнанан аҡса алыуы уңайһыҙ. Мин үҙемде һәр ваҡыт, был ғәҙел отош булды, тип тынысландырырға тырышам. Уйнайыҡ, тип бер ҡасан да үҙем һүҙ башламаным, гел генә Лидия Михайловна үҙе тәҡдим итте, ә баш тартырға, ҡаршы төшөргә минең ҡыйыулыҡ етмәне. Уҡытыусыны нисек тыңламайһың? Уйын уға ләззәт бирә тип уйлайым – ул күңелләнә, кәйефләнә, рәхәтләнеп көлә, шаяра, сәмләнә, донъяһын онотоп бар булмышы менән уйын стихияһына бирелә.

Быны ни менән бөтөрөн алдан белһәк икән...

...Тубыҡланған килеш бер-беребеҙгә ҡаршы торған көйө беҙ ул алып барған иҫәп хаҡында бәхәсләшергә тотондоҡ. Унан алда ла нимә менәндер ризалашмай, шулай уҡ һүҙгә килешкәйнек.

– Аңла, кәбәк баш, – ҡулдарын һелтәй-һелтәй миңә килә һәм үҙенекен иҫбатлай Лидия Михайловна. – Нишләп һине алдайым ти? Иҫәпте бит мин алып барам, һин түгел. Мин рәттән өс тапҡыр отолдом, ә унан алда «чика» булды.

– «Чика» иҫәпләнмәй.

– Нишләп иҫәпләнмәһен? Иҫәпләнә.

– Һеҙҙең дә «чика» булғайны бит.

Шулай бер-беребеҙҙе бүлдерә-бүлдерә ҡысҡырышҡан саҡта ҡолаҡҡа аптыраған, хатта шаҡ ҡатҡан, әммә тимер сыңы ҡушылған ҡаты тауыш ишетелде:

– Лидия Михайловна!

Беҙ ҡатып ҡалдыҡ. Ишек төбөндә Василий Андреевич тора ине.

– Лидия Михайловна, һеҙҙең менән ни булды? Бында нимә бара?

Йөҙө ҡыҙарған, сәстәре тәртипһеҙ сәселгән Лидия Михайловна яй ғына күтәрелде лә:

– Василий Андреевич, һеҙ бында керер алдынан ишек шаҡырһығыҙ тип уйлағайным, – тине.

– Мин шаҡыным. Яуап биреүсе булманы. Бында нимә эшләйһегеҙ, зинһар өсөн, аңлатығыҙ. Директор булараҡ, минең быны белергә хоҡуғым бар.

– «Пристенок» уйнайбыҙ, – тип яуапланы Лидия Михайловна тыныс ҡына.

– Һеҙ уның менән... – Василий Андреевич бармағын миңә төрттө, мин ҡурҡыуымдан Лидия Михайловнаның бүлмәһе

яғына шыуыштым, – уҡыусы менән уйнайһығыҙмы? Мин һеҙҙе дөрөҫ аңланыммы?

– Дөрөҫ.

– Ну, беләһегеҙме... – Директор тонсоҡто, тын алырға уға һауа етмәне. – Һеҙҙең был ҡылығығыҙҙы нисек атарға ла белмәйем. Был – енәйәт. Боҙоҡлоҡ. Юлдан яҙҙырыу. Һәм... һәм... Мин егерме йыл эшләйем мәктәптә, төрлөһөн күрҙем, ә бындай хәлде...

Ул ике ҡулын да өҫкә күтәрҙе.

Өс көндән Лидия Михайловна эштән китте. Китер алдынан ул мине мәктәптән ҡаршы алды ла өйгә тиклем оҙата барҙы.

– Кубангә ҡайтам, – тине ул хушлашҡанда. – Ә һин борсолмай уҡы, был иҫәр ҡылыҡ өсөн һиңә бер кем дә ҡағылмаҫ. Мин үҙем ғәйепле. Уҡы, тырышып уҡы. – Башымдан һыйпаны ла китеп барҙы.

Мин уны башҡа бер ҡасан да күрмәнем.

Ҡыш уртаһында, каникул үткәс, мәктәпкә почта аша посылка килде. Баҫҡыс аҫтындағы утындар араһында ятҡан теге балтаны алып йәшникте астым. Унда тығыҙ тигеҙ рәттәр менән һалынған макарон көпшәләрен күрҙем. Ә төптә, макарондар аҫтынан, һәр ҡайһыһы ҡалын мамыҡҡа төрөлгән өс ҡыҙыл алма таптым. Элек мин алмаларҙы тик һүрәттәрҙә генә күрә торғайным, шуға ла уларҙың тап алма икәнен таныным.

*Әмир Әминев тәржемәһе*

### Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ

**1.** Хикәйәнең ҡайһы урындары һеҙҙе айырыуса тәьҫирләндерҙе?
**2.** Хикәйәлә һүрәтләнгән осорға иғтибар итегеҙ. Ул беҙҙең замандан нимәләре менән айырыла?
**3.** Әҫәрҙәге ыңғай һәм кире геройҙарҙы барлағыҙ, һәр береһенә ҡарата үҙегеҙҙең фекерҙәрегеҙҙе әйтегеҙ.
**4.** Уҡыусы бала ни өсөн Лидия Михайловнаның бөтә ярҙамдарынан баш тарта?
**5.** Төп герой һеҙҙә ниндәй тәьҫир ҡалдырҙы, уға ниндәй баһа бирер инегеҙ?

### Хәтергә төшөрәбеҙ

Хикәйәлә төп геройҙың исеме аталмай. Һеҙ был хәлде нисек ҡабул иттегеҙ? Башҡорт әҙәбиәтендә ундай әҫәрҙәр осратҡанығыҙ бармы?

## Дини әҙәбиәт

Әҙәбиәт тураһында һөйләгәндә беҙ бөгөнгө көндә баҫылып сыҡҡан китаптарҙы ғына күҙ алдында тотабыҙ. Ә бит әҙәбиәт донъяһы иҫ киткес ҙур, уны иңләп сығыу өсөн хатта ғүмерен дә етмәҫлек. Ул шундай күп төрлө, ҡайһы саҡта уны белеү һәм аңлау мөмкин дә түгел һымаҡ.

Әҙәбиәт донъяһының нигеҙе булып халыҡтың ауыҙ-тел ижады һәм дини әҙәбиәт тора. Был әҙәбиәт Аллаһ, донъя, кешеләр тураһындағы рухи белемдәрҙе туплаған. Дини әҙәбиәт Ҡөрьәнгә таяна.

Ҡөрьәнгә тиклем изге һүҙҙәр телдән телгә күсеп йәшәгән, быуындан быуынға байытылған.

Артабан Хоҙай Тәғәләнең һүҙҙәре теүәл һәм дөрөҫөрәк һаҡланһын өсөн, янып-көйөп йәшәүсе кешеләр уларҙы китапҡа яҙған. Бына шул китап Ҡөрьән тип атала ла инде.

Аллаһҡа ышаныусылар ошо Китапта яҙылғандарҙы Аллаһ һүҙҙәре тип иҫәпләй. Шуға ла Ҡөрьән китабын төп Китап тип йөрөтәләр. Төрлө фән өлкәһендә эшләүсе белгестәр, тарихсылар, әҙәбиәтселәр, географтар, археологтар, физиктар, химиктар уны өйрәнеүҙән туҡтамайҙар һәм яңынан-яңы асыштар яһайҙар.

Хатта Аллаһҡа ышанмаусылар ҙа унан ситтә ҡала алмай. Бала саҡтан уҡ ишетеп һәм ҡулланып йөрөгән ҡанатлы һүҙҙәр һәм әйтемдәр Ҡөрьәндән килеп ингән дә инде.

Мөхәммәт, салаллаһу ғәләйһиссәләм, – тарихи шәхес, боронғо ғәрәп донъяһының атаҡлы дин һәм дәүләт эшмәкәре. Ул мосолмандарҙың изге китабы Ҡөрьәнде халыҡҡа еткергән, ислам динен нигеҙләгән пәйғәмбәр.

Мөхәммәт, салаллаһу ғәләйһиссәләм, 570 йылда Ғәрәбстандың Мәккә ҡалаһында донъяға килгән.

Мөхәммәттең, салаллаһу ғәләйһиссәләм, атаһы Ғабдулла, әсәһе Әминә – ябай ғәрәп кешеләре. Улар ҡорайыш тигән ҡәбиләнән. Ата-әсәһе иртә вафат булғас, үкһеҙ етем ҡалған Мөхәммәт, салаллаһу ғәләйһиссәләм, бабаһы Ғәбделмоталлиб тәрбиәһенә алынған.

Мөхәммәт, салаллаһу ғәләйһиссәләм, Мәккә янындағы тауҙарға сығып йөрөргә яратҡан. Ул шунда йөрөгәндә ниндәйҙер тауыштар, төрлө вәғәз һүҙҙәре ишеткән кеүек була, матур-матур төштәр күрә. Риүәйәттәрҙә һөйләнелгәнсә, Мөхәммәт, салаллаһу ғәләйһиссәләм, бер көндө тау янында ғибәҙәт ҡылған сағында уға Ябраил фәрештә килеп, уның Аллаһ тарафынан пәйғәмбәр итеп ебәрелеүен әйткән. Ябраил фәрештә, Аллаһы Тәғәлә ебәргән изге һүҙҙәр тип, уға күп вәғәздәр, хәҙистәр һөйләгән. Мөхәммәт пәйғәмбәр, салаллаһу ғәләйһиссәләм, уларҙы ятлап алып, ҡәрҙәштәре, таныштары араһында Аллаһ һүҙе итеп таратҡан, яңы дингә – ислам диненә өндәгән. Ябраил фәрештә аша күктән ингән изге һүҙҙәр, вәғәздәр, сүрәләр аҙаҡ бергә йыйылып, үҙе бер ҙур китап – изге Ҡөрьән китабы булып киткән.

Шулай итеп, Мөхәммәт пәйғәмбәр, салаллаһу ғәләйһиссәләм, Аллаһ исеменән ислам динен таратҡан. Уны ҡабул иткән тәүге кешеләрҙе сәхәбәләр тип атағандар, аҙаҡ бөтәһен дә мосолмандар, йәғни исламды ҡабул иткән кешеләр тип исемләгәндәр.

Мөхәммәт пәйғәмбәр, салаллаһу ғәләйһиссәләм, күп кенә мосолмандар менән 622 йылда Мәҙинә тигән ҡалаға күсә. Был күсеп китеү көнөн һижрәт көнө (ғәрәпсә «һижрәт» һүҙе «күсеп китеү» тигәнде аңлата) тип атайҙар. 622 йылдың 16 июле мосолман календарында һижри йылдар һанының башланыуы итеп һанала.

Мәҙинәгә күскән ислам динен ҡабул итеүселәр – мосолмандар күбәйеп, дин ҡеүәтләнеп китә. Ислам дине оҙаҡламай бөтә Ғәрәбстанға, унан күрше илдәргә, өлкәләргә – Сүриәгә, Иранға, Урта Азияға, Африка илдәренә киң тарала. Исламды ҡабул иткән илдәрҙә мәсеттәр һалына, ислам динен өйрәнеү өсөн мәҙрәсәләр асыла, уның үҙ ғалимдары, танылған дин әһелдәре барлыҡҡа килә.

Мөхәммәт пәйғәмбәр, салаллаһу ғәләйһиссәләм, 632 йылда 63-сө йәшендә вафат булған. Пәйғәмбәр үлгәс, уның тәғлимә-

тен, ислам динен Әбүбәкер, унан Ғүмәр тигән иң яҡын сәхәбәләре дауам иткән. Ислам дине аҙаҡ бөтә донъяға киң таралып, иң ҙур диндәрҙең береһенә әйләнгән.

Әйтеп кителгәнсә, Ҡөрьән китабы төп Китапҡа әйләнде.

Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең, салаллаһу ғәләйһиссәләм, Ҡөрьәнде аңлатып биргән үҙ һүҙҙәрен, дини йолалар хаҡында әйткәндәрен, тапҡыр һүҙҙәрен хәҙистәр тип атайҙар.

Хәҙистәр Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең, салаллаһу ғәләйһиссәләм, үҙ тормошонан өлгөлө ваҡиғаларҙы һөйләп биреүе, халыҡҡа иманлы, әҙәпле, тәрбиәле булырға өндәгән өгөт һүҙҙәрен тәьҫирле һәм тапҡыр әйтеүе менән матур әҙәбиәткә бик яҡын, әҙәби-эстетик ҡеүәткә эйә. Улар тыңлаусыла йәки уҡыусыла рухи тәрбиә һәм зауыҡ уята. Шуға күрә беҙҙең ата-бабаларыбыҙ «Йөҙ ҙә бер хәҙис», «Мең дә бер хәҙис», «Ҡырҡ хәҙис» кеүек китаптарҙы яратып уҡыған. Мәҙрәсәләрҙә хәҙистәр махсус дәрестәр итеп тә уҡытылған.

Хәҙистәрҙең, әлбиттә, төрлөһө бар: ҙур күләмлеләре, кесерәктәре, ҡыҫҡа, тапҡыр һүҙлеләре. Уларҙың тематикаһы ла төрлө-төрлө: дин, ғилем, белем, әҙәп-әхлаҡ, тормош-көнкүреш, фәлсәфә, яҡшылыҡ һәм яманлыҡ, кешеләрҙең холоҡ-ҡылыҡтары, выждан, намыҫ, йолалар һ. б. тураһында.

Ҡөрьәндең күләмле булыуын иҫәпкә алып, бәлки, бер юлы уҡып сығыуҙы маҡсат итеп ҡуйыу кәрәкмәйҙер. Был изге Китапты ашыҡмай ғына уҡып уйланыу, хәтер һандығына һалып ҡуйыу хәйерлерәк.

Дин ғалимдары Ҡөрьәндә әйтелгән изге һүҙҙәргә һәм пәйғәмбәрҙәргә ышанырға өндәй.

Ҡөрьән – мосолмандарҙың иң ҡәҙерле, иң изге китабы. Үҙенсәлекле фәнни-фәлсәфәүи һәм хоҡуҡи әһәмиәткә эйә булған был ҡомартҡы ғәрәптәр һәм ислам динен тотҡан башҡа халыҡтар өсөн генә түгел, бәлки бөтә донъя мәҙәниәтенә һәм мәғрифәтенә бик ҙур йоғонто яһаған, тиңдәше булмаған әҫәр. Ә инде уның шәреҡ халыҡтарының дөйөм үҫешенең тормош ҡанундарына индергән өлөшөн баһалап бөтөү мөмкин түгел.

«Ҡөрьән» һүҙенең тура мәғәнәһе – «уҡыу» йәки «көйләп уҡыу». Әммә уны күсермә мәғәнәлә «Изге Китап» тип йөрөтәләр. Китаптың башҡа исемдәре лә бар: «Ҡөрьән Кәрим», «Ҡөрьән Шәриф», «Әл-Мусхәф», «Әл-Китап», «Ҙикр» һәм башҡалар. Был китап рифмалы проза (көйлө нәҫер) рәүешендә

ижад ителгән. Ҡөрьәндә бөтәһе 114 сүрә, төрлө иҫәп буйынса, 6204-тән алып 6236-ға тиклем аят бар (аят – һөйләм була).

Ҡөрьән ғәрәп телендә яҙылған, һәм ғибәҙәт ваҡыттарында сүрәләре, аяттары шул телдә көйләп уҡыла. Уның һәр аяты – шиғыр юлы, шуға ул шиғыр кеүек яңғырай. Ҡөрьән сүрәләренең ҡайһы бер аяттарындағы мәғәнәләр халыҡ теленә, фольклорға ла инеп киткән.

Ошо дини әҙәбиәт бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтенә лә үҙенең йоғонтоһон яһамай ҡалмай, әлбиттә. Шағирҙар Ҡөрьән китабында яҙылған хәҙистәргә таянып, әйтергә теләгән һүҙҙәрҙе, теләктәрҙе шиғри юлдарға һәм сәсмә формаға һалып уҡыусыларға еткерәләр. Был йәһәттән башҡорт әҙәбиәтенең аҡһаҡалдары Ризаитдин Фәхретдиндең «Нәсихәттәр» китабын һәм Мифтахетдин Аҡмулланың «Нәсихәттәр»ен әйтергә була. Артабан ошо традицияларҙы үҙҙәренең шиғри әҫәрҙәрендә Рауил Бикбаев, Мәүлит Ямалетдинов, Гүзәл Ситдиҡовалар дауам итә. Бөгөн беҙ һеҙгә ошо яҙыусыларҙың ҡайһы бер ижад өлгөләрен тәҡдим итмәксебеҙ.

## Тәрбиәле булайыҡ

Беҙҙең халыҡта тәрбиә һәр ваҡыт беренсе урында йөрөгән. Ил инәләре булған хөрмәтле заттар үҙ балаларына, ейән-ейәнсәрҙәренә иң элек әкренләп, сабырлыҡ менән генә иман шарттары тураһында һабаҡ биргән, «бисмиллаһ» әйтмәй ауыҙға аш-һыу ҡапмаҫҡа, юл башламаҫҡа, амин тотмай табындан тороп китмәҫкә өйрәткән. Быларҙы өйрәтеүҙән бер кемдең дә бер ере кәмемәгән, кәмеһә лә, әҙәпһеҙлек кәмегән дә, тәрбиәһеҙлеккә урын ҡалмаған. Ә әҙәп – ул бәхет. Өйөндә тәрбиәле кеше урамда ла тәрбиәһеҙлеккә бармай. Балалар ҙа яман холоҡло кешеләрҙән алыҫыраҡ булырға тырыша. Сөнки яман холоҡ – ул ауырыу.

Балаларҙы ололар яңғыҙ ҡалып юҡ-бар уйлап йөрөүҙән ҡурсалаған, эшкә өйрәткән, эш булмай торған ваҡыттарҙа аҡыллы, файҙалы китаптар уҡырға дәртләндергән. Китап — ул донъяны таный, күрә, аңлай белергә өйрәтә торған дәреслек, аулаҡта – серҙәш, аптырап ҡалғанда – ярҙамсы, иптәш, күңелһеҙ ваҡыттарҙа – йыуаныс, күңелгә нур, йөҙгә яҡтылыҡ биреүсе.

«Тәрбиәнең иң оло сығанағы – Ҡөрьән», тип өйрәтә Китап, уны өйрәнергә ҡуша. «...Аҡыл хикмәтен Аллаһ теләгән кешеһенә генә бирер. Кешегә хикмәт бирелдеме, ул инде Аллаһы Тәғәләнең бөйөк игелеген алды тигән һүҙ. Сәләмәт, аҡыллы кешеләрҙән башҡалары аңлай алмаҫ», ти.

*«Әл-Бәҡара» (Һыйыр) сүрәһе, 269-сы аят*

«Әй, Мөхәммәт! – ти Аллаһ. – Һиңә индерелгән Ҡөрьән – бик файҙалы, изге Китап. Кешеләргә беҙ уны аяттар тураһында уйланып, фекер йөрөтөп, ғибрәтле нәсихәт алһындар тип индерҙек».

*«Саад» («Саад») сүрәһе, 29-сы аят*

*Рауил БИКБАЕВ*

## ХӘҘИСТӘР

Кешеләрҙең иң яҡшыһы –
Оҙон ғүмер йәшәгәне,
Оҙон ғүмере буйына
Тик яҡшы эш эшләгәне.

* * *

Ғилем – бикле хазиналыр,
Асҡысы бына ҡайҙа:
Иң дөрөҫ яуап табыуҙа
Иң ауыр һорауҙарға.

* * *

Тәрбиәле кеше беленеп торор,
Ниндәй йәшендә лә күркәм булыр.

* * *

Белем бирегеҙ, ғилем алығыҙ,
Еңеләйтегеҙ, ауыр итмәгеҙ,
Һөйөндөрөгөҙ, нәфрәт һипмәгеҙ.

* * *

Булһағыҙ ихлас, эскерһеҙ,
Тик ихласлыҡ күреһегеҙ.

* * *

Һанламайҙыр ниңә кеше
Ике байлыҡ, ике ҡотон:
Бәҫен белмәй һаулығының,
Ҡәҙерләмәй буш ваҡытын?

* * *

Әсәһенең ҡарашында
Бала һәр саҡ өмөт күрер;
Балаһына ризыҡтарын
Ауыҙынан өҙөп бирер.

* * *

Ҡуйыны тулы иман ғына,
Күңеле тулы доға ғына.
Кем бурысын әсәһенә
Түләй алған тулы ғына?
Бар хөрмәтең тиңдәш булмаҫ
Әсәнең бер тулғағына.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Хәҙистәрҙе уҡып сығығыҙ, улар һеҙҙе нимәгә өндәй?
**2.** Ошо хәҙистәрҙең иң ныҡ оҡшағандарының мәғәнәһен әйтеп бирегеҙ.

*Мәүлит ЯМАЛЕТДИНОВ*

## ӘЛ-ФАТИХА СҮРӘҺЕ

Алла исемдәре менән был ғәмәлде башлайым,
Бөйөк рәхмәт вә шәфҡәткә өмөтөмдө бағлайым.
Барса маҡтау бер Аллаға – Ул ғаләмдәр хужаһы;
Сикһеҙ рәхмәт һәм мәрхәмәт бүтән кемгә хас тағы?
Ул Ҡиәмәт көнөнөң дә берҙән-бер падишаһы.
Әй, Алла, тик Һинең алда беҙ ғибәҙәт ҡылабыҙ,

Һинең генә ярҙамыңа ялбарышып ҡалабыҙ:
Күрһәт беҙгә тура юлды, хаҡлыҡ юлына күндер,
Ниғмәттәреңә ирешкән заттар рәтенә индер,
Асыуыңа дусарҙарҙың аҙашыуынан дүндер.
Амин.

Ҡөрьәндең был беренсе фатиха сүрәһен ризалыҡ доғаһы тип йөрөтәләр. Йәғни мосолман кешеһе Алланы шулай ололап, уның ризалығын алырға, хаҡ мосолман булырға теләй.

## ӘЛ-ИХЛАС (ПАКЛАНЫУ) СҮРӘҺЕ

Алла исемдәре менән был ғәмәлде башлайым,
Бөйөк рәхмәт вә шәфҡәткә өмөтөмдө бағлайым.
Әйт: Алланың бар ғаләмдә ише юҡ,
Ул мәңгелек камил бер зат-йәше юҡ;
Уның тыумыш, тыуҙырылмыш көнө юҡ,
Йәнә Уның һис бер ерҙә тиңе юҡ».

Был сүрә, дини тәғлимәттәрҙәгесә, Алланың барлығын, берлеген һәм мәңгелеген раҫлай, бары Уға бағынырға өндәй.

## ӘЛ-КӘҮҪӘР (МУЛЛЫҠ) СҮРӘҺЕ

Әй, Мөхәммәт!
Һиңә бирҙек ҙур белем һәм пәйғәмбәрлек,
Ахирәттә кәүҫәр йылғалары бирҙек,
Уны һиңә, өммәтеңә лайыҡ күрҙек.
Раббың ризалығы өсөн ғибәҙәт ҡыл,
Етем-еҫерҙәргә арнап ҡорбандар сал!..

Был сүрәлә иһә Мөхәммәттең Алла исеменән ергә, кешеләр араһына ислам диненә өндәр һәм күндерер пәйғәмбәр – Алла илсеһе вазифаһында ебәрелеүе таныҡлана.



Шафиҡ

# ӘМИНЕВ-ТАМЪЯНИ

(1858–1936)

Сәсән Шафиҡ Әминев-Тамъяни Ырымбур губернаһы Үрге Яйыҡ өйәҙе Тамъян-Түңгәүер олоҫо (хәҙерге Әбйәлил районы) Әбделғәзе ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Уға утыҙ йәштәргә тиклем төрлө байҙарға ялланып, михнәт менән аслы-туҡлы ғүмер һөрөргә тура килгән.

Шафиҡ Әминев олоғая башлағас ҡына етеш тормошта йәшәй башлаған. Уңғанлығы, аҡыллылығы, ғәҙеллеге һәм уҡымышлылығы менән Шафиҡ халыҡ араһында абруй ҡаҙанған. Уны шул уҡымышлы, сәсән телле шағир булғаны өсөн ололап Шафиҡ мулла тип йөрөткәндәр.

## УРАЛ

Һин ирәм бағы[1], Уралым, йәнә ерҙең кендеге,
Барса башҡорт һиндә йәйләй, ерҙәре иркенлеге.
Һиндә ағас, һиндә емеш, төрлө ниғмәт[2] күбәймеш,
Һин үҙең мәғдән ояһы, ҡаҙһалар – алтын, көмөш.
Ҡыш көнөндә һин ятаһың ҡар менән пәрҙәләнеп,
Йәй көнө беҙҙе һуғарҙың һәм йәнә йылға булып.
Ағиҙел, Һаҡмар, Ҡыҙылдар – һәммәһе һинән аға.
Һин тараттың тәмле һыуҙы ошбу фани донъяға.
Киң Уралым, һыуҡайҙарың, һыуһап эсһәң, бал кеүек,

---

[1] *Ирәм бағы* – ожмахҡа тиң баҡса.
[2] *Ниғмәт* – байлыҡ, муллыҡ.

Әтлектәрең, һарыналарың, ашаһаң, ҡаҙы-ял кеүек.
Төрлө-төрлө сәскә була һыуҙарыңдың буйҙары,
Шул ваҡыт беҙгә кәрәкмәй сауҙагәр хушбуйҙары.
Һәммә мәхлүк, һәммә хайуан һиндә ашап, һиндә эсә,
Ниғмәтең бөтмәç-төкәнмәç, һатмаһалар мәңгесә.
Яҙғы арыҡ аттарының һәммәһе була һимеҙ.
Байҙары аҡ тирмә ҡора, эстәре тулы ҡымыҙ.
Хоҙайымдың беҙгә биргән сәсмәй үçкән баҡсаһы,
Бәлки, барҙыр уйлағандар: ошо Уралды һатһасы!
Йәй көнөндә һин Уралда мал һимертеп яталар,
Үҙ әсәһен һатҡан булырҙар, бәлки, һине һатһалар.
Һин хазина, һин төкәнмәç, һин һауын һыуалмаған,
Илебеҙҙә юҡтыр кешеләр һинән файҙа алмаған.
Күп йөрөнөм һин Уралды арлы-бирле артылып,
Инде еттем ошбу йәшкә, сәс ағартып, ҡарт булып.
Күп йөрөнөм һин Уралды арлы-бирле буйлатып,
Бәғзе йәштәр мәжлесендә һәм ҡурайҙар уйнатып.
Шул ҡурайҙың эстәрендә көй сыға, бик зарлылар,
Ергә байҙар, малға байҙар, бер ғилемгә ярлылар.
Көҙ көнөндә бәғзе байҙар һары май ботлап һата,
Әммә юҡ нәшер, мәғариф, һәммәһе йоҡлап ята.
Мәртәбә алмай, ерҙе алған бик боронғо ҡарттарым,
Тиҙ онотмағыҙ уларҙы, барса башҡорт заттарым.
Үтте улар йәше-ҡарты, ҡалды ҡәбер таштары,
Һис күңелдән китмәһә ине ҡылған изге эштәре.

### Фонохрестоматия

Актёр башкарыуында тыңлағыҙ.

### Тасуири укырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шиғырҙа Урал тәбиғәте, үçемлектәр, хайуандар нисек һүрәтләнә? Шул урындарҙы табып уҡығыҙ.
**2.** Шағир башҡорт халҡының тормош-көнкүрешен нисек һүрәтләй?

### Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ

Шафиҡ Әминев-Тамъяни ер һатыуға ниндәй ҡараштa? Текстан табып уҡығыҙ һәм фекерегеҙҙе әйтегеҙ.

## БАШҠОРТ БАБАЛАРЫНЫҢ ТАРИХЫ

Яҙамын башҡорттарҙың бабаларын,
Аҡ тирмә, ҡымыҙ тулған һабаларын.
Ишеткән-күргәнемде мин яҙайым,
Самалар йәштәр уҡып самаларын.
Аҡ йөҙлө күркәм булған яҙ биле,
Донъя тәртип көтмәк өсөн тәжрибәле.
Ишеткән-күргәнемде мин яҙайым,
Ҡалғанын һуңғы йәштәр яҙыр әле.
Бабалар эре булған, оҙаҡ йәшәп,
Ҡарттары һикһән йәштә ҡурмас ашап.
Шул батыр бабаларҙан тыуған булһа,
Балаһы насар булһын кемгә оҡшап?
Уралда иркен йөрөп йәйләгәндәр,
Аҡ тирмә ҡороп бейә бәйләгәндәр,
Саҡырған берен-бере йыйын яһап,
«Ашҡаҙар», «Тәфтиләү»ҙе көйләгәндәр.
Уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс булған билдәрендә,
Ҡарсыға, шоңҡар булған ҡулдарында.
Ҡай ваҡыт өйрәк, ҡаҙын типтергәндәр
Игенлек ҡашындағы күлдәрендә.
Үҙҙәре йәйелгәндәр күп ырыуға,
Мал көтөп, иген сәсеп ултырыуға.
Бер арала дошман берлә һуғыш булһа,
Йыйылған иттифаҡ[1] бер ҡороуға.
Ырымбур, Өфө өйәҙе, Златаус,
Ер сиге башҡорттарҙың булған алыҫ.
Ҡан түгеп, ер өсөн һуғышҡандар,
Шәп булған, ғәйрәт берлә[2] һиммәт, намыҫ.
Силәбе, Бөрө өйәҙе, Һамар яғы,
Орск, Яйыҡ буйы һәм арьяғы –
Һәммәһе башҡорт бабай милке булған,
Бабайҙар борон йәйелеп йөрөгән сағы.
Ағиҙел, Һаҡмар, Ҡыҙыл һәм Таналыҡ
Йәйләгән ҙур һыуҙарҙа барса халыҡ.
Ер өсөн ҡан түгеп, һуғыш яһап,

[1] *Иттифаҡ* – берлек.
[2] *Берлә* – менән.

Алғандар үҙҙәренә аҫабалыҡ.
Аҙығы ҡымыҙ булған, ҡорот, талҡан,
Йәйәһе, уғы булған, ҡороп атҡан.
Арҙаҡ батырҙар бик күп булған,
Бер кеше йөҙ кешегә ҡаршы сапҡан.
Ватанын, йөрөгән ерен бик һөйгәндәр,
Һуғыштан ҡасҡандарға ныҡ көйгәндәр,
Донъяла хурлыҡ менән йәшәгәнсе,
Намыҫ берлә үлгәнде хуп тигәндәр.
Боронғолар ҡаптырғыға көмөш сапҡан,
Дошман килһә, уғы берлә йөрөп ятҡан.
Аран[1] мәргәндәре бик күп булған,
Көмөш балдаҡ күҙендин үтә атҡан.
Бер ирҙең илле булған уҡ-һаҙағы,
Һаҡлаған китап кеүек муҡсалағы.
Һис бер ир илле яуҙан ҡурҡмағандыр
Билендә уҡ-һаҙағы булған сағы.
Ҡормалары, уғы булған заманына,
Дошманының ҡаршы барған яманына,
Аҙығы бөтөп, нагяһ[2] асыҡһалар,
Күлдән атып алған ҡаҙ ҙа һуна.
Һәр кеше малик[3] булған уҡ-йәйәгә.
Бирмәгәндәр яңғыҙ уҡты бер бейәгә.
Бабайҙар уҡ атыуҙы тәртип тиеп,
Өйрәткәндәр уҡ атырға тәрбиәгә.

## Һорауҙар һәм эштәр

Шафиҡ Әминев-Тамъяни шиғырҙары менән Уралға арналған ҡобайырҙар йөкмәткеһендә ниндәй уртаҡлыҡтар таба алаһығыҙ?

## Телмәрегеҙҙе байытығыҙ

«Иттифаҡ» һүҙенең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Ошо һүҙҙе «берлек», «ойошма» мәғәнәһендә ҡулланырға өйрәнегеҙ.

## Хәтергә төшөрәбеҙ

Шиғырҙың төҙөлөшөнә, үлсәменә иғтибар итегеҙ. Ҡобайырҙарҙан ул нимәһе менән айырыла?

---

[1] *Аран* – «ҙур» мәғәнәһендә.
[2] *Нагяһ* – ҡапыл.
[3] *Малик* – эйә, хужа.



# Ғәли
# ИБРАҺИМОВ
## (1919–1989)

Ғәли Ғизетдин улы Ибраһимов Стәрлетамаҡ ҡалаһында тыуған. Ишембай ҡалаһында урта мәктәпте тамамлай. Алыҫ Көнсығышта Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итә, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. Башҡорт дәүләт педагогия институтында (хәҙерге Башҡорт дәүләт университеты) белем ала. «Совет Башҡортостаны» гәзитендә, «Ағиҙел» журналында эшләй.

Ун алты йәшендә тәүге шиғырҙарын баҫтыра. Аҙаҡ проза өлкәһендә ижад итә. Уның «Дуҫтар сафында», «Йәшен ташы» повестары, «Бер полк кешеләре», «Умырзая», «Ай битен йыуғанда» романдары китап уҡыусыларға киң билдәле. Яҙыусының иң күренекле әҫәре – өс китаптан торған «Кинйә» романы. Ул 1773–1775 йылдарҙағы дәһшәтле крәҫтиәндәр хәрәкәте юлбашсыһы Емельян Пугачёвтың тоғро көрәштәше Кинйә Арыҫлановҡа арналған. Трилогияның өсөнсө китабы автор донъя ҡуйғандан һуң баҫылып сыҡты.

Ғәли Ибраһимов – Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Бөйөк Ватан һуғышындағы батырлыҡтары өсөн ордендар һәм миҙалдар менән бүләкләнгән.

Уҡыу ҡулланмаһында «Кинйә» романының беренсе китабынан өҙөктәр бирелә.

## КИНЙӘ

*(Романдан өҙөк)*

### 1

Яңыраҡ ҡына һауа тып-тын ине. Көтмәгәндә, яҙғы көндөң йәмен боҙоп, ҡаты ел күтәрелде. Бөтә донъяның аҫтын-өҫкә килтерергә сыҡҡан төҫлө, ул тәүге уҫал тыны менән шәрә ағастарҙың ботаҡтарын ергә эйҙе, һыу өҫтөндә эре зымбырҙар йүгертеп, ағып килгән боҙҙарҙы арғы яҡҡа этеп алып китте.

Ағиҙелдә боҙ китеүен ҡарарға тип Ҡаран буйлап барған шәкерттәр, камзул иҙеүҙәре аша ҡуйындарына бәреп ингән һалҡын елдән ҡалтыранып, уны-быны абайламайынса, йылға өҫтөнә күҙ ташланылар. Ғәрәсәттең башы шунда, тип уйлағандарҙыр. Яҙғы һыу еле һалҡын өрә, ҡыш буйына йыйылған селлә сасҡауы боҙҙар киткәндә урғылып өҫкә сыға, тиҙәр өлкәндәр. Ләкин был ҡыш зәхмәте түгел, ауылдың үрге осонда өйрөлгән ҡойон шауҡымы ине.

Ел-дауыл бөтә сүп-сарҙы, кибеп өлгөргән ерҙәге саңды, былтырғы ҡоро япраҡтарҙы һауаға күтәрҙе лә уны дейеү пәрейҙәренең орсоғо һымаҡ өйрөлттө. Пәрей орсоғомо ул, шайтан бағанаһымы – нимә генә булһа ла, ойоҡһота һуғыр тип, шәкерттәрҙең күбеһен ҡурҡындырҙы.

Ни бары ун дүртенсе-ун бишенсе яҙҙарын ғына ҡаршылаған был үҫмерҙәр ундай ҡот осҡос хәлдәрҙе үҙ күҙҙәре менән күрмәһәләр ҙә, әкиәттәрҙә бик күп ишеткәндәр. Ҡайһы сағында ул бик ныҡ көс туплай ҙа юлында осраған бөтә нәмәне вата-ҡыйрата, өйҙәрҙе-ҡураларҙы емерә, үҙ ҡосағына кешеләрҙе күтәреп алып, әллә ҡайҙарға илтеп ташлай, хатта яһил аждаһаларҙы ла ҡармап, Ҡаф тауҙары аръяғына быраҡтыра, тиҙәр. Әле улар ҡойондан бигерәк ана шуларҙы хәтерләүҙән ҡурҡып, араларында үҙенең теремек һәм осҡор булыуы, ҡурҡыу белмәүе менән танылған көләс йөҙлө, башҡаларға ҡарағанда мыҡтыраҡ кәүҙәле, өҫтөнә йылҡылдап торған яңы кәзәкей, ҡама ҡырпыулы хәтфә таҡыя кейгән егеткә яҡыныраҡ һыйындылар.

– Әй, Кинйә... беҙгә килмәҫме икән ул? – тип һораны уның янындағы берәүһе, һаман да шул яҡтан күҙен алмайынса.

Ә ҡойон, Мәләүез йылғаһының үренә табан өйөрөлөп, алыҫлашҡандан-алыҫлаша ине. Уны оҙатҡан төҫлө, тыныс ҡына ҡарап торған Кинйә көлөп ҡуйҙы.

– Ҡурҡма, Ҡасҡын. Ул, ана, күрмәйһеңме ни, Сәйет ауылына ҡарай китте. Дауыл артынса ямғыр килер, әйҙәгеҙ, ҡайта һалайыҡ.

Шул саҡ ауылдың түбән осонда икенсе ҡойон күтәрелде.

Уңда ла, һулда ла ҡойон. Береһе – Һуҡайлы яғына, икенсеһе Мәкәтаулы, Тирәкле буйҙарына китеп таралды. Икеһенең дә бер тирәлә ҡубыуы бик сәйер ҙә, шомло ла ине. Быны йәштәр үҙ аҡылдарынан сығып та, өлкәндәр һөйләүе буйынса ла, йылдар имен булмаҫ, тағы яу ҡубыр, тип яманға юранылар. Яу уларҙың да күңелдәрен борсой. Уның хаҡындағы һүҙ халыҡ теленән төшмәй, ҡасан ниндәй яуҙар булған, унда кемдәр ҡатнашҡан, йорт-илгә ни саҡлы бәлә-ҡаза килгән – һәр кемдең һөйләй торғаны бар. Яу сапҡанда яугир булһалар ҙа, һуңынан бик ныҡ миктәгәнлектән, екһенеп бөткәндәр, күрәһең. Яңыһы ҡуба күрмәһен тип, аһ оралар. Һуңғы ваҡыттарҙа башҡорт саруаһы[1] айырыуса ауыр борсолоуға төштө. Хафаланалар, ҡурҡыналар. Ҡуян йылы[2] булғанға ғына түгел, әлбиттә. Береһенән-береһе шомлораҡ хәбәрҙәр йөрөп торғанға хәүефләнәләр.

Килмәк мәҙрәсәһенә лә бик ныҡ ҡағылғайны был шауҡым. Уҡыуҙарҙың рәте китте. Дәрес булғанда була, булмағанда – юҡ. Шәкерттәр, борһаланып, ауылдарына тая башланы. Үҙ тырышлыҡтары менән генә уҡып маташҡандарҙың әле ташҡын ҡарап ҡайтып килеүселәре лә эшһеҙлектән йөҙәп сығып киткәйне.

Ауылға етеп, мәҙрәсә ихатаһына яҡынлағанда:

– Беҙҙең абыз бөгөн дә күренмәй, берәй яҡҡа китеп барҙымы? – тип һоранылар тағы Кинйәгә теклэп.

– Эйе, төнәген...

Килмәк абыз Нурыш башҡа ваҡыттарҙа ла мәҙрәсәгә бик һирәк керә торғайны. Абыз – уҡымышлы кеше, үҙендәге ғилемен башҡаларға тарата. Мәҙрәсә һалдырып, уҡытыу асҡанға Килмәкте лә остаз тип йөрөтәләр.

...Килмәк абыз был һүҙҙәрен ауылдарға, йәйләүҙәргә барып һөйләй ине. Уның яуға сығырға өндәй башлағанына байтаҡ

---

[1] *Саруа* – халыҡ массаһы.

[2] Көнсығыш төрки халыҡтарында хайуандар исеменә ҡоролған 12 йыллыҡ мөсәлдең бер йылы. Бында 1735 йыл тураһында һүҙ бара.

ваҡыт үтте. Ҡарҙар иреп, һыуҙар һыуға ҡушылды, йырғанаҡтар ярылды, Ағиҙелдә боҙ китте. Халыҡ хәҙер, иләүенән ҡуҙғытылған ҡырмыҫҡа һымаҡ, мәж килә. Ауылдарҙағы тимерлектәр йәнләнде. Яраулы аттарҙы дағалаталар, һөңгө сүкейҙәр, уҡ башаҡтары яһайҙар. Хәллерәк кешеләр малдарын тау-урман араларына күсерә.

Бер көндө Килмәк абыз ебәргән сапҡын килде. Бик ашығып, ярһып елгән, күрәһең, – атының ауыҙынан шайыҡтары ағып тора. Уның һөйләүенә ҡарағанда, Кириллов Ергән ялаһын, Үҙәк төбәкте үткән икән. Һалдаттары, драгундары күп, ти. Алдында – сиреү, артында – сиреү. Янында анау наибы[1] Тәфтиләү түрә, сотский Надир Үрәзмәт бар, ти. Галаунай йортауай Ҡыҙрас та шунда, имеш...

Бөтәһен дә борсоу алды. Мәкәтаулы һыуының был яғындағы һырттан бына-быйна яу килеп сығыр кеүек. Ысынлап та, шулай бик күпме икән ни улар? Ниндәй икән һалдаттары, драгундар тигәне?.. Ә теге һары Санай тип ләҡәп алып өлгөргән Кириллов үҙе һуң ҡалайыраҡ әҙәм? Әллә нисек бик шомло. Килерҙәр ҙә бөтә ауылдың аҫтын-өҫкә күтәрерҙәр, ҡырырҙар, киҫерҙәр... Әллә...

Оҙаҡламай, ҡояш төшлөктән ауышҡас, арҡа өҫтөндә болот булып саң күтәрелде. Унда күренгәндәр араһында атлылар ҙа, йәйәүлеләр ҙә бар. Һыбайлылар артынан бер-бер артлы ылауҙар килә. Ай, күптәр үҙҙәре! Яу, ҙур яу! Уларҙы күреп, малайҙарҙың йөрәктәре дарҫлап типте. Яҡынайғандан-яҡынаялар. Хәҙер инде бөтәһен айырым-асыҡ шәйләп була. Драгундарҙың өҫтөндә ҡыҙыл яғалы мундир. Сәстәрен үрмәсләп, баштарына өс мөйөшлө эшләпә кейгәндәр.

Былары, шәкерттәр уйлағанса уҡ, әллә ни күп түгел ине әле. Ауылға еттеләр ҙә, туҡталып тормайынса, үтеп киттеләр. Улар күҙҙән яҙғас, боҫоп ятҡан урындарынан ҡуҙғалыша башлағанда, һыртлауҙа яңы һыбайлылар күренде. Тағы япраҡтар ышығына йәшеренделәр. Бөтәһе шым булды.

Юҡҡа ғына иркенләгәйне был драгундар. Тирә-яҡ тыныс түгел. Бер саҡ Кинйәләрҙең эргәһенән генә ярау аттарға атланған яугир башҡорттар үтеп китте. Һәр ҡайһыһының ҡалъяндарында ян, һаҙаҡтары тулы уҡ, эйәр ҡашына һөңгө беркетелгән.

---

[1] *Наиб* – ярҙамсы.

Был шәйләктәр китеп күп тә үтмәне, ике яҡтағы ҡулҡынан ҡыйҡыулап, дәррәү оран һалып, сапҡын отрядтар килеп сыҡты. Улар шунда уҡ драгундар лагерын ҡурғап алды. Йоҡларға ятҡан һалдаттарҙы уятып, аяҡҡа баҫтырыр өсөн барабансы дөңгөр ҡаҡты. Ни бары бер-ике тапҡыр ғына һуҙып һорнай уйнаны. Ҡысҡырыш, шау-шыу күтәрелде. Аттар кешнәне. Ағас баштарын шаңғыратып, мылтыҡтар атылды.

...Драгун роталары ла, башҡорт яусылары ла бик ныҡ ҡырылды. Ябауыл[1] атлылары, яу яулашҡан саҡтағыса, берберећенә булышып, драгундарҙан ҡалған мылтыҡтарҙы, эйәрөпсөндәрҙе йәһәт-йәһәт кенә йыйҙылар. Хужаһыҙ ҡалған аттарҙы тотоп, төҙөк арбаларға ектеләр, шуларға улъяларын[2] тейәнеләр. Һәм шунда уҡ был тапам ерҙе ташлап, һырт биреп киттеләр.

Атаһы саҡыртҡан бер хәлфәнән үҙ ауылдарында ибтидаи[3] синыфтарға тиңләшерлек һабаҡты алғас та килгәйне бында Кинйә. Шунан бирле биш йыл уҡыны. Ошонда ни саҡлы шәриҡтәштәре менән осрашты, үҙенә яҡын дуҫтар тапты. Ошонда тыңлаған дәрестәрҙә күпме матур һүҙҙәр ишетте. Хәҙер бына таралырға мәжбүрҙәр. Ә яңынан йыйылып, тағы бергә һабаҡ тыңлап, үҙ-ара һүҙ көрәштереп ултыра алырҙармы? Әйтеүе ҡыйын ине.

Малайҙар, күңелдәренә ҡайғы тейәп, ҡайтыр юлға сыҡтылар.

Кинйәнең атаһы Арыҫлан, йорт-илдәге хәлдәрҙең боларып китәсәген һиҙгәс тә, бик ныҡ борсолдо. Борсолмаҫлыҡ түгел ине. Халыҡтың хәле йылдан-йыл ауырлаша, ил-көн ҡыҫылғандан-ҡыҫыла. Батша чиновниктарының үҙ белдектәренсә сығарған әмерҙәре нигеҙендә төрлө юлдар менән – йә көс ҡулланып, йә алдап-йолдап, бик күп ерҙәр баяр балаларына, дворяндарға бирелде; ошо арҡала йәйләүлектәр, һунар биләмәләре, солоҡлоҡтар ҡыҫылды; әлегәсә ишетелмәгән әллә ниндәй төрлө һалымдар һалынды. Быға ҡаршы ризаһыҙлыҡ күрһәтелһә, штраф түләтелә, ҡарышыусылар ҡаты язаға тарттырыла. Шул рәүешсә ғүмерлек һалдатҡа, матросҡа алыныусылар ҙа, караптар төҙөү өсөн урман ҡырҡырға оҙатылыусылар, әллә ҡайҙа ятҡан губерналарҙағы алпауыттарға

[1] *Ябауыл* – ябырылыусы, һөжүм итеүсе төркөм.
[2] *Улъя* – трофей.
[3] *Ибтидаи* – башланғыс.

ҡоллоҡҡа һатып ебәрелеүселәр ҙә күп. Бер төрлө ирек ҡалманы. Ил хәжәте хаҡында бергәләп һөйләшергә йыйындар тыйылған. Уларҙың, борон-борондан килгәненсә, Ғази мәсетендә, уның эргәһендәге Бәрһеүән туғайында уҙғарыла торғандарына ла рөхсәт юҡ.

Үҙ ерҙәрендәге быndай ауыр хәлдәргә нисек тә түҙеп йәшәһә лә, башҡорт ялпыһын тирә-яҡтағы, Рәсәйҙең эске губерналарындағы крәҫтиәндәрҙең, Волга буйындағы халыҡтарҙың крепостной ҡоллоҡҡа төшөп бөтөүҙәре айырыуса ныҡ һағайта башланы. Был ваҡыттарҙа шул яҡтарҙан ҡасып йәки төркөм-төркөм күсенеп килеүселәр күбәйгәйне. Уларға ҡарап, аһ-зарҙарын ишетеп, башҡорттар үҙҙәренә лә шундай уҡ ҡоллоҡтоң яман тулҡындары яҡынайғандан-яҡынайыуын күрҙеләр, алпауыттар табаны аҫтында ҡаласаҡтарын тойҙолар. Өҫкә яңы аһ-зарҙар, яңы бәлә-ҡазалар ябырыла төҫлө. Шуның өсөн дә башҡорттар ҡолаҡты сос тоторға, Рәсәйҙәге хәлдәр менән хәбәрҙар булырға тырыштылар, һәр ерҙә уларҙың үҙ ҡолаҡтары, үҙ күҙҙәре бар.

Бына Кириллов килеп тә етте.

Күптәрҙең аңлатыуынса, был «Известная экспедиция» башҡорт халҡына яңы ауырлыҡтар, яңы талауҙар алып килә һымаҡ ине. Янындағы шул саҡлы ҙур сиреү тиктәҫкә генәме ни, тиҙәр. Уның Ур тамағына ҡала ҡорорға самалауын да беләләр, ләкин быныҫ Рәсәй сиктәрен нығытыу икәнен иҫәпләп тормайынса, беҙҙе бер ҡайҙа йөрөмәҫлек итеп, шунда бикләп ҡуйыр, тамам ауыҙлыҡлап алынырбыҙ, тип ҡурҡалар.

Бына шунан шикләнгән аҡһаҡалдар, Кириллов Өфөлә ятҡан сағында уҡ әле, йыйылып, уға хат яҙҙылар. Үҙе менән һөйләшеп аңлашыу өсөн йөрөкшәләр[1] ебәрелде. Ләкин батша һәм Сенат тарафынан ҙур вәкилиәтлек алған Иван Кириллов, үҙен үҙе бик юғары ҡуйып, Рәсәй мәнфәғәте өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булған был мөһим эште башҡарыуҙа халыҡ менән әҙәм рәтле мөғәмәлә итеүҙе кәрәкһенмәйенсә, илселәрҙең һүҙен йүнләп тыңламаны, уларға үҙ маҡсатын тейешенсә аңлатманы. Улар хурланып, ҡурҡытып ҡайтарылғас, илдәге хәл айырата ҡырҡыу төҫ алды: көн үҙәгенә йә ил, йә яу тигән мәсьәлә килеп баҫты.

---

[1] *Йөрөкшә* – илсе, вәкил.

* * *

Ашап-эсеп, бер аҙ баш-күҙ алғас, ауыл уртаһын күрһәтәйем тип, Кинйә үҙенең дуҫын Наҙы буйына алып сыҡты. Үргәрәк барғас, Бүре ҡашлауына артылдылар. Унан бөтә әйләнә-тирә: үҙҙәренең Бөгәл, Төсөркәй туғайҙарындағы йәйләүҙәре, Тора буйы, ҡаршы яҡтағы Нәтәҙе тауҙары ус төбөндәгеләй күренә ине. Бөтәһе һоҡланғыс. Ошонда ул үҙенең тәүге аҙымдарын атланы. Сиҙәмендә аунап, болононда еләк йыйҙы. Тора йылғаһына бәрҙе ҡармаҡларға төшөп, Бирек малайҙары менән һуғышып ҡайтҡан саҡтары, ҡуян, төлкө ауларға тип Нөгөш яғына барғанда тамъян мәсәүеттәре[1] менән алышҡаны, Нәтәҙе тауына артылғаны булды.

Ул ваҡытта сәп ҡуйып, уҡ атышыумы, ат яҫҡыштырыумы, елдереп барышлай ерҙә ятҡан таяҡты эйелеп алыумы – һәр уйын, донъяны онотторооп, мауыҡтыра торғайны. Ерҙәре атҡа атланып елдереп тә, йәйәүләп йөрөп тә туя алмаҫлыҡ. Тик бына әле генә Кинйә менән Әлибайҙың күңелен тауҙар ҙа, урман да тартманы. Танһыҡтары ҡанып, оҙаҡламай әйләнеп ҡайттылар.

Уларҙың кәйефе юҡлығы һиҙелеп тора ине.

– Һеҙ ни эшләп үҙ күңелегеҙгә үҙегеҙ толҡа таба алмайһығыҙ? – тип борсолдо улар хаҡында Арыҫлан.

– Ялан ҡайғыһы түгел шул.

Илдәге хәл-ваҡиға хаҡында, Кирилловтың экспедицияһы, яу барышы тураһында һөйләшеп алып киттеләр. Һүҙ ҡуйырған саҡтарҙа Арыҫлан уларға бала ғына итеп ҡараманы. Хәҙер үҫкәндәр, байтаҡ ҡына зиһен йыйғандар. Бигерәк тә Әлибай өлкәндәр янында үҙен иркен тоторға күнеккән икән. «Әйҙә, өйрәнә торһондар», – тип, Арыҫлан быға үҙе үк юл ҡуйып торҙо.

Һүҙ араһында Әлибай:

– Был Кириллов һанаттан илде боларттырырға ярамай, унан ҡәлғә лә, ҡала ла һалдыртмаҫҡа кәрәк, – тип әйтергә баҙнат итте.

Арыҫлан батыр өндәшмәй генә уның ҡыҫыҡ күҙҙәренә, һыҙылып сығып килгән мыйығына ҡарап торҙо.

– Ил булғас, ҡалаһы ла, ҡәлғәләре лә кәрәк, мырҙам, – тине ул Әлибайҙың һүҙенә ҡаршы.

---

[1] *Мәсәүеттәр* – тамъяндарҙың Нөгөш тамағы тирәһендә йәшәүселәре.

– Беҙҙең башҡорт ҡалаһыҙ ҙа йәшәгән, – тип әйтә һалды Әлибай.

– Ҡалаһыҙмы?.. Заманында ҡалалар[1] ҙа булған ул. Һинең Ҡарауыл тауы[2] хаҡында ишеткәнең бармы? Юҡтыр шул. Борон заманда, болғарҙар, унан ары нуғайҙар Өфө тауында тороп хакимлыҡ иткәндә, башҡорттарҙың ана шул Ҡарауыл тауында үҙ ҡалаһы булған.

Атаһының элегерәк һөйләүенән Кинйә Өфөнән арыраҡ Ҡара абыҙ ҡалаһы[3] тип аталған урындың булғанлығын да белә ине. Монгол баҫҡынсылары уларҙы емергән. Халыҡтың ҡеүәте бөткән, дошмандың туҡтауһыҙ ябырылыуҙарына ҡаршы тора алмайынса, таланыу-ҡырылыуҙан ҡасып-боҫоп ҡына йәшәгәндәр. Урал уялары, ҡарурмандар, уларҙы үҙ ҡанаттары аҫтына йәшереп, ышаныслы ҡатауҙар, ҡәлғәләр хеҙмәтен үтәгән. Шуларҙы өҫтәп әйтеп, атаһының һүҙен яҡлар ҙа ине Кинйә, тик ҡунаҡ дуҫының күңелен төшөрмәҫ өсөн генә туҡталып ҡалды.

Әлибай ҙа яуап таба алманы.

* * *

Был ваҡыттарҙа яу баҫтырырға тип сыҡҡан каратель отрядтарҙың һалдаттары бөтә тирә-яҡты ҡыҙырып йөрөй ине. Уларҙың ҡасан, ҡайҙан килеп сығыуын белеп тә булмай. Ауылдың кешеләре лә һиҙмәгәндәрҙер, күрәһең. Шул карат тигәндәре, уларҙың малдарын алып, яңыраҡ ҡына үтеп киткәндәр, арттараҡ ҡалғандары менән ауылдың ирҙәре өҙөшә ине.

Хәлде аңлап алғас та, Кинйә күп уйланып торманы.

– Әйҙә, ҡапыл ғына һөрән һалып ябырылабыҙ! – тине һәм дуҫының яуабын да көтмәйенсә, аттар янына йүгереп килеп, эйәргә бәйләнгән суҡмарын йәһәт кенә сисеп алды.

Ауылға осоп-елдереп барып керҙеләр ҙә икәүһе бер юлы ҡыйҡыулап һөрән һалдылар. Иҫләмәҫтән, күмәк көс килә тип, һалдаттар, ҡаушап, шунда уҡ һырт бирҙе, ә ауыл ирҙәре ҡөҙрәтләнеп, атһыҙ-ниһеҙ генә булһалар ҙа, тегеләрҙең арттарынан ҡыуа төштөләр. Ләкин бик алыҫ китмәнеләр, элегерәк

---

[1] Был урында «ҡаласыҡ» (городок) мәғәнәһендә.
[2] *Ҡарауыл тауы* – Өфөнән 12 саҡрым алыҫлыҡтағы Чесноковка тауы.
[3] Хәҙерге Благовещенск ҡалаһы янында.

үткән карателдәрҙең дә әйләнеп килеүе ихтимал. Күҫәк, һәнәк менән генә уларға ҡаршы тороу мөмкин түгел.

Был көтмәгән ҡыйыулыҡтан егеттәр, үҙҙәренә үҙҙәре ғәжәпләнеп, бер-береһенә ҡарашып алды. Бына бит, йәнәһе, ҡыуҙылар, еңделәр, һалдаттарға ҡаршы суҡмар күтәрҙеләр.

– Талаҡтарын гөпсөттөк тегеләрҙең, ә? – тип маңлай тирен һөрттө Әлибай.

– Тауыш күтәрҙек – ни бары шул.

– Юҡ, беҙ батырҙар! Ҡурҡмай-өркмәй ташландыҡ. Әгәр ҡаршы торһалармы, ошо суҡмарым менән берәм-берәм баштарына ҡундырыр инем!

Ҡапҡалар, ишектәр шарран-яра асыҡ, ҡарындыҡ тәҙрәләр йыртылған. Шуларға ҡаранып торғанда, уларҙың янына әле генә бергәләп һалдаттарҙы ҡыуалаған бер нисә ир килде, ҡуйы ағас араһынан һерентеп бөткән ҡарттар, әбейҙәр сыҡты, өркөттәргә[1] төшөп ҡасҡан ерҙән кескәй балаларын күтәргән, ҙурыраҡтарын эйәрткән ҡатындар күренде. Үҙҙәренә көс-ҡеүәт биргән батыр егеттәр янына һырылдылар, тағы килеп сыҡмайҙармы тип, тирә-яҡҡа ялт-йолт ҡарандылар. Ҡурҡыуҙары еткән бахырҙарҙың. Илаша-илаша аһ-зарҙарын һөйләргә тотондолар. Берәүҙәренең туғандарын, икенселәренең апайҙарын һалдаттар алып киткән. Йә хурлап ташларҙар, йә ситкә олаҡтырырҙар инде, тиҙәр.

– Әй, Хоҙайым, ниндәй яҙыҡтарыбыҙ булды һуң беҙҙең? Ниңә шул саҡлы ауыр ғазаптарға юл ҡуяһың? Ярлыҡа, Тәңре, яҡла!

– Йәшәр хәлебеҙ ҙә ҡалманы. Караттар тағы ябырылыр. Ауылда ҡалыу әмәле бөттө.

– Ҡайҙа бараһығыҙ һуң? – тип һораны Кинйә, уларҙы йәлләп.

Ап-аҡ сәсле, хәлһеҙ күҙле, кәүҙәһе ҡаҡ һөйәккә ҡалған бер әбей ҡалтыраулы тауыш менән:

– Эх, улым, улым… Ҡайҙа бараһыбыҙҙы белһәк ине беҙ! – тине, яҡыныраҡ килеп. Уның күҙ ҡарашынан егеттең тәне тетрәне. Ярҙам итәһе ине, күңелен йыуатырлыҡ берәй һүҙ әйтәһе ине. Ләкин нимә генә тиһен?..

…Ауылға ҡайтып кергәндә, йорттағылар ниҙәлер бик ҡаты борсолоуға төшкән һымаҡ тойолдо Кинйәгә. Өйгә инһә, әсәһе яулыҡ ситтәрен күҙ йәштәренә мансый-мансый илап ултыра.

---

[1] *Өркөт* – баҙ.

Мәҙрәсәне ташлап ҡайтҡанды алдан ишетеп хәсрәтләнәлер тиһә... Юҡ, был нимә генә... Унан да дәүерәк, ҡайһы сағында йөрәк күтәрә алмаçлыҡ ауыр ҡайғылар ҙа аҙ түгел дә баһа...

Кинйә әсәһен ҡосаҡлап, йыуатырға тырышты.

– Күңелем кистән бирле яманға һиҙенә ине. Һул күҙемдең ҡабағы туҡтауһыҙ тартты.

– Күп илағанға күрә ул, әсәй. Тыныслан.

– Һис иламаç инем дә бит... Яңы янарал атайыңды ҡалаға саҡырта. Бөтәгеҙҙе лә...

– Саҡыртыр инде. Шуның өсөн янарал бит ул. Барырбыҙ ҙа ҡайтырбыҙ.

Шул мәлдә ишектә атаһы күренде. Ул Аçылбикәнең борсолоуына алйып, Кинйәһенең былай ваҡытлы-ваҡытһыҙ ҡайтып төшөүе хаҡында ла йүнләп һораша алманы.

Атаһы һөйләп биргәс кенә, «Алдар батыр менән дуç булды, яу сапҡандарҙы ҡанат аçтына алды», тип Бирҙеғолдоң ошаҡлап яҙып ебәргән шикәйәте буйынса, яугирҙарҙы язалаған ваҡытта ҡарап тороп, ғибрәт-һабаҡ алыу өсөн Ур тамағына саҡыртылыуын, шунда улдарын да алып барырға ҡушылыуын аңланы Кинйә. Ғәжәпкә ҡаршы, бына шул көнгә ниндәй хикмәт менәндер үҙенең ҡайтып төшөүе лә тап килгән бит әле. Хәйерлегәме, түгелме – әммә ошондай мәлдә, атаң менән ағайҙарың киткән саҡта, ситтә тороп ҡалыу ҙа ҙур үкенес булыр ине.

Башҡорт ерҙәренең баш хакимы генерал-лейтенант кенәз Урусов Василий Алексеевич 1740 йылда яуҙарҙы баçтырып бөткәс, унда ҡатнашыусыларҙы язалау өсөн, Ырымбурҙа ла, Минзәләләге кеүек үк, тикшереү комиссияһы төҙөгәйне. Һуғыш барышында әсиргә алынғандарҙы ла, үҙҙәре баш һалғандарҙы ла төркөм-төркөм туплап, шунда ҡыуалайҙар, урманға ҡасҡандарҙы тотоп илтәләр икән. Урусовтың уларға ниндәй яза бирәсәген халыҡ Минзәләләге экзекуциянан уҡ ап-асыҡ һиҙә ине.

* * *

Арыçлан батыр, үҙенә ҡушылғанса, улдарын эйәртеп, ҡалаға китте. Уларҙы оҙатҡанда ҡатыны:

– Имен-аман ғына ҡайтығыҙ инде. Бер Аллаһҡа һыйынып көтөрмөн, – тип ҡан-йәш илап тороп ҡалды.

Тәүге көндө үк уларҙы ҡәрҙәштәре, дуҫтары эҙләп тапты. Аҙ-маҙ ғына танышлыҡтары булғандар ҙа бындай ауыр көндәрҙә Арыҫланға ыҡлашырға тырышты. Улар башҡорт ерҙәренең төрлө яҡтарынан килгәндәр. Бигерәк тә Етерһыу кешеләре күп ине.

Икенсе көндө биш меңдән артыҡ кешене көслө ҡарауыл аҫтында ҡаланан ун ике саҡрымдағы тауға ҡыуалай башланылар. Ә башҡалар шунда ҡарап тороу өсөн барырға тейеш. Уларҙың бындағы хәлдән ғибрәт тейәп ҡайтыуҙа ғәмдәре юҡ ине, әлбиттә. Күрәһе кешеләрен күреп ҡалырға тырыштылар. Язаға килтерелеүселәр араһында һәр кемдең улымы, туғанымы – кеме булһа ла бар.

Арыҫлан, үҙенең улдарын эйәртеп, тау итәгендәге бер урынға – юл ситенә баҫҡайны. Ҡыуалап килтерелеүселәр үткәндә, һәр береһен күҙҙән кисереп, үҙенең таныштарын эҙләне. Арып-алйып киләләр. Кейемдәре ылбырап бөткән. Ҡайһыһының ҡулы, ҡайһыһының башы бәйле. Юлда туҡмалыуҙан биттәре ҡара ҡанға туҙған. Ә бит яңыраҡ ҡына сал бөркөттәй ил азаматтары булғандар. Һуңғы тапҡыр хушлашыу өсөн, улар ҙа хәлһеҙ күҙҙәрен яҡ-яҡҡа йөрөтөп, яҡындарын эҙләйҙәр.

Әленән-әле Арыҫлан батырға ла баш һелкеп үтәләр ине. Бер мәл төркөм араһынан ҡалын тауыш менән:

– Арыҫлан батыр! – тип ҡысҡырҙы берәү.

Кинйә: «Кем ул, атай?» – тип һораған арала, теге кеше, быҡауын зың-зың килтереп, төркөмдө йырып сығырға тырышты.

Шунда уҡ танып, Арыҫлан да уға табан ынтылды.

– Ах! Ҡонҡас сәсән, һинме ни был?!

– Эйе... Уларға ышанып, ҡаптым. Ярлыҡау һорап, дәстүр яҙып биргәйнем.

Сәсән башҡаһын әйтә алманы, Арыҫлан да бүтәнсә һүҙ ҡушырға өлгөрмәне – улар араһына яланғас ҡылыслы драгундар килеп етте, һалдаттарҙың оҙон штыктары юлдарын бүлде. Тотҡондо төрткөләп төркөм эсенә индерҙеләр. Арыҫланды ситкә эттеләр.

– Арыҫлан ағай, бәхил бул!

– Хуш, сәсән!.. – Күҙҙәре уттай тоҡанһа ла, Арыҫлан, һис ни әйтә алмайынса, Ҡонҡас артынан ҡарап ҡатты. Уның быҡауҙары сикәһенә һуҡҡандай, ҡыҙыу ҡан йүгертте, йоҙроҡтары йомарланды. – Ай, әрәм итәләр инде... Шундай оҫта әйтемсе, иртәксе...

Арыҫлан уның иртәктәрен, мәҙәктәрен үҙ ауыҙынан тыңлағаны бар ине. Шулай уҡ һуңғы тапҡыр осрашыуымы?..

Бигерәк тә Кинйә өсөн йән тетрәткес ине был.

Ҡонҡас сәсән! Ятраҡан сәсән! Аҡыл эйәһе сәсән! Бер күрергә хыял итеп тә, осрашырға тура килмәгәйне. Әле күрҙе лә ни... Бик ауыр, бик ҡыҙғаныс хәлдә күҙ алдында сағылып ҡына ҡалды. Бөтөнләй юғалыуы шулмы икән ни?!

– Атай, ҡотҡар уны!

– Ҡалай итеп?.. Был бит Урусов...

Һис бер ваҡытта ҡурҡыу белмәгән Арыҫлан батыр ҙа, сәсәнде ҡотҡарыу сараһы юҡлығын тойоп, был юлы үҙенең көсһөҙ икәнен аңланы. Ә бит бер йылды, Кинйәнең дүрт йәше менән генә барғанында, Ҡонҡастың Өфө зинданында ятҡанын ишетеп, шунан йолоп алырға барып еткәйне. Ул сағында сәсәнде һөргөнгә ебәреүҙән үҙ ҡарамағына ышандырып алып ҡалды. Ә хәҙер... Сәсән кешегә ғәфү ителеү бәхете һирәк була. Яу баҫтырылдымы – иң тәү башлап унан һорау алалар, беренсе итеп уға яза биреләләр.

Тотҡондарҙы кире ҡыуалай башлағайнылар. Атаһын эҙләп киткән Кинйә шул саҡ, халыҡ араһынан этелеп-төртөлөп, көсө еткәнсе йомолоп бара-бара, ҡалҡыулыҡҡа күтәрелгәс кенә, күреп ҡалды уны. Арыҫлан офицер менән һөйләшеп тора ине. Уға бер бит ҡағыҙ һондо. Тегеһе яҙыуҙы алып уҡып ҡараны һәм шунда уҡ, башҡа офицерҙар араһынан үтеп, генерал Урусовтың ҡаршыһына барып баҫты. Күп тә үтмәне, Арыҫлан янына әйләнеп килде.

Атаһының ҡапыл ғына китеүен шәйләгәс тә, Кинйә уның бер-бер уйға тарып, сәсәнде ҡотҡарыу сараһын юлларға тырышыуын һиҙенгәйне. Дөрөҫ булған шул. Ана бит, һөйләште, йөҙө тынысланған һымаҡ. Кинйәнең дә эсенә йылы йүгерҙе. Нимә вәғәҙә итеүҙәрен белгеһе килеп, шунда уҡ атаһының ҡаршыһына сыҡты.

– Сәсәнде ҡотҡаралармы, атай?! – тип ҡосаҡлап алды ул.

– Ҡотҡарырҙар... Тынысла. – Арыҫлан үҙе лә еңел һулаған һымаҡ.

– Ҡасан, хәҙер үкме?

– Бүре ауыҙындағы һарыҡты алыуы еңелерәк...

Шулай тиһә лә, үҙенең әле нимәлер эшләй алыуына, яҙыуының Урусов ҡулына юлығыуына, иртәгә үҙе килһен, тип әйтеүенә Арыҫлан бер килке ҡәнәғәт ине. Уйлағаны, былай, ыңғай ғына барған кеүек. Аҡсаһын мул ғына сумырғас,

яҙыуын писарь шул арала уҡ килешле итеп, Арыҫландың үҙе әйткәнсә, аҡ янарал исеменә, бөйөк Пётрҙың изге хөрмәтен иҫкә алып, баш орамын, тип башланы. Үтенес һораусының Азов походында ҡатнашҡанлығын да, ҡулында – батша биргән ҡағыҙ, күкрәгендә маҡтау значогы булыуын да күрһәтеп яҙҙы, ҡайһыһы аша һөйләшеү яҡшы икәнен әйтте. Офицер ҙа, ҡулына һонған алтын тәңкәнең тослоғон тойоп, генерал ҡаршыһына барыуҙан тартынып торманы. «Иртәгә килһен», – тигән Урусов. Арыҫлан уның бер генә тапҡыр булһа ла үҙ яғына күҙ һирпеп алыуын шәйләне.

Арыҫлан батырҙы ҡабул иткән көндө лә генерал Урусов әллә ни яғымлылыҡ күрһәтмәне күрһәтеүен, шулай ҙа бөйөк Пётр батшаның арҙаҡлы ҡолона мәрхәмәт яһау йөҙөнән, уның һүҙен йыҡмауын халыҡҡа таратыу өсөн, үтенесен иғтибарһыҙ ҡалдырманы. Тәүҙә уны күҙ ҡарашы менән ҡапшап, һорауҙар бирә-бирә, бер аҙ һөйләште.

– Пётр Алексеевичты йәш сағында Азов походында ғына күрҙеңме?

– Унда ла, һуңынан да... Санкт-Петербургка ике тапҡыр барҙым. Икеһендә лә һорауымды үтәне.

– Бик яҡшы... Мин дә һиңә ҙур мәрхәмәт күрһәтәм.

– Рәхмәт, Ваше сиятельство.

– Урыҫса һөйләшергә лә яҡшы ғына беләһең икән, – тип йылмайған булды Урусов. Ул һиҙелер-һиҙелмәҫ хәрәкәт менән адъютантына ниҙер ымланы. Тегеһе шунда уҡ сығып китте лә оҙаҡламай бер тылмас менән Ҡонҡас сәсәнде эйәртеп алып керҙе.

Үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы Арыҫлан. Ҡалай бик тиҙ! Алдан уҡ, уны эҙләтеп-таптырып, һөйләшеү ваҡытына килтереп ҡуйғандар, күрәһең. Ошондай ҙур фажиғә көтөп торғанда осрашҡас, сәсән менән Арыҫлан, ҡыуаныстан бөтә донъяларын онотҡан төҫлө, күрешер өсөн ынтылғайнылар, береһен генерал үҙе ҡул иҙәп туҡтатты, икенсеһен адъютанты тотоп алды.

– Арыҫлан батыр, минең хаҡта юллап йөрөйһөңмө ни? Кәрәкмәй... Юҡ... Юҡ...

– Һин нимә һөйләйһең, Ҡонҡас сәсән?..

Генерал тағы ҡулын иҙәне.

– Ашыҡмағыҙ!.. Һуңынан, һуңынан...

Ләкин сәсән уның үҙенә табан бер аҙым атланы.

– Аҡ янарал, бында килтереп, ниңә ыҙалатаһың мине?

Тылмастың был һүҙҙәрҙе тәржемә итеүе менән үк генералдың ҡаштары йыйырылды.

– Әллә аҡылдан яҙғанмы ул?

– Һә, нимә ти янарал?.. Ә, аҡылдан тиме?.. Юҡ, юҡ! Салт аҡылым башымда. Бергә килгән дуҫтарымдан айырмаһын. Шуны ауҙарып әйт уға.

Үҙенә һөйләшергә рөхсәт булмаһа ла, сәсәндең яңылышыуын күреп, Арыҫлан батыр әйтмәй түҙмәне:

– Аҡылыңды йый, сәсән дуҫым. Ҡотҡара бит ул һине. Рәхмәт, тиң.

– Шул армағаймы? Булмаҫ, Арыҫлан батыр, булмаҫ! Уға баш эйгәнсе, дар ағасына китәм. – Сәсән генералдың үҙенә табан боролдо. – Һин, кенәз, атайыңдың, олатайыңдың кемлеген беләһең. Уларға саҡлылары тураһында ла ишеткәнең барҙыр. Исмәғил хандың улы Ураз кенәздән таралғанһығыҙ. Ай-һай, яман нәҫел. Оло Урҙаны тарҡатыусы һеҙ, Разин атамандың яуын ҡыйратыусы ғәскәрҙең башлығы һеҙ. Ә һин янарал уҡаһын тағып алғанһың да бөгөн бында килеп халыҡты ҡанға йөҙҙөрәһең. Тамсы өмөт юҡ һиндә. – Ҡонҡас бер аҙым ситкәрәк китте. – Һүҙемде урыҫсаға ауҙарып, үҙенә ишеттерегеҙ.

Генералға уның һүҙҙәрен тәржемә итмәнеләр итеүен. Әгәр ҙә түкмәй-сәсмәй шул тослоғо менән еткерелһә, яу һаман дауам итә икән, тип уйлар ине ул, шулай ҙа сәсәндең тауышынан үҙе хаҡында бик ауыр нәмәләр әйтелеүен аңлап, уға асыулы ҡараш ташланы.

– Дурак!

– Һантый тиме? Үҙе алйоттоң-алйото ул. Йүнле әҙәм кеше аҫтырмай.

Генерал тағы ҡул иҙәне. Сәсәнде алып сығып киттеләр. «Эште боҙҙо бит», – тип хафаланды Арыҫлан. Ул генералды тынысландырып, сәсән өсөн аҡланып, һорап, үтенеп тә ҡараны:

– Ысынлап та, ындай көндө уның аҡылы зәғифләнеүе ихтимал, Ваше сиятельство. Бирегеҙ миңә уны, үҙ йәйләүемә апҡайтайым.

Ләкин эш үткәйне инде.

– Эйе, эйе, аҡылы бөткән уның, дар ағасы һорай... Шулай ҙа мин уға тағы йәшәргә ҡушырмын. Йәшәр ул, йәшәр... Шуға рәхмәт, тиң...

Булманы. Өмөт өҙөлдө. Арыҫлан бынан һуң сәсәнде осрата алманы. Уның, ысынлап та, дар ағасына ебәрелмәйенсә, шулай

уҡ һөргөнгә лә һөрөлмәйенсә, алпауыт крәҫтиәне итеп, ҡайҙағылыр алыҫ губернаға оҙатылыуын да, ҡасандыр берәй ваҡытта, байтаҡ ҡына йылдар үткәс, яҙмыш үҙҙәрен тағы табыштырасағын да күҙ алдына килтереү мөмкин түгел ине.

* * *

– Әсәй, ниңә быйылғы көҙ һалҡын икән?

Улының былай тышҡа тилмереп ҡарауына Аҫылбикәнең үҙ тәндәре сымырлап ҡуйҙы.

– Ауырып ятҡанда ғына шулай тойола ул, улым. Һауыҡҡас, мап-матур күренер. Бошонмаһаң, тиҙерәк һауығырһың. – Әсәһе, уның өҫтөн ябып, арҡаһынан һөйҙө.

Анау ҡәһәрле Ур буйындағы ҡала тигәндәренән ҡайтҡас, өҫдүрт көн үтеүгә сирләп китеп, аяғынан йығылды ла ҡуйҙы шул Кинйәһе. Башы ут кеүек яна, тәненә ҡул тейҙергеһеҙ. Үҙе моңая ла моңая, әллә һөйләнә, әллә һаташа. Уның күңелен болоҡһотоп, ҡайтҡандың икенсе көнөнә үк һалҡын ел өрә башланы. Япраҡтар шаулап ҡойола, һалҡын ямғыр һибәләп-һибәләп үтә.

– Һиңә ямғыр еле генә ҡағылған, – тип уны тынысландырырға тырышты Аҫылбикә.

– Йөрәгем ҡыҫа минең. Күҙ алдымда – дар ағастары, ҡолаҡ төбөндә бығауҙар сыңлай.

– Һин уйлама ул хаҡта. Онот.

– Онотоп буламы ни ундағын?..

– Ниңә ебеп төштөң әле? Иҙрәп төшөү бисә-сәсәгә генә ярай. Һин кейек арыҫлан балаһы бит әле... – Арыҫлан тағы улына табан боролдо. – Һинең егет ҡорона ингән сағың. Ысын азамат ҡайғырып, уһылдап ятмай.

Атаһының әйтеүе дөрөҫ икәнен Кинйә үҙе лә аңлай ине, әлбиттә. Ул йығылған батырҙар урынына баҫырға тейеш. Тик бына сафҡа баҫмаҫ элек үк яраланды. Тәненә түгел, йәненә йәрәхәт яһанылар. Уныһы үтер. Алышта йығылғанда ла йәһәт кенә ҡалҡынып торорға кәрәк. Шунан?.. Нимә эшләй ала һуң ул? Был хаҡта атаһына әйтмәне, һораһа ла, егет кеше үҙе белергә тейеш, тиер ине.

Бер нисә көндән һуң Кинйә:

– Өйҙә ятыуҙан фәтүә юҡ, – тине. – Аяҡ аҫтын елпетеп, йөрөп ҡайтайым әле. Ил хәлен белергә кәрәк.

– Эйе, донъя күреүҙең артығы юҡ. Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә, – тип хупланы атаһы.

Сысҡан һыртлы ҡола атына атланып, ҡарсыға түшле бүртә бейәһен етәккә бәйләп, ян-һаҙаҡтарын арҡаһына аҫҡан килеш Кинйә яҡын-тирә ауылдарға сығып китте. Ул бынан Мәкәтаулы буйлап өҫкә күтәрелде лә, бер сыҡҡанда күреп йөрөйөм әле тип, Һуҡайлы туғайына төшөп китте. Гөрләп торған Дәүләтҡол, Сәйет ауылдары яндырылған. Ҡайһы берәүҙәр яңынан йорт һалып алғандар алыуын, ләкин элекке йәм, йәнлелек юҡ. Халыҡ тамам миктәп бөткән. Кемдең өйөнә инмә – аслыҡ-яланғаслыҡ күҙгә бәрелеп тора. Ашағандары – аш, кейгәндәре кейем түгел.

Һәр кем үҙенең ҡайғыһын һөйләргә тотондо. Ҡайһыһының өйөн яндырғандар, ҡайһыһының улын алып киткәндәр, малын әйҙәгәндәр... Кинйә уларын да яҙҙы, был хәлдәрҙе үҙенең янындағы кенәгәгә теркәп-теркәп ҡуйҙы.

Икенсе көндө үк ул, тағы йыйынып, Ашҡаҙар буйына төшөп китте. Ҡайҙа булмаһын – йә Кириллов менән Тәфкилевтең, йә Румянцевтың ҡанлы эҙҙәре ҡалған. Һәр ерҙә шулар хаҡында яҙҙырҙылар. Бөтә өмөт ҡағыҙ ярҙамына ғына ҡалғайны шул.

Эй тормош, тормош... Уның ғазабы, үҙ ҡосағына бына шулар һымаҡ фәҡир-фоҡараның, ярлы-ябағаның бөтәһен-бөтәһен быуып алып, донъяны ҡот осҡос туфан итеп баҫҡан. Ер өҫтөндә һыуҙар урынына әрнеү аға, үлән менән тиңләшеп яфа үҫә, һауала ҡош һайрауынан көслөрәк булып халыҡтың аһ-зары яңғырай. Бының өсөн кемдәрҙелер ҡарғайҙар, ләғнәт яуҙыралар, бер Хоҙайҙан ярҙам һорайҙар...

Халыҡ юл күрһәтеүҙе һорай.

«Башта ул юлды үҙеңә яҡшылап белергә кәрәк, – тип уйланды Кинйә. – Белмәгән көйө өйрәтеүселәр былай ҙа етерлек. Ә ул ғилемде ҡайҙан алаһың? Әллә Мәскәү, Санкт-Петербург яғындамы? Унда ҙур ғилемдәргә өйрәтәләр икән. Академия тип аталған йорт та бар, ти...» Былар хаҡында сала-сарпы ишетеп ҡалһа ла, унда барып уҡыуҙы бер генә зауыҡлы хыялына килтерергә лә баҙнат итмәне Кинйә. Дворяндар, баяр балалары өсөн генә бит ул. Ишеген асып инмәҫһең – типкеләп сығарырҙар...

Кинйәнең атаһы ла, йөрөгән таш шымара, тик ятҡанын мүк баҫа, тип, барып уҡып ҡайтыуҙы хуп күрҙе. Үҙе үк әйтеп торғас, юл хәрезенә кәрәкле аҡсаһын, малын да йәлләмәҫ, яҙ етеп, ер-һыуҙар кипкәс, тәүәккәлләп юлға сығырға ярай.

1750 йыл ине. Кисәле-бөгөнлө Кинйә йәйләүенән кеше өҙөлмәне. Төрлө яҡтарҙан уҙамандар, аҡһаҡалдар йыйылды. Уның Сытырмандан ҡайтҡанын ғына көткәндәр икән. Унда байтаҡ ҡына торорға тура килгәйне Кинйәгә.

Яңы мәҙрәсә асыу мөмкинлеге бирелмәне бирелеүен. Шулай ҙа ике йыл буйы ныҡышып йөрөй торғас, Сытырман ауылында элек-электән эшләп килеп тә, яу замандарында ябылып торған мәҙрәсәне тергеҙергә рөхсәт алыуға ирешкәйнеләр. Быныһы өсөн дә ҡайҙа ғына барманы, кемдәрҙе генә үҙенә ярҙамға ылыҡтырманы Кинйә. Тамъяндар, ҡыпсаҡтар ҡатнашты; меңле башҡорттары ла үҙ үтенестәрен яҙҙылар. Ә инде юрматыларҙың һәр аймағы – аҙнайҙар һәм тәтегәстәр, тәлтемилсектимерҙәр һәм аҡсулпандар үҙ тауыштарын әйтмәй ҡалманы.

Бына хәҙер мәҙрәсә буласаҡ!

«Бына бит, ил төкөрһә, күл була», – тип ҡыуанды Кинйә.

...Ә йәйләүендә уны тағы ла мәшәкәтлерәк эштәр көтә ине.

– Ерҙе алалар. Һунар биләмәләре ҡыҫыла. Йәйләр өсөн урын тар. Солоҡлоҡ ағастар бөтә, – тип ҡан ҡайғыра халыҡ. – Ҡалай итеп йәшәрбеҙ? – тип аһ ора.

– Йортауайҙарҙың беҙҙә ғәме юҡ, бөтә өмөтөбөҙ һиндә, – тиҙәр ҡарттар. – Һине үҙ арабыҙҙан йөрөкшә итеп һайланыҡ. Баяр менән һөйләшкәндә ныҡ тор, Кинйә абыз.

– Хаҡ Тәғәлә һиңә тел асҡыстары бирһен.

Ер мәсьәләһе яҙ көндәрендә үк ҡуҙғалғайны, Иван Твердышев менән уның еҙнәһе – апаһы Татьянаның ире – Иван Мясников был юлы ҡоластарын бик ныҡ йәймәкселәр. Уларға Воскресенский заводы ғына етмәй. Баҡыр рудниктары асыу өсөн дә, шунда һалынасаҡ яңы заводтары хәжәтенә лә Йайыҡ, Һаҡмар, Ағиҙел, Юшатыр буйҙарынан әллә ни саҡлы ер һорайҙар. Нәфселәре ҙур. Демидовтарға тиңләшкеләре килә. Тегеләре суйын, баҡыр иретеп күпме файҙа ала. Мәғдән үтемле нәмә. Уны хөкүмәт үҙе көтөп кенә тора. Шулай икән, Твердышев менән Мясниковтың да заводы ниңә берәү генә булһын, ти. Ҡулдарында мал бар, баштарында аҡыл да, хәйлә лә етерлек. Губернатор менән килешеп, уға бүләктәр, йоломдар һоноп, 1746 йылда Преображенский заводын һалдылар. Был да етмәне. Башҡорт ерҙәренең төрлө төбәктәренә разведчиктар ебәрҙеләр, халыҡ араһындағы мәғдән таныусыларға бүләктәр биреп, ер серен астылар. Твердышевты бигерәк тә борон-борондан ябай ысул менән ҡорос иреткән урындар ҡыҙыҡһындыра

ине. Шул замандан ҡалған шлак киҫәктәрен, мәғдән ҡаҙыған копиҙарҙы күрһәтеүселәр табылды. Әҙләнә торғас, 1747 йылда Яйыҡ буйындағы Әтәс тауында[1] яҡшы сифатлы бай мәғдән ятыштары асылды. Тирлән, Әүжән тирәләрендә лә күп икән. Башҡорт ерҙәренең бөтә көньяғы шуның өҫтөндә ултыра, имеш.

Твердышев хатта үҙ асыштарына үҙе ышанманы. Иҫәпләһәң, иҫ-аҡыл китерлек. Байлыҡ, байлыҡ... Ере буштан-буш. Төҙөргә ағасы, яғырға утыны, машиналар әйләндерергә кескәй йылғалары күп. Эшсе көсө эргәлә генә. Башҡорттар етмәһә, арзан хаҡ менән крәҫтиәндәр һатып алып, ауылы-ауылы менән күсереп ултыртып була. Улар өсөн дә ер кәрәк.

Шундай пландар менән ул тағы губернатор тирәһендә йөрөй башлағайны. Бына хәҙер бөтәһе лә эшләнгән. Санкт-Петербургтан – Берг-коллегиянан рөхсәт килгән, губернатор фарманы бар. Теләйһеңме-теләмәйһеңме, ул ерҙәр хәҙер Твердышев компанияһына ҡаласаҡ. Унда мал йөрөтөп булмаҫ, йылҡылар тибенгә сыҡмаҫ. Йәйҙәрен тирмә ҡороп йәйләмә, урманына инмә, балығын тотма – бөтәһенә баяр хужа буласаҡ.

Халыҡ борсола ине. Атай-бабайҙарҙан ҡалған, шунда уйнап үҫкән, әсе тир түгеп донъя көткән, шуның өсөн йән аямай боронборондан яу сапҡан үҙ ерҙәре кемгә йәл түгел?! Йәлдер. Ерем тимәҫ ир булмаҫ, өйөрөм тимәҫ ат булмаҫ, тиҙәр бит.

Кинйә йәйләүенә лә шулай итеп йыйналғайнылар. Икенсе көндө халыҡ тағы ла күбәйҙе. Улар араһында, ҡыпсаҡтарҙан ғына түгел, үҫәргәндәрҙән, тамъяндарҙан да бар ине. Кинйәнең һыуын-ҡыпсаҡта йәшәгән ағаһы Ҡайбулат, өлкән ағаһы Абдрахмандың улы Ҡотлогилде, дуҫы Яманһары менән Ҡасҡын да, туҙыҡалары[2] Һыртлан, Мәксүт, Барғу кеүек күп кенә туған-тыумасалары ла килгән.

Аҡ тирмә тирәһе үҙенә күрә бер йыйынға әүерелде. Һәр кем Твердышев ҡулына күсә торған ере хаҡында һөйләй. Берәүҙәренеке Ҡарғалы йылғалары буйында, икенселәренеке Һайылмышта, Яңғыҙҙа... Ашыҡтимер, Көмбәт, Юшатыр, Туғыҙтимер, Әбейүлгән, Көйөргәҙе, Ҡаслыайыр, Зәмзә, Мәләүез, Себенле буйҙары, уларҙың бөтә ҡойолма йылғалары, үҙәктәр, тарлауыҡтар, уялар, шул тирәләге туғайҙар, һырттар, битләү-

---

[1] Хәҙерге Магнит тауы, Магнитогорск ҡалаһы урыны.
[2] *Туҙыҡа* – бер туғандарҙың балалары.

ҙәр... Күп ине, күп... Кинйәнең Туғыҙтимер үрендә сәңкемҡыпсаҡтар менән күршеләш йәшәгән ағаһы Ҡайбулаттың Ҡуянлы-булаҡ, Асы, Таллы йылғалары буйындағы байтаҡ ҡына ерҙәре лә һатыласаҡ. Ул да ҡайғыға ҡалған.

Бөтәһе шаулаша. Ни бары Арыҫлан ғына башта һүҙгә ҡатнашманы. Ярһыусылар күбәйә төшкәс кенә ул:

– Туҡтайыҡ әле, йәмәғәт, – тип һүҙгә кереште. – Һеҙ нимә, бер ҙә зауыт һалынмаһын тиһегеҙме әллә?

Бөтәһе лә һағайып ҡалды. Был хаҡта Кинйәнең дә күп баш ватҡаны бар. Заводтар һалмайынса йәшәп булмауын белә. Ҡайһы илдең ҡоросо, баҡыры күп – уның ҡоралы яҡшы, ҡеүәте ҙур. Шуларҙы булдырып өлгөргән өсөн дә Рәсәй-ил мәғрип дәүләттәре менән дә, мәшриҡтәгеләр[1] менән дә арҡа терәп сәкәләшә ала. Унығы шулай... Тик шул заводтарҙы кем һала? Баҡыр, тимерҙе ҡаҙнаға һатһалар ҙа, Демидов, Твердышев һымаҡтар ил өсөн тип эшләйҙәрме ни? Үҙҙәренең аҡса ҡумталарын тултырырға ғына тырышалар. Ә унда эшләгән халыҡҡа нимә тейгәнен Кинйә күрше заводта уҡ күрә: ҡоллоҡ та аслыҡ. Ҡандарын эсәләр. Бына шуларҙы иҫкә алып, атаһына текләне.

– Ниңә һуң шул эште беҙҙең үҙебеҙгә ҡушмайҙар? – Арыҫлан ғәжәпләнеп ҡуйҙы.

– Ай-һай, батшанан күпте көтәһең түгелме?

– Ниңә күп булһын? Ул эште башҡара алыр инек.

Кинйәнең һүҙен Ҡотлогилде лә яҡланы:

– Беҙҙең халыҡҡа борон-борондан таныш эш. Тауҙан тимер ташы ташып, саф булат ireткәндәр.

Арыҫлан ҡул һелтәне.

– Беҙҙә тимер ташын тауҙан ҡаҙығандар, урыҫтар әүәл һаҙҙан сүмеслэп йыйғандар. Ул заманда шунығы ла еткәндер. Хәҙер... еткерерһең!.. Ә беҙҙә шундай тауҙар була тороп, Рәсәй тимерһеҙ тормаҫ бит.

– Зауытын да үҙебеҙ һала алабыҙ, – тип өҫтәне Кинйә.

– Кем, һинме? Ҡотлогилде йә Яманһарымы?

– Беҙ булмаһаҡ, бүтәндәр бар, – тип ныҡышты Кинйә. – Ана, Тасим старшина эшләй бит. Хәҙер улы Исмәғил дә тотонған. Уларҙың бөтә Ҡуян ауылы, бөтә ғәйнә шул эштә. Йоҡ заводына уларһыҙ көн юҡ. Ә Һалйоғоттоң Сәләй Боҫҡоно?.. Беҙ ҙә булдыра алыр инек.

---

[1] *Мәғрип, мәшриҡ* – көнбайыш, көнсығыш.

– Аҡсаһын да ҡыҫмаһындар, – тип өҫтәнеләр уға.

Ҡомһоҙ баярҙарҙың ерҙе алдап-талап, йә ҡурҡытып, йә юхалап алыуҙарын үҙҙәренең дә күп тапҡырҙар күргәне булды. Янзы-Петровский заводы өсөн һәр тарафҡа ун биш-утыҙ саҡрымға һуҙылған ерҙе ни бары утыҙ һум ғына аҡса биреп алғандар. Ә шул уҡ Твердышев? Камбар заводына тип 36 мең дисәтинәне сәлдергән дә, шуға йөҙ егерме һум ғына түләгән. Ул тағы алдарға тырышыр, ә Һатлыҡ, Ишалы, Теләүембәт һымаҡ старшиналар, үҙ мәнфәғәттәрен генә күҙәтеп, баяр яҡлы булырҙар, халыҡҡа юҡ-бар күстәнәс өләшеп, ерҙе үҙ белдектәре менән олаҡтырырҙар. Ундайҙар йыш-йыш ҡына шулай алдата. Һуңынан мутлыҡтары фашланғас, ҙур низағтар тыуа, дәғүәтнамәләр яҙыла, эш хөкөм палатаһына, хатта ҡанлы бәрелештәргә лә барып етә. Ләкин һуң була, терһәкте тешләүе мөмкин түгел.

Ерҙе шау-шыуһыҙ алыу өсөн, Твердышев бөтә эште шыма итеп эшләргә тырыша ине. Һуңынан бәйләнерлек урын ҡалдырмай, йәнәһе. Тамғалар йыйылған, йөрөкшәләрҙең инанаҡлыҡ[1] ҡағыҙы уның ҡулында. Ни бары ошо вәкилдәрҙе йыйып, купчий тип аталған яҙыунамәне генә уҡып сығаһы... Ә унан Өфөлә, провинция канцелярияһында, шуны раҫлата ла ергә хужа була.

## 7

Кинйә юлға әҙерләнә башланы. Һуңғы ваҡыттарҙа күнегелгәнсә камзул эсенән тимер күлдәген кейҙе, ҡағыҙ, ҡара һауыты, ҡауырһындар алды. Яу ваҡытында Бирҙеғол яндырған ауылдарҙың, ҡол итеп алып ҡайтҡан бәндәләрҙең исемдәре яҙылған ҡағыҙын да онотманы.

* * *

Твердышев алышта алдан күрә-белә торған кеше. Халыҡтың ғәҙәтен һынап бөткән. Ер өсөн ҙур низағтар сыҡҡанын, яуҙар ҡупҡанын аңлай, ләкин рәтен белһәң, шып-шыма үтә. Хатта ат алғанда йүгәнен, мал алғанда бауын ҡалдырмаған

---

[1] *Инанаҡлыҡ* – ышаныс ҡағыҙы.

һымаҡ, ер үлсәгәндә лә ҡушҡанына нимәне иш итергә кәрәген уйлаған. Үткән йыйылыуҙа шау-шыу күп булды. Рөхсәт ителгән биниһая ергә ҡәнәғәт булмайынса, тағы күберәген өмөт итеп, бер ыңғай әллә ни саҡлы туғайҙы, һыртлауҙарҙы, тауҙарҙы, урмандарҙы ҡулына төшөрөргә ынтылғанын һиҙҙеләр. Ғауға күтәрелде. Йәйләүҙә ҡалғандарҙың да тын алышы хәүефле. Хәҙерге халыҡты белә ул. Элек кенә алдап йә көс менән баҫып алғандар.

Ә Твердышев уға иҫәп тотмай. Бөтәһе алдан көйләнгән, ҡағыҙға теркәлгән булырға тейеш. Аҡ өҫтөнә ҡауырһын менән яҙылғандың көсө ҙурыраҡ. Купчий төҙөлә, раҫлана, уны закон, губернатор, Сенат яҡлай, ә улар артында – батша үҙе.

Был юлы ул старшиналарҙың күбеһен майлап-яйлап бөткәйне. Хәҙер йөрөкшәләрҙе һыйлап, ауыҙҙарын ябаһы ғына ҡалған.

– Буш ҡул менән йөрөү килешмәй, – тип һөйләнә-һөйләнә, Твердышев ситса, кәрмәзин йыртыштары йыртып, янындағы кешеләргә үҙ ҡулы менән өләште. Быны шунда уҡ приказчиктары дауам итә. Мискәне асып, араҡы һала башланылар.

Твердышевтың «Кинйә – иң яманы» тигәнде үҙ кешеләренән ишеткәне бар ине. Межа бағаналарын ултыртҡанда, «дөрөҫ үлсәгеҙ», тип тартҡылашҡаны ла, артыҡ ер керетмәҫкә тырышыусы ла, ҡағыҙға үҙ күҙе менән ҡарауҙы талап итеүсе лә шул. Үҙен яҡлаусылар ҙа байтаҡ икән. Ана бит, бер әйтеүе булды – дәррәү геүләштеләр. Тауыш-маҙар сыҡмаһын тип, Твердышев Берг-коллегия биргән ҡағыҙы менән таныштырырға ҡушты. Управляющий уҡый башланы. Баҡыр рудниктары хаҡында яҙылған урынға еткәс, нимәләрҙелер уҡымайынса, күҙен берике юл аша үткәреп, фекерҙе ялғап ебәрер өсөн, һүҙ таба алмай туҡталды.

Кинйә уның эргәһенә баҫты.

– Батша хәҙрәттәренең фарманын боҙоп, ҙур гонаһлы булаһың. Әгәр ул һүҙҙәр күңелеңә ятмаһа, рөхсәт ит, мин уҡып ишеттерәйем.

Кинйә уның биреүен көтмәйенсә, кенәгәне тартып алып, баштан төшөп уҡырға кереште. Уҡый барҙы, башҡортсалап аңлата барҙы. Управляющий туҡталған ергә еткәс, уға табан күҙ ташланы.

– Бына бит, мәғдән ҡаҙый торған урында буйына ике йөҙ, иңенә илле сажин ер алына, ул тирәгә ауыл һалмаҫҡа, ер һөрмәҫкә, тиелгән. Ниңә быны төшөрөп ҡалдыраһың?

Кинйә уҡып бөттө. Быныһынан ҡотолғас, управляющий ер һатыу ҡағыҙын уҡырға ашыҡты, ләкин уныһын да Кинйә үҙенә алды.

– Ә бына бында рудник янындағы ерҙең майҙаны фармандағыса яҙылмаған. Күрәһеңме?.. Рудник, завод хәжәтенә күпме кәрәкһә, шул саҡлы алырға, тиелгән... Самаһыҙ ер булмай ул, Твердышев әфәнде!

Бер яҡта халыҡ, икенсе яҡта старшиналар шаулашты. Үсәргән старшинаһы йөрәкшәләрҙе тынысландырырға теләне:

– Зауыт биргән байлыҡ – барыбер батшаныҡы. Шулай булғас, ер йәл түгел. Уның файҙаһына ул.

– Эһә, был баяр ахмаҡ түгел. Үҙ кесәһе ҡалын уның.

Был һүҙҙәрҙе аңламаһа ла, хәйләгә бирелгән Твердышев ирендәрен ҡымтыны.

– Ярар, был урынын һуңынан алып ташларбыҙ.

Ә Кинйә һаман үҙенекен ныҡыны:

– Ер һатыу, ер алыу – уйын эш түгел. Ғүмерлек документ. Күсереп яҙырға кәрәк!

Уны яҡлап шаулаша башлағас, түҙеме бөткән һыуын-ҡыпсаҡ старшинаһы Ишалы Ҡоломбәтов Һатлыҡҡа ҡысҡырып алды:

– Нимә һин, аңра ҡолон һымаҡ ҡарап тораһың? Һинең кешең бит ул. Тый, һайнау!

Йәүкәевкә етә ҡалды.

– Мин уларҙы... Мин тыя белермен! Аҡылдарына тиҙ ултырырҙар! – Ул, ҡамсыһы менән һелтәнеп, Кинйәгә табан атланы. – Ниңә һин башбаштаҡланаһың? Ҡыҫылмаған эшең юҡ. Һин старшинамы әллә ул саҡлы? Бошманға ла, тамъянға ла мин баш. Икеһенә лә – мин!..

Йөҙгә-йөҙ килделәр. Бер-береһенә яндырып ҡараштылар.

– Ал ҡамсыңды! – тине Кинйә тыныс ҡына. – Ерҙе һин генә һатмайһың. Бында биш ырыу вәкилдәре бар. Бөтәбеҙҙе лә халыҡ һайлап ебәргән. Кәрәгебеҙ юҡ икән – тамға ҡуймайынса ҡайтып китәбеҙ. Ҡайтҡас, халыҡты йыйып һөйләйбеҙ.

– Ә һин бунт күтәрәһеңме?

– Дөрөҫөн һөйләү – янъял буламы ни? – Кинйә йөрәкшәләргә табан боролдо. – Йә, әйтегеҙ, йәмәғәт! Моғаһәдәгә[1] күҙ йомоп ҡына тамға һалабыҙмы? Төҙәтһендәрме?

---

[1] *Моғаһәдә* – договор, килешеү.

Халыҡ уны яҡлап шаулашты:

– Яңынан яҙһындар!

– Алдамаһындар!

Эштәр былай шау-шыуға киткәс, нисек тә ыҡҡа килтерергә кәрәк тип, берәүҙәр Һатлыҡ старшинаның ярһыуын баҫырға, икенселәре Кинйәне көйләргә тырышты.

Икеһен ике яҡтан өгөтләп-күндереп, һүҙҙе ыҡҡа килтерербеҙ тип өмөтләнһәләр ҙә, Һатлыҡ та, Кинйә лә үҙ һүҙендә ҡалды.

– Ҡатнаштырмағыҙ шуны. Бында беҙ, старшиналар, хужа! – тип ҡысҡырҙы Һатлыҡ, күҙҙәрен тозрайтып.

– Әһә, быныһы ҡулыңдан килмәҫ, – тине Кинйә, уның ҡаршыһына баҫып. – Баҫымсаҡ халыҡты күп баҫмалаттың.

Һатлыҡ елән иҙеүен тартҡылап, башын саңҡайтты, бүркен соңҡаһына этте.

– Һин үҙ башыңа ҡарышаһың! Тегендә киткең киләме?

– Баструкка ебәреүеңдән ҡурҡҡан юҡ, – тине Кинйә, уға табан бер аҙым атлап. – Ундай ҡәбәхәтлекте күп ҡылдығыҙ. Бирҙеғол яу сабып, халыҡты таланы, кешеләр ҡырҙы, ауылдар яндырҙы. Ә һин…

Кинйә әйтеп бөтә алманы, Һатлыҡ күҙҙәрен алартып, уға ябырылды:

– Тел тейҙерәһе булма уға. Бер гонаһһыҙ…

– Гонаһһыҙмы?! – Кинйә елән кеҫәһенә тығылды.

Бирҙеғол, Аптыраҡ, Йомағужа кеүектәрҙең, Тәфкилев менән Кирилловҡа ялсы, Соймонов менән Урусовҡа иш-ҡуш булып, халыҡҡа килтергән бихисап вәхшилектәре хаҡында бик оҙаҡ ваҡыттар буйы йыйып яҙылған яҙыуын, экстракт күсермәһен Һатлыҡҡа һондо:

– Бына бында һеҙҙең этлектәр йыйылған. Уҡырһың. Нисә ауылды яндырыуығыҙ ҙа, күпме кешене баструкка ебәреүегеҙ ҙә яҙылған. Хәҙер халыҡты һин баҫтың. Алдаған да һин, ришүәт алған да һин! Бөгөн килеп, бер көрәнкә[1] шәкәр, әсмүхә сәй менән халыҡты алдатып, ер һатмаҡсыһың. Әсәйҙе һатыу менән бер бит был! Юҡ, быныһы булмаҫ. Халыҡ һиңә юл ҡуймаҫ!

Уның һүҙҙәренән аңшайып киткәндәй, телен йотҡан төҫлө, Һатлыҡ, һүҙ әйтә алмайынса, бер ауыҡ күҙҙәрен тозрайтып ҡараны. Әллә аңлап, әллә аңламайынса, Кинйә биргән яҙыуҙы

---

[1] *Көрәнкә* – бер ҡаҙаҡ (ауырлыҡ үлсәүе).

ҡулында әйләндергеләне лә, ҡапыл иҫенә килгәндәй, уны аяҡ аҫтына быраҡтырҙы һәм, саҡ ҡына алғараҡ эйелеп, ҡамсыһына йәбеште. Кинйә унан күҙҙәрен алмай тыныс ҡына ҡарап торҙо, ә янындағылар, уны яҡлап, үҙ ҡамсыларын дәррәү күтәрҙеләр. Эштең ҙурға китәсәген күреп, управляющий Һатлыҡтың ҡулын тотоп, ситкә алып китте.

Твердышев әллә ни борсолманы. Былай ҙа ер бик күп алына. Тағы кәрәк тә, уныһын һуңынан күҙ күрер, әлегә башҡа юл юҡ, тип, купчийҙы күсереп яҙырға ҡушты, ә писарь яҙғансы, көтөп тороу ялҡытһа, теләгәндәр сәйен, теләгәндәр хәмерен эсеп алһын, тине. Үҙенең хәйләһе үтмәгәнгә ут йотһа ла, һиҙҙермәҫ өсөн, халыҡ алдында мөләйем булып күренергә тырышты.

Ер һатылды. Ошо йөрөкшәләр менән Өфөгә барып, өйәҙ канцелярияһында воевода алдында раҫларға ла, ер өсөн 184 һумлыҡ хаҡты ғына алаһы ҡалды. Быныһы дүрт йыл үткәс булды. Шул сағында әлегеләренә тағы йөҙ урындағы ер өҫтәлде.

## 8

Оҙаҡламай ҡуҙғала башланылар.

Эйәрҙәрҙең айылдары тартылды, аттарға атландылар. Кинйәнең ҡәрҙәштәре, дуҫ-иштәре бөтәһе бер яҡҡа ҡайтаһы түгел ине. Бара-бара таралышып бөттөләр тиерлек.

Атын үҙ мәйеленә генә ҡуйып, аҡрын ғына атлатты. Яңғыҙы ҡалғас, Кинйәгә бик яманһыу тойолдо. Хөсәйендең улы Барғу: «Әллә мин дә барайыммы?» – тип һорағайны ла, ни эшләптер ҡаршы килде. Хәҙер инде, эйәртәһе ҡалған икән, тип үкенде. Бер үҙенә юл да оҙон. Үҙе яманһыу, үҙе уйландыра. Күңеленә таш яткан төҫлө ауыр. Шул саҡ Кинйәнең ҡолаҡ төбөнән нимәлер жыйлап үтте. Ҡуңыҙ-маҙар түгел, әлбиттә. Уҡ һыҙғырыуы! Уҡ осто! Ҡурҡыныс барлығын һиҙенеп, ҡоралай туйралыҡҡа ырғыны, төлкө ҡуйы ҡыпыртҡа инеп китте. Көйгәнәк тә, ҡыйғыр ҙа юғалды. Ләкин уларға тоҫҡалмағанын белә ине Кинйә. Жыйлау тауышы артынан күҙен эйәртһә – осоп барған уҡ ялбыр имәндең олонона барып төртөлдө лә, ҡаҡсып, ергә төштө. Кинйә ҡапыл теҙгенде тартты. Күк айғыры үрә ҡарғыны һәм хужаһы ҡушҡанса яңғыҙ имән ағасын тирәләп әйләнде. Шул арала Кинйә ян-һаҙағын ҡармаланы, эйәр ҡашына бәйләнгән ҡороҡто яйлап ҡуйҙы. Ер

соҡорһоҙ, урман кейекһеҙ булмай, һаҡһыҙҙарға ул торғаны ҡәбер. Тиктәҫтән генә атмағандарҙыр. Ана, уғы ята. Ҡабырғаһын ике яҡтан үксә менән ҡыҫыуҙан ни эшләргә кәрәген белгән аттың ҡорһағы ергә тейә яҙып үтте, уҡ та эләктереп алынды. Башаҡһыҙ икән. Шуға күрә, ҡаҙалмайынса, ҡаҡсып төшкән. Ә бындайы үҙенсә хикмәтле. Уны алмай китеү – ҡурҡаҡлыҡ булыр ине.

Уҡтың керешкә ҡуя торған сатлы киҙеһе янында тамға бар. Уны танып: «Әһә, йәненә үткән икән!» – тип уйланы Кинйә. Юҡҡа ғына башаҡһыҙ уҡ осормаған. Уйҙары емерелгәнгә үсәп, бында саҡлы арттан аңдып килгән. Ҡон алырға итәме, ҡурҡытырға самалаймы?

– Әй, йортауай!.. – тип ҡысҡырҙы Кинйә, өҙәңгегә баҫыңҡырап.

Ҡашлауҙың арғы яғында шыптағай ҡыуаҡтар һелкенде, ат бышҡырғаны ишетелде. Асыҡҡа сыҡҡан һыбайҙың янынан ғына һайыҫҡандар шыҡырлашып осоп китте. Күк айғырҙы күргәс тә айғылдап кешнәп ебәргән бүртә бейә өҫтөндә Һатлыҡ Йәүкәев ултыра ине. Ағастар араһында тағы кемдер бар һымаҡ. Үҙеңде дошман ҡашынан йырағыраҡ тот, тиҙәр тиеүен, шулай ҙа Кинйә уға табан бер аҙ барып, тауыш ап-асыҡ ишетелерлек ерҙә туҡтаны ла ҡулындағы уҡты күрһәтте.

– Был ни ҡылғаның һинең, Һатлыҡ? Башаҡһыҙ уҡ осороу намыҫ юғалтыу түгелме?

– Һиңә шул кәрәк! Йөрәгемде ярһыттың.

– Ә, шулай тиһеңме? Тамғаң шулай бик арзан икән. Ҡанға – ҡан, тиергә, ҡарымта яһап, атайыңды үлтерҙемме мин? Әллә малыңды әйҙәп алып киткәнем бармы? Әйт!

– Телең тилсәле. Йөрәгемә бик күп уҡтар ҡаҙаның. Ҡономдо ҡайтармайынса ҡуймайым. Һүҙеңде кире ал!

– Халҡым мәнфәғәтенә әйткән һүҙ кире алынмаҫ.

– Улай булһа, миңә киҙәк бир!

Кинйә ҡалтыраманы. Киреһенсә, уның күҙ алдары яҡтырып китте. Ҡаршыһында торған һыбай ғына шул яҡтылыҡ өҫтөндәге ҡап-ҡара тап төҫлө. Ләкин нимә тиергә уға?! Борон-борондан үҙ-ара дошманлыҡ булған. Бик килешә алмағанда, ҡара-ҡаршы атышыу сигенә еткәндәр. Бындай саҡта ярһығаны беренсе булып атыу хоҡуғын алыу өсөн киҙәк һораған. Батыр намыҫын юйғыһы килмәгәне – күкрәк киргән... Кинйә лә Һатлыҡтың уғынан ҡурҡманы. Риза булмауы ғына ҡурҡаҡлыҡ, үҙенә генә түгел, атаһы Арыҫлан батыр өсөн дә ҙур ғәр-

лек... Әммә Һатлыҡтың уғы яҙлыҡмаç... Иçән ҡалһа, Кинйә үҙе лә... Шул саҡ бик ҡыҙыҡ һәм бик дөрөç булып күренгән бер уй килде...

– Һатлыҡ, һин күптәрҙең башын юйҙың. Хәҙер минеке кәрәкме? Әммә шуны бел: үләһе килгән сысҡан арыçлан балаһы менән шаярыр, тиҙәр. Әгәр ҙә ас бүре һымаҡ үтә ҡанһынһаң... киҙәк бирәм. Әҙерлә уҡ-һаҙағыңды!

Кинйә башҡа һүҙ әйтмәне, Һатлыҡтың ҡара яуыҙлығы сарпыуына йәне менән ҡаршылашып, бындай саҡтағы тәртип буйынса, түшен киргән килеш, шул туҡтаған урынында тик кенә ҡашҡайып ҡалды.

Һатлыҡтың бөтәһе лә әҙер ине, әлбиттә. Ул, кинәнеүенән ни эшләргә белмәйенсә, уҡ атымы ер ҡалдырыр өсөн кире китте. Ике араның оҙонлоғон билдәләү ҙә хәҙер уның иркендә. Бик алыç китеү файҙаһыҙ. Ә яҙа атыуынан ҡурҡып, бик яҡын тороу – хурлыҡ. Өçтәүенә, киҙәк Кинйәгә ҡалһа, ул да шул уҡ аранан атасаҡ бит әле.

Ул, туҡтап, Кинйәгә табан әйләнде лә, үсәү шатлығынан ярһып, атыуға яçҡана башланы. Янын ҡулына алды, уғын керешкә һалды. Ашыҡмай. Ниңәлер мыштырлай. Юҡ, мыштырламай ҙа, икеләнмәй ҙә... Кинйә уның тура килгәндә һүҙемде вөжүткә еткерәм[1] тип тырышҡанын да, оçта мәргән булһа ла, боронғо ырымдарға ышанып, ян-һаҙағына әйтемсәк әйтеүен дә белә. Алыçтан ирендәренең ҡыбырлағаны күренгән төçлө. Тартҡан саҡта сатнама, осҡанда майшайып китмә, бәлдәгәндә ҡырын теймә, тип үтенә, сихырлай һымаҡ.

Унан күҙҙәрен алмайынса, Кинйә уң ҡулын йөрәге аша һул яурыны өçтөнә ҡуйҙы. Ул Һатлыҡтың өҙәңгегә баçыңҡырап, уң яғына ҡайҡайыуын, керешенең кирелеүен күрҙе. Һәм ҡапыл һул яҡ күкрәгенә күçәк менән ныҡ итеп төрткән шикелле булды.

Уҡ йөрәккә ҡаҙаласаҡ икән. Уның өçтөнә ҡуйылған беләктәге ҡалҡанға туп-тура тейҙе. Еңен тиште лә, аҙыраҡ ҡаҡсып, тимер күлдәгенең өçкө ҡат дүңгәләгенә кереп ултырҙы. Атҡысының осо тәнен әҙерәк әсеттереп алды.

– Мәргән! – тип, Кинйә уҡты тартып алды ла, уның һигеҙ ҡырлы башағына ҡарап, үҙ һаҙағына һалып ҡуйҙы.

Быны күреп торған Һатлыҡ сәме ташыуынан шартлар сиккә етеште. Ҡалай тырышҡайны... Уғы ла уҡ ҡынамы!..

---

[1] *Вөжүткә еткереү* – ғәмәлгә ашырыу, ысынға еткереү.

Үтәнән-үтә сығырлыҡ. Шуның менән дә Кинйәне ҡолата алмауына әрнеп, тештәрен ҡыҫты. Ни булды был?! Әллә исмеәғзәм доғаһын уҡып өлгөрҙөмө?.. Ләкин ул атын шул урындан ҡуҙғатманы, артҡа боролоп күрмәлекһеҙ торған юлдашына күҙ һирпеп алды ла эйәр өҫтөндә кәүҙәһен турайтып ултырҙы, күҙҙәрен уҙағы[1] яғына төбәне.

Хәҙер киҙәк Кинйәнеке ине. Уның да әҙернәһе киреүле. «Атҡыйҙан йөрөгөрәк уҡ булмай» тип, арҡаһындағы һаҙаҡтан туҙ ҡолаҡлы бер уҡ алды ла, уны янға һалып, киҙеһен кейҙерҙе. Хәҙер шуның осона Һатлыҡты ҡуяһы ла кереш тартылып бөткәнсе киреп...

«Ҡарыуға – ҡарыу. Был бужмаҡты гөпсөтәм...»

Һәм шул саҡ Һатлыҡ өҫтөндә һауала ҡоҙғон күренде. Үҙенә емтек темһенеп осалырмы әллә ғүмере бөткәнме – ҡайҙандыр килеп сыҡты. Бер һулыш алырлыҡ ҡына ваҡыт эсендә Кинйә янын өҫкәрәк күтәрҙе. Ҡоҙғонға тоҫҡап, керешен тартты. Ҡош ялпылдап Һатлыҡтың алдына килеп төштө.

Был хәл Һатлыҡты бигерәк тә шашындырҙы. Иҫән ҡалыуына шатланаһы урында ул, ни ҡылырға белмәйенсә, өҙгөләнде. Атһа ни була һуң?! Һорап, киҙәк алғанһың икән – нәүбәт уҙағыңа еткәс, үҙең дә нишана булып торорға тейешһең. Ул һиңә атып, бурысын алғанға тиклем, уның рөхсәтенән тыш урыныңдан ҡуҙғалырға ярамай.

– Ниңә атманың? – тип һораны ул үҙенә яҡыныраҡ килгән Кинйәнән.

– Һинең ише көйгәнәккә[2] атҡансы, яғылбайға[3] атҡаным артыҡ. Шулай ҙа уғың бына бында... Һалып ҡуям. Ҡасан теләһәм, шунда үҙеңә сорғоторға хаҡлымын. Шуны бел!

Быны ишеткәс, Һатлыҡтың күҙҙәре аларҙы.

– Хәҙер ат, хәҙер! – тип ҡысҡырҙы ул күлдәгенең үңербаҫын сисә-сисә.

Шул саҡ һырт ҡырласындағы ҡыуаҡтар артынан бер нисә һыбайлы күренде. Кинйә уларҙы алыҫтан уҡ таныны: икәүһе туғандары – уның өсөн үлә яҙырлыҡ Ҡотлогилде менән тынғы белмәҫ Барғу. Ә өсөнсөһө... Ҡасҡын Һамаров.

Улар, бындағы хәл-әхүәлде һорашып тормаҫтан, бөтәһен дә аңланылар. Юшатыр буйында уҡ улар, Кинйә менән Һатлыҡ-

---

[1] *Уҙаҡ* – икеңдең береһе.
[2] *Көйгәнәк* – сысҡан тибеүсе ҡош.
[3] *Яғылбай* – турғай тибеүсе ҡош.

тың бик ныҡ әйтешеп алыуынан берәй төрлө тоҙаҡ ҡороп ҡуйыуҙары бар, тип шиккә төшкәйнеләр. Бергә ҡайтаһы ине. Кинйә үҙе ҡаршы килде. Ә инде Һатлыҡтың да бөтә үҙ кешеләренән айырылып, яңғыҙы шымтым ғына шул яҡҡа китеүен белгәс, былардан күҙ яҙҙырмайыҡ әле тип, арттарынан ҡыуа төшкәйнеләр. Кинйәнең киҙәк биреү ваҡытына өлгөрмәһәләр ҙә, имен-аман булыуына бик ныҡ ҡыуаныштылар. Һатлыҡҡа асыуҙары ташты. Бына шунда үҙен уратып алып, баҫҡан урынынан ҡуҙғалырға ихтыяр бирмәйенсә, өҙгөләп, анау ятҡан ҡоҙғондоң иштәренә емтек итеп ҡалдырырҙар ине. Юҡ, бындай хәлдең йолаһын боҙоу килешмәй.

– Ниңә үҙ киҙәгеңде әрәм итеп ҡоҙғон атаһың? – тип ярһыны Барғу. – Ат әйҙә!

Кинйә әҙернәһен ян-һаҙаҡҡа һалып ҡуйғайны инде.

– Йәшәй бирһен, – тип тынысландырҙы ул дуҫтарын. – Былай ҙа башҡорт ҡаны күп ҡойолдо. Әммә киҙәге миндә. Беҙгә тағы бер яуызлыҡ ҡылһамы... Үҙенең уғы ана шул ҡоҙғон урынына үтәләй тишер. – Кинйә, әйләнеп, һаман да ҡуҙғалмай сыпайып торған Һатлыҡҡа текләне. – Йә, алымһаҡ, ни эшләп тораһың аңра үгеҙ һымаҡ? Бар, ысҡын!

Һатлыҡ шунда уҡ һырт биреп, ҡыуаҡтар араһына инеп юғалды.

* * *

...Халыҡ араһында йөрөгән хәбәрҙәр хәҙер имеш-мимеш кенә түгел ине. Ҡайҙа барма – яһаҡ, тоҙ хаҡында һөйләйҙәр, аҫабалыҡтан ҡалдыҡ, ергә хужа булмабыҙ, тоҙона ҡайҙан аҡса табырбыҙ, тип ҡан ҡайғыралар.

Уларҙың асыуын ҡабартып, ауылдан ауылға, йәйләүҙән йәйләүгә офицерҙар, һалдаттар йөрөнө, яңы фарманды уҡып, ҡаҙна мөгәзәйҙәренән тоҙ һатып алырға ҡуштылар. Улар килгән бер ерҙә шау-шыу сыҡмай ҡалмай ине. Халыҡ – ҡаҙыҡҡа, һалдаттар мылтыҡҡа тотона, ҙур ғауға ҡубырға етешә. Бына-бына тоҡанырға торған ут ил ағаларының тырышлығы менән ләүкемәйенсә ҡала ине.

Ә нимә эшләргә?

Кинйәнең уйлауынса, һис кисекмәҫтән прошениелар яҙырға, һорарға, талап итергә кәрәк һымаҡ ине. Яһаҡты бөтөрөүҙең аҙағы ерһеҙ ҡалыуға килтерәсәген старшиналар аңлаһындар.

Һүҙ үтерлектәре менән һөйләшеп, уны элекке тәртиптә һаҡлау хаҡында губернаторға яҙһындар. Халыҡтың талабына бигүк ҡолаҡ һалырға йыйынмаһалар ҙа, уның тын алышы яҙғы ташыу ваҡыты һымаҡ икәнен күрмәй булмаҫтар төҫлө.

Был хаҡта һөйләп биргәс, атаһы баш сайҡап ҡуйҙы.

– Белмәйем, файҙаһы тейерме икән? Неплюев үҙенең хәйләһен үҙгәртер өсөн тырышмағандыр.

– Улайһа, халыҡ яу ҡуптарыр, – тине Кинйә, көйәләнеп.

Арыҫлан уйға ҡалды. Башҡа сара юҡ. Ятып ҡалғансы, атып ҡал, тигәндәй, улы әйткән эш тә, ихтимал, ниндәйҙер файҙа биреп ҡуйыр.

Әйтәһе һүҙҙе әйтмәй ҡалырға ярамай, тип, Кинйә тәүҙә үҙе ҡағыҙ-ҡауырһынға тотондо.

Һүҙ артынан һүҙ ҡағыҙға ятты. Уйҙары алға йүгерҙе... Рәсәйгә табиғ булған башҡорт халҡы яһаҡ түләүҙе үҙе өсөн ҙур бәхеткә һанай ине... Уның изге күңелен аңламаусы йортауайҙарҙың уйлап еткермәйенсә яҙылған һүҙе менән яһаҡ түләү туҡтатылды... Халыҡ күңеле болғанды. Рәсәй иле өсөн былдай эштә насарлыҡтан башҡа һис ни юҡ... Ә бит улар Рәсәй батшаларының батыр ҡолдары. Саҡырғанда, тап-тап булып Азов, Ҡырым, Швед походтарына барҙылар. Унда күрһәткән ҡаһарманлыҡтары бөтә илгә мәғлүм... Фарман килһә, алдағы көндәрҙә лә ат ҡушарлап, ян-һаҙаҡтарыбыҙҙы алырбыҙ. Беҙҙең бындай тоғро халҡыбыҙға ышанып, уның баш ороуын миһырбанлыҡ менән үтәгеҙ...

Уйҙар буталды. Үҙе яҙыу бер хәл. Тағы кемдәрҙән яҙҙырырға?.. Ҡасҡын Һамаров вәғәҙә итте... Шунан?.. Юрматылар тыңларҙар. Әлибай ҙа атаһы исеменән яҙҙыртып алыр... Иҫәпләй-барлай торғас, ул байтаҡ ҡына старшиналарҙы күҙ уңынан үткәрҙе. Тыңларҙармы-юҡмы, әммә был хаҡта әйтеп, ҡолаҡтарына төшөрөргә кәрәк.

Аҙна-ун көн эсендә, фәлән-фәлән кешеләргә юлыҡтырырға тип, ул байтаҡ ҡына кешеләргә хаттар оҙатты, яҡын-тирәгә үҙе барып, күҙмә-күҙ һөйләште. Күптәр вәғәҙә итеп ҡалдылар.

...Һәм, күп тә үтмәне, Кинйәне күрергә тип, һыуын-ҡыпсаҡтан, сәңкемдән килделәр; түңгәүерҙәр, үҫәргәндәр, бөрйәндәр ҙә уға юл тапты. Олоһо оло башы менән, йәшерәктәре кесе көйө һүҙенә илтифат итеп килеүҙәренә Кинйәнең дәрте үҫте. Борсолоуҙары, тырышлығы бушҡа булмаҫ төҫлө. «Ҡуҙғалдылар», – тине Кинйә. Утын араһындағы ут берсә ләүкеп киткәнсе генә күренмәй шул.

### Фонохрестоматия

Актёр башҡарыуында тыңлағыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Әҫәрҙе тулы килеш уҡығыҙ. Кинйә уҡыған китаптарҙың исемдәренә ҡарап, уның уҡымышлылыҡ кимәлен, ниндәй телдәрҙе белеүен уҡыусығыҙ менән бергә асыҡлап ҡарағыҙ.
**2.** Унда аталған китаптарҙың ҡайһылары тураһында ишеткәнегеҙ бар?

### Интернеттан мәғлүмәт табабыҙ

**1.** Башҡортостанда Рус дәүләтенә яһаҡ түләү ҡасан бөтөрөлә?
**2.** Яһаҡ түләүҙе халыҡ ни өсөн ҙур бәхеткә һанаған?
**3.** Әҫәрҙә телгә алынған исемдәрҙең күбеһе – ысынбарлыҡта йәшәгән шәхестәр. Уларҙың ҡайһыларын беләһегеҙ?

### Төркөмдә йәки парлашып эшләгеҙ

Был текст – өс китаптан торған романдан өҙөк. Шуға күрә уны һеҙҙең йәштә тиҙ генә аңлауы еңел түгел. Бергәләп әңгәмә ҡороп, ҡайһы дәүер тураһында һүҙ барғанын, ул заманда Башҡортостанда ниндәй хәл-ваҡиғалар булғанын асыҡлағыҙ. Күп китаптар уҡыу Кинйәне ниндәй ҡарарға килтерә? Был маҡсатын ул тормошҡа ашыра аламы?

## Әйтештәр

Йырауҙар һәм сәсәндәр ижадындағы әйтеш жанры – ике кешенең шиғри бәхәсе. Ул үҙ мәлендә үк төплө, мәғәнәле һорау биреүҙе, уға тапҡыр, кинәйәле, йөкмәткеле яуап табыуҙы талап итә. Бәхәселәр көсөргәнешле уйлана, шул уйланыу һөҙөмтәһе поэтик ижад булып яңғырай. Уйлап сығарыу булған ерҙә авторлыҡ бар. Әйтеш, ғөмүмән, ауыҙ-тел ижадсыһының оҫталыҡ кимәлен билдәләүсе жанр, импровизаторлыҡ сәнғәтенең иң юғары нөктәһе. Әгәр оҙайлы ваҡыт үтеү менән авторҙары онотола ҡалһа, әйтеш фольклор репертуарына инеп китә. Башҡорт халыҡ ижадының репертуарында «Ил тигәндең кеме юҡ», «Йомаҡ», «Ике сәсән» кеүек әйтештәр йәшәп килә. Ә уларҙың һәр ҡайһыһының тәү башлап сығарыусылары булған. Тәүгеһе – Байыҡ Айҙар сәсәндең Салауатҡа мөрәжәғәтенән, икенсеһе – Мәхмүт сәсәндеке, өсөнсөһө – Һабрау сәсәндең йомағы һәм Иҙеүкәйҙең яуабы.

Әйтеш донъя халыҡтары ауыҙ-тел шиғриәтендә борон-борондан үҙ аллы жанр булып формалашҡан. Беҙҙең замандан

биш мең йылдар элек йәшәгән шумер халҡының әҙәбиәтендә һүҙ оҫталарының тәбиғәт донъяһындағы, әйберҙәр, күренештәр араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡтың (ҡыш йәки йәй, мал йәки иген, ҡош йәки балыҡ, ағас йәки ҡамыш, көмөш йәки бронза, тәпке йәки һабан, малсылыҡ йәки игенселек) ҡайһыһының мәғәнәһе һәм файҙаһы ҙурыраҡ икәнлеген асыҡларға тырышыуы әҙәби бәхәскә, йәғни диспутҡа юлыҡтырған: XIX быуат ғалимы А. Н. Веселовский шағирҙар ярышына бәйле бәхәс жанрын беҙҙең эраға тиклемге XIII–V быуаттарға, боронғо грек мәҙәниәтенә, дөйөм Һинд-Европа этабына алып барып тоташтырып ҡуя.

Башҡорттар менән ҡәрҙәш телле төрки халыҡтарының һүҙ сәнғәтендә был жанр бик оҙайлы ғүмер кисерә, беҙҙең эраның икенсе мең йыллығын тотош үҙ эсенә ала.

Шиғри бәхәскә инеүселәр ҡуҙғатҡан һүҙҙең йөкмәткеһенә ҡарап, әйтештәрҙе төрлө төркөмгә, үҙенә күрә «жанр формаларына» бүлергә мөмкин:

1. Ил, халыҡ, ырыу тарихының көсөргәнешле осорҙарында мөһим мәсьәләләрҙе ҡан ҡойошһоҙ, айыҡ аҡыл, тыныс юл менән хәл итеүгә йүнәлдерелгән, етди ижтимағи-сәйәси мәсьәләләр ҡуҙғатылған поэтик бәхәстәр.

2. Ҡаршы тороусы бәхәссенең аҡыл тапҡырлығы, сәсәнлек оҫталығы кимәлен билдәләүгә йүнәлтелгән йомаҡлы әйтештәр.

3. Йыш ҡына һуғыш ҡырында яугирҙар дошманға ҡаршы шиғри һүҙ менән ҡаршы торған. Бының традициялары ла бик боронғо, һүҙҙең серле тәьҫир итеү көсөнә ныҡлап ышаныу ваҡытына барып тоташа. Ике яугирҙың һүҙ көрәштереүе формаһындағы әйтеш төрлө төбәктәрҙә оҙайлы ваҡыт йәшәүен дауам иткән. Бындай әйтеш башҡарылған саҡта һүҙ оҫталарының шәхси һыҙаттары нығыраҡ асылған: дошманды битәрләп, уның яугирлыҡ рухын тарҡатыу бәхәссе өсөн үҙенең абруйын күтәреү сараһы ла булып хеҙмәт иткән.

4. Егет менән ҡыҙҙың мөхәббәт әйтеше. Бөтә ғашиҡ йәрҙәрҙең уртаҡ күңел торошон сағылдыра алырлыҡ итеп халыҡ алдында әйтешеү өсөн егет менән ҡыҙҙың икеһенең дә һүҙ оҫтаһы булып тыуыуы шарт. Билдәле инде, ундай тап килеүҙәр бик һирәк. Шулай ҙа башҡорт ауыҙ-тел әҙәбиәтендә әйтештең ошо «жанр формаларының» дүртеһен дә таба алабыҙ.

Түбәндә әйтештәрҙең ҡайһы бер өлгөләрен бирәбеҙ.

* * *

Бер тигәс тә ни яман?
Беҙҙең өсөн бей яман.

Ике тигәс тә ни яман?
Илһеҙ ҡалған ир яман.

Өс тигәс тә ни яман?
Өлгөһөҙ бескән тун яман.

Дүрт тигәс тә ни яман?
Дәртһеҙ булһаң – шул яман.

Биш тигәс тә ни яман?
Бишектәге балаң илап
ҡалһа – шул яман.

Алты тигәс тә ни яман?
Атылып барған атың
абынһа – шул яман.

Ете тигәс тә ни яман?
Етем ҡалһаң – шул яман.

Һигеҙ тигәс тә ни яман?
Һикһән йәшлек ҡарт әсәң,
Һуҡыр күҙен секрәйтеп,
Ҡатҡан билен бөкрәйтеп,
Һыу ташыһа – шул яман.

Туғыҙ тигәс тә ни яман?
Туҡһан йәшлек ҡарт атаң,
Тумыртҡалай туҡылдап,
Ябалаҡтай ухылдап,
Утын ҡырҡһа – шул яман.

Ун тигәс тә ни яман?
Ун бармағы ҡамыштай,
Утыҙ теше көмөштәй,
Уң бите айҙай балҡыған,
Һул бите ҡояштай яҡтырған,
Уңған булған һылыуың
Илап ҡалһа – шул яман.

Ун бер тигәс тә ни яман?
Уҡ-һаҙаҡлы батыр ир,

Ыҡталған аттан йығылып,
Аяҡ-ҡулы ҡаймығып,
Яуҙан ҡалһа – шул яман.

### Һорауҙар һәм эштәр

Был әҫәр – әйтештең халыҡ араһындағы иң ябай формаһы. Унда ниндәй мөһим мәсьәләләр ҡуҙғатылыуына иғтибар итегеҙ.

### Ижади эш

Ошо әйтештең ҡалыбын файҙаланып, үҙ-ара әйтешеп ҡарағыҙ.

## АҠМЫРҘА СӘСӘН МЕНӘН ҠОБАҒОШ СӘСӘН ӘЙТЕШЕ

*(Өҙөк)*

А ҡ м ы р ҙ а:

Яманға ҡаршы тулҡынған,
Яҡшыға ҡарап урғылған,
Диңгеҙҙән дә ятыуылы,
Уралдан да артыулы
Нимә булыр, әйт шуны,
Сәсән булһаң, тап шуны.

Булаттан үткер, яу ҡыйыр,
Ҡан сығармай яу һуйыр,
«Мин-мин» тигән, «мин» тигән,
«Мин, үҙем мин – хан», тигән,
«Бар фарманым – дан», тигән
Хандан ҡурҡмаҫ бар микән, ау,
Бейҙән өркмәҫ бар микән?

Ағыр һыуҙы аҡтырмаҫ,
Юлына туҙан яткырмаҫ,
Төнлөгөн ҡурҡып яптырмаҫ,
Атанан күреп уҡ юнған,
Иркә үҫеп ир булған,
Толпар менеп ил күргән
Хандан ғәййәр кем булыр, ау,
Бейҙән тайяр[1] кем булыр?

[1] *Тайяр* – әҙер, әҙер торған.

Ҡобағош:

Донъяла иң тулҡынлы,
Ҡайнап ағыр упҡынлы,
Юл да бирмәҫ артыулы,
Диңгеҙҙән дә ятыулы –
Туңмай ятҡан ил зары, ау,
Тынмай аҡҡан ил зары.

Булаттай үткер, яу ҡыйыр,
Ҡан сығармай яу һуйыр,
Ил сигендә дан алған,
Ил тышында һан алған,
Ханға ҡаршы уҡ булған,
Бейгә ҡаршы ут булған –
Сәсән булмай, кем булһын,
Сәсәнгә тиң кем булһын:
Яманлыҡты яҡламаҫ,
Дошман хәтерен һаҡламаҫ,
Яҡшылыҡты һөйөр ул,
Илдең зарын һөйләр ул,
Яуға саҡырып өндәр ул,
Дауға саҡырып өндәр ул.

Атанан күреп уҡ юнған
Яуҙа үҫкән ир булыр,
Таянғаны ил булыр,
Ханға ҡаршы яу булыр, ау,
Ханға унан ҡан булыр.

Тау ярған да халыҡ булыр,
Таш ярған да халыҡ булыр,
Мәңге юлы ерекмәҫ,
Өҫтөнә туҙанятҡырмаҫ,
Батыр сапҡан юл булыр, ау,
Данды таҡҡан шул булыр.
Һыуҙар ҡайнап аҡмаҫтай,
Тулҡынын да ҡаҡмаҫтай
Тынған сағы бер булыр, ау,
Ул сағы ла шул булыр:
Илен яҡлап яу сапҡан,

Ерен һаҡлап дан тапҡан,
Ҡанһыраған батырҙың
Ҡанын йыуған саҡ булыр, ау,
Ҡанын йыуған саҡ булыр.

**Фонохрестоматия**

Актёрҙар башҡарыуында тыңлағыҙ.

**Хәтергә төшөрәбеҙ**

Дәреслектә әйтештең бер генә өлөшө бирелгән. Бында ошо сәсәндәр йәшәгән замандың иң үҙәк мәсьәләләре ҡуҙғатыла. Ниндәй мәсьәләләр икәнен асыҡлағыҙ.

**Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ**

Башҡорттарҙа ырыу башлығына һәр саҡ оло ихтирам менән ҡарағандар. Ә нишләп сәсәндәр әйтешендә хан тиҫкәре һыҙаттары менән генә телгә алына?

**Һорауҙар һәм эштәр**

«Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсән әйтеше»нән өҙөк ятлағыҙ (уҡытыусы һайлауы буйынса).

## Ҡобайырҙар

Ҡобайырҙың башҡорт һүҙ сәнғәте ғилемендә ике мәғәнәһе бар. Беренсеһе – «Урал батыр» һымаҡ эпостар. Икенсеһе – сәсәндәрҙең фәлсәфәүи-дидактик йөкмәткеле сығармалары. «Ҡобайыр» һүҙенең аңлатмаһына ҡарата үҙ ваҡытында ғалимдар «дан йыры», «маҡтау», «данлау», «дан йырлау», «изге йыр» төшөнсәләрен аңлата тигән һығымтаға килде. Беҙгә бөгөн билдәле булған ҡобайырҙарҙың төп асылы нимәгәлер дан йырлауға ҡоролмаған. Тыуған илгә, тыуған төбәк тәбиғәтенә арналғандарында ла, маҡтау, данлауҙан бигерәк, шул илдең, төбәктең хозурлығы, байлығы, кешеләре, социаль-ижтимағи хәлдәре хаҡында фәлсәфәүи уйланыуҙар өҫтөнлөк итә. Ҡобайырҙар бөтәһе лә профессиональ ижадсы – йырау йәки сәсән тарафынан сығарылған. Хәҙерге ваҡытта халыҡ ижады фондына күскән ҡобайырҙарҙың бөгөнгө хәлендәге текстарының конкрет авторҙары булған; улар беҙгә таныш һүҙ оҫталары булыуы ихтимал.

Был жанр, әйтеш кеүек үк, туранан-тура халыҡ, тыңлаусы алдында тыуа. Өндәшеү, мөрәжәғәт рәүешендә ижад ителеүе хаҡында йөкмәткеһе лә, стиле лә бик асыҡ һөйләй. Ҡобайырҙы һәр кем, хатта һәр һүҙ оҫтаһы сығара алмай. Заманға, уның ҡатмарлы ағышына, хәл-ваҡиғаларына, халыҡтың көнитмешенә, шәхестәрҙең эш-ҡылыҡтарына баһа бирерлек, аҡыл өйрәтерлек исемең, абруйың булырға тейеш. Ҡобайырҙарҙың телмәре үҙ заманы менән тығыҙ бәйле; әйтер һүҙе – бик киң, инде бына бөгөн осона сығып ҡуймаһаң, янып барғандарынан алып мәңгелектәренә тиклемде үҙ эсенә ала. Ҡобайырҙа бөгөнгөһө лә мәңгелек: һүҙ үҙ заманының йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, әхлаҡ-этик нормалары, тормош-көнкүреш тәртиптәре, уларға тоғролоҡ ҡағиҙәләре хаҡында бара. Ил именлеге, йәшәү иманы һағында тороу вазифаһын иңенә һалырға баҙнат иткән аҡыл эйәһенең – сәсәндең үҙ образы ла ҡобайырҙа сағылмай ҡалмай. Ҡобайыр – халыҡтың яратҡан, инанып тыңлаған жанры, тормошто фәлсәфәүи танып белеү ҡанундары, тиһәк тә ярай. Йыш ҡына йырау йәки сәсән әҫәрҙә үҙ геройы менән бергә йәшәй, үҙе кәүҙәләндергән хәл-ваҡиғалар араһында ҡайнай. Кем исеменән һүҙ барғанлығын – лирик героймы әллә сәсән үҙеме икәнлеген ҡапыл ғына айырып алыуы ла ҡыйын.

Ҡобайыр, ғәҙәттә, һәр юлдың етешәр ижеккә ҡоролоуына нигеҙләнә. Строфалары, бер бөтөн фекерҙең тамамланғанса бирелеүенә ҡарап, ике юлдан алып тиҫтәләгән юлға етеүе ихтимал. Халыҡ ижадында иң ҙур ҡобайыр строфаһы 24 юлды тәшкил итә. Ҡобайыр юлдары мәҡәл-әйтемдәргә торошло тапҡыр, кинәйәле һүҙҙәр теҙмәһенән тора.

## ИЛ ТИГӘНДЕҢ КЕМЕ ЮҠ

*(Өҙөк)*

Ил тигәндең кеме юҡ,
Кеме юҡ та ние юҡ:
Ҡарты ла бар был илдең,
Йәше лә бар был илдең,
Туғы ла бар был илдең,
Асы ла бар был илдең.
«Бир»ҙән бүтәнде белмәгән
Бейе лә бар был илдең;

Кешенең зарын ағыҙған
Йыры ла бар был илдең,
Көйө лә бар был илдең,
Ҡыҙы ла бар был илдең,
Наҙы ла бар был илдең;
Ҡыҙ алам тип туҡмалған
Таҙы ла бар был илдең.

### Һорауҙар һәм эштәр

Ҡобайырҙың йөкмәткеһе менән ентекләп танышығыҙ һәм унда ниндәй мәсьәләләр ҡуҙғатылыуына иғтибар итегеҙ.

### Төркөмдә йәки парлашып эшләгеҙ

Ни өсөн тап ошо мәсьәләләрҙең үҙәккә ҡуйылыуы хаҡында әңгәмә үткәрегеҙ.

### Интернеттан мәғлүмәт табабыҙ

Халыҡ ижадында үҙ аллы ҡобайыр булып йөрөгән был әҫәр – Байыҡ Айҙар сәсәндең Салауатҡа әйткән телмәренең бер өлөшө. Шул телмәрҙең тулы тексын табып уҡығыҙ һәм мәшһүр сәсәндең Салауатҡа мөрәжәғәтендә тағы ла ниндәй хәлдәргә ҡағылғанын асыҡлағыҙ.

## САЛАУАТ БАТЫР

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Яуға саҡырып өндәгәндә
Тауыштары көр ине;
Ҡаршы килгән яуҙарға
Ҡаршы сығыр ир ине,
Ҡаршы сығыр ир ине.
Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Дошман менән алышҡанда
Ил эсендә бер ине;
Халҡы өсөн көн ине,
Дошман өсөн төн ине,
Дошман өсөн төн ине.
Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,

Яурынына уҡ тейһә,
Себен тешләй, тир ине;
Күкрәгенән ҡан сыҡһа,
Тирем сыға, тир ине, ау,
Тирем сыға, тир ине.

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Ҡобайырҙы тасуири уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Халыҡ Салауаттың батырлығын, яугирлығын ниндәй һүрәтләү саралары аша бирә?
**2.** «Халҡы өсөн көн ине,
Дошман өсөн төн ине» тигән юлдарҙың мәғәнәһен аңлатығыҙ.

*Мостай КӘРИМ*

## СӘСӘН

Йылдар кеүек оҙон ине төндәр,
Хатта яҙғы төндәр...
Әсәләрҙең баш аҫтында ул саҡ
Ҡайғы ине – мендәр.
Яу ҡырынан үлем хәбәрҙәрен
Ташый ине елдәр,
Хатта яҙғы елдәр...

Йылдай оҙон, ерҙәй ҡара төндә –
Хәтәр мәлдә сәфәр –
Дөм ҡараңғы тын ауылға инде
Ил гиҙеүсе сәсән,
Халыҡ күңеленә өмөт сәсеп,
Йыр игеүсе сәсән.

Туҡтаны ла урам осонда ул
Тәү тәҙрәне ҡаҡты.
Берәү һикереп тороп ишек асты,
Берәүһе шәм яҡты.
Һәм бер аҙҙан Йыһан киңлегенә
Сәсән йыры аҡты.

Йырлап уҙҙы сәсән өйҙән өйгә,
Өйҙәрҙә ут янды.
Өмөт танһыҡлаған кешеләрҙең
Танһыҡтары ҡанды,
Күҙҙәренән берсә нур бөркөлдө,
Берсә йәштәр тамды.
Танһыҡтары ҡанды…

Юлсы китте. Әммә шәмдәрҙә ул
Ут ҡалдырып китте.
Юҡ, шәмдәрҙе түгел! Йөрәктәрҙе
Тоҡандырып китте.
Ҡара төндә тик бер кеше күпме
Нур ҡалдырып китте.

### Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ

**1.** Шиғырҙа ни өсөн автор сәсән образын һуғыш ваҡытына бәйләп бирә?
**2.** Әҫәрҙәге һүрәтләү сараларына иғтибар итегеҙ, уларҙың кинәйәле мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.

### Хәтергә төшөрәбеҙ

Мостай Кәрим – Башҡортостандың Шишмә районынан. Авторҙың замандашы булған, ошо яҡтарҙа йәшәгән ниндәй сәсәнде беләһегеҙ?



# Яныбай
# ХАММАТОВ
## (1925–2000)

Яныбай Хаммат улы Хамматов Башҡортостандың Белорет районы Исмаҡай ауылында тыуған. Ул тәүҙә тыуған ауылының башланғыс мәктәбендә уҡый, аҙаҡтан Инйәр урта мәктәбенә уҡырға китә. Ҡышын аслы-туҡлы йәшәй, йәйен йәштәштәре менән бергәләп Әүжән приискыһында алтын йыуа.

1940–1942 йылдарҙа Юғары Әүжән алтын приискыһында эшләй. Алтын эҙләүселәргә бағышлап шул йылдарҙа тәүге шиғырҙарын яҙа. 1942–1946 йылдарҙа армияла хеҙмәт итә. Хеҙмәттән ҡайтҡас, кире алтын приискыһында, райком аппаратында эшләй. 1949 йылда «Башзолото» тресына күсә. Аҙаҡ Өфөлә өлкә партия мәктәбен һәм 1956 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлай.

Яныбай Хамматов әҙәбиәттә романсы булараҡ танылды. «Бөртөкләп йыйыла алтын», «Аҡман-тоҡман», «Йәшенле йәй», «Юрғашты», «Руда» романдарын яҙа. Был әҫәрҙәренең беренсе китабы өсөн яҙыусы 1994 йылда Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды.

Роман жанры өлкәһендәге яңы уңыштарының береһе булып, башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан һуғышындағы батырлыҡтарын сағылдырған «Төньяҡ амурҙары» тигән тарихи романы барлыҡҡа килде. Яныбай Хамматовтың байтаҡ романдары тарихи темаға бағышланған һәм тарихи документтар нигеҙендә яҙылған.

1966 йылдан Яҙыусылар союзы ағзаһы.

## ТӨНЬЯҠ АМУРҘАРЫ

*(Романдан өҙөк)*

1812 йылдың март башында Беренсе башҡорт полкы Неман йылғаһына етеп, Рәсәйҙең көнбайыш сигендә туҡталды һәм Гродно ҡалаһындағы Дон казактары атаманы Матвей Иванович Платов корпусына буйһондоролдо.

Бер аҙ ваҡыт уҙғас, Беренсе башҡорт полкын тулыландырыу өсөн Башҡортостандан ебәрелгән кешеләр, эйәрле аттар, тейешле кейем-һалым һәм аҙыҡ-түлек тейәгән ылауҙар килеп етте. Яҡташтарын күреүгә һәм Уралдағы яңылыҡтарҙы белеүгә шатланған Беренсе полк яугирҙары оҙаҡ тынысլана алманылар.

Улар менән бергә күңел асырға Буранбайҙың ғына ваҡыты булманы. Башҡортостандан ебәрелгән барлыҡ байлыҡты йөҙ башлыҡтарына бүлеп биреп, ваҡ-төйәк эштәрҙе башҡарғансы, көн үтте лә китте. Кис, эштән әҙерәк бушағас, ҡыҙыу итеп ут яғылған урында өйөлөшөп ултырыусы яҡташтары эргәһенә барғас, яңы килеүселәр араһында Йәнтүрәне осратты.

Яҡында ғына ҡыштыр-мыштыр атлап килгән кеше аяғы тауышын ишетеп, Буранбай һиҫкәнде.

– Атаҡ, еңгәм дә бында ла баһа!

– Бында шул, – тине Йәнтүрә, аҡланғандай булып. – Минән ҡалырға теләмәгәс, ҡалайтайым? Еңгәң холҡон белмәйһеңме ни? Ул шайтан, ут бисә бит! Ни күрһәк тә, ҡап уртаҡ, тип бик көсләшкәс, алып киттем бергә.

– Көсләштем шул. Бер ҙә танмайым. – Йәнтүрәнең ҡатыны ауыҙ йырып йылмайҙы. – Иҫәнме, ҡәйнеш? Сәй ҡайнап сыҡты. Әйҙә беҙҙең менән бергә сәй эсергә!

Буранбай риза булды.

Иркенләп ултырып сәй эсергә тура килмәне Буранбайға. Уны корпус штабынан ҡайтҡан полк командиры майор Лачин саҡыртты.

Кешеләр йоҡларға таралышып, тауыш-тын баҫылғас та, Буранбай менән майор Лачин урындарынан ҡуҙғалманы. Улар бер-береһен ныҡлап белергә, уй-хыялдарын аңларға тырышып, аулаҡ саҡта серләшеп ҡалыуҙы кәрәкле һананылар. Тәүҙә үтә тәкәббер, ҡырыҫ, үҙ һүҙле һымаҡ күренгән майор Лачин әңгәмә барышы ыңғайында Буранбайҙың оло ихтирамын яулап алды. Ә командирҙар өсөн бер-береһен аңлашыу иң мөһим нәмәләрҙең береһе түгелме ни?

Һүҙҙән һүҙ сығып китеп, майор Лачин үҙенең башҡорт ғаиләһендә тыуыуын, ата-әсәһе бер алпауыт тарафынан суҡындырылғандан аҙаҡ, Ласынов йәки Ыласынов фамилияһын алмаштырып, Лачин булып китеүен һәм хәрби училищеға уҡырға ебәрелеүен, уны уңышлы тамамлағас, французларға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнашыуын, шул йылдарҙа уҡ атаман Платов менән танышыуын, өс тапҡыр ҡаты яраланыуын әйткәс, Буранбай һуғыш тәжрибәһе туплаған полк командиры менән бер утта янырға ла, һыуға сумырға ла әҙер ине инде.

Полк командирын оҙатып, ятҡандан һуң да Буранбай бик оҙаҡ йоҡлай алмай интекте. Ул төндә түгел, иртәгеһе көндә лә, майор Лачиндан ишеткән һүҙҙәрҙән тейешле һығымта яһарға тырышып, һаман уйланды.

Ошондай яҙғы гүзәл, матур осорҙа Буранбайҙың йөрәге ниңәлер тыныс түгел, нимәлер уны һәр саҡ борсолдора, өйкәй, тәбиғәт күренеше менән тулыһынса ләззәтләнергә ҡамасаулай һымаҡ. Ниңә улай икән? Әһә, иҫенә төштө. Майор Лачиндың тел төбөнән һиҙелеүенсә, французлар менән һуғыш башланырмы икән ни? Һуғыш… Ҡайһылай ят, аҡылға һыймаҫтай ҡәбәхәт һүҙ! Кемгә кәрәге бар уның? Һуғыш сыҡһа, донъяның йәме бөтөүе борсолдормаймы икән ни уларҙы? Ошондай күркәм тәбиғәт күренешен төтөнлө ҡоромға томалап, кешеләрҙе генә түгел, һауала сыңлаусы һабан турғайы кеүек ҡош-ҡорттарҙы ла ҡырасаҡ, һәләк итәсәк, әрәмәлектә ихлас күңелдән һайраған һандуғас моңо ла өҙөләсәк…

Франция менән төҙөлгән Тильзит солохо ныҡ булманы. Наполеон Бонапарт, Европалағы барлыҡ илдәрҙе тиерлек үҙенә буйһондороп, Рәсәйгә ҡаршы асыҡтан-асыҡ һуғышҡа әҙерләнде.

Рәсәй империяһы борсоулы көндәр кисерҙе.

1812 йылдың июнь айы урталарында Наполеон ғәскәренең төп көсө Висла һәм Неман йылғалары буйында тупланыуы Петербургтағы һәр кешегә билдәле ине инде.

Ил сиге буйындағы рус ғәскәрҙәре дошман менән дәһшәтле алышҡа әҙерләнде.

Быңдай көсөргәнешле ваҡытта корпус командиры атаман Платовтың Беренсе башҡорт полкына ҡарата ла талабы артты. Ул казактарҙы һәм башҡорт егеттәрен һуғыш уйынына ныҡлап өйрәтергә, һәр саҡ уяу, һиҙгер, һаҡ булырға, Неман йылғаһы аръяғында нығынған дошман ғәскәренең һәр хәрәкәтен һәм ундағы үҙгәреште күҙәтеп, корпус штабына хәбәр итеп торорға бойорҙо.

Генерал Платов полктарҙа һуғыш уйыны нисек ойошторолоуы менән ныҡлап ҡыҙыҡһынды.

Унының һуңғы тапҡыр килеүендә Беренсе башҡорт полкында ла асыҡ хәрби күнекмә уҙғарылды. Ҡылыс һәм ҡалҡан тотҡан һыбайлы башҡорт егеттәре атаҡлы казактар атаманы алдында үҙҙәрен һынатмаҫҡа тырыштылар.

* * *

Бөтә нәмә әҙер булғас, яугирҙар һуғыш башланыр минутты үтә көсөргәнешлек менән көттөләр. Ваҡыт яй, шомло тынлыҡта уҙҙы. Төш ваҡыты үтеп, төн етте. Тағы ла икенсе көн тыуҙы. Барлыҡ ерҙә һаман да тып-тыныс. Бындағы бөтә күренеш йәшенле көслө ямғыр яуырҙан алдағы тынлыҡты хәтерләтә ине. Кем белә, бәлки, һуғыш бөтөнләй башланмаҫ... Неман аръяғындағы французлар юрамал ҡыланманымы икән? Һуғыш башланмаҫтай булһа, яр буйындағы һалдар һәм кәмәләр ни өсөн эшләнгән?..

Кис, ҡараңғы төшкәс, Наполеон, алтын-көмөш ептәр менән һырыулы ҡупшы кейемдәр кейгән маршалдарынан алғараҡ сығып баҫҡас, тантаналы рәүештә аҡ бирсәткәле ҡулын һелтәне.

– Башларға!..

Унының әмерен үтәргә әҙер тороусы һалдаттар:

– Йәшәһен император! – тип шатлыҡлы тауыш менән ҡысҡырыша-ҡысҡырыша һыуға һикерҙеләр.

Бүтән корпустарҙа ла император күҙәткән һалдаттарҙан ҡалышманылар.

Таң алдынан понтон күперен төҙөү эше тамамланды һәм Наполеон ғәскәре урынынан ҡуҙғалды. Иҫәбе-һаны булмаған дошман һалдаттары, аттар, орудиелар, йөк тейәүле ылауҙар, күпер аша сығып, Рәсәй еренә ябырылдылар...

Баш командующий Барклай де Толли ҡушыуы буйынса, Беренсе Көнбайыш рус ғәскәре, Вильноны ҡалдырып, Свенцияға табан сигенде.

Гродно ҡалаһы янындағы атаман Платов корпусы казактары һәм Беренсе башҡорт полкына килеп еткән атаман Платов, дошман һалдаттары яҡынлаша башлағас:

– Марш, марш! – тип ҡысҡырҙы ла артабан сабып уҙҙы.

Бер үк мәлдә, атлы казактарҙы атакаға барырға өндәп, борғо уйнаған тауыш яңғыраны.

Француздарҙың ябырылып килеүен көсөргәнешлек менән күҙәткән Буранбайҙың тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте.

«Һуғыш бына ҡасан башлана», – тигән уй менән ҡындан ҡылысын һурып алып, йүгән-теҙгенен бушатты һәм майор Лачин артынса атын йән-фарман саптырып алға ташланды.

Полктың башҡа яугирҙары ла уларҙан ҡалышмайынса алға, тик алға табан ашыҡтылар. Аттарҙың аяғы аҫтынан урғылған ҡуйы туҙан өйөмө бөтә ерҙе томаланы.

– Ура-а-а! – тип ҡысҡырған казактар тауышын ишетеп, башҡорттар тағы ла дәртләнеберәк сабыштылар.

Һыбайлы башҡорттар яҡынлаша башлағас, француз һалдаттары мылтыҡтарҙан ут асты. Бер нисә урында снарядтар гөрһөлдәп ярылды. Ҡуйы туҙан ҡатыш төтөнгә борһаланып сабып барыусы егеттәр һәр гөрһөлдәү артынса берәм-һәрәм ергә тәкмәстеләр. Яралыларҙан кемдәрҙер ҡысҡырҙы, аттар һөрән һалып кешнәне.

Иң алдан сабып барған Буранбай, яңыраҡ ҡына кисергән билдәһеҙ ҡурҡынысл тойғоларҙы онотоп, бер нәмәгә лә иғтибар итмәне. Француздар араһына үтеп ингәс, осраған һәр бер дошман һалдатын аяуһыҙ тураҡларға тотонды. Бер аҙҙан һуң бөтә нәмә буталды. Ике яҡтан да үлеш һәм ҡыйралыш күбәйҙе. Буранбайҙың аты дошман һалдаты һөңгөһөнән яралангас, баш сайҡап кешнәй-кешнәй, алғы аяҡтарына күтәрелеп һорхолданы. Шунан, төрлө яҡтан ҡамалған хужаһын ҡотҡарырға тырышып, арты менән сигенде. Башҡорт егеттәренә барып ҡушылғас:

– Ҡайҙа майор? – тип һораны Буранбай.

– Тегендә, алда!..

Дошман ҡамауында полк командиры яңғыҙ ҡалыуын күреп, Буранбай тағы алға ынтылды.

– Егеттәр, майорҙы ҡотҡарайыҡ!

Һуғыш көсәйҙе. Дошман һалдаттары ҡыҫымы кәмемәне. Башҡорт егеттәре лә, артҡа сигенергә теләмәйенсә, батырҙарса алыштылар.

Француздар түҙмәне, ҡамауҙағы башҡорт полкы командирын ҡалдырып, яҡындағы урманға табан тәртипһеҙ рәүештә ҡаса башланылар. Шул саҡ штыктарын ялтлатып күк мундир кейгән икенсе төркөм француз һалдаттары күренде, ә урмандың аҫҡы өлөшөнән туҙан борхотоп сабышып килгән дошман кавалеристары төҫмөрләнде. Улар иҫәпһеҙ-һанһыҙ...

Ундай көскә ҡаршы тора алмаясаҡтарын аңлап, атаман Платов казактарға һәм башҡорт егеттәренә сигенергә бойорҙо.

Уларҙы бер туҡтауһыҙ эҙәрләүсе французлар ҙа һаман ҡалышманы.

Новгрудка, Кареличи һәм Мир ауылдарындағы ҡаты бәрелештәрҙән һуң, Икенсе Көнбайыш ғәскәренең уңышлы сигенеүен тәьмин итеү өсөн, атаман Платов казактары менән Беренсе башҡорт полкы һыбайлылары дошман кавалеристарына ҡаршы үҙҙәре һөжүм башланылар.

Егерме етенсе июндә атаман Платов, майор Лачинды корпус штабына саҡыртҡас:

– Нисек, башҡорт егеттәренә ныҡлы ышаныс тоторға буламы? – тип һораны.

– Так точно, Ваше превосходительство, уларға үҙемә ышанғандай ышана алам, – тип яуап ҡайтарҙы майор Лачин, итек шпорҙарын зыңҡылдатып.

Матвей Иванович Платовтың йөҙө яғымлыланды. Сәсе ҡойолоп бөтөп ялтасланған башын ыуа-ыуа бер аҙ уйға ҡалыбыраҡ торғандан һуң:

– Французларға тоҙаҡ ҡорорға булдым. Уны үтәү бурысы һеҙҙең Беренсе башҡорт полкына йөкмәтелә, – тине лә алдан уйлаған хәйләһен нисек итеп тормошҡа ашырыу тураһында майор Лачинға ентекләп аңлатты.

Корпус штабында булып, полкка ҡайтҡас, майор Лачин Буранбай менән кәңәшләште лә:

– Дошманды күҙәтеү һәм, ҡасҡанға һылтауланып, дошман һалдаттарын Мир ауылына тиклем эйәртеп алып килеү бурысын үтәү өсөн ҡайһы йөҙҙө ебәрергә мөмкин? – тип һораны.

– Икенсене… Ә йөҙ башлығы булып үҙемә барырға рөхсәт итегеҙ, – тине Буранбай.

– Яҡшы. – Полк командиры ризалығын бирҙе. – Әләйһә, хәҙерҙән юлға сығығыҙ!..

– Тыңлайым!

Буранбай, һыбайлы башҡорт егеттәрен эйәртеп, Кареличи ауылына табан елдерҙе. Французларға алыҫтан күренеү өсөн ул юрамал асыҡ урындан барҙы. Бөтә ер тыныс һымаҡ күренһә лә, дошман һалдаттарының һағайып күҙәтеүен Буранбай яҡшы аңлай. Шуға күрә ул егеттәргә һаҡ булырға, һәр бойороҡто тайпылышһыҙ үтәргә ҡушты.

Башҡорт егеттәре яҡынлаша башлағас та, генерал Турно командалығындағы бер дивизия самаһындағы поляк улан-

дары сыр-сыу килеп аттарына атландылар. Шуны ғына көткән Буранбай, уларҙан ҡасып ҡотолорға теләгән һылтау менән, атын кирегә борҙо. Сабып барышлай:

– Егеттәр, минән ҡалышмағыҙ! – тип ҡысҡырҙы.

Поляк уландары, Буранбай отрядын ҡамап алырға тырышып, Мир ауылы аша сабышып уҙып киттеләр.

Шул саҡ юлдың ике яғында йәшеренгән казактар һәм Беренсе башҡорт полкы поляк уландары өҫтөнә аңғармаҫтан ябырылды. Тиҙ арала уларға ярҙамға килеп еткән генерал Кутейков бригадаһы французларҙы уң флангынан атакалауы дошман ғәскәре өсөн көтөлмәгән бәлә тыуҙырҙы...

Дүрт сәғәт самаһы барған һуғышта поляк уландары дивизияһы тулыһынса ҡыйратылып, бик күп дошман офицерҙары әсиргә алынғас, атаман Платов Багратионға рапорт яҙҙы: «...Дошмандың алты полкынан... бер нисәһе генә ҡотолдо. Казактар... дротик[1] менән йылдам ғына атакаға ташланды һәм, уларға атырға ла мөмкинлек бирмәйенсә, тиҙ еңеүгә өлгәште».

* * *

Кутузовтың баш командующий итеп тәғәйенләнеүе рус ғәскәре өсөн бигерәк тә ҡыуаныслы хәл булды. Ике ай буйынса ябырылып килеүсе французларҙы ҡасан да туҡтатасаҡтарына өмөтөн өҙгән һалдаттарҙың төшөнкө рухтары күтәрелеп, дошманды Рәсәй еренән ҡыуасаҡтарына ышаныс тыуҙы. Сөнки күп һуғыштарҙа бай тәжрибә туплаған һәләтле, аҡыллы һәм һуғыш стратегияһы менән тактиканы белеүсе полководецтың исеме бығаса ла һәр бер рус һалдатына яҡшы билдәле ине.

Улар, тәүге тапҡыр был хаҡта ишеткәс, бер-береһен дәртләндереп, оҙаҡ ғауғалаштылар:

– Сигенеү бөттө!

– Французларға Кутузовтан туҡмаҡ эләгәсәк!

– Наполеон ғәскәрен хәҙер үҙебеҙ ҡыйратасаҡбыҙ!..

Бындай яңылыҡ Беренсе башҡорт полкы егеттәрен дә ныҡ тулҡынландырҙы. Ғәскәр старшинаһы есаул Ҡотосов Буранбай ҙа, Михаил Илларионович Кутузов хаҡында туғыҙынсы кантон башлығынан элгәре ишетеп белгәнлектән, кем менән генә осрашып һөйләшһә лә:

[1] *Дротик* – ҡыҫҡа һөңгө, боронғо һуғыш ҡоралы.

– Яңы баш командующий Кутузов – беҙҙең генерал-губернаторыбыҙ кенәз Волконскийҙың иң яҡын дуҫы! – тип маҡтанды.

Төрлө яҡтан урман менән уратып алынған Бородино исемле ошо яланды уртаға бүлеп аҡҡан Колочка йылғаһы ярҙарына еткәс, сигенеп барыусы рус ғәскәрҙәренә туҡтарға ҡушылды.

Беренсе башҡорт полкы егеттәре аттарын ашатып, үҙҙәре лә ял итеп алырға йыйналған ваҡытта, ҡалҡыулыҡ ситендәге урман араһынан килеп сыҡҡан бер төркөм һыбайлы генералдарҙы эйәрткән иң алдағы һыбайлыны танып, майор Лачиндың ҡото алынды:

– Баш командующий Кутузов!

Сәй ҡайнатып эскән егеттәр, урындарынан һикерешеп тороп, баш командующийҙы ҡаршыларға әҙерләнделәр.

Бик яй яҡынлашып килеүсе генералдарҙы көсөргәнешлек менән күҙәткән Буранбай майор Лачиндан бышылдап ҡына һораны:

– Уларҙың ҡайһыһы Кутузов?

– Иң алдағыһы.

Эполетһыҙ сюртук, козырекһыҙ аҡ түбәле иҫке фуражка кейеп, ялҡау аҙым менән атлап килгән тәпәшәк кенә бейәгә атланған йыуан ҡорһаҡлы ҡарттың баш командующий икәнлегенә ышана алмайынса, Буранбай ғәжәпкә ҡалды: «Кутузов та, беҙҙең хәрби генерал-губернатор Волконский кеүек, мәҙәк кеше, ахырыһы!»

– Кутузов эргәһендәге кем?

– Ҡайһыһы? Урман яғына күрһәтеп, нимәнелер ҡыҙып-ҡыҙып аңлатҡанымы?

– Юҡ, – Буранбай, бер урында тыныс тора алмаған атының башын шаҡара тартып, башын сайҡаны, – уныһы кәкре морон Багратионыбыҙ икәнен танығым! Кутузовтың икенсе яғындағы киң маңлайлы, оҙон йөҙлө генералды белмәйем...

– Барклай де Толли ҙа баһа! – Бер аҙға майор Лачин, өндәшмәй, эйәре өҫтөндә борғоланып, башҡорт егеттәре ни хәлдә икәнлектәрен күҙ ҡыры менән күҙәтте. Шунан, тынысланып, Барклай де Толлиға яҡын килеүсе генералға ымланы. – Иң оҙоно, ябыҡ, эйәрендә йыртҡыс ҡош кеүек бик тәкәббер ҡыланғаны Беннигсен... Ҡалғандарын танымайым...

Кутузов, Беренсе башҡорт полкына килеп етмәйенсә, йоҡомһорап атлаған атын кирегә табан борҙо.

Баш командующийға эйәргән генералдар араһында атаман Платовты танып, Ҡарағош мулла ҡысҡырып өндәште:

– Беҙҙең корпус командиры ла шунда ла баһа!

– Ҡайҙа? – Буранбай, өҙәңгеләренә баҫып, эйәре өҫтөндә турайҙы.

– Эйе, ул, – тип дөрөҫләне майор Лачин, баш командующий менән генералдарҙың Беренсе башҡорт полкына килеп етмәүенә шатланып.

– Күмәкләшеп нимә эҙләйҙәр икән? – тип һораны Ҡарағош мулла.

– Киләһе һуғыш өсөн уңайлы урын һайлай торғандарҙыр, – тине полк командиры.

Майор Лачиндың һүҙе дөрөҫ булып сыҡты.

Егерме икенсе августа генералдарын эйәрткән баш командующийҙың тирә-яҡҡа ҡаранып йөрөүе тигенгә булмаған. Көс яғынан һәм ғәскәренең күплеге яғынан икеләтә артыҡ Наполеон ғәскәре менән дәһшәтле алышҡа әҙерләнеп, үҙ ғәскәре өсөн Бородино яланы торошон тикшергән икән Кутузов.

Мәскәүгә алып барыусы барлыҡ юлдар Бородино яланы аша үтә. Дошман уны бер нисек тә урап уҙа алмаясаҡ. Бородиноның уң яҡ флангыһында – Мәскәү йылғаһы, һул яғында – ҡуйы урман. Һайлап алынған ҡалҡыулыҡтан бөтә ер баш командующийға ап-асыҡ күренә һәм артиллериянан дошманға төбәп атырға мөмкинлек тыуҙыра. Фронт алдындағы үҙәктәр һәм йылғалар француздарға маневр яһарға ныҡ ҡамасаулаясаҡ. Күпселек ерҙең тигеҙ булыуы уҡсы полктарҙың һәм кавалеристар атакаһының уңышын тәьмин итәсәк...

Шундай һығымтаға килеп, Кутузов Михаил Илларионович Бородино яланын ентекләп тикшереп сыҡты. Ул Баш штабҡа ҡайтып еткәс тә, алдан билдәләнгән урында эш ҡыҙҙы. Егерме бишенсе августа инженерҙар тарафынан башҡарылған барлыҡ нығытмалар эшләнеп бөттө.

Баш командующий Кутузов тарафынан ныҡлы уйланған Бородино яланында буласаҡ һуғыштың маҡсаты – Наполеон ғәскәренең төп көсөн ҡыйратыу, уның артабан һөжүм итеүен туҡтатыу һәм француздарҙы Мәскәүгә яҡын ебәрмәүҙән ғибәрәт ине.

Бородинолағы һуғыш рус ғәскәре өсөн бик насар шарттарҙа буласағын да иҫенән сығарманы Михаил Илларионович. Сөнки батша хөкүмәте вәғәҙә иткән резерв килмәне. Ләкин башҡаса мөмкинлеге юҡ ине уның. Барынса байрам, тигәндәй,

Кутузовтың бөтә ышанысы Бородино яланында. Ул ялан Наполеонға уңайлы урын һайларға мөмкинлек бирмәй. Иң хәүефле һаналған рус ғәскәренең флангыларын уңайлы тәбиғи шарттар ныҡ һаҡлай. Дошман ғәскәре уны урап уҙа алмаясаҡ. Бик алыҫҡа китеп ураһа-нитһә, фронт оҙонаясаҡ һәм француздарҙың көсө тарҡаласаҡ. Наполеон, әлбиттә, бындай хәлгә ҡалыуҙан ҡурҡасаҡ.

* * *

Томан әкренләп шыйыҡланды. Ер ситенән ҡалҡҡан ҡояш нурҙары беленгәс тә, алтын-көмөш ептәр менән сигеүле ҡупшы кейемдәр кейеп үҙен оҙатып йөрөүсе кешеләргә:

– Бына Аустерлиц ҡояшы! Күрегеҙ! – тип ҡысҡырҙы ла, күп һанлы оркестр менән етәкселек итеүсе дирижёр һымаҡ, Наполеон аҡ бирсәткәле ҡулын һелтәне: – Башларға!..

Шул уҡ минутта француздарҙың йөҙәрләгән орудиелары ҡаршы яҡтағы Багратион флештарына төбәп аяуһыҙ ут асты. Бер үк мәлдә алғы сафтағы хәрби частарҙың да үҙ-ара мылтыҡтарҙан атышы көсәйеп китте.

Ике яҡтан да зый ҙа мый осҡан снарядтар төшөп ярылған һайын, ер тетрәне. Төтөн, тупраҡтар, тамырҙарынан аҡтарылып тураҡланған ағас киҫәктәре менән бергә буталған кешеләрҙең аяҡ-ҡулдары юғарыға ырғылды. Ике яҡта ла ҡысҡырышып-аҡырышып иҫән ҡалған кешеләр йүгереште. Командирҙарҙың тәртипте һаҡларға һәм утты көсәйтергә ҡушып командалар биреүе ишетелде.

Һуғыш башланды.

Ҡара һыҙат булып алыҫтан күренгән француздар яҡынлаша башлағас та, рус ғәскәрҙәре яғында канонада яңғыраны. Бородино ҡалҡыулығындағы батарея эргәһендәге офицерҙар менән бергә торған Барклай де Толли лейб-гвардия егерҙар полкы командиры һалдаттарына утты көсәйтергә бойорҙо.

Орудиеларҙан һәм мылтыҡтарҙан залп менән атҡан һайын, дошман һалдаттары күпләп ҡырылды. Ләкин барабандар доңғорлаған тауыштар ыңғайына өтә баҫып килеүсе француздар, туҡталмайынса, яҡынлашҡандан-яҡынлашты.

– Колочка йылғаһы күперенә күсерергә утты! – тигән команда яңғыраны.

Рус ғәскәрҙәренең пушкалары ауыр һуланы. Беренсе снарядтар йылға аръяғында ярылды. Башҡалары йә күпер тәңгә-

лендә, йә бирерәк төшөп ярылдылар. Шул мөмкинлектән файҙаланырға тырышҡан егерҙар полкы һалдаттары француздарға ҡаршы контратакаға күтәрелде. Француздар, рустар ҡыҫымына сыҙай алмайынса, йылға аръяғына кире сигенде.

Ҡырҡ меңгә яҡын француз һалдаты Наполеон ҡушыуы буйынса сираттағы яңы атакаға әҙерләнде.

Француздарҙың ҡалҡыулыҡҡа табан йүнәлдерелгән сираттағы һөжүме орудиеларҙың көслө атышы менән башланды. Өҙлөкһөҙ геүләгән тауыштар канонада менән ялғанды. Ерҙә лә, һауала ла снарядтарға ҡушылып гранаталар ярылды. Йәҙрәләр ямғыры көсәйгән һайын, нығытмалар онталды, ваҡ-ваҡ киҫәктәргә бүлгеләнеп, тирә-яҡҡа һирпелделәр. Дошман снарядтары күпләп ярылыуынан рус артиллеристары ла ҡырылып бөтә яҙҙы. Шулай булһа ла, уларҙың пушкалары тынып ҡалманы. Орудиелар эргәһендә бер-ике генә кеше ҡалған ваҡытта фейерверкерҙар үҙҙәре атышыуҙа ҡатнаштылар.

Багратион ғәскәренең хәле яңынан мөшкөлләнеүен аңлап, Кутузов Платов менән Уваровты үҙенә ашығыс саҡыртты һәм, мөмкин тиклем тыныс күренергә тырышып:

– Минең ҡәҙерлеләрем, хәҙер һеҙҙең сират етте. Семёновка ауылы тирәһендәге ғәскәребеҙҙең яҙмышын еңеләйтеү маҡсатынан, Наполеондың һул флангыһынан урап уҙып, француздарҙы ҡыйратырға! – тине.

Атаман Платов казактары ла, дошман ғәскәренең тылына уҙып, батырҙарса алышты. Үлемесле яраланыусыларҙың эйәрҙәренән ауып төшөүенә, яралыларҙың ыңғырашыуына, аттарҙың һөрән һалып кешнәүҙәренә иғтибар итмәйенсә, улар алға, һаман алға табан ынтылып, француздарҙы аяуһыҙ тураҡлауҙарын белде.

Платов корпусы сафындағы Беренсе башҡорт полкы егеттәре лә казактарҙан кәм һуғышманы. Уларҙан ҡурҡып: «Амурҙар, амурҙар!..» – тип ҡысҡырышҡан дошман һалдаттарын тураҡлай-тураҡлай, француздарға ярҙамға күтәрелеүселәргә табан саптылар, һөңгөһөн һоноп иң алдан барыусы Буранбай егеттәрҙе өҙлөкһөҙ ашыҡтырып ҡысҡырҙы:

– Тиҙерәк, тиҙерәк, ҡалмағыҙ!.. Француздарға атырға мөмкинлек бирмәйек!..

Буранбайҙан ҡалышмаған башҡорт яугирҙары, өҙәңгеләренә тибеп, ҡалҡына-ҡалҡына аттарын әле былай, әле тегеләй борғолап, алға табан сабып барыуҙан туҡталманылар.

Беренсе башҡорт полкы егеттәренең көтөлмәгән һөжүменә сыҙамайынса, французлар кирегә сигенә башланылар.

Буранбай, дошман һалдаттары артынан ярһып сабып барыусы атын яйлатмайынса, уғын керешкә һалып:

– Егеттәр, атығыҙ! – тип ҡысҡырып, уғын ысҡындырҙы. Һалдаттарын туҡтатырға тырышып ҡул болғаған француз офицеры, уҡ үтә сыҡҡан күкрәген тотоп, ергә тәкмәсте.

Буранбайҙың артынан сабышып килеүсе башҡорт егеттәре, уҡ-йәҙрәләрен бал ҡорттары күсе шикелле яуҙырып осора-осора йәйәүле француз һалдаттарын әҙәрлекләгән ваҡытта, бер төркөм һыбайлы французларға тап булдылар.

Өсөнсө йөҙ башлығы менән бергә сабып барыусы полк командиры майор Лачин:

– Буранбай, беҙ йәйәүле дошман һалдаттарын тураҡлайбыҙ, ә һин беренсе һәм икенсе йөҙ башлыҡтары менән һыбайлы французларҙы был яҡҡа яҡын ебәрмә! – тип ҡысҡырҙы.

Буранбай, үҙ ҡарамағындағы егеттәрҙе эйәртеп, һыбайлы французларға табан атын борҙо.

– Атығыҙ, уҡтарығыҙҙы йәлләмәгеҙ!..

Уҡтар яуҙы. Ана, бер һыбайлы француз, яурынына уҡ ҡаҙалғас та аҡырып ебәреп, эйәренән тәгәрәп төштө. Икенсеһе, аяғы өҙәңгегә эләгеп, кәүҙәһе менән ерҙән һөйрәлеп барҙы-барҙы ла аты кирегә боролоп киткән ваҡытта башҡаларҙың аттары аҫтында тапалып ятып ҡалды... Ләкин һыбайлы французлар сигенмәнеләр, әле һулға, әле уңға ҡылыстары һәм һөңгөләре менән һелтәнеп, башҡорт егеттәренә ташландылар. Ҡыйралыш ике яҡтан да күбәйҙе. Буранбайҙың аты үлеләрҙе һәм ергә йығылып төшкән яралыларҙы иҙеп алға ынтылды. Һыбайлы француз һалдаты ҡылысы менән киҙәнгән саҡта, хужаһын һаҡлап, Буранбайҙың аты бик йыш ситкә тайпылды, янтайҙы йәки алғы аяҡтарын юғары күтәрҙе. Шул арҡала әллә нисәмә тапҡыр үлем тырнағынан ҡотолоп ҡалды Буранбай...

Французларҙың һыбайлы төркөмө ана еңелә, бына еңелә тигәндә генә кемдер:

– Полк командирын яраланылар, – тип ҡысҡырҙы.

Ярһыған Буранбай:

– Майор Лачинды дошман ҡулына эләгеүҙән һаҡлағыҙ, – тине лә, бер төркөм казактарҙың йәйәүле дошман һалдаттары ҡамауында борһаланыуҙарын күреп, ярҙамға ашыҡты. Төп көстән бүленеп, дошман һалдаттары ҡамауына эләккән казактар, бик аҙ ғына булыуҙарына ҡарамаҫтан, үтә ҡыйыу һуғы-

шалар. Буранбай менән бергә эркелеп сабышып килеүсе башҡорт егеттәре күренгәс, улар бигерәк тә дәртләнеберәк алыша башланы.

Дәһшәтле һуғыш алты сәғәткә һуҙылды. Үлеш-ҡыйралыш артҡандан-артты. Ҡалҡыулыҡты һаҡлаусылар, бер ниндәй ҙә арыу-талыуҙы һәм ҡурҡыуҙы белмәйенсә, дошман һалдаттарын штыктар һәм прикладтар менән дөмбәҫләнеләр, үҙҙәрен соҡор-саҡырҙарға тәрткөләп төшөрҙөләр...

Көн кискә табан һарҡты. Көн буйына һуҙылған дәһшәтле һуғыш яйлап баҫылды. Аустерлиц эргәһендәге һымаҡ еңел еңеүгә ышаныс тотоусы Наполеондың татлы хыялдары, рус ғәскәренең удар көсөнә ҡаҡлығып, селпәрәмә онталды.

Шул уҡ төндә, ғәскәренең ярты өлөшөн тәшкил итеүсе ун алты мең һыбайлыһы, илле меңдән ашыу йәйәүле һалдатының Бородинола һәләк булыуын һәм ҡаты яраланып сафтан сығыуын белмәмешкә һалышып, Наполеон маршалдарына һәм генералдарына белдереү яһаны:

– Хәл иткес был һуғышта ла беҙ еңдек!

Үҙенең был һүҙенә бер кем дә ышанмауын аңлап, япаяңғыҙы палаткаһында ҡалғас, Наполеон ғүмерендә беренсе тапҡыр күңел төшөнкөлөгөнә бирелде.

* * *

Граф Беннигсендың Беренсе башҡорт полкына үҙе килеүе сәбәбенә аптырап, Ҡаһым түрә төрлөсә баш ватты.

Ғәскәр башлығы, уға иғтибар итмәйенсә, һаман һуғыш барышы тураһында һөйләүен белде:

– Эйе, бөгөнгө көн уңышлыҡтарға ирешә алманы союздаш ғәскәрҙәр. Уң флангылағы өс эскадрон самаһы казактар төркөмө генә ҡырсынлы йылғаны аша сыға алды. Ләкин уларҙың атакалары ла тиҙ арала кире ҡағылды. Вахау, Линденау һәм Мёккерн тәңгәлендәге алыштар бигерәк тә дәһшәтле булыуға ҡарамаҫтан, ике яҡ та еңеүгә өлгәшә алманы, – тип, генерал Беннигсен ҡарсығаныҡы кеүек үткер күҙ ҡарашы менән шым ғына ултырған Ҡаһымдың йөҙөнә төбәлде. – Мине яңыраҡ Его величество император Александр Павлович үҙенә саҡыртты. Иртәгә һуғыш дауам итәсәк, ти. Башҡорттарҙың аттары үтә сыҙамлы, тау-ташлы, соҡор-саҡырлы, һаҙлыҡлы һәм урманлы урындарҙа йөрөп күнегеүен иҫәпләп, һеҙҙең исемдән Его величество император Александр Павловичҡа дошман тылына ғәс-

кәрем менән үтеп инергә һәм французДарҙы атакаларға һүҙ бирҙем. Минең төп ышанысым һеҙҙә, полковник. Беҙгә билдәле булыуынса, һеҙҙе башҡа башҡорт полктарында ла ныҡ ихтирам итәләр. Уларҙың һеҙҙең арттан һыуға һәм утҡа инергә лә әҙер тороуҙары Его величество император Александр Павловичҡа ла мәғлүм. Шуға күрә дошман тылына үтеп инеү бурысы Беренсе башҡорт полкына һәм минең ғәскәр ҡарамағындағы Дүртенсе, Бишенсе, Туғыҙынсы, Ун дүртенсе казачий башҡорт полктарына йөкмәтелә...

«Эс-бауырыма инеп барыу сәбәбе хәҙер аңлашыла. Лейпциг ерен беҙҙең ҡан менән йыуып, батша ихтирамын яуларға, унан маҡтау һүҙе ишетергә тырышаһың икән. Нисек кенә булмаһын, ғәскәр башлығы әмерен үтәмәҫкә хаҡым юҡ минең», – тип уйланы Ҡаһым түрә.

– Ваше высокопревосходительство, ышанысығыҙҙы аҡлармын! Башҡорттар дошман тылына үтеп инергә әҙерҙәр. Яҡын-тирәләге барлыҡ урындар ҙа беҙҙең тарафтан ентекле тикшерелде.

Генерал Беннигсен Ҡаһым түрәнең яуабы менән ҡәнәғәт ине. Ул үҙе менән алып йөрөткән картаға ниндәйҙер билдәләр яһаны ла:

– Иртәгә Пильницы[1] ҡалҡыулығында булырмын. Мине эле оҙатып йөрөмәгеҙ, полковник. Төнгө походҡа әҙерләнегеҙ. Иртәнге ҡара таңда артиллериянарҙан атыш баҫылғас та, минән яңы приказ көтмәйенсә, дошман тылына үтеп, атака башлағыҙ! Һеҙгә уңыш теләйем, полковник, – тип хушлашып, китеп тә барҙы.

Башҡорт полктары дошман тылына табан ҡуҙғалып киткәндә, төн уртаһы ауышҡайны инде.

Иң алдан юл башлап барыусы Беренсе Башҡорт полкына башҡа башҡорт полктары ла эйәрҙе.

Ҡараңғыла бер ни йүнләп күренмәй, һаҙлыҡлы урманға еткәс, юл күрһәтеүсе кеше артынса һиҙгер аттар берәм-берәм теҙелешеп барҙылар. Үтә яй һәм ҙур һаҡлыҡ менән барырға тура килде уларға. Соҡор-саҡырлы һәм ҡуйы урманлы урындарҙан уҙғанда ағас ботаҡтары биткә һуғылды, аттар һөрөнөп йығыла яҙҙылар.

---

[1] *Пильницы* – Лейпциг эргәһендәге бәләкәй генә ҡаласыҡ.

Тағы ла ямғыр һибәләргә тотондо. Һауа бурһыған япраҡ, әлморон һәм серегән күл еҫе менән тулған.

Былай барыуҙың аҙағы мәңге булмаҫ һымаҡ...

Күк йөҙөндәге болоттар ҡуйырҙы, ямғыр яуыуы шәбәйҙе. Бөтә ерҙе дөм ҡара төтөн томалаған һымаҡ күренә.

Тирә-яҡ тыныс.

Йылға ярына еткәс, арттағыларҙы көтөп, алдағылар туҡтаны.

Икенсе ярға ҡыйынлыҡ менән йөҙөп сыҡтылар.

Генерал Беннигсен тарафынан барлыҡ башҡорт полктарына ла яуаплы итеп тәғәйенләнгән Ҡаһым түрә башҡарыласаҡ бурысты ҡыҫҡаса аңлатҡандан һуң, йылға яры буйлап юғарыға табан ыңғайланылар.

Разведкаға китеүселәр бик йәһәт әйләнделәр.

Бейек таш стена тышындағы дошман һалдаттары яҡында ғына икәнлеген белгәс, Ҡаһым түрә һуғыш башланыр ваҡытты ышыҡ урында тороп көтөргә булды.

Ваҡытлыса үҙенә буйһондоролған башҡа башҡорт полкы командирҙары менән кәңәшләшкәс, Ҡаһым түрә йөрәкһенде. Ирҙе намыҫ үлтерә, ти. Ғәскәр башлығы ышанысын аҡлай алырҙармы икән бөгөн башҡорт егеттәре? Алыш дәһшәтле буласаҡ. Һуғышты уңайлыраҡ итеп башлап ебәрергә ине...

Алыҫта снарядтар гөрһөлдәп ярыла башланы. Уларҙың тауышы баҫылыр-баҫылмаҫтан:

– Аллаға тапшырҙыҡ, – тип Ҡаһым түрә ҡысҡырғас та, Беренсе башҡорт полкы егеттәре һайт та һайт аҡырышып алға табан ябырылдылар. Уларҙың был атакаһы бөтөнләй аңғармаҫтан, етеҙ һәм тиҙ башҡарылды. Алғы һыҙыҡтағы дошман һалдаттары, мылтыҡтарынан берәр атырға ла өлгөрмәйенсә, артҡа ҡаса башланылар. Башҡорт полкы уларҙы эҙәрләй һәм аяуһыҙ ҡыйрата-ҡыйрата ҡала тышындағы нығытмалар артындағы француздарға яҡынлашты. Шул саҡ ҡаршы яҡтан залп яңғыраны. Алға табан йән-фарман сабышып барыусы бер төркөм һыбайлы башҡорт егеттәре ергә тәкмәсте. Арттағылар, уҡтарҙы яуҙыра-яуҙыра, йығылғандарҙы ары сабып уҙҙылар. Иң хәүефле урынға етер саҡта, алдан билдәләнгән аулаҡ урынға ҡайырылдылар, арттағылары уларҙы алмаштырҙы. Шулай бер туҡтауһыҙ ҡабатланды. Көслө диңгеҙ тулҡыны кеүек, бер-бер артлы өҙлөкһөҙ ағылыусы башҡорт полктары ҡыҫымы артты, уҡтар ямғыры ла көсәйҙе...

Был лава ағымы бер ваҡытта ла бөтмәҫ һәм юлда осраған барлыҡ нәмәне бергә осороп алып китер һымаҡ булып тойолдо француздарға…

Тулҡын-тулҡын булып бер туҡтауһыҙ ағылған һыбайлы башҡорт егеттәре, нығытмалар артына йәшеренгән дошман һалдаттарына баш ҡалҡытып ҡарарға ла ирек бирмәҫкә тырышып, атаканы көсәйттеләр.

Ике яҡтан да юғалтыуҙар артты. Крепость стеналары тирәһе үлеләр һәм яралылар менән тулды.

Бындағы һуғыш барышы менән командалыҡ итеүсе Ҡаһым түрә борсола башланы: «Егеттәр ҙә, аттар ҙа ныҡ арыны. Ниңә һаман ярҙам килеп етмәй? Беҙҙең хәл мөшкөлләнә барыуын томанда күрмәйме икән әллә генерал Беннигсен? Тағы ярты сәғәттән һуң ҡырылып бөтәсәкбеҙ!»

Томан эсендә борһаланған башҡорттарҙың һуғышсан ажарланыуы һәм ҡысҡырышыуҙарына ҡушылып, ҡайҙалыр айырым туп тауыштары яңғыраны. Алдан сабып барған Ҡарағош мулла тәгәрәне… Уның артынса икенсе йөҙ башы эйәрҙән тәкмәсте. Ләкин атака туҡталманы. Үлгән йөҙ башын алмаштырған Буранбай, һөңгөһөн әле уңға, әле һулға һелтәнгеләп, командирһыҙ ҡалған башҡорт егеттәре менән алға ташланды. Уларға ҡаршы һыбайлы дошман һалдаттары ташланыуын күргәс, Ҡаһым түрә резервта тотҡан Ун дүртенсе башҡорт полкын һуғышҡа индерҙе, һуғыш яңы көс менән ҡыҙҙы. Аттарҙың осалары ла, кешеләрҙең баштары ла, томан араһында борһаланып, Ҡаһымға яҙа-йоҙа ғына күренде. Тын алыуы ауырайҙы. Дары төтөнө, дымлы һауаға таралмайынса, күкһел аҡ томан шаршауын тағы ла нығыраҡ ҡуйырта төштө. Томан эсендә атышҡан, ҡысҡырышҡан, ыңғырашҡан һәм аттар кешнәгән тауыштар дөйөм шау-шыуға әүерелде…

Ҡаһым түрә һуғыштың иң ҡыҙыу барған урынында ҡайнаны. Көйөк еҫен аңҡытҡан ҡуйы төтөн ағымы араһында генерал Беннигсен менән ғәскәрҙең төп көсө етеп килеүен күргәс, башҡорт егеттәре тағы ла дәртләнеберәк атакаға ташландылар.

Лейпциг ҡалаһы өсөн дәһшәтле һуғыш өс тәүлеккә һуҙылды.

Лютцен юлын иңләп ғәскәре ҡуҙғалғас та, артиллерияларын һәм бик күп ылауҙарын көтөп тормайынса, Наполеон ҡаланан тиҙерәк китергә ашыҡты.

* * *

Барон де Марбо императорҙың ҡабул итеү бүлмәһендәге генералдар эргәһендә туҡталып торманы. Юлға әҙерлек башларға ҡушып, үҙенең ярҙамсыларынан айырылғас, аулаҡ бүлмәгә инеп бикләнде лә уйға ҡалды. Лейпциг өсөн һуғыш ваҡытындағы иң мөһим ваҡиғаларҙы һайлап алырға тырышып, ул оҙаҡ уйланды. Иҫтә ҡалырлыҡ иң ҡыҙыҡлы күренеш «Төньяҡ амурҙары»ның тышҡы ҡиәфәтендәлер, ахырыһы... Өҫтәренә уҡа менән ҡайылған ҡыҙыл сәкмән, баштарына осло бүрек йәки ҡалпаҡ кейгән, һөңгө, уҡ-һаҙаҡтар менән ҡоралланған үтә ҡыҙыу ҡанлы башҡорттарҙың ҙур тиҙлектә һыбай сабыуҙары, ҡурҡыуҙың ни икәнлеген белмәй, Лейпцигты күп тапҡырҙар атакалауҙары ғәжәп хәл бит!..

Шул ваҡытта кисергән уй-тойғоларын күҙ алдына килтереп, генерал де Марбо һәммәһен көндәлегенә яҙҙы:

«...Беннигсен командалығындағы... уҡ-һаҙаҡтар менән генә ҡоралланған башҡорттар беренсе көндәрҙән үк беҙҙең ғәскәрҙәргә тотҡарлыҡһыҙ көслө дәрт һәм сәм менән ябырылдылар... Улар күпләп ҡырылды... Ләкин ундай күп юғалтыуҙар башҡорт ҡыҙыулығын ҡуҙғыртып, уларҙың ҡыйыулығын арттыра ғына барған һымаҡ ине. Бынан һуң улар тағы ла яманыраҡ ҡотороноп һөжүм иттеләр. Сафтарға теҙелмәй хәрәкәт иткәс, үҙҙәренә юл тотҡарлыҡ яһамағас, теләгән һәр ерҙән йәшеренеп килеп, беҙҙең ғәскәр тирәһендә һағыҙаҡтар күсе һымаҡ уралдылар. Үҙҙәрен беҙгә эләктереү бик ҡыйын булды... Улар, бәләкәй генә аттарына атланып, һуғыш ҡыҙыу барған иң хәүефле урындарға ҙур тиҙлектә... иҫәпһеҙ-һанһыҙ ағылып торҙолар. Һағыҙаҡтар ни тиклем күп үлтерелһә, улар шул тиклем күбәйә тора...»

«Ярым ҡырағай азиаттар» һәм «Төньяҡ амурҙары» тип исемләнгән башҡорттарҙың уҡ-һаҙаҡтар менән генә Европаның иң алдынғы ғәскәренә ҡаршы батырҙарса һуғышып, бик күп французлдарҙы һәләк итеүҙәре генерал барон де Марбоның асыуын ҡабартты. Ул, башҡорттарға ҡарата хәтере ныҡ ҡалыуын белгертергә тырышып, артабан яҙҙы:

«...Был варварҙарҙың атакалары өҙлөкһөҙ ҡабатланды. Көсөргәнешлек менән һөжүм итеүсе башҡорттар тыуҙырған беҙҙең һыҙаттағы әле бер, әле икенсе урындағы тәртипһеҙлектәрҙе һәм дөйөм шау-шыуҙы рустарҙың гусар отрядтары оҫта файҙаланды. Шуға күрә император үҙенең генералдарына һәр

саҡ һиҙгерлекте икеләтә арттырырға һәм аванпостарҙы мөмкин тиклем йышыраҡ тикшерергә ҡушты...»

Барон де Марбо урынынан торҙо. Лейпциг эргәһендәге көслө һуғыш иҫтәлеге итеп йөрөткән уҡты төрлөсә өйрөлткөләп ҡарағандан һуң, ҡарамаҡҡа ябай һәм зыянһыҙ һымаҡ тойолған башҡорттарҙың тимер башаҡлы уҡтары французлар өсөн үлемесле ҡорал икәнлеген яҙҙы:

«...Иң батыр унтер-офицерҙарымдың береһе Почётлы Легион ордены кавалеры Мелендың күкрәгенә ҡаҙалған уҡ арҡаһынан үтә сыҡҡан... Ул ғәжәп снаряд менән минең дә аяғым яраланды...»

1812–1815 йылдарҙағы Ватан һуғышында ҡатнашыусы казачий башҡорт егеттәренең батырлығы, Рәсәй иле алдындағы үҙ бурыстарын намыҫ менән үтәп дан яулауҙары, уларҙың ҡот осорғос мәргән ябай уҡтары, ҡылыстары һәм һөңгөләре тураһында барон де Марбонан башҡа ла бик күп французлар яҙҙы. Танылған француз мемуарсыһы Дюпийҙың: «Уҡ-һаҙаҡтар менән ҡоралланған башҡорт отрядтары беҙҙе бигерәк тә ныҡ маҙаһыҙланы», – тип зарланыуы ла бик күп нәмәләр хаҡында аңлатты.

* * *

Союздаш ғәскәрҙәр тарафынан алынған Лейпциг ҡалаһында тынлыҡ урынлашҡас та, үҙәк урам осондағы өйҙәргә таралышып ял иткән Беренсе башҡорт полкына генерал Беннигсен килде. Уның ҡушыуы буйынса сур тауышы яңғырағас та, һыбайлы башҡорт егеттәре урам уртаһына йыйылды.

Генерал Беннигсен сафҡа теҙелгән һыбайлы башҡорт егеттәре ҡаршыһына сыҡты. Лейпциг өсөн һуғышта батырлыҡ күрһәткәндәре өсөн яугирҙарҙы маҡтай-маҡтай ордендар һәм миҙалдар тапшырғас, Беннигсендың адъютанты айырым кешеләргә хорунжий, есаул һәм зауряд-йөҙ башы биреү тураһындағы приказды уҡыны.

Ярандарын эйәрткән генерал Беннигсен Беренсе башҡорт полкынан киткәндән һуң да, таралышмайынса, башҡорт егеттәре һаман ғауғалаштылар. Быйндай шатлыҡлы минутта һәләк булған яҡташтары тураһындағы ҡайғы-хәсрәттәре һәм моңдарҙары ла ваҡытлыса онотолдо.

Зауряд-хорунжий исемен алып, илле башы булыу бәхетенә ирешкән Ҡыямәт улы Зөлҡәрнәй өсөн Буранбай бигерәк тә ҡыуанды.

– Рузи[1] артабан үçһен, Алла бойорһа! Бына, исмаһам, ысын егет ҡорона еттең. Киләһе һуғыштарҙан да һау ҡалып, тыуған төйәгебеҙгә имен-аман ҡайтып етергә насип булһа, иң шәп, иң һылыу ҡыҙҙы кәләш итеп алып бирәм үҙеңә, – тип ҡупрайҙы ул.

Буранбай һөйләгәнде ишетеп, Ҡаһым түрә лә йылмайҙы. Ҡайҙалыр арыраҡ кемдеңдер ҡурай моңона ҡушылып йырлағаны ишетелә:

Ҡаһым түрә мингән, ай, һор юрға, вай кем,
Теҙгендәре килә лә ялтырап.
Ҡаһым түрә уйын уйнатҡанда, вай кем,
Барса дошман тора ҡалтырап.

Яңғыҙ йырсыға күмәк кешеләр ҡушылды:

Көмөш кенә һаплы, ай, еҙ ҡылыс, вай кем,
Полковниккай Ҡаһымдың билендә.
Сәмәрҡәндтән килгән Сафыя һылыу, вай кем,
Илап та ҡалды илендә…

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Граф Беннигсен Беренсе башҡорт полкына ниндәй маҡсат менән килә?
**2.** Лейпциг эргәһендәге һуғышта башҡорт ғәскәрҙәренең күрһәткән батырлыҡтары хаҡында һөйләгеҙ.
**3.** Француз генералы барон де Марбо үҙенең көндәлектәрендә башҡорт яугирҙарын кемдәр менән сағыштыра?

**Ижади эш**

«1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт яугирҙарының батырлыҡтары» тигән темаға инша яҙып килегеҙ.

Парижға юл асыу өсөн иң аҡтыҡҡы нығытмаларҙан һаналған Монмартр ҡалҡыулығы өсөн штурм башланды. Уға туп-тура һөжүм итеүсе рус һалдаттары менән башҡорт егеттәре күпләп ҡырылды.

Шул ваҡытта ла һөйләшеүҙәр дауам итте. Флигель-адъютант Орлов маршал Морон менән бишенсе тапҡыр осрашты.

---

[1] *Рузи* – яҙмыш.

Капитуляция шарттарын төҙөп, һөйләшеүҙә ҡатнашҡан француздарҙан ҡултамғаларын ҡуйҙыртҡас, ул тағы ла батша резиденцияһына ҡайтып китте.

Адъютантын күргәс тә, Рәсәй императоры йөрәкһенде.

– Йә, ниндәй яңылыҡ алып килдең миңә был юлы? – тип ҡаршыланы ул адъютантын.

– Париж капитуляция яһаясаҡ, Ваше величество, – тип яуап ҡайтарҙы полковник Орлов.

Батша шатланды. Барыһын да ентекләп һорашҡандан һуң:

– Рәхмәт, дуҫҡайым, – тип адъютантын ҡосаҡланы.

Францияның баш ҡалаһы союздаш ғәскәрҙәргә бирелде.

1814 йылдың мартында Сена йылғаһы аша һалынған күпер аша союздаш ғәскәрҙәр Париж ҡалаһына табан ағылды.

Һөңгөләр менән ҡоралланған ҡыҙыл мундирлы атаман Платов казактары үтеп китте. Уларҙан аҙаҡ уҡ-һаҙаҡтарын яурындарына аҫҡан, өҫтәренә яңы бишмәт, осло түбәле бүрек, аяҡтарына сарыҡ ҡата кейеп һыбай килеүсе Беренсе, Икенсе, Дүртенсе, Бишенсе, Һигеҙенсе, Ун туғыҙынсы башҡорт, Икенсе мишәр һәм Икенсе типтәр полктары күренгәс, өйөлөшөп тороусы ҡала кешеләре ҡапыл тулҡынланды һәм шаушыу ҡубарып ҡысҡырыша-ҡысҡырыша ситкә һирпелделәр:

– Төньяҡ амурҙары!

– Улар ямандар!

– Ҡырағай азиаттар йыртҡыстарса ҡыланасаҡ!

– Төньяҡ амурҙарҙан казактар ҙа ҡалышмаясаҡ!

– Улар беҙҙән үс аласаҡ!..

«Төньяҡ амурҙары» менән «казактар» исемен ҡатнаштырып, бер-береһен ҡурҡытыусы француздарҙың ҡыланышы Ҡаһым түрәгә үтә мәрәкә һымаҡ тойолдо. Уға етә барған Буранбай менән башҡа башҡорт егеттәре лә үҙ-ара бышылдашып көлөштөләр.

– Ҡоттары алынды бит меҫкендәрҙең!

Бер аҙҙан һуң, һөңгөләр һәм уҡ-һаҙаҡтар менән ҡоралланған «Төньяҡ амурҙары»ның бик тыйнаҡ, ғорур йөҙҙәренән йылмайыу билдәһе өҙөлмәүен күреп, шау-шыу ҡубарып ҡасып барыусы француздар туҡталды. Уларҙың күпселек өлөшө, тамам тынысланып, кире боролдо.

Париж бульварҙарына табан үтеүсе союздаш ғәскәрҙәр ағымы бер тәүлек самаһы дауам итте.

* * *

Париждың баш һалыуына ике ай самаһы ваҡыт һиҙҙермәй генә үтеп тә китте. Европа һәм Рәсәй халҡының ҡанын ҡойоусы Наполеон тәхетенән төшөрөлөп, Эльба утрауына оҙатылғас, монархтарҙың теләге буйынса Францияның короле итеп Людовик XVIII ҡабаттан ҡуйылды.

Париж, бер ниндәй ҙә үҙгәреш булмаған һымаҡ, тынысланды һәм үҙ яйына йәшәй башланы.

Париж уртаһындағы Елисей яланында казактар менән бергә урынлашҡан башҡорт егеттәре лә ҡала тормошона тиҙ эйәләште.

* * *

Ғәскәр әҙерлеге тикшерелгәндән һуң ике көн ваҡыт уҙғас, смотрҙа ҡатнашасаҡ уҡсы дивизиялар, казактар һәм казачий башҡорт полктары, иртәнге таң беленер-беленмәҫтән, Париж урамдары буйлап ағылды.

Меңәрләгән һалдаттарҙың баш осо тәңгәлендә иҫәпһеҙ-һанһыҙ бик күп штыктар сайҡала һәм байраҡтар елберләй.

Уҡсылар дивизияһындағы һәр полк, һәр батальон һәм һәр рота бер-береһенән тейешле алыҫлыҡта бара.

Уҡсы полктар эргәһенән артабан уҙған казактар менән казачий башҡорт полктары артынса лафеттарға ҡуйыулы пушкалар, артиллериялар һәм ҡыҙыл, күк, йәм-йәшел мундирҙар кейгән кешеләр араһында барыусы музыканттар ҙа үҙҙәре өсөн алдан билдәләнгән урынға табан ыңғайланылар.

Барлыҡ орден һәм миҙалдарын тағып, өр-яңы мундирҙарын кейгән генералдар менән офицерҙарҙың ғына түгел, бындағы бөтә һалдаттарҙың да йөҙө, байрамса нурҙар сәсеп, шатлыҡлы балҡый. Варшавала, Данцигта, Берлинда, Лейпцигта, Веймарҙа, Гамбургта, Глагоуҙа уҙғарылған парадтарҙа ҡатнашып, барлыҡ Европа халыҡтарын үҙенсәлекле кейемдәре, ҡоралдары һәм сая батырлыҡтары менән хайран ҡалдырған Беренсе, Икенсе, Дүртенсе, Бишенсе, Һигеҙенсе, Туғыҙынсы, Ун икенсе, Ун өсөнсө, Ун дүртенсе, Ун бишенсе һәм Ун алтынсы һыбайлы башҡорт полктары яугирҙары ла, сит ил кешеләре алдында үҙҙәренең абруйын түбән төшөрмәҫкә тырышып, ошондай тантаналы байрам өсөн сәрмәләрендә һаҡлап ҡына йөрөткән иң яҡшы ҡалпаҡтарын, кәзәкейҙәрен, ҡаталарын

кейеп, елкәләренә уҡ-һаҙаҡтарын аҫҡан көйө, эйәр өҫтөндә ғорур ҡиәфәттә баралар, һуғыш йылдарындағы барлыҡ ауырлыҡтарҙы бергә уртаҡ кисереп, хужаларын күп тапҡырҙар үлемдән ҡотҡарған меҫкен хайуанҡайҙар ҙа, кешеләрҙең күңеле күтәренке, шат икәнлеген һиҙеп, музыканттар уйнаған дәртле көй ыңғайына баштарын сайҡай-сайҡай, йыш-йыш аҙымдар менән атлайҙар.

Билдәләнгән урынға барып еткәс, смотрҙа ҡатнашасаҡ һыбайлы башҡорт полктарына ваҡытлыса башлыҡ итеп тәғәйенләнгән Ҡаһым түрә, Ҡолайғырын уйнаҡлатып, тигеҙ сафтарға теҙелгән башҡорт полктары алдына сыҡты. Ул, һыбайлы башҡорт полктары менән һоҡланып, ҡалҡыуыраҡ урында айғырын туҡтатты.

Һыбайлы башҡорт егеттәре, Ҡаһым түрәнән күҙҙәрен алмайынса, тейешле бойороҡ көттө.

Ҡаһым түрә, башҡа рус офицерҙары һымаҡ, байрамса ҡупшы кейенгәйне. Уның өҫтөндә өр-яңы казак сәкмәне, яурынында – алтын суҡлы эполет, башында – түңәрәк бүрек, аяғында – шпорлы итек. Түңәрәк һаҡалы ҡыҫҡа итеп алдырылған, мыйығы ике яҡҡа тырпайтылған, ә күҙҙәре шатлыҡлы нурҙар сәсеп балҡый.

Һыбайлы полктар бер рәткә теҙелешеп бөткәс, Ҡаһым түрә батша уҙғарасаҡ смотр тәртибен ҡыҫҡаса аңлатты ла атаман Платовҡа башҡорт полктарының әҙерлеге тураһында рапорт тапшырҙы.

Ҡалған һәр минут көсөргәнешле тынлыҡта уҙҙы.

Көн аяҙ. Зәп-зәңгәр күктә бер генә болот та күренмәй. Ер ситенән ҡояш күтәрелеп килә. Уның нурҙарына сағылып, һөңгөләр, мылтыҡ көбәктәре һәм башҡа һуғыш ҡоралдары ялтырайҙар.

Тау итәгендәге иң беренсе уҡсылар полкына Рәсәй императоры менән башҡа илдәрҙең монархтары яҡынлаша башлағас, көслө генерал-марш көйө һәм «ура» яңғыраны. Уға яңынан-яңы полктар һәм барлыҡ һалдаттар ҙа ҡушылғас, «ура» тауышы өҙлөкһөҙ шаңдауға әүерелде.

Беренсе башҡорт полкы тәңгәлендә туҡталған Рәсәй императорының былай ҙа ягымлы йөҙө тағы ла нығыраҡ алсаҡланған һымаҡ күренде Ҡаһымға. Аҡ батша менән ярышлап һыбай килеүсе башҡа монархтар ҙа, уларҙың ярандары менән сит ил вәкилдәре лә йәнләнделәр һәм бер-береһенә ҡарашып көлөштөләр.

– Амурҙармы?

– Төньяҡ амурҙары!

– Төньяҡ амурҙарының уҡ-һаҙаҡтары үтә ябай кеүек күренһә лә, үлемесле! Атты үтәнән-үтә тишеп сыға, тиҙәр.

– Эйе, ундай уҡтар күп француздарҙың ғүмерен өҙҙө, – тип үҙ-ара бышылдаштылар улар.

Һыбайлы башҡорт егеттәренең бөхтә, тап-таҙа кейемдәренә лә, үҙҙәрен әҙәпле тота белеүҙәренә лә, аттарының иң ауыр шарттарҙағы сыҙамлылығына ла монархтар һәм сит ил вәкилдәре ихтирам менән ҡаранылар. Сөнки, имеш-мимеш һүҙҙәренә ышанып, улар башҡорттарҙы «вәхшиҙәр» тип күҙ алдына килтергәйнеләр. Ғәмәлдә бөтөнләй башҡаса килеп сыҡты. Һуғыш ваҡытында теләһә нисек кейенеп тә, смотрға өр-яңы аҡ сәкмәндәрен, ҡыҙыл бүректәрен, аҡ буҫтау ҡунислы ҡаталарын ошондай тантаналы көнгә һаҡлауҙары үҙе бер һоҡландырғыс күренеш ине!

Аҡ батша ла башҡорттарҙың смотрға әҙерлекле килеүенә ҡәнәғәт булды. Ул флигель-адъютанты полковник Орлов менән ризалашып баш ҡаҡты ла мөләйем күҙ ҡарашын Ҡаһымға йүнәлдерҙе.

– Полковник, Ватанға тырыш хеҙмәтегеҙ өсөн һеҙгә рәхмәт белдерәм!

Ҡаһым түрәнең яуап һүҙен бүлдереп, көслө «ура» яңғыраны. Тауыш баҫылғас, йәнен ус төбөндә тотҡан хәлгә етеп эйәрендә шыҡыйып шаҡ ҡатҡан Ҡаһымға туп-тура ҡарап, Рәсәй императоры һуғышта батырлыҡ күрһәткән башҡорт егеттәрен маҡтаны.

«Үҙебеҙҙең тормош тураһында әйтергәме икән әллә батшаға? Иң уңайлы мәл бит! Бындай мөмкинселек бүтәнсә бер ҙә ҡабатланмаясаҡ... Әммә һүҙҙе нимәнән башларға?» – тип уйлаған Ҡаһымдың тыны ҡыҫылды, күҙ алды томанланғандай булды.

Аҡ батша, башҡорт егеттәренең батырлығы тураһында маҡтауҙан тыйылып, һаман яғымлы йылмайған көйө:

– Полковник, һеҙҙең хаҡта ла бик йыш яҡшы һүҙ ишетергә тура килде миңә. Хәҙер тартынмай-нитмәй әйтегеҙ: һеҙҙе нимә менән бүләкләйем? – тип һораны.

Ҡаһым ҡапыл баҙнатһыҙланды. Ул, үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр кисергән тетрәткес тойғоларҙан нисек ҡотолорға белмәйенсә, һәр һүҙҙе йөрәгенән һығып тигәндәй сығарып, көсөргәнешлек менән ҡалтырана-ҡалтырана, көс-хәлгә яуап ҡайтарҙы:

– Үтә мәрхәмәтле булыуығыҙға рәхмәт, Ваше величество. Беҙ бүләк өсөн һуғышманыҡ. Рәсәй иле өсөн, уның азатлығы, киләсәк бәхете өсөн һуғыштыҡ. Һеҙгә, Ваше величество, әйтәсәк теләгебеҙ тик шул: үҙегеҙ вәғәҙә иткән буйынса, ер-һыуыбыҙҙы кире ҡайтарып, ирек[1] бирһәгеҙ, башҡа нәмә кәрәкмәй…

Императорҙың алсаҡ йөҙө таный алмаҫлыҡ булып томрайҙы. Ул, асыуланып, аҡ бирсәткә кейгән бармаҡтары араһына ҡыҫтырған теҙгенен тартты һәм атын ситкә табан борҙо.

«Эште боҙҙом!.. Батшанан яҡшылыҡ булмаясаҡ миңә!.. Ҡалған башҡорт полктары эргәһенә барырға ла теләмәне. Хәҙер ҡалайтырға? Бәләнән нисек ҡотолорға?» – тип уйланы Ҡаһым, эстән генә өҙгөләнеп.

Бик тиҙ тынысланырға өлгөргән батша, бер ни ҙә булмағандай, тышҡы ҡиәфәтен саҡ ҡына ла үҙгәртмәне. Әүәлгесә яғымлы йылмайыуынан тыйылмайынса, кареның[2] тап урта өлөшөнә етеп туҡталды. Шул саҡ команда яңғыраны. Батша ҡаршыһындағы полктар, тигеҙ сафтарға теҙелешеп, тантаналы марш менән бер-бер артлы урындарынан ҡуҙғалды.

Иҫ киткес һоҡландырғыс, ғәжәп матур һәм бер тигеҙ хәрәкәттә барыусы рус ғәскәренең ҡыймылдауын иғтибар менән күҙәткән меңәрләгән Париж ҡалаһы һәм сит ил халыҡтары Рәсәй империяһының данын, ҡеүәтен арттырыусы, уның именлеге һағында нык тороусы ҡоралды көстәрҙе тәбрикләп, оҙаҡ алҡышланылар.

Рәсәй императоры Александр Павлович та сикһеҙ шат ине былдай тетрәткес күренешкә… Ул, смотр үткәргән ваҡытта ҡатнашҡан башҡа монархтарҙан үҙен өҫтөн һәм ғорур тоторға тырышып, аҡ бирсәткәле ҡулын баш осо тәңгәленә күтәреп болғай-болғай, данлыҡлы ғәскәрен ҡотланы. Ә күңелен һиҙҙермәй генә низер өйкәне, ҡырҙы. Ҡаһымдан ишеткән һүҙҙәр ҡолағы төбөндә сыңлауы уның йөрәген тетрәтте һәм эсен бошорҙо. Күңелендәге утлы өйөрмә көсәйгәндән-көсәйә барған һайын, уның күҙ алдына бынан ҡырҡ йыл самаһы элгәре крәҫтиәндәр болаһы килеп баҫты. Шул заманда Емельян Пугачёвҡа ҡаршы һуғышырға ебәрелгән башҡорттарҙы боласыларға алып барып ҡушып, батша ғәскәренә һәм байҙарға буйһонорға теләмәйенсә, нисәмә йылдар буйы Рәсәйҙе тетрәткән Салауат

---

[1] Кантондарҙы бөтөртөү, башҡорттарҙы үҙ яйына йәшәтеү хаҡында һүҙ бара.

[2] *Каре* – һалдаттарҙы дүртмөйөш формаһында теҙеү.

Юлаевтан ни ере кәм азатлыҡ тураһында һүҙ ҡуҙғатырға баҙнатсылыҡ итеүсе йәп-йәш башҡорт полковнигының? Киреһенсә, ул Салауат Юлаевҡа ҡарағанда ла ҡурҡынысларaҡ! Уның хәрби академияла тейешле белем алыуы, Ватан һуғышы ваҡытында стратегия һәм тактиканы практикала үҙләштереүе, фельдмаршал Кутузов штабындағы офицерҙар менән аралашыуы, уларҙан күп нәмәләрҙе өйрәнергә тырышыуы ла яҡшылыҡҡа түгел. Айырым кешеләренең һөйләүҙәренә ҡарағанда, ул башҡорт полковнигы Парижда ла үҙен сәйер тота икән. Уның якобинсылар тормошон ентекләп һорашыуы, революционерҙар тарихын ентекләп өйрәнеүе, дәүләт сәйәсәтенә ризаһыҙлыҡ белдереүсе Петербургтағы йәш рус дворяндарына яҡынлашыуы, улар менән бәйләнеште нығытырға маташыуы нимәне аңлата? Үҙенә тәғәйенләгән шәхси бүләктән баш тартып, башҡорттарға ер-һыу һәм азатлыҡ һорауы башҡорт полковнигының яман уй менән йөрөүен раҫлай... Белемле башҡорт егете, һис шикһеҙ, ҡурҡыныслы, унан нисек тә булһа ҡотолоу мөһим!..

Смотрҙа ҡатнашыусы ғәскәре ағымынан күҙҙәрен алмай яғымлы йылмайған Рәсәй императоры Ҡаһым түрәнән ишеткән һүҙҙәрҙе тиҙерәк онотторға тырышты. Ләкин булдыра алманы. Емельян Пугачёв болаһы заманындағы һәр тетрәткес ваҡиғаны өләсәһе Екатерина II бик йыш ишетеп үҫкәнгәмелер, Александр Павлович һаман борсолоп уйланды. Рәсәйҙә ҡасан да бола булырмы икән ни тағы? Емельян Пугачёв етәкселегендәге һымаҡ бола ҡупһа, Наполеон ғәскәрен ҡыйратҡан барлыҡ рус һалдаттары ла унан ситтә тороп ҡалмаҫтар кеүек тойолдо батшаға.

Башҡа монархтар, сит ил вәкилдәре һәм ярандары, Александр Павловичтың уй-тойғоларын аңламайынса, рус һалдаттарының тигеҙ сафтарға теҙелеп, ышаныслы аҙымдар менән бер кешеләй барыуҙарын һоҡланып күҙәтеп, һаман алҡышланылар:

– Эх, нисек матур хәрәкәтләнәләр!

– Рус һалдаттары һуғышта ғына түгел, смотрҙа ла үҙҙәрен яҡшы тота белә!

...Тантаналы смотр бөткәс тә, тигеҙ сафтарға теҙелгән һалдаттарға, һыбайлы казактар менән башҡорт егеттәренә һәм башҡа яугирҙарға Рәсәй императоры исеменән полк командирҙары «За взятие Парижа 19 марта 1814» миҙалын тапшырҙылар.

Батша уҙғарған смотрҙың иртәгеһенә, алдан билдәләнгән маршруттар буйынса, төрлө төркөмдәргә тәғәйенләнгән рус һәм казачий башҡорт полктары ҡайтыу юлына ыңғайланылар.

* * *

Юлға сыҡҡандың икенсе аҙна уртаһында, Веймарға яҡын урындағы бәләкәй генә йылға буйында туҡталып, казактар һәм Беренсе башҡорт полкы егеттәре ныҡлап ял итергә булдылар.

Ҡаһым түрә бында ла тыныс ултырып сыҙаманы. Буш ваҡытын әрәмгә уҙғарырға теләмәйенсә, ул Беренсе башҡорт полкы буйһонған рус ғәскәре командирынан Гёте йәшәгән өйҙө һәм уның үҙен барып күрергә рөхсәт һораны.

Рус ғәскәре командиры Ҡаһымдың теләгенә ҡаршы булманы.

Шул уҡ көндө, Буранбайҙы, Буранғол менән Ҡаһарманды, йәш ҡурайсы Ишмулланы, Йәнтүрәне һәм йөҙ баштарын эйәртеп, Ҡаһым Веймарҙа йәшәгән Гётены күрергә китте.

Юлда һыбай барышлай, Ҡаһым бик ныҡ тулҡынланды. Сөнки бөтә донъя халҡына киң билдәле, пәйғәмбәрҙәр менән генә сағыштырырҙай бик оло аҡыл эйәһе уларҙы нисек итеп ҡаршы алыры билдәһеҙ ине.

«Гёте йәшәгән ергә барып етергәме, әллә кире бороломғамы? – Ул, икеләнеп, Ҡолайғырын бик йыш туҡтатты. Шунан, кире боролорға хәле етмәйәсәген аңлап, бүленгән юлын дауам итте. – Оло кешене маҙаһыҙлап йөрөүе бик тә йәмһеҙ, уңайһыҙ һәм һис тә килешмәй. Әммә яйы тура килгәндә Гётены күрмәй китһәм, мәңге үкенәсәкмен. Бындай мөмкинлек башҡаса ҡабатланмаясаҡ. Оят булһа ла, бер тәүәккәллегәс, бөйөк шағирҙы күрергә һәм уның менән осрашырға тейешмен», – тип ул үҙен үҙе батырландырырға тырышты.

Урал тауҙары тәбиғәте күренешен хәтерләткән баҡсалағы ағастар менән сәскәләр араһындағы Гётеның өс ҡатлы өйөн күреп, ул хайран ҡалды. Бына ҡайҙа икән ожмах! Гёте өйөнөң аҫҡы ҡаты кирбестән һалынған. Иң өҫкөһө, өсөнсө ҡатының стеналары, бүрәнә бураға оҡшатып, һарыға буялған. Уның ишек алды киң. Таҙа. Өйҙөң тирә-яғында үҫкән сәскәләрҙән хушбуй еҫе аңҡый.

Үҙҙәренең килергә тейешлеге тураһында белгертеп алдан кеше ебәрелгәнлектән, башҡорттарҙы Гётеның хеҙмәтсеһе ишек алдында ҡаршыланы.

Ул яғымлы иҫәнләште лә, башҡорт егеттәрен эйәртеп, өйҙөң икенсе ҡатына күтәрелде. Тап-таҙа итеп йыйыштырылған өйҙөң бүлмәләре иркен, киң һәм матур итеп йыһазландырылған.

Ишеге асыҡ төпкө бүлмәнән хеҙмәтсеһен эйәртеп сыҡҡан Гётены күргәс, Ҡаһым йәнә тулҡынланды. Гёте бөтөнләй икенсе, ул күҙ алдына килтергән кеше һымаҡ түгел ине. Өҫтөнә – күк сюртук, аяғына ябай башмаҡ ҡата кейгән, ә саҡ ҡына алға бөкрәйгән кәүҙәһе мөһабәт!

Бөйөк шағир һәм ғалим алдында үҙен нисегерәк тоторға белмәйенсә, Ҡаһым ҡаушаны, ҡапыл юғалып ҡалды.

Гёте, яғымлы йылмайып, ҡунаҡтарының һәр ҡайһыһы менән берәм-берәм күрешеп сыҡҡас, софаға[1] ултырырға тәҡдим яһаны.

Бер аҙ ваҡытҡа барыһы ла һүҙһеҙ ҡалды. Иркен бүлмә эсендә тынлыҡ урынлашты. Гёте, өндәшмәйенсә, ҡунаҡтарына ҡыҙыҡһынып ҡараны. Башҡорттар ҙа, тауыш-тын сығармайынса, өй хужаһын күҙәттеләр.

Гётеның йөҙөнән яғымлылыҡ өҙөлмәне. Уны ошолай ябай, мөләйем һәм һөйкөмлө булыр тип һис кенә лә уйламағайны Ҡаһым. Ул асыҡ сырайлы, ҡашы бөгөлөбөрәк тора, күҙҙәре уйсан, аҡыллы. Танауы тура ҡырлы. Ҡасандыр ҡуйы үҫкән сәсе ныҡ һирәгәйгәнлектән, былай ҙа киң маңлайы тағы ла нығыраҡ киңәйгән һымаҡ күренә. Уның яңағы тәңгәленән бит тиреһе һалынып төшкән. Гёте төҫ-һыны менән алтмыш биш йәштәр самаһындағы кешене хәтерләтә ине.

Оҙаҡ шымып ултырыуҙы йәпһеҙ һананы, ахырыһы, өй хужаһы. Ҡаһымға ҡарап мөләйем генә йылмайҙы ла үҙе башлап һораны:

– Тәржемәсе кәрәгерме беҙгә?

– Мин немецса һәм французса һөйләшә beләм, – тине Ҡаһым.

– Улай булғас, яҡшы. – Гёте шатланды. – Беҙ һөйләшкәндәрҙе яҡташтарығыҙға үҙегеҙ төшөндөрөрһөгөҙ. Мин һеҙҙең менән осрашыуыма бик тә шатмын. Башҡорттарҙың ҡыйыулығы, төрлө һуғыштарҙа күрһәткән батырлыҡтары тураһында күп ишеткәнем бар. Бына үҙегеҙҙе беренсе тапҡыр осраттым, – тине лә Гёте башҡорттарҙың тормошон һәм көнкүрешен ентекләп һорашырға тотондо.

---

[1] *Софа* – тәпәшәк киң диван.

Дуҫтарса башланған әңгәмә барышынан ихласлыҡ, ысын ләззәтләнеү һәм ғорурлыҡ тойғоһон йөрәге менән кисереп, Ҡаһым өй хужаһы ҡыҙыҡһынған бөтә нәмәне түкмәй-сәсмәй һөйләне.

Гёте, уны бүлдермәйенсә, ихлас тыңланы, Ҡаһым һөйләүҙән тыйылмайынса, өндәшмәне. Аҙаҡтан, кешелеклелеген, әҙәплелеген, ябайлығын, тыныслығын һәм бөйөклөгөн саҡ ҡына ла юғалтмайынса, нимә хаҡында ғына һөйләмәһен, ашыҡманы. Һәр һүҙҙе ныҡлы уйлап, үтә яй һуҙып әйтте.

Әңгәмә тамамланғас, Гётеның секретары Крейтер, улы менән ҡатыны бүлмәгә килеп инде. Улар артынса башҡа ҡунаҡтар ҙа, шул иҫәптән французса яҡшы һөйләшә белгән сит ил кешеләре лә, бер ыңғай йыйнала башланылар.

Кешеләр бүлмәлә күбәйгән һайын, шау-шыу артты. Ҡунаҡтарҙың барыһы ла үҙҙәрен бында бик иркен тоттолар. Тартынмайынса, бер-береһен мәрәкәләнеләр, шаярттылар һәм көлдөләр.

Уларға ҡамасауламаҫҡа тырышҡан Ҡаһым, рәхмәт әйтеп, китергә йыйнала башлағас, Гёте ҡырҡа ҡаршы төштө.

– Һеҙҙе ҡунаҡ итмәйенсә, һыйламайынса, өйөмдән сығармайым! – тип ул башҡорт егеттәрен икенсе иркен бүлмәгә алып сыҡты. Ҡунаҡтар, ҡалмайынса, уларға эйәрҙе.

Матур-матур бик күп һауыт-һабалар ҡуйылып, мул һый әҙерләнгән оҙон һәм киң өҫтәл артына барыһы ла ултырышҡас, табын менән етәкселек итеү вазифаһын Гёте үҙ өҫтөнә алды. Ул бер генә ҡунағын да иғтибарһыҙ ҡалдырманы. Өҫтәлдәге һәр ашамлыҡты ҡунаҡтары алдына ҡуйылған алтын тирәсле тәрилкәләргә һалып сыҡты.

Гёте ҡунаҡтарын тырышлыҡ менән һыйланы.

Кешелекле, мөләйем хужаның һәр хәрәкәтен күҙәткән Ҡаһым иҫе китеп ғәжәпләнде: «Донъяның иң юғары культураһы бына кемдә тупланған икән! Ул үҙе бөйөк, үҙе үтә ябай!..»

Былдай табында үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр булғанлыҡтан, Буранбайҙы бөтөнләй башҡа нәмәләр ҡыҙыҡһындырҙы. Башҡорттарға итте тәрилкәлә ваҡ-ваҡ киҫәктәргә тураҡлап, сәнске менән сәнсеп ашауҙары һәм башҡа күренештәр бик ҡыҙыҡлы күренде.

Саҡ ҡына ла уйын-көлкө өҙөлмәгән мул һыйҙан һуң, Гёте башҡорт егеттәренең думбырала, ҡумыҙҙа һәм ҡурайҙа уйнауҙарын ҡыҙыҡһынып тыңланы, төрлө нәмәләрҙе һорашты.

Әңгәмә әкренләп-әкренләп донъя күләмендәге сәнғәт торошона күсте.

Үҙ ижады тураһында һөйләгәндә Гёте тулҡынланды һәм һүҙгә әүәҫләнде.

– Яҙмышыма һис зарлана алмайым. Ләкин, танмайым, ижади хеҙмәтем ифрат та ауыр. Хәҙер миңә алтмыш алтынсы йәш. Шул ғүмеремдең, исмаһам, дүрт кенә аҙнаһын да кинәнеп йәшәй алманым мин. Үҙемде һәр саҡ таштар аҡтарған кеше һымаҡ итеп тойҙом һәм тоям. Ижадым, поэтик уйланыуҙарым ысын мәғәнәһендә ҡыуаныс һәм бәхет килтерҙе. Минеңсә, һәр кеше нимәгә һәләтлелеген белеп эш итһә генә үҙен аҡыллы тип иҫәпләргә хаҡлы. Иң ихлас, иң бөйөк талант иң юғары кимәлгә күтәрелеүе менән һәр саҡ бәхетле, – тине лә, Ҡаһымдың яҡташтарының күңелһеҙләнеүен тойоп, ул саф һауала бер аҙ йөрөп әйләнергә тигән тәҡдим яһаны.

Бүлмәләге барлыҡ ҡунаҡтар, бер-бер артлы эйәртенешеп, шаулаша-шаулаша, тышҡа ағылып сыҡтылар.

Гётеның йәм-йәшел иркен баҡсаһы күренешен иҫендә нығырағ ҡалдырырға тырышып, Ҡаһым тирә-яҡты иғтибар менән күҙәтте. Гёте ҡунаҡтарын ҡом йәйелгән киң юл буйлап алып китте.

Ҡаһым, яйын тап килтереп, тарамыш кереш менән ныҡ тартылған йәйәһе менән уҡ-һаҙағын бүләк иткәс[1], Гёте сабый бала шикелле ҡыуанды. Бер аҙҙан тынысланғас, йәйәне төрлөсә әйләндергеләп ҡараны.

– Нимәнән эшләнгән был ҡорал?

– Сүсле сәтләүек ағасынан. Ул, ҡап уртаға ярылып, шул йөйөнән ҡабат йәбештерелә, – тип аңлатты Ҡаһым.

– Бында ниңә беленмәй йөйө?

– Уға уратылып йоҡа туҙ йәбештерелгән. Ағастың бөгөүле ике яҡ осо ғына асыҡ ҡалдырыла...

Йәйә менән уҡтың нисек эшләнеүен төпсөрләп һораша-һораша, Гёте ҡунаҡтарын баҡсаның асыҡ өлөшөнә алып барҙы ла уҡты Ҡаһымға һондо.

– Хәҙер үҙегеҙ атып күрһәтегеҙ.

– Ҡайҙа төбәп атырға? – Ҡаһым уҡты терешкә һалды.

– Һауаға, – тине Гёте.

Ныҡ тартылған кереш ысҡындырылыу менән, уҡ һауаға осто. Ул ҡояш нурҙарына ҡойонған болоттарға табан барҙы-барҙы ла, күҙ күреме етмәҫтәй алыҫлыҡҡа етеп, кирегә боролдо. Бер аҙҙан һуң яҡындағы ғына ергә төшөп ҡаҙалды.

---

[1] Ул уҡ-һаҙаҡ Веймарҙағы Гёте музейында оҙаҡ йылдар һаҡланған.

Гёте ҡысҡырып көлдө.

– Бирегеҙ әле, мин дә атып ҡарайым, – тип, ул уҡ менән йәйәне алды. – Нисегерәк итеп йәпле атырға?

– Бына ошолай тотоғоҙ. – Ҡаһым кәүҙәне һәм аяҡтар менән ҡулды нисек тоторға икәнлеген аңлатты.

Гёте, ныҡ һуҙып тартҡан кереште ысҡындырыу менән биш-алты аҙым самаһы осоп барып үлән араһына төшкән уҡты күргәс, үҙенән-үҙе көлдө.

– Үәт, ҡылдым бит ҡылыҡты! Бындай ҡоралды минең ише кешеләр файҙалана алмаясаҡ. Уҡтан атыу өсөн көс, таһыллыҡ, бик йыш күнегеү талап ителә. – Ул, йылмайып, Ҡаһымға ҡараны. – Сәпкә атырға теләйһегеҙме?

Ҡунаҡсыл йорт хужаһы әйткән тәҡдимде Ҡаһым яҡташтарына тәржемә иткәс, тегеләр барыһы ла сәпкә атырға ризалыҡ белдерҙеләр.

Гёте бер бит аҡ ҡағыҙға түңәрәктәр яһаны. Уны баҡса ситендәге һарай стенаһына йәбештерҙе лә йөҙ аҙым самаһы алыҫлыҡтағы урынға барып баҫты.

– Ошонан тороп атығыҙ!

– Һәр кеше берәр уҡ атһа, етерме икән? – тип һораны Ҡаһым.

– Етер, – тине Гёте, ҡәнәғәт йылмайып.

Башҡорт егеттәре сәпкә ата торған урынға барып теҙелеште.

Бер-бер артлы осҡан уҡтар сәптең ҡап урта өлөшөнә барып ҡаҙала башлағас, кереш тартҡан егеттәрҙең мәргәнлегенә ғәжәпләнеп, Гёте уларҙың тәне, ныҡ мускулдары, кереш тартҡан саҡта матур ҡиәфәттәре, торошо менән һоҡланды: «Уҡтарҙан атып күнегеүҙе беҙҙең гимнастика мәктәптәрендә лә ойоштороорға кәрәк ине!»

Ун биш уҡтың бөтәһе лә сәп уртаһына барып ҡаҙалғас, бөйөк кеше алдында хурға ҡалмауҙары өсөн ҡыуанышып, егеттәр ғорурлыҡ тойғоһо кисерҙе.

Гётенан маҡтау һүҙен ишеткәс, уларҙың шатлығының игесиге булманы.

Гёте ла үҙен, мәргән уҡсылар менән осрашыуына ҡыуанып, бәхетле тойҙо. Одиссейҙың һәм Гомер батырҙарының уҡтарына бәйләнешле ҡыҙыҡлы, үтә мауыҡтырғыс ваҡиғалар тураһында күп нәмәләр һөйләне.

* * *

Бөйөк немец шағиры Иоган-Вольфганг Гёте менән Веймарҙа осрашҡандан бирле, Ҡаһым түрә үҙендә дәрт, көс һәм мәңге юйылмаҫ хистәр, рухи байлыҡ өҫтәлеүен тойҙо.

...Наполеон ғәскәрен ҡыйратып, Парижға тиклем барып еткән рус ғәскәре Пруссиялағы бәләкәй генә Шварца ауылы аша ҡайтты. Тик казактар менән һыбайлы башҡорт егеттәре генә ул ауылға һуғылмай уҙҙылар. Французларға ҡаршы батырҙарса һуғышып, бөтә донъяла дан яулаған «төньяҡ амурҙары»н күрмәйенсә тынысланa алмаясағын аңлаған Шварца ауылы кенәзе Карл Гюнтер алты саҡрым алыҫлыҡта туҡталған Етенсе башҡорт полкы яугирҙарын ҡунаҡҡа саҡырҙы.

Ул ебәргән сапҡын китеүгә ярты сәғәт самаһы ла уҙманы, кенәз һорауы буйынса генерал Щербаков ебәргән һыбайлы башҡорт егеттәренең йән-фарман сабышып килеүҙәрен алыҫтан уҡ төҫмөрләп, Шварца ауылы кешеләре йылғаның уң яҡ ярында урынлашҡан сиркәү ҡаршыһында йыйнала башланылар. Ғорур ҡиәфәттәге һыбайлы башҡорт егеттәренең – «Төньяҡ амурҙары»ның өҫ-кейемдәрен, һөңгөләрен, яурындарына аҫҡан уҡ-һаҙаҡтарын күргәс, улар үҙ-ара ҡыҙыу бәхәсләшергә тотондолар.

– Уҡ тигән һуғыш ҡоралдары ҡамыштан эшләнгән түгелме?



*А. Г. Королевский.* «Төньяҡ амурҙары»

– Юҡ, ағастан юнылған, ти.

– Ағастан юнылһа ла, ул уҡ ат ҡорһағын үтәнән-үтә тишеп сыға ала, имеш, тиҙәр.

– Булмаç, ышанмайым.

– Ә мин ышанам! Амурҙарҙың ул ҡоралы үлемесле булмаһа, француздарҙың ҡото алынмаç ине…

Кенәз Карл Гюнтер ҙа ябай ғына күренгән уҡтың үлемесле икәнлегенә шик белдергәс, башҡорт егеттәренең асыуы ҡабарҙы. Улар, үҙҙәрен ҡунаҡҡа саҡырған хужаларҙың атаһын танытайыҡмы тигәндәй, бер-береһенә ҡарашып алдылар ҙа, эйәрҙәренән төшмәйенсә, сәмләнешеп, шаулаша башланылар.

– Уҡ-һаҙаҡтарыбыҙҙы кәмһетер, хурлар өсөн саҡырҙығыҙмы бында беҙҙе?

– Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алған уҡ-һаҙаҡ та тигән ҡоралын. Аямаған йәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын, тип тиккә генә йырламай башҡорт!..

Немецса ап-аруҡ һөйләшкән «төньяҡ амурҙары»ның ярһыуы бер аҙ баçылғас, кенәз Карл Гюнтер сиркәүҙең күккә һонолған оҙонса көмбәҙенә үрелеп ҡараны.

– Атығыҙ шуға!

Башҡорт яугирҙары, үҙҙәре һанға һуҡмаһалар ҙа, сиркәүгә атыуҙы әҙәпһеҙлек һанап, кенәз эргәһендә торған оло танаулы священник Киоте Фридрих Августҡа төбәлделәр. Тимер башаҡлы ағас уҡ сиркәүгә зыян килтермәйәсәген аңлаған священниктан рөхсәт алғас, һуғышсыларҙың береһе тоçҡамайнитмәй атып ебәреү менән ҙур тиҙлектә осҡан уҡ, ҡалын тимер көпмәне тишеп, оҙонса көмбәҙҙең ҡап урта өлөшөнә барып ҡаҙалды һәм шунда тороп ҡалды.

## ? Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Дәреслектәге был өҙөктәр романдың төрлө урындарынан алынған. Уларҙа 1812 йылғы Ватан һуғышына бәйле төрлө ваҡиғалар сағылдырыла. Йөкмәткеләренә ҡарап, үҙ аллы өҙөктәрҙе табығыҙ, хронологик яҡтан тәртипкә килтерегеҙ. Бөтәһенә лә бергәләп исем ҡушығыҙ һәм түбәндәге һорауға яуап бирегеҙ: исеме һеҙгә яҡшы таныш булған Буранбай сәсән дә 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнаша. Был әҫәрҙәге Буранбай образында уның ҡайһы бер һыҙаттарын күреп буламы?

**2.** Рәсәй императоры Александр I тарафынан үткәрелгән башҡорт ғәскәрҙәренең смотры нисек тасуирланған?

**3.** Император Александр I менән Ҡаһым араһындағы ҡыçҡа ғына әңгәмәнең йөкмәткеһен, Ҡаһымдың кисерештәрен һөйләп бирегеҙ.

**4.** Рус императорының Ҡаһымға булған мөнәсәбәте, уның сәбәптәре хаҡында фекерегеҙҙе әйтегеҙ.

### Хәтергә төшөрәбеҙ

Йәнтүрә тигән исемде тағы ниндәй әҫәрҙә осратҡанығыҙ бар?

### Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ

**1.** Полк командиры Лачин үҙенең башҡорт ғаиләһендә тыуғанын фамилияһы буйынса нисек аңлатып бирә?
**2.** Тәүге алышта башҡорттар үҙҙәрен нисек күрһәтә?
**3.** Өҙөктәрҙә артабан төрлө ваҡыттағы һуғыш эпизодтары (Бородино, Лейпциг яны һ. б.) һүрәтләнгән урындарға иғтибар итегеҙ. Уларҙа башҡорттарҙың ҡатнашҡаны хаҡында ни әйтерһегеҙ?
**4.** Башҡорт яугирҙары Кутузов менән тәү тапҡыр ниндәй шарттарҙа осраша?
**5.** Ҡаһым түрәнең генерал Беннигсен менән һөйләшеү ваҡиғаһы һеҙҙә ниндәй тәьҫир ҡалдырҙы?
**6.** Аҡ батшаның Ҡаһымға «Һеҙҙе нимә менән бүләкләйем?» тигән һорауына ул нимә тип яуап бирә?
**7.** Был яуап Ҡаһымдың үҙен һәм батшаны ниндәй борсолоуҙарға дусар итә?

### Интернеттан мәғлүмәт табабыҙ

Бородино һуғышы рус әҙәбиәтендә тағы ла ниндәй әҫәрҙәрҙә сағылдырылған?

### Ижади эш

Башҡорттарҙың Франциянан үҙ илдәренә ҡайтышлай Веймар ҡалаһында атаҡлы немец шағиры Гёте менән осрашыуы – ысынбарлыҡта булған хәл. Әммә был осрашыуҙың нисек үткәнен ентекле дәлилләгән документтар беҙгә әлегә билдәле түгел. Яҙыусының әҫәрҙә художестволы һүрәтләгән күренеше һеҙгә оҡшанымы? Үҙегеҙ нисек күҙ алдына килтерер инегеҙ?

## «Төньяҡ амурҙары» тураһында

Минең бала сағым һәм үҫмер йылдарым Урал тауҙары араһындағы ҡуйы урман эсендә юғалып ҡалған Исмаҡай ауылында уҙҙы. Лев Толстойҙың шул ауылдың бәләкәй генә китапханаһында һаҡланған «Һуғыш һәм солох» исемле роман-эпопеяһын беренсе тапҡыр ҡулымда тотоп ҡарау бәхетенә ирешкәйнем. Бөйөк яҙыусының әҫәре йоғонтоһона бирелеп, 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыусы башҡорт полктарының батырлығы хаҡындағы тарихи материалдарҙы, халҡыбыҙҙың шул саҡтағы тормошон, көнкүрешен, уларҙың һуғыш

ҡорамалдарын, кейемдәрен оҙаҡ һәм ныҡышмалы рәүештә өйрәнә башланым. Урындағы материалдар менән ҡәнәғәтләнмәйенсә, Рәсәй улдары Наполеон ғәскәрҙәренә ҡаршы батырҙарса һуғышҡан тарихи урындарҙа ҡат-ҡат йөрөп сыҡтым. Мәскәү, Ленинград, Пермь, Куйбышев, Силәбе, Ырымбур, Ҡазан, Владимир, Горький һәм Чебоксар ҡалаларында һаҡланған архивтарҙы өйрәндем, һирәк осрай торған китаптарҙы, монографияларҙы уҡып сыҡтым, күренекле тарихсылар менән осраштым.

1812 йылға арналған тарихи роман яҙыу өсөн ата-олатайҙар эҙенән артабан йөрөү кәрәк ине миңә. ВЛКСМ-дың Башҡортостан Өлкә Комитеты ойоштороған йәштәр төркөмө менән Францияға остом. Францияла булып ҡайтҡас, СССР Яҙыусылар союзы миңә ГДР-ға ижади командировка бирҙе.

Берлин архивында һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейында «Төньяҡ амурҙары» романының икенсе китабы өсөн өҫтәмә материалдар таптым. Берлинда эшемде тамамлағас, Лейпцигка юлландым. Ундағы «Халыҡтар алышы» һәйкәлен, шул замандағы ҡала күренешен һәм дәһшәтле һуғыш барған ваҡытта француздар менән союздаш ғәскәрҙәр урынлашҡан урындарҙы ентекле өйрәндем. Унан һуң Веймарҙағы музейға барҙым.

1814 йылда башҡорттар Гётеға бүләк иткән уҡ-янды һораша башлағайным, был хаҡта бер кем бер нәмә белмәй. Бөйөк немец шағиры Гётеның секретары И. П. Эккерман ҡалдырған яҙмаларға таянып, мин төрлө дәлилдәр килтерҙем. Уҡты табырға ныҡышыуымды күргәс, күрше урамда йәшәгән бик оло бер ҡартты саҡырып килтерҙеләр. Ул һөйләгәндәрҙе тәржемәсем миңә аңлата барҙы:

– Был ҡарт бик күп йылдар элек ошо музейҙа хеҙмәт иткән. Күп нәмәләрҙе әле лә онотмаған икән. Париждан ҡайтып барышлай, башҡорт яугирҙары түрәһе бүләк итеп биргән уҡты бынан илле-етмеш йылдар самаһы элек музейҙан алғандар. Ул заманда иҫкергән башҡа ҡоралдар ҙа алынған. Складта һаҡланмаймы икән, ти.

Стеналары яртылаш ергә һеңгән бик иҫке складҡа алып барҙылар мине. Бөйөк немец шағирына иҫтәлек итеп биргән ваҡ-төйәк нәмәләр араһында оҙаҡ йылдар ятып серегән уҡтың ҡалдыҡ-боҫтоғон тапҡас, тәнем эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Веймарҙа әҙерләп ҡуйылған архив материалдары менән танышҡас, бер ауылда тағы ла бер тарихи уҡ һаҡланыуын бел-

дем һәм йөҙ саҡрым самаһы алыҫлыҡтағы Шварца исемле ауылға табан юл тоттом.

...Наполеон ғәскәрен ҡыйратып, Франциянан ҡайтып барған рус ғәскәрҙәре Шварца ауылы аша егерме тапҡыр уҙа. Казактар менән казачий башҡорт яугирҙары ғына был ауылға һуғылмай, һәр саҡ ситләтеп уҙа.

«Төньяҡ амурҙарын» күрмәйенсә тынысланмаясағын аңлап, Шварца ауылынан алты саҡрым алыҫлыҡтағы ерҙә ялға туҡталған башҡорттарҙы кенәз Карл Гюнтер үҙенә ҡунаҡҡа саҡыра. Сапҡын ебәреүенә күп тә үтмәй, рус генералы Щербаков рөхсәте буйынса һыбайлы башҡорт егеттәре төркөмө йән-фарман сабышып килеп тә етә. Шварца ауылы халҡы сиркәү алдына йыйыла. Ғорур ҡиәфәттәге «Төньяҡ амурҙарының» – башҡорттарҙың өҫ-кейемдәрен, һөңгөләрен, яурындарына аҫҡан уҡ-һаҙаҡтарын оло ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтеп, улар үҙ-ара оҙаҡ шаулаша.

– Уҡ тигәндәре ҡамыштан эшләнгәнме әллә?

– Ағастан юнылған, тиҙәр.

– Ундай ҡоралдан ни файҙа?

– Ҡарамаҡҡа үтә ябай күренһә лә, уны үлемесле, тиҙәр!

– Эйе, «Төньяҡ амурҙары» атҡан уҡ атты тишеп үтәнән-үтә сығыуын мин дә ишеттем!

– Булмаҫ!

– Ә мин ышанам! Ул уҡ үлемесле булмаһа, французлар үлә яҙып ҡурҡыр инеләрме?..

Кенәз Карл Гюнтер ҙа үтә ябай һуғыш ҡоралының үлемесле икәнлегенә ышанмағас, сит ил дошмандарын Рәсәйгә ҡушылғандан бирле күп ҡыйратҡан уҡ-һаҙаҡтарын кәмһетеүҙәренә һәм уны һанға һуҡмауҙарына сәмләнгән башҡорт егеттәре берберенә ҡарашып алалар ҙа:

– Уҡ-һаҙаҡтарыбыҙҙы хурлар өсөн саҡырҙығыҙмы бында? – тип асыу менән һорайҙар.

«Төньяҡ амурҙарының» ярһыуы бер аҙ баҫылғас, кенәз Карл Гюнтер сиркәүҙең күккә һонолған оҙонса көмбәҙенә үрелеп ҡарай.

– Атығыҙ шуға!

Башҡорт яугирҙары католиктарҙың сиркәүенә атыуҙы әҙәпһеҙлек һанап, кенәз Карл Гюнтер эргәһендәге священник Киоте Фридрих Августҡа төбәлә. Тимер башаҡлы ағас уҡ сиркәүгә зыян килтермәйәсәгенә ышанған священниктың рөхсәтен алғас, һуғышсыларҙың береһе керешкә һалыу менән

тоçҡамай-нитмәй атҡан уҡ, ҡалын көпмәне тишеп, оҙонса көмбәҙҙең ҡап урта өлөшөнә барып ҡаҙала һәм шунда тороп ҡала.

«Төньяҡ амурҙарының» мәргәнлегенә һәм уҡтарының көсөнә ғәжәпләнгән Шварца ауылы кешеләре оҙаҡ бәхәсләшкән.

Кенәз Карл Гюнтер бик ҡәнәғәт була.

– Әйҙәгеҙ, миңә рәхим итегеҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, – тип башҡорт егеттәрен алып ҡайтып һыйлай...

*Яныбай Хамматов*
*1983 йыл, май*

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Яныбай Хамматов «Төньяҡ амурҙары» романына материалдар туплау өсөн ҡайҙа юллана?
**2.** Яҙыусыға башҡорт яугирҙары, уларҙың өç-кейемдәре, һуғыш ҡоралдары тураһында кем өçтәмә мәғлүмәт бирә?
**3.** Башҡорт һыбайлылары Шварца ауылы кешеләренә уҡ-һаҙактарының көсөн нисек күрһәтә?



# Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ

(1928)

Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районының Үтәгән ауылында тыуған. Өфө ҡалаһындағы 9-сы башҡорт интернат-мәктәбен (хәҙерге Р. Ғарипов исемендәге 1-се Республика башҡорт гимназия-интернаты) тамамлаған. Башҡорт дәүләт педагогия институтында (хәҙерге Башҡорт дәүләт университеты) белем ала, Мәскәүҙә аспирантурала уҡый. 1954 йылдан алып оҙаҡ йылдар Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләй, «Ватандаш» журналы сыға башлағанда (1996) уның тәүге баш мөхәррире була.

Ғайса Хөсәйенов – киң билдәле әҙәбиәт ғилеме белгесе, яҙыусы-прозаик, журналист, йәмәғәт эшмәкәре.

Әҙәбиәтсе-ғалим булараҡ, ул башҡорт әҙәбиәте тарихы, әҙәбиәт теорияһы буйынса күп хеҙмәттәр яҙҙы. Башҡорт әҙәбиәтендә ҙур эҙ ҡалдырған Дауыт Юлтый, Сәйфи Ҡудаш, Рәшит Ниғмәти, Мостай Кәрим, Рауил Бикбаев ижадтарына арналған монографиялар (махсус китаптар) сығарҙы, әҙәбиәт теорияһы буйынса хеҙмәттәр баҫтырҙы. Уның башланғысында һәм етәкселегендә тәүбашлап боронғо башҡорт һәм дөйөм төрки яҙма әҙәби ҡомартҡылары өйрәнелә башланы, күп томлыҡ «Башҡорт әҙәбиәте тарихы» яҙылды.

Әҙәби ижад өлкәһендә ул Башҡортостан тарихының көсөргәнешле дәүерҙәренә һәм ваҡиғаларына, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре яҙмышына иғтибар итте. «Алдар батыр ҡиссаһы», «Рудасы Исмәғил», «Пугачёв фельдмаршалы» повестарын, «Ҡанлы илле биш», «Батырша» романдарын яҙҙы, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Ризаитдин Фәхретдинов, Әхмәтзәки Вәлиди шәхестәренә арналған китаптар сығарҙы.

Арҙаҡлы ғалим мәктәп дәреслектәрен яҙыуҙа, дәреслек-хрестоматиялар төҙөүҙә әүҙем ҡатнашты. Башҡортостан Республикаһы милли мәктәптәренең быға тиклемге 7-се – 11-се кластары өсөн тәғәйенләнгән баҫмалары уның ҡатнашлығында эшләнде.

Ғайса Хөсәйенов – Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы академигы, Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы.

## ЕТЕ ЫРЫУ

Ағиҙел менән Ҡариҙел килеп ҡушылған ерҙән төшлөк ҡарай күҙ күреме арала күкшелләнеп Ҡаратун тауы йәйелеп ята. Икһеҙ-сикһеҙ далалар уртаһында ҡапланып ҡуйылған ҡалҡандай ҡалҡып ятҡан был һөҙәк түбә оло йәйләү, йыйын майҙаны булған борон-борондан.

Ер-һыу кибеп, урман-яландар йәшәргәс, мал-тыуар йәш үләнгә туйып көрәйеп алғас, яҙғы эштәр бөтөп, иртә йәй башланғанда, ҡәҙимгесә Ҡаратун яланына оло йыйынға йыйылған ете ырыу башҡорттар бер заман. Дөйә-аттарға артмаҡлап килтергән тирмәләрен һәр ырыу бер тирәгә тош-тош итеп түңәрәкләп ҡорған. Тирә-яғы вағыраҡ тирмәләр менән уратылып, ҙур майҙан ҡалдырылған урталыҡта ун биш ҡанатлы оло аҡ тирмә ҡоролған.

Иҙел аръяғындағы Нуғай тауҙарынан сыҡҡан ҡояш һөңгө буйы булып күтәрелеп килгәндә, әлеге аҡ тирмә янындағы майҙанға һәр ырыуҙың атаҡлы батырҙары, арҙаҡлы[1] бейҙәре, аҫыл аҡһаҡалдары йыйыла башлай. Йәм-йәшел бәрхәт сиҙәмгә оло түңәрәк итеп түшәлгән аҫалы балаҫтар өҫтөнә һәр береһе, үҙ дәрәжәһен белеп, олпатлыҡтарын һаҡлағандай, яйлап ултырыша бара. Түңәрәк табындың түре булмаһа ла, ҡорҙаштарының ҡыҫтауына күнеп, ҡалҡыу яҡҡараҡ үҫәргән ырыуының түрәһе Бикбау бей уҙып ултыра. Уның йәнәшәһенә ултырған юрматы ырыуы башлығы Тәтегәс бей иһә кәүҙәгә мыҡты, йәшкә лә шаҡтай йәш күренә. Ҡыпсаҡ ырыуы башлығы Ҡарағужаҡ батыр иһә тағы ла баҙығыраҡҡа оҡшай.

---

[1] *Арҙаҡлы* – абруйлы.

Шулай түр түңәрәккә ултырғандарҙан Дим буйы меңле башҡорттарының башлығы Ҡәнзәфәр бей ҙә, бөрйәндән Иҫке бей аҡһаҡал да, Әй буйы дыуан ырыуынан Ишмөхәмәт батыр ҙа, тамъяндан Шәғәли Шаҡман да, йөҙйәшәр Айҙар сәсән дә – оло йыйын күрке булып, ил-йорт хәлен хәл итешер абруйлы ил азаматтары[1]. Был ырыу башлыҡтары менән йәнәш йә улар артындараҡ һәр ырыуҙың аҫыл ир-егеттәре, аҡһаҡалдары, батырҙары оло түңәрәкләп теҙелеп ултырыштылар.

Үҙ-ара иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, ил-йорт хәлдәрен, мал-тыуар именлектәрен һөйләшкеләп алған арала, аяҡсылар бер нисә тәпән ҡымыҙ килтереп, ҡорҙағыларҙы ауыҙ иттерергә лә өлгөрҙөләр. Халыҡ ултырышып бөтөп, бер аҙ тын алғас, йәнә йәш ҡымыҙҙың тәмен татығас, йыйындың тыныслана төшөүен көтөбөрәк тора ла Айҙар сәсән – иң өлкән, иң абруйлы аҡһаҡалдарҙың береһе – йола буйынса оло йыйынды асып ебәрә.

– Ырыу башлыҡтары, ил-йорт азаматтары, аҡһаҡалдар, – тип башлай һүҙен сәсән, – ата-бабаларыбыҙҙың йолаһы буйынса, ил-йорт хәлдәре хаҡында кәңәш-төңәш итешер, һүҙ беркетешер оло йыйыныбыҙҙы асыу бәхете, иншалла, быйыл миңә тейҙе. Йылдарыбыҙ шулай имен-аман, үҙебеҙ иҫән-һау булырға, күптәребеҙгә минсә йәшкә етергә, көнкүрешебеҙ ырыҫлы, мал-тыуарҙарыбыҙ ишле булырға яҙһын.

Кәңәшле ил тарҡалмаҫ, тигән боронғолар. Әлеге йыйыныбыҙҙа ла уртаға һалып һөйләшәһе, кәңәш төйнәйһе һүҙҙәребеҙ байтаҡ. Аҡ батшаға ҡушылғас, илебеҙгә именлек килде, элек ҡанса[2] ек-ыҙа күргән ил баҫҡынсыларынан, барымта-ҡарымталарҙан[3] ҡотолғандай булдыҡ. Урмандарыбыҙҙа солоҡтарыбыҙ[4], йылғаларҙа һыҫарҙарыбыҙ, яландарҙа төлкөләребеҙ, быуаларҙа ҡондоҙҙарыбыҙ бөтмәһә, яһаҡ түләү генә беҙҙе артыҡ миктәтмәҫ[5]. Тик шуларҙы ил-ерҙәр аралап, ҡанса урман-һыуҙар яғалап, алыҫ-алыҫтарға ҡышын-яҙын илтеп тапшырыуы, ылау ҡыуыуы йонсота. Шунан ҡотолоуҙың берәй юлы-әмәле юҡмы икән? Ошо хаҡта фекер төйнәп килгән аҡһаҡалыбыҙ Бикбау бейгә һүҙ бирәм.

---

[1] *Ил азаматтары* – хөрмәтле кешеләр, ил ағалары.

[2] *Ҡанса* – күпме.

[3] *Барымта-ҡарымта* – мал-тыуар, мөлкәт йәки ҡан өсөн ҡан даулап баҫҡынсылыҡ яһау.

[4] *Солоҡ* – ағас ҡыуыштарына оялаған бал ҡорттары ояһы.

[5] *Миктәтмәҫ* – йонсотмаҫ.

Бикбау бей тамағын ҡырыбыраҡ ала ла һалмаҡлап ҡына һөйләргә керешә:

– Йәмәғәт, Айҙар сәсән хаҡ әйтә, хәҙергеһе көндә бөтә ырыу халайыҡтарын[1] да уйландырғаны вә уртаға һалып һөйләшер төп нәмә – яһаҡты ҡайҙа илтеп түләү яғы. Һәммәгеҙгә лә мәғлүм, Ҡазан ҡалаһы беҙҙән ифрат алыҫ, яҡшы ат менән арыу саҡта барғанда ла, утыҙ-ҡырҡ көнлөк юл тау яҡтарына. Барыуы-ҡайтыуы менән ике-өс ай үтеп китә, тигән һүҙ. Нисәмә ырыу юлсыларының ҡанса ғүмере ыҙа менән ошо юлда үтә, ни хәтле ат-мал интегә. Йөк-йөк йәнлек тиреләрен боҙмайынса, батман-батман балдарҙы бүҫкәртмәйенсә имен-аман илтеүе лә еңел түгел.

Үҫәргән, бөрйән халыҡтарының шундайыраҡ фекере бар, йәмәғәт: Ҡазан ҡалаһының Ағиҙел, Дим, Ашҡаҙар, Һаҡмар, Яйыҡ, Әй буйҙарынан ифрат алыҫ икәнлеген, йөк-йөк яһаҡ тиреләрен, балдарҙы илтеү мәшәҡәтен иҫтә тотоп, Башҡорт иленең үҙендә, бер үҙәктәрәк, яһаҡ малын илтеп түләр өсөн, кәрәк-яраҡ алыш-биреш өсөн аҡ батшанан бер кескәй генә ҡәлғә[2] һалдыртыуын һорарға. Шул хаҡта бөтә ырыуҙарыбыҙ, ошо йыйыныбыҙ исеменән хат яҙырға. Бар ырыу халайыҡтарына ла яйлыраҡ, йыраҡлығы бер самалыраҡ булһын өсөн ул ҡәлғәне, тәғәйен әйткәндә, ошо йыйын майҙаныбыҙҙан төньяҡтараҡ ятҡан анау Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған ергә бейек моронға ҡорорға булыр ине. Ҡәлғә ил-йортто төрлө баҫҡынсыларҙан ҡурсалар бер ҡалҡан булыр ине.

Бикбау бейҙән һуң Тәтегәс, Ҡәнзәфәр бей, йәнә тағы бер-ике аҡһаҡал һүҙ алып һөйләгәс, йыйын, уртаҡ фекергә килеп, аҡ батшанан Башҡортостанда ҡәлғә һалдыртырға һорауҙы хуплай. Шулай итеп, ошо оло йыйын хәҙерге Өфөнөң нигеҙен һалыр урынды һайлай.

Йыйын икенсе мәсьәлә буйынса Рәсәй иленә һөжүм иткән дошмандарға ҡаршы аҡ батшаның башҡорт ир-егеттәрен яуға сығырға саҡырып ебәргән фарманын дәррәү күтәреп ала ла яуға әҙерләнергә һүҙ беркетә.

Был йыйын тарихтың туғыҙ йөҙ ҙә һикһән берендә, йылҡы йылында[3] була.

---

[1] *Халайыҡ* – халыҡ.
[2] *Ҡәлғә* – крепость, нығытма.
[3] Был иҫкесә йыл иҫәбе буйынса. Яңыса 1573 йылға тура килә.

Оло йыйындың ултырҙаш өлөшөндә ил азаматтарының, аҡһаҡалдарҙың аҡылы, һүҙ-фекер ҡеүәһе һыналған икән, хәҙер бәйгелә һәр ырыу ир-егеттәренең көс-ҡеүәте, таҫыллығы һыналыр көн.

Халыҡ ашап-эсеп ҡуҙғала башлағансы, һыбайлылары менән йүгерек аттар сабыш башлау билдәләнгән урынға, йәйәүле өсөн бер көндәй юл булыр араға, Өршәк буйына сығып та киткәндәр. Хәйер, улар киткеләгәнсе әле, ҡайһы яҡ аты уҙыр тип бәхәстәр ҙә ҡуйырғылап алған. Ҡайһы ғына йүгерек атты ҡарама, шул алдан килер төҫлө, барыһы ла һөлөк кеүек йылҡылдап, тейен кеүек уйнаҡлап тора. «Һайт» тип бер ҡыйҡыулап ебәр, уҡ кеүек атылып китер һымаҡ. Шулай ҙа ат йүнен белер һынсылар Еҙем буйынан ҡатай араһынан килгән бер туры аттың алдан килерен юрайҙар. Арғымағы ла арғымаҡ шул: торғаны менән бер толпар тарпаны.

Тирмәләрҙән бер аҙ аҫтараҡ, киң битләү һөҙәкләнеп уйһыу яланға ялғанып киткән ерҙә, халыҡ дәррәү йыйыла башлау менән, көрәш майҙанын да асып ебәрҙеләр. Арыраҡ сәпкә уҡтан атыусыларҙың, күҙ бәйләп көршәк ватыусыларҙың ярыш майҙандары китә.

Күптәрҙе иң ҡыҙыҡтырғаны, бәйгенең үҙәге, әлбиттә, әлеге көрәш майҙаны. Унда һәр ырыуҙың батырҙарының-батырҙары алышасаҡ бит. Билдәле, һәр ырыуҙың үҙ батыры бар.

Көрәш майҙанын, ғәҙәттәгесә, йәш-елкенсәк башлап ебәрә.

Көслөнән-көслөрәге алып ташлай бара биреп, майҙанға ысын батырҙар сығырға ла нәүбәт етә.

Ҡара табын ырыуынан Аҡназар батыр менән Асылыкүл буйы ҡаңны-төркәй ырыуы батыры Ҡыҙрас бик оҙаҡ ҡына алыша. Ахырҙа Ҡыҙрас еңеп, затлы ғына бүләктәр алып, майҙандың шау-гөр килеп хуплауын тапҡас, күпмелер ваҡыт уның менән алышырға сығыусы табылмағандай ҙа тороп ала. Бер аҙҙан һалмаҡ ҡына баҫып, Сураман майҙан уртаһына ыңғайлай. Көрәшергә ҡушаҡ[1] тотторғас та әле, ул әллә күпме билдән йәһәт кенә алмай өйрөлөңкөрәп йөрөй. Бына бер мәл Сураман Ҡыҙрастың билен биртендерә биреп ҡапыл ҡыҫып алыуы була, Асылы буйы батырын йәлп итеп баш аша һелкеп ебәреүе була.

---

[1] *Ҡушаҡ* – билбау.

Сураман менән алышҡа Көтөр сыға. Көтөр батыр Сурамандан аша ҡарабыраҡ тора, шул хәтле һонтор. Был ике батыр көрәшергә үтә таҫыллы булып, бер-береһенә бил бирмәй, көстө самалап оҙаҡ көрмәкләшә торғас, Сураман баяғыса ҡапыл һелтәйем тигәндә, Көтөрҙө баш аша ала алмайынса, үҙе аҫта тороп ҡала. Майҙанда шау-шыу, ығы-зығы китә, юрматыныҡылар «Көтөр батыр йыҡты» ла «Көтөр еңде» тип геү килеп еңешә, Дим буйы меңле башҡорттары Сураманды яҡлай. Көрәш майҙаны башлығы батырҙарҙы яңынан алышырға ҡушып, улар күпмелер яҫҡышып[1] йөрөгәндән һуң, Сураман батыр таҫыллыраҡ булып сыға. Көтөрҙө тубығына терәберәк ҡырға бырғыта.

Көрәштең иң ҡыҙығы ла, иң ғәйрәтлеһе лә Сурамандың Оморҙаҡ батыр менән алышында булғандыр, моғайын. Йә бил бирмәй, йә көс самалап йөрөп, Сураман тағы ҡапыл матҡып тотоп, Оморҙаҡты ҡыҫып алып ҡарай икән, биле ташмы ни – ҡата ла ҡуя, ти. Шуға ҡушаҡ та шыуып тик тора икән. Ҡыҙрас, Көтөр менән алышып хәле бөтә башлаған Сураманды Оморҙаҡ, үҙе лә байтаҡ албырғатып йөрөткәс, аҙаҡ еңеп сыға.

Шулай итеп, Оморҙаҡ оло бәйгелә көрәштә иң көслө батыр булып ҡала. Уға бүләк итеп аҫыл буҫтауға тәңкәләр менән ҡапланған көйәк – яу кейеме, башына кейер көмөш торҡа[2], шуларға иш итеп һөйәк һаплы ҡорос суҡмар – яу-һунар ҡоралы бирәләр. Икенсе бүләкте алған Сураман батырға затлы ҡалъян[3] менән әҙернә йәйә, уҡ-һаҙаҡ, аҫыл ебәк тауарҙар тейә. Көтөр батыр сит-ситтәре һырлап семәрләп эшләнгән ҙур баҙыян тәпән менән тулы ишемле бал, йәнә сигеүле таҫтамалдар ала.

Бер заман һыртта күҙәтеп торған малайҙар «аттар, аттар!» тип ҡысҡырыша башлауҙары була, майҙандағылар ҙа Өршәк буйҙары яғынан туҙан туҙҙырып сабып килгән юртаҡтарҙы шәйләп алалар. Тик ҡайһы аттың алдан килгәнен әле белер әмәл юҡ: уларҙы йә ҡыуаҡлыҡ, йә туҙан ҡаплай. Бына бер мәл туры ат атылып килеп сыға. Арғымаҡтың алғырлығы әллә ҡайҙан билдәле: атҡан уҡтай һонолоп елә генә. Унан әҙ генә арттараҡ ике ат башҡа баш тигәндәй тиң сабалар. Күпме генә ваҡыт үткәндер, майҙанға яҡынлашыу менән, улары ла танымалы була: береһе – аҡ бәкәлле ҡашҡа ат, икенсеһе ала-сыбар. Туры ат быларҙы бер ер буйылай ташлап, беренсе булып май-

---

[1] *Яҫҡышып* – тартышып, айҡашып.
[2] *Торҡа* – шлем.
[3] *Ҡалъян* – уҡ-һаҙаҡ һауыты.

ҙанға атылып инә, бер аҙҙан ҡашҡа менән ала-сыбар ҡолаҡҡа-ҡолаҡ тиң булып бергә елеп уҙҙылар.

Һынсылар[1] һүҙе раҫ булды: туры атҡа беренсе бүләк – эйәрле-йүгәнле арғымаҡ, ҡашҡа менән ала сыбарға алмас ҡылыс менән затлы кейемдәр тейҙе.

Көрәш менән ат сабыштары ярыштары тамамланып, ҡояш кискә ауышыуға ҡарамаҫтан, бәйге һүрелергә һис оҡшамай әле. Тамаша ҡылырға яратыусылар әле бер урында мәргәндәрҙең сәпкә уҡ атыу ярышын күҙәтә, ҡайһылары еңел һөйәкле егеттәрҙең һырғауылға үрмәләүен ҡарай, ҡомарлыраҡтары айбарлыларҙың аттан тартыш, яҫҡышыу ярышын ҡарап шаугөр килә. Бер тошта һәүәҫкәрҙәр ҡош сөйөп уйнай.

Киске эңер яҡынлашҡанда, бөтә ырыуҙың башлыҡтары, бәйгелә еңеп сыҡҡан батырҙар, абруйлы аҡһаҡалдар, ғәҙәт буйынса, әлеге ун биш ҡанатлы оло аҡ тирмәгә йыйыла: донъя хәлдәре, бөгөнгө бәйге хаҡында гәпләшеп, һый-хөрмәт күреп, ҡурай-йыр тыңлап хозурланып ултырмаға.

Йылына бер килгән оло йыйын ниндәй күркәм күренмәһен, донъя үҙе һис тә байрам түгел ине шул. Ҡуңалтаҡ тормошонда нисек етте шулай көн күргән ярлы-ябаға, байғош күпме?! Йыйында ваҡытлы ғына булһа ла күңелдәрен баҫҡан, донъя мәшәҡәттәрен онотоп торған уҫлаптай ер-егеттәрҙе лә иртәгә шыҡһыҙ тормош ҡырыҫлығы, ҡыҫынҡылығы көтә.

* * *

Оло табында башлыҡтар, аҡһаҡалдар менән ултыраһы Айҙар сәсән был юлы әле һаҡал-мыйыҡтары саҡ беленеп кенә килгән йәш-елкенсәктәрҙең, егеттәрҙең күңелен күреп, гәпләшеп ултырмаҡ өсөн, үҙ тирмәһендә кескәй табын ҡормаҡсы булды. Йөҙйәшәр сәсән оло табындарҙы күп күргән, һый-хөрмәтте күп татыған. Уға хәҙер тарих, хикәйәт тыңларға, ҡарһүҙҙәр[2] ишетергә һәүәҫ, ололарҙан фәһем, аҡыл алыр йәштәрҙе йыйып, табын ҡороп, әңгәмәләшеп ултырыу хозурлыҡ.

Айҙар сәсәндең тирмәһе оло аҡ тирмәнән әллә ни йыраҡ түгел: уң ҡулда, ҡалҡыу бер ерҙә. Тирмәһе шаҡтай ҙур, туғыҙ ҡанатлы.

---

[1] *Һынсы* – боронғо ауыҙ-тел һүҙ оҫтаһы; һынап белеүсе.
[2] *Ҡарһүҙ* – ололар һүҙе.

Табында бер ҡурайсы «Ете ырыу» көйөн уйнап ебәрҙе. Уға йәштәр ҡушылып, ҡеүәтләп алды:

Күгәреп тә ятҡан Урал тауы –
Ете лә ырыу – илдең төйәге.
Ирек яулап үлгән иркәйҙәрҙең
Шунда ята изге һөйәге…

Йыр-моңдан дәртләнеп, шул уҡ ваҡытта һағышланып өлгөргән йәш-елкенсәк ошо «Ете ырыу» тигән йырҙың тарихын да һөйләп биреүен үтенгәс, бер аҙ ғына тына, уйлана биреп, Айҙар сәсән уратыңҡырап һалмаҡ ҡына һүҙ асты:

– Уландар, йә дәртле, йә үтә һағышлы булып ишетелгән йыр-моң – халыҡтың ысын-ысындан күңел көҙгөһө ул. Шуға ла ул, һине моңландырып, уйҙарыңды әллә ҡайҙарға алып китә: берсә ул моңдан йөрәк өҙгөс аһ-зар ишеткәндәй булаһың, берсә ҡыйҡыулы оран, ат тояғы тауыштарын тойғандай итәһең, берсә ҡоштар һайрашыуын иҫләйһең. Йырҙың моңонда уҡ үткән хәлдәр, халыҡ тарихы яңғырап ҡалғандай миңә, ә башҡорт йырҙарының күпселеге үҙе үк ниндәйҙер бер ваҡиға, тарих менән бәйле. Әле йырлаған «Ете ырыу» йырының үҙ тарихы бар.

Шуны ла әйтәйем әле, уландар: ир-егеттең егетлеге ҡоро ғәйрәттә, таҫыллыҡта ғына булмайынса, башында булыр аҡылда, күңелендә ятыр инсафлыҡта ла. Ирмен тигән ир кеше ил-йорт йолаларын да йолалай белер, ололарҙы ололоҡлар, ата-бабаларының изге эшенә, оло тарихына аманат итеп ҡарар. Һәр хәлдә, тамағы туҡ, өҫтө бөтөнгә генә ҡәнәғәт булып, бүтәненә аңшай[1] булмаҫ. Бөгөнгөһөн дә, үткәнен дә ҡәҙерләй белер, киләсәген дә онотмаҫ.

Тарих тигәндәй, ата-бабаларыбыҙҙың бер аманат һүҙен дә иҫтән сығармайыҡ. Башҡортмон тигән башҡортҡа етмеш төрлө һөнәр өҫтөнә ете быуынға саҡлы үҙенең ата-бабаларын, үҙ ырыуының шәжәрәһен, ил-йорт тарихын яҡшы белеүе шарт. Һеҙҙең һәммәгеҙҙең дә шуның тәүге ике шартын үтәүегеҙгә һис шигем юҡ, ә бына ил-йорттоң боронғораҡ тарихын сала-сарпы ғына белеүегеҙ ихтимал.

Әгәр теләгегеҙ булһа, әле һеҙ һораған «Ете ырыу» йыры тарихына бәйләп, ата-бабаларыбыҙҙың әүәлгерәк тарихына ла күҙ һалырға самам юҡ түгел…

---

[1] *Аңшай* – аңһыҙ, иғтибарһыҙ.

Йәш ҡунаҡтар хужаның был ниәтен бер ауыҙҙан хуплағас, барыһы ла берәр тусҭаҡ ҡымыҙ эсеп, ит-ҡалъя ҡапҡылап алғандан һуң, ниндәйҙер бер тантаналы тынлыҡ эсендә сәсән үҙенең һөйләр тарихын башлап та ебәрҙе.

– Тарихты уны, улдарым, бүлеп алып һөйләүе лә ҡыйын. Тарих – ул быуын-быуын төҫлө.

Беҙҙең халыҡтың тарихы яҙылмаған. Әле әйткәнемсә, уны ата-бабаларыбыҙ телдән телгә һөйләп, быуындан быуынға тапшырыр булған.

Боронғораҡ иген сәсмәгән, бесән сапмаған, фәҡәт, мал аҫрап, һунар итеп йәшәгән олатайҙарыбыҙ мал-тыуарын ҡуйы үлән-сәскәлә утлатып, йәйен – үреш[1], ҡышын тибен эҙләп, ырыу-ырыу эркелешеп, ер-һыуҙар кисеп, гел күсеп йөрөр булғандар. Ололар һөйләгәндән ишетеүемсә, башҡорттар Алтай тауҙарынан Уралғаса, Уралдан Оло Иҙелгәсә[2] күсеп йөрөгәндәр борон. Хатта бер заман, бынан өс-дүрт йөҙ йылдар әүәл, Ҡара диңгеҙ, Дунай һыуы буйҙарынаса китеп ҡышлар булғандар, имеш. Ни өсөн тиһәң, ул яҡтарҙа ҡыш йылы, ҡар йоҡа, мал-тыуар тибенлектә ҡышлай. Яҙын-йәйен тағы ҡубарылып төньяҡҡа, Иҙел, Урал буйҙарына ҡайтыр булғандар.

Аҙаҡ башҡорт ырыуҙары урмандары өҫкә ауып килгән, йәйләүлектәре лә ярайһы мул, үләне бил быуарына еткән Урал тауы ҡуйындарына ҡайтып, шул тирәләрҙә ныҡлап төйәкләнгәндәр.

Урал – Иҙел буйҙарындағы муллыҡ, һалҡын ҡыш, ҡара урмандар күсәбә[3] ата-бабаларыбыҙҙы ултыраҡлыҡҡа күсергә, ҡышлар бура өйҙәр, мал ҡаралтылары һалырға зарурат[4] иткән, күрәһең. Үҙҙәре лә киң далаларҙағы яман баҫҡынсыларҙан боҫор өсөн һилерәк, байманыраҡ тау-урманлы, йылға-күлле төбәктәргә төпләнеүҙе хәйерлерәк тапҡандар булһа кәрәк. Улар төньяғында ҡамалы ҙур йылғаны – Сулман Иҙелен дә[5] үтеп киткәндәр.

Урман-дала ерҙәрендә әле бик һирәк осраштырғылаған ҡырағай аттар, тарпандар ул заман ғәләмәт күп булған, өйөр-өйөр эркелеп йөрөгән. Болан, мышы, ҡоралайҙар тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Йәғни һунар иткәнгә, аҫрар мал-тыуарҙан тыш

---

[1] *Үреш* – көтөүлек ер.
[2] *Оло Иҙел* – Волга.
[3] *Күсәбә* – күсмә тормош менән йәшәүсе.
[4] *Зарурат* – мәжбүр иткән мәғәнәһендә.
[5] *Сулман Иҙеле* – хәҙерге Кама йылғаһы.

та, ит-түлек эргәлә генә булған. Урман-һыуында тейен, төлкө, һуҫар, ҡама, шәшке, ҡондоҙ, бурһыҡ ише кейек тиһеңме, бүтән ҡош-ҡортмо, йылға-күлендә балығы тиһеңме – күплегенә хайран ҡалырлыҡ икән.

Унынсы быуаттар самаһында күпселек башҡорт ырыуҙары ҡәбилә-түбә булып буралы өй, ҡаралтылы ауылдарҙа йәшәгәндәр инде. Ҡышҡылығын ауылда ҡышлап, йәйен генә бөтә малтыуары менән йәйләүгә сығыр булып киткәндәр. Мал аҫрауға һунар, солоҡсолоҡ[1], игенселек, алыш-биреш[2] кәсебе өҫтәлгән.

Оло һыу буйҙарында ҙур-ҙур ғына ҡалалар ҙа үҫеп сыҡҡан бер заман. Ҡала тигәс тә, уларҙы хәҙерге таш ҡалалар менән тиң күрмәгеҙ тағы. Ул замандағы башҡорт ҡалалары бәләкәй булған. Уларҙы ҡала тип түгел, ҡәлғә тип атау дөрөҫөрәк булыр ине. Ҡала ул шул ҡәлғә һүҙенән ҡалған да инде.

Улар бик уңайлы йылға моронона йә ҡалҡыу ергә һалыныр булған. Йә яйлыраҡ ергә ҡорған[3] ҡорғандар. Шуның тирәяғын осло имән бағаналар менән ураҡандар. Ҡәлғәне йәнә тәрән соҡор – ур менән уратып алғандар. Уға һыу ебәргәндәр. Ур аша күпер эшләгәндәр. Ҡәлғәлә дүрт тарафҡа ғәҙәттә дүрт тәпәш бурама манара[4] яһағандар, шуға дүрт ҡапҡа уйғандар. Төндәрен йә хәүеф-хәтәр мәлдәрҙә күпер күтәреп ҡуйылыр булған.

Ғәрәп илселеге 922 йылда Болғар иленә барышлай шулай уҡ Башҡорт ерҙәрен үткән икән. Был хаҡта ғәрәп илсеһе Ибн Фаҙлан яҙып ҡалдырған.

Бер заман Болғар дәүләте көсәйә барып, башҡорттарҙы ла үҙ ҡул аҫтына буйһондора башлаған. Оҙаҡламай болғарҙар менән башҡорттар араһында солох[5] төҙөлгән. Элеккесә мал аҫрап, солоҡ ҡарап, иген игеп йәшәү менән бергә бүтән төрлө һөнәрҙәрҙе лә үҙләштергәндәр. Әлеге ҡәлғәләр тағы ҙурайып, ҡала кеүек булып төҙөкләнеп, байып киткән. Башҡорттар болғар баҙарҙары менән ҡыҙыу сауҙа иткәндәр, килешеү буйынса, Оло Иҙел аша ҡайыҡтарҙа төшөп, далалар буйлап каруан юлы менән алыҫ илдәргә – Византияға, Әрмәнстанға, Руми[6] илдә-

---

[1] *Солоҡсолоҡ* – ҡырағай бал ҡорттарын ҡарау.
[2] *Алыш-биреш* – һатыу итеү, сауҙа мәғәнәһендә.
[3] *Ҡорған* – курган.
[4] *Манара* – башня мәғәнәһендә.
[5] *Солох* – тыныслыҡ тураһында килешеү.
[6] *Руми (Рум)* – Борон күрше Көнсығыш илдәре Рим империяһын шулай тип атаған.

ренә лә барып сыҡҡандар. Болғарға, әлеге илдәргә улар затлы йәнлек тиреләре, батман-батман бал һатҡандар. Унан ебәк, сәй-шәкәр, бүтән татлы ашамлыҡтар, төрлө ҡыҙыл мал-тыуар тейәп ҡайтыр булғандар.

Шулай болғарҙар менән килешеп, яҡын вә алыҫ илдәр менән аралашып, донъялары бер аҙ бөтәйеп, мал-тыуарҙар ишәйеп, ауыл-ҡалалар шәбәйеп, һөнәр-кәсеп эштәре алға китеп арыу ғына ғүмер иткәндә, күпме йылдар үткәндер, бер заман ҡояш сығышы яғынан ғәләмәт яман яуябырылған. Аҙаҡ донъяға яманаты таралыр Сыңғыҙ хандың яуы була был. Ул яу шул хәтле ҙур, икһеҙ-сикһеҙ далаларҙы ябып, яр булып килә икән. Әллә ни хәтле ғәскәр менән бөтә ғаиләләре, бала-сағалары, мал-тыуары, мөлкәте менән бергә килгәс, ул иҫ китмәле, имеш. Бер заман Сыңғыҙ үлгәс, Батый хан Болғар дәүләтен ҡыйратып, ауылдарын көл-күмер итеп, ҡалаларын хараба хәленә ҡалдырып, Оло Иҙелде аша сыҡҡан да рус кенәзлектәре еренә инеп киткән.

Татар-монгол яуҙарынан һуң да башҡорт йорт-ерендә бер нисә ҡаты яу-ҡырғын булған. Шуларҙың иң ҡырылышлыһы Туҡтамыш хан заманында Аҡһаҡ Тимерҙең яуы булғандыр, моғайын. Ул яу Башҡортостан ере аша 1391 йылда үткән. Әлеге Ҡараҡыянан арыраҡ Ағиҙел ярында Буран бейҙең ейәне Ялыҡ бей батыр был яу менән аяуһыҙ алышып ҡараған, ләкин еңелгән.

Өҙләкһеҙ яу, хан-төмәндәрҙең тәхет өсөн үҙ-ара янъялы менән бер заман Алтын Урҙа хәлһеҙләнеп, тора-бара төрлө ханлыҡтарға бүленгәс, башҡорттарҙың бер өлөшө – Ағиҙелдең түбән яғы: Ыҡ, Сәрмәсән буйҙары – Ҡазан ханлығына, икенсе өлөшө – Йүрүҙән, Әй буйҙары – Себер ханлығына, көньяҡтағылары – Һаҡмар, Яйыҡ, Дим буйҙары нуғай мырҙаларына буйһоноп, ырыуҙар тарҡауланышып, айырымланышып ҡалғандар.

Ошо замандарҙа бер килке илгә ҡытлыҡ килгән. Өс йыл буйы иген уңмаған, йылҡы, ҡуй малдары йоттан ҡырылған, күп халыҡтар дарманһыҙ булған.

Бер заман, тарих туғыҙ йөҙ илле туғыҙҙа, сысҡан йылында[1], аҡ батша Ҡазан ҡалаһын алған, ханлығын ҡыйратҡан. Шунан күп ваҡыт та үтмәҫтән, башҡорт ырыуҙарының

[1] Хәҙерге йыл иҫәбе менән 1552 йылға тура килә.

бейҙәре, аҡһаҡалдары йыйылып кәңәш ҡорған, аҡ батшаға вәкилдәр ебәргән. Кәңәш-төңәш иткәндән һуң, үҫәргән ырыуынан Бикбау бейҙе, бөрйән ырыуынан Иҫке бейҙе, ҡыпсаҡтарҙан Ҡарағужаҡты, тамъяндарҙан Шәғәли Шаҡманды вәкил итеп Ҡазанға ебәрергә булғандар. Улар аҡ батшаға барып баш һалғандар, үҙ ер-һыуҙарына башҡорттар үҙҙәре хужа икәнлеккә ярлыҡаш[1] алғандар. Яһаҡҡа һуҫар, ҡондоҙ, бал түләмәк булып вәғәҙә биргәндәр.

Шулай башҡорт ырыуҙары үҙ ихтыярҙары менән аҡ батшаға баш һалғас ҡына бер аҙ иркен тын алып ҡалғандар. Элек айырымланып ҡалған ырыуҙарҙы ойоштororға форсат та тыуған шунан.

Бер саҡ ырыу башлыҡтары, аҡһаҡалдар йыйылып, йәнә кәңәш иткәндәр. «Азаматтар, ырыу башҡа булһа ла, бауыр бер бит. Үҙ-ара тарҡаулыҡты, даулашты бөтөрөп, бер халыҡтай булғанда, йорт-илебеҙ ҙә имен булыр, хәүеф-хәтәр ҙә аҙ булыр ине», – тигәндәр. Ете ырыуҙың берләшеүе ана шулай булған.

Ошоноң хөрмәтенә йәнә оло йыйын, бәйге ҡорғандар. Шуның ҡомартҡыһы итеп, оҫта ҡурайсылар, йырсылар әлеге «Ете ырыу» йырын сығарғандар. Уны оло йыйындың бар халҡы ла яратып, үҙ итеп отоп алған.

Ете ырыуҙың берләшеп килешеүенең бер билдәһе итеп, Йылайыр һыуы буйындағы Имәнтауҙағы бер йөҙйәшәр имән ағасына ете ырыуҙың ете төрлө тамғаһын ҡыҙҙырып һуҡҡандар.

Һуңғы ваҡиғалар, уландарым, барыһы ла минең күҙ алдымда үткәндәре. Байтағына үҙем шаһит. Ә аҡ батшаға вәкил булып барған башлыҡтарҙың күбеһе, үҙегеҙ үк күреп-белеп тораһығыҙ, быйылғы йыйыныбыҙҙың түрендәләр, бына тигән ир азаматтары.

Шуның менән тарих хикәйәтем дә тамам, ахыры, уландарым.

Айҙар сәсән был ете ырыу хикәйәтен һөйләп бөтөп, йәш ҡунаҡтары үҙ тирмәләренә таралышҡан саҡта, Етегән йондоҙ ҡойроғо көнсығышҡа ныҡ ауышҡайны инде.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** «Ете ырыу» хикәйәһе нисәнсе быуаттағы хәл-ваҡиғаларҙы һынландыра?

---

[1] *Ярлыҡаш* – ерҙе беркетеү тураһында грамота.

**2.** Яҙыусы ни өсөн тап ошо дәүергә мөрәжәғәт иткән?
**3.** Хикәйәлә нисә ырыу телгә алына?
**4.** Йыйын ҡайһы ырыу ерендә бара тип уйлайһығыҙ?

## Интернеттан мәғлүмәт табабыҙ

Әҫәрҙә ырыу башлыҡтарының, батырҙарҙың, арҙаҡлы һүҙ оҫталарының исемдәре атала. Шуларҙың ҡайһылары тарихи ысынбарлыҡта йәшәгән шәхестәр?

## Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ

**1.** Бикбау бейҙең сығышында Башҡортостан тарихына ҡағылышлы ниндәй оло ваҡиға күҙ уңында тотола?
**2.** Йыйын ҡәлгәне Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған ергә һалырға тәҡдим итә. Халыҡ ни өсөн тап ошо урынды һайлаған тип уйлайһығыҙ?
**3.** Йыйын барышында халҡыбыҙҙың ниндәй күркәм йолалары сағыла?
**4.** Ат сабыштары менән көрәштән тыш, йыйында тағы ниндәй ярыштар үткәрелә?
**5.** Уларҙың ҡайһылары хәҙерге көндәргә тиклем һаҡланып ҡалған?
**6.** Айҙар сәсән образында ҡайһы һүҙ оҫталарының һыҙаттарын күрәһегеҙ?
**7.** Ни өсөн сәсән йыйын аҙағындағы табында башлыҡтар, аҡһаҡалдар менән ҡалмай, үҙ тирмәһенә ҡайтып, йәштәрҙе саҡыра?
**8.** «Тарих – ул быуын-быуын төҫлө», – ти сәсән. Уның йәштәргә һөйләгән Башҡортостан тарихын быуындарға теҙеп ҡарағыҙ, нисә быуын килеп сыға?
**9.** Һеҙгә таныш булмаған быуындарҙың ҡайһыларын сәсән һөйләүе аша ғына белдегеҙ?
**10.** Самалап ҡарағыҙ, Айҙар сәсән һөйләгән тарих яҡынса нисә быуатты үҙ эсенә ала?
**11.** Сәсән, тарихты үҙ заманына ялғап: «Быйылғы йыйыныбыҙҙың түрендәләр, бына тигән ир азаматтары», – тип кемдәрҙе күҙ уңында тота?
**12.** Хикәйәнең иң аҙаҡҡы һөйләмен иғтибар менән уҡып ҡарағыҙ, уның менән автор ни әйтергә теләгән?

Ҡаратун яланы, хикәйәнән аңлашылыуынса, Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған ерҙән – хәҙерге Өфө ҡалаһынан алыҫ түгел. Тарихтан билдәле булыуынса, Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә ҙур йыйындар үткәрелә торған махсус урындар булған. Шуларҙың береһе – Өфө янындағы аҡлан. Әҫәрҙә тағы бер даими йыйын урыны иҫкә алына: Ете ырыу берлеген ойоштороп, имән бағана ултыртылған Йылайыр йылғаһы буйы. Белешмә сығанаҡтарҙан ошо ике аҡландың хәҙерге исемдәрен эҙләп табығыҙ.

Башҡорт фольклорында «Ете ырыу» тип исемләнгән легенда һәм ҡобайыр бар. «Башҡорт халыҡ ижады»ның «Риүәйәттәр, легендалар» һәм «Эпос» томдарынан уларҙы табып уҡып, Ғ. Хөсәйеновтың «Ете

ырыу» хикәйәһе менән сағыштырып ҡарағыҙ, яҙыусының уларҙан сығанаҡ итеп алынған урындарына иғтибар итегеҙ.

«Ете ырыу» ҡобайыры ла, легендаһы ла, йыры ла, Ғ. Хөсәйеновтың ошо исемдәге хикәйәһе лә – нәфис әҫәрҙәр; уларға, тарихи факттар менән бергә, кинәйәлек, уйҙырма кеүек сифаттар ҙа хас була. Ысынбарлыҡта Башҡортостанда Ете ырыу берлеге яҡынса XIII быуат тирәһендә барлыҡҡа килеп, XVI быуаттың икенсе яртыһына тиклем йәшәй. Бөгөнгө көндә халыҡ телендә ошо берлеккә ингән ырыуҙарҙы йыш ҡына бутап телгә алалар. Һеҙ белешмә сығанаҡтарҙан уларҙың дөрөҫ исемдәрен асыҡлағыҙ.

Булат

# РАФИҠОВ

(1934–1998)



«Мин Мәләүез районының Дәүләтҡол ауылында донъяға килгәнмен. Атайым уҡытыусы ине, уның ҡулында беренсе класта өс аҙна самаһы уҡып ҡалдым, шунан ул ҡаты ауырып китте һәм тиҙҙән вафат булып ҡалды. Ғөмүмән, бала сағымда алған иң көслө тәьҫир – кешеләрҙең күпләп үлеүе. Һуғыш фронтта ирҙәрҙе пуля менән, тылда ҡатын-ҡыҙҙы, бала-сағаны аслыҡ, сирҙәр менән сүпләп торҙо.

Донъяны ҡайғы-хәсрәт, аслыҡ-ялանғаслыҡ баҫҡан заманда кеше ауырлыҡтарҙы еңеп сығыу, шуның өсөн ҙур көс-ҡеүәткә эйә булыу тураһында хыяллана. Халыҡ араһында данлы батырҙар хаҡында хикәйәттәр һәм әкиәттәр йөрөй башлай. Ҡасандыр Ҡараһаҡал тигән батыр булғанлығын тәүге тапҡыр шул йылдарҙа ишеттем дә инде, тик уның тураһында роман яҙырымды ул саҡта күҙ алдыма килтерә алманым, әлбиттә.

Бәләкәйҙән тимер-томор менән булашырға һәм яҙышырға яраттым, яңғыҙ әбейҙәргә йоҙаҡ, сәғәт төҙәтеп, хат йә ғариза яҙып бирә инем. Бөтәһе лә бер теләк әйтер ине: уҡып, кеше бул. Әммә ауылда башланғыс мәктәп кенә, әсәй ауырый. Бишенсе класты Мәләүездә тамамлап, алтынсы класҡа Стәрлетамаҡ районының Айыусы ете йыллыҡ мәктәбенә киттем. Мырҙаш ауылында өләсәйемдә йәшәп, көн дә ете саҡрым йөрөп уҡыным. Алдағы йәйҙә әсәйҙең кәңәше менән Ишембайға һөнәрселек училищеһына барып ҡараным – дәүләт иҫәбенә ашау, кейенеү мөмкинлеге ымһындырҙы. Унда эшләүсе туған тейешле ағай Стәрлетамаҡҡа Ленин исемендәге мәктәпкә барырға кәңәш итте. Стәрлелә лә юл уңманы. Өфөгә киттем.

Бында ла эш сыҡмағас, үҙемде һыйындырырлыҡ балалар йорто эҙләп ил буйлап йөрөнөм һәм ҡыш уртаһында ғына ауылға ҡайтып индем.

Етенсе класты үҙебеҙҙең районда Юлдаш мәктәбендә тамамланым. Шунан тормош ҡуласаһы еңелерәк тәгәрләне шикелле: Стәрлетамаҡ педагогия училищеһында уҡып сығып, Башҡорт дәүләт университетында биш йыл белем алдым. Уҡып йөрөгән саҡта уҡ «Ленинец» гәзите һәм «Һәнәк» журналы редакцияларында эшләп йөрөгәйнем инде, ә университеттан һуң Юлдашта бер йыл уҡытҡас, йәштәр гәзитенә ҡабат эшкә саҡырылдым. «Пионер» журналы, «Совет Башҡортостаны» гәзите редакцияларында ла эшләнем, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының яуаплы сәркәтибе булдым. «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире вазифаһын башҡарҙым.

Тәүге шиғырым бала саҡта әсәйҙән сыбыҡ әләккән көндө барлыҡҡа килһә лә, күңел кисерештәрен рифмаланған һүҙҙәр теҙмәһенә һалыу шатлығы минең мәңгелек юлдашыма әүерелде. Әле лә, башлыса сәсмә әҫәрҙәр яҙыуға күскәндә лә, шиғыр юлдары төрткөләп кенә тора, хатта төштәремә инә. Ғөмүмән, тормошта бер нәмә лә эҙһеҙ үтмәй. Әйтәйек, бала саҡта уҡырға ынтылыуым ғүмерлек ҡомар булып ҡалды: яҙыусыларҙың ҡулъяҙмаларын уҡыу, үҙ әҫәремде яҙып ултырыу өҫтөнә, яңы китаптар һәм журналдар менән танышырға һәм үҙемә кәрәкле мәғлүмәттәр эҙләргә лә ваҡыт табам. Боронғо тарих мине айырыуса ҡыҙыҡһындыра. Халҡыбыҙҙың үткәндәре хаҡында йыйылған мәғлүмәттәр, алыҫ бала саҡта Ҡараһаҡал тураһында ишеткән легендаларға һәм риүәйәттәргә ҡушылып, мине XVIII быуат ваҡиғаларына арналған роман яҙырға этәрҙе лә инде. Башҡа фәндәр өлкәһендәге яңылыҡтар менән танышып барыуым фантастик әҫәрҙәр яҙыуға нигеҙ булды.

«Ҡараһаҡал» романы өсөн 1990 йылда Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булдым».

## ЭЙӘРЛӘНГӘН АТ

*(1790 йылдың 6 марты хаҡында тарихи фараз)*

### Инеш

Таң тыуыр алдынан төндө тулғаҡ тотҡан мәлдә, офоҡ артынан ялбыр яллы ат сабып килеп сыға ла, көмөш батмусҡа баҡыр борсаҡ һипкән кеүек, кешнәүе менән донъяны сәләмләй. Күп кенә кеше күреп ҡала уны, күрмәүсе-ишетмәүселәр ҙә байтаҡ. Беҙҙең ҡәләмдәштәр араһында ла етерлек ундайҙар, бына улар әлеге ат тураһында яҙғанды уҡыр ҙа минән: «Ҡайһы архивтан таптың был документты?» – тип һорар. Роман йә повесты ни менәндер бутаусы бәндәләргә ваҡыт әрәм итмәҫ өсөн дә инде ошо яҙмаларҙың жанрын «тарихи фараз» тип билдәләүем.

Ярай, быныһын асыҡланыҡ, хәҙер иғтибарҙы йәнә офоҡтағы атҡа йүнәлтәйек. Күрәһегеҙме? Ишетәһегеҙме? Хужаһын эҙләп саба булыр был «документһыҙ» ат, тәүәккәлдәрҙе батырлыҡҡа саҡырып кешнәй ул, баҙнатһыҙҙарҙы ҡыйыулыҡҡа өндәй. Бәғзеләргә уның кешнәүе аҡса сыңлауы булып ишетелә, икенселәре өсөн бығау сыңы менән бергә ҡушыла... Ә бына Петербурҙа Ҡышҡы һарайҙа шул кешнәүҙе, ғәҙәттә, императрица уянып, ҡулына аласаҡ көмөш ҡыңғырау тауышы менән бутайҙар.

Башҡорттар Әбей батша тип атаған Екатерина Икенсе ғали йәнәптәре түшәктән тормаған әле. Күҙҙәре асыҡ, әммә тән йылы, йомшаҡ мендәрҙәрҙән айырылырға һис теләмәй. Зыян юҡ, уның шулай бер аҙ наҙланып ятыуынан империя емерелмәҫ. Ул-был була ҡалһа ла, күрше бүлмәләрҙә ана күпме тоғро хеҙмәтселәре бар – һорашырҙар, асыҡларҙар, яҙып ҡуйырҙар, сара күрерҙәр.

Секретарь үҙ урынында инде, ҡаурый ҡәләмдәре осланған, аҡ ҡағыҙ битенә тәүге һүҙҙәр төшөп ятҡан: 1790 йылдың 6 марты. Һәр көндө шулай теркәп бара ул Ҡышҡы һарайҙың йылъяҙмасыһы.

Бөгөн офоҡта күренеп ҡалған аттың Балтик диңгеҙе яғына сабып китеүенә ҡарағанда, Әбей батшаның иғтибарына лайыҡлы ваҡиға шунда буласаҡ. Бер нисә яҡташыбыҙҙың Рогервикка ғүмерлек каторгаға ебәрелеүен иҫкә төшөрһәк: «Иҫәндәрме икән?» – тигән һорау беҙҙе лә шунда ашыҡтырасаҡ. Ә кәрәкле урынды һаҡсыларҙың бер-береһенә «Слушай!» тип ҡысҡырыуы буйынса еңел эҙләп табырбыҙ. Уларға иғти-

бар итеп тормай, анау тәпәш таш баструкка туп-тура барып инәйек әле.

Хәйер, үткәрмәҫтәр. Тревога иғлан ителер, ата башларҙар. Тимер менән ҡоршаулы анау ауыр ишекте лә ҡарауыл башлығынан башҡа аса алмабыҙ – асҡыстар уның ҡулында. Былай ҙа күренеп тора: яҡташтар иҫән, юҡһа ошо тирәне шул тиклем ныҡ һаҡларҙар инеме ни?

Тағы бер иҫкә төшөрәйек: 1790 йылдың 6 марты.

## 1

Баструкта оҙаҡ ятҡан башҡа тотҡондар кеүек үк, Юлай ҡарт та күптән инде көн иҫәбен дә, йыл иҫәбен дә юғалтҡан. Уны хәҙер миҙгелдәр алмашыныуы ғына ҡыҙыҡһындыра: ҡыш еттеме, яралары һыҙлауына, «ҡуян тубығы» ҡатырған быуындары ауыртыуына сыҙай алмай тиҙерәк йәй килеүен теләй башлай, көҙ яҡынлаштымы, Аллаһы Тәғәләнән һалҡын томандарҙы, епшек ҡар бурандарын оҙағыраҡ ебәрмәй тороуын ялбара. Һай, үҙебеҙҙең ҡышҡа етәме ни, илдә минең был сырхауҙар ҡул менән һыпырып ташлағандай булыр ине лә бит, тип тә әйткәне бар, аптырағас. Йүрүҙән буйының йондоҙҙарҙы шаҡырайтырлыҡ аяҙ һыуыҡтары, сәнскеле ҡоро ҡар менән ҡойондороусы бурандары үҙҙәре үк шифа һымаҡ тойола башлай уға.

Атаһын Салауат үҙенсә аңлай. Янғантауға үҙенде күтәреп кенә апарыр инем, эйәргә лә, арбаға ла ултыртмай, тип хыялға бирелә лә китә. Ярай, быныһы йәшлегенә баралыр, ә Ҡәнзәфәр аҡһаҡал ҡорона ингән башы менән унан да уҙҙырып ебәрмәксе. Иншалла, тыуған тупраҡҡа ҡайтып аяҡ баҫырға күп ҡалмағандыр, ана шунда Янғантауыбыҙға өсәүләп юлланырбыҙ, унда минең дә бер туйғансы йылынғым килә, тип элеп алырға ғына тора. Салауаттың күңеле киң: Иванды ла саҡырырбыҙ, Янғантау йылыһы уға ла етер.

Йылы көҫәүҙән шулар барыһы ла. Йәшерәктәргә нисектер, әммә Юлай ҡартҡа усаҡ йылыһы ғына аҙ хәҙер. Дөрөҫ, үҙеңә кәрәк саҡта ут яғып, уның эргәһендә иркенләп ултырырға ла тура килмәне Балтик буйында үткән оҙон ғүмерҙә, ләкин ҡарауылсылар янындамы, аш бешкән ерҙәме ҡулдарыңды ҡөҙрәтле ялҡын телдәренә тейҙерә-тейҙерә бер аҙға сүгәләп китергә мөмкин әле. Бешерә, ләкин йылытмай. Күңел нығыраҡ

өшөгәнлектән килә инде быныһы, өмөт уты һүрелә барғанлыҡтан. Уларҙың хәлендә кеше булып ҡала алыу үҙе бер мөғжизәлер әле. Донъя сите бит, ажғырып ҡайнап ятыусы диңгеҙ ошонан башлана. Унан күрмәксе, бында барыһы ла ажғыра, хатта әле генә тыуған көн дә баструкка «Тороғоҙ, сусҡалар!» тип аҡырып килеп керә. Ә төн, унан да уҙҙырырға теләгәндәй, ишек күгәндәрен асыулы шығырлата, ат башындай йоҙаҡтарҙы шатыр-шотор элеп ҡуя. Бына шуларҙы тыңлай-тыңлай, өшөп ҡалтыранғанда тирә-яҡтағы таш ҡаялар, ҡом тауҙары артынан һөрәнләп, уҡ ямғыры яуҙырып меңәрләгән һыбайлы ҡалҡып сығырын күҙ алдына килтереп ҡара инде! Ә Ҡәнзәфәр көтә. Салауат унан да нығыраҡ көтә, тик ул да хәҙер: «Ҡайҙа йөрөй был Кинйә абыҙ?» – ти башланы. Бер-береһен баҫтырып һуғышыусы айғырҙарҙы хәтерләткән тулҡындарға яр башынан ҡарап йырлап тороуҙары йышайҙы. Хәйер, элегерәк уның ишене рөхсәт тә итмәй торғайнылар шул, әммә бығаулы килеш ҡасып китеү мөмкин түгеллеген, тотҡондарҙың ҡасырға ынтылып та тормағанын бындағы аждаһалар ҙа аңланы хәҙер.



*Р. У. Ишбулатов.* «Буйһонмаҫ ихтыяр»

Кинйәнең нык ҡартайғанлығын, бәлки, яҡты донъянан да китеү ихтималын иҫтә тота Салауат. Уның исемен телгә алыуында: «Минең улдарым үҫеп етте бит инде, беҙҙең турала уйламайҙармы икән ни?» – тигән һорауҙы ишетергә, диңгеҙгә ҡарап тороуында ярҙамды ҡайһы яҡтан самалауын күрергә кәрәк. Эйе, эйе, егет ҡоронда инде Юлайҙың ейәндәре!.. Илдә ҡалған үҙ балаларының иҫәнлегенә ышанмай: биләмәләрҙе бирмәҫкә була тартышһалар, имен ҡалдырмаҫтар. Дошмандар күп. Ә ейәндәрҙең эше башҡа. Шулай кеүек. Ошо турала уйлаһа, ҡарт тамам бутала. Беренсенән, ул уғландарҙың бер янарал менән бер палкауникка ҡоллоҡҡа бирелеүе, ҡыҙҙарының шулай уҡ таратып алыныуы Өфө бастругында ятҡанда уҡ мәғлүм булды. Сабыйҙарҙы суҡындырып, кафыр исемдәре биреп, үҙ телдәрен оноттороп, урыҫ итеп үҫтергәндәрҙер. Тамырын юғалтҡан, атай-олатайҙың кемлеген, ҡайҙалығын белмәгән, ят дин тотҡан кешеләргә өмөтләнеү – аҡылһыҙлыҡ. Салауаттың Ҡаратауҙа һунарсы ҡартҡа тотторол китҡән улы ла бар барлығын. Теге кеше исемен һорағас, Етембай булһын, тип әйттем, ти үҙе. Аллаһы Тәғәләнең шәфҡәте тейеп, ул да үҫкәндер, тик кемлеген әйтеүсе булғанмы уға, башҡорттоң азатлыҡ һәм яугирлыҡ рухын күңеленә һеңдереүсе? Ана шул шул! Икенсенән, ярай, Етембай ҙа, Иван йә Мишка тигәнгә «әү» тиеүсе егеттәр ҙә кемлектәрен нисектер белеп ҡалып, беләктәре һәм теләктәре яусылыҡтан ташып та тора, ти. Хатта атай-олатайының ҡайҙа интегеүен дә ишеткән, тип фараз ҡылайыҡ. Әлеге лә баяғы: бында килергә теләрҙәрме? Улан атайҙы ҡотҡарырға таяҡ тотоп та айыуға ташлана, әммә бында бер шарт зарур – атайҙан һөйөлөп, уның ҡуйын йылыһын, аҡылын, оҫталығын һеңдереп үҫеү. Салауатҡа, һирәк булһа ла, Юлай яуҙан йә бүтән йөрөмдәрҙән ҡайтҡан араларҙа атай ҡуйыны, атай һабаҡтары эләкте әле. Ә уның үҙ улдарына тамсыһы ла тәтемәне шуларҙың. Азатлыҡ һәм яу ораны бик иртә саҡырҙы шул аталарын, әйләнеп ҡайтмаҫлыҡ юлға саҡырҙы. Һай, шуларҙы уйламау мөмкинме, Юлай шикелле, ғүмер юлын йомғаҡлап, әхирәткә әҙерләнеүсе кешегә!

Өсөнсөһө – иң хәтәрелер. Юлай ҡай саҡ караттар ҡулына эләкмәгән Кинйәнең илгә йәшерен генә ҡайтҡанын күҙ алдына килтерә. Ниңә, ана Ҡараһаҡал ҡайтҡан бит, хатта Ур тамағына Урус кенәздең башҡорттарҙы язалағанын ҡарарға барып, яуҙаштарын ныҡлыҡҡа өндәп йөрөгән, тиҙәр. Кинйә лә ҡайтҡандыр, батырҙар йыйырға ниәтләнгәндер, ә ил туҙҙырылған,

ауылдар урынында көл бурандары уйнай, халыҡ аҫылып-киҫелеп, ҡоллоҡҡа һатылып йә ҡурҡышынан ҡасып бөткән. Башҡорт биләмәләренә ылау-ылау күскенселәр ағыла – урыҫы ла, татары ла, сыуашы ла... Шулай булһа, ике-өс бөртөк тотҡондо эҙләү ҡайғыһымы ни иҫән ҡалғандарҙа? Салауат менән икеһен ауыл һайын сыбыртҡылап йөрөткәндә, күрҙеләр бит инде караттарҙың утты ла, арҡанды ла, ҡурғашты ла йәлләмәгәнен. Ҡәнзәфәргә улай туҡмалып, халыҡтың ҡыйралышын күреүҙән һыҙланып йөрөү эләкмәгән, шуға ла ул, ил һынлы ил ҡапыл ғына юҡҡа сыҡмаҫ, тип үҙенекен ҡайыра. Салауаттың ҡаштары йыйырыла, йоҙроҡтары төйнәлә, өндәшмәй, шулай ҙа Ҡәнзәфәр яғын тотоуы күренеп тора.

1790 йылдың 6 марты тип теркәлгән көндә Юлай ҡарт айырыуса иртә уянды. Дөрөҫөрәге, кемдер күкрәгенә ҡағылғандай һәм бышылдап ҡына: «Тор әле, тор!» – тип өндәшкәндәй булды. Ҡарт ашығып күҙҙәрен асты: бөтәһе лә ғыр-ғыр йоҡлай. Һөргөн ашы һәм таш менән айҡашыу йонсоуҙың сигенә еткергән өлкән йәштәге кешеләр бүтәнсә нисек йоҡлаһын инде! Баструк тәҙрәһеҙ, әммә таң яҡтыһы һарҡып инергә барыбер ектәр таба – түшәмдән дә, ишек башынан да, тағы әллә ҡайҙарҙан.

1790 йылдың 6 марты башлана ғына әле. Яңыраҡ булып алған әйтеш ул килтерәсәк ваҡиғаларҙың иң-иң вағылыр. Каторжандар үҙҙәре ул турала онотҡан да һымаҡ инде. Ана улар, көндәгесә, тамаҡ туйҙырып алған да эшкә йыйына. Ете генә бөртөк ҡалған бында улар, пугачёвсылар. Ҡарар күҙгә етеһе лә бер туған шикелле: бәке, ҡайсы юҡлыҡтан бөтәһен дә берҙәй һаҡал-мыйыҡ баҫҡан, сәстәре арҡаларына төшөп тора. Горшковтың башы ла ал яҡтан ғына ялтыр. Йәш айырмаһын да яҡындан диҡҡәт менән ҡарап йә кемдең нисек аяҡ ҡуҙғатыуынан ғына самаларға мөмкин. Команда тауыштары, ҡул арбаларын тәнгә тоташтырған тимер сыңлауы, күршелә диңгеҙҙең өҙлөкһөҙ ауыр һулауы – барыһы ла көндәгесә. Ә ел, ысынлап, ҡояш ҡалҡҡан яҡтан, ул шул тарафтан йыш иҫә, бер бөгөн түгел... Әммә уның Юлай ҡартты ошолай тынғыһыҙлағаны юҡ ине, шикелле.

– Нимә, ағай, елдән һаман ҡымыҙ тәмәйтәме? – тип мәрәкәләне уны Ҡәнзәфәр, карьерға барышлай.

– Эйе, бөгөн, Ҡәнзәфәр, ниҙер буласаҡ. Мин әйтте тиерһең.

Алдан барыусы Салауат быларға боролоп ҡараны ла, йылмайып, баш сайҡаны.

### Интернеттан мәғлүмәт табабыҙ

Рогервик крепосындағы тотҡондар Янғантау быуында йылынырға хыяллана. Ул Башҡортостандың ҡайһы төбәгендә? Был тау хаҡында нимәләр беләһегеҙ?

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Кем ул Кинйә? Тотҡондар азатлыҡҡа өмөтләнеп, ни өсөн тап уның исемен телгә ала?
**2.** Кинйәгә арналған ниндәй әҫәр беләһегеҙ? Уның авторы кем?
**3.** Юлай Аҙналиндың яңы тыуған көн килтерер яңылыҡҡа өмөт итеүен нисек аңлатыр инегеҙ?

## 2

Эстондар иле был, Эстляндия тип атала. Бейек тауҙары, әллә ни ҡалын урмандары юҡ, шуға елдәр үтәнән-үтәгә һуға уны. Быныһы ғына нимә, елдәрҙән күрмәксе, ғәскәр тапай рәхәтләнеп был ерҙе – әле герман ябырыла, әле ляхтар, әле свейҙар, әле урыҫтар. Көслө, яусыл-даусыл, көнсөл батшалыҡтар араһында ята шул, диңгеҙгә һыйынып – шунда уның беренсе бәхетһеҙлеге. Эстондар – кәүҙәле, сабыр, сибәр халыҡ, ләкин аҙ һанлы. Бәлки, башҡорттар һымаҡ уҡ, яу артынса яуҙа ҡырылып торғандарҙыр, шул ғына асыҡ: үҙҙәренең айырым батшалығын һаҡларға хәлдәре етмәгән. Икенсе бәхетһеҙлектәре ошолор. Эйе, яҙмыштар оҡшаш: тегендә башҡорт биләмәләренә баҫҡынсыларҙы ер өҫтөндәге һәм ер аҫтындағы хазиналар тартып килтерһә, бында – диңгеҙ, караптарға ышыҡ бирерҙәй урындар... Диңгеҙҙә кемдең караптары йөҙә – донъя шуныҡы.

Был ярҙар башҡорттарға ла күптән таныш. Аҡ батша Иван Грозный ваҡытында уҡ әле улар ошонда урыҫ яугирҙары рәтендә свейға ҡаршы һуғышып йөрөгән. Еңелеп, ҡыуылып ҡайтҡандар ул саҡта. Шунан һуң йөҙ илле йыл самаһы үткәс, урыҫ әрмеһе йәнә ошо тарафҡа эркелә. Пётр Беренсе әйҙәләгән уны, ул да башҡорт егеттәрен ярҙамға саҡырған. Был юлы свей еңелә, айырыуса Полтава янында ҡаты туҡмалғас, ошо тирәне ташлап китә. Тәбиғи, урыҫ хөкүмәте яр буйын хәрби яҡтан нығытырға, яңы ҡәлғәләр һәм порттар төҙөргә тотона. 1718 йылда Рогервик ҡәлғәһенә нигеҙ һалына. Уны төҙөү Пётр Беренсе үлгәнсе, йәғни 1725 йылға тиклем, ҡыҙыу бара, арта-

бан әле һүлпәнәйә, әле ҡабат дөрләп китә. 1767 йылдан Балтик порты тип атала башлай, әммә халыҡ телендә Рогервик булып ҡала бирә.

Батырша яуынан һуң күп кенә башҡорттоң ошонда һөргөнгә ебәрелеүе билдәле. 1773–1775 йылдарҙа империяны дер һелкеткән Крәҫтиәндәр һуғышы баҫтырылғас, ҡулға алынған күренекле пугачёвсыларҙы ла Балтик портына каторгаға оҙата башлайҙар. 1775 йылдың ноябрь айында Юлай менән Салауат та ошо ярға аяҡ баҫты. Улар өсөн «ике арба яллап, ат башына саҡрым һайын 1 тин түләргә» аҡса бүленһә лә, оҙон юлды, башлыса, йәйәү уҙҙылар, шуға ла, яралары асылып, йонсоуҙың сигенә еткән хәлдә инеләр. Кеше түҙгәс түҙә бит, әй! Донъя яратылғандан бирле бик һирәктәргә эләккәндер улар күргән-кисергән хәтле тән һәм йән ғазабы, бик һирәктәр сыҙағандыр ундайға, ә аталы-уллы был икәү, тыуған яҡҡа барыбер ҡайтыу теләге менән яңынан һын турайтып, йәшәп алды ла киттеләр. Ун дүрт йылдан ашыу инде уларҙы яҡты донъяның иң ситендә өмөт йөрөтә, бығауҙары: «Кинйә, Ҡаранайҙар ни уйлай икән? Уландар үҫеп еткәндер инде!» – тип сыңлай.

Ваҡыт уҙа тора. Диңгеҙгә улар берәмтекләп тигәндәй ташыған таштар өйөмө үҫә, ярҙан тегеләй һуҙыла бара. Зыяратта ла ҡәберҙәр ишәйә. Пугачёвсылар айырым күмелә. Уларҙы ерҙең өҫтөндә лә, аҫтында ла бүтәндәр менән, хатта башҡа каторжандар менән ҡатнаштырмайҙар. Ете бөртөк кенә ҡалғас та. Шул етәү берҙәм булһа, әле бер хәл. Юҡ бит. Ана карьер юлында өс мосолман алдан атлай, христиандар – үҙҙәренә бер төркөм.

Юлайҙың уйҙары, ташҡа төртөлгән арбалай, бар зиһенен зыңҡылдатып алды, һәм ҡарт донъяның үҙе уйлағандан да ҡатмарлыраҡ икәнен тойҙо.

Юлай, үҙен тертләткән уйҙарға ҡабат юлыҡмаҫ өсөн, һорау алған, яза бирелгән көндәрҙе хәтерләргә тотондо. Эй йөрөттөләр ҙә инде уларҙы тотош империя буйлатып! Юлайҙы Силәбенән Ҡазанға алып килгәндә, Салауатты Өфөнән унда килтергәйнеләр инде, Ҡазандан – Мәскәүгә, унан Ырымбурға. Хөкөм ҡарарын Өфөлә уҡынылар. Ҡабат арбаларға тейәнеләр ҙә – ауылдан ауылға, завуттан завутҡа. Кем ҡайҙа хөкүмәт ғәскәренә ҡаршы һуғышҡан, шунда уны барса халыҡ алдында сыбыртҡы менән туҡмарға, тип әйтелгәйне хөкөм ҡарарында. Туҡмау провинция кәнсәләренең штаттағы палачы Мартын Сусловҡа ҡушылды. Ысын ҡатил ине ул.

**Хәтергә төшөрәбеҙ**

**1.** Эстон иленең тарихы менән Башҡортостан тарихы араһында ниндәй уртаҡлыҡтары бар?

**2.** *Ҡатил* һүҙе башҡорт һүҙ сәнғәтендә тағы ниндәй әҫәрҙә осрай? Ул ниндәй мәғәнәгә эйә?

## 5

Урыҫтарҙы Балтик диңгеҙенә үткәрмәҫ өсөн быуаттар дауамында һуғышҡан Свей батшалығы тынғыһыҙ күршенән бер мәлгә лә күҙ яҙҙырмай, һәр уңайлы ваҡытта аяҡ сала, төрлө этлек ҡыла. Айырыуса, Полтава ҡыйралышынан һуң диңгеҙҙең көньяҡ яр буйын ташлап китергә мәжбүр булғас, Рәсәй империяһының яңы баш ҡалаһы Санкт-Петербург һәм бүтән ҡала-ҡәлғәләрҙең йылдам төҙөлөүенән һәм нығыныуынан свейҙар яйлап нәфрәт һәм көс туплай, ҡон ҡайтарырға әҙерләнә. Ҡәлғәләр ышығында урыҫ флоты өсөн яңынан-яңы караптар эшләнеүе бигерәк тә тынғы бирмәй уларға. Ул заманда иң көслөләрҙән һаналған свей флоты бер нисә тапҡыр Питерға һөжүм итә, десант төшөрөп, йәш ҡаланы баҫып алырға, һис юғы, үртәргә тырышып ҡарай. Әммә ҙур зыян килтерә алмай, үҙе ныҡ ҡына ойпаланып, ҡыуып ебәрелә. Ошонан һуң да йыш ҡына офоҡта свей елкәндәре күренеп ҡалғылай. Уныһы инде, бөгөнгө телгә әйләндергәндә, психологик баҫым яһау, кеҫәнән йоҙроҡ күрһәтеп китеү генә була. Дөрөҫ, асыҡ диңгеҙҙә свейҙар Нева тамағына йүнәлеүсе сауҙа караптарын талау, яндырыу кеүек яуызлыҡтар менән иркен шөғөлләнә әлегә.

1790 йылдың 6 мартында иртәнге сәғәттәрҙә уларҙың «Улверст» һәм «Ярмарс» тигән фрегаттары туп-тура Балтик портына йүнәлә – ошонда урыҫтар яңы хәрби караптар оҫталауҙы яйға һалған тигән шомло хәбәр алып килә уларҙы. Бойороҡ ҡәтғи була: утҡа тоторға, туҙҙырырға, юҡ итергә! Хәбәрҙең төптө ялған икәнен, диңгеҙ ҡултығында бер нисә ваҡ сауҙа карабы һәм балыҡсы кәмәләре генә барлығын алыҫтан уҡ күҙәтеү торбаһы аша асыҡларға мөмкин булһа ла, фрегаттар яр ситенә үк килеп якорь ташлай һәм порт ҡоролмаларын, йорттарҙы йәҙрәгә ҡойондора башлай. Ҡәлғә пушкалары атмаясағын капитандар алдан уҡ белмәнеме икән, тип тә уйларға мөмкин: хәрби башлыҡтар, уларҙың артынса һалдат-

тар йәшенер урын эҙләп йүгерешә, ҡайҙа эләкте, шунда инеп боҫа. Полковник де Роберти, кемгә хеҙмәт иткәнен иҫкә төшөрөп һәм ҡурҡыуын еңеп, гарнизонды күтәрергә, һөжүмде кире ҡағырға тырышып ҡарай, ләкин һуң була. Свейҙарҙың һис ҡаршылыҡһыҙ ярға сыҡҡан десант отряды комендантты үҙе йәшәгән йортҡа һаҡ аҫтына ултыртып ҡуя. Бүтән офицерҙарҙы һәм һалдаттарҙы эҙәрләү, ҡорал ташлатыу, ҡаҙна мөлкәтен талау башлана. Складтарҙа һаҡланған дарылы мискәләрҙе, он һалынған тоҡтарҙы, башҡа аҙыҡ-түлекте, ҡурғаш һәм баҡыр запастарын урыҫ һалдаттарынан, пугачёвсыларҙан айырым тотолған арестанттарҙан ташыталар. Десанттың бер өлөшө ҡәлғә артиллерияһын баҫып ала, хәрби ҡоролмаларҙы емерергә тотона. Бер нисә урында янғын сыға. Георгий сиркәүенең ҡыңғырауҙары өҙләкһеҙ сыңлай-геүләй, христиандарҙы әллә ҡоралға саҡыра, әллә ҡунаҡтарҙы икмәк-тоҙ менән ҡаршыларға өндәй.

Балтик портына ошо һөжүм Рәсәй империяһы яҙмышына йоғонто яһай алмау ғына түгел, тарих китаптарына ла эләкмәй, бары архив ҡағыҙҙарында ятып ҡалыуына ҡарамаҫтан, серлелеге менән оло ваҡиғалар рәтендә өйрәнеүгә лайыҡлы. Мәҫәлән, свейҙарҙың десант төркөмө илле-алтмыш кешенән артмаған, ә урыҫ гарнизоны кәмендә ун мәртәбә ҙурыраҡ булған. Шунса мылтыҡтың һәм ҡырҡ пушканың атмауын бер нисек тә аңлатырлыҡ түгел. Ярай, комендант – сит ил кешеһе, ят мәнфәғәттәр өсөн ғүмерен әрәм итергә теләмәгәндер, бынан ҡыуылһа, теләһә ниндәй батшалыҡҡа яллана алыуын уйлағандыр. Тик гарнизонда урыҫ офицерҙарының күпселек тәшкил иткәнен онотмайыҡ, бына улар де Робертиҙың ауыҙына ғына ҡарап торҙомо икән ни? Ил өҫтөнә яу килгәндә, йөрәгендә Ватан тойғоһо йөрөткән ябай һуғышсы йә крәҫтиән дә тыуған ерҙе, намыҫты һаҡлау өсөн әйләнә-тирәһендәге кешеләрҙе ойоштора башлай. Ә бында – тотош тәхет хаҡына, императрица хаҡына үҙҙәрен аямаҫҡа ант итеүселәр. Әллә оҙаҡ йылдар ғәмһеҙ генә көн итеү һөҙөмтәһендә оноткайнылармы икән барыһын да – антты ла, туптан атып яттарҙы өркөтөү мөмкинлеген дә?..

Пугачёвсылар, һаҡсыларҙы баструкка бикләп, ишекте шартлатып йоҙаҡлап алғас, ҡайҙалыр барып, низер эшләргә ашыҡманылар. Салауат атаһын ишек алды майҙансығының бер мөйөшөндә ятҡан йәлпәк ташҡа ултыртып, үҙе унын эргәһенә баҫып тирә-яҡты күҙәтә ине. Ҡалғандар ҙа шунда тар-

тылды. Ун биш йыл буйы бығау һөйрәгәндән һуң, иркен, еңел атлау ҡурҡыта ине уларҙы, көтмәгәндә сылбырҙан ҡотолоу баштарын әйләндергәйне. Йә, артабан ни ҡылабыҙ, тигән һорау яҙылғайны һәр береһенең ҡарашында, әммә шуға яуап бирергә, йәғни яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алырға береһе лә әҙер түгел ине әлегә. Ульянов Рәсәйҙе һаҡлау тураһында баяғы һүҙҙәрен ҡабатларға теләмәне, сөнки килеп тыуған мөмкинлекте икенсе маҡсатта файҙаланыу уйы уны ла, бүтәндәрҙе лә тетрәткәйне. Ирекле кешеләр донъяһына ҡапҡа асылып торһон да, ҡайһы каторжан уның эргәһенән йүгереп уҙып китһен! Әйләнәтирәгә күҙ һалып, уйланып алыу һәм уртаҡ фекер төйнәү өсөн бер аҙ ваҡыт кәрәк ине уларға. Тик күҙҙәр ҙә, мейе лә кеше менән бергә ҡартая шул, һәм ошо хәл казактарҙы ла үҙҙәре өнәп бөтмәгән Салауатҡа ылыҡтырҙы. Көсһөҙ көслөгә һыйына, быны бер ояты ла юҡ.

– Йә, Салаватка, ниҙәр күреп өлгөрҙөң?

– Ана – яндыралар.

– Десант ҙурмы икән?

– Бынан ни күрәһең! Ҡалҡыуға менергә кәрәк.

– Әйҙәгеҙ.

– Аҙ ғына сабыр итәйек. Һаҡлыҡ, тәртип кәрәклеген онотоп, ошо килеш һерәйеп йөрөй башлаһаҡ!..

– Йә, йә, әйтеп бөтөр, писарь.

– Башҡа кемдәргәлер һаҡсы булып кейенергә кәрәк, ҡалғандарыбыҙ – арестант. Юҡһа, ҡасҡандар, тип... үҙегеҙ беләһегеҙ! – Почиталин тотош төркөмдө күҙҙән үткәрҙе. – Салауат, һин ҡарауыл башлығы булырһың.

Салауат, риза түгеллеген белдереп, баш сайҡаны.

– Юҡ, танауы ҡырҡылған кешегә арестант булыу нығыраҡ килешә. Башлыҡ – һин үҙең.

– Мин ниндәй атаман инде! Ана Ульянов кейенһен, Караваев менән Горшков – һалдаттар. – Почиталин үҙ тәҡдименә ошондай төҙәтмә индерә һалды ла тегеләрҙе ашыҡтырырға тотондо. Ошоғаса өндәшмәй тороусы Ҡәнзәфәр Усаев:

– Мишәр менән башҡорт, бахыр, шул арестантлыҡтан уҙа алманы инде! – тип барыһын да көлдөрҙө. Мәрәкә лә кәрәк ине ҡоршау кеүек ҡыҫҡан көсөргәнеште йомшарта төшөргә, хатта битараф төҫтә ултырыусы Юлай ҡарттың иреренә йылмайыу ҡунды. Мишәрҙең һүҙҙәрендә дөрөҫлөк булһа ла, уларҙы шаяртыуға борорға кәрәк ине – татыулыҡ хаҡына, уртаҡ маҡсат хаҡына.

Ғәҙәттәге тәртиптә теҙелешеп яҡындағы ҡалҡыуға күтәрелделәр: алдан – Салауат, шунан Юлай менән Ҡәнзәфәр, ике төркөм уртаһында Иван Почиталин атлай. «Конвой» үҙенә тейешле урында килә. Һис шикләнерлек йә бәйләнерлек түгел. Туҡтап, ҡарана-ҡарана, һөйләшеп алалар икән, бөгөнгө хәлдә шулай итмәүҙәре ғәжәберәк тойолор ине. Тик бына бөтәһенең дә, хатта һаҡсыларҙың да бәһлеүән яурынлы арестантты уратып, ауыҙына инеп китерҙәй булып ҡыланыуҙары ғына!

– Свейҙар ни ҡыра унда?

– Пристандә халыҡ күп – свейҙар ҙа, арестанттар ҙа. Кәмәләргә мискәләр, тоҡтар ташыталар.

– Складтарҙы таҙарталар!

Салауат, ҡарашын бер урындан икенсеһенә күсереп, унда ниҙәр күргәнен әйтә барҙы, ҡалғандар уның күҙәтеүҙәренә үҙҙәренекен өҫтәп, аңлатмалар биреп, тоҫмалдар ҡороп шым ғына шаулашты. Оҙаҡламай уларҙың иғтибары ҡәлғә батареялары ҡуйылған бейеклеккә тупланды: унда атышҡа әҙерләнгәндәге һымаҡ йәнлелек күҙәтелә ине, әммә туптар араһында мәж килеүселәрҙең ят кейемдә икәнен дә абайланы Салауат. Беҙҙекеләр шулай кейенеп алған, тине Иван һөйөнөс менән. Улайһа, хәҙер тегеләрҙе дөмбәҫләй башларҙар, тип элеп алды Ҡәнзәфәр. Анау ғына торған караптарға тәүге йәҙрәне үк сәпәр инем, тип маҡтанды Караваев, бер һылтауҙан коменданттың өйөн туҙҙырыр инем, тик батареяларҙа хәл беҙ уйлағанса уҡ шәптән түгел һымаҡ. Салауат, уға боролоп, раҫлап баш ҡаҡты.

– Нимә һуң унда? – тип ҡыҙыҡһынды Почиталин асыуланыңҡырап. Ҡыҫҡа яуап үҙенең асылығы менән шаңҡытты.

– Пушкаларға шына ҡағалар.

Бүтәндәр шым булды, ҡапыл Юлай ҡарт телгә килде:

– Һай, йәшәһен минең ейәндәр! Алды, артты ҡарап эшләйҙәр.

Салауат атаһын тиҙ һыуындырҙы.

– Ейәндәрең килмәгән шул. Үҙебеҙгә ҡыймылдарға кәрәк. – Юлайҙың әйткәнен тәржемә иткәнде көткән иптәштәренә былай ғына тине: – Тик тормаҫҡа ҡуша. Мөмкинлекте ысҡындырабыҙ, ти.

– Йә, нишләп ҡарайбыҙ һуң?

Ошо мәңгелек һорау былай ҙа бәләкәй төркөмдө икегә – христиандарға һәм мосолмандарға бүлде. Салауат пристань тирәһенә юл тоторға, унда берәй сауҙа карабының хужаһы менән һөйләшеп ҡарарға тәҡдим итте. Көйгә килмәһә, боғаҙы-

нан алырға: берәй аулаҡ урынға илтеп төшөрһөн әйҙә, артабан күҙ күрер. Ҙурыраҡ кәмә лә ярай. Уның ниәтен Ҡәнзәфәр оҡшатты. Юҡ, тине Ульянов, билендәге шпага һабына эре генә таянып, беҙ айырым китәбеҙ, үҙебеҙҙең юл менән. Ул саҡта бигәйбә, беҙ киттек, тип Салауат үҙенекеләргә баш һелкте. Туҡтағыҙ, бөтөнләй буш ҡулһығыҙ бит, тип өтәләнде Почиталин, бәлки, бергә-бергә, ә? Ҡоралы ла, башҡаһы ла табылыр, уңышлы сәфәр үҙегеҙгә!.. Шул һүҙҙәр менән Салауат мосолмандар төркөмөнә юл башланы. Айырылырға икән – айырылырға, йә күңел йомшарып китер ҙә... һуңынан тағы талаш сығыр, шуға ваҡыт әрәм иткәнсе!.. Етәүләп һөйрәлеүгә ҡарағанда өсәү булыу яҡшыраҡтыр ҙа әле, тип нығытты Салауат үҙенең ҡарарын, яҡшыраҡ, әлбиттә, тип икеләнеүен тамам еңде.

Артына боролоп ҡарарға теләп-теләп ҡуйһа ла, үҙ-үҙен тыйҙы. Атаһы менән Ҡәнзәфәрҙең күп йылғы тәртип менән бер тотам да ҡалмай атлағанын былай ҙа белә, ә казактар баштары һуҡҡан яҡҡа китә бирһен. Әле булмаһа, һуңынан хәл иткес мәлдәрҙә юлдар айырылыр ине барыбер. Уларға бит казак ене килә лә ҡағыла, килә лә ҡағыла.

Салауат атаһының ауыҙ эсенән генә тәкбир әйтеп килгәнен ишетеп ҡалды, һәм ҡартты йәлләүҙән йөрәге алҡымына килеп тығылды. Ейәндәреңде мин дә көттөм, көтәсәкмен, тип күңеленән уға өндәште ул, әммә шайтан батшалар, янаралдар рәүешенә керә лә әҙәм балаларының юлына төрлө кәртәләр ҡора. Тик өмөтөңдө өҙмә, яныңда улың бар бит әле, көс-ғәйрәтен юғалтмаған бит әле ул, ҡара һөләктәр һурыуына ҡарамаҫтан. Күкрәгендә уның йыр үлмәгән. Ә йыр башта һинең үҙеңде, шунан һуң ғына ғәскәреңде күтәрә. Ҡыйғы янында шулай булды. Елдәк янында ла, бүтән алыштарҙа ла... Арыҫланға әүерелә ине, атай, улыңдың йыр аша бирелгән әмерен тыңлағандан һуң йәш егеттәр ҙә, яу ҡат-ҡат тамғалаған беше һуғышсылар ҙа. И-и, ул ҡанатлы мәлдәр! Күктә Тәңре барлығын шундай саҡтарҙа тояһың да инде, бәндәләрҙе дөрөҫ юлдан тик ул йөрөткәнгә шунда иманаһың. Шунһыҙ нисек сапмаҡ кәрәк әле генә сығынсылаған атта, әле генә сығынсылаған йөрәк менән үлем бөркөүсе туптар өҫтөнә, ажғырып килеүсе мең башлы аждаһаға ҡаршы!

Салауат, бар тәнендә күптән онотолған ҡомарҙың тыпырсынғанын ишетеп, ирекле булыу ләззәтен һәр күҙәнәге менән татып, аҙымдарын шәбәйтә барҙы. Ҡаршыһында әйләнептулғанған диңгеҙ Йүрүҙән буйындағы текә тауҙарға, осло ҡая-

ларға әүерелдә, тоноҡ ҡына урман геүләүе ишетелеп торҙо ла ҡапыл ҡош һайрауы баштан-аяҡ ҡойондорҙо. Эйе, улар өсөн азатлыҡ Уралдан башҡа мөмкин түгел, уларҙан ҡомда ҡалған эҙҙәр Уралға тиклем һуҙылырға тейеш. Империя свейҙар менән уларҙан башҡа ла эш итә белер. Ә башҡорт иле – уларһыҙ!..

Уйының осона сығырға өлгөрмәне. Уң яҡтағы өйкөм ҡыуаҡлыҡта кемдер барлығын һиҙеп туҡтаны. Улынан бер аҙым да ҡалмаҫҡа бар көсөнә тырышҡан Юлай ҡарт уны башы менән ныҡ ҡына төкөнө.

– Ни булды? – тип ғәжәпләнде ул.

– Боҫ! Ятығыҙ ергә! – Салауат, һикерергә әҙерләнгәндәй, ҡапыл сүгәләне, ҡыуаҡ артынан күтәрелгән кешенең мылтыҡ тоҫҡап аҙапланғанын, мылтыҡ көбәгенең бер тегеләй, бер былай кәйелеүен сәйерһенеп күҙәтте. Ҡурҡыта ғынамы әллә, тип уйларға өлгөрмәне, теге кеше йығылды, мылтығы ергә бәрелгәс атылды. Аптырап торор ваҡыт түгел ине: Салауат алға уҡталды, ҡыуаҡлыҡҡа шатыр-шотор барып инеп, ҡулдарына таянып торорға маташҡан һалдаттың өҫтөнә менеп ултырҙы. Ҡулдарын арҡаһына шаҡарып, башын ҡомға тыҡты.

– Ҡара һин уны, дошманға атыу урынына – үҙенекеләргә! Ҡана гәпләшеп алайыҡ әле үҙе менән, ебәр ҡулдарын! – Арттан килеп еткән Ҡәнзәфәр Салауатты торғоҙҙо һәм һалдатты салҡан әйләндерҙе. – Бәй, бәй, яраланған бит был мәхлүк! – тип тегенең күкрәк тәңгәлендәге ҡыҙылға буялған кейеменә күрһәтте.

### ? Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Бүлексәнең тәүге өлөшөндә ни өсөн свейҙарҙың хәле тасуирлана?
**2.** Пугачёвсыларҙың тотҡонлоҡтан ваҡытлыса азат икәнлеге әҫәрҙә ҡайһы урындан аңлашыла башлай?
**3.** Салауаттың ихтилалда хәрби етәксе булғанлығы ҡайһы эпизодтарҙа асыҡ сағыла?

## 8

Иван-балыҡсы эйәртеп алып ҡайтҡан өс ир уның үҙе кеүек үк бик тәүәккәл кешеләргә оҡшағайны. Исемдәрен әйтергә ашыҡманылар, әммә үҙҙәренең ниндәй шарт ҡуйыуын һөйләшеү башында уҡ аңғарттылар: һеҙ беҙгә свейҙарҙы ҡыуып ебә-

реп, ҡаланы ҡотҡарырға ярҙамлашаһығыҙ, шунан беҙ һеҙҙе берәй аулаҡ ергә илтеп ҡуябыҙ. Хатта ниндәй урындың ышаныслыраҡ буласағы тураһында бәхәсләшеп алдылар. Әйтеүҙәренсә, свейҙар портты шартлатырға, яр буйында ниндәй карап йә ҙурыраҡ кәмә бар – бөтәһен дә юҡ итергә йыйына. Өҫтәүенә, ҡала халҡына бик ҙур түләү-контрибуция һалғандар, ул билдәләнгән ваҡытта һәм күләмдә түләнмәһә, барса өйҙәр һәм ҡоролмалар тупҡа тотоласаҡ.

– Хатта түләнһә лә, барыбер яндырасаҡтар, емерәсәктәр, – тип аныҡлай төштө Иван-балыҡсы. – Әле улар ҡаҙна складтарынан айырыла алмай. Таң атыу менән, беҙгә тотонорҙар.

– Беҙ уларҙан элек өлгөрөргә тейеш.

– Иң ҡыйыны – дары табыу.

– Быларҙың, – тип пугачёвсыларға эйәк ҡаҡты береһе, – тегендә свейға бил бөккән браттарынан үтескә алып торабыҙ инде, һөйләшкәнсә.

– Аҙбыҙ. Бына ҡартты ла ҡалдырһаҡ…

– Еткән. Күп кеше бер-береһенә ҡамасаулай.

– Туҡтағыҙ әле, беҙҙән дә һорағыҙ ҡайһы бер нәмәләрҙе! – тип урынынан күтәрелде Салауат, ярһый башлағанын һиҙҙереп, ауыр күтәрелде. – Мин, мәҫәлән, ҡартты… атайымды ярҙа ҡалдырмаясаҡмын.

– Ә-ә, атайыңмы ни?

– Мин ишеткәйнем Пугач янында аталы-уллы ике башҡорт булып, һуңынан бында һөрөлгәнен, һеҙ икән.

– Беҙ һеҙ һөйләгән ниндәйҙер Пугачҡа түгел, ә Рәсәйҙең законлы императоры Пётр Өсөнсөгә ант иткәнбеҙ. Әле лә уның хеҙмәтендәбеҙ! – тип өҙөп-өҙөп әйтте Салауат, үҙҙәре хаҡында теләһә ни һөйләргә рөхсәт итмәйәсәген белдереп. Балыҡсыларҙың йөҙөнә сыҡҡан йылмайыу шунда уҡ һүнде.

– Яҡшы, яҡшы!

– Беҙ ҡартты йәлләп кенә, йонсотоп йөрөтмәҫ өсөн. Барыбер һеҙҙе бөгөн оҙатып ҡуйыу икеле.

– Хаҡ һөйләйҙәр, Салауат! – тине Ҡәнзәфәр. Иван-писарь ҙа шул фекерҙә икәнен белдерҙе. Салауат баш ҡына сайҡаны һәм төнгө һөжүмгә нисек әҙерләнеү кәрәклеген һөйләүгә күсте. Уның уйлауынса, кемдәндер һорап йә тартып алынасаҡ дарыға ғына өмөт тоторға ярамай, хәҙер үк гөлтләп тоҡанырлыҡ сыраҡтар эшләп ҡуйырға кәрәк. Ҡайын туҙы булһын ине лә бит! Уны нимә менән алмаштырырға мөмкин? Уйлашығыҙ. Дары караптарҙың икеһендә лә бар, һәр пушка эргәһендә кар-

туздар өйөлөп торалыр. Ниәт барып сыҡһын тиһәк, карапҡа шым ғына күтәрелергә тура килер. Ҡул аҫтында ырғаҡлы арҡан булыуы шарт, арҡан баҫҡыс табылһа, бигерәк яҡшы. Тағы шуныһы: мылтыҡ берәү генә. Табылмаҫмы тағы? Карапҡа менәсәк кешеләргә пистолет, ҡылыс йә оҙон бысаҡ кәрәк...

Иван-балыҡсы үҙенең иптәштәренә ҡарап-ҡарап алғыланы: йәнәһе, йә, ни әйтерһегеҙ минең ҡунаҡ тураһында? Тегеләрҙең хуплап баш ҡаҡҡандарын күргәс, йөҙө яҡтырып китте.

– Һәр ҡайһыбыҙҙа ни ҙә булһа табылыр, – тип яуап бирҙе ул Салауатҡа. – Яков, һин бер саҡ көкөрт менән эш итә инең түгелме? – тип һораны ул күршеһенән.

– Әҙерәк ҡалған, шикелле.

– Сүсең дә барҙыр. Факелдар әҙерлә. Мөмкин тиклем күберәк. Бар, ҡабалан. Ваҡыт ҡыҫа. – Яковты сығарып ебәргәс, бүтәндәрҙең дә ни эшләргә тейешлеген билдәләне: һин ырғаҡлы арҡан тап, һин ишкәк күгәндәрен майлап ҡуй, беҙ ҙә бында эшһеҙ ултырмабыҙ... – Ҡайҙа, ҡасан осрашырға һүҙ ҡуйышҡас, землянкала йәнә бишәү ҡалдылар. Марфа ла, балалар ҙа күренмәне. Мейес артындағы бүлмәнән тышҡа тағы бер ишек бар ине, ахырыһы.

Иван-балыҡсы эште ҡыҙыу тотто. Эш ҡоралдары, иҫке бысаҡтар килтереп быларҙың алдына һалды, шунан соланға сығып эҙләнергә тотондо. Юлай ҡарт бысаҡтарҙы берәм-берәм ҡарап ултырҙы ла һаптарын йүнәтергә кереште, Почиталин менән Усаев ҡайраҡ менән эш итеүҙе өҫтөн күрҙе. Салауат һыныҡ ишкәктән һәм тимер киҫәгенән үҙенә суҡмар оҫталаны, бысаҡтарҙың иң һәлмәген дә биленә тағып ҡуйҙы.

Хужа йыя барған тимер-томор, ҡорал һыныҡтарының иҫәбе-һаны юҡ һымаҡ ине. Бына ул мейес аҫтынан күн тоҡсай һөйрәп сығарҙы, унан өр-яңы пистолет алды.

– Урал иҫтәлеге. Һөйөклө императрицабыҙ һәнәктән көрәк иткән ниндәйҙер графҡа бүләккә эшләргә ҡушҡайнылар ҙа, үҙемә булды, – тип Салауатҡа күҙ ҡыҫты.

– Демидовҡамы ни?

– Онотҡанмын инде. Әҙҙәремде ҡарға суҡыған, сәпсек сүпләгән! – Иван-балыҡсы көлөп кенә ҡуйҙы һәм пистолетын ҡарарға тотондо.

Йыйын, ҙурмы ул йә бәләкәйме, йәшеренме йә түгелме, өндәшмәй генә ултырыуҙы яратмай. Юлай Польша походында күргәндәрен һөйләп алды. Почиталин үҙенең нисек батша дьягы булып киткәнен, тәүге батша манифесын нисек яҙған-

дарын иҫкә төшөрөп көлдөрҙө. Ҡыҫҡаһы, һәр кемдең башҡалар менән уртаҡлашырға ишеткән-күргәндәре етерлек, бөтәһе лә донъяның әсеһен-сөсөһөн ғарҡ булғансы татыған кешеләр. Ошо йәштә уларға йәш-елкенсәк араһында ултырырға, үҙҙәре туплаған тормош тәжрибәһен йәш үрсемгә биреп ҡалдырырға кәрәк ине лә бит! Шул кескәй генә бәхеткә ирешер өсөн дә ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер сират күпере аша үтергә кәрәк. Күперҙең бер башына килеп баҫтылар инде, ә уның урталыҡта өҙөк булыуы ла мөмкин... Салауат атаһының тыуған яҡта тирмә түрендә ейән-бүләрҙәре уртаһында ултырғанын күҙ алдына килтерҙе һәм ҡарттың ниндәй мөһабәт һында була алыуын уйлап һоҡланды. Салауат үҙе ишек төбөндә бәләкәстәрҙән кемгәлер ҡайыштан ҡамсы үрә ине шикелле. Юлай үҙҙәренең мәңгелек каторганан нисек ысҡынып ҡайтыуҙарын һөйләй, бите имгәтелмәгән, юҡһа бала-саға шул тиклем һырығыр инеме ни уға?.. Шуны уйланы ла, кәйефе ныҡ ҡырылды. Күҙҙәрен йомоп бер аҙ ултырғас, Иван-балыҡсыға сәйер һорау менән мөрәжәғәт итте:

– Ыслушай, кенәз, һиндә яҙыу кәрәк-ярағы табылмаҫмы?

– Ҡәләм-ҡағыҙмы ни? Бының ише батша һарайында ундай нәмәләрҙе һанға һуҡмайҙар. Нимә сыймаҡларға иткәйнең?

– Илгә – улдарыма хат.

– Ҡайтҡас, телдән генә әйтерһең.

– Ҡайта алһаҡ!.. Ысҡынып булмаһа, һин берәй нисек оҙатыр инең. Иреккә сығыуҙан шул хәтле лә файҙаланып ҡалмаһаҡ!..

– Был да аҡыл! – тип хупланы Иван-балыҡсы. – Грифель таҡтаһы бар барлығын. Балаларҙы грамотаға өйрәтергә иҫәп. Тик бәләкәйҙәр әле... Юҡ, ярамай. Грифелгә яҙған тиҙ юйыла.

Уларҙың һөйләшеүен эштәрен онотоп тыңлаусы өсәү һүҙгә ҡушыла һалды.

– Берәй нисек һаҡларға мөмкиндер ул.

– Нимәгәлер төрәһең дә. Ана тире ярпыһына.

– Тире ярпыһының үҙенә яҙырға мөмкин! – тип ҡысҡырып ебәрҙе Иван-писарь. – Нимә менән, тиһәгеҙ, әйтәм. Ҡурғаш менән, ҡурғаш пуля менән.

Хужа өндәшмәй генә урынынан тороп, соландан тире киҫәге индереп Салауаттың алдына һалды. Ҡәнзәфәр пуля сығарып бирҙе. Салауат тирене тигеҙләп яҙырға әҙерләнгән арала, Иван-балыҡсы тотҡондарҙы шатлыҡҡа ҡойондорған бер ваҡиғаны һөйләй башланы.

– Дүрт-биш йыл элек шикелле, ошо тирәлә бер төркөм һыбайлы ҡыҙырып йөрөнө. Әле тегендә, әле бында күренәләр ҙә юғалалар, күренәләр ҙә юғалалар. Ҡайҙандыр килеп сыҡҡан разбойниктар, тинеләр. Уларҙы тоторға байтаҡ һалдат ебәрелде. Ике ялан пушкаһы менән. Унышына үҙем шаһит. Ҡырып һалдылармы, ҡыуып ҡына ебәрҙеләрме – әйтә алмайым, әммә бер-ике атты етәктә алып ҡайттылар. Хәҙер иҫләүемсә, башҡорттар булған булырға тейеш…

– Минең ейәндәр! – тип көлөп ебәрҙе Юлай ҡарт.

– Ҡуйсы, ағай, улай тимә. Ейәндәрең һиңә тере килеш кәрәктер бит! – тип ҡаршы төштө Ҡәнзәфәр.

– Башҡорттарҙан булыр ул! – тип маҡтаны Иван-писарь, тағы ниҙер әйтергә теләге бар ине, тик тыйылды, бары Салауатты: – Һин унда минең дә донъяла барлыҡты белдерергә онотма! – тип киҫәтте.

– Һәммәбеҙҙән дә сәләм күндер, – тип өҫтәне Ҡәнзәфәр.

– Ну, братва! – тип бот сапты Иван-балыҡсы. – Әйтерһең, ул һыбайлылар әйләнеп килә лә, мин улар менән еңел генә күрешә алам. Нисек оҙатайым мин ул хатты ошо йәһәннәм тишегенән? Карапта йөрөһә икән!..

Пугачёвсылар уның шулай әйтеүенә хатта үпкәләгәндәй иттеләр.

– Юҡ инде, брат, баш тартма!

– Һин дә берәй юлын тапмағас!

– Яҡташһың, етмәһә!

Салауат тире киҫәген тегеләй ҙә, былай ҙа әйләндереп ултырҙы ла өҫтәлгә йәтешләп һалды, уға пуля осон тоҫҡаған килеш хәрәкәтһеҙ ҡалды. Ҡаушаны. Маңлайына тир бәреп сыҡты. Күптән яҙыу менән шөғөлләнмәгән бармаҡтары тыңламаҫ һымаҡ тойолдо ла китте, уға хатты нисек башлау һәм нимәләр хәбәр итеү хаҡында ла уйлап алыр кәрәк ине. Артыҡ сурытып булмай, сөнки урын тар. Ҡалғандар тын алмай тиерлек уны күҙәтте, ни эшләрен көттө. «Башҡорттар, ошо мәктүпте ауылдан ауылға таратығыҙ, – тигән һүҙҙәрҙе теҙеп ҡуйҙы Салауат башта, ҡулы артабан ышаныслыраҡ йөрөп китте. – Һеҙҙең батырҙарығыҙ Юлай вә Салауат Балтик порты тип аталған урында тотҡонлоҡта яфа сигә. Улар илә баш мишәр палкаунигы Ҡәнзәфәр Усаев вә казактар Почиталин вә Ульянов вә Горшков вә Караваев бар. Беҙ ныҡ торабыҙ. Һеҙ ҙә Хоҙай ярҙамы илә ныҡ тороғоҙ. Имза ҡуйҙым, бригадир Салауат Юлай».

Башын күтәрҙе, еңе менән маңлайынан тирен һөрттө, шунан тирене төрөп землянка хужаһына тапшырҙы ла түҙемһеҙләнеп йәһәт кенә тороп баҫты.

– Йәгеҙ, әҙерһегеҙме инде?

– Бәй, беҙгә хатыңды уҡымайһыңмы ни? – тип ғәжәпләнде Ҡәнзәфәр.

– Нимә уны уҡып торорға? Кемдәр иҫән икәнлеген хәбәр иттем. Халҡыбыҙға фарман яҙҙым.

– Ни хаҡында ул фарман? – Юлай ҡарт һағайып китте.

– Ныҡ торорға бойорҙом.

– Ә-ә!..

Фарманды төрлө яҡлап тикшерергә керештеләр, ләкин Салауат уларҙың нимә һөйләгәндәрен ишетмәне. Ҡолағына алыҫтан ат кешнәүе килеп салынды ла, ул үҙенә табан ялдарын ялбырлатып килеүсе арғымағын ап-асыҡ күрҙе. Эйәр ҡашына бер яҡтан суҡмар, икенсе яҡтан уҡ-һаҙағы элеүле, әйтерһең, Салауат аҙға ғына йәйәүләгән, шунда ҡапыл айырылышҡандар. Артынан бер кем күренмәй, тимәк, ғәскәр бойороҡ көтөп тегендәрәк тора. Рогервикты ураҡҡан ҡаҡ тауҙар ышығында, тип уйлап алды батыр. Арғымаҡ дөбөр-шатыр килеп етте, үрә һикерҙе һәм юҡҡа сыҡты... Юҡ, юҡ, бына Салауатҡа күкрәк түрендә кешнәп ҡуйҙы, тыпырсынғаны ишетелде.

– Әҙерһегеҙме? – тип ҡабатланы Салауат. – Мин әҙер!

...Диңгеҙгә ике кәмәгә ултырып сыҡтылар. Эңер төшкән мәл ине. Ярға һыйынып, алды-артты ҡарай-ҡарай, портҡа барып еткәндә, күҙ бәйләнергә өлгөрҙө. Урал тауҙарын нурға ҡойондороусы ай бында ҡалҡмағайны әле. Туҡтап, ни ҙә булһа күрергә йә ишетергә тырышып бер аҙ торҙолар. Яр ҙа, диңгеҙ өҫтө лә буп-буш. Алдағы кәмә ярға барып морон төрттө лә, унан кемдер ҡороға һикереп төштө.

– Яков разведкаға китте, – тип шыбырланы Иван-балыҡсы. Тәбиғи, ул үҙе ишкәксе урынында, бая землянкаға килеүселәрҙең береһе руль ишкәген тотҡан, диңгеҙҙә тәүге тапҡыр йөҙөүсе Юлай менән Салауат буш эскәмйәгә йәнәш ултырып алған. – Беҙ ҙә яҡынырaҡ барайыҡ.

Свей фрегаттарында фонарҙар емелдәй. Ҡалала бер нисә бейек йорт тартынмай-нитмәй тәҙрәләренән яҡтылыҡ бөркә. Талғын ел шул яҡтан музыка тауышын алып килә. Ошо хәлгә хайран ҡалып ултырҙылар ҙа ҡапыл геүләп алдылар.

– Типтерәләр, ә!

– Дошман хөрмәтенә мәжлес ҡорғандар, илде һаҡлаусылар.

– Илде һатыусылар, тип әйт.

– Улай уҡ ҡаты бәрелмәгеҙ, гаспадалар көн буйы эшләп арыған.

Яков алып ҡайтҡан мәғлүмәттәр быларҙың тоҫмалын ғына раҫланы: гарнизон офицерҙары свейҙар менән байрам итә. Арестанттарҙы илтеп бикләгәс, әсир ителгән һалдаттарҙы казармаға ҡайтарғандар, әммә һаҡ аҫтында тоталар. Десанттың бер өлөшө урамдарҙа патруллек итә. Ярҙа бер ниндәй йөк, мискә-фәлән күренмәй.

– Бик насар! – тигән һығымта яһаны Салауат. – Свейҙарҙың ярҙа ҡалыуы насар. Шау-шыу сығып, был яҡтан да килеп етһәләр... Ике ут уртаһы!..

– Караптар үҙҙәренекеләрҙе ташлап китмәйәсәк. Беҙҙең һөжүм бушҡа булмағайы, – тине Ҡәнзәфәр.

– Ни эшләп ҡарарға һуң?

– Яндырырға, шартлатырға!

– Дарыһыҙ ни!..

– Караптарҙағы дары ла шартлай. Киттек.

– Аҙ ғына сабыр итегеҙ. Тегендә буласаҡ эште бүлешмәгәнбеҙ, йәғни кем арҡанды ырғағы менән бортҡа эләктерә, кемдәр өҫкә менә, кем филтә тоҡандыра. Тегендә баҙар ҡора башлаһаҡ!..

– Карапҡа мин менәм, ана балыҡсы Иван менән бергә, – тине Салауат. Барыһы ла был тәҡдимде хупланы.

Вазифаларҙы, ҡоралдарҙы бүлештеләр ҙә тағы йөҙөп киттеләр. Күкрәгендә йүгәнле-эйәрле арғымаҡ түҙемһеҙләнгән Салауатҡа кәмәләр бер урында тора һымаҡ тойолдо, ә ҡаршыларында ҡапыл фрегат борты ҡара ҡая ташылай ҡалҡып сыҡҡас, тертләп китте. Ай-һай, бейек ине хәрби карап! Уның ышығына барып туҡтанылар, кәмәләр яңылыш бәрелеп, тауыш сығармаҫҡа тырышып, өҫтә ниндәй тауыштар ишетелерен аңдып тын ҡалдылар. Кәмәләргә лә, карапҡа ла тулҡындар шап та шоп һуғыла, ә палубала итек туҡылдағаны ишетелеп ҡалғандай – шулай булһа, һаҡсылар йөрөп ята. Ҡайҙалыр күмәк кеше көңгөр-ҡаңғыр килә һәм бына уларҙың әңгәмәһе бергәләп йырлауға әүерелде. Бында еңеү туйлайҙар!

Арҡан осондағы ырғаҡ көйһөҙ булып сыҡты: тәүге ырғытҡанда, барып етмәне, икенсеһендә эләгер урын тапмай кире ҡайтты, өсөнсө юлы ғына ҡаҙалырға йомшаҡ ағасмы, таҡта егенме тапты. Шым ғына эшләргә тырышһалар ҙа, тимер ағасҡа бәрелеп тә туҡылдамай ҡалырмы? Ни булғанын

ҡарарға йүгереп килерҙәр ҙә, шау-шыу ҡубыр, атыш башланыр тип көтөүҙән йөрәк күкрәк ситлеген ватыр сиккә еткән мәл. Ул арала Юлай ҡарт саҡма сағып, көйрәй башлаған филтәне тимер көпшәһенә тыҡты һәм улына бирҙе. Билендәге бауға бысаҡ, суҡмар һәм ике сыраҡ ҡыҫтырған Салауат ике аршын самаһы һайын махсус төйөнләнгән арҡан буйлап юғарыға үрмәләне. Пистолетлы Иван-балыҡсы, тағы ла бер филтә тоҡандырып, тағы ике сыраҡ алып, уның артынан күтәрелергә тейеш. Мылтығын ҡороп ҡуйған Ҡәнзәфәр һәм башҡалар аҫтан ярҙамлашасаҡ. Ярҙам итә алһалар, әлбиттә.

Имен менеп етте, борт ситенә түше менән ятып хәл йыйҙы ла аяҡтарын эскә ташлап, палубаға шыуып төштө. Аяҡтары ҡатыға тейер-теймәҫтән яҡында торпоша ябылған ниндәйҙер өйөмдө абайлап, шуның артына боҫто. Мачтаға эленгән фонарь бынан алыҫ ҡына, әммә уның яҡтыһында күҙҙәрен ыуа-ыуа йоҡо менән тырышып көрәшеүсе һаҡсыны һәм һөйәүле мылтығын шәйләргә мөмкин. Уны кисекмәҫтән «йоҡлатырға» кәрәк, шул уҡ ваҡытта сыраҡтарҙы ла оноторға ярамай, сөнки филтәнең һүнеүе бар. Бысағы менән суҡмарын эргәһенә һалып тубыҡланды ла филтәле көпшәне ҡулына алды, уны гөлтләтергә өрөп аҙапланғанда һаҡсының был яҡҡа аңшайғанын тотош тәне менән тойҙо. Сыраҡ гөлтләп тоҡаныуға һаҡсы кемгәлер ниҙер ҡысҡырҙы, мылтығын эләктереп, былай табан килә башланы. Салауат сырағы менән филтәне торпоша өҫтөнә ташланы ла, һәрмәп табып, бысағын күтәрҙе, һикереп торған ыңғайға яурын быуыны ауыртҡансы киҙәнеп бәрергә өлгөрҙө. Свей артҡа саңҡайып туҡтай бирҙе лә, алға бөгөлөп, йөҙ түбән ҡоланы. Салауат бәргән бысаҡ, ғәҙәттә, үңәскә эләгә, һабына тиклем кереп ултыра. Хәҙер хужаһыҙ ҡалған мылтыҡты эләктерергә кәрәк.

Һаҡсы ҡолаған ергә шыуышып барҙы, шыуышып кире ҡайтты. Бында арҡанды һаҡларға, Иван-балыҡсыны ҡаршыларға тейеш. Торпошаға ут ҡапҡан да инде – әйҙә яна бирһен, барыбер үртәргә. Икенсе сыраҡты тоҡандырып, осҡон сәсрәтеп янған тәүгеһен торпоша аҫтына тыҡты, ә унда мискәләр теҙеп ҡуйылған, моғайын, ярҙан ташылған мискәләр. Дары һалынғанмы уларға, сусҡа майымы – яна ғына!

– Мә, быларын да шунда тыҡ! – Палубаға менеп еткән Иван-балыҡсы үҙенең сыраҡтарын да Салауатҡа ырғытты. – Төрлө яҡҡа тыҡ.

– Ә пушкалар?

– Өлгөрмәбеҙ. Ана йүгерешәләр.

Ҡалғанын Салауат урыҡ-һурыҡ ҡына хәтерләй. Даң-доң саң ҡаҡтылар. Ҡысҡырыш. Тап-топ йүгерешеү. Борт янында алыш. Свейҙар күп ине, эт өйөрөләй килеп ураттылар. Иван-балыҡсы пистолеттан атып кемделер йыҡты, үҙенең яурынына шпага осо эләкте. Салауаттың башына ни менәндер тондорҙолар, ул да мылтыҡ төйҙәһе менән бер-ике кешене тәкмәстерҙе. Уларҙы борттан айырып, торпошаға ҡыҫырыҡланылар. Салауат мылтығын иптәшенә тотторҙо ла, бер мискәне эләктереп баш осона күтәрҙе.

– Шартлатам!

Япма асылыуға гөлтләп күтәрелгән ялҡын унын ҡысҡырыуына елле тәржемә булды шикелле – дәррәү сигенделәр, боролоп ҡасырға тотондолар. Салауат мискәне уларҙың өҫтөнә ырғытты, уныһы ҡасыусыларҙы бәреп йыға-йыға, палуба буйлап тәгәрләп китте. Ул икәүгә лә, кәмәгә төшә һалып, ярға табан ысҡынырға бик тә ваҡыт ине.

## Һорауҙар һәм эштәр

Тотҡондар ирктә кемдәр менән дуҫлаша, шул образдарҙы айырып атағыҙ.

## Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ

Салауаттың тыуған яғына хат яҙған саҡтағы кисерештәренә иғтибар итегеҙ, улар һеҙҙә ниндәй тәьҫир ҡалдырҙы?

## 10

Барыһы ла былар уйлағанса килеп сыҡҡан кеүек ине лә бит, быna свейҙар арҡанды сабып өҙҙө, Иван-балыҡсы артынан килеүсе Салауат, ап-арыу бейектән ҡолап, кәмә ситенә уң бото менән бәрелде, хатта ыңғырашмай түҙә алманы. Өҫтә шатланышып көлөштөләр. Әйҙә һөйөнә бирһендәр! Иң мөһиме – караптан барыһын имен-аман алып төштөләр һәм ығы-зығыһыҙ тиҙ генә ҡуҙғалышып алдылар. Фрегатта янғын көсәйә барҙы, палуба халыҡ менән тулды, утты һүндерәләр, тырышлыҡ бушҡа китә, тигән уй Салауатты һыҙланыуын онотorға мәжбүр итте, һәм ул эргәһендә ятҡан мылтыҡты ҡулын тоҫҡап та тормай тиерлек атып ебәрҙе – кемделер үлтереүгә ҡарарлап, тегеләрҙе ҡаушатыу, ышыҡ эҙләп йүгертеү ҡиммәтерәк ине

ошо минутта. Күрше кәмәнән дә атыу яңғыраны – Ҡәнзәфәрҙең эше ине был. Кинәт ҡырҡыу команда ишетелде, һәм свейҙарға бер юлы тиҫтәләгән кеше яуап бирҙе. Бейек күтәрелгән ай ҙа, янғын да арыу яҡтырта ине кәмәне.

– Хәҙер беҙҙе пушканан... картечь менән! – тип ҡысҡырҙы балыҡсы, әллә мылтыҡҡа тотонған өсөн битәрләп, әллә иҫкәртеп. Яраланыуына ҡарамаҫтан, ишкәккә ул йәнә үҙе ултырғайны. Фортта, ысынлап та, көслө гөрһөлдәү яңғыраны, әммә пушка тауышы түгел ине был, дары мискәһе шартланы. Ялҡын ҡатыш ҡара төтөн ҡойоно менән бергә палубалағы бөтә нәмәне һауаға алып һирпте, хатта фрегаттың бер өлөшөн тетеп ырғытты һымаҡ күренде. Диңгеҙгә, ялпылдап, таҡта һыныҡтары яуҙы, ауырыраҡ нәмәләр гөпөлдәп, һыу сәсрәтеп барып төштө. Кәмәләгеләр, йоҙроҡ төйә-төйә, «ура!» ҡысҡырҙы.

– Быныһы башы ғына әле! – тип маҡтанды Иван-балыҡсы һәм икенсе шартлауҙың көслөрәк буласағы хаҡында иҫкәртте. Быны бүтәндәрҙең дә белгәнен һәм көткәнен белә ул, тик әйтмәй түҙә алманы. Былары ла, оло еңеү хәбәре ишеткәндәй, тағы ла йоҙроҡтарын болғап ҡысҡырышты.

Ошонан һуң уларҙың яу шатлығы яйлап һүрелә башланы ла инде. Тәүге шартлау башҡа мискәләрҙе ситкә быраҡтырып уттан ҡотҡарҙы ла еле менән янғындың ҡомарын кәметте генә шикелле. Палубала ҡуҙҙар баҙлай ине әле, улар өҫтөндә ялпылдап ялҡын да бейеп ала, шул яҡтыла палубаның ҡабат кешеләр менән тулғанын күрергә мөмкин ине. Икенсе фрегат та үҙенең барлығын белдерҙе, тупсылар төнгө диңгеҙҙән кемделер эҙләп торманы, йәҙрәләр менән яр буйын дөмбәҫләргә кереште. Алда был Ватан һаҡсыларын фрегаттағы шартлау уятыуынан кемдәрҙеңдер ҡасып йөрөүе, быларҙың уларҙы тоторға тейешлеге аңлашылып тора ине.

– Үҙебеҙгә юлды үҙебеҙ бикләнек түгелме? – тине Салауат. – Ваҡытты ысҡындырҙыҡ, һағыҙаҡ ояһын ҡуҙғаттыҡ...

Ул уй-ниәтен Иван-балыҡсы менән уртаҡлашты, айырылырға ваҡыт, беҙҙең менән бергә эләктерһәләр, һеҙҙе лә аямаҫтар, диңгеҙгә үҙ йомошоғоҙ менән сыҡҡанһығыҙ тип тә ышанмаҫтар. Балыҡсы оҙаҡ ҡына өндәшмәй ултырҙы, шунан йыраҡ түгел эстон ауылдары барлығын әйтеп, һунарығыҙ уңышлы сыҡһа, эстондарға китегеҙ, кәмәсе лә табылыр, тине. Юлай ҡарт та йәнләнеп китте...

Салауат кәмәләрҙең, текә яр ышығын уҙып, һөҙәк ҡырсынлыҡҡа яҡынлашҡанын көтөп алды ла Усаевҡа өндәште:

– Ҡәнзәфәр ағай, ярға һуғылығыҙ. Беҙ төшөп ҡалабыҙ.

– Нишләп?

– Һуңынан аңлатырмын.

Балыҡсылар менән өндәшмәй генә ҡул ҡыҫышып хушлаштылар. Һуңғы мәлдә Салауат Иван-балыҡсыға: «Минең хатты ебәрергә онотма!» – тип шыбырланы. Кәмәнән тәүҙә үҙе төштө, шунан, ауырыу аяғына баҫмаҫҡа тырышып, атаһына төшөргә ярҙамлашты. Һалҡын тәндәрен ялҡын һымаҡ өтөп алды, хатта Салауаттың аяғы һыҙлауҙан туҡтағандай булды. Был хәл уға байтаҡ араны һау кеше аҙымы менән атлап уҙыуға мөмкинлек бирҙе. Ай яҡтыһында ҡарайып күренгән ҡырлаҫҡа йүнәлде ул, һәм бүтәндәр ҙә шунда тартылды. Салауат ултырырға ҡушты һәм артабан, үҙе уйлағанса, ни эшләү кәрәклеген аңғартты. Бик ныҡ уйға ҡалдылар. Ҡәнзәфәр, бармаҡтарын бөгә-бөгә, Салауаттың нимәләрҙе уйлап еткермәгәнен һанарға кереште:

– Беҙҙең теләк ҡабул булып, ике генә һыбайлы килеп сыҡты, уларҙы атып йыҡтыҡ, ти. Ҙур отрядҡа һөжүм итә алмайбыҙ.

Менгәшеп йыраҡ китә алырбыҙмы? Етмәһә, мин әйткән ике һыбайлыны көтөп ятып таң аттырырға мөмкин. Тегеләрҙән айырылмаҫҡа кәрәк ине.

– Юҡ, ағай, йәшәһен улар. Балалары бар. Беҙҙең менән бергә тотһалар, үҙең беләһең!.. И-и-х, Иван яраланды.

– Ул аттарҙы шым ғына урларға мөмкин, – тине Юлай ҡарт көтмәгәндә. – Ҡайҙан тиһәгеҙ – ана теге батырҙарҙың эйәрҙән төшкәнен аңдып тораһың да...

– Аҡыл был! – тине Иван Почиталин.

– Киттек! – Ҡәнзәфәр һикереп тә торҙо. – Салауат, ошонда ҡалаһың, мылтығыңды Иванға бир. Юлай ағай ат «теле»н белә – барыр.

Салауаттың ошо мәлдә ниҙәр кисергәнен аңлатып биреү мөмкинме икән? Беҙгә ундай мәлдең ҡанатланыу тип аталғаны ла шатлыҡтың бөтә төҫтәре һәм балҡыштарынан ныҡ юғары торғаны ғына билдәле. Ә ҡанатланыу, айырыуса батыр йә шағирҙың ҡанатланыуы йә пәйғәмбәрлеккә әүерелә, йә фажиғә менән ослана. Ерҙәге ваҡлыҡтар юғала, йондоҙҙар яҡыная. Күктә мең-мең көмөш шөңгөр сыңлай. Шулар барыһы ла өҫкәрәк күтәрелергә, Тәңрегә яҡыныраҡ булырға саҡыра. Барыһына ла шағир күңеле йыр менән яуап бирә.

Тик йырҙы һәр кем ишетә, һәр кем үҙенсә баһалай.

Салауат аяғы ауыртыуына иғтибар итмәҫкә тырышты, әммә батҡаҡлыҡтан сыҡҡансы тамам хәлдән тайҙы. Ҡатыға етер-етмәҫтән йөҙ түбән йығылды ла, ары бара алмаясағын әйтеп, юлдаштарына эстон ауылына китергә ҡушты. Мин тегеләрҙе тоторға тырышырмын, тип ышандырҙы. Иван менән Ҡәнзәфәр уны ике яҡтан ҡултыҡлап алдылар, үҙ яйына атлата-атлата, алға әйҙәнеләр. Хәҙер уларҙы һәр яҡлап ҡамалған, арыуҙың сигенә еткән яралы бүреләр яҙмышы көтә ине: былай боролһаң – һалдаттар, тегеләй барһаң – тәрән соҡор йә асыҡ урын. Мылтыҡтар артыҡ йөккә әүерелде, уларҙы күмеп ҡалдырҙылар. Боҫоп яттылар, кейем еүеш булыуҙан һәм эске йылы кәмегәнлектән өшөй башлағас, шыуышып ҡаранылар. Ваҡыт уҙа торҙо, каторганан ҡотолоу өмөтө һүнә барҙы, нисек тә тере ҡалыу теләге ҡалған уй-тойғоно баҫа башланы. Шуның өсөн дә, үҙҙәренә тиҫтә ярым йыл буйы төйәк булған баструк алдына ҡапыл барып сыҡҡас, бер аҙ аптырап торҙолар ҙа еңел һулап ҡуйҙылар. Шундағы таныш таштарға ултырыштылар – хәл йыйырға, фекер төйнәгәндәй итергә.

## Артабанғы хроника

1790 йылдың 7 марты. «Ярмарс» һәм «Улверст» фрегаттары иртүк Балтик портын ташлап китте. Уларҙы ярҙан ҡул болғап оҙатҡан полковник де Роберти ашығып өйөнә ҡайтты, имен-аман ҡотолоуына тағы бер шөкөрана ҡылып, Эстляндия губерна идаралығына рапорт яҙырға ултырҙы. Үҙе етәкселек иткән гарнизондың батырҙарса һуғышҡанын хәбәр итте лә бер фрегаттың абордаж төркөмө тарафынан штурмланыуын, унда ҡаты шартлау булып, янғын сығыуын миҫал итеп килтерҙе. Ҡәлғә артиллерияһының юҡ ителгәнен, складтарҙың таланғанын, свейҙарға алтын менән 4 мең һум контрибуция түләргә тура килгәнен әлегә әйтмәй торорға булды.

1797 йыл. Юлай үлә. Ясинды Салауат менән Ҡәнзәфәр уҡый.

1800 йыл. Салауат үлә. Ясинды Ҡәнзәфәр уҡый.

1804 йыл. Ҡәнзәфәр үлә.

1805 йыл. Французларға ҡаршы ебәрелгән башҡорт ғәскәренән бер сотник илгә Салауаттың фарманы тип яҙыулы тире ярпыһы алып ҡайта. Хәрефтәр юйылғанлыҡтан, унда «...ныҡ тороғоҙ. Имза ҡуйҙым...» тигән дүрт һүҙҙе көскә-көскә таный-

ҙар. Ҡайҙан алдың был тирене, тигән һорауға, сотник, бер урыҫ һалдаты бирҙе, уға атаһы биргән булған, тип әйткән.

1815 йыл тирәһе. Әҫе йәйге айҙарҙың береһендә Ҡаратау буйындағы ауылдарҙа сәйер урыҫ барины йөрөгән. Әҫем завуты яғынан матур кырандасҡа ултырып, ике ҡоралны казак эйәртеп килгән ул. Һәр ауылда ҡарттарҙы йыйып, ниндәйҙер һунарсы, уның бер күҙле улы тураһында һорашҡан. Исемдәрен әйтә алмаған. Тауға төртөп күрһәтә-күрһәтә, шунда айыу аулағандарын, бер күҙле малайҙың өңгә осоп төшкәнен һөйләп ҡараған, әммә ҡарттар «Моянықы ня знай»ҙан башҡаны белмәгән. Бариндың башҡортҡа нык оҡшаш булыуы өркөткән уларҙы, һуңынан, үҙҙәре генә ҡалғас, Аҡмал менән Етембайҙы иҫкә төшөрөп: «Шуларҙы юллап йөрөмәйҙер инде?» – тип аптырашҡандар.

Мәрхүм йортауайҙың элекке атсабары Минбеләм ҡушаматлы ҡарт ҡына бүтәнсә яуап биргән:

– Үлде икеһе лә. Һунар булған көндә үк. Ҡороно Салауат разбойниктың нәҫеле.

Сәйер барин шул ғына һүҙгә ҡыҙған да киткән, күсеренең сыбыртҡыһын тартып алып, элекке атсабарҙы туҡмаған да ташлаған. Шунан ауылдан елдереп сығып киткән. Салауаттың суҡындырғанда Роман тип аталған улы булды шикелле, тип юрағандар һуңынан.

Башҡорт ауылдарында һаман Хыҙыр Ильяс йөрөп ятҡан.

## Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Тотҡондарҙың шведтар карабына һөжүм итеү ваҡиғаһын иҫкә төшөрөгөҙ. Бында кемдәр еңеүсе булып сыға? Сәбәбе ниҙә?
**2.** Ни өсөн Салауат пугачёвсыларҙың балыҡсыларҙан тороп ҡалырға тейешлеген талап итә?

## Интернеттан мәғлүмәт табабыҙ

**1.** Юлайҙың тотҡонда үлгән ваҡыты билдәле түгел. Әҫәрҙә 1797 йыл тип әйтелә. Был дата ҡайҙан алынған тип уйлайһығыҙ?
**2.** Әҫәрҙең «Эйәрләнгән ат» тип аталған исеме ниндәй мәғәнәгә эйә?



# Рәшит СОЛТАНГӘРӘЕВ

**(1935–2000)**

Рәшит Ғимран улы Солтангәрәев Башҡортостандың Көйөргәҙе районы Таймаҫ ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған. Үҙ ауылында урта мәктәпте тамамлағандан һуң, 1953 йылда Башҡорт педагогия институтына (хәҙерге Башҡорт дәүләт университеты) уҡырға инә.

Юғары уҡыу йортонда Р. Солтангәрәев тәүге ижади һабаҡтар ала: әҙәбиәт түңәрәктәрендә әүҙем ҡатнаша, публицистик мәҡәләләр, хикәйәләр яҙа. Был тырышлыҡтар бушҡа китмәй: 1958 йылда, университетты тамамлағандан һуң, ул «Совет Башҡортостаны» гәзитендә (хәҙерге «Башҡортостан») әҙәби хеҙмәткәр итеп эшкә ҡалдырыла. Ошонан һуң Р. Солтангәрәев журналистика һәм әҙәби ижад юлында төрлө үҫеш баҫҡыстары үтә.

Рәшит Солтангәрәев тәүҙәрәк хикәйә жанрында әүҙем эшләй. Яҙыусының уҡыусылар яратып ҡабул иткән «Аҡ тирәктәр», «Аҡ умырзая», «Тау» тигән китаптары донъя күрҙе.

Рәшит Солтангәрәев повесть жанры өлкәһендә лә эшләгән яҙыусы. Уның «Йылы ямғыр», «Тау» повестарында социаль-психологик һүрәтләү өҫтөнлөк алһа, «Аҡ умырзая», «Таш болан» әҫәрҙәрендә әхлаҡи-этик тасуирлау алға сыға.

Ғүмеренең һуңғы йылдарында ла Р. Солтангәрәев хикәйә, повесть, роман өлкәһендә эшләүен дауам итте. Яҙыусы был жанрҙарҙың яңы сифатын, яңы мөмкинселектәрен асты.

## ОСТО БӨРКӨТ

*(Повестан өҙөк)*

### I

Ҡайынлыҡ буйында аттарын теҙгендәренән тотоп, тигеҙ рәткә баҫҡан һалдаттар, бригада командиры күренгәс тә, һындарын ҡатырып, ҡәтғи төҫ алды – өс тиҫтәнән ашыу һуғышсы ҡапыл бер кешегә әйләнде лә ҡуйҙы. Ҡояшҡа янған башҡорт егеттәре ошо тороштарында, ысынлап та, бер-береһенә оҡшаштар ине. Оҡшашлыҡ кейемдәрендә – уңып таушалған гимнастёрка, галифе, иҫкергән итектәр; ҡоралда – билдәге ҡылыс, иңбаштағы карабиндарҙа, хатта яҫмаҡ бит менән ҡара сәстәрендә генә лә түгел, ә күҙ ҡараштарында ине, буғай. Был ҡараштарҙа, ихласлыҡтан тыш, яугирҙарҙың үҙ командирҙарына булған һоҡланыу һәм ирҙәрсә мөхәббәт һырҡырай.

Эйе, бригада һуғышсылары командирҙарын ярата. Уны иң элек башҡорт булғаны өсөн яраталар, башҡортлоғо өсөн дә, аҡтарҙан да, ҡыҙылдарҙан да ҡурҡып тормаҫ ҡыйыу ир булғаны өсөн дә, аҡылы, белеме, тәүәккәллеге, хатта ҙур кәүҙәле булғаны, русса яҡшы белгәне өсөн дә яраталар. Тап бына ошондай командир кәрәк тә был егеттәргә, ошондай башлыҡҡа һыуһаған улар.

Һалдаттарҙың күпселеге ошоғаса йә батша армияһында, йә ҡыҙылдар, йә аҡтарҙа хеҙмәт итеп, ғәскәри тормошто ла, ғәскәр башлығының ни икәнен дә яҡшы татыған кешеләр. Ҡайҙа ғына хеҙмәт итмәһендәр, командирҙары рустан булды. Рус инде, ундай урындарҙа башҡорт ҡайҙан йөрөй алһын?! Башлыҡ өсөн иң элек рус телен яҡшы белергә, русса фарман бирә, үҙенән ҙурыраҡ башлыҡтар менән һин дә мин һөйләшә алырға тейеш. Ундай уҡымышлы кешене ҡайҙан табаһың башҡортта?! Барлығын да барҙыр, бәлки, тик икенсе яҡтарҙа йөрөп яталыр…

Шулай уйлай ине һалдаттар һәм командир кешенең рус йә русҡа оҡшаған башҡа милләт кешеләренән булыуын тәбиғи, хатта фарыз эш күрә, һәр хәлдә, ошоға күнеккәйнеләр. Күнекмәй ҙә нишләйһең, донъяһы үҙе шулай. Ә бына Мортазин ағалары – башҡорт, егеттәрҙең үҙҙәре һымаҡ ысын башҡорт: ауылда тыуған, мәҙрәсәлә уҡыған, герман һуғышында ҡатнашҡан… Башҡорт булһа ла, рус командирҙарынан бер ҙә

ҡалышмай. Ҡалыша тиһеңме, арттырып ебәрә – белем яғынан да, ҡыйыулыҡ яғынан да! Шуға ла рустар үҙҙәре ҡалтырап тора уның алдында.

Командир булһа ла башҡортса һөйләшә, хатта ваҡыты менән фарманды ла башҡортса биреп ебәрә, һуҙып йырлап та ебәрә. Сыҡһа ла сыға бит башҡорттан кеше!

Муса ағалары уҡымышлы кеше, белеме бик ҙур. Батша армияһында хеҙмәт иткәндә үк унтер-офицер дәрәжәһенә еткән, артиллерист булған. Герман һуғышын башынан аҙағынаса үткән. Күргән инде! Бирһә лә бирә бит Хоҙай кешегә! Кәүҙәгә нисек ул, әҙәм аша ҡарап тора! Ә яурындары Ҡырҡтының ҡаяһынан юнып яһалғанмы ни!

Уҫаллығын уҫал инде, күҙҙәрен аҡайтып бер ҡараһа, ҡырҡ быуыныңа барып төшә, булһын уҫал, йыуаш кешегә буйһонғо килеп торамы! Командир уҫал булырға, бөтәһе лә унан ҡурҡып торорға тейеш. Йәшәһен үҙҙәренең командирҙары! Муса Мортазин барҙа улар хур булмаясаҡ, берәүҙән дә еңелмәйәсәк!

...Күбеһе русса түгел, төркисә лә уҡый, яҙа белмәгән, ғәскәргә тик көсө, оһоллоғо, атта оҫта йөрөй, ҡылыс менән өҙә саба, мылтыҡтан тура ата алғаны һәм, бөтәһенән элек, еребеҙ өсөн, башҡорт халҡы өсөн һуғышабыҙ, тип килгән егеттәр шулай уйлай һәм командирҙары өсөн утҡа ла, һыуға ла инергә әҙерҙәр.

Бригада командиры былай табан килә. Ана, ҡайһылай баҫа ул! Баҫҡан ере һығылып-һығылып ҡала. Бәлки, һығылмайҙыр ҙа, тик һалдаттарға ғына шулай тойола.

Комбриг сафҡа еткәс, отряд командиры Ибраһим Мортазин алғараҡ сығып баҫты ла һөрәнләп ебәрҙе:

– Отря-а-ад, һирра-а-а! – Шунан ҡып баҫып Мортазинға боролдо: – Иптәш комбриг! Махсус отряд һинең бойороғоң буйынса сафҡа теҙеп ҡуйылды!

Бригада аҡтар армияһы сафында торһа ла, бында командирҙарға «әфәнде» тип түгел, ә ҡыҙылдарҙағы шикелле «иптәш» тип мөрәжәғәт итәләр. Мортазин үҙе шулай бойорҙо, ә «һеҙ» тип өндәшеүҙе бөтөнләй тыйҙы: «Башҡортта бер бөртөк кешегә бер ҡасан да «һеҙ» тип өндәшмәгәндәр. Ул губернаторға ла, батшаның үҙенә лә «һин» тип өндәшкән!» – тине. Бигерәк һәйбәт, «һин» тип әйтеү яҡыныраҡ итә кешене. Аҡтар командованиеһында Мортазиндың шулай, уставты боҙоп башбаштаҡлыҡ ҡылыуын күрмәй түгелдәрҙер, әммә тыйып маташманылар. Мортазин – Мортазин инде!..

Комбриг отряд командирының сәләменә ҡулын козырёгына ҡуйып ҡына яуапланы ла саф буйлап атлай бирҙе. Ҡаты баҫып атлай, ә күҙҙәре менән тегеләрҙе ҡапшай. Кавалеристар таш һын шикелле тора, тик күҙҙәре менән генә командирҙарын оҙата бара.

Бөгөн комбриг парадҡа барған кеүегерәк кейенгәнсе! Аяҡтарында ялтырап торған оҙон ҡуныслы итек, өҫтә генералдарҙыҡы шикелле ыҫпай мундир, хатта билендәге ҡылысының ҡыны түгел, наган һауыты ла ялтырап тора. Берәй ғилләһе барҙыр, уларҙың үҙҙәрен дә төрлө эскадрондарҙан йыйып алдылар бит! Хатта махсус отряд итеп ебәрҙеләр! Ярай, һалдаттың эше бойорғанды тыңлау.

Комбриг, кейеме аша тәнендәге тарамыштарын уйната биреп, уртаға килеп баҫты:

– Хамматов, сафтан сығырға!

Дыуамаллығы йөҙөнә яҙылған йәлпәк танаулы һалдат, фамилияһын ишетеү менән елтләтә баҫып алға сыҡты ла, эттеке шикелле тоғро күҙҙәрен командирына текәне. Ниндәйҙер яҡшы хәбәр көткәне күренеп тора.

– Йыртыҡ гимнастёрка кейеп сафҡа баҫҡаның өсөн отрядтан тороп ҡалаһың! Комэскаға әйт, үҙеңә тейешле язаһын бирһен!

Бөтөнләй икенсене өмөт итеп торған һалдат ҡойолоп төштө, бер ҡулы менән йыртыҡ еңен һәрмәне лә аҡланырға самаланы:

– Иптәш командир…

– Марш эскадронға!

Хамматов тигәне нишләһен, меҫкен, хәрбиҙәрсә ҡырт бороллоп, сауҡалыҡ араһына инеп китте, ә комбриг уға әйләнеп тә ҡарамайынса, һындарын ҡатырып торған һалдаттарына боролдо. Комбриг әле уғата етди, хатта ҡаты күңелле күренә. Тупайыбыраҡ торған ҡара күҙҙәрен һалдаттарға йүгертеп сыҡты ла ҡаты тауыш менән:

– Әбйәлилгә корпус командиры генерал-лейтенант Эллерс-Усовҡа барабыҙ! Генералдың үҙенең саҡырыуы буйынса! Аттарға! – тип фарман бирҙе.

Ҡайынлыҡ буйы ялт итеп ҡалды – ҡайҙа, ни өсөн барырға икәнен аңғарып та, хатта аптырап та өлгөрмәгән утыҙ биш һалдат бер ыңғайҙан аттарына һикереп менде. Мортазин ҡарамаҡҡа һалдаттарынан байтаҡҡа өлкән күренһә лә, уға әле егерме һигеҙ генә – һәр ҡыланышы, хәрәкәтендә йәшлек ғәй-

рәте, сапсанлыҡ, тәндәге көс кенә түгел, ғәскәр кешеһенә хас оҫталыҡ та ярылып ята. Ул атына менде лә:

– Минең арттан! – тип фарман бирҙе һәм юрттырып сығып та китте. Һыбайлылар өсәр рәткә теҙелде лә командирҙары артынан төштө. Атлы отряд бер аҙҙан ауыл ситендәге Ҡаран йылғаһын шатырлатып кисте, шунан бейек, матур булып ятҡан Ҡырҡты тауҙарына табан юл алды.

Махсус отряд һуғышсыларының кәйефе әле иҫ киткес шәп. Корпус командирының үҙенә китеп баралар ҙа баһа! Мортазиндың үҙе менән бергә китеп баралар! Нимәгә тип бараларҙыр, уныһын аңлатып торманылар. Һуғышырға-фәлән түгелдер, һәр хәлдә лә, Муса ағалары айғырға атланып алған бит. Атакаға айғыр менән йөрөмәйҙәр, эшкинмәй айғыр малы бындайға. Туйға – шәп, ә һуғышта шыйыҡ. Берәй парад, байрам һымаҡ нәмәгә тиер инең, карабиндарына унар обойма патрон алырға, кеҫәләренә берәр бомба тығырға ҡуштылар. Ярар, беләләрҙер әле, һалдаттың эше – бойороҡто үтәү. Кемгә тейә бындай бәхет. Ана, Хамматовты, бахырҙы, ҡыуҙы ла ебәрҙе. Ошо ҡиәфәте менән башҡорт ғәскәрен мыҫҡыл итеп йөрөмәһен генерал алдында тигәндер. Дөрөҫ эшләне!

Ҡаҙаҡ далаһы. Ҡара көҙ. Тетелгән йөн шикелле болот ергә һылашҡан. Тәүлек буйына ҡотһоҙ ямғыр яуа, дала ямғыры. Бер көн элек ҡар төшкәйне. Ҡалын төштө, тубыҡҡа етерлек, тик иреп бөттө. Шунан ямғыр китте. Дала боламыҡҡа әйләнде. Йондоҙҙар болот артында, күҙгә төртһәң күренгеһеҙ ҡараңғы. Үҙәккә үтерлек дала еле.

Икһеҙ-сикһеҙ даланан ҡара шәүлә шылыша. Бик аҡрын, хәле бөткән януарҙай ғына килә.

Йонсоған аттар бауыр аҫтынан тиерлек батып, саҡ-саҡ бара. Бигерәк тә егеүлеләренә ауыр – пушка, снаряд, боеприпас, аҙыҡ-түлек, кухня, тиф менән ауырығандарҙы, яралы һалдаттарҙы тартып килә улар. Тәгәрмәс көпсәктәренә, тырнаҡ araларына батҡаҡ һылашҡан, арбалар йөҙөп килә.

Кешеләр күшеккән, ике көн яуған ҡар, ямғырҙан иҫке шинелдәр бешенеп ҡатҡан, тәнгә аҙ ғына ла йылыһы юҡ. Етмәһә, ҡорһаҡ ас, юлға сығыр алдынан ашатҡайнылар, бына ярты көн, ярты төн киләләр. Туҡтап ашарға бешереү түгел, аҙ ғына туҡтап ял итерлек тә әмәл юҡ. Ни һыуы, ни ағасы! Етмәһә, үҙәккә үтерлек һалҡын ел. Нисәмә саҡрым киләләр, ҡышлаҡфәлән түгел, ут та күренмәй. Һалдаттар үҙҙәре түҙә лә, малды алдап булмай. Аттар ас, йонсоу көйө оҙаҡҡа түҙмәйәсәк...

Ғәскәр кешеләре далаһын да, далала йәшәгән кешеләрен дә ҡарғап килә. Шул да булдымы ил!

Был – Башҡорт бригадаһы походта. «Ҡайҙа бармай, ниҙәр күрмәй ир-егеткәй менән ат башы...» тип юҡҡа йырламағандыр башҡорттар. Бәлки, ҡасандыр ошо тирәнән Һырдаръя яғына китеп барғанда сығарғандарҙыр. Башҡорт ни, тоғро, ватансы халыҡмын, антымды тотамын тип, Мәскәүҙән, Петербургтан килгән фармандарҙы ихластан үтәгән дә йөрөгән. Хатта арттырып та ебәргән: ярҙам һорамаһалар, минең көсөм кәрәкмәйме, тип үҙе барған. Әле лә шулайыраҡ килеп сыҡты.

Башҡорт бригадаһы ике ай самаһы аҡ казактар менән һуғыш алып бара. Ят ил, ят донъя булыуына ҡарамаҫтан, бригада бер генә еңелеүгә лә тарығаны юҡ, аҡ казактарҙы үҙ илендә туҡмауын дауам итә. Казактар Башҡорт бригадаһы менән күптәнге таныштар, башҡорттарҙың ниндәй һуғышсы икәнен яҡшы белә, шуға ла күҙмә-күҙ бәрелешеүҙән тайшаныу яғын ҡарай.

Өҙлөкһөҙ алып барған һуғыштарҙан бригада бик ҡаҡшаны, һалдаттар йонсоу, яралылар, үлеүселәр арта, етмәһә, тиф ҡотора – ҡыҙылдарҙы ла, аҡтарҙы ла айырмай ҡыра. Табиптар, медикаменттар етешмәй, ҡайһы бер эскадрондар яртылаш ҡына тороп ҡалды. Милли ғәскәр булғас, бында өҫтәмә көс бирмәйҙәр, уны Башҡортостан хөкүмәте ебәрергә тейеш.

Мортазиндың ят милләт кешеләрен үҙ ғәскәренә алғыһы килмәй. Бер башланһа, бөтөнләй сыбарланасаҡ, тора-бара бригаданың исеме генә тороп ҡалыуы бар. Уларға ҡасып сығырға теләүселәр булды, әммә комбриг береһен дә яҡын ебәрмәне. Тәненә ярамаған ят ҡан эләккәндә, кешенең шуны күтәрә алмайынса үлгәнен яҡшы белә Муса. Бригада менән дә шулай килеп сығыуы мөмкин. Икенсенән, ғәскәрҙе һатлыҡ йәндәр иҫәбенә арттырыу эш түгел. Һатлыҡ йән – һатлыҡ йән инде, Сыңғыҙ хан юҡҡа ғына үҙенә ҡасып сыҡҡан дошман һуғышсыларының башын киҫтермәгән. Ғәскәрең аҙ булһын, әммә ышаныслы булһын.

Төпкәрәк ингән, Башҡортостандан алыҫайған һайын, һуғышсыларҙың кәйефе лә үҙгәрә бара. Үҙ илендә ул йортон, ауылын, ата-әсәһен, балаларын һаҡлап һуғышты. Шулар өсөн йәнен фиҙа ҡылырға ла әҙер – теге донъяға шәһит булып китәсәк! Бынау эсер һыуы, йылыныр усағы булмаған далала казактарҙы еңәм тип һуғышып йөрө! Киттеләр бит инде Башҡортостандан!

Дөрөç, бындай уйҙарын башҡорт егеттәренә белгертмәçкә, йәшереп тоторға тырыша. Әммә тәжрибәле комбриг бөтәһен дә үтә күрә кеүек. Береһенә лә еңел түгел.

Ике көн элек Миргород яғында казактар менән ҡаты һуғыш булды. Һуғышта арыған, талсыҡҡан ғәскәргә ял итергә ваҡыт та, урын да булманы. Бригада Григорьевка тигән староверҙар йәшәгән ҙур ауылда ялға туҡтаны. Ауыл был тирәлә барған һуғыштарҙан таланған, яндырылған, ашарға түгел, туҡтап ял итеп алырлыҡ та урын юҡ. Етмәһә, тиф менән ауырыусылар күбәйгәндән-күбәйә. Ғәскәр ямғырлы, һалҡын төндө яланда үткәрҙе, ә иртәгеһен таң менән яңынан һуғышҡа инергә тура килде. Казактар үҙ илендә булыуынан файҙаланып, башҡорттарға тоҙаҡ ҡороп маташа, уйламаған ерҙән килеп сығып, өҙлөкһөҙ һөжүмдәр яһап тора.

Казактарҙы яңынан ҡыйраткас, Башҡорт бригадаһы приказ алып, икенсе операцияға тотондо. Дөрөçөн әйткәндә, Мортазин был бурысты үҙ теләге менән үҙ өçтөнә алды.

Казактар менән һуғыш тамамланыу алдында. Быңдағы аҡ ғәскәрҙәрҙең көнө оҙаҡҡа ҡалмаған. Армия командующийы казактар тупланған Хан Торлағын алырға ла, уларҙы тамам тар-мар итергә бойороҡ бирҙе. Әммә штабтағы кәңәшмә ваҡытында пехота бригадаһы командиры яңы поход тураһында ишетергә лә теләмәне – ғәскәр ысынлап та арманһыҙ булғайны. Шул саҡ комбриг йәйәүлеләрҙәге өс эскадронды үҙенә биреүҙе һораны һәм кискә ҡарай бригаданы Аҡбулаҡ яғына алып китте. Казактарҙы ошонда дөмбәçләп ҡуйырға ла һуғышты тамамларға!..

Быңдағы һуғыштар бөткәс, Мортазин бригаданы Башҡортостанға ҡайтарыу мәсьәләһен ҡуясаҡ. Ошондай ауыр, ҡатмарлы замандарҙа ғәскәр үҙ илендә торорға тейеш. Башҡортостандың хәле бик ауыр, башҡорт үҙ дәүләтен, үҙ хөкүмәтен төҙөргә тырыша, ә уны төрлө яҡтан ҡыçалар, тәгәрмәсенә таяҡ тығалар, туранан-тура ҡаршы эш алып баралар. Үҙәктән ҡыçалар, күршеләр ҙә ҡаршы төшә. Шундай мәлдә тотош бер бригада ҡайтып төшһөн әле! Аҡ казактарҙы туҡмаған данлы бригада – баштан-аяҡ ҡораллы ғәскәр!

Муса үҙҙәренең эскадрон-эскадрон булып Ырымбурҙан Стәрлегә тиклем үтеп барыуҙарын күҙ алдына килтерә. Ҡыҙыл әләмдәр тотоп үтәсәктәр! Ауылдарҙа халыҡ таң ҡалып ҡараясаҡ! Байрам!

Был хыял... хәҙергә ҡаҙаҡ далаһы. Ҡараңғы төн, ямғыр, бил быуарынан батҡаҡ. Һалдат үҙ башына ғына төшә торған ауырлыҡтар кисерә.

Колонна килә-килә лә ҡайҙалыр өҙөлөп ҡала – йә арба күсәре һына, йә пушка бата, йә башҡа сәбәп. Колонна өҙөлә лә, ҡойроғон ҡалдырып, артабан китә. Һалдаттар тороп ҡалғандарҙы күрмәмешкә һалыша: ҡыуып етерҙәр әле, уларҙы көтөп, ямғырҙа күшегеп торор хәл юҡ.

Ә ғәскәрҙе бүлгеләп ҡалдырырға ярамай: бригада командиры иң ышаныслы эскадрондарҙың береһен колоннаның башына, икенсеһен ҡойроғона ҡуйҙы – саҡрымдарға һуҙылған ағымды йоҙаҡта тотоп барырға тейештәр. Мортазин үҙе штаб командирҙары менән алда бара, юлдың дөрөҫлөгөн тикшереп торорға кәрәк. Был ҡараңғыла, был далала әллә ҡайҙа сығып китеүең дә бар. Картаға бөтәһе лә төшөрөлмәгән, бик һаҡ булырға кәрәк. Комбриг бара-бара ла, ғәскәрҙе үткәреп ебәреп, иң арттан төшөп ала. Командир һәр һалдаты өсөн яуаплы!

Колонна тағы туҡтаны. Һалдаттар шаулаша, кемдәрҙелер һүгә, алдағыларға ҡысҡырына. Тегеләр үҙҙәренән алдағыларға һөрәнләй. Ғәскәрҙең теләге бер: тиҙерәк барып етергә лә берәй ҡоро урын табып, шунда йығылырға. Юл аҙабы – гүр ғазабы...

Ҡысҡырыш көсәйгәндән-көсәйә, колонна урынынан ҡуҙғалмай. Муса адъютантын ҡойроҡҡа ҡалдырҙы ла алға сапты. Эштең низә икәнен һораша бара. Бер кем бер ни белмәй, батҡан, аунаған пушка, арба-фәлән күренмәй, һалдаттар бригада командирының һорауына устав буйынса ғына яуап бирә лә тынып ҡала, ул үтеп киткәс, тағы шаулашырға тотоналар. Мортазиндың күңеле низер һиҙенә, ул атын шпорлап, алға саптырҙы.

Бына ул колонна башына етте. Аптырап ҡалды: саф боҙолған, һуғышсылар аттарынан төшкәндәр ҙә бер тирәгә йыйылған. Алда ниндәйҙер ҙур йылға ҡарайып ята. Муса үҙе лә аптырап төштө – аҙаштылармы әллә? Картала йылға күренмәй ине.

Һалдаттар ҡысҡырыша, кемделер һүгә:

– Ҡайҙа барғанды бер кем белмәй! Аҙаштыҡ. Төнгө ун икегә барып етергә тейешбеҙ, тигәйнеләр!

– Эйәрҙә ултырырлыҡ та хәл юҡ! Артабан бармайбыҙ! Етте, илгә ҡайтарһындар!

– Аттар ҙа ас, үҙебеҙ ҙә ас! Сигенә еттек! Йә ялға туҡтатһындар, йә кире ҡайтарһындар!

– Командирҙар үҙҙәре ышыҡта киләләр әле!

Был ни? Фарманды үтәмәүме?! Әллә ғәскәрҙә бунтмы?! Муса юғалып та ҡалғандай итте. Бригада ойошторолғаны бирле бындайҙың булыуы түгел, бер генә фармандың да үтәлмәй ҡалғаны юҡ ине! Һуңланыңмы, эштең хәтәргә китеүе күренеп тора.

– Командир бында! – Ҡараңғыла комбригтың ҡеүәтле тауышы яңғыраны. Шау-шыу ҡапыл баҫылды. Бер аҙ тын торҙолар ҙа яңынан ғауғалашырға тотондолар. Бер үк һүҙҙе ҡабатлайҙар: арыныҡ, йонсоноҡ, асыҡтыҡ, аҙаштыҡ! Йә ялға туҡтарға, йә кире ауылға ҡайтырға!

Эш, ысынлап та, хәтәр! Тимәк, эш бунтҡа бара. Бына һиңә маҡтаулы бригада! Бына һиңә башҡорттар! Хәҙер бөтәһе лә тик комбригтың үҙенән тора.

– Всем по коням! – Мортазин фарманды русса бирҙе. Ят телдәге бойороҡтоң башҡорт егеттәренә нисек тәьҫир иткәнен ул яҡшы белә.

Һалдаттар берәм-берәм аттарына менеп ултырҙы.

– Строиться по уставу! – Икенсе фарман яңғыраны. Кавалеристар теҙгендәрен тартҡылап, сафтарын тигеҙләй, өсәр рәткә теҙелә. Ни хәл итһендәр, һалдат – һалдат инде, уның өсөн командирҙан да баш ҙур хаким юҡ. Әллә ниндәй ауыр хәлдә лә командирына таяна. Бына әле лә комбригтың берәй рәтен табып, ғүмерҙәрен һаҡлап ҡалырына ышана. Үҙенән аҡыллыраҡ, тапҡырыраҡ, белемлерәк булғаны өсөн командир итеп ҡуйғандар бит уны! Әле лә бригада командирының ышаныслы, ҡаты тауыш менән фарман бирә башлауын күргәс, бер мөғжизәгә өмөт итеп, буйһона ҡалдылар.

Муса юл өҫтөнә сыҡты. Хәҙер инде башҡортсаға күсте:

– Иптәштәр! Ҡыҙылармеецтар! Башҡорттар! – Мортазиндың тауышы йомшарҙы. – Беләм, һеҙ арығанһығыҙ, асыҡҡанһығыҙ – бригада айҙан ашыу өҙлөкһөҙ һуғыштар алып бара... Тыуған илдән ситтә, ят яҡтарҙа. Беҙ Реввоенсоветтың, Ҡыҙыл Армия командованиеһының фарманын үтәп барабыҙ! – Комбриг йәнә һалдаттарына тәьҫир итерлек һүҙҙәр ҡыҫтырҙы. – Мин һеҙҙең командирығыҙ! Мин дә һеҙҙең шикелле арығанмын, йонсоғанмын! Мин дә тәүлек самаһы ашамағанмын! Әммә мин һеҙҙе ялға туҡтата алмайым! Ялға ла туҡтамайбыҙ, артҡа ла юл юҡ! Беҙ аҙашманыҡ, дөрөҫ киләбеҙ. Мин хәҙер китәм! Кем бригада командирына ышана – минең арттан! Кем ышанмай – ошонда ҡала! Минең казактар менән һуғышҡанды ҡарап торорҙар! Уңдан өсәр рәткә теҙелергә! Марш!

Бригада командиры китте, артына әйләнеп ҡараманы. Тәүәккәлләне, яңғыҙы китте. Бөтәһен дә уртаға һалды. Бындай тәүәккәллеккә бер ҡасан да барғаны юҡ, шикелле.

Йонсоу ат хужаһының хәтәр уйҙарын, ниндәй хәлгә ҡалғанын аңламайынса, бысраҡ ярып бара. Ә артта – тып-тын, ғәскәр ҡуҙғалманы. Тимәк, бөтәһе лә тамам ошоноң менән! Командир булараҡ бөттө Муса!..

Комбриг ярға килде. Дала йылғаһы ҡоторонған, ярының башына етеп ағып ята. Ямғырҙарҙан шулай ташҡандыр. Был Утва йылғаһы булырға тейеш. Тимәк, улар аҙашҡан, ҡараңғы далала икенсе юл менән киткән. Быны ғәскәргә белдерергә ярамай. Аҙаҡ, барып еткәс, аңлатыр, дөрөҫөн әйтер, тик хәҙер түгел! Йылға тәрәнме? Төбө нисек? Ғәскәр, пушкалар, арбалар үтә алырмы?

Комбриг минуттар һанай: ике, өс... Һалдаттар ҡуҙғалырмы, юҡмы? Йылға тәрәнме, шәп ағамы – беренсе булып командир үҙе кисергә тейеш.

Ат, хужаһын тыңлап, йылғаға керҙе. Әйе, был Утва. Ташҡан. Әммә дала йылғаһы тәрән дә, киң дә булырға тейеш түгел. Ни булһа ла, артҡа сигенергә юл юҡ. Комбриг йылғаны яңғыҙы кисә. Ғәскәр һаман ҡуҙғалмай, тауыш-тын ишетелмәй. Дүрт, биш минут үтте. Йылға, ысынлап та, артыҡ тәрән түгел, төбө лә ҡаты, пушка, арбалар үтерлек. Әлбиттә, арбаларға һыу керер, мәшәҡәт тыуҙырыр. Көндөҙ булһа, бер хәл дә бит... Муса ғәскәрҙең ҡуҙғалырына ышана. Шул көнгә төшмәгәндәрҙер бит инде башҡорт егеттәре...

Арғы ярға сыҡты. Дала йылғаһының яры бейек түгел, һалдаттар ярҙамы менән аттар йөктәрен тартып мендерә алыр. Муса һаман артына әйләнеп ҡарамай. Сәме лә килә, ә ғәскәр ысынлап та тороп ҡалһа?!

Ете, һигеҙ, ун минут үтте... Һаман тынлыҡ. Тимәк, бригада ҡалды. Их һин, Мортазин, бер еңелеүҙе белмәгән Мортазин! Ошо хәлгә ҡалдыңмы?! Данлы комбриг! Дошманынан еңелмәне, үҙ ғәскәренән еңелде. Ғәскәре ташлап киткән командир... Тимәк, ул артабан был бригадала командир булып ҡала алмай. Нисек кенә ауыр булһа ла ҡала алмай! Командование уны йә икенсе бригадаға күсерһен, йә башҡа фронтҡа ебәрһен. Хатта полк командиры итеп тәғәйенләһәләр ҙә риза. Тик был бригадала түгел!

Ун минут... Ғәскәрен ташлап киткән өсөн уны трибуналға бирерҙәр: үҙе менән алып китәһе урынға, тотош бригаданы

далала ташлап ҡасҡан! Полководец, имеш! Ундай хәлдең булғаны бармы икән тарихта! Етмәһә, милли ғәскәр!

Мортазин трибуналдан ҡурҡмай: әйҙә, революцион хөкөм сығарһындар. Ғәскәр командирын тыңламаны, Тимәк, ул командир түгел, йә бригадаһы ғәскәр түгел.

Артта ат тояҡтары тауышы ишетелде. Ҡысҡырҙылар:

– Иптәш комбриг! Муса ағай, беҙ киләбеҙ! – Быныһы Заһиҙулланың тауышы. Мусаның эсенә йылы йүгерҙе: ошондай егеттәр бирештеме инде, тип хафалана ине. Иҫән ҡалды ул теге ваҡыт, яраланған ғына ине. Яраһы төҙәлгәс тә, ауылына ҡайтып китмәйенсә, бригаданы ҡыуып етте.

– Мортазин ағай! – Һыбайлылар тиңләште. Быныһы – Ибраһим. Ул баштан уҡ ғәскәр янында ҡалып дөрөҫ эшләне. Ағай-энелек күрһәтеп торорға урам һуғышы түгел бит был һиңә. Муса яуап та бирмәне, әйләнеп тә ҡараманы, бара бирҙе.

– Муса ағай, ғәскәр килә. Ғәфү ит беҙҙе, яңылыштыҡ беҙ. Бөтәбеҙ ҙә һинең менән барабыҙ!

Муса һаман өндәшмәне, һүҙ таба алманы: йәнде ниҙер өйкәй, тамаҡта әллә нәмә тора. Былай булғаны юҡ ине. Бала саҡтан бирле... Комбриг шым килә. Тегеләр ҙә шым.

Мусаның хәтере ҡалды. Рәнйене, ярһыны! Эстән ярһыны. Кемгә?! Ғәскәргәме? Юҡ! Командованиеғамы? Юҡ! Яҙмышынамы? Юҡ! Нимәгә икәнен үҙе лә белмәй, ә һалдаттарҙың түҙеме бөттө! Башҡорт һалдаттары ла шулайтырлыҡ булғас, сигенә сығып, кешеләгә һуңғы саманан артып киткәндәрҙер. Батырға ла ял кәрәк... Дөрөҫ әйткән боронғолар... Муса теҙгенен тартты – шуны ғына көтөп килгән ат туҡтаны.

* * *

...Мусаны аяҡ өҫтө тотоп язаланылар. Ултырырға ла, ятырға ла, хатта аяғыңды алмаштырып баҫып торорға ла ярамай. Тик баҫып тор! Өҫтәл янында, һорау алған тәфтишсе янында тор... Көндәр, төндәр буйына. Ҡайһы тәфтишсе тәғәйенләгәндер уға был язаны, әммә иң хәтәрен бирҙеләр шикелле. Резина таяҡ менән туҡмауҙары ла, тырнаҡ аҫтына энә ебәреүҙәр, ике ҡулыңдан түшәмгә аҫып ҡуйыуҙар, өҫтөңә резина кейем кейҙереп һалып ҡуйыуҙар, тоҙло һыу менән клизма яһап, көндәр буйына һыу бирмәй тотоуҙары ла, тәнеңә тәмәке төпсөгө баҫып һүндереүҙәре лә, баш түбәңә өҙлөкһөҙ тамсы тамыҙыуҙары, йән ереңә тибеүҙәре лә, башыңды парашаға

тығыуҙары ла ул тиклем үк ғазаплынан түгелдер... Ә бына тәүлектәр буйы ҡымшанмайынса баҫып тороуҙары һәм йоҡо күрмәүҙәре... Өләсәйҙең әкиәттәре иҫкә төшә: «Ҡатынан-ҡаты ни ҡаты?» – тип һорағандар. «Ат тояғы!» – тип яуап биргән, имеш. «Әсенән-әсе ни әсе?» «Үлем әсеһе әсе». «Татлынан-татлы ни татлы?» «Йоҡо татлы»... Шулайҙыр шул...

Тәфтишселәр яуапты алмашлап ала. Арыйҙарҙыр, улар ҙа кеше бит. Береһе өс сәғәт буйына яуап ала ла китә, урынына икенсеһе килә. Был арығас, өсөнсөһө килә. Гел бер үк һорауҙы бирәләр: Башҡортостанға ниңә ҡайтып йөрөнөң, кемдәр менән осраштың, баш күтәреүселәрҙең урындағы етәкселәре кем, ҡоралдары ҡайҙа һаҡлана, Зәки Вәлиди менән ниндәй бәйләнештәрең бар, ойошмағыҙҙа нисә кеше һәм кемдәр улар?

Төнө бигерәк ауыр. Аяҡ һыҙлауҙан тыш, үлтереп йоҡо баҫа. Аяҡтың иҫе киткән инде, кәүҙәгә көсө етмәй. Алмаштырып баҫырға рөхсәт итмәйҙәр, шунда уҡ килтереп тибәләр. Балтырҙар шул тиклем шешкән, итек ҡунысына һыймай.

Муса тәфтишселәрҙең йәкшәмбе ял иткәнен белә. Моғайын, ял уға ла эләгер. Исмаһам, бер көн ятып торһа, тағы ике-өс көнлөк көс йыйыр ине.

Мусаның бер үҙен бер камераға яптылар, янында надзиратель генә ҡалды. Ул йомолоп барған күҙҙәре менән был бәләкәй кәүҙәле хәрбигә ҡарай: теге лә әҙәм балаһы, хәлен аңлайҙыр, бәлки, саҡ ҡына ял бирер. Кеше икәүҙән-икәү ҡалған сағында һәр ваҡыт яҡынлаша үҙ-ара. Теләһә-теләмәһә лә яҡынлаша. Муса утын-һыуын кискән генерал бит әле, бына ошо кешеләрҙең ғүмере өсөн һуғышты...

Муса өмөт менән бәләкәй кәүҙәле надзирателгә күҙ һала. Теге, әйҙә, үҙең ҡара, мин күрмәмеш тә белмәмеш, тигән ҡиәфәт менән тора.

Мусаның күҙҙәре үҙенән-үҙе йомолдо, бөтәһе лә онотолдо. Донъяны ләззәт баҫты.

Ҡапыл бөтә тәнгә меңәрләгән уҡ килеп ҡаҙалды. Ут кеүек уҡтар! Надзиратель аяҡҡа килтереп типкән. Шунан күҙ төбөнә һуҡты:

– Стоять!

Шунан артыҡты өндәшмәне, хатта күҙҙәрендә асыу ҙа юҡ ине. Әйтерһең, эшен атҡарып алды ла кире урынына барып ултырҙы. Муса сайҡалып китте, шунан турайып баҫты. Йоҡо асылды бер аҙ, балтырҙарға иҫ керҙе. Тик улар иҫ киткес һыҙлай һәм үҙенә шул тиклем ғазаптар килтергәне өсөн кемделер

ҡарғай. Сәғәт нисә икән? Таңға тиклем нисек түҙергә?! Таңға ла шул хәлдә инде, тик яңы көн тыуғас, ниндәйҙер еңеллек килер, ниҙер үҙгәрер һымаҡ.

Муса хәлһеҙ ҡараштарын үҙенең язалаусыһына төшөрҙө. Бына ниндәй көнгә ҡалды бит: ошо бәләкәй кәүҙәле, тыңҡыш ғәрип уның хакимы! Муса башҡа урында уны тырнағы менән генә һытыр ине, бәлки, ҡул да бысратып тормаҫ ине.

Надзиратель әллә Мусаның уйҙарын аңланы, быға ҡарап алды, күҙҙәрендә тәкәбберлек балҡый, ҡорбаны алдында торған йәлләт тәкәбберлеге. Ул – өҫтөн, ул – язалаусы! Алдында торған кеше бер ни тормай уның өсөн – теләһә ни ҡәҙәр язалай, мыҫҡыллай ала! Бер ҡасан да, бер кем алдында ла яуап тотаһы түгел. Бөтәһе лә ошо төрмә эсендә йомоласаҡ. Өҙлөкһөҙ килеп, өҙлөкһөҙ китеп – теге донъяға! – торған йән эйәләре араһында бер әҙәм диңгеҙҙәге тамсы ла түгел. Суп иткән тауышы ла ишетелмәйәсәк.

Надзиратель, әлбиттә, һаман тәкәбберлеген, көсөн юғалтмаған был кешенең уйҙарын аңлай. Күпме тотҡондар үтте ҡулынан, ул хәҙер ҙур психолог, бәлки, тәфтишселәргә ҡарағанда ла нығыраҡ күрәлер. Теләһә, тәфтишселәр булдыра алмағанды ла эшләй ала. Уның ҡулында – кеше яҙмышы. Яҙмыш уҡ түгел инде, яҙмышының бер өлөшө. Әммә иң хәтәр өлөшө.

Бәләкәй кәүҙәле ирҙәр яуыз, һәр хәлдә, көнсөл, эскерле була. Үҙҙәренең ошо ғәриплеге өсөн донъяға һәр саҡ үсле. Ҡулдарынан килһә, бөтә ирҙәрҙең кәүҙәһен ҡыҫҡартып, үҙе менән бер тигеҙ яһап бөтөрҙәр ине. Бына әле лә алдында торған ят милләттән сыҡҡан оло кәүҙәле ошо генералды язалап тотоу надзирателгә иҫ киткес ҙур ләззәт бирә ине.

...Муса төндөң нисек үткәнен хәтерләмәй: аң менән аңһыҙлыҡ буталды. Үҙе әллә тере, әллә үле. Шуныһы бигерәк хәтәр: уның ошо бәләкәй генә таш зиндан эсендә әҙәм күтәрә алмаҫлыҡ ғазаптар кисереп торғанын бер кем дә белмәй. Белмәйәсәктәр ҙә. Бер ҡасан һәм бер ҡайҙа ла! Ошо көйө китеп барасаҡ һәм мәңгегә юғаласаҡ. Халҡың ошондай ғазаптар кисереүеңде белһә, язаларын күтәреү ҙә еңелерәк булыр ине.

Дүшәмбе көн, иртән эш көнө башланғас, уны яңынан тәфтишсегә килтерҙеләр. Тәфтишсе нишләптер бик тә кәйефле ине, Мусаны киң йылмайып ҡаршы алды. Мусаның күңеле әллә нишләп китте, үҙе лә йылмайырға итте, тик килеп кенә сыҡманы шикелле, онотолған. Тимәк, ярлыҡағандар, шуға

кәйефе шәп тәфтишсенең. Ерле юҡтан әҙәм ғазаплап, юҡ енәйәтте таптырып ултырыуы уға ла рәхәт тиһеңме! Ул да әҙәм балаһы бит!

Муса ҡасандан бирле әйтә бит: уның бер ғәйебе юҡ, ниндәйҙер яуыз уйлы кешеләр яҡҡан яла ғына. Әйҙә яңынан тикшерһендәр. Мортазин бар һәләтен, көсөн Ҡыҙыл Армияға бирҙе! Быларҙы Семён Михайлович Будённый яҡшы белә. Польша фронтында бергә һуғыштылар. Хәрби академияға ла уның тәҡдиме буйынса инде. Мәскәүҙә гел осрашып йөрөнөләр. Муса ҡулға алынғас та хат яҙғайны, күрәһең, ҡулына барып эләккән. Оҙағыраҡ йөрөгән инде лә, эләккәс, ярай.

Тәфтишсе ҡулы менән ымлап Мусаға ултырырға ҡушты. Йә Хоҙай, был көн дә килер икән! Мусаның күңелдәре тулып китте. Ул әле ошо мәлдә тәфтишсенең ҡылған бөтә яуызлыҡтарын, биргән язаларын онотորға, хатта уны ярлыҡарға әҙер ине. Хаталыҡ булған, ул ғәйепле түгелдер. Ул да ҡушҡанды үтәүсе. Ярар, сығырға ла, наркоматҡа барып, эшкә тотонорға!..

Тәфтишсе йылмайып уға ҡараны. Тик йылмайыуы бик мәкерле һымаҡ:

– Йә, Мортазин, уйланыңмы?

Тәндең нервылары элеккенән дә нығыраҡ ҡалтырана башланы: тимәк, бер ниндәй ҙә ярлыҡау булмаған, яңынан язалауҙар башлана. Был иблисләнә генә икән.

– Ҡаршылашма, Мортазин, бынан берәүҙең дә ҡул ҡуймай сыҡҡаны юҡ! Мин һиңә икенсе язалар ҡуллана башлаясаҡмын. Был минең хоҡуғым, Мортазин! Белеп ҡуй. Асығын әйтәм: мин һине нисек теләйем, шулай язалай алам. Тик үлтерергә генә хаҡым юҡ. Миңә ул кәрәкмәй ҙә. Мин һине язалайым, енәйәтеңде танығансы язалайым. Ҡулыңды ҡуйһаң, һиңә ни бары ун йыл бирәсәктәр: өс йыл вертухай, шунан һөргөн. Ғаиләңде лә алып китә алаһың. Ниңә шулай үҙеңде лә, ғаиләңде лә ғазапларға! Хөкөм ителгәс тә ғаиләң менән күрешәсәкһең. – Тәфтишсе уға ручка бирҙе лә протоколды этәрҙе.

Муса ялғанды раҫлап ҡул ҡуймаясағын аңлатып ситкә боролдо, һүҙ әйтергә хәле юҡ, исмаһам, аҙ ғына тағы ултырырға!

– Встать! – Мөләйем тәфтишсе йыртҡысҡа әүерелде. Сүместәй йоҙроғон йомарлап ҡаршыһына килеп баҫты. Муса туҡмалыуҙан ҡурҡмай ҙа тиерлек, тәненең иҫе киткән. Тик баҫып

ҡына тора алмай, аяҡтарҙың йәне ҡалмаған. Ул хәлһеҙ ҡулдары менән ручкаға һуҙылды...

Тәфтишсе быуар йылан һымаҡ уға текәлгән: ни эшләр был?! Йоҙроҡтары һаман йомарланған килеш тора.

Муса ауырлыҡ менән ҡул ҡуйҙы ла янтайып ултырҙы, күҙҙәрен йомдо. Үҙенең нисек йығылып төшкәнен дә белмәй, быуындар ҙа, нервылар ҙа бөтөнләй йомшарған, иҫтәре киткән...

Уны ике надзиратель камераға һөйрәп алып инде. Индергәс тә бысаҡ менән итек ҡунысын ярып ебәрҙеләр. Былай сисерлек түгел, балтырҙар самауырҙай булып шешкән, ҡап-ҡара ҡан һауған. Ҡотолдо язаларҙан, ҡалғаны барыбер уға... Кешелеге ҡалманы, ҡалдырманылар.

Тәфтишсе еңел һуланы: ҡәбәхәт, барыбер ҡул ҡуйҙы, ә күпме яфаланы уны. Бына шулай эш итергә кәрәк артабан да! Ул, протоколын тотоп, бүлек начальнигына инеп китте. Теге Мортазин эше менән һәр ваҡыт ҡыҙыҡһынып торҙо, ашыҡтырҙы, асыуланды. Бына һындырҙы бит был таш шикелле азиатты. Яңы тотҡон бирмәй торһондар ине бер аҙ, ял итергә кәрәк...

Үлем көтөүе язалауҙарҙан да ғазаплыраҡ икән! Нисә көн, нисә сәғәт, нисә минут үтте?! Иҫәбенә сығырлыҡ түгел. Ниңә һаман приговорҙы еренә еткермәйҙәр икән? Әллә атыусылары өлгөрә алмаймы? Бәлки, үлем язаһын төрмә менән алмаштырғандарҙыр? Бәлки, Семён Михайлович үҙе юллағандыр? Муса Калининға ла яҙғайны яҙыуын...

Ғәжәп, теге ваҡыт шул тиклем йоҡо килә, саҡ ҡына ятып торор өсөн ярты ғүмерен бирергә әҙер ине, хәҙер бына ята, ә йоҡлай алмай. Йоҡламай ҙа, уяу ҙа түгел, коридорҙағы бәләкәй генә тауышҡа ла тертләй. Үҙенең йәнен алыусыларҙы көтә. Ғәжәп, әммә шулай! Тиҙерәк хәл итһендәр ине: йә тегеләй, йә былай... Муса хатта камеранан алып сығып киткән тотҡондарҙан көнләшеп тә ҡуя. Исмаһам, йән язаһынан ҡотолалар...

Ниһайәт, йоҡо алды шикелле. Юҡ, йоҡо түгел, төш түгел, өн икән дә! Һай, үҙҙәренең ығындағы тауҙар! Һайлай белгән шул башҡорт урынды! Ана, Көсөк ауылы ята. Бәй, әсәһе лә, атаһы ла, ҡустылары ла шунда!

Бөтәһе лә иҫәндәр. Был ғәйепләүҙәр, язалар төш кенә булған икән дә! Төш булған. Ҡайһылай рәхәт! Һай, ҡатыны, балалары ла ҡайтҡан!

Көтмәгәндә күк күкрәне – шалтырап камера ишеге асылды. Муса һикереп торҙо: уға килделәр!

– Мортазин, сығырға!

Тәнгә мәйет һалҡыны йүгерҙе. Бындай хәтәр мәл кеше ғүмерендә бер генә тапҡыр булалыр. Аһ, ғүмер! Бирге килмәй бит һине!..

– Хушығыҙ, иптәштәр! – Мусаның тауышы сыҡты. Ул инде хәҙер иректе кеше – тик үлем генә ҡалды, ә ҡалғанына бер кемдең ҡыҫылырға, бойорорға хаҡы юҡ.

Камералағылар ҙа тороп ултырҙы. Муса ҡараманы, шулай яҡшыраҡ. Ниңә уларҙың да, үҙенең дә йәнен ярғыларға... Күҙендә йәшер ҙә ҡуй. Ул ҡаты аҙымдар менән ишеккә китте. Төнгә әҙ-мәҙ хәл кергәйне үҙенә.

...Алдан ҡарағанда ғына бик оҙон, бик ҙур күренгән икән был ғүмер тигәнең. Осона килеп сыҡҡайны, шул тиклем ҡыҫҡа, шул тиклем бәләкәй булды ла ҡалды, әйтерһең, аты менән сабып барҙы-барҙы ла ярлауға килде лә осто. Артта ла, алда ла бер ни юҡ. Бөттө, юҡ булды юл. Ә бит әле ул тәне, йәнендәге көстө тотоноп бөтөү түгел, барын татып та өлгөрмәгәйне.

Бәлки, ғүмер һәр кешегә лә шулай күренәлер: уға тиклем йәшәгәндәргә лә, унан һуң йәшәйәсәктәргә лә!

Осто бөркөт. Аттылар уны. Үҙенекеләр атты.

Үҙенекеләрме икән?

## ? Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Бригада һуғышсылары ни өсөн үҙҙәренең командирҙарын ярата?
**2.** Муса Мортазин тураһында нимәләр беләһегеҙ, шул хакта һөйләгеҙ.
**3.** Ҡаҙаҡ далаһында Башҡорт бригадаһы ни өсөн ауыр хәлгә эләгә?
**4.** Ошондай ваҡытта бригада командиры Муса Мортазиндың ниндәй сифаттары сағыуыраҡ асыла?
**5.** Бригада һуғышсыларынан бер үҙе алға айырылып китеп, командир дөрөҫ эшләгәнме? Ошо хәлгә аҙаҡ үҙе ниндәй баһа бирә?
**6.** Муса Мортазинды ни өсөн хөкөмгә тарттырғандар? Уны ғәйепләү ғәҙелме-түгелме икәнен асыкларға тырышығыҙ.
**7.** Әҫәрҙең иң аҙаҡҡы һөйләмен нисек аңлайһығыҙ?

## Телмәрегеҙҙе байытығыҙ

«Тәфтишсе» һүҙенең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Миҫалдар килтерегеҙ.

## Хәтергә төшөрәбеҙ

Муса Мортазин хаҡында тағы ла ҡайһы яҙыусыларҙың ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ?

## Кем ул Муса Мортазин?



Муса Лут улы Мортазин – күренекле башҡорт полководецы. Өс тапҡыр Граждандар һуғышы геройы, йәғни өс тапҡыр заманы өсөн иң юғары награда – Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Шуның өҫтәуенә, революцион ҡорал – көмөш ҡылыс та тапшырыла уға.

Буласаҡ полководец 1891 йылда Башҡортостандың хәҙерге Учалы районы Көсөк ауылында тыуа. Ҡара йәшенән байҙарға батраклыҡ итә. 1913 йылда ғәскәри хеҙмәткә алына. Беренсе донъя һуғышы тамуғын кисерә. Иленә ҡайтҡас, халыҡ араһында яңы тормош башланыуын аңлатып йөрөй, революцияны яҡлаусылар сафына баҫа. 1919 йылда 1-се Башҡорт атлы полкы командиры сифатында аҡтарға ҡаршы һуғыша. Ҡыҙылдарҙың ҡайһы бер командирҙары менән аңлаша алмауы уны аҡтар яғына сығырға мәжбүр итә. Әммә оҙаҡламай колчаксыларҙың да башҡорт халҡы мәнфәғәтен сит күреүҙәрен аңлап алған Мортазин шул йылдың көҙөндә үк Ҡыҙыл Армия яғына яңынан сыға. Көнбайыш фронтта ул етәкләгән Башҡорт бригадаһы тиңдәшһеҙ батырлыҡтар күрһәтә.

Яу баҫылғас, Муса Мортазин М. В. Фрунзе исемендәге хәрби академияла, унан һуң Ҡыҙыл Армияның юғары команда составын камиллаштырыу курстарында уҡый. Уға һәр саҡ юғары хәрби постарҙы ышанып тапшыралар.



# ҒӘЛИМОВ
## Сәләм
## (1911–1939)

Ғәлимов Сәләм (Ғәбделсәлим Мөхәммәтғәлим улы Ғәлимов) хәҙерге Силәбе өлкәһенең Сосновка (элекке Ҡоншаҡ) районы Тәгеш ауылында тыуа. Ете йәше тулғас, Сәләмде ауылдарындағы башланғыс мәктәпкә уҡырға бирәләр. Ул бик тырышып уҡый. Ләкин Сәләмгә ун йәш тулыр-тулмаҫтан, 1921 йылда, атаһы үлеп китә. Ике туғаны менән Сәләм әсәһе тәрбиәһендә тороп ҡала. Крәҫтиән тормошоноң күп мәшәҡәте, көндәлек ауырлығы буласаҡ шағир өҫтөнә төшһә лә, ул уҡыуын ташламай.

1928–1930 йылдарҙа Ғ. Сәләм комсомол ячейкаһының секретары булып эшләй. Ошо уҡ йылдарҙа Өфөлә сыға торған «Башҡортостан» гәзитендә Ғ. Сәләмдең колхоз ауылының үҙәк проблемалары тураһында мәҡәләләре һәм шиғырҙары баҫылып сыға.

Әүҙем хәбәрсе, ялҡынлы йәш шағир Ғ. Сәләмде 1930 йылда «Башҡортостан» гәзите редакцияһына эшкә саҡырып алалар. 1932 йылда «Тревога» исемле тәүге шиғри йыйынтығы донъя күрә. Ул үҙен эшсән, ныҡышмалы һәм үтә тырыш, ирешелгән менән ҡәнәғәт була белмәүсе, һәр ваҡыт яңы ижади асыштар яһаусы, әҙәби эшкә ҙур яуап һәм талап менән килеүсе шағир итеп таныта.

1933 йылда Ғ. Сәләм Башҡорт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына уҡырға инә. Бында уның талантын үҫтереү өсөн киң юл асыла. Ул халыҡтың ауыҙ-тел ижадын, рус классик әҙәбиәтен ныҡлап өйрәнә. Был хәл уның ижадының әүҙемләшеүенә, ҡәләменең үткерләнеүенә көслө йоғонто яһай.

«Мирон улы», «Мәскәү», «Өс йыр», «Республика иртәһе», «Һәйкәл», «Ғүмер» кеүек хәҙерге башҡорт шиғриәтенең аҫыл өлгөләрен, әҙәбиәтебеҙҙең алтын фондына ингән «Шоңҡар» поэмаһын Ғ. Сәләм тап ошо студент йылдарында ижад итә. Ғ. Сәләм институттың ижтимағи тормошонда ҡайнап йәшәй, әҙәби кисәләрҙә әүҙем ҡатнаша, ғилми докладтар менән сығыш яһай, тәнҡит мәҡәләләре яҙа.

Ғ. Сәләм СССР Фәндәр академияһының Ленинградтағы (хәҙерге Санкт-Петербург) филиалына аспирантураға уҡырға инә. Аспирантурала уҡыған саҡта үҙенең иң күренекле әҫәрҙәренең береһе – «Бала» поэмаһын яҙып бөтә. Ләкин Ғ. Сәләмгә аспирантураны тамамларға тура килмәй. Ҡаты ауырып китеп, шағир 1939 йылда вафат була.

## РЕСПУБЛИКА ИРТӘҺЕ

*(Поэманан өҙөк)*

### I

Паровоздар киҫеп сыҡҡан ерҙә
Урал ҡаялары уртаһын,
Ап-аҡ ташҡа баҫып
Ҡарап торҙом
Республикамдың мин иртәһен.
Тын күлдәргә төшкән аҡҡошмо ни,
Уйһыуҙарҙа ята аҡ томан,
Ниндәй йәнле иртә!
Бына бер саҡ,
Тау биттәрен солғап яҡтыға,
Ҡояш сыға башлай,
                              нурҙарына
Йым-йым итә Урал таштары;
Иртәнге ел,
                        әкрен генә өрөп,
Һыйпап үтә үлән баштарын.
Күрәм:
            эшкә бара республикам,
Һөрән һалды бына гудоктар;
Эшсе өйҙәр, ҡояшҡа ҡаратып,
Тәҙрә асты, ошо минутта
Ҡайһы ҡаялалыр динамиттар

Таш аҡтарҙы,
  һауа ярыла…
Сайҡалғандай булды мин баҫҡан тау,
Тирбәлгәндәй шунда бар Урал.
Тән семерләп китте,
Ә ҡулдарым
Тотондолар ҡайраҡ таштарға.
Юҡ, бер ни юҡ!
Ахыры, шиғыр яҙып,
Нервым ғына бер аҙ ҡаҡшаған.
Күҙ ташлайым ҡабат:
    Иҙел буйлап
Колхоз ауылдары тартылған,
Уяналар өйҙәр,
  шау-шыу булып,
Көтөү сыға әүен артына,
Тереләләр юлдар:
  автобустар
Ҡыҙ һәм егеттәрҙе тейәгән,
Баҫыуҙарға бара,
  ә арыраҡ,
Башаҡ тулҡынланған ерҙәрҙә
Ҡуҙғалдылар баҫыу караптары,
Ҡыр күмелә күмәк эш менән,
Һабансылар йыры,
    тракторҙар
Гөрөлдәүе, –
  баҫыу өҫтөндә.
Мең томдарҙа бөтмәҫ роман тыуа,
Ноталарға һыймаҫ тауыштар,
Буяу төрө етмәҫ картиналар…
Бына тағы йәшел ҡамыштан
Кәмә сыҡты,
Күмәк йыр башланды,
Кемдер баҫты тальян телдәрен,
Беләм, былар – күрше ял йортонан,
Шулай башлай улар көндәрен.

## II

Республикам тора,
                                        аҙмы тағы
Миңә күренмәгән урындар?
Фонтан аҡҡан нефть вышкалары,
Ҡорос заводтары…
Борон-борондан
Тик ҡурай һыҙғырған сахра буйлап
Күтәрелгән яңы ҡалалар.
Ҡайҙа үҫә булыр Димитровтар
Һәм Чкалов кеүек балалар.
Аҙмы тағы ла өйҙәр!
                                Ҡайҙа бөгөн –
Мең йыл тулған саҡта йәшенә,
Үрмәкселе емерек һикеләргә
Тимер карауаттар алышына.
Аҙмы колхоз,
                тәҙрәләргә
Электролампа ҡуйыла,
Ҡайҙа ғүмерең данлы йыр шикелле,
Бәхетең йәшлек кеүек тойола.
Унда кешеләр эшкә,
Ялға хаҡлы,
Унда кешеләр йырға хаҡлылар,
Унда кешеләр яҡшы ғүмер юлын
Партия аҡылы менән таптылар.

## III

Көн башлана,
Илем тағы ла ниндәй
Шатлыҡ менән ҡабынып балҡымаҫ!
Айырым аҡҡан ике йылға ҡушылыр,
Орден алып ҡайтыр батырҙар;
Татьянаның арияһын йырлар
Ферма ҡыҙы стан ҡаршында,
Бригада ҡул сабыр
                                үҙенең ҡыҙын
Һәм Чайковскийҙы алҡышлап;
Һыйырһыҙға колхоз һыйыр бирер,

Өйһөҙҙәргә өйҙәр һалырҙар.
(Ә ҡасан һуң колхоздарға тиңдәш
Яҡшы шиғыр яҙыр шағирҙар?)
Кемдер бөгөн яңы вуз бөтөрөр,
Корпустарға кирбес өҫтәлер,
Кемдәрҙеңдер ғаилә башлауҙарын
Теркәр тағы ЗАГС өҫтәле…
Бында – тауҙар,
бында – киң баҫыуҙар…
Ҡарап торам,
шул саҡ янымдан
Көн яғына китте цистерналар,
Уралыма керҙе вагондар.
Пассажирҙар бара,
Кемдер берәү
Яулыҡ болғап моңһоу ҡараны.
Бәлки,
Уның егете лә станцияла
Минең кеүек баҫып ҡалғандыр…

**IV**

Машинист дуҫ,
йә һин паровозды
Аҡрынайтыр инең бер аҙға,
Һинең менән барған пассажирҙар,
Республикам аша уҙғанда,
Тағы ла оҙаҡ ҡараһындар уның
Нефть тулған уйһыу буйҙарын,
Алтын кейенеп ятҡан ҡаяларын,
Аҡсарлаҡтар сумған һыуҙарын.
Тыңлаһындар:
бында ҡасандыр бер
Пушкин күргән телһеҙ башҡорттар
Беренсе ҡат бөгөн
үҙ телендә
Уның шиғырҙарын уҡыйҙар.
Тыңлаһындар беҙҙең ҡыҙҙар йырын,
Минең илдең иртән тороуын,
Ситлектә ҡартайған ыласын ҡоштоң
Йәшәреүен, яңынан тыуыуын!

### V

Таштар ҡултығында паровоздың
Аҡ толомо ҡалды ишелеп,
Күк вагондар тауға ышыҡланды,
Ашығып ҡасҡан йылан шикелле.
Тауҙар, тауҙар!
                – Ҡайһы тау бейек? – тип,
Мин Уралға тағы ла ҡараным.
Тик тапманым шул тауҙарҙа тыуған
Шатлыҡтан да бейек ҡаяны!

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Поэманың өҙөктәрен тасуири уҡығыҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Поэманың идея-тематик йөкмәткеһен билдәләгеҙ.
2. Шағир нимә менән ғорурлана?
3. Республиканың эш көнө башланыуын шағир нисек һүрәтләй?
4. Машинист дуҫҡа шағир ни өсөн мөрәжәғәт итә?
5. Был поэманың жанр формаһын нисек билдәләп булыр ине?
6. Поэманы уҡыу барышында һеҙ автор позицияһын тойҙоғоҙмо?

## ШОҢҠАР

Шоңҡар булып осоҡ урмандағы
Бөтә һуҡмаҡ, бөтә аранан.
Әйтсе, бурыл, ә һуң йәшәр өсөн
Ҡайһы һуҡмаҡ менән баралар?..

### Беренсе бүлек

#### ПРОЛОГ УРЫНЫНА

#### 1

Пароходтар Иҙел буйлап бара,
Бөҙрә тулҡындарҙа тирбәлеп,
Яңғырап ҡала йәшел урманлыҡтар,
Болон һәм дә ярҙар тирәһе.

Пароходтар бара,
пристандәр
Байраҡ болғап оҙатып ҡалалар,
Һыу өҫтөнә күкһел пәрҙә тартып,
Киң торбаның төтөнө тарала.

**2**

Был уҙған йыл ине,
ике иптәш
Ҡайта инек Мәскәү яғынан.
Пристандәр ҡалды…
Эргәбеҙгә
Яңы иптәш менде тағы ла.
Архитектор икән,
ашығып бара
Эш урынына тиҙерәк етергә,
Үҙе Иҙелдәге бер төҙөлөштөң
Корпус проектын килтерә.
Тәүге иптәш – совхоз агрономы,
Ул съездан ҡайта, шикелле,
Бер каютта…
Иҫке дуҫтар кеүек,
Һүҙ менән дә бик тиҙ килештек.

**3**

Мин диванда,
иптәш агроном
Сумаҙанға ниҙер тултыра,
Архитектор өҫтәл эргәһендә
Күп саҡ чертёж һыҙып ултыра.
Архитектор һүҙгә аҙ ҡатнаша:
– Тамамлайһы бар, – ти, – был эште.
Чертёждарҙы, – ти ул, – эш урынына
Еткәс үк бирергә тейешмен.
Был чертёж, – ти, – ошо Иҙелдең,
Бынан менгәс, уң яҡ ярына
Баҫыуҙарға һыу һәм ток бирәсәк
Гидростанция итеп һалына…

**4**

Тәҙрә аша беҙҙең алдан үтә
Ҙур ҡалалар, шаулы урмандар,
Оҙатып бара хәтфә болонлоҡтар,
Ялан ерҙә тулҡый ҡылғандар.
Уйҙы тарта Иҙел, яр буйҙары,
Яр йөҙөнә тулҡын ҡағыуы,
Һүҙебеҙҙе бүлеп низер һөйләй
Бөрсөкләнеп һыуҙар ағыуы.

**5**

Ағиҙелкәй һыуы, ай, ағын һыу,
Ағын һыу буйҙары ҡамышлы,
Йырламасы, егет, үткәндәрҙе,
Үткәндәрең ауыр, һағышлы…
Иҙел, Иҙел…
        Аҙмы йырҙар ҡалған,
Моңдар ҡалған һинең исемгә,
Тыңлағанда уны аҡ һыу түгел,
Ҡан бөрсөгө йөҙә эсендә.
Иҙел, Иҙел…
        Аҙмы һыуҙар ташҡан,
Аҙмы таштар йыуылып шымарған,
Иҙел, Иҙел…
        Һаман шул турала
Ярҙар һөйләр әлдә, һораһаң.

**6**

Хикәйә бар –
Ҡанлы яуҙы маҡтап,
Байҙар өйөн ватҡан урында,
Хикәйә бар – уҫал түрәләрҙең
Миҙалдарын ҡайырыу турында.
Хикәйә бар…
                Улар йырҙа йөрөй,
Хикәйә бар – ауыр көйҙәрҙә…
Хикәйә бар һәм дә был урмандың
Уҫал ҡараҡтарын һөйләргә.

## 7

Үткән йылда шулай агрономдың
Ошо Иҙел яры буйынан барғанда
Һөйләгән бер әкиәтен
Һаман йөрөтәм әле уйымда.

Ул һөйләне бында ҡасандыр бер
Атаҡлы бур Әхмәт булыуын,
Төнгө юлсыларҙы талай-талай
Ҡара урмандарҙа ҡуныуын.
Ул һөйләне бурҙың тәү көндәрен,
Ҡайһы юлдар менән үтеүен,
Ул һөйләне бурҙың һөйгән ҡыҙын,
Һәм аҙаҡтан ташлап китеүен.
Ул һөйләне...
        Юҡ та –
            әйтеп булмай
Тик үҙемдә тыуған хис менән,
Шуға ла мин һеҙгә агрономдың
Үҙ әкиәтен яңынан күсерәм.

**? Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Пароходта бер каютала кемдәр бара?
**2.** Бишенсе бүлексәлә Ағиҙел йылғаһы тураһында һөйләнелә. Был юлдар һеҙгә таныш булған ниндәй әҫәр менән ауаздаш, уның авторы кем?
**3.** Агроном иптәштәренә ниндәй әкиәт һөйләй?

## Икенсе бүлек

### 1

– Әхмәт –
        бынан бер нисә йыл элек
Ҙур дан алған уҫал ҡараҡ ул,
Бәлкем, үҙен инде урмандар ҙа,
Кешеләр ҙә онотоп баралыр.
Ҡайҙалыр ул бөгөн?..
                Ә мин уның
Тик үткәне менән танышмын.

Ул саҡтағы урыны Урал булған,
Иҙел яры, һаҙлыҡ ҡамышы.
Иҙел ярҙарынан һырттар киткән,
Сағыл таштар ята тауында,
Иҙел ярҙарында урман ҡуйы,
Шаулап үҫә нарат, ҡайындар...
Урман ҡуйы...
Юлсыларға ғына
Ҡыҙғана ул ышыҡ урынын,
Юлсыларға күңелен тар тотһа ла,
Йәшереп аҫрай уҫал уғрыны.
Урман...
Урмандарҙа бүре йөрөй,
Урман...
Урмандарҙа ҡараҡ бар.
Урман уҫал –
төнөн уҙыусының
Ат һәм тунын талап ҡайтара...

**2**

Юлсы үтә,
яҙғы боҙҙамы ни,
Ус төбөндә бара йөрәге:
«Туҡта,
һыҙғыралар түгелме һуң?
Сеү, нимә бар,
Кемде күрәм мин?..»
Урман...
Урмандарҙа бысаҡ йөрөй,
Юлбаҫарҙар, ай-ай, уҫалдар...
Үҙе генәме ни?
Әхмәт унда,
Бер һыҙғырһа, дүрт-биш дуҫ таба.

**3**

Ҡапыл икәү, өсәү...
Ә ҡаршыңа
Тыныс ҡына баҫа береһе:
– Юлсы иптәш, беҙҙең башҡа эш күп,
Ә һин һаман ҡайтмай йөрөйһөң.

– Ҡалтыранма, юлсы, борсолма һин…
Беҙҙең йомош артыҡ ҙур түгел:
Атың һәм дә йөгөң ҡалһын беҙгә,
Ә үҙеңме?
Үҙем, тиһеңме?
– Ту… ту… туҡ… та!
Алла хаҡы өсөн…
– Ха, ха, ха…
Алла кешеһе…
Был урманда Әхмәт үҙе Алла!
– Әхмәт!
(Бөгөлөп төшә быуыны юлсының.)
Бер ни түгел ҡараҡ тиеү генә,
Әхмәт тиһәң инде, тын бөтә.
Әхмәт – йәшен,
унын исеменән үк
Теҙ сүгәләр ҡалын егеттәр.
Ай ҡалҡына.
Айҙан өмөт теклəп,
Ҡалтырана юлсы ирене.
Ай нишләһен,
Әхмәт ҡулы батҡас,
Үңәс тамырҙарын һеңереп.

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Өҙөктө роллəп тасуири уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Әхмəттең урманда йәшәү сәбәбен аңлатығыҙ.
**2.** Юлаусылар ни өсөн Әхмəттән ҡурҡа?

## Өсөнсө бүлек

### 1

Урман…
Урмандарҙа бысаҡ йөрөй,
Юлбаçарҙар, ай-ай, уçалдар.
Үҙе генәме ни?
Унда Әхмәт,
Бер һыҙғырһа, дүрт-биш дуç таба.

Ә ҡалала Әхмәт тапҡан малды
Миңьян ҡулы шыма үҙ иткән.
Миңьян өсөн нимә?
Тауар таный –
Таш лавкалы элек-электән.

2

Әхмәт белә үҙенең бурлыҡ башы
Шул Миңьяндан ғына килгәнен,
– Мине Миңьян үҙе өйрәтте, – тип
Шатланған һәм һыҡтап йөрөгән ул.

3

Тарихына ҡайтһаң, юлы ята:
Ул Сәлмәндә йөрөгән йыл булған,
Сәлмән – ауыл байы, ҙур ҡаланан
Килеп йөрөгән уға Миңьян.
Сәлмән байҙың аҫыл малдары
Ҡытыҡлаған Миңьян күңелен.

– Осһоҙ хаҡҡа сиртмәм микән, – тип ул
Шул малдарҙы аулап йөрөнө.
Юҡ, Сәлмән дә белмәй түгелдер шул,
Күтәренке ҡуйған баҙарын;
– Килешмәһәң, ярар, – тигән Миңьян,
Мыйығын һыпырып, ситкә ҡаранып.

4

«Ярар...» тигән һүҙҙең мәғәнәһен
Бары һуңынан ғына белгәндәр,
Белмәгәндәр башта әйберҙәрҙең
Урланыуын Миңьян килгәндә.
Былай булған: Миңьян барынан элек
Әхмәт күңелен ҡулға төшөргән,
Килгән саҡта «шәкәр, сәйлек» биргән,
– Егет һин, – тип ҡай саҡ эсергән.

– Егет тә бит, мин шул малһыҙ егет…
– Бик ҡайғырма, Әхмәт, мал юҡҡа.
– Әйтсе, Миңьян, һиңә ни түләрмен?
– Миңә ярай көмөш ҡамыт та.
– Әйтсе, Миңьян, ул бит Сәлмән малы?
– Юҡ, һин тапҡан уны, Ҡоләхмәт…
Ә өс көндән Сәлмән ат ектергән,
Ҡамыт табылмаған келәттән.

**5**

Тоймағандар, Әхмәт һағынып көткән
Миңьянының тағы ла килеүен,
– Былай булғас, ғаиләм асыҡмаҫ, – тип
Бөтәйткән ул үҙенең күңелен.
Йырлаған ул:
– Юҡһа батрактарға
Байығыу ҡайҙа, әйтсе, әсәй? – тип.
Миңьян килгән.
                    Тағы ла:
                            «сәй-шәкәрлек…»
Алмашына шыуған баса тун.

**6**

Эште һиҙгәс, хужа һөрән һалған:
– Бур Әхмәтте тиҙерәк тотоң! – тип.
Кем етешһен?
                Әхмәт киткән юлда
Ҡалған бары туҙан болото.

**7**

Йүгерек бурыл менән Әхмәт ҡасҡас,
Томан баҫҡан күҙен Гөлнурҙың,
Гөлнур тиһәң – Сәлмән батрачкаһы,
Ә Әхмәттең һөйгән ҡыҙы ул.

## 8

Һуңынан Әхмәт илгә ҡайтҡан һайын,
Йүгән кейгән ҡашҡа, ерәндәр,
Ә һуң Миңьян?
Һаман Әхмәт «дуҫтан»
«Төнгө малдар» уға кергәндәр...

## 9

Революция ҡырҡҡан Миңьян тамырын,
Ә нэп яңынан аҙыраҡ терелткән,
Өс көн эсһә уның подвалында,
Әхмәт өсөн аҙаҡ шул еткән.

Әхмәт белә Миңьян ҡушыуынса
Күп йоҙаҡты ватып кергәнен,
– Йәшәү юлын Миңьян күрһәтте, – тип
Шатланған ул, һыҡтап йөрөгән ул.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Бүлекте тасуири уҡығыҙ.
**2.** Әхмәт һәм Миңьян образдарына характеристика бирегеҙ.
**3.** Ни өсөн Әхмәт бурлыҡ юлына баҫа? Сәбәбен аңлатығыҙ.
**4.** «Төнгө мал» тигәндә нисек аңлайһығыҙ?
**5.** Миңьян Әхмәткә ниндәй яңы исем бирә? Шул урынды текстан табып уҡығыҙ һәм аңлатығыҙ.

## Дүртенсе бүлек

## 1

Иҙел яры шыңшый...
Урманында
Төн бөркөтө ҡанат ҡағалыр.
Урман, беләһеңме,
бөгөн төндә
Ҡайһы һуҡмаҡ буйлап ҡан ағыр?
Әхмәт бөгөн ҡай һуҡмаҡтан уҙыр,
Ҡай һуҡмаҡта уның бурылы?
Беләһеңдер
Әхмәт дуҫтарының
Ҡайһы урында көтөп тororон...

Юҡ, ҡурҡмай уҙ бөгөн был урмандан,
Телгеләнмәҫ йөрәк тамырың,
Ҡурҡма,
        бөгөн Әхмәт сыға алмаҫ,
Үҙен баҫҡан уның ауыр уй…

**2**

Ул, бурылдың ялын һыйпай-һыйпай,
Күҙҙәренә ҡарап моңайҙы:
– Их, бурылҡай, беҙҙең юл алыҫ шул;
Тик тар һаман урман, туғайлыҡ.
– Ҡош ҡанатҡайҙары ҡат-ҡат микән?
– Ир ҡанатҡайҙары ат микән?
Әйтсе, бурыл, әйтсе, үҙ илдәре
Һәр кемгә лә шулай ят микән?
– Бурылҡайым, мин бит яҡшы инем,
Эш эшләнем, түктем тиремде.
Мин уйланым таяу табырмын, тип,
Һөйәтергә емерек өйөмдө.
– Бурылҡайым, белә инемме мин,
Миңьян өйрәтмәһә, бур юлын?
Был юл өсөн уны маҡтайыммы,
Һыҡтайыммы? Әйтсе, бурылым?..
– Их, бурылҡай, аҙмы төн йөрөмәнем,
Аҙмы сытырҙарҙы тапаным?
Аҙмы юлдар кистем һинең менән,
Аҙмы һуҡмаҡтарҙан сапманым?
Аҡ шоңҡарҙар булып османыҡмы
Был урманда бөтә аранан?
Әйтсе, бурыл, әйтсе, йәшәр өсөн
Ҡайһы һуҡмаҡ менән баралар?..
– Ниңә һүҙ тапмайһың, бурылҡайым,
Һөйләмәйһең ниҙәр булырын.
Их, нишләйем, телең юҡ шул һинең…
Һөйләй алмайһың һин, бурылым.
– Һөйләй алмайһың һин,
                    ә ҡулыма
Күҙҙәреңдән йәшең түгелде.
Туҡта,
        нишләп үҙ керпегем дымлы,
Был үҙемдең йәшем түгелме?..

## 3

Әхмәт унан йүгерек бурылҡайын
Бәйләгән дә кәкре тирәккә,
Ысыҡлы үләндәргә һуҙылып ятҡан,
Күҙен терәп тәрән, киң күккә.
Йөрәгенән ауыр уйға сумып,
Алыҫ-алыҫтарға ҡараған:
Күктә йондоҙ,
                ерҙә йүгерек бурыл,
Ә тирәлә торған ҡарағай.

## 4

Әхмәт йөрөгән ҡара урмандарҙа,
Япраҡ менән баҫырып эҙҙәрен,
Ул ауылға һағынып ҡайтыр булған
Һөйгән ҡыҙы Гөлнур күҙҙәрен.
Күккә ҡарап ятҡан,
                                йондоҙҙарҙан
Йылмайыуын тапҡан Гөлнурҙың,
Юҡ, Гөлнурға түгел,
                                бриллиантҡа
Оҡшатҡан ул Зөһрә йондоҙон.
Һәр бер йондоҙ уның күҙҙәренә
Оҡшап тамған алтын, көмөшкә,
Һәм шуларҙан һәр төн хыялында
Ҙур һарайҙар һала керешкән.

## 5

Көндөҙ күргән атҡа таңдан элек
Кейҙерһә лә үҙенең нуҡтаһын,
Төн эсендә аҡса һандығының
Ҡалдырһа ла ватыҡ тотҡаһын, –
Алалмаған йондоҙҙарҙы фәҡәт,
Улар һаман күктә ҡалғандар.
Улар һәр төн күңел ҡытыҡлатып,
Таңға саҡлы балҡып янғандар.

### Фонохрестоматия

Актёр башҡарыуында өҙөк тыңлағыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Бөгөн ни өсөн Әхмәт үҙ кәсебенә сыға алмай?
**2.** Ни өсөн Әхмәт борсоулы уйҙарға бирелә, ниңә уға үҙ иле ят?
**3.** Уның «Әйтсе, бурыл, әйтсе, йәшәр өсөн ҡайһы һуҡмаҡ менән баралар?..» тигән һорауын нисек аңлайһығыҙ?
**4.** Әхмәтте бурлыҡҡа кем өйрәткән була?
**5.** Ни өсөн Әхмәттең күҙ йәштәре түгелә, сәбәптәрен әйтегеҙ.

## Бишенсе бүлек

### 1

Әхмәт йөрәгенән кешелекте
Тапҡан фәҡәт Гөлнур күңеле,
Ул яратҡан уны тик яңғыҙы,
Вәғәҙә итеп бөтә ғүмерен.
Шаңдаҡтарға ҡояш нуры һеңеп,
Тынлыҡ алһа урман эстәрен,
Һалҡынсалы һауа ҡосаҡлаһа
Яҙ көнөнөң матур кистәрен,
Ултырған да Гөлнур тәҙрә төпкә
Әхмәткәйен көткән тау яҡтан,
Әхмәткәйен көткән тау һыртынан,
Әхмәт түгел, бары ай ҡалҡҡан.
«Ниңә һәр төн Әхмәт ҡайтмай икән,
Һәр төн сыға торған ай кеүек?»
Һәр төн күктә мең-мең йондоҙ балҡый,
Тик ул күктә Әхмәт күҙе юҡ.

### 2

Әхмәт йөрөгән һаман урмандарҙа,
Гөлнур көткән уны ауылда,
Көндәр үткән...
                    Гөлдәр сәскә ҡойған,
Еләк бешкән Ҡасҡын тауында.

**3**

Ә бер саҡты, ҡапыл таң алдынан,
Елме, кемдер тәҙрә шаҡыған,
Гөлнур сыҡҡан…
Тышта ай булмаған…
Айҙай, Әхмәт баҫҡан ҡаршына.

**4**

Эҫе ҡосаҡтарҙа бер минутҡа
Юғалтҡандар улар уйҙарын,
Береһе һиҙгән батыр егет барын,
Береһе – фәҡәт матур ҡыҙ барын.
«Шылтыр, шылтыр…»
Тауҙан шишмә төшкән,
Һауа тулған сирень тәменә,
Әллә нисек бигерәк шундай төндәр:
Үҙе моңло, үҙе йәмле лә…
Шылтыр шишмә кеүек тынлыҡ боҙған
Осрашҡанда ҡайнар ирендәр.
Ниңә бик-бик матур була икән
Сәскә атҡан саҡта сирендәр…
Аҡрын ғына һайрап таң ҡоштары
Ҡушылғандар улар серенә,
Тик йондоҙҙар, оялып күҙ йомғандай,
Бер-бер артлы ағарып һүрелгән.

**5**

Был осрашыу
ике йәш күңелдә
Иң матур һәм ауыр таң булған,
Матур – сөнки улар осрашҡандар,
Ауыр – улар мәңге айырылған.
Әхмәт был осрашыуҙа үҙе менән
Алып китмәк булған Гөлнурҙы,
Гөлнур был осрашыуҙа Әхмәтенә:
– Ауылда ҡал, – тигән өҙөлөп.

**6**

Бурлыҡ һөйөүен, ахыры, еңә алмаған
Гөлдәй ҡыҙҙың ҡайнар хисе лә:

– Юҡ, ҡалмайым... – тигән һәм дә өҫтәп,
Һөйә-һөйә Гөлнур сәсенән:
– Шоңҡар ятып тынмаҫ ояларҙа...
Шоңҡар осор урман, далала! –
Тигән Әхмәт,
башҡа һүҙ әйтмәгән,
Тик керпеген ергә ҡаҙаған.

### 7

Әхмәт киткән...
Уға онотмаҫҡа,
Төшөрһөн тип һәр саҡ иҫенә,
Йәшкә мансып, ҡыҙы яулыҡ биргән,
«Гөлнур» һүҙен сигеп ситенә.
Әхмәт киткән...
Бергә яулыҡ киткән.
Гөлнур ҡалған, ауыр уй ҡалған...
Ҡояш тыуғас,
Гөлнур керпегенән
Һәм үләндән йылтырап һыу тамған...

**?** **Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Бүлекте тасуири уҡығыҙ.
**2.** Гөлнур менән Әхмәттең мөхәббәте тураһында һөйләгеҙ. Гөлнурға ҡылыҡһырлама бирегеҙ.

## Алтынсы бүлек

### 1

Әкиәтебеҙ шул урынға еткәс,
Беҙгә табан боролоп тиҙ генә:
– Яулыҡ?.. – тине ҡапыл архитектор,
Низер сыҡҡан үҙенең йөҙөнә.
– Эйе, яулыҡ... ни бар, архитектор?
Өндәшмәне, үҙе һуңынан:
– Былай ғына... – тине,
үҙе тағы
Линейкаһын алды ҡулына.

Бер аҙ тындыҡ.
                    Иптәш архитектор
Тағы ла чертёж һыҙа ултыра,
Кочегарҙар – күмер...
                              Әкиәтсебеҙ
Инде төрөпкәһен тултыра.

## 2

– Ә һуң аҙаҡ Әхмәт ҡайҙа киткән?
– Әйтә алмайым, – тине, – бүтәнен,
Тик ана шул сиккән ал яулыҡҡа
Бер ораштҡан мәлде өҫтәйем.
– Бынан күп йыл элек Урал аша
Бер поезда китеп барабыҙ.
Талғын күтәрелгән ҡараңғы төн
Тәҙрәләрҙән эскә ҡараны...
Тышта һалҡын, күҙгә ел ҡотора.
Тәҙрә шаҡый ямғыр бөртөгө,
Ауыр тынлыҡ һаҡлап, пассажирҙар
Йоҡлап бара ине эркелеп.
Бер мәл уң яҡ ситтә тауыш ҡупты,
Йөрәк өҙөп кемдер аҡырҙы,
Илау, һыҡтау китте,
                              пассажирҙар
Йүгерҙеләр шунда ашығып.

## 3

Беҙ аңланыҡ:
                    унда бер юлбаҫар
Бер кешене ярым үлтергән.
Унан, ике сумаҙанды алып,
Вагон тәҙрәһенән һикергән.
Аҫ полкала
Ярты үлек ята,
Ҡаны ағып төшкән иҙәнгә.
Үҙе һаман:
– Әхмәт сволочь, – тип, –
Үсен алды ул... – тип тиргәнә.
Был яралы – Миңьян булып сыҡты,

Ташкент яғына уҙып барған ул.
Ә Әхмәтте тиһең?
Мин белмәйем,
Теремелер,
бөгөн ҡайҙалыр.

## Етенсе бүлек

### 1

Ниҙер һорарға тип, мин тағы ла
Агрономға табан һуҙылдым,
Тағы ла чертёжниктың һалҡын ғына
Күҙ ташлауы булде һүҙемде.
Йомшаҡ ҡына итеп
өндәште ул:
– Иҫке ҡылдан, – тине, – йырығыҙ…
Һеҙ әйтегеҙ әле, мин төшәсәк
Пристандә ҡасан булырбыҙ?.. –
Үҙе торҙо, ярға күҙ ташланы,
Бер ултырҙы, тағы ла бер йөрөп,
Унан чертёждарын йәйҙе,
Хикәйәне тамам бүлдереп.
Һөйләп бирҙе:
– Бына әйтегеҙ, – ти, –
Был чертёждың ние килмәүен…
(Ни тигәндер иптәш агрономым,
Миңә тиһәң, бер ни белмәйем…)
Экиәт бөттө,
иптәш архитектор
Тағы ла өҫтәленә ултыра.
Мин диванға ятам,
Экиәтсебеҙ
Төрөпкәһен яңынан тултыра…

### 2

Ятам. Уйҙарымды төтөн итеп,
Архитектор йөҙөнә ураным:
– Ә ниңә ул беҙҙең экиәтте өҙҙө,
Ниңә борсоу унын сырайы?

Ул Әхмәтте белә түгелме икән,
Таныш түгелме икән был исем?
Юҡ, түгелдер!
Ниндәй уртаҡлыҡ бар
Архитектор менән бур өсөн?

? **Һорауҙар һәм эштәр**

1. Миңьянды кем яралаған тип уйлайһығыҙ? Ни өсөн?
2. Был ваҡиға Әхмәттең тормошонда ниндәй роль уйнай?
3. Ни өсөн архитектор кинәт тынып ҡала?

## Һигеҙенсе бүлек

### 1

Иҙел арьяғына ҡояш сумды,
Төн ҡалҡынды ярҙар аҫтынан,
Пристандер, ахыры,
пассажирҙар
Палубаға сығып баҫтылар.
Беләһе бар ине, улар бына
Яҡындары янына етәлер,
Берәүҙәрен әсәй, аталары,
Берәүҙәрен йәре көтәлер.
Нимәһе бар –
үбешеп күрешерҙәр...
Ана, ҡара, һыуҙың йөҙөнә:
Мине ҡаршыларға пристандең
Уты ғына төштө Иҙелгә.

### 2

Ошо пристандә хушлаштыҡ беҙ,
Архитектор ҡалды айырылып,
Тик беҙ уйламаныҡ
уның менән
Ҙур үкенес тороп ҡалыр тип.
Әллә нисек булды был айырылыу,
Әллә нисек шул кис йөрөгәндәр,
Әлдә онотолмаған ул хистәрем,
Күҙ алдымда һаман күргәндәр.

### 3

Шулай, архитектор ҡалмаҡ булғас,
Пристангә төштөк оҙатып,
Һәм пароход әле киткәнсе тип,
Беҙ һөйләшеп йөрөнөк оҙаҡ уҡ.
Күп йөрөгәнбеҙ, ахыры,
йыуан торба
Толомон ҡағып тағы ла сәс тарай,
Китәбеҙҙер…
Һәм дә һуңғы билет
Һатыла ине был саҡ кассала.

### 4

Архитектор менән ҡул ҡыҫышып,
Беҙ ҙә палубаға боролғас,
Беҙҙең юлды киҫеп, пристангә
Түбән төшкән Иҙел ярынан
Кемдер берәү автомобиль менән
Ҡаршыбыҙға килеп туҡтаны,
Һәм беҙ күрҙек шунда кабинанан
Бер йәш кенә ҡатын сыҡҡанын.
Беҙ уйланыҡ, бәлкем, автомобиль
Архитектор өсөн килгәндер,
Түгел икән,
теге йәш ҡатынды
Оҙатырға ғына килгән ул.

### 5

Ҡатын ашығып касса янына китте,
Тик яңғыҙы ҡалды шофёры,
Һүҙ өндәште уға архитектор,
Баштан-аяҡ күҙҙән кисереп.
– Беҙ совхоздан, – тине шофёр уға.
– Ә ҡатын кем?
– Беҙҙең помполит.
Һәм дә кире килгән йәш ҡатынға
Текләнделәр күҙҙәр, тын ҡалып.

Урта буйлы ҡатын,
ә сәсенән
Иҙел еле һөйә туҙғытып,
Аҙыраҡ күләгәләп бит-йөҙөнә
Сағылып төштө төнгө һорғолт ут.
– Һуңлағанбыҙ… – тине.
Үҙе кинәт
Сигенеп китте,
артҡа эткәндәй,
Беҙ агроном менән һүҙһеҙ ҡалдыҡ,
Аңламаныҡ нимә тиһәк тә.
Иптәш архитектор, белмәйһеңме,
Ҡатын нишләп артҡа сигенде?
Белмәйһеңме?
Туҡта!
Һин үҙең дә
Ҡурҡып ағарындың түгелме?
Туҡта,
нишләп сумаҙаның ҡуйҙың,
Талдырҙымы әллә ҡулыңды?
Сеү, ел ана…
Тиҙерәк йый чертёжың,
Тиҙерәк, иптәш,
тиҙерәк бул инде!
Гудок һауа телде,
ә кәүҙәләр
Бер-беренә ауып төштөләр,
Гудок менән:
– Гөлнур?!
– Әхмәт?! – тигән
Өн тулҡынды Иҙел өҫтөндә…

## 6

«Сеү, нисек һуң былай?..»
Беҙ уларҙың
Айырылыуын көттөк… ҡарашып.
Улар айырылманы,
ярҙан айырып
Алып китте беҙҙе пароход…

Әллә нисек…
Күңел кителеп ҡалды,
Ә күҙҙәрҙә һаман яр яғы,
Пристань дә, беҙҙән үс алғандай,
Елберләтеп ҡалды байрағын…

## Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Ни өсөн автор архитектор менән айырылышыуҙы ҙур үкенес булып ҡалыр тип уйлай?
**2.** Машинала килгән помполит ҡатынды һеҙ танынығыҙмы?
**3.** Архитектор ни өсөн пристандә тороп ҡала? Ул кем менән осраша?
**4.** Поэма ни өсөн «Шоңҡар» тип исемләнгән?
**5.** «Шоңҡар» поэмаһынан өҙөк ятлағыҙ (уҡытыусының һайлауы буйынса).



Баязит
# БИКБАЙ
**(1909–1968)**

Баязит Бикбай – шиғриәттә лә, прозала ла, драматургияла ла берҙәй актив эшләп, башҡорт әҙәбиәте үҫешенә ҙур өлөш индергән яҙыусыларҙың береһе. Ул башҡорт сәхнәһен музыкаль комедия, либретто кеүек жанрҙар менән байытты.

Баязит Бикбай (Баязит Ғаяз улы Бикбаев) Күмертау (хәҙерге Көйөргәҙе) районы Ҡалта ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуған. Баязит, атаһы империалистик һуғышҡа киткәс, олатаһы һәм өләсәһендә тәрбиәләнә. Экиәт, бәйеттәр һандығы булған һүҙгә маһир олатаһы Шәрәфи һәм өләсәһе Һылыуҡай Баязитҡа бала сағында хазина булып, әҙәби зауыҡ тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнаған.

1919 йылда Баязит Яңы Мораптал мәктәбенә уҡырға йөрөй башлай. Ташлы профессиональ-техник мәктәбендә уҡый, комсомол сафына алына. 1923 йылда Ырымбурҙағы Башҡорт педагогия техникумына уҡырға инә.

1928 йылда педтехникумды тамамлай һәм Өфөгә күсеп килә. Өфөлә Б. Бикбай «Белем» (хәҙерге «Башҡортостан уҡытыусыһы»), «Сәсән» журналдарында, «Совет Башҡортостаны» редакцияһында эшләй. Тап ошо йылдар – уның әҙәбиәткә килеү осоро.

Утыҙынсы йылдарҙа башҡорт ауылдарында барған күмәк хужалыҡтар ойоштороу ваҡиғаларында яҙыусылар туранан-тура ҡатнаша. А. Карнай, Ғ. Сәләм һ. б. бик күп әҙиптәр һымаҡ уҡ Б. Бикбай ҙа колхоздар ойоштороуҙа ҡатнашып йөрөй, 1930–1931 йылдарҙа Туймазы яҡтарында «Ленин юлы» гәзитендә эшләй.

Баязит Бикбай ижадының күтәрелеп китеүе 30-сы йылдарға тура килә. Был осор колхозлашыу хәрәкәте, биш йыллыҡ төҙөлөш йылдары йәнләнгән саҡ була. 30-сы йылдарҙың аҙағында ул «Ер» поэмаһын, «Ҡарлуғас» драмаһын ижад итә. Һуғыштан һуң «Салауат» драмаһын, «Аҡселән ташҡанда» романын, бер нисә опера либреттоларын яҙа.

Б. Бикбай әҙәбиәт өлкәһендә күрһәткән хеҙмәттәре өсөн «Почёт Билдәһе» һәм Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары менән бүләкләнде, уға Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре тигән маҡтаулы исемдәр бирелде.

## ЕР

*(Поэманан өҙөк)*

### 1

Башҡортостан тәне ҡара янған
Меңәрләгән ҡамсы эҙенән.
Беҙҙең ҡанды әгәр бергә йыйһаң,
Ҡыҙылайыр ине диңгеҙҙәр.
Батша итегенең ауырлығын
Икеләтә иңдә татыныҡ,
Урыҫ байы теҙгә йөгөндөрһә,
Башҡорт байы ергә яҭҡырҙы...
Үткәндәрҙең һәр бер көнөнән дә
Илау тауышы яңғырай бик ауыр.
Әйтерһең дә, илай миллион ҡолдар,
Әйтерһең дә, һыҡтай мең ауыл.
Ил иланы.
Ҡара ер иланы...
Иламаған ярлы ҡалманы,
Улар зары, ҡурай моңо булып,
Яңғыратты Урал тауҙарын.
Ҡыҙҙар иланылар:
– Әйтсе!
Ниңә, әсәм, мине тыуҙырҙың,
Ниңә сәсем ярып тараның?

Ниңә инде мине, тыуғас та,
Ағын һыуға бәйләп һалманың?!
Илебеҙҙе яу талай,
Йөрәктәргә ҡан һауа.
Дошман уты тоҡанды,
Ил үртәлә, ил яна.
Ерҙе талап алдылар,
Ерҙе алдап алдылар.
Ерҙән яҙған ярлылар
Ҡаҡ сағылда ҡалдылар.
Батшаға баш эймәгеҙ, атаҡай!
Ҡоллоҡ бауы киймәгеҙ, әсәкәй!
Баярға ер бирмәгеҙ,
Атаҡай,
Әсәкәй,
Ау!..
Егет янды:
– Сеүсе, һылыу…
Ярабыҙ ҙур, бик ауыр.
Йәш түкмәсе үртәлеп,
Ҡайнар йәш булмаҫ дарыу.
Атҡан уғым ярһа таштарҙы,
Сапҡан ҡылысым өҙһә тимерҙе,
Ҡотҡарыр ҙа инем мин һине.
Ҡотҡарыр ҙа инем мин ерҙе!
Ер һыҡтаны:
– Ауыр миңә…
Һыуҙар ҡорой,
Тау ваталар, урман ҡырҡалар,
Ҡайҙа миндә тыуған батырҙар,
Ниңә сыҡмай, ниҙән ҡурҡалар?!
Батырша ла мине ҡотҡарманы,
Ҡараһаҡал яуҙы ҡырманы,
Эй, Салауат, батыр Салауат…
Егет булһаң, һаҡла ер данын!
Уралым бейек.
Иҙелем тәрән.
Урманым ҡалын…
Була тик әрәм!
Уралдай ҡалҡығыҙ,
Урмандай шаулағыҙ,

Үҙ өсөн тормошто
Үҙегеҙ даулағыҙ!
Һеҙҙең бығауҙы
Башҡалар сисмәҫ,
Күктән көтмәгеҙ,
Бәхет тик килмәҫ!

**2**

Атҡан уҡтай атылды Салауат,
Ҡарсығалай талпынды Салауат,
Баярҙарға ут һалды Салауат,
Түрәләрҙең ҡотон алды Салауат.
Батыр йөрәге
Үс менән янды,
Батыр теләге
Үрт менән ҡанды.
Батыр булһа ла,
Көсһөҙ ине ул.
Томанлы ине
Барып сығыр юл!
Байҙы туйындырған ғарыҡкансы,
Тик үҙҙәре асҡа тилмергән.
Уландары бөгөн
Ауылдарҙан
Имениеға килде тағы ла,
Эш һорарға түгел,
Ҡорал тотоп,
Ерен, һыуын тартып алырға!

* * *

Блокаданы,
Аслыҡтарҙы еңдек.
Эске дошман емерә алманы,
Аҫыл ғүмерҙәрҙе бирә-бирә,
Республика йәшәү дауланы.
Һүнгән уттар ҡабат тоҡандылар.
Һалҡын сыбыҡтарҙан ток аҡты,
Бураҙнала ҡалған һабандар ҙа
Төрәндәрҙең тутын юғалтты.

Паровоздар сапты тимер юлдан,
Пароходтар рейс башланы,
Үлән сыҡты (йәшел үлән!),
Ер һуланы, тәрән шатланып.
Нигеҙләнде өлкән ҡалалар,
Самолёттар сыҡты һауаға.
Ишек асты яңы больницалар,
Мәктәптәргә тулды балалар.
Йәшәү килде,
Татлы, матур йәшәү.
Ас өйҙәргә ҡояш һыйынды.
Ауыр яраларҙы уңалтҡандай,
Бер-бер онотолдо ҡыйынлыҡ.
Ҡандарыбыҙ һеңгән тыуған ерҙе
Йәнебеҙ кеүек яҡын күрәбеҙ,
Яратабыҙ уны,
ҡәҙерләйбеҙ
Һәм дошманға бер саҡ бирмәбеҙ!

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Поэманы тасуири уҡып сығығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Ил азатлығы өсөн көрәшкән батырҙарҙың исемдәре һәм әҫәрҙә телгә алынған ваҡиғалар буйынса ҡайһы осорҙар тураһында һүҙ барғанын билдәләгеҙ.
**2.** Ни өсөн поэмала башҡа батырҙар менән сағыштырғанда Салауатҡа күберәк урын бирелгән?
**3.** Әҫәрҙең тулы тексын табып уҡығыҙ, уны өлөштәргә бүлеп, һәр ҡайһыһына исем бирегеҙ.
**4.** Поэманың 1-се бүлегенән өҙөк ятлағыҙ (уҡытыусы һайлауы буйынса).

## ҠАҺЫМ ТҮРӘ

*(Драманан өҙөк)*

ҠАТНАШАЛАР:

Ҡаһым түрә – атлы полк командиры, полковник
Сафия – уның ҡатыны
Семёнов – корпус командиры, генерал
Аҡназар – Ҡаһымдың ярҙамсыһы
Ҡобора – уның ҡатыны
Әүбәкер – уларҙың улдары
Байыҡ – сотник, сәсән
Аҫылбикә – мәргән ҡыҙ
Садыҡай, Аҡйегет, Биҡәт, Ҡолтүбә – йөҙ башлыҡтары
Фольгнер – штаб начальнигы, майор
Ядкәр – Ҡаһымдың ординарецы
Егор – гусар
Иван, Архип – крәҫтиәндәр
Гөлнур – ҡыҙыҡай
Сабырғол – ауыл кешеһе
Мәрҙән – ауыл кешеһе
Иркәбай – рядовой
Капрал – француз
Гренадёр – ҡарт француз
Һалдаттар, крәҫтиәндәр, адъютанттар

Ваҡиға 1812–1813 йылдарҙа бара.

### БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

### Беренсе күренеш

Беренсе шаршау асылғанда, һыу буйында урынлашҡан лагерҙа һалдаттар йыуыналар, аш әҙерләйҙәр. Ядкәр Егорҙы ҡаҙы, ҡымыҙ менән һыйлай. Ҡалҡыулыҡта Ҡолтүбә менән Фольгнер ҡыҙып-ҡыҙып һөйләшәләр. Фольгнерға ҡарата Егор Рәсәйҙә хәрби хеҙмәттәге пруссактарҙың халыҡ менән насар мөнәсәбәттә булыуы тураһында, улар «юҡтан-барҙан ғәйеп таба һинән, әрләй, таяҡ һуҡ-

тыра. Уларға беҙҙең брат нимә лә, Рәсәй нимә, – ҡаҙалһындар, тик чиндары артһын үҙҙәренең, байыһындар», ти. Артабан Егор үҙенең Кутузовты күреүе тураһында һөйләй. Аҡназарҙың: «Егеттәр, аттарығыҙҙы һуғарығыҙ», – тигән һүҙен ишеткәс, егеттәр таралышалар. Ядкәр, бер ситкәрәк ултырып, ҡурай уйнарға керешә. Әкренләп көй үҙенә тарта, ҡайһы берәүҙәр йырлай башлайҙар:

Яҡшы ла атҡа менеп, ҡулына алып
Уҡ-һаҙаҡ та тигән ҡоралын,
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын!..

Аҡйегет (*нык тулҡынланып*). Эх, булған да ирҙәр!..
Аҡназар. Әйтерең бармы?..
Борон халыҡ булған арыҫлан:
Яуҙа ҡарамаған алдын, артын,
Аҡтыҡ ҡан ҡалғансы алышҡан!..
Аҡйегет. Ә беҙ ҙә бит, ҡулға ҡылыс алып,
Йөрәкһенеп атҡа менгәйнек.
«Француз яуын сыр-сыу ҡырып һалып,
Шат ҡайтырбыҙ илгә!» – тигәйнек...
Нимә ҡырҙыҡ?
Аҡназар. Мырҙам, өмөт өҙмә, танытырбыҙ әле!..
Аҫылбикә (*мыҫҡыллы*). Килмәй ышанғы.
Әгәр ир булһағыҙ, тыуған ергә
Баҫтырмаҫ инегеҙ дошманды!
Бөгөн Мәскәү ана дөрләп яна,
Халыҡ намыҫынан көләләр –
Ишетеү ауыр быны! Йәне барҙа
Ирҙәрме ни шуға түҙгәндәр?!
Юҡ!
Аҡназар. Аҫылбикә, ипләп!
Аҫылбикә. Ха-ха, ауыр, ахыры, хаҡ һүҙ тыңлауы?!
Әйтеп бөтәм, ағай, ҡаршы килмә,
Һеҙҙә намыҫ, ирлек юғалды!
Ир түгел һеҙ, бары – иргәнәктәр,
Һаҡал-мыйыҡ аҫҡан ҡатындар.
Яу сапҡанда, ундайҙар кәрәкмәй,
Ботон һуҙып өйҙә ятһындар! –

тип армияның сигенеүенә ризаһыҙлыҡ күрһәтә. Үҙенең Тыуған илен һөйөүен белдереп, ул:

Илгә ауыр көндәр килгән саҡта,
Башҡорт ҡыҙы борон замандан,
Ҡулына ҡорал алып, менгән атҡа,
Ирҙәрҙән бер тотам ҡалмаған.
Мин – яу ҡыҙы! –

ти. Бер аҙҙан улар сығып китәләр. Сәхнә буш ҡала. Аҡназар, Биҡәт, Ядкәр, Садыҡайҙар ике әсир француз һалдатын алып керәләр. Ядкәр уларҙан киң күңеллелек менән «пардондар» тип көлә, французлар башҡорттарҙы «төньяҡ амурҙары» тип атайҙар, ти. Улар сығып киткәс, Фольгнер менән Ҡолтүбә инә. Фольгнер Ҡолтүбәгә: «Ҡаһым мужиктарға ҡорал бирә, пленный французларҙы ҡәҙерләй, гел үҙ белдегенсә эш күрә, ниндәйҙер мәкерле эш әҙерләй, уны тиҙҙән эшенән алырҙар, унан инде полкка һин хужа. Ҡаһымға күҙ-ҡолаҡ бул. Ҡаһымдың икенсе Салауат булыуы бик мөмкин», – ти. Унан һуң Байыҡ һәм башҡалар инә. Байыҡ үҙенең Кутузов менән осрашыуы тураһында һөйләй.

Ҡаһым, сығып: «Тыңлағыҙ приказымды: хәҙер үк һыбайланырға, поход башлайбыҙ!» – ти. Аҡйегеттең «Мәскәүгәме, түрә?» тигән һорауына: «Юҡ. Коломна юлына табан!» – тип яуап бирә.

Шаршау

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Беренсе күренештә һалдаттар нимә тураһында һүҙ алып бара?
**2.** Фольгнер менән Ҡолтүбә Ҡаһым түрә хаҡында ниндәй ғәйбәт һөйләй?
**3.** Ҡаһым түрәнең телмәренә иғтибар итеп, уға ҡылыҡһырлама бирегеҙ.
**4.** Ҡолтүбә, Фольгнер кеүек персонаждарҙың Ҡаһым түрәгә мөнәсәбәтен нисек аңлатырһығыҙ?
**5.** 1812 йылғы Ватан һуғышы ваҡытында Байыҡ сәсән йөҙ йәштән ашҡан ҡарт була, был һуғышта ул ҡатнашмай. Автор уның образын әҫәргә ни өсөн индергән тип уйлайһығыҙ?

## ИКЕНСЕ ШАРШАУ

## Беренсе күренеш

Икенсе шаршау асылғанда, Ҡаһым түрә егеттәре һуғышҡа әҙерләнә. «Любизар» йыры яңғырай. Бер аҙҙан һуң Аҡназар, Сабырғол, Мәрҙәндәр керә. Мәрҙән: «Беҙҙә ил ебәрҙе. Ватан ҡаһармандарына бүләк итеп 4139 баш менге ат килтерҙек», – ти. Унан һуң рус

крәҫтиәндәре Иван менән Архип ҡорал һорап киләләр. Аҡназар уларға 30 мылтыҡ бирә.

Йүгереп Биҡәт керә.

Биҡәт. Ағай-эне, оло юл буйында йөҙләп һыбай француз күренде! Нимә эшләйбеҙ?

Аҡйегет. Бында оҙаҡ уйлап тораһы юҡ, тоторға ла ҡырып һалырға.

Ҡолтүбә. Билдәле!

Аҡназар. Ашыҡмағыҙ, Ҡаһым түрә ундай приказ бирмәне.

Ҡолтүбә. Бындай саҡта ҡылыс үҙе приказ яҙа.

Аҡйегет. Эйе лә баһа!

Аҡназар. Юҡ, үҙебеҙҙе һиҙҙермәй, уларҙы үткәреп ебәрергә лә, арттарынан тағы башҡа частар килмәһә, һырттарынан төшөп һуғырға!

Байыҡ. Аҡыллы уй.

Ҡолтүбә. Ҡурҡаҡтар аҡылы... Юҡ, егеттәр менән үҙем башлап ташланам.

Аҡназар. Минме ҡурҡаҡ?

Ҡолтүбә. Бер бөгөн түгел инде. Артыҡ һаҡһың, ә үтә һаҡлыҡ үҙе ҡурҡаҡлыҡ!

Аҡназар (*ырғып тора*). Юҡ! Мин күпме яуҙар сабып, ундай насар исем үҙемә таҡманым! (*Бүркен атып бәрә.*) Килтерегеҙ минең атымды!

Ҡолтүбә. Мин үҙем алдан ташланам!

Аҡназар. Юҡ, һин резервта ҡалаһың. Дүрт йөҙ һыбайлы менән үҙем барам! Әҙерләнегеҙ, дуҫтарым!

Тревога борғолары яңғырай. Кешеләр ашығыс йүгерешәләр.

Ҡобора. Аҡназарым, ниңә шул һынлы ярһыйһың, аҡыл менән эш ит.

Аҡназар. Ир намыҫыма тейҙе, сыҙай алмайым! Их, Ҡобора, Ҡаһым түрә менән беҙ күпме һуғыштар күрҙек, ә ундай ҡушамат таҡҡаным юҡ ине. Досатна.

Ҡобора. Ундай ауыр һүҙҙе берәү әйтә бит, халыҡмы ни? Шуның үҙе ни ҙә, һүҙе ни?..

Аҡназар. Ҡуйсы әле, Ҡобора, юҡҡа борсолма. Мин кемлегемде күрһәтермен!

Ҡобора. Мин ышанам, йәнем. Әммә һаҡ бул.

Аҡназар (*көлөп*). Ҡурҡма, бынауындай ул үҫтергән кешегә үлем тейә буламы? (*Әүбәкерҙе ҡосаҡлай.*) Шулай бит, улым?

Әүбәкер. Эйе, атай. Мин дә ҡурҡмайым. Ҡуян ғына ҡурҡа бит ул, эйеме?

Аҡназар. Дөрөҫ, улым! Яҡташтар, иҫән булығыҙ.

Сабырғол. Хәйерле юл, ир арыҫланы.

Ядкәр (*инеп*). Ағай, ат әҙер!

Аҡназар. Егеттәр!

Ҡолтүбә. Мин дә барам!

Аҡназар. Юҡ. Кәрәк булһаң, приказ булыр, әҙер тор!

Ҡолтүбә. Тыңлайым!

Аҡназар. Улым, Ҡобора, борсолмағыҙ... Киттек, егеттәр!

Барыһы ла сығып китә. Сәхнәлә Ҡолтүбә менән Мәрҙән, Сабырғол ғына ҡала. Ат тояҡтары, ҡылыстар сыңлаған тауыштар алыҫлаша.

Ҡолтүбә. Бына шулай инде беҙҙең тормош – бер тынғы юҡ – һуғыш, һуғыш. Йүнләп күргәндәй ҙә булманыҡ, бына саптылар ҙа киттеләр.

Сабырғол. Ярай инде, еңеп ҡайтҡас, маңлай яҙып туя һөйләшербеҙ.

Ҡолтүбә. Ул көндәргә оҙаҡ ҡалманы инде! Мин әйтәм:

Ҡотдос ҡашҡа ир бит ул,
Киң Рәсәйҙә бер бит ул,
Телдән телгә маҡталған,
Үҙенә тиңдәш тапмаған,
Ҡуш йөрәкле ир бит ул!

Мәрҙән. Ҡайһылай шәп әйткәнһең! Сәсәнлек бар икән үҙеңдә...

Ҡолтүбә. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә етмәй. Әле мин...

Ул һүҙен әйтеп бөтә алмай, оран һалып, Егор килеп керә.

Егор. Ядкарка! Ядкарка, һеҙҙә ниндәй тревога был?!

Ҡолтүбә. Ядкәр юҡ, китте. Аҙыраҡ туҙан ҡағабыҙ: юлда йөҙ француз күренгән шунда. Бүстәк!..

Егор. Нимә, французлар?! Төплө разведка яһалдымы? Улар йөҙләп кенә йөрөмәҫ...

Ҡолтүбә. Ҡылыстар, уҡтар эшкә тотонғас, разведканың нимәгә кәрәге бар? Бүстәк. Беҙ былай ҙа...

Егор. Насар, насар...

Егор килгән тиҙлеге менән сығып китә.

Сабырғол. Был ниндәй егет?

Ҡолтүбә. Гусар шунда, күрше полктан... Йөрөй инде...

Мужиктарҙы эйәртеп, Архип менән Иван юлдан үтә башлай. Мужиктар барынса ҡоралланып алғандар.

Мәрҙән. Былар ҡайҙа баралар?

Ҡолтүбә. Бәй, һуғышҡа, эшемде ҡырырҙар инде, сабаталар...

Сабырғол. Улай тимә. Ир хурлама – боҫторор... Халыҡ бит ул – көс!

Ҡолтүбәнең егеттәре берәм-берәм йүгерешеп керә башлайҙар.

Беренсе һалдат. Ҡолтүбә ағай, ярҙамға ташлана һалайыҡ!

Ҡолтүбә. Сапсынма һин, үҙем беләм мин!

Икенсе һалдат. Беҙҙең егеттәргә ҡыҫтауыраҡ, ахыры... Ағай, тиҙерәк ярҙам итәйек!

Ҡолтүбә. Улар әле ярҙам һорамайҙар...

Бер төркөм егеттәр керә.

Барыһы. Ағай, тиҙерәк атҡа менәйек, ваҡыт етте!

Ҡолтүбә. Юҡҡа ҡыҫылмағыҙ, мин эшемде үҙем беләм! Аҡназарҙан приказ булыр, атҡа менербеҙ. Әле ҡурҡырлыҡ бер нәмә юҡ... Иркәбай, килтер әле турһыҡты!

Иркәбай. Мә, ағай! (*Итеккә оҡшатып тегелгән тире турһыҡ бирә.*)

Ҡолтүбә. Ә мөгөҙ ҡайҙа? Ҡой берҙе!

Иркәбай. Бына, ағай! (*Мөгөҙгә турһыҡтан ҡойоп ниндәйҙер шыйыҡса бирә.*)

Ҡолтүбә (*эсеп*). Эх, шәп араҡы!

Сабырғол. Араҡы... эсәһегеҙ?..

Ҡолтүбә. Унан ниндәй ғәйеп? Бата ул беҙгә, һалдатҡа...

Иркәбай тағы бер нисә егеткә ҡойоп бирә.

Иркәбай. Күгәрсен һөтө был, яҡташ, күгәрсен һөтө! Мә, тот әле.

Сабырғол. Ауыҙыма алған нәмә түгел.

Ҡолтүбә. Эсмәй икән, үҙ эше. Бына Мәрҙән ҡорҙашҡа бир.

Мәрҙән. Яҡшы аҙыҡ ҡалғансы, яман ҡорһаҡ ярылһын. (*Эсә.*)

Ҡолтүбә. Эйе лә!.. (*Тағы эсә. Ҡыҙмаса булып ала, маҡтана башлай.*) Минең егеттәр – арыҫландар! Ә мин... мин...

Бер һуғышта төшөп алдым башлап,
Былар бер тотам да ҡалмайҙар.
Һыу кисәләрме ни ҡолас ташлап,
Уңлы-һуллы кирелеп сабалар!..
Ә мин еләм... Былар артта ҡалды...
Урманлыҡҡа барып кергәнмен...
Ун, әй, юҡ, йөҙ француз мине һырып алды,
Эй, аталар... бер ни күрмәйем...
Тотондом урырға! Сыҙа ғына!
Баштар кәбеҫтәләй турала...

Сабырғол. Булмаҫтыр ҙа...

Иркәбай. Эйе, эйе!

Ҡолтүбә. Барлыҡ французлар быны күргәс,
Ҡурҡышынан... телдән яҙҙылар...
Тау ярырҙай итеп мин екергәс,
Барыһы ла ҡоралын һалдылар...

Көлөү. Был көлөүҙәр араһында ышанмай мыҫҡыллауҙар ҙа сағылып ҡала.

Иркәбай. Ҡолтүбә ағай ҡырһа ҡыра инде ул!..

Сабырғол. Ай-һай...

Мәрҙән. Бына бит ул беҙҙең тархан тоҡомо ни эшләтә!

Ҡолтүбә. А как же! Ҡана, тағы берҙе ҡой ҙа йырлап ебәр әле, Иркәбай.

Иркәбай. Була, ағай! (*Араҡы ҡойоп бирә лә йыр башлай.*)
Һай-й...
Ҡаһым түрә менгән кир юрғаның, вай кем,
Маңлайында булыр урайы.
Ҡаһым түрә яуап алған саҡта, вай кем,
Уң ҡулында булыр ҡурайы...

Сабырғол. Ниндәй дан көй! Быны, отоп алып ҡайтып, халыҡ араһында таратырға кәрәк. Ҡаһым көйө!

Иркәбай. Беҙҙә күптән йырлайҙар уны...

Ҡолтүбә. Ҡуйсы әле, минең яратҡан көйҙө һуҙ!

Иркәбай. Булды ғына, ағай, онотоп ебәргәнмен…
Әрмеләрҙә йөрөп сәс үҫтерҙем,
Сәскенәйем етте үрмәгә.
Ризыҡ яҙған булһа, бер ҡайтырбыҙ
Тыуған еркәйҙәрҙе күрмәгә.

Ҡолтүбә (*сигенән сыгып*). Вәй-вәй-вәй!.. (*Шашып бейей башлай.*) Эх, эх!..

Ярһып Аҫылбикә керә.

Аҫылбикә. Оятһыҙҙар, кешеләр унда ҡан ҡоялар, былар бында тамаҡ йыуалар… Тфү! Унда дошман меңләп булып сыҡты… Ярҙамға!

Ҡолтүбә. Приказ юҡ бит, пр-пр…

Аҫылбикә. Аҡназар ағай ҡушты!

Ҡолтүбә. Ҡайҙа яҙыу?.. Мин бисә-сәсә һүҙенә ышанмайым!

Аҫылбикә. Ах, иҫерек баш! Бая ғына: «Ҡылыс үҙе приказ!» – тигән кем ине?

Ҡолтүбә. Кит! Ҡыҙған саҡта кеше ни әйтмәй!

Аҫылбикә. Ә-ә… Мин дә ҡыҙғанмын: мә приказ!

Ҡолтүбәгә ҡамсы менән тарта.

Ҡолтүбә. У-у-у!..

Аҫылбикә. Егеттәр, нимә тораһығыҙ, аттарға!

Ҡаһым менән Фольгнер ашығып килеп керә.

Ҡаһым. Тағы ниндәй шау-шыу? Нимә сыҡһа, Ҡолтүбәнән сығыр, саҡ бер ары китер хәл юҡ…

Ҡолтүбә. Ҡаһым түрә, ҡунаҡтар бар: яҡташтар килделәр.

Ҡаһым. Мин улар менән күрештем.

Аҫылбикә (*алдына текә баҫып*). Ҡаһым ағай, рөхсәт ит?

Ҡаһым. Һөйлә.

Аҫылбикә. Юлда йөҙ һыбайлы дошман күреп һөжүм башлағайныҡ, улар меңләп булып сыҡтылар. Хәл ауыр: Аҡназар яраланып, атынан ҡоланы!

Ҡаһым. Нимә?!

Аҫылбикә. Ә Ҡолтүбә, яҙма приказ юҡ тип, ярҙамға ташланмай…

**Ҡаһым.** Их һеҙ... Хәҙер үк Денис Давыдов отрядына сап, ярҙамға килеп етерҙәр...

**Аҫылбикә.** Тыңлайым! (*Сығып китә.*)

**Ҡаһым** (*Ҡолтүбәнең погондарын өҙөп ташлай*). Бөгөндән һин йөҙ башы түгел!.. Яҡташтар, кисерегеҙ, аҙаҡ һөйләшербеҙ. Майор Фольгнер, уларҙы ҡурҡыныстыҙыраҡ ергә алып кит.

**Фольгнер.** Тыңлайым!

**Ҡаһым.** Әйҙәгеҙ, егеттәр!

Егеттәрҙе эйәртеп сығып китә. Ат тояҡтары оҙаҡ шаҡылдай.

**Фольгнер.** Их сотник, сотник... Ниңә дошман һанын белмәйенсә яуға ташландығыҙ?

**Ҡолтүбә.** Минме ни, Аҡназар үҙе шашынды бит: егетлек күрһәтә, йәнәһе, миҙал алғыһы килгәндер...

**Фольгнер.** Бар, рядовой һалдат булып, үҙеңде яуҙа күрһәт: әле һуң түгел, бәлки, хәлеңде яҡшыртып булыр...

**Ҡолтүбә.** Тыңлайым! (*Сығып китә.*)

### **?** Һорауҙар һәм эштәр

1. Француз яугирҙарының юлда күренеүе һалдаттар араһында ниндәй тойғолар уята?
2. Аҫылбикә ниндәй ҡарарға килә һәм һалдаттарға ниндәй кәңәш бирә?
3. Ҡолтүбә, Аҡназарҙы ғәйепләргә тырышып, һалдаттар араһында ниндәй хәбәр тарата?
4. Ҡаһым Ҡолтүбәнең погондарын өҙөп, уны йөҙ башы булыуҙан алып ташлай. Ҡаһым дөрөҫ эшләйме?

## Икенсе күренеш

Таң атып килә. Кисә һуғыш барған ер. Юлда ватыҡ сана, туп, ат мәйеттәре аунап ята. Артҡы планда ҡәберҙәр. Уларҙы әле ҡар ҙа ҡаплап өлгөрмәгән. Ҡаһым яңғыҙ. Ул төн буйы йөрөп сыҡҡан, йонсоу. Ҡар ҡатыш ваҡ ямғыр һибәләй.

**Ҡаһым.** Барыһы йоҡлай, егеттәр арығандар:
Ҡаты булды һуғыш, бик ҡаты,
Беҙҙән күптәр үлде, ә дошмандар
Икеләтә артыҡ юғалтты.
Аҡназар үлде... Эх, Аҡназар,
Уң ҡанатым минең, ҡанатым,

Алдында ҡалтырай ине яуҙар,
Әрәм булдың, һаҡлай алманым.
Бына таң да ата, ә мин һаман,
Балаһын юғалтҡан аталай,
Керпек тә ҡаҡмай, уйланам...

Әкрен генә мөгөҙ ҡысҡыртҡан тауыш. Ҡаһым шул яҡҡа табан сығып китә. Иртәнге йәнлелек башлана. Ҡолтүбә менән Иркәбай инә.

Ҡолтүбә (*бойоҡ*). Ахыры, Ҡаһым түрә кисәге алабарманлыҡ өсөн ҡыҙҙырырға самалап торғандыр, бик иртә саҡыртҡан.

Иркәбай. Барҙыр инде...

Ҡолтүбә. Минең турала тағы нимәләр әйтте ул?

Иркәбай. Бик ҡыҙған. Бәхете, яҡташтар булды, юғиһә мин ул тарханды шунда уҡ атыр инем, ти!

Ҡолтүбә. Булыр унан... Иманы юҡ! (*Фольгнер килгәнен күреп.*) Хәйерле иртә, майор әфәнде...

Фольгнер (*иғтибарһыҙ*). Ә-ә... Гутен таг...

Ҡолтүбә. Иртә, майор әфәнде.

Фольгнер. Ә һин һуңға ҡалаһың!

Ҡолтүбә. Аңламайым, майор әфәнде.

Фольгнер. Бына хәҙер Ҡаһым аңлатыр, мунса керетергә саҡырта бит!

Ҡолтүбә. Ә-ә... Ул үҙе лә әллә ҡайҙа бармаҫ: кисә уның ҡушыуы буйынса Аҡназар мужиктарға тағы утыҙ мылтыҡ бирҙе.

Фольгнер. Әһә. Шунан, шунан?

Ҡолтүбә. Ҡаһым әйткән: әйҙә ҡоралланһындар, француздарҙы еңгәс, улар ҡоралды батшаға ҡаршы күтәрерҙәр...

Фольгнер. Тимәк, тағы Салауатка булырға теләй?! Так, так... Ләкин Аҡназар үлгән бит, мәйеттәр шаһит була алмайҙар.

Ҡолтүбә. Ул үлһә, бына мин бар!

Фольгнер. Был һүҙҙәрҙе миңә яҙып бир. Мин уны корпус штабына ебәрәһе рапортыма беркетермен.

Ҡолтүбә. Ике ҡуллап, майор әфәнде! Унан Ҡаһым...

Фольгнер. Шаулама!..

Ҡаһым артынан китәләр. Аҡлан. Яралы бер егет мөгөҙ ҡысҡыртып ултыра. Яу ҡырынан яралылар берәм-берәм үрмәләп киләләр. Араларында Аҡйегет тә бар. Ҡаһым әкрен генә улар янына килә.

Ҡаһым. О, Аҡйегет! Яраң ҡатымы?

Аҡйегет (*көсәнеп кенә*). Туйға саҡлы төҙәлер...

Ҡаһым. Их, дыуамаллыҡ бына нимәгә еткерҙе. Берегеҙ аҡһаҡ, икенсегеҙ туҡһаҡ... Мин һеҙҙең менән нимә эшләрмен инде, егеттәр?

Аҡйегет. Аҡһаҡ булһаҡ, атта дүрт тояҡ бар. Ә беҙҙең ҡулдар иҫән, бирешмәбеҙ!

Ҡаһым. Молодец! Мин һине, ҡустым, Аҡназар урынына үҙемә ярҙамсы итеп алам.

Аҡйегет. Миңә ул эш әле иртәрәк...

Ҡаһым. Иртә түгел, ҡустым, беләм һине!

Тик үҙеңде бер аҙ ҡулға ал,
Күкрәк кереп һуғышыр саҡтар килде,
Элеккеләй булма дыуамал!

Аҡйегет. Аңланым!

Ҡаһым. Барығыҙ, егеттәр, ярағыҙҙы бәйләгеҙ, дауаланығыҙ.

Аҡйегет. Тик, түрә, егеттәрҙе лазаретҡа ебәртмә!

Йәш һалдат. Беҙ һә тигәнсе һауығырбыҙ!..

Ҡаһым. Уныһын лекарь үҙе әйтер. Барығыҙ.

Егеттәр сығалар. Әсе ҡысҡырып илаған бала тауышы. Әүбәкерҙе етәкләп Ҡобора керә.

Әүбәкер. А-тай-й!

Ҡобора. Ҡуй, илама, хранцуз бапаҡ әйтер. Иртә әле. Аҙыраҡ ят, улым. Торғас, атайың ат бирер...

Әүбәкер. Ә мин хранцузды атамын!

Ҡобора. Ярай, улым.

Ҡаһым яҡын килеп Ҡobораны яурындарынан ҡағып йыуата.

Ҡаһым. Ҡуйсы, Ҡобора, баланы алдама,
Йәштән дөрөҫлөккә өйрәнһен...
Атайың шул ҡорбан булды, бала,
Йәҙрә тиште уның йөрәген.
Ошо көндән ҡаныңа нәфрәт һеңдер,
Дошмандарыңды бел танырға,
Бәлки, үҫкәс, һиңә тура килер
Беҙҙең һымаҡ яуҙар сабырға...
Ә хәҙер ят, илама.

Әүбәкер. Беләм, һалдат,
Яуҙа батыр үлә, беләм мин!
Әйтмәй йөрөгән булаларсы, алдап,
Шуға ғәрләнеп йәш түгәм мин:

Мин бала түгел дә... Юҡ, ағай, юҡ,
Уңды-һулды бер аҙ таныймын,
Миңә, Ҡаһым ағай, бирегеҙ уҡ,
Атайымдың ҡонон алырмын!

Ҡаһым. Вот молодец! Тере Аҡназар был,
Батыр булыр уның шикелле!

Ҡобора. Эйе, берҙән-бер йыуанысым шул...
Тик тапмам атаһы ишене...

Ҡаһым. Ни эшләйһең, ғүмерең булмағас,
Көсләп йәшәп булмай, күрәһең,
Әжәлеңдән ҡасып булмай, тыуғас,
Өйҙә ятһаң да ул үләһең.

Ҡобора. Унһы шулай инде. Әммә ҡыҙғаныс бит, еләк кеүек сағында әрәм булды.

Ҡаһым. Ҡуй, баланың күңелен китмә, Ҡобора. Мин уға уҡ-һаҙаҡ бирәм.

Әүбәкер. Ағай, миңә ат та бирерһең?

Ҡаһым. Уралда дан бер толпар тыуыр,
Ҙур үҫкәс, һин шуны менерһең!
Һин булырһың бына тигән казак,
Елде лә еткермәҫ толпарың,
Дошман илгә ташланырға баҙмаҫ,
Барыһын тоторһоң да туҡмарһың!

Әүбәкер (*үтә шатланып*). Мин атлы казак булам, мин атлы казак булам! Илама, әсәй, мин хәҙер ҙур бит инде!..

Ҡобора. Эйе, балам, һин... ҙур шул инде... (*Сығалар.*)

Ҡаһым. Бала... бала, артыҡ йәш шул әле, бер нәмә лә аңламай... Ә ғүмер үтә, яҙмыш ауыр...

(*Әкрен генә көйләй.*)

Аппаҡҡай ҙа ап-аҡ күренә, вай кем,
Кереп баҡһаң, эсе быу кеүек,
Уҙған да ғына ғүмер юҡ иҫәбе, вай кем,
Ергә лә генә һеңгән һыу кеүек...
Аҡназар, Аҡназар...

Садыҡай, Биҡәт, Байыҡ, Ядкәр һәм башҡалар Аҡназарҙың мәйетен күтәреп керәләр.

Байыҡ. Һай, уландар, уландар...
Улар батыр инеләр,

Улар алтын инеләр,
Илкәйем ил булһын тип,
Еркәйем ер булһын тип,
Ажарланып, яу сабып,
Шаулап торған дан табып,
Аҡтыҡ ҡанын бирҙеләр!
Ил онотмаҫ уларҙы,
Яңғырар олпат йырҙары,
Быуындарҙан быуынға,
Барлыҡ ғүмер буйына,
Күңелдәрҙә һаҡланып,
Телдән телгә маҡталып,
Таң ҡалдырыр донъяны
Илдең батыр улдары!

Садыҡай. Дөрөҫ, Байыҡ сәсән!

Биҡәт. Батырҙарға үлем юҡ!

Садыҡай. Улар Ватан өсөн ҡорбан булдылар!..

Биҡәт. Мәңге онотмабыҙ!..

Ҡаһым (*әкрен*). Туғандарым, рәхмәт, антығыҙҙы ишеттем. Эйе, беҙ уларҙы мәңге онотмабыҙ!

Тыңлағыҙ приказды:

Кисәге һуғышта батырлыҡ күрһәткән сотник Аҡйегет Уразбаев, Садыҡай Арсланов, Биҡәт Биктимеров, мәргән Аҫылбикә Йәнтурина, рядовой Аҡъюловтарға командование исеменән рәхмәт белдерәм!

Тауыштар. Дан батырҙарға!

Ҡаһым. Сотник Аҡйегет Уразбаевты һәләк булған Аҡназар Солтанов урынына үҙемә ярҙамсы итеп билдәләйем.

Тауыштар. Ҡулай егет! Батыр йөрәкле ул! Беҙ уға ышанабыҙ!..

Ҡаһым (*ҡулы менән тауышты тыйып*). Дыуамал һуғышҡа кергән, шулай уҡ ваҡытында ярҙам күрһәтмәй, йөҙләгән егеттең һәләкәтенә сәбәпсе булған ҡурҡаҡ Ҡолтүбә Шамғуловты, йөҙ башлығынан алып, рядовой һыбайлы итеп ҡалдырырға!

Тауыштар. Дөрөҫ! Хурлыҡ – ҡурҡаҡ йәнгә! Батыр башҡорт һыбайҙарына тап төшөрә ул!

Шаршау

**Фонохрестоматия**

Актёрҙар башҡарыуында тыңлағыҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Ҡаһымдың монологын ҡабаттан уҡып сығығыҙ. Ул нимә өсөн үкенә?
**2.** Ҡаһымдың Аҡйегетте үҙенә ярҙамсы итеп алыуына һалдаттарҙың фекере нисек?
**3.** Байыҡ сәсәндең ҡобайыры халыҡты нимәгә саҡыра?
**4.** Фольгнер менән Ҡолтүбәнең Ҡаһымға ҡаршы этлек уйлауҙары күренәме?

## ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

Лагерь. Ҡыш башы. Ҡаһым эргәһендә Байыҡ, Аҡйегет, Биҡәт баҫып торалар.

Ҡаһым. ...Шулай итеп, уҙамандар, дошманды тар-мар итер көндәр килде! Корпус штабынан приказ бар: беҙ, Селавин, Давыдов, Ожеровскийҙарҙың партизандары менән берҙәм хәрәкәт итеп, дошманды флангыларҙан борсорға тейешбеҙ. Сигенеүсе дошман армияһы Толчин – Лощинца – Черя ауылдары араһында ҡамап алынасаҡ.

Байыҡ. Бер ҡолас киреп юлбаҫарҙарҙы урасаҡбыҙ икән! Молодец, минең Ҡотдос ҡорҙаш эште шәп алып бара!

Ҡаһым. Эйе, ҡуҙғалыу тураһында приказ көтөгөҙ. Ә хәҙер егеттәрҙе әҙер тоторға кәрәк. Разведканан ҡайтманылармы әле? Эх, оҙаҡланылар... Байыҡ сәсән, һинең егеттәр ни хәлдә?

Байыҡ. Улар ни, «һайт» тигәндә, һыбайланырға торалар. Ҡылыстар ҡайралған, һөңгөләр ослаған, уҡ-һаҙаҡ тартылған.

Ҡаһым. Яҡшы. Ә һиндә хәлдәр нисек, сотник Биҡәт?

Биҡәт. Оран ғына һал, полковник ағай, арыҫландай атлығырбыҙ! Яңы кейемдәр алдыҡ. Яралылар урынына алтмыш егет килде. Шуларҙы һуғышҡа өйрәтәм.

Ҡаһым. Ярай, хәҙер үҙем барлап сығырмын. *(Садыҡай керә.)* Ә, юғалған мал, ҡайттыңмы?

Садыҡай. Ҡайттым, полковник. Разведка уңышлы үтте.

Ҡаһым. Яҡшы. Ниңә ул тиклем оҙаҡланығыҙ?

Садыҡай. Төндә бер ауылды баҫтыҡ. Ҡаты һуғыш булды. Ядкәр яраланды.

Ҡаһым. Яраланды? Ниңә шул дыуамалды йөрөтәһегеҙ, ә?

Аҡйегет. «Мин французса беләм дә беләм, ағай, разведкаға ебәр әле!» – тип теңкәгә тейгәс, ҡаршы килмәгәйнем шул.

Ҡаһым. Ул күп белдекле дыуамалды йүгәнләрмен мин! Ҡайҙа, килтерегеҙ әле үҙен.

Садыҡай. Ул бында. Хәҙер! (*Сыға.*)

Ҡаһым. Бөгөн миңә һәр бер һалдат ҡыйбат. Яҡшы белеп ҡуйығыҙ, мөмкин булған тиклем ҡорбанды аҙ бирергә.

Ядкәр менән Садыҡай керә.

Нимә һин, парли-марле, эш боҙоп йөрөйһөң?

Ядкәр. Аҙыраҡ ҡулды тешләнеләр ҙә. Унының ғына була инде ул. А ля гер комм а ля гер: эйе, тимәк, һуғышта булғас, һуғышса эш күрелә...

Ҡаһым. Күп телеңә һалыш әле һин! Аҡйегет, был парлимарлегә биш тәүлек наряд бир!

Аҡйегет. Тыңлайым.

Ядкәр. Ағай, күберәк була түгелме һуң, ҡул ауырта бит әле...

Ҡаһым. Ҡабат ауыртмаҫҡа яҡшы булыр!

Садыҡай. Полковник ағай, ул наградаға хаҡлы.

Ҡаһым. Шул биш тәүлек үҙе ҙур награда була. Был турала һүҙ бөттө.

Садыҡай. Шулай ҙа, полковник ағай, ҡатыраҡ... Ядкәр, тегене күрһәт инде.

Ядкәр. Мин, ағай, бынау шаршауҙы алам тип кенә бәләгә ҡаптым да ул...

Ҡуйынынан француз байрағын сығара.

Ҡаһым. Әһә, француз байрағы! Молодец! Бынының өсөн наградаға ҡуйырмын.

Ядкәргә ҡул болғап хушлаша ла сатырға уҙа. Ядкәр китә. Ҡолтүбә менән Фольгнер керәләр.

Фольгнер. Бына шулай, Ҡолтүбә тархан, мине штабҡа күсерәләр. Беләм, Ҡаһым үҙенән алыҫлаштырырға тырыша, эҙен йәшерә... Ләкин минән анһат ҡотола алмаҫ, һүҙемде һүҙ итермен. Бына ағыу. Нисек булһа ла Ҡаһымға эсер. Унан һин – полк командиры. Башы юйылһын, ә ҡалған яғы еңел эш. (*Кескенә ҡағыҙ төргәге бирә.*)

Ҡолтүбә. Аңлашыла. Мин үс алмайынса ҡалмай торғайным!..

Фольгнер. Ләкин шыма эшлә.

Ҡолтүбә. Себен дә тоймаç.

Фольгнер сыға. Ҡолтүбә сатыр яғына ҡолаҡ һалып тыңлай. Уның ҡулында ниндәйҙер төргәк.

Ҡолтүбә Сафия эргәһенә килә, ул: «Ҡаһым Аçылбикәне ярата, уға өшкөрткән тоҙ эсер», – тип ағыу бирә.

Ҡолтүбә сығып киткәс, Сафия Аçылбикәне саҡыртып килтерә. Аçылбикә киткәс, Ҡаһым керә. Сафия уға Ҡолтүбә биргән порошокты һалып эсерергә әҙерләй, ләкин тыштағы тауышҡа һиçкәнеп, һауытын түгеп ебәрә. Быны күреп, Ҡолтүбә: «Эх, булманы!» – тип әсенә.

Шаршау

## Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Ядкәрҙең батырлығы нимәлә күренә?
**2.** Ҡаһым Ядкәргә бигерәк ҡаты һуғыла түгелме? Фекерегеҙ нисек?
**3.** Фольгнер Ҡаһымға ҡарата ҡара уйын нисек тормошҡа ашырырға ниәтләнә?
**4.** Фольгнер Ҡолтүбәне ниндәй аҙымға этәрә?
**5.** Ҡаһымға ҡарата ҡорған пландары килеп сыҡмауын Ҡолтүбә нисек кисерә?

## ДҮРТЕНСЕ ШАРШАУ

Дүртенсе шаршау асылғанда, Березина яры, 28 ноябрь төнөндә ҡыйратылған француз армияһының һалдаттары усаҡ янында ултыра. Араларында ҡарт гренадер, бер капрал бар. Капралдың аяғы туңған, уны французлар ташлап китәләр, ул французларҙы ләғнәтләй. Яҡынлашып килгән марш ишетелә. Егор, Иван, Ядкәр килеп керәләр, француз капралын санитарға оҙаталар. Иван *(бүркен атып бәреп)*: «Аллаға шөкөр, был көндә лә күрҙек, еребеҙҙә ҡоралл бер дошман һалдаты ла ҡалманы!» – ти. Шаулашып Ҡаһым, Аҡйегет, Байыҡ, Садыҡай һәм башҡалар керәләр.

Ҡаһым. Батырға ла ял кәрәк, тиҙәр. Уҙамандар, туҡтарға!

Кешеләр төрлөсә ултырышалар.

Фольгнер. Ялды, полковник, Парижда шәпләп яһарбыҙ инде.

Ҡаһым. Ә бүренән көтөү араланғас,
Кеше тынысланә түгелме?..

Париж алыҫ ҡала…
Уға төрлө яҡтан баралар.
Лондондымы, хәтерем алдамаһа,
Ул ҡалаға яҡын һанайҙар.
Ә беҙ данға еттек. Ары һуғыш –
Ситтәр файҙаһына буласаҡ.
Рәсәй ҡотолдо. Инде тыныс
Үҙ ерендә үҙе торасаҡ…

Фольгнер. Ул – фельдмаршал Кутузов фекере, полковник. Ә государь император хәҙрәттәре бөтөнләй башҡа фекерҙә…

Ҡаһым. Бәхәсләшмәйем, майор. Ләкин һалдат, барынан элек, командующийға буйһона… Ярай, егеттәр, ни шымып ҡалдығыҙ? Әйҙә, ҡылыс менән оҫта эш иткән һымаҡ, шатлыҡты ла күрһәтә белегеҙ!

Садыҡай. Була, ағай! Байыҡ олатай, тарт ҡурайыңды.

Ул ҡурайҙа уйнай. Күмәк йыр башлайҙар.

Йыр: Атлы ғәскәр сыға күперҙән,
Сығыр еркәйҙәре һүтелгән.
Французларҙың ғәскәрен
Кутузов та ҡырып бөтөргән!..

Фольгнер (*үҙ алдына*). Ярай.
Ҡаһым үлер бөгөндән үк,
Етер, әлдә бик күп һикерҙе!
Яҡшы аттың хәҙер кәрәге юҡ,
Асыуҙы ла байтаҡ килтерҙе…
Ул тарыған Кутузов сиренә,
Беҙҙә ундай сиргә сара бар:
Серек тешкә дарыу әрәм генә,
Тамырынан һурып алалар!

Ҡолтүбәне ым менән янына саҡыра.

Ҡолтүбә. Нимә булды, майор әфәнде?

Фольгнер. Мин биргән дарыуҙың көсө ҡайҙа?

Ҡолтүбә. Мин уны Ҡаһымдың ҡатынына биргәйнем.

Фольгнер. Их, ҡырған баш, бүтәнсә аҡыл тапманыңмы ни?.. Ярай, ул артабан һуғышыуға ҡаршы тора. Бының өсөн уны эшенән аласаҡтар… Ләкин беҙгә лә тик ятмаҫҡа кәрәк: ул эш әгәр барып сыҡмаһа, мә, ағыу һоғондор.

Ҡолтүбә. Тыңлайым!

Аҫылбикә үтеп барышлай, уларҙың нимә эшләгәнен күреп ҡалып, башын сайҡай. Уйын барған ерҙә тауыштар көсәйә.

Ҡобора. Атайың, бахыр, был шатлыҡлы көндәрҙе күрә алманы. Улым Әүбәкер, йә булмаһа, һин бер бейеп күрһәт, атайыңды иҫкә алһындар.

Әүбәкер. Әй, оялам да…

Ядкәр. Ярамай, ярамай, бейеп ташла, бер нәмәгә ҡарамай. Мин әле һинең кеүек саҡта беҙрә ҡаҡҡанға ла бейей торғайным. Ә бында ҡурай, Байыҡ олатайың тарта.

Әүбәкер. Ярай әтү.

Бейергә төшә. Ул балаларға ғына хас ихласлыҡ менән бейей. Төрлө хуплау тауыштары.

Ядкәр. Тап атаһы – һуйған да ҡаплаған!

Аҡйегет. Булыр бала биләүҙән!..

Аҫылбикә. Һай, януарың, ата балаһы шул!..

Иван. Нығыраҡ баҫ, нығыраҡ!
Иван һуҡҡан ергә һуҡ!

Ҡобора. Минең улым бейер ул, дошман яуын еңер ул!

Малай бейеп бөтә. Егеттәр бейергә төшәләр.

Ядкәр. Егеттәрҙең һөлөгө,
Урта бармаҡ кеүеге,
Ун дошманға ла бирешмәй,
Ҡаршы сыҡһа, бер үҙе!

Аҡйегет. Баҫҡан ерҙә аттары
Онтап үтә таштарҙы,
Сапҡан саҡта ҡылысы
Өҙә яуыз баштарҙы!

Садыҡай. Уҡтары менән тейер,
Дошман йөрәген телер.
Ҡурҡыу белмәҫтәр яуҙа,
Елдәй елерҙәр алда!
Һай-һай-һай!

Ядкәр. Ҡаһым ағай, ниндәйҙер һыбайлылар сабышып киләләр!

Ҡаһым. Корпус командиры генерал Яков Семёнов, буғай… Тәртип, егеттәр! Яҡшы ҡаршылайыҡ. Табын әҙерләргә.

Егеттәр тиҙ-тиҙ үҙҙәрен тәртипкә килтерә һалалар. Берәүҙәр табын әҙерләргә тотона. Тояҡ тауыштары яҡынлаша.

Смирно!

Аҡйегет. Смирно!

Барлыҡ йөҙ баштары һәм рядовойҙар смирно баҫалар. Адъютанттарын эйәртеп, Семёнов керә.

Ҡаһым. Генерал Семёновҡа ур-а-а! (*Ура яңғырай.*)

Семёнов. Еңеү менән, батырҙар! Сәләмәтлек теләйем!

Барыһы. Еңеү менән, беҙҙең данлыҡлы генерал!

Семёнов менән Ҡаһым ҡосаҡлашып үбешәләр. Ура, шатлыҡ ауаздары яңғырай.

Семёнов. Вольно!

Ҡаһым. Вольно!

Аҡйегет. Вольно!

Строй таралыша.

Семёнов (*Байыҡтың арҡаһынан ҡағып*). Ну, ҡартлас, Наполеонды туҡманыҡмы?

Байыҡ. Больно хараша моклашка дал, Ополеон губсим пропал! (*Көлөп таҡмаҡлай.*)

Французлар килеп кергән
Мәскәү тигән ҡалаға,
Рус ғәскәре өҙә һуҡҡас,
Ҡасты улар далаға!
Любезники-любизар,
Молодец, молодец!

Семёнов. Дөрөҫ, ҡартлас! (*Ҡаһымға.*) Ҡайҙа әле һеҙҙең теге ялбыр баш?

Ҡаһым. Аҫылбикә Йәнтурина!

Аҫылбикә. Мин бында!

Семёнов алдына килеп төҙ баҫа.

Семёнов. Эх, батыр ҡыҙ, барлыҡ һуғыш буйы
Полкка ҙур ярҙам килтерҙең.
Мә, миҙал таҡ. Оҙаҡ йылдар уны
Минең төҫөм итеп йөрөтөрһөң.

Түшенән миҙалын алып Аҫылбикәгә таға.

Аҫылбикә (*уңайһыҙланып*).
Ҡуй, генерал, ул һинең миҙалың,
Күркәм булып йөрөһөн түшеңдә...

Семёнов. Батырҙарҙың даны – минең даным,
Йәл түгел йән һиндәй кешегә.
Минең өсөн наград – еңеү үҙе.
Рәхмәт, һынатманыҡ, туғандар.
Ил онотмаҫ, киләсәктә беҙҙе
Ғорур йырға ҡушып йырларҙар...

Аҫылбикә. Рәхмәт инде, улай булғас.

Аҫылбикә ситкәрәк китә. Башҡалар һырып алып, уны ҡотлайҙар.

Ҡаһым. Илдән дошман ҡыуылып бөттө. Артабан нимә эшләйбеҙ, генерал?

Семёнов. Бонапарт яҙмыш тарафынан иркәләнгән кеше. Уның көтөлмәгән хәлдә яңы күтәрелеш яһарға һәләте бар. Уны тәхетенән бәреп төшөрмәй тороп, Европаға ла, беҙгә лә тыныслыҡ юҡ. Шулай булғас, һуғыш бөтмәй әле.

Ҡаһым. Ә бит батшабыҙ: «Урыҫ ерендә ҡоралллы бер дошман һалдаты ҡалмаһа, һуғыш бөтөр», – тигән.

Семёнов. Эйе. Ләкин ваҡыт тарихҡа үҙ ихтыярын бәйләй бара. Хәҙер батшабыҙҙың ҡарары ла башҡаса... Ә беҙ – һалдат, приказға буйһонабыҙ.

Ҡаһым. Эйе, һалдат... Ярай, поход дауам итәсәк икән. Беҙ әҙер! Әйҙәгеҙ, табынға рәхим итегеҙ.

Семёнов. Әйҙәгеҙ.

Ҡаһым уны ҡултыҡлап табынға алып китә.

Фольгнер. Ишеттеңме, Ҡаһым ҡарарын үҙгәртте. Тимәк, ул урынында ҡаласаҡ. Беҙгә бер генә юл ҡалды: ҡыйыу хәрәкәт итергә. Бая һөйләшкәнде һуҙма, бөгөн үк эшлә!

Ҡолтүбә. Була, майор әфәнде!

Табын янына китәләр.

Ҡаһым (*бокал тотоп*). Еңеү өсөн, рус ҡоралының даны өсөн, уҙамандар!

Ура тауыштары аҫтында бокал күтәрәләр.

Аҫылбикә. Ай, был шампандары, ҡымыҙ һымаҡ,
Семерләтеп алды тамырҙы!..
Ҡаһым. Ха-ха, Аҫылбикә, эс һағыраҡ,
Ҡолап ҡуйма, уйла артыңды...

Еңелсә көлөшәләр.

Семёнов. Бокалдар тултырыуығыҙҙы һорайым! (*Тост тота.*)

Беҙҙең Ҡаһым түрә, уттар ярып,
Еңеү менән данлы юл үтте,
Ил күҙәтте уны, таңға ҡалып,
Баҫҡан саҡта ул ер һелкетте!
Рустар менән бергә һуғышты ул,
Һис тап төшөрмәне исеменә,
Наполеонды илдән ҡыуышты ул,
Ватан һаҡлар уны иҫендә.
Башҡорт халҡы уны мәңге һөйөр,
Үҙ халҡын күтәрҙе ул данға,
Онотолмаҫлыҡ легендаға инер,
Ул һаҡланыр үлмәҫ йырҙарҙа!
Уның һаулығына!

Бокал күтәрәләр.

Ҡаһым. Рәхмәт! Байыҡ сәсән, дуҫтар хөрмәтенә әйтеп бирсе бер бай һүҙеңде?!

Байыҡ. Бәй, әйтһәк ни, ярып һалабыҙ ҙа ҡуябыҙ инде уны. (*Ҡулына думбыра ала.*)

Әйт тиһәгеҙ, әйтәйем –
Заманымдың хаҡлығын,
Күңелемдең сафлығын,
Ил һүҙенең алтынын:
Ил – ил булмай, ир булмай,
Ир булмаһа, ер булмай,
Ере юҡтың – көнө юҡ,
Көнө юҡтың – йүне юҡ!
Шөкөр, барҙыр илебеҙ,
Бына тигән көнөбөҙ.
Рус менән бер булып,
Ат атланып, бил быуып,
Яуҙарға ҡаршы саптыҡ,

Дошманды баш эйҙереп,
Илгә яҡты көн биреп,
Уртаҡ бәхетте таптыҡ!
Бергә аҡты ҡаныбыҙ,
Мәңге китер даныбыҙ,
Ағыр һыуҙар – аҡһалар,
Сабыр аттар – сапһалар,
Ай тонйорап, көн булһа,
Әсәләрҙән ул тыуһа,
Иҫкән елдәр тынмаһа,
Ер йомроһо үҙенең
Барыр юлын бормаһа,
Йәшәү бөтмәҫ донъяла,
Беҙ дуҫ булып ҡалырбыҙ!..

Аҡйегет. Һай, алтын бит, олатай, һүҙҙәрең!.. Афарин!..

Семёнов. Молодец, һөйөклө ҡартым!

Ядкәр (*Аҡйегеткә*). Ағай, ағай, сәсәндең һүҙҙәрен генерал ағайым аңламаны, буғай, әллә үҙем төшөндөрөп бирәйемме?

Аҡйегет. Тик ултыр, аңлай ул.

Гөлнур инә.

Ядкәр. Ошоларҙың инде! Как шәплегемде күрһәтәйем тиниһәм, аяҡ салалар ҙа ҡуялар... Гөлнур, кил, үҙеңә әйтеп бирәйем, яныма ултыр!

Садыҡай. Вәт, вәт, төшөндөрөп бир шуға.

Бер нисә ҡурайсы «Байыҡ» көйөн башлай.

Ядкәр (*әкрен*). Гөлнур, эш бейеүгә китте, тағы мине ситләп уҙырҙар инде. Их, ошо самай уңайлы килгән саҡта ирек бирмәйҙәр бит...

Гөлнур. Тик кенә ултыр, һиңә әйтелде бит.

Ядкәр. Их, белмәйһең йөрәкте!.. (*Ҡысҡырып.*) Ҡаһым ағай, әллә үҙең дә әйләнеп алаһыңмы?

Уның һүҙен башҡалар шунда уҡ күтәреп алалар.

Аҡйегет. Дөрөҫ, түрә, үҙең төш!

Садыҡай. Эйе лә!

Иван. Давай, давай, бер өҙҙөрөп ал, түрә!

Садыҡай. Ағай, йыҡма инде һүҙҙе.

Ядкәр. Их, көйө әрәм була ла һуң...

Ҡаһым. Ҡана, булмаһа, бер урайым.

Семёнов. Биш ура, полковник. Аяғың сыҙаһа, ер елкәһе түҙер ул, ҡурҡма.

Байыҡ. Шулай шул!

Сафия. Уның бер ҙә бейегәне юҡ та баһа, хур булмаһа ярар ине.

Семёнов. Шулаймы? Мин йолаға ҡаршы килмәйем, рәхим итегеҙ.

Фольгнер. Бокалдар!

Ҡолтүбә тиҙ генә Семёнов, Ҡаһым һәм Фольгнер алдына тулы бокалдар килтерә.

Семёнов. Дуҫлыҡ өсөн!

Ҡаһым. Мәңге дуҫлыҡ өсөн!

Фольгнер. Сәләмәтлеккә!

Эсәләр.

Семёнов. Рәхмәт, дуҫтар, миңә ваҡыт.

Барыһы менән тип әйтерлек күрешеп сыға.

Байыҡ. До свиданья.

Ядкәр. О ревуар!

Семёнов (*көләп*). О ревуар, мон шер!

Ҡаһым. Ха-ха-ха... Был беҙҙең француз инде, теге ваҡыт флаг алған егет.

Семёнов. Әһә, молодец егет! Наградаң менән ҡотлайым.

Ҡулын ҡыҫа. Сыға башлай. Ҡаһым ҡапыл йөрәген тота.

Ҡаһым. Аһ!..

Семёнов. Нимә булды һеҙгә, полковник?!

Ҡаһым. Былай ғына, буғай... Лекарь!

Семёнов. Туҡта, туҡта, йөҙөң ағара...

Ҡаһым. Ах, лекарь тиҙерәк киләме?
Хәлгенәйем бөтөп бара,
Ысҡындырығыҙ көмөш төймәмде...

Барыһы ла уға ташланалар, түшен ысҡындыралар. Лекарь йүгереп инә.

Сафия. Ҡаһым, йәнем!

Ҡаһым. Ағыу... ағыу... (*Ҡолай.*)

Семёнов. Кем эше был?!

Ҡаһымды иплəп һалалар.

Аçылбикə. Бынау ҡара йылан! (*Ҡолтуғбəне тотоп ала.*)

Ҡолтуғбə. Алдай, ышанмағыҙ бисə һүҙенə!

Аçылбикə. Ə был ҡағыҙ нимə?

Аҡйегет. Хəҙер алҡымыңды сəйнəп өҙəм, яуыз! Ниңə ағыу бирҙең түрəгə?

Ҡаһым (*аңына килеп*). Ҡуй, Аҡйегет, килсе минең эргəмə...

Сафия һəм башҡалар илай. Ҡолтуғбəнең ҡулын ҡайырып артҡа бəйлəп, эргəһенə ике һалдат баҫа.

Сафия, Сафия... күк түшле күгəрсен,
Өҙгөлəнмə, түкмə йəшеңде!
Илем алыр үсен минең өсөн...
Килсе, бер һыйпайым сəсеңде.

Сəсенəн һыйпай.

Аҡйегет. Был һатлыҡты нимə эшлəтəбеҙ, генерал?

Семёнов. Эт шикелле атырға!

Ҡолтуғбə. Аһ, кисерегеҙ! Мин... мин... (*Теҙлəнə.*) Майор Фольгнер ҡушҡанды ғына үтəнем.

Фольгнер. Алдай башҡорт, швайен!

Семёнов. А-һа, йəле, майор, күҙемə тура ҡара! (*Ныҡ теклəй.*)

Фольгнер. Юҡ, юҡ...

Семёнов. Их, мундирлы кəнтəй! Күҙҙəрең үк алдап торалар. Атырға!

Ҡолтуғбə менəн Фольгнерҙы алып сығып китəлəр. Тəүгеһе өҙлөкһөҙ илай, икенсеһе таш кеүек ҡатып ҡалған.

Ҡаһым. Уҙамандар, үлəм... Хуш, генерал!

Семёнов. Аһ, ниндəйен кеше əрəм була!..

Сафия. Ағыу... ағыу! Юҡмы ни һуң дарыу?

Ҡаһым. Туғандарым, урыҫ менəн беҙҙең дуҫлыҡты боҙор өсөн ағыу йөрөтөүселəр килəсəктə лə күп булыр əле ул. Юҡ, юҡ, ундай мəкерҙəргə бирелмəгеҙ, аң булығыҙ!..

Барыһы. Ҡаһым түрә менгән һор юрғаҡай, вай кем
Түбән эйеп тора башҡайын,
Ун алты ла йәшлек Сафия һылыу, вай кем,
Түгер инде ҡайнар йәштәрен...

Шаршау

## Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Драмала башҡорт яугирҙарының һуғыш эпизодтарында үҙҙәрен нисек тотоуына ҡарап, уларға ҡылыҡһырлама бирегеҙ.
**2.** Ҡаһым түрәнең командирлыҡ һыҙаттарын билдәләгеҙ.

## Төркөмдә йәки парлашып эшләгеҙ

Ҡаһым түрәнең һәм башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуы тураһында тағы ла ниҙәр беләһегеҙ, шул хаҡта әңгәмә ҡороғоҙ.

## Телмәрегеҙҙе байытығыҙ

«Ҡонон ҡайтара» һүҙбәйләнеше нимәне аңлата? Миҫалдар килтерегеҙ.

## Проект эше

Башҡорттарҙың 1812 йылда француздар менән алышта күрһәткән батырлыҡтары тураһында сығыш әҙерләгеҙ.



Зәйнәб
# БИИШЕВА
## (1908–1996)

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, республиканың Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Зәйнәб Биишеваның жанрҙар яғынан күп төрлө, идея йөкмәткеһе, художестволы формаһы, тел-стиль саралары йәһәтенән бай һәм үҙенсәлекле ижады рухи мираҫыбыҙҙың аҫыл хазинаһын тәшкил итә.

Зәйнәб Биишева Башҡортостандың хәҙерге Күгәрсен районы Туйөмбәт ауылында ерһеҙ крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Ата-әсәһенән бик йәшләй етем ҡала. Ауыл мәктәбен тамамлағандан һуң, 1924 йылда ул Ырымбурҙағы Башҡорт педагогия техникумына уҡырға инә һәм уны уңышлы тамамлай. 1929–1931 йылдарҙа Баймаҡ районы Темәс ауылында уҡытыусы булып эшләй, ауылда яңы тормош төҙөү эшендә әүҙем ҡатнаша.

1931 йылда З. Биишева Өфөлә уҡытыусыларҙың белемен камиллаштырыу курсын үткәндән һуң, Башҡортостан китап нәшриәтенә эшкә ҡалдырыла. Тәүҙә ул башҡорт һәм татар телдәрендә сыға торған «Пионер» исемле дәреслек-журналдың яуаплы мөхәррире, аҙаҡ нәшриәттең дәреслектәр секторында мөхәррир булып эшләй.

1938–1951 йылдарҙа З. Биишева төрлө гәзиттәрҙә, радиокомитетта эшләй. 1952 йылдан – профессиональ яҙыусы.

Зәйнәб Биишева – төрлө жанрҙарҙа берҙәй оҫта ижад иткән әҙип. Уның тиҫтәләгән шиғыр һәм поэмалары, «Дуҫлыҡ», «Серле ҡурай», «Гөлбәҙәр» тигән драма әҫәрҙәре, балалар өсөн яҙылған әкиәттәре бар.

Зәйнәб Биишева бигерәк тә проза өлкәһендә әүҙем эшләгән. Уның «Яҡтыға» трилогияһына ингән «Кәмһетелгәндәр», «Оло

Эйек буйында», «Емеш» исемле романдары уҡыусыларҙың яратып уҡыған әҫәрҙәренә әүерелде. Үҙенең «Сәйер кеше», «Уйҙар, уйҙар...», «Ҡайҙа һин, Гөлниса?» тигән повестарында яҙыусы йәштәр тормошоноң мөһим яҡтарын һүрәтләне. «Мөхәббәт һәм нәфрәт» әҫәре яҙыусының хикәйәт жанры оҫтаһы булыуын күрһәтте.

Яҙыусы әҙәби тәнҡит һәм тәржемә өлкәһендә лә һәләтен һынаны. Күп әҫәрҙәре рус телендә донъя күрҙе. Зәйнәб Биишева йәмәғәт эштәрендә һәм әҙәбиәт өлкәһендә күрһәткән хеҙмәттәре өсөн миҙалдар һәм өс тапҡыр «Почёт Билдәһе» ордены менән бүләкләнде.

## ЙӘШӘҮ – ХЕҘМӘТ

Әсеһен дә күрҙем, сөсөһөн дә,
Үкенесем ерҙә ҡалманы.
Тик шулай ҙа, донъя, гүзәл донъя,
Һине һөйөп танһыҡ ҡанманы...

Ҡырыҫ булды минең барыр юлдар,
Наҙлы сөсөлөктәр тойманым,
Шуға, ахыры, донъя, һине күреп,
Һине һөйөп һис тә туйманым...

Йәшәү – хеҙмәт, көрәш, үҫеш бит ул,
Унан башҡа тормош юҡ миңә.
Ҡул ҡаушырып түрҙә ултырырға
Килмәнем бит, донъя, мин һиңә.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шиғырҙың тәүге ике юлын иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Автор унда нимә әйтергә теләгән?
**2.** «Йәшәү – хеҙмәт, көрәш, үҫеш бит ул» тигәнде нисек аңлайһығыҙ?
**3.** Шиғырҙың төп фекерен (мәғәнәһен) аңлатып ҡарағыҙ.

### Телмәрегеҙҙе байытығыҙ

«Танһыҡ ҡанманы», «ҡул ҡаушырып» һүҙбәйләнештәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Уларҙы ҡулланып, үҙегеҙ һөйләмдәр төҙөп ҡарағыҙ.

### Проект

**1.** Зәйнәб Биишева кем ул? Уҡытыусы, өлкәндәр ярҙамында уның тормошона, ижадына ҡағылышлы материалдар йыйып, «Халыҡ яҙыусыһы»

тигән альбом төҙөгөҙ. Әҙибәнең үҙегеҙгә яҡшы таныш булған берәй әҫәре буйынса фекер алышыу ойоштороғоҙ.

**2.** Ни өсөн Зәйнәб Биишева йәшәүҙе хеҙмәт тип атай? Һеҙ шуның менән риза һығыҙмы?

**3.** Шағирә йәшәүҙе нисек күҙ алдына килтерә?

## ҺӨНӘРСЕ МЕНӘН ӨЙРӘНСЕК[1]

Хасбулат олатай, үҙ һүҙе менән әйткәндә, әллә ҡасан етмеште аша атлап уҙған кеше. Ләкин күҙенең, һүҙенең ирәбелегенә, ҡаҡса, еңел кәүҙәһенә, йәштәрсә баҙыҡ, тигеҙ тештәренә ҡараһаң, уға хатта алтмышты биреүе лә ҡыйын. Етмәһә, ҡартың һөлөк кеүек мыйыҡтарын йәштәрсә мөгөҙләндереп, бороп та ебәргән. Тик тауышта ғына ҡартлыҡ бер аҙ һиҙелә.

– Бына! – ти Хасбулат олатай, өлкән ағас һандыҡҡа дөпөлдәтә һуғып. – Ете быуындан алып ҡулдан ҡулға күсеп килгән һандыҡ был. Ата-бабанан ҡалған ҡомартҡы…

Мин тутыҡҡан ҡалай ҡоршаулы ҙур ағас һандыҡҡа ҡыҙыҡһынып ҡарайым. Хасбулат олатай һандыҡтың бик күптән бикле тороп тутыҡҡан йоҙағын көскә асты ла, уның эсенән ҡәҙерле ҡомартҡыларҙы берәм-берәм алып, минең алға теҙә башланы.

Иң элек өҫтәлгә йылдар уҙыу менән һарғайып, йылтырап, һөйәк төҫөнә ингән, әллә ниндәй фантастик һөйрәлеүсе йәнлектең башына оҡшатып эшләнгән ағас ижау сығып ятты. Уның артынса мөгөҙ борғо күренде.

– Салауат батыр үҙенең ғәскәрҙәрен һуғышҡа саҡырған саҡта ошо борғоно ҡысҡырттыра торған булған, – тип аңлата Хасбулат олатай. – Беҙҙең тоҡомдоң иң оло аҡһаҡалы уның борғо ҡысҡыртыусыһы булған. Шул аҡһаҡалдан ҡалған ҡомартҡы була был…

Шулай уҡ көмөшләп, ысын аҡыҡтар менән биҙәп эшләнгән ҡайыш йүгән, ҡойошҡан, ҡомолдороҡ, унан ҡынына арыҫлан менән күк күгәрсен һүрәте төшөрөлгән ауыр яҫы ҡылыс өҫтәлгә сығып ятты.

Хасбулат олатай тантаналы тауыш менән:

---

[1] Ҡыҫҡартып алынды.

– Был ҡылыстың ҡынына ниңә арыҫлан менән күк күгәрсен төшөрөлгән, ә? – тип, ирәбе күҙҙәрен миңә төбәне. Үҙе минең яуабымды ла көтмәй:

– Беләһең килһә, ошо ҡылыстың эйәһе – арыҫлан кеүек батыр йөрәкле, күк күгәрсен шикелле саф, изге күңелле кеше тигән һүҙ был, – тип һөйләп алып китте. – Ә эйәһе кем булған тиһеңме? Ҡаһым түрә! Ҡылыс та, эйәр менән йүгән дә – Ҡаһым түрәнеке. Ул бит беҙҙең ошо яҡтың батыры. Наполеонды туҡмап, Парижға барып ингән саҡта, уның ҡулында ошо булат ҡылыс булған. Ә ул булат ҡылысты Урал ҡоросонан үҙебеҙҙең эшсе егеттәр ҡойған. Аңланыңмы инде? – Мин Хасбулат олатайҙың аңлатмаларын ихлас күңел менән тыңлап ултырам. Ҡарт, уның һайын ихласланып, һандығына эйелә. Бына ул иплəп кенә кескәйерәк бер төргәк күтәреп алды. Төргәктән ялбыр папаха алып, башына кейеп үк ҡуйҙы. Папаханың маңлайында замандар уҙыу менән тутыға төшкән ҡыҙыл йондоҙ йымылдап тора ине.

– Йә, нисек? – ти Хасбулат олатай, мут йылмайып.

– Шәп. Бик шәп! – тим мин.

– Быныһы инде бабайыңдың ҡыҙылгвардеец сағынан ҡалған ҡомартҡыһы, – ти ул, тамаҡ ҡыра биреп. Уның ҡыҫығыраҡ ирәбе күҙҙәрендә йәшенә хас булмаған сая ут балҡып китте. Һәм ул ярһып: – Һай-й!.. – тип ҡуйҙы. – Бар ине бит йәш саҡтар!.. Шәп саҡтар!.. Ышанмаһаң, бына, ҡара. Бындайҙы шәп булмаған егеттәр ала аламы ни?! – Хасбулат олатай баяғы төргәктән айырым йомшаҡ сепрәккә төрөп һалынған Георгий тәреһе менән Ҡыҙыл Байраҡ ордены алып, өҫтәлдең тап уртаһына һалып ҡуйҙы. – Күрәһеңме, Хасбулат олатайың һалдат булып та һынатмаған. Совет өсөн һуғышта ла арттан ҡарап тормаған!

Хасбулат олатай бер аҙ тынып, һөлөк һымаҡ мыйыҡтарын борғолап, миңә тағы оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Унан, ҡапыл боролоп, елтелдәтә баҫып, ҡаршы стена яғына китте. Ә ул стенала, быялалы рамда, бик иҫке фотолар эленеп тора ине.

– Бына, ҡара, – тине ул, арыҡ, тарамыш бармаҡтары менән бер төркөм һалдаттар төшкән фотоға төртөп. – Был – Петроградты Юденичтан таҙартҡас төшкән һүрәт.

Мин дә, урынымдан тороп, фото алдына барып баҫам. Данлы көрәш йылдарының онотолмаҫ сәхифәләрен ниндәйҙер моңһоу тулҡынланыу менән ҡарарға керештем. Бер ситтәрәк, бөйөргә таяна биреп, күкрәкте киреп торған, осҡор күҙле, йәш, матур һалдат иң элек минең иғтибарымды үҙенә тарта. Уның

башында тап Хасбулат олатайҙың башындағы кеүек йондоҙло, ялбыр папаха. Папаха ҙур. Бит тар, ҡаҡса ғына. Атаһының бүркен кейгән шаян малай кеүек күренә был һалдат миңә. Улай тиһәң, уның күкрәгендә шинель өҫтөнә үк беркетелгән орден балҡый. Ҡыҙыл Байраҡ ордены!

– Был, олатай, һин! – тим мин, шатланып. Күңелемде ғорур ҡыуаныс солғап ала. – Эйе, һин бит был, Хасбулат олатай!

– Мин булмайса... – тип, тыйнаҡ ҡына йылмайып тора Хасбулат олатай. Унан айырата бер йәнлелек менән икенсе бер фотоға төртә:

– Ә был, бер үҙе генә баҫып төшкән кем? Бәлки, таныйһың?!

– Танымайса, – тип уныңсалап яуап ҡайтарам мин. – Шәһит Хоҙайбирҙин да баһа!

– Тап үҙе. Ул да беҙҙең яҡ тамыры, – ти Хасбулат олатай ғорур тауыш менән. – Һай-й, ир ине мәрхүмең, ир ине.

Хасбулат олатай, күрәһең, алыҫ үткәндәрҙе күҙ алдынан үткәреп, оҙаҡ ҡына тынып торҙо. Унан ашыҡмай ғына һандыҡтың иң төбөнән иҫке ҡыҙыл бәрхәткә төрөлгән бер нәмә күтәреп сығарҙы. Айырыуса ҙур тантана менән, тамаҡты ҡыра биреп:

– Быныһы инде алыҫ илдән, бик борон замандан килгән ҡомартҡы, – тип ҡуйҙы, – бик ҡәҙерле ҡомартҡы. Уның үҙенә күрә бик хикмәтле тарихы ла бар...

Мин түҙемһеҙләнеп Хасбулат олатайҙың ҡулындағы төргәккә тын да алмай текләп ҡалдым. Бына бер саҡ олатай төргәк эсенән аҡҡош муйынлы, ғәжәп матур бер көршәк сығарып ала ла тантаналы рәүештә миңә һона:

– Мә, ҡара. Тау ҡыҙҙарының һыу ташый торған көршәге, – тип ябай ғына итеп аңлатма бирә. – Яҡшылап күр, теләгәнсә һоҡлан. Тик күҙ генә тейгеҙмә, – тип, кеткелдәп көлөп ҡуя. – Күрәһең бит, күҙҙең яуын алып тора. Ундай матур нәмәгә күҙ тейеп ҡуйыуы ла бер ҙә ғәжәп түгел.

Яңы ғына тумалған томбойоҡто хәтерләткән был ғәжәп көршәкте мин бик оҙаҡ әйләндереп-тулғандырып ҡарап ултырам. Уның нәфислеген, матурлығын, сәскә һәм семәрҙәренең гүзәллеген маҡтау түгел, ябай ғына итеп аңлатып бирергә лә һүҙ таба алмаҫымды тойоп, бөтөнләй юғалып ҡалам. Сөнки ғәҙәти көршәк түгел, ә бөйөк сәнғәт өлгөһө, кеше аҡылы тыуҙырған ҡабатланмаҫ ижад емеше ине минең ҡулымда!

«Ҡайҙан килгән был?! Кем яһаған? – тип аптырайым мин. – Бындай матур көршәкте мин бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла күргәнем юҡ та баһа!..»

Хасбулат олатай бик ябай ғына итеп:

– Уның ҡиммәтле тарихын мин һиңә кис һөйләрмен. Һин минең яныма умарталыҡҡа барырһың, – тине.

Хасбулат олатай баяғыса бик йәтешләп, ашыҡмай, ҡабаланмай ҡомартҡыларын һандыҡҡа кире һала башланы. Ә мин һаман теге көршәктән һоҡланыулы күҙҙәремде ала алмайым.

...Бына, юғарыға табан оҙонсалап, аҡҡош муйынына барып тоташҡан йомроraҡ ҡорһағына ҡойроҡто уралта терәп, туҙбаш йылан көршәктән һыу эсергә ынтылған. Уның йыланса нәфис, бормас тәне лә, айырса теле лә ҡыбырлап йымылдап тора һымаҡ... Был – көршәктең тотҡаһы. Тау ҡыҙҙары көршәкте, ошо туҙбаш йыландан тотоп, яурындарына күтәреп ултыртҡандар... Көршәктең эсе аҡһыл зәңгәргә буялған. Ә тышы иртәнге аҡ томан баҫҡан, мең төрлө сәскәгә күмелгән яҙғы туғайҙы хәтерләтә. Аһ, ниндәй генә сәскә юҡ был туғайҙа!.. Иң ғәжәбе – уларҙың береһе лә төшөрөлгән түгел, ә үҙ стихияларында наҙланып ултырған тере сәскәләр!.. Бына әле генә йәшенле ямғыр уҙған. Уның артынса ҡояш балҡып сыҡҡан. Сәскәләр шуға һөйөнөп көлөп ебәргән!.. Мөғжизәле сәскәләр...

Ә бына бында, теге туҙбаш йылан үрелеп сыҡҡан ерҙә, тау ландышы яңы ғына сәскә атҡан. Ынйы кеүек нәфис, кескәй ҡыңғырау сәскәләр. Улар шул хәтле тереләр, хатта уларҙың хуш еҫтәре танауға бәрелеп торған һымаҡ...

Туҡта... Тау ландышының йәм-йәшел ҡыяҡтарының береһендә ниндәйҙер яҙыу ҙа бар түгелме һуң?! Эйе, яҙыу, һәр бер хәрефе ҡан-ҡыҙыл кизе менән сигелгән кеүек ниндәйҙер бер һүҙ!..

– «Һөнәрсе», – тип уҡыйым мин. – Һөнәрсе?! Хасбулат олатай, был ни ғәләмәт?! Ысын булһа, бында «Һөнәрсе» тип яҙылған?.. Кем яҙған уны? Кемдең ҡултамғаһы был, олатай? – тип ҡысҡырып уҡ ебәрәм мин. Серле көршәк минең тауышымды яңғыратып ҡабатлай:

– ...ол-а-тай!..

– Көршәктең ауыҙ тәңгәлендә һөйләнең. Ишеттеңме, ҡалай мәҙәк яңғырап тора, һинең тауышыңды йырға әйләндереп, уйнап ебәрәме ни?.. Сафлығын әйт әле һин ул яңғырауҙың!.. – тине Хасбулат олатай ҙа, тәү ишеткән кеүек һоҡланып. Күрәһең, ул минең тура һорауыма яуап бирергә ашыҡмай.

– Иҫ киткес саф яңғырау... – тип ҡабатлай. Унан, баяғыса ғәйәт ҙур һаҡлыҡ менән, көршәкте минең ҡулымдан ала биреп ҡарап тора ла тағы миңә тоттора.

– Еңеллеген, нәфислеген ҡара һин уның! Кем уны ҡомдан, балсыҡтан эшләнгән көршәк тип әйтә алыр, ә? – тип аптырап, тел сатылдатып ҡуя.

Мин көршәкте тағы әйләндереп-тулғандырып, һәлмәкләп ҡарайым. Уның матурлығы, нәфислеге лә, иҫ киткес еңел һәм нескәлеге генә түгел, һөйләшкән тауышты ниндәйҙер ғәжәп яғымлы, серле яңғырауға әйләндереп ҡабатлап тороуы ла мине таң ҡалдыра. Мин, үтә ҡыҙыҡһынып:

– Хасбулат олатай! – тип ҡысҡырам тағы. – Был ни ғәләмәт?.. Ниндәй мөғжизә был, олатай?.. Йә, һөйләй һал инде!..

## IV

– ...Борон заманда, Кавказда, ҡаялы тау өҫтөндәге киң яйлала, кескәй генә бер ауыл булған. Ауылдың янында ғына күк йөҙө шикелле икһеҙ-сикһеҙ, осһоҙ-ҡырыйһыҙ киң зәңгәр күл ялтырап ятҡан. Ҡая өҫтөндәге иҫ киткес гүзәл күл. Тик ул күлдән кешеләр бер тамсы ла һыу эсә алмаған. Үтә татырлы булған уның һыуы. Ауыл кешеләре һыуҙы аҫта, бик тәрәндә, ҡая таш итәгендәге йыраҡанан сығып ятҡан кескәй генә шишмәнән ташып эскән. Боҙҙан һалҡын, көмөштән саф был шишмәгә ҡая битләп һығыла-бөгөлә һуҡмаҡ һуҙылған. «Ҡыҙҙар һуҡмағы» тип йөрөткәндәр уны. Сөнки ҡыҙҙар ошо һуҡмаҡтан бер өҙлөкһөҙ шишмәгә йөрөп торған...

Әйткәндәй, ул яҡта ҡыҙҙар һыуҙы тар үңәсле көршәк һауыттар менән ташый икән. Боҙ шикелле һалҡын, саф шишмә һыуы тултырылған көршәкте яурындарына ултырталар ҙа, һаҡ, һалмаҡ ҡына баҫып, нескә билле ҡырмыҫҡалар шикелле, баяғы һуҡмаҡ менән йүрмәләйҙәр ҙә йүрмәләйҙәр, ти... Мәҙәк бит, ә?.. Беҙгә – мәҙәк. Ә уларға – түгел. Тау текә, юл ҡырын... Төрлө хәл була. Аяҡ саҡ ҡына яҙа баҫһа, көршәк ялп итеп ергә осоп төшә. Ватыла. Етмәһә, ябай балсыҡтан арлы-бирле һупалап яһалған был көршәктәрҙә һыу тиҙ ҙә боҙола, үҙенең шишмәләге сафлығын, татлылығын да юғалта икән...

Һыу ташый торған көршәктәрҙең тупаҫ һәм ауыр булыуы ла ҡыҙҙар өсөн бигүк уңайлы булмаған, әлбиттә. Ә бит кешегә күпме һыу кәрәк?! Быны үҙ елкәләрендә татығас, баяғы һыу ташыусы ҡыҙҙар яҡшы белгәндәр инде...

Көршәктәрҙең шундай килбәтһеҙ һәм бик тиҙ ватылыусан булыуы өсөн ауылда бары тик бер генә кеше көйөнмәгән.

Киреһенсә, һөйөнгән генә. Сөнки көршәктәр ни хәтле тиҙерәк, йышыраҡ ватылһа, уға шул хәтле күберәк табыш килгән. Был кеше ошо ауылдың көршәк яһаусыһы «Өйрәнсек» булған. Ғүмер буйы шул эш менән көн күреп тә, бер ҡасан да ысын оҫта була алмаған өсөн, ауыл халҡы, көлөп, уға «Өйрәнсек» тип исем ҡушҡан.

Был ауылда «Өйрәнсек» менән йәнәш тағы бер оҫта йәшәгән. Уныһы ла шулай уҡ балсыҡтан, ҡомдан әүәләп сәй эсә торған касалар яһай икән. Ауылдаштары был оҫтаны бик яратҡан, хөрмәт иткән. Сөнки ул үҙенең эшенә бөтә йәнен, йөрәген һалып эшләй, ул яһаған касалар шундай нәфис, йоҡа һәм еңел булып сыға. Уның эсендә сәй айырыуса тәмле, татлы була икән. Шуға күрә халыҡ уны хөрмәтләп «Һөнәрсе» тигән ҡушамат биргән. Был яҡта, ул заманда, күрәһең, ошонан да ҙурыраҡ һөнәр булмағанға, «һөнәрсе» һүҙе иң оло һәм хөрмәтле һүҙ булған.

Шулай итеп, был ике күрше бик оҙаҡ ғүмер иткән. Баратора, ауылдаштары ғына түгел, хатта улар үҙҙәре лә мулла ҡушҡан төп исемдәрен онотҡан. «Өйрәнсек» һәм «Һөнәрсе» булып йәшәй биргән. Өйрәнсек һаман шул үҙенең тупаҫ һәм йәмһеҙ балсыҡ көршәктәрен эшләгән. Уларҙы матурлау хаҡында уйлап та ҡарамаған. Үҙ эшенән сикһеҙ риза һәм шат булып йәшәй биргән. Һөнәрсе, киреһенсә, бер ҡасан да тынғы белмәгән, эшенән бер ҡасан да ҡәнәғәт булмаған, һәр ваҡыт эҙләнгән, өйрәнгән. Шуға, ахыры, ул үҙ һөнәрендә көндән-көн үҫкән, камиллашҡан. Һәр бер каса уның өсөн яңы асыш, яңы уңыш булған.

Эштән ҡалған ваҡытында Һөнәрсе тауҙар, урмандар гиҙгән. Әйләнә-тирәне, ағас-ташты ентекләп өйрәнгән. Үҙен өҙләкһеҙ борсоп торған һорауҙарға тәбиғәт ҡуйынынан яуаптар эҙләгән. Алыҫ ҡалаға барып, үҙенә хәтле йәшәгән бөйөк һөнәрселәрҙең эштәре менән дә танышып ҡайтҡан.

Һөнәрсене иң бошондорған нәмә – Өйрәнсектең теге тупаҫ балсыҡ көршәктәре булған.

«Ниңә үҙ һөнәрен камиллаштырмай был Өйрәнсек? Әллә һәләте юҡмы? Улай икән, ниңә булаша? Ниңә ауылды тупаҫ, йәмһеҙ көршәктәр менән тултыра? Үҙ тамағың туҡ булһын өсөн генә, кешеләрҙең күңелен йәмһеҙлеккә, тупаҫлыҡҡа күнектерергә яраймы ни?!» – тип көйөнгән Һөнәрсе. Өйрәнсектең күңелендә лә ошондай көйөнөс уятырға тырышҡан:

– Беҙҙең эш ауылдаштарҙы һөйөндөрөргә тейеш. Ә беҙ көйөндөрәбеҙ түгелме һуң?! Әйҙә бергәләп эҙләнәйек, бәлки, бығаса бер кем дә эшләй белмәгән көршәктәр яһарбыҙ, – тигән.

Өйрәнсек көлгән генә:

– Һай, ахмаҡ! – тигән. – Һәр ватылған көршәк – яңы табыш бит ул!..

– Улай булһа, күрше, үпкәләштән булмаһын – мин дә көршәктәр эшләй башлаясаҡмын, – тигән оҫта. – Тик һинеңсә түгел, ә үҙемсә. Үҙ йөрәгем теләгәнсә итеп эшләрмен…

Өйрәнсек тағы ла мыҫҡыллыраҡ итеп ҡысҡырып көлгән.

– Рәхим ит, эшлә! Һай, ахмаҡ, көршәкте ни төҫлө генә итеп яһаһаң да, көршәк булыр инде ул!.. – тигән.

Һөнәрсе эҙләнеүен дауам иткән. Һаман шулай тауҙар, далалар гиҙгән. Ер ҡаҙыған, таш аҡтарған, текә ҡаялар аҫтына, мәмерйәләргә төшкән. Һәр осраған ташты, ҡомдо һынап ҡараған. Арып, йонсоп, яланғасланып бөткән, әммә эҙләнеүҙән туҡтамаған. Ахыр сиктә теләгенә ирешкән. Тәбиғәт уға үҙенең йәшерен серҙәрен асҡан. Берҙән-бер көндө Һөнәрсе тап бая көндөҙ мин һиңә күрһәткән кеүек мөғжизәле көршәкте эшләү



бәхетенә ирешкән. Ысынлап та, уға хәтле бындай көршәкте эшләй белгән дә, ундай мәңге уңмаҫ буяуҙарҙы ҡулланған да кеше булмаған. Күрҙең бит, ниндәй нәфис көршәк!.. Яңы ғына тумалған томбойоҡ сәскәһеме ни?! Ниндәй ҡомдан эшләнгәндер ҙә, ниндәй илаһи буяуҙар менән буялғандыр инде ул. Анауы теп-тере сәскәләрен, еңеллеген, нәфислеген мин әйтәм. Иҫ киткес оҫта булған инде ул Һөнәрсе!..

Аҡбулат мәрхүм миңә:

– Был көршәк яһаған ҡомдо ла, уның юйылмаҫ буяуҙарының серен дә ошоғаса белгән кеше юҡ әле, – тип һөйләгәйне. Эйе, ысын, шулай тине ул. Һай эттәгенәһе, анауы Өйрәнсекте әйтәм әле, бигерәк тә моңһоҙ нәмә булған икән. Өйрәнеп ҡалырға теләмәгән бит, яуызың. Ә бит Һөнәрсе уға:

– Мин иҫән саҡта белеп ҡал, – тип күпме ялынған. Ә ул – Өйрәнсек – һаман тәкәбберләнеп көлгән генә.

– Юҡ өсөн баш ватып, ғүмер ҡыҫҡартырға мин алйотмо ни? – тигән. Улай ғына ла түгел, Һөнәрсене кешеләргә алйот, дәрүиш итеп күрһәтергә лә тырышҡан хатта:

– Ҡарағыҙ инде анауы алйотто! Һыу көршәге яһау өсөн шул тиклем күҙ нурын түгеп ултыра бит, дәрүиш! Һыуҙы ни уны матур һауытҡа һалдың ни ҙә, насар һауытҡа һалдың ни, һыуҙан барыбер алтын сыҡмаҫ, – тип үҙенсә фәлсәфә һатҡан.

Һөнәрсе уның өйрәнергә теләмәүенән бигерәк, тупаҫ һәм насар эшенән үҙе шул тиклем ҡәнәғәт булып йәшәүе өсөн айырата әсенгән.

«Юҡ. Мин һине яҡшы менән яманды айырырға өйрәтермен. Ауылдаштарҙың йорттарын эшкинмәгән көршәктәр менән сүпләүҙән туҡтатырмын!» – тип ант иткән. Һәм шулай булып сыҡҡан да. Көршәктәрҙе көндән-көн һәйбәтерәк һәм нәфисерәк итеп эшләй башлаған. Көндө-төндө, алды-ялды белмәгән. Бер өҙләкһеҙ баяғы көршәктәрҙе эшләп бүләк итә башлаған. Бара-тора Өйрәнсектең тупаҫ балсыҡ көршәктәренә көн бөткән. Инде уларҙы һатып алыусы түгел, буш алыусы ла булмаған. Бына шунда инде Өйрәнсек Һөнәрсе янына үҙе үк боролоп ингән. Түбәнселекле, мөләйем тауыш менән сәләм биргән. Түргә уҙған. Һөнәрсенең бөтә өйө тулып, йондоҙ кеүек йымылдашып ултырған ғәжәп зифа, сын яһау көршәктәрҙең әле береһен, әле икенсеһен алып, баш сайҡап, тел сатылдатып торған.

– Өйрәнергә килдеңме? Минең менән бергәләп эшләргә булдыңмы? – тип ҡыуанған Һөнәрсе. – Әгәр теләгең ихлас булһа, әйҙә, ултыр. Хәҙер үк бөтә серҙе асып һалам!..

Был тиклем саф күңеллелек һәм бер ҡатлылыҡҡа күңеле йомшарып киткән Өйрәнсек ең остары менән күҙҙәрен һөртөп алған. Ялыныслы һәм меҫкен ҡиәфәт менән Һөнәрсегә тилмереп ҡараған. Ысынлап уҡ иламһыраған тауыш менән:

– Дуҫ!.. Ҡорҙаш!.. – тип өндәшкән. – Һинең камил аҡылың, алтын ҡулдарың алдында мин баш эйәм. Теләһәң, һиңә Алла итеп табынырға ла әҙермен. Тик һинең изге кәңәшеңдә мин, нисек кенә теләһәм дә, ҡабул итә алмайым. Ни өсөн тиһәң, Хоҙай мине бындай таланттан мәхрүм иткән. Эйе, өйрәнә алмайым мин бындай гүзәл һөнәргә!.. Инде миңә астан үлеүҙән башҡа сара ҡалманы. Сөнки хәҙер кешеләр минең көршәктәргә әйләнеп ҡарарға ла теләмәйҙәр...

Өйрәнсек шул һүҙҙәрҙе әйткән дә, Һөнәрсе янына келәмгә ултырып, бала шикелле үкһеп илай башлаған:

– Эй Аллам, ниңә һин мине ошондай илаһи таланттан мәхрүм иттең?

«Ысынлап та, уның хәле мөшкөл дә баһа! Уға нисек ярҙам итергә һуң?! Өйрәнсектең тамағы туҡ булһын өсөн генә, теге тупаҫ балсыҡ көршәктәр менән ауылды сүпләргә юл ҡуйып булмай ҙа баһа?!» – тип аптыраған хәҙер Һөнәрсе. «Ә күршегә ярҙам итергә кәрәк бит. Тик ҡалай итеп?!»

Ахыр ул Өйрәнсеккә тағы өмөтлө ҡараш ташлаған:

– Бәлки, өйрәнеп ҡарарһың? Айыу балаһы ла өйрәнә: һин кеше бит әле...

Өйрәнсек, бер ҡатлы Һөнәрсенең күңеле тамам йомшарып етеүенә, үҙен ихлас йәлләй башлауына тамам төшөнөп алғас, күптән уйлап килгән хәйләһен тормошҡа ашырырға керешкән.

– Һөнәрсе ҡорҙаш! – тигән ул тауышына тағы ла нығыраҡ меҫкенлек сығарып. – Әгәр һин мине ысынлап та йәлләһәң, хәлемә инергә теләһәң, әлбиттә, булдыра алаһың. Эйе, минән көсөмдән килмәгән эште талап итмәйенсә үк, мине аслыҡтан ҡотҡара алаһың...

– Нисек?! Йә әйтә һал!.. Ҡалай итеп мин һиңә ярҙам итә алам?! – тип, аптырап та, ҡыуанып та киткән Һөнәрсе. – Әгәр ундай эш ҡулымдан килһә, һинең өсөн йәнем фиҙа!..

– Бар. Ундай мөмкинлегең бар, ҡорҙаш! – тигән Өйрәнсек, инде тамам баҙнатланып. – Әйтәйек, бына был мөғжизәле көршәктәрҙе һин эшләй беләһең. Ә эшеңдең емешен ашай белмәйһең... Йә, үҙ эшенең баһаһын белгән ниндәй кеше ошо хәтле ауыр хеҙмәт емешен кешеләргә буш бирер? Йә, ҡара инде,

хәҙер ауылдың аяҡҡа баҫҡан бөтә ҡыҙы һинең ошо гүзәл көршәктәреңде күтәреп шишмәгә йөрөй. Ә һин, шул мөғжизәле көршәктәрҙе тыуҙырыусы кеше, ас-яланғас, көн-төн күҙ бөтөрөп үҙеңдең ҡараңғы өйөңдә төңкәйеп ултыраһың... Һинең урынында башҡа берәү был һөнәр менән әллә ҡасан байып бөтөр, хатта батша һарайында йәшәп ятыр ине. Былдай көршәктәр хатта батша кәнизәктәрендә лә юҡ бит! Беләһеңме?! Ә һин шуларҙы былай, бушлай...

Һөнәрсенең әле генә өмөтләнеп, яҡтырып киткән йөҙөнә ҡайтанан һөрөм йүгерә.

– Нимә һөйләйһең? Нимәгә өйрәтмәксе булаһың һин мине? – тип ҡысҡырып бүлдерә ул Өйрәнсекте. – Халыҡтың ҡыуанысы, рәхмәте минең хеҙмәтемдең иң оло баһаһы икәнен аңламайһыңмы ни һин? Минең өсөн ауылдаштарымдың кинәнеүенән дә ҙур баһа юҡ.

– Рәхмәт менән тамаҡ туямы? – тип һорай Өйрәнсек инде, ғәҙәтенсә, мыҫҡыллы көлөп. – Өҫ бөтәйәме?!

– Тамаҡ нимә ул? – тип күңелһеҙ генә ҡарыулаша тамам кәйефе боҙолған Һөнәрсе. – Тамаҡ ни ул үҙем менән бергә китер, ә көршәктәр һаман йәшәп ҡалыр, һаман хеҙмәт итер...

– Һай, сабый!.. – тип, хатта ҡысҡырып уҡ көлә хәҙер Өйрәнсек. – Күрше, ҡорҙаш!.. – тип, Һөнәрсенең арҡаһынан дуҫтарса һуҡҡылап ала. – Валлаһи, тип әйтәм, һин төптө сабый икәнһең!.. Улай ғына ла түгел, дәрүиш!.. Диуана!..

– Шулай ҙа булһын, – ти Һөнәрсе, тамам күңелһеҙләнеп. – Миңә үҙемдең холҡом оҡшай. Ә башҡаларҙа минең эшем юҡ.

Һөнәрсе, шуның менән һүҙ бөткәнлекте аңлатып, иҙәнгә ҡуйған көршәкте ҡулына ала, тау сәскәһенең ҡыяҡтары өсөн буяу һайларға керешә. Ләкин Өйрәнсек тә тиҙ генә бирешергә теләмәй. Мәкерле хәйләһен тормошҡа ашырыу өсөн, тағы меҫкен тауышҡа күсә. Ялынып, Һөнәрсенең алдына теҙләнә.

– Һин бит үҙең, ҡорҙаш, миңә ярҙам итергә теләйем тинең! Ысын күңелдән әйткәнһеңдер бит инде һин был һүҙҙе?! – тип ныҡыша.

– Мин ысын күңелдән булмағанды һөйләй белмәйем, – ти Һөнәрсе.

– Улай булһа, бына нимә! – тип елкенеп китә тағы Өйрәнсек. – Һин мине үҙеңә ярҙамсы итеп алаһың. Йәғни һин, ғәҙәттәгесә, көршәктәр эшләйһең. Ә мин уларҙы аҙыҡҡа, кейемгә әйләндерәм. Һине аслыҡтан, яланғаслыҡтан ҡотҡарам. Шунан ҡалған-боҫҡанынан үҙемә лә аҙ-маҙ өлөш сығарырмын.

Ә бүтәнсә һин миңә бер төрлө лә ярҙам итә алмайһың, ҡорҙаш,– ти. – Дөрөҫөн әйткәндә, был уй минең башта үҙ турамда ҡайғыртыуҙан бигерәк һинең хаҡта уйлау арҡаһында килеп тыуҙы, – тип тә өҫтәй.

Сикһеҙ ныҡ ғәжәпләнеүҙән Һөнәрсенең ҡулындағы көршәге төшөп китә яҙа. Ул, ғүмерендә тәү күргән кеүек итеп, аптырап, Өйрәнсеккә ҡарай.

«Күрәһең, уның хәле ысынлап та бик мөшкөлдөр?! Юҡһа, үҙ теләге менән бындай эшкә барыр инеме ни ул?! – тип уйлай. – Тимәк, уға ошондай түбәнлеккә барыуҙан башҡа сара ҡалмаған!» – тип Өйрәнсекте ысын күңелдән йәлләп ҡуя. Сөнки уның үҙе өсөн ауыр хеҙмәт емешен кешеләргә бүләк итеүҙән дә ләззәтле, һатып биреүҙән дә ғазаплы эш булмай.

– Өйрәнсек, һин дөрөҫ әйтәһең. Минең һиңә башҡаса ярҙам итергә һис бер мөмкинлегем юҡ. Ләкин был эш һиңә ауыр булмаҫмы һуң? – тип уңайһыҙланып һорай ул Өйрәнсектән.

– Ауыр булһа, нисек итәһең? – тип меҫкенләнә Өйрәнсек. – «Яҡшылыҡты эшлә лә диңгеҙгә ырғыт – халыҡ белер, халыҡ белмәһә, балыҡ белер», тип юҡҡа ғына әйтеп ҡалдырмағандар бит боронғолар, – тип, ғәҙәтенсә, һүҙенә оҫталыҡ, үҙенә олпатлыҡ бирергә тырышып, халыҡ мәҡәленә тотоноп ала. – Күршең ошо хәтле хикмәтле эш эшләй белһен, көнөн-төнөн бил бөксәйтеп эшләп ултырһын. Үҙе ас-яланғас тигәндәй йәшәһен. Ә һин, йәнең-тәнең иҫән-һау көйө, шуны тыныс ҡына ҡарап ят. Уға ҡулыңдан килгән яҡшылыҡты эшләмә... Йә, шул буламы күршелек?! – тип, һүҙҙе бөтөнләй икенсе яҡҡа бороп алып китә. – Һиңә, хөрмәтле күршемә, ҡулымдан килгән яҡшылыҡты эшләгем бик килә минең!.. – ти.

Инде Һөнәрсе, Өйрәнсектең был тиклем изгелеклегенә хайран ҡалып, ғәйәт ҙур түбәнселек менән тыңлап ултыра.

«Бына бит, донъяла ниндәй изге күңелле кешеләр була!.. Ә һин улар менән йәнәшәлә йәшәйһең, хатта уларҙың шундай икәнен белмәй ҙә үлеп китәһең... Һай, был иғтибарһыҙлыҡ!..» – тип, эстән генә аптырап, әсенеп тә ала.

## V

Ошо һөйләшеүҙән һуң күп тә үтмәй, Өйрәнсек, Һөнәрсенең ер иҙәнле, ярым ҡараңғы өйөндә көҙгө йондоҙҙар шикелле сағыу балҡып ултырған был мөғжизәле көршәктәрҙең бары-

һын йыйып алып, ауылдан сығып уҡ китә, ә Һөнәрсе, ғәжәтенсә, алды-ялды белмәй, эшләүен дауам итә. Шулай күпмелер ваҡыт үткәс, Һөнәрсе тағы байтаҡ көршәктәр яһағас, бик ныҡ байып, алтын-ебәккә мансылып, Өйрәнсек ҡайтып төшә. Һөнәрсегә ебәк сапан, аҡ сәллә, ситек-кәүеш кейҙерә. Он, сәй, шәкәр кеүек нәмәнән дә өлөш сығара.

– Бына, хеҙмәтеңә күрә – хөрмәте. Әйҙә, бығаса төшөңә лә инмәгән һыйҙы Өйрәнсек дуҫыңдан күреп йәшә, – ти.

Был хәтле йомартлыҡҡа, хәстәрлеккә Һөнәрсенең күңелендә тыуған рәхмәттең иге-сиге булмай.

– Ысын дуҫ икәнһең һин, Өйрәнсек! – ти Һөнәрсе. – Һинең был тиклем яҡшылығыңды ни менән генә ҡайтара алырмын икән һуң мин? – тип аптырай. Тик Өйрәнсек кенә аптырамай.

– «Күрше хаҡы – тәңре хаҡы» тигәндәр, һине бер ҡыуандырыу – үҙе бер ғүмер бит ул миңә, – тип яуап бирә һәм, устарын ыуа-ыуа, Һөнәрсенең яңы көршәктәре янында өйөрөлә, кәйефенең күтәрелеүен йәшерә алмай, хатта ирендәрен сапылдатып ҡуя.

– Һәйбәт!.. Бик шәп!.. Илла, ысынлап та, һөнәрсе лә инде һин, күрше!.. – ти.

Һөнәрсе изгелекле күршеһенең алдында, уңайһыҙланып, ҡул ҡаушырып тора. Өйрәнсектең хәйләкәр күҙҙәрендә ниндәй шайтан бейегәнен күрмәй ҙә, абайламай ҙа.

– Йә, ярар, – тип уғата ҡәнәғәт тауыш менән үҙенсә һығымта яһап ҡуя Өйрәнсек. – Мин иртәгә үк тағы юлға сығам. Был көршәктәрҙе лә шәп кенә итеп оҙата һалырға кәрәк…

Шулай тағы күпмелер йыл үтә. Ике күрше дуҫ-татыу ғүмер итә. Һөнәрсе, ғәҙәттәгесә, яныып-ярһып көршәктәр яһай. Өйрәнсек уларҙы төрлө яҡҡа йөрөтөп һата. Өйрәнсек был эштә, ысынлап та, сикһеҙ ҙур оҫталыҡ, йылғырлыҡ күрһәтә. Һөнәрсенең төшөнә лә инмәҫлек мең төрлө мутлыҡтар эшләй. Һәр көршәктән биш хаҡ һығып сығарыуға өлгәшә. Бара-тора ауылдың иң ҙур байы булып ала. Һөнәрсе лә, шул уҡ балсыҡ өйөнән ҡотола алмаһа ла, туҡ, бөтөн йәшәй. Хәҙер уға тамаҡ, өҫ-баш хаҡында уйламай, үҙенең йәне-йөрәге менән һөйгән эшенә тотошлай бирелергә мөмкин. Ул хәҙер теләгәнсә тауҙар, далалар гиҙә, тәбиғәттең яңынан-яңы серҙәрен өйрәнә. Көршәктәрҙе тағы ла матурыраҡ, тағы ла нәфисерәк итер өсөн яңынан-яңы буяуҙар, төҫтәр таба. Көршәккә төшөрөлгән сәскәләр төрөн тағы ла күбәйтә, уларҙы ысын сәскәләргә тағы ла ныҡ оҡшатырға тырыша. Уның хәҙер был эштәр менән иркенләп шөғөл-

ләнергә, баштан-аяҡ сумып эшләргә мөмкинлеге бар. Дөрөҫ, Өйрәнсектең һатыу-алыуҙа артыҡ тырыш булып сығыуы, уны көршәктәрен, элеккесә, кешеләргә буш биреп, ҙур ҡәнәғәтлек, бөйөк ләззәт татыу кеүек кешегә хас тойғоларҙан бөтөнләй мәхрүм итеүе уны йыш ҡына бошондора ла. Бигерәк тә Өйрәнсектең эшләнеп бөткән бер көршәкте ҡулдан тартып тигәндәй алып китеп тороуын, шул арҡала хәҙер үҙенең ҡул емешенә ҡат-ҡат ҡарап, һоҡланып, ҡыуанып, хатта серле генә итеп улар менән һөйләшеп-серләшеп ултырыу бәхетенән мәхрүм булыуҙы кисереүе лә ауыр уға. Ләкин Һөнәрсе мөмкин тиклем бындай кисерештәрҙе үҙенән алыҫыраҡ ҡыуырға, нужанан ҡотҡарған кешенең хәтерен ҡалдырмаҫ өсөн, быны Өйрәнсеккә белдермәҫкә, көршәктәрҙе тағы ла йәһәтерәк һәм матурыраҡ итеп эшләү менән йәнен тынысландырырға тырыша.

«Өйрәнсек тегеләрен һатып ҡайтҡансы, исмаһам, былары оҙағыраҡ янымда торор, – тип ашҡынып эшләй. – Бәлки, берәй ауылдаш килеп инһә, бүләк итеп бирергә лә өлгөрөрмөн», – тип эшен сәғәт теүәллегендә башҡара.

## VI

Тиҫтәләгән йылдар һиҙелмәй уҙып киткән. Ҙур, көмрө танаулы, супай күҙле, бәләкәс кенә шәрә башлы Өйрәнсек беҙҙең Уралдағы таҙғара тигән бөркөткә оҡшап ҡалған. Ҡорһағын май, битен йөн баҫҡан. Ә оҙон буйлы, ҡаҡса яңаҡлы Һөнәрсе тағы ла нәҙегәйеп, дуға кеүек бөгөлөп төшкән. Уның ғәжәп аҡыллы ҡарашлы уйсан күҙҙәрендә лә инде элекке ҡанатлы дәрт, бәйһеҙ сәм түгел, ә тәрән моң, әйтелмәгән зар сағылған. Һөйгән эшенең емешен татыу бәхетенән мәхрүм булып йәшәү ҡайғыһы уның бөтә йөрөш-торошона үҙенең тамғаһын һалған. Әйе, юҡҡа ғына ул үҙен быҒаса: «Ниңә бошонорға? Көршәктәрҙе һин халыҡ өсөн эшләйһең. Өйрәнсек уларҙы халыҡҡа еткерә. Һиңә тағы нимә етмәгән?!» – тип тынысландырырға, халыҡҡа еткереү юлының үҙенсә барып сыҡмауын танымаҫҡа тырышты. Ләкин күңел төбөнән выждан тауышы һәр саҡ уның был уйын кире ҡаға килде: «Үҙ-үҙеңде алдама, Һөнәрсе! Был эш һинеңсә барып сыҡманы... Әйе, нимәһелер һинеңсә, һин теләгәнсә булманы быының...» – тип эсенән һөрәнләне бит выждан!..

Ғүмер үткән һайын, был тынғыһыҙ уй ҡуйырған. Бара-тора ул хатта түҙгеһеҙгә әйләнгән. Һөнәрсе күҙгә күренеп шиңә,

һүнә башлаған. Ә Өйрәнсек уға тын да алырға ирек бирмәгән. Һөнәрсе ни хәтле йонсоһа, ҡартайһа, ул шул хәтле уны ашыҡтырған, һаман күберәк, етеҙерәк, матурыраҡ эшләүҙе талап иткән.

– Көршәктәр хәҙер арзанайҙы. Күберәк эшләмәһәң, икмәклек тә аҡса табып булмаясаҡ! Һин яңғыҙ. Ашамай ҙа түҙерһең. Ә минең бит итәк тулы бала. Мин уларҙы нисек аҫрармын? – тип зарланып, ҡамсылап ҡына торған.

Яҡшы атҡа ҡамсы кәрәкме ни? Һөнәрсе, әлбиттә, Өйрәнсек ҡыуған өсөн генә түгел, ә эш ятратҡаны өсөн, эшһеҙ бер генә минут та тик ултыра алмаған өсөн, арыуын да, ауырыуын да иҫәпкә алмай, эшләүен дауам иткән. Һәр таңды яңы эш, яңы көршәк менән ҡаршылаған. Ғүмерҙең һуңы етеп килеү ҙә уны ашығырға мәжбүр иткән.

Бер саҡ Һөнәрсе нәүбәттәге көршәкте таң алдында ғына эшләп бөткән. Еҙ башлы йылан булып үрелеп сыҡҡан нәфис тотҡа төбөндә үҫкән тау ландышының йәшел ҡыяғына, ғәҙәттәгесә, «Һөнәрсе» тип, матурлап яҙып ҡуйған. Унан, сабый бала шикелле, эскерһеҙ һәм ғәжәп һөйкөмлө йылмайып, ҡәҙерләп-һөйөп, уны үҙенең ҡаршыһына, башҡа көршәктәр янына ҡуйған.

Тау артынан сағыу ҡояш балҡып сыҡҡан. Ул Һөнәрсенең тәпәш өйөнә мул итеп алтын нур шәлкеме һирпкән. Әле генә энәнән-ептән сығып, келәм өҫтөндә наҙланып ултырған көршәктең тере сәскәләре мең төрлө нур бөркөп бейергә, ынйы бөртөктәре шикелле емелдәргә, ҡыуанып-кинәнеп көлөргә керешкән. Уларҙан хатта тирә-яҡҡа хуш еҫ тә бөркөлгән һымаҡ булған... Тәпәш, ҡараңғы өй эсе үтә сағыу нур һәм хуш еҫ менән тулған. Һөнәрсе, үҙ ҡулдары тыуҙырған был мөғжизәле матурлыҡҡа тәү тапҡыр ҡәнәғәт һәм ысын һоҡланыу менән ҡарай-ҡарай, әкрен генә янтайып, келәмгә ятҡан...

Һәр ваҡыттағыса, ҡояш сығыу менән, ҡайтанан эшкә тотондороу һәм әҙер көршәктәрҙе алып сығыу ниәте менән ашығып килеп ингән Өйрәнсек, Һөнәрсегә ғәйәт шелтәле ҡараш ташлап, бик оҙаҡ баш сайҡап торған:

– Ай-й-яй-й-й-яй!.. Йә, эш ни самай ҡыҙған ғына сағында... Нимә эшләп ҡуйған бит, ә? Һай, байғош!.. Йәшәү өсөн эшләй белеү генә етмәүен тәки белмәй китте бит, ә! Дәрүиш булып йәшәне, дәрүиш булып үлде бит байғош, ә... – тип, үҙенсә фәлсәфә һатҡан.

## VII

Ауылдаштары оҫта ҡуллы, изге күңелле Һөнәрселәрен юғалтыу ҡайғыһынан арынып та етмәҫтән, Өйрәнсек тағы көршәктәр менән һатыу итә башлаған.

– Өйрәнсек был көршәктәрҙе ҡайҙан ала икән тағы?

– Ҡарасы үҙҙәрен. Ике тамсы һыу кеүек Һөнәрсенең көршәктәренә оҡшай торалар ҙа баһа! – тип ғәжәпләнгән кешеләр. Өйрәнсек һис тә аптырамаған.

– Мин был мөғжизәле көршәктәрҙе яһауҙың серен күптән белә инем инде. Тик Һөнәрсе йәшәһен тип, уның икмәген тартып алмайым тип кенә быға саҡлы уларҙы яһамай торҙом, – тигән. – Ышанмаһағыҙ, бына ҡарағыҙ! – тип гәҙәттәге «Һөнәрсе» тигән яҙыу урынына төртөп күрһәткән. Ысынлап та, бында, тау ландышының сөм йәшел ҡыяғына ҡып-ҡыҙыл буяу менән яҙылған «Һөнәрсе» һүҙе урынында, хәҙер күк ҡыяҡҡа ҡара буяу менән яҙылған «Өйрәнсек» тигән тамға тора икән.

– Йә, күрҙегеҙме? – тигән Өйрәнсек һауалы тауыш менән. – Аңланығыҙмы инде?

Кешеләр аптырауҙан «аһ!» иткәндәр. Яманлыҡты нисек тә тиҙерәк онотторға, ысын, яҡшы эш алдында баш эйергә әҙер булған бер ҡатлы ябай халыҡ Өйрәнсеккә шунда уҡ ышанған. Уның насарлыҡтарын онотҡан, ғәфү иткән. Хатта оҙаҡламай Өйрәнсекте маҡтарға, уның менән ғорурланырға ла керешкән.

– Ҡара һин уны, ҡандай оҫта ҡуллы икән дә баһа беҙҙең Өйрәнсек! Һөнәрсенән бер ҙә кәм яһамай ҙа баһа ул көршәктәрҙе! – тип һоҡланған.

Һәр саҡ тере һәм кәрәкле кеше алдында баш эйергә, «бәлки, берәй файҙаһы тейер тип», уға ярап ҡалырға яратыусы ҡайһы берәүҙәр хатта:

– Валлаһи, тип әйтәм, Өйрәнсектең көршәктәре Һөнәрсенекенән шәберәк! – тип тә ебәргән. – Былай булғас, Һөнәрсенеңдан ҡояшы байыны! – тип лаф орған.

Кемгә, нимәгә булһа ла табынмаһа, үҙен бөтөнләй көҙгө арыш ҡамылы кеүек ҡыу тоя башлай торған меҫкен йәндәр шунда уҡ Өйрәнсектең тыйнаҡлығы һәм намыҫлылығы алдында баш эйергә, уны данларға, маҡтарға тотонған.

– Йә Хоҙа!.. Донъяла шул хәтле лә тыйнаҡ, шул хәтле лә изге йәнле кешеләр була икән дә баһа!.. Ҡара һин уны, Һөнәр-

сенән дә шәберәк оҫта булған көйө, ул йәшәһен тип, был һөнәргә тотонмай торған бит!..

– Бөйөк оҫта!.. Тиңһеҙ һөнәрсе! Ә үҙе көршәктәренә ҡултамғаны «Өйрәнсек» тип кенә ҡуйған. Ниндәй кеселеклелек!.. Тиңһеҙ баҫалҡылыҡ!.. Тиңдәшһеҙ намыҫлылыҡ!.. – тип Өйрәнсек исеменә мең төрлө маҡтау яуҙырған улар.

Шулай итеп, Өйрәнсектең даны бик тиҙ арала бөтә илгә таралған. Бара-тора хатта батшаның үҙенә лә барып еткән.

Бер саҡ батша Өйрәнсекте үҙ һарайына саҡыртып алған. Уның тормошо, эше менән үҙе ентекләп танышҡан. Өйрәнсектең көршәктәре батшаға ла бик ныҡ оҡшаған. Ысын сәнғәт хазинаһын яһалма, ялған сәнғәт әйберенән яҡшы айыра белә торған, уҡымышлы кеше булған был батша.

– Һин, ысынлап та, үҙ эшеңдең бөйөк оҫтаһы икәнһең! – тигән ул Өйрәнсеккә. – Бынауы тау ландышының ҡыяғын күк төҫкә буяуыңды йәки бынауы ҡултамғаңды ҡара буяу менән яҙыуыңды ғына алмағанда, был көршәк ысын талант емеше, – тип раҫлаған.

Ошо һөйләшеүҙән һуң батша Өйрәнсекте үҙ янында ҡалдырған, уға айырым һарай һалдырып биргән.

– Әйҙә шунда үҙ һөнәрең менән кинәнеп шөғөллән. Әгәр теләһәң, ярҙамсылар ҙа бирәсәкмен, – тигән.

Өйрәнсек батшаның бөтә хөрмәтен, ихтирамын ҙур ихласлыҡ һәм түбәнселек менән ҡабул иткән. Тик ярҙамсы алыуҙан ғына баш тартҡан.

– О, хөрмәтле падишаһ ғали йәнәптәре! – тигән ул, тәхет алдында теҙләнеп. – Миңә ярҙамсы кәрәкмәй. Әгәр мин был эштә кеше ярҙамынан файҙаланһам, минең күңелемдән илаһи нур ҡасыр, ул саҡта мин һеҙҙең өсөн был мөғжизәле көршәктәрҙе эшләй алмам тип ҡурҡам. Рөхсәт итегеҙ, миңә падишаһ ғали йәнәптәре, күкрәгемдә йәнем бар саҡта, һеҙгә үҙ ҡулдарым менән эшләп хеҙмәт итергә!.. – тип ялынған. Хатта, әҫәрләнеүҙең сигенә етеп, батшаның ҡатаһын да үбеп алған.

Өйрәнсектең был тиклем кеселекле булыуы батшаға тағы ла нығыраҡ оҡшаған.

«Ғәжәп изге кеше икән дә баһа был Өйрәнсек! Халыҡ белмәй маҡтамай икән үҙен», – тип уйлаған батша һәм Өйрәнсеккә һарайында үҙе теләгәнсә йәшәргә, эшләргә рөхсәт иткән.

Өйрәнсек батша һарайында ла үҙен һыуҙағы балыҡ шикелле ыҡсым, йылғыр тотҡан. Көндәрен һәм кистәрен батшаның башҡа ярандары менән һунарҙа, ҡунаҡта, кәйеф-сафала

уҙғарған. Тик таң алдында ғына ул, бөтә кешенән айырылып, үҙ һарайына ҡайтҡан, эш бүлмәһенә бикләнгән...

– Таң алдында һәм япа-яңғыҙ саҡта ғына килә миңә был илаһи оҫталыҡ, – тигән ул. – Ябай кешеләр татлы йоҡола саҡта тыуа был мөғжизәле көршәктәр!

Өйрәнсектең табындаштары уның ғәжәп булыуы, һәр таңда Алланың үҙе менән серләшеп алыуы, шул илаһи осрашыуҙың шаһиты булып ошо көршәктәр барлыҡҡа килеүе хаҡында яңынан-яңы уйҙырмалар таратҡандар. Батшаның кәнизәктәре лә инде һыуҙы алтын һауыттарҙа түгел, ә Өйрәнсектең мөғжизәле көршәктәре менән генә ташый башлағандар. Хатта батшаның үҙенә лә шарапты, элеккесә алтын кубоктарҙа түгел, ә ошо көршәктәрҙә биргәндәр. Сөнки көршәктәге һыу саф, шарап татлы көйө тора икән.

## VIII

Өйрәнсек ҡалған ғүмерен шулай батша һарайында йәшәп, ҡәҙер-хөрмәт, кейеф-сафала уҙғарған. Ә аҙаҡ инде, бик ныҡ һуңлап булһа ла Өйрәнсекте лә ғазраил иҫенә төшөргәс, уны – донъяла иң бөйөк, баҫалҡы кешене һәм батшаның иң яҡын ярандарынан берәүҙе – бығаса күрелмәгән ҡәҙер-хөрмәт менән ололап күмгәндәр. Ҡәберен аҡ мәрмәр менән ябып, уға «Иң бөйөк баҫалҡы кеше – «Өйрәнсек» тип тә алтын хәрефтәр менән яҙып ҡуйғандар. Өйрәнсектең тиңһеҙ оҫталығына тәрән ихтирам йөҙөнән, шунда уҡ аҡ мәрмәр өҫтөнә теге көршәктәрҙең береһен һис тә ҡупмаҫлыҡ итеп беркетеп ултыртҡандар. Һәм был ҡәбер оҙаҡ йылдар буйы изге урын булып һаналған. Ҡәбер юлынан кеше өҙөлмәгән. Ә Һөнәрсенең ҡәберен иҫкә алыусы ла, белеүсе лә булмаған. Үҙе лә тамам онотолған.

Йылдарҙы ҡыуып йылдар уҙа торған. Өйрәнсекте бөйөк һөнәрсе тип ололап, ҡәҙер-хөрмәт күрһәткән яҡшы күңелле батша ла бер саҡ донъяны ҡалдырған. Бара-тора ил дә, кешеләр ҙә танымаҫлыҡ булып үҙгәргән. Тик теге мөғжизәле көршәктәр генә һаман иҫкереүҙе лә, ватылыуҙы ла, төҫ үҙгәртеүҙе лә белмәй йәшәй биргәндәр. Уларҙы яурын баштарына ултыртып, йәш ҡыҙҙар һаман элеккесә, һығыла-бөгөлә, ҡая битләүе буйлап һуҙылған һуҡмаҡтан тау шишмәһенә һыуға йөрөгән. Көмөштәй саф, балдай татлы шишмә һыуы һаман элеккесә һыуһағандың һыуһынын ҡандырған, арығанға хәл индергән, сырхағанға шифалы дауа булған. Кешеләр һаман, элеккесә,

был көршәктәрҙең матурлығына, нәфислегенә һоҡланып, сәскәле биҙәктәренең күҙҙең яуын алып тороуына ҡыуанып, йөрәктәренә ял алған.

Өйрәнсектең ҡәбере өҫтөндәге көршәк тә шулай уҡ һаман элеккесә йәйғор шикелле бөтә төҫтәрҙә йымылдап, үҙгәреү, төҫ һалыуҙы белмәй ултыра биргән.

Шулай тағы күпмелер ваҡыт үткән. Һәм бына бер саҡ иң бөйөк, баҫалҡы кешене иҫкә алырға тип йыйылып килгән халыҡ, уйламағанда, көршәктә ниндәйҙер үҙгәреш булыуын абайлап алған. Көршәк бөгөн, нисектер, айырата матур һәм көслө булып, мең төр нур сәсрәтеп балҡып ултыра икән.

– Был ни хикмәт!!! – тип аптырап ҡалған халыҡ. – Ниндәй ғәләмәт!.. Көршәк үҙгәргән дә баһа!.. Бында Һөнәрсе яһаған көршәк ултыра ла баһа! Моғайын, берәйһе алмаштырып киткәндер!

Ләкин юҡ, улай түгел. Көршәк ҡымшанмаған да. Шул тәү нығытылған көйө ултыра!.. Тик ҡултамғаһы ғына бүтән!..

Ысынлап та, көршәктә көтөлмәгән үҙгәреш барлыҡҡа килгән: унда тау ландышының ҡыяғынан «Өйрәнсек» тигән яҙыу менән күк буяу эҙһеҙ юйылған. Уның урынына хәҙер шатлыҡ йәше һымаҡ теремек һәм саф йымылдап, йәшел ҡыяҡҡа ҡан ҡыҙыл буяу менән яҙылған «Һөнәрсе» һүҙе балҡып сыҡҡан.

Кешеләрҙең аптырау һәм шомланыуының иге-сиге булмаған. Улар ашыға-йүгерә өйҙәренә таралғандар. Ләкин унда ла шундай уҡ хәлгә осрағандар. Көршәктәрҙең бөтәһендә лә хәҙер «Өйрәнсек» түгел, ә «Һөнәрсе» һүҙе бөтә матурлығы менән нурланып, көлөп тора икән.

«Ялғандың бото ҡыҫҡа», ти бит халыҡ. Шулай итеп, Өйрәнсектең мәкерле хәйләһе йөҙ йылдан һуң булһа ла асылған. Теге ваҡытта ул, баҡтиһәң, Һөнәрсенең гүзәл көршәктәрен һатыуҙан да бигерәк, үҙенә йәшереп барған икән. Шунан аҙаҡ, Һөнәрсе үлгәс, уның ҡултамғаһы өҫтөнә үҙ тамғаһын баҫҡан да данлы һөнәрсе булып та алған. Үҙенсә бик анһат ҡына исемен «мәңгеләштереп» ҡалдырған.

– Вәт мәлғүн, кеше йөҙө менән йөҙлө булып йәшәгән бит, ләғнәт төшкөрө! Ҡәбере йыландар, әрмәнделәр ояһына әйләнгере! – тип ҡарғаған халыҡ уны хәҙер. – Ҡара һин уны, йөрәк ҡаны менән яҙғанды ялған буяу менән ҡаплап тотмаҡ булған бит, шаҡшы! – тип нәфрәтләнгән. – Һөнәрсе, ысынлап та, үҙенең ҡултамғаһын йөрәк ҡаны менән яҙа торған булған, ти, бит. Эйе, эйе, ул бөтә буяуҙарына ла үҙенең йөрәк ҡанын ҡушҡан,

ти. Шуға улар мәңге шиңмәйҙәр ҙә, юйылмайҙар ҙа, ти, – тип раҫлаған.

Бына шул. Халыҡтың: «Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә», – тигәне ошо булалыр инде, ә? Һин нисек уйлайһың?!

Һөнәрсе менән Өйрәнсек хаҡындағы хикәйәтен Хасбулат олатай шундай һорау менән тамамлап ҡуйҙы: «Ысынлап та, хикмәтле хикәйәт бит, ә?!» – тип оҙаҡ ҡына миңә теклəп ултырҙы...

## ? Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Хасбулат олатай кем ул? Уның тураһында һөйләгеҙ һәм ҡомартҡыларын тасуирлап бирегеҙ.
**2.** Хасбулат олатайҙың һөйләгәндәрен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән аңлатып бирегеҙ. Олатайҙың әйткәндәре буйынса Һөнәрсе менән Өйрәнсекте ниндәй итеп күҙ алдығыҙға килтерәһегеҙ?
**3.** Һөнәрсе менән Өйрәнсеккә халыҡтың мөнәсәбәте нисек булған?
**4.** Өйрәнсекте нисек ерләйҙәр?
**5.** Йылдар үткәс, уның ҡәберенә ҡуйылған көршәк ниңә үҙгәрә?
**6.** Өйрәнсек халыҡты, батшаны нисек алдаған?
**7.** «Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә» тигән мәҡәлдең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
**8.** Һөнәрсегә хас сифаттарҙы атағыҙ.
**9.** Өйрәнсеккә хас сифаттарҙы әйтегеҙ.
**10.** Ошо ике образ аша яҙыусы беҙгә ниндәй хәҡиҡәтте еткергән? Кешеләрҙе тормошта ниндәй булырға саҡыра ул?
**11.** «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» әҫәренән өҙөк ятлағыҙ (уҡытыусы һайлауы буйынса).

## Телмәрегеҙҙе байытығыҙ

«Танһыҡ ҡандырыу», «ҡул ҡаушырып ултырыу» һүҙбәйләнештәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ.

Мостай
# КӘРИМ
(1919–2005)



«Йырым менән бәхәс» тигән бер шиғырында Мостай Кәрим кеше күңелдәрендә бер тамсы нур, бер тамсы моң булып урын алырға хыяллана. Башҡортостандың халыҡ шағирының ҙур ижады, нур һәм моң менән тулы шиғриәте киң массаларҙың ихтирамын яулап ҡына ҡалманы, башҡорт халҡының рухи ҡаҙанышы, милли ғорурлығы булып әүерелде. Мостай Кәрим әҙәбиәтебеҙҙең данын бөтә ил, хатта бөтә донъя киңлегенә алып сыҡты, халыҡ күңеле күгенең, оло поэзияның яҡты йондоҙо булып балҡыны.

Александр Фадеев XX быуаттың илленсе йылдары уртаһында уҡ әле Мостай Кәримде А. Твардовский, С. Михалков, К. Симонов, А. Малышко, А. Кулешов, Г. Абашидзе, С. Капутикян, М. Турсунзаде, Р. Ғамзатов һ. б. күренекле шағирҙар менән бер рәттән күп милләтле совет әҙәбиәтенең торошон билдәләүселәр сафына ҡуйғайны. Рус шағиры Николай Рыленков, башҡорт ҡәләмдәшенең тағы ла ҙур поэтик үҫешен билдәләп, шундай ҙур нарыҡ бирҙе: «Мостай Кәрим беҙҙең күп милләтле сәнғәттең, шул иҫәптән рус сәнғәтенең дә дәрәжәһен билдәләгән һүҙ оҫталары иҫәбенә инә һәм дөйөм хазинаға үҙ халҡының элек туплаған һәм хәҙер байытҡан иң яҡшы тәжрибәһен өҫтәй».

Мостай Кәрим шиғриәте – башҡорт сәсәндәренең ҡобайырҙарына, йырҙарына, дастандарына хас булғанса, тәрән мәғәнәле халыҡсан фәлсәфәгә ғәжәп бай, оло тойғоло ижад. Уның иң яҡшы шиғырҙарының һәм поэмаларының тамырҙары, сығанағын бейек тауҙарҙан алған саф һыулы шишмәләр шикелле, башҡорт халыҡ ижадына барып тоташа.

...Шиғриәт, драматургия, проза – Мостай Кәрим ижадының өс тағаны. Мостай Кәрим ижадының әҙәби төр һәм жанрҙарға байлығы – әҙип натураһының байлығын һәм талантының төрләләгән һөйләүсе мөһим фактор. Мостай Кәрим һәр жанрҙың бынамын тигән һөнәрмән бер оҫтаһы; һәр әҫәре уның хужаһы менән затлы.

*Ғайса Хөсәйенов*

## ҠАЙЫН ЯПРАҒЫ ТУРАҺЫНДА

Ер шарының картаһына
Ҡараһаң яҡшы ғына, –
Башҡортостан шул картала
Бер япраҡ саҡлы ғына.
Эйе, япраҡ, аҡ ҡайындың
Бер япрағы ни бары.
Ә ҡайыны – бөйөк Рәсәй –
Шундай йәшел, юғары.
Нисә быуат шул япраҡты,
Ҡайындан өҙмәк булып,
Боҙ һалҡынында туңдырмаҡ,
Утта көйҙөрмәк булып,
Нисә диңгеҙ аръяғынан
Ниндәй елдәр иҫмәгән,
Ниндәй йәшен уйнамаған,
Ниндәй ҡырау төшмәгән.
Шул япраҡты ашар булып,
Нисә төрлө ҡорт һырыған,
Ҡайһы «милләт», ҡайһы «дәүләт»,
Йә «өммәт» затлы булған.
Ғорур япраҡ өҙөлмәгән
Ғорур ҡайын-әсәнән,
Әсәһенең һуты менән,
Көсө менән йәшәгән.
Бөгөнгө яҙ килде илгә
Елдәр, дауылдар аша.
Ҡайындың шат япраҡтары,
Тыңла, нисек шаулаша!

* * *

Картаға ҡарап, еремде:
– Бер япраҡ саҡлы, – тинем,
Мин хайранмын киңлегеңә,
Башҡортостаным – илем!
Бер сигең Яйыҡ ярында,
Ыҡ буйында бер сигең,
Бөркөт ҡанатын талдырыр
Сал тауҙарың бар һинең,
Һиндә тормоштоң көрлөгө,
Донъялар именлеге,
Һиндә тауҙар ғорурлығы,
Далалар иркенлеге,
Һыуҙарың көмөш. Тупрағың
Торғаны алтын һинең,
Бар хазинаңдан ҡиммәтле
Бәхетле халҡың һинең!

* * *

Донъя картаһында ерем
Бер япраҡ саҡлы ғына,
Ә быуаттар төпкөлөнә
Ҡараһаң яҡшы ғына,
Ошо изге ерҙән уҙған
Күпме быуын яҙмышы –
Һауаларға ашҡан даны,
Һыуға һеңгән һағышы.
Был тупраҡҡа сәмле тарих
Ҡандар менән яҙылған,
Ҡаяларҙа ҡылыс эҙе –
Ташҡа тамға һалынған.
«Эйгән башты ҡылыс сапмай», –
Тиһә лә иҫке мәҡәл,
Баш эймәгән ғорур халҡым,
Теҙ сүгеп йәшәмәгән.
...Бик хәйерсе булған халҡым,
Тик хәйер һорашмаған,
Билгә ҡылыс таҡҡан, шуға
Арҡаға тоҡ аҫмаған;

Билгә ҡылыс таҡҡан, ләкин
Күршеләә ил баҫмаған.
Кем уға ҡорал күтәрһә,
Шуны яуҙа тураған,
Дошманының атын һорап,
Затын һорап тормаған.
Кисәгең дә, бөгөнөңдәй,
Күңелемә яҡын минең,
Утты, һыуҙы кисеп үткән
Ҡаһарман халҡым минең!

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Картанан Башҡортостанды табығыҙ.
**2.** Шағир Башҡортостанды нимәгә оҡшатып һүрәтләй?
**3.** Башҡортостанды юҡҡа сығарыу өсөн ниндәй көстәр һөжүм итеп ҡараған?
**4.** Шиғырҙа Башҡортостандың байлығы нисек һүрәтләнә?
**5.** «Билгә ҡылыс таҡҡан, ләкин
Күршеләә ил баҫмаған» тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ, үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләгеҙ.

## РОССИЯНМЫН

Рус түгелмен, ләкин россиян мин,
Россияның һыуын эскәнмен,
Сағылдарҙа имән нисек үҫһә,
Мин был ерҙә шулай үҫкәнмен.

Хаҡлымындыр, тимен, үҙемде әгәр
Сағыл имәненә оҡшатһам, –
Тамырҙарым бит дүрт быуат әүәл
Мәскәү менән барып тоташҡан.

Замандар бик хәтәр мәлдә, Мәскәү
Дуҫлыҡ ауазымды ишеткән,
Һәм рус халҡы минең яҙмышымды
Үҙе яҙмышына иш иткән.

Рус түгелмен, ләкин россиян мин.
Россиян мин – ниндәй ғорурлыҡ!

Биш ғүмерең миңә кәрәк түгел,
Бер яҙмышым шуға торорлоҡ.

Рус һәм башҡорт юлда һәр саҡ юлдаш,
Табындаштар оло байрамда,
Яуҙа яуҙаш, дандаш һәм ҡәберҙәш
Изге һуғыш үткән майҙанда.

Салауаттың утлы ирендәре
Пугачёвты үпкән сағында,
Беләм, миңә мөхәббәтең артҡан,
Рус туғаным, һинең ҡаныңда.

Рус түгелмен, ләкин россиян мин,
Совет Ватанының улымын.
Ниндәй яҡты бейеклектәренә бөгөн
Күтәреләм йәшәү юлының!

Күңелемдә минең көн сыуағы,
Күҙҙәремдә – ҡояш нурҙары,
Йөрәгемдә – мең йыл тотҡонлоҡто
Үтеп сыҡҡан өмөт йырҙары.

Ерҙә нисек мин ныҡ баҫып торам,
Ниндәй иркен алам һулышты!
Шуларҙың бит мин бөтәһе өсөн,
Рус туғаным, һиңә бурыслы!

Һин тәм бирҙең минең икмәгемә,
Һин тат бирҙең эскән һыуҙарға.
Ер йөҙөндә күпме халыҡтар йәшәй –
Туған иттең мине шуларға.

Рус түгелмен, ләкин россиян мин,
Россиян мин – ниндәй ғорурлыҡ!
Ун ғүмерең миңә кәрәк түгел,
Бер яҙмышым шуға торорлоҡ!



**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

**?**

**Һорауҙар һәм эштәр**

Шағирҙың был шиғыр менән нимә әйтергә теләгәнен аңлатығыҙ.

## ЙӘШӘЙҺЕ БАР

«Йәшәйһе бар, һаҡла үҙеңде», – тиһең.
Теләктәрең, эйе, хаҡ һымаҡ.
Ләкин мин бит бөтә ғүмерем буйы
Бәйгеләрҙә сапҡан ат һымаҡ.

Донъя беҙҙән генә ҡалмаған ул,
Бер саҡ килер үлем – ят ҡунаҡ,
Ауһам ине шул саҡ бәйгеләрҙә
Йөрәге ярылып үлгән ат һымаҡ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Мостай Кәрим ни өсөн үҙен бәйгеләрҙә сапкан ат һымак тоя?
**2.** Шиғырҙы ятлағыҙ.

## АЙҺЫЛЫУҘЫҢ КҮҘ ЙӘШТӘРЕ

Ун алтыһы тулған Айһылыуҙы
Аҡҡоштарға тиңләү аҙ төҫлө,
Ул үҙе бит аҡҡош төркөмдәрен
Беҙгә алып килгән яҙ төҫлө.

Ун алтыһы тулған шул Айһылыу,
Ап-аҡ халат кейеп өҫтөнә,
Таңды – кискә, яҙҙы көҙгә ялғап,
Тау яғында ҡоштар үҫтерә.

Ә бер көндө көҙгө себештәрҙе
Барлағанда…
икәү тулманы.
Шуны белгәс мөдир Әбделҡадир
Үрле-ҡырлы килеп туланы.

Ауыр һүҙҙәр, яман һүҙҙәр әйтте,
Бысраҡ һүҙҙәр атты балаға.
Нурҙар сәсеп торор ике күҙҙән,
Ике шишмә булып йәш аға.

Аҡланырлыҡ урыны юҡ ҡыҙҙың,
Бөтә ғәйеп уның яғында;

Әбделҡадир ни әйтһә лә хаҡлы –
Әбделҡадир дәүләт һағында.

Күпме кәрәк ап-аҡ туй күлдәген
Бысраҡ атып ҡына тапларға?
Күпме кәрәк сабыйҙың пак күңелен
Ҡара һөрөм менән ҡапларға?

Иламасы, һылыу. Туҡта инде,
Оноторға тырыш йәберҙе.
И, кешеләр! Ҡай саҡ беҙ һуң әле
Ниңә шундай ҡаты бәғерле?..

Буласағын, була яҙғандарын
Иҫәпкә беҙ теүәл алабыҙ.
Ҡаҙ юғалһа, оран таратабыҙ.
Себеш үлһә, һөрән һалабыҙ.
Иҫәптәрҙе теүәл алабыҙ.

Ә ҡырылып ҡалған кәйефтәрҙе,
Ә нахаҡҡа тамған йәштәрҙе
Иҫәпләргә ваҡыт түгел микән? –
Кемдән көтәйек ул хәстәрҙе?

Айһылыуҙың түккән күҙ йәшенә
Ысын баһалар ҡуйһам мин әгәр,
Әйтер инем:
            был – заяға аҡҡан
Алтын шишмәләргә бәрәбәр.

Күҙ йәштәрен юҡҡа түкмәйек,
Улар ҙа бит дәүләт байлығы.
Ул байлыҡты әрәм итмәйек.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Әбделкадир ни өсөн Айһылыуҙың күңелен йәберләй?
**2.** Нисек уйлайһығыҙ, бәлки, Әбделкадир хаҡлылыр?
**3.** Бөгөн ҡайһы берәүҙәр ике себеш түгел, миллиондарҙы юҡҡа сығаралар, уларҙы нишләтергә һуң?
**4.** «Күҙ йәштәре – улар ҙа дәүләт байлығы» тигән фекерҙе нисек аңлайһығыҙ?

### Төркөмдә йәки парлашып эшләгеҙ

Әбделкадир кеүек ҡаты бәғерле кешеләрҙе осратҡанығыҙ бармы?

## ҠОРОЛТАЙҒА ҠОТЛАУ

Оҙаҡ йылдар оҙон юлдар буйлап
Ашҡынышып килдек, һағынышып.
Ҡоштар ҙа бит табышҡанда шулай
Ҡыуаналар, ҡанат ҡағынышып.

Хәсрәт түгел, хәстәр йыйҙы беҙҙе:
Туғанлыҡты кәрәк яңыртыуҙар,
Һүрелмәһен өмөт, һүнмәһен дәрт,
Һүнеп ҡалғанда ла янартауҙар.

Йөҙәтмәһен әжәл юраусылар,
Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ,
Үҙебеҙҙең йырыбыҙҙы йырлап,
Тарих арбаһында барасаҡбыҙ.

Әммә һис ҡасан да бирелмәбеҙ
Күкрәк һуға торған мин-минлеккә,
Табынырбыҙ Башҡорт илендәге
Татыулыҡтар менән именлеккә.

### Һораუҙар һәм эштәр

**1.** Башҡорт халҡы ни өсөн ҡоролтайға йыйылған? Улар ҡоролтайҙа нимә тураһында һөйләшәсәк? Башҡорт халҡының тарихында нисә ҡоролтай үткәрелгән?
**2.** «Үҙебеҙҙең йырыбыҙҙы йырлап,
Тарих арбаһында барасаҡбыҙ» тигән юлдарҙың мәғәнәһен аңлатығыҙ.

### Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ

«Мин-минлеккә бирелмәбеҙ, табынырбыҙ татыулыҡҡа һәм именлеккә» тигән фекер менән килешәһегеҙме?

## ҮЛМӘҪБАЙ

### 1. Тәүге һунар

Минең яҙғанды уҡығас,
«Әкиәт», – тимә ҡоҙа,
Бына ул усаҡ янында
Сылғау киптереп тора.

Тирәләп халыҡ ултырған,
Уртала усаҡ яна,
Ситтәрәк ҡулы бәйләнгән
Офицер тулап ята.

Үлмәҫбай һирәк мыйығын
Ҡапыл тырпайтып ала,
Ҡыҫыҡ күҙен ҡыҫа төшөп,
Хәйләкәр ҡараш һала.

Ул офицерҙы йыуата:
«Һин тыпырсынма, ҡуян,
Хәҙер ошо сылғау менән
Ағасҡа аҫып ҡуям...»

Гөж килә ағай-энеләр:
– Хитрый ҙа һин, Үлмәҫбай.
Был йәнлекте ҡайҙа тоттоң,
Һөйләп ташласы, давай.

Ялындырырға яратмай,
Тел асҡысы – теләге,
Үлмәҫбай тыңлаусыларға
Ошо хәлде һөйләне:

– Һунарсы минең ырыуым,
Һунарсы ата-бабам,
Һунарсы ҡаны үҙемдә,
Һунарсы булыр балам.

Ғәҙәт – ҡылыҡтың инәһе,
Бик ғәжәп бит ул ғәҙәт,
Һунар сыға һалыуыма
Шул ғәҙәт булды сәбәп.

Хазина ине уҙған төн:
Йондоҙло, айлы ине,
Немецҡа тоҙаҡ һалырға
Бигерәк яйлы ине.

Значит, ике еңемә
Ике «туҡмаҡты» алып,
Кәйеф өсөн бер кружка
Русский горькийҙы һалып,



Күркәләнеп сығып киттем,
Ергә лә теймәй табан, –
Әйтерһең, тыуған Уралға
Ҡунаҡҡа ҡайтып барам.

Тегеләр яғына еткәс,
Ҡулды күтәргән булам,
Йәнәһе, рәтен килтерәм
(Хәйлә кәрәк бит, туған).

Һалдаттар килеп, кеçәне,
Ҡуйынды һәрмәп ҡарай,
Ә еңгә күҙ төшөрөргә
Баштары етмәй, малай.

Бер заман, себен шикелле,
Алдылар мине ҡамап:
– Үҙең теләп нәрәтәгә
Килеп индеңме, сабаҡ?!

– Офицерға илтегеҙ! – тим, –
Гәп һатырға ваҡыт тар,
Берәй ғәмәлгә ярарлыҡ
Һүҙ әйтеп һалыуым бар.

Штабҡа илтәләр. Күрәм
Дейеүгә хас бәндәне,
Ошо, күрәһең, быларҙың
Офицер тигәндәре.

Доклад яһайым үҙенә:
– Үлмәçбай атлы булам,
Тау башҡорто тоҡомонан
Салауат затлы булам.

Икәүҙән-икәү ҡалабыҙ,
Беребеҙ – күҙ, беребеҙ – ҡаш,
– Башҡорт… башҡорт… –
                    Ул мығырлай:
Ниндәй януарға оҡшаш?

Яуапты тапҡыр ҡайтарам:
– Ғәфү итегеҙ мине,
Немец башын ҡырт-ҡырт ҡырҡа –
Ана шул башҡорт инде.

Ә илем Рәсәй була,
Дауылы, еле лә бар,
Һинең бабаң батып үлгән
Чуд тигән күле лә бар.

Офицер, әй, боларынып,
Ҡыҙып китә шул саҡта,
Шым ғына ҡулға төшөрәм
Мин дә ике «туҡмаҡты».

– Тауышты яратмайым, – тим, –
Ҡиммәт бит һиңә ғүмер.
Бына, күрәһеңме быны:
Икебеҙ ҙә – көл-күмер.

– Һин шаянға оҡшайһың? – ти.
Мин әйтәм:
– Улаймы ни,
Эш бар саҡта шаярырға
Ыштанһыҙ малаймы ни?

Бына һеҙҙе тар-мар иткәс,
Илдә байрам-туй булыр,
Туй мәлендә шаярырға,
Уйнарға ла уй булыр.

Ә хәҙергә наганыңды
Өҫтәлгә сығарып ҡуй,
Күңелеңә төшөүе бар
Бер-бер төрлө ҡара уй.

– Атырмын! – ти. Ә мин әйтәм:
– Ҡиммәт бит һиңә ғүмер,
Бына, күрәһеңме быны:
Икебеҙ ҙә – көл-күмер.

Мирный ваҡыт булһа, бәлки,
Кәңәш тә ҡорор инек.

Бер-беребеҙҙе баллап-майлап
Өгөтләп торор инек.

Үҙең беләһең, господин,
Хәҙер һуғыш заманы,
Һәр эштә йылдамлыҡ кәрәк,
Ваҡыт яғы самалы.

Аяғын тибеп екерҙе,
Ҡалтырап китте иҙән,
Наганын ырғытып бәрҙе:
– Ни кәрәк һиңә минән?

– Сәпсемә, – тим, – йә ҡағылыр
Йәһәннәмдең елдәре,
Аңлау кәрәк, тәртә тулап
Атты бармы еңгәне?

Вот шулай. Хәҙер үҙеңде
Ҡунаҡҡа алып китәм,
Аҙаҡтан маҡтап йөрөрһөң:
«Башҡорт ҡунаҡсыл икән...»

Йәнәшә сығып китәбеҙ,
Бик эре сирттерәбеҙ:
Йәнәһе, начальник менән
Постарҙы тикшерәбеҙ.

Беҙ үтәбеҙ, ә һалдаттар
Сәләмләй тура ҡатып,
Тик ай ғына шул сағында
Ҡайҙалыр ҡалды батып...

Һөйләгәндең тамсыһы ла
Экиәт түгел, туған,
Ана ул ята. Ә үҙем
Сылғау киптереп торам.

### 2. Үлмәҫбай туйға бара

Тауыҡтар төнәгән мәлдә,
«Һунарҙан» ҡайтып киләм.
Теребайҙың Саптарынан
Арттараҡ ҡалды Ерән.

Буш теҙгенде һиҙеп, буғай,
Башҡайын сайҡай атым,
Уҡып барам Гөлбикәнең
Уралдан яҙған хатын:

«...Һин – егеттәрҙең-егете,
Минең Үлмәҫбайғынам,
Бер һинең өсөн шатланам,
Берсә тағы ҡайғырам.

Иҫ киткес батырлығыңа
Һоҡлана Урал иле.
Тик бына шул хаттарыңды
Йышыраҡ яҙһаң ине...

Осоп барып күрер инем,
Ҡанатым булһа икән,
Ошо сәләм хатын яҙҙы
Һин һөйгән ҡыҙ – Гөлбикәң».

Ҡапыл юлға бер ҡарт баҫты:
– Һаумы, Үлмәҫбай таныш!
Үҙе биш ҡарыш самаһы,
Һаҡалы етмеш ҡарыш.

– Башҡорттоң егетенә, – ти, –
Партизанский сәләм;
Үҙе мине маҡтап китте:
Фәлән-фәсмәтән, төгән...

– Сер итеп кенә әйтәм, – ти, –
Ҡолағыңа һала ҡуй,
Фәлән төндә, төгән ерҙә
Фашистар типтерә туй.

Мир башы ҡыҙы немецҡа
Ул көн кейәүгә сыға.
Һаҡалым менән инәләм,
Һүҙемде йыҡма, ҡоҙа!

Кемгә тейә быndай хөрмәт,
Әлеге лә баяғы,
Хәстәр күр. Беҙҙә тиһәң,
Наҡыҫыраҡ һый яғы.

Әйткән һүҙ – атҡан уҡ булһын,
Мин үҙем – ныҡыш бәндә;
Ошо ерҙә көтәм һине,
Тауыҡтар төнәр мәлдә.

Ауыҙ асып яба алманым,
Һыу булып һеңде ҡартым,
Туй көтә беҙҙе, туй көтә,
Елдәй ел, Ерән атым!
Ҡара урман аша үтә
Бына был серле һуҡмаҡ,
Урман өнһөҙ: йә ул йоҡлай,
Йә ул уйлана һымаҡ.

Аҡландар тулып сайҡала
Бешеп өлгөргән арыш.
Кем урыр, кем кәбән ҡойор,
Әй арыш, башың ҡарыш!

Уттар йәшел йылан булып,
Үрмәләп күккә менә,
Йә, ҡыҙыл ҡарлуғас булып,
Ҡапыл ҡыйпылып һүнә.

Тар һуҡмаҡ киңәйгән ерҙә,
Үткәс урман аҡланын,
Һә тигәнсе ҡыуып еттем
Теребайҙың Саптарын.

Ҡыуаныстан һөрән һалам,
Ҡаушап китте Теребай:
– Юлда бәхет аунап ята,
Эштәр әкәмәт, малай!

Башта төшөнмәй маташа:
«Башым, – ти, – тубал бөгөн!»
Һөйләп бирҙем Теребайға
Мәсьәләнең елеген.

Саҡ-саҡ болотҡа теймәне
Теребайҙың кәпәсе.

Теребай бит беҙҙең яҡта –
Беренсе туй әтәсе!

Ул кейәү егете икән,
Моғайын, ғауға була.
– Туйҙа, – ти, – көршәк түпәҫләү –
Борондан ҡалған йола.

– Ил йолаһын, – ти Теребай, –
Тыу итеп күтәрәйек.
Башҡорттарҙың туй ғәҙәтен
Немецҡа күрһәтәйек!

Уларса барып сыҡмаһа,
Ғәйеп итмәҫтәр әле.
Ашыҡ-бошоҡ эш ҡылынһа,
Ничево, һуғыш мәле!

Егеттәр теле әйткән һүҙ –
Ҡырҡылып ауған имән.
Таш яуһа ла, юлда булһын
Саптар ат менән Ерән!

Төйөп-төйөп тултырманыҡ
Туй малын һандыҡ-һандыҡ,
Йөҙгә ҡыҙыллыҡ килмәҫлек
Үҙебеҙсә яһандыҡ.

Туй кисе боларып килде,
Елләнеп, дауылланып,
Пыр туҙа күктә болоттар,
Йәшенләп, яуынланып.

Теребайға әйткән булам:
– Көн шәптән түгел алай…
Әллә биргән вәғәҙәне, тим,
Ҡыйшайтабыҙмы, малай?

– Алйот, – тип һүгә Теребай, –
Түмәрҙер һинең башың!
Туй өсөн ошондай кисте
Эҙләп тә таба алмаҫһың.

Егеттәр теле әйткән һүҙ –
Ҡырҡылып ауған имән.
Туй юлына сығып китте
Саптар ат менән Ерән.

Әлеге ҡарт ҡаршы ала:
– Һаумы, Үлмәҫбай таныш?
Үҙе ете ҡарыш булыр,
Һаҡалы етмеш ҡарыш.

Ҡарт серле таяғы менән
Ҡартлас имәнгә һуға.
Ҡапыл, гүйә, ер аҫтынан
Өс батыр ҡалҡып сыға.

Ҡарт әйтә: «Бына өс улым,
Хаҡ юлдаштар булығыҙ.
Таяныс һеҙгә ҡара төн,
Аҡтыр һеҙҙең юлығыҙ.

Алдығыҙҙа ошо һуҡмаҡ,
Эйәрҙән һикерегеҙ,
Туй бүләген ҡуйындарҙа
Һыуытмай еткерегеҙ».

Туп ҡайыҙлай болот һыртын,
Телә йәшен ҡамсыһы,
Автоматтан һибәме ни
Эре ямғыр тамсыһы.

Ҡарт ҡалды. Тайғаҡ һуҡмаҡтан
Барабыҙ башты эйеп,
Әй барабыҙ, көн барабыҙ,
Ай, йыл барабыҙ кеүек.

Тау аҫтында кескәй ауыл,
Эт тә юҡ урамында,
Ҡарттың бер улы күрһәтә:
– Туй була бына бында…

Эйелеп яҡын киләбеҙ,
Өйҙәре бейек кенә,
Бишебеҙ биш себен булып,
Биш тәҙрәгә менә.

Эштәр әкәмәт: немецтар
Ну эре сирттерәләр!
Сүл бүреһе туйымы ни,
Олошоп типтерәләр.

Эскә инеп, шат табынды
Ҡуҙғатырға «ҡыймаыҡ».
Туй бүләге менән өйҙөң
Дүрт мөйөшөн һыйланыҡ.

Кәйеф боҙоп ишек ҡаҡһаҡ,
Ғәйеп итерҙәр һымаҡ (!)
Беҙҙең һыйҙар кейәүҙәрҙе
Мәйет итерҙәр һымаҡ.

Бер мәлде дүрт епте тарттыҡ –
Көл булып осто табын.
Ошонан да мәрәкәрәк
Туй буламы һуң тағы?

Теребайға әйтә һалам:
«Ҡыҙып ташламаныҡмы?
Әрһеҙләнеп, туй йолаһын
Боҙоп ташламаныҡмы?»

«Алйот, – ти Теребай, – туйҙа
Мылтыҡтан атыу була,
Һауыт-һаба шалтыратыу –
Борондан ҡалған йола.

Табындарын күтәргәнгә
Маҡтап һөйләрҙәр әле:
«Ай-һай-һай, бик ирмәк икән
Башҡортта туй әмәле!»

## 3. Алмалар бешкән ине

Алмалары алһыуланып,
Балланып бешкән ине,
Баҫыуҙарҙа, тулҡынланып,
Бойҙай етешкән ине.

Беҙ ял итеп ятҡан утар,
Йоҡо шикелле, тыныс,
Ләкин аттар һоло ашай,
Ҡайрала тора ҡылыс.

Борола-һырыла ағып ятҡан
Тар ғына йылға ине,
Йылғаның ике яғында
Тик ике донъя ине.

Беҙҙең яҡтың яры һөҙәк,
Әҙәм үтмәҫлек ҡамыш,
Теге яҡта ҡасып ята
Беҙҙең күптәнге таныш.

Мыйыҡтарҙы еткерәбеҙ
Һыйпаштырғылап, тарап,
Һағынабыҙ ер-һыуҙарҙы
Осҡан ҡоштарға ҡарап.

Һәй, һүҙгә мауығып, яҡташ,
Һүҙҙең осон сыбалттым.
Ирмәк булды бер көнөндә
Йәйге матур сыуаҡтың.

Күл буйынан, ат йөҙҙөрөп,
Иренеп ҡайтып киләм.
Һалмаҡ ҡына башын сайҡап,
Күгәүен ҡыуа Ерән.

Ҡарайым, ситән артында
Ҡыҙ мине шәйләп тора,
(Бындағы ғәҙәт буйынса,
Көнбағыш сәйнәп тора.)

Башта үтергә уйланым,
Иҫем дә китмәй, имеш!
(Һөйгән йәре бар егеттәр
Шулай булырға тейеш.)

Тик, яҡташ, үҙең беләһең,
Бик саҡ ҡына булһа ла

Ҡыҙҙар менән һүҙ ҡушышһаң,
Күңел бушанып ҡала.

Туҡтаным шул, егеттәр, тим,
Һиҙеп ҡалмаҫтар әле,
Һиҙһәләр ҙә Гөлбикәгә
Хәбәр һалмаҫтар әле.

Туҡталдым да сәләм бирҙем:
– Һаумы, Кәтүшә туташ!
Үҙең, тим, нәҡ муйыл күҙле
Перәник ҡошсоҡҡа оҡшаш.

– Тик ҡошсоҡ һеҙҙең баҡсаға
Ҡунып һайрамаҫ кеүек, –
Ҡыҙ йылмая. – Мыйығыңды
Юҡҡа тырпайтма, егет.

Емдәр һибеүсеһе булһа,
Ҡунмаҡсы күренәһең,
Беҙҙә ағас бейек үҫә,
Тик юҡҡа үреләһең.

Мыйыҡ бар, тип йөрөйһөңмө,
Йүнлерәк үҫмәгәс тә,
Ҡарлуғас ҡанаттарылай
Ҡыйылып төшмәгәс тә.

Мыйыҡмы ни, ғибрәт бит был... –
Ҡыҙыҡай һөйләп китте,
Теште ҡыҫып ҡына торам,
«Мыйыҡтан һөйрәп китте».

Шул заман ҡапыл үҙемде,
Әйтерһең, йәшен һуҡты:
Ҡыҙ торған ситән артынан
Теребай килеп сыҡты.

Матур ҡыҙҙың ҡулбашына
Үҙе таянып тора.
Мыйыҡ тиһәң – бөтөрөлгән,
Күҙҙәре янып тора.

– Аңламаҫһың Үлмәҫбайҙы:
Әллә атын һыу кертә,
Әллә, – ти, – зифа буйҙарға
Туҡтап ҡаш та һикертә.

Ҡыҙ-ҡырҡын менән серләшеп,
Күңел асаһың икән,
Был эшеңде һиҙеп ҡалһа,
Нимә әйтер Гөлбикәң?

Утыҙға аяҡ баҫҡанда,
Янып, ҡыҙарып киттем.
Теге һылыу ҡыҙ янынан
Тиҙ-тиҙ ҡуҙғалып киттем.

Артҡа әйләнеп ҡараһам, –
Теребай килә, яуыҙ.
– Үлмәҫбай дуҫ, бик кәрәкле
Һүҙем бар, – ти, – бер ауыҙ.

Әле теге ҡыҙ янында
Үҙеңде көтөп торҙом,
Бер хәйләле эш хаҡында
Экәмәт план ҡорҙом.

Йылғаның теге яғында
Бары өс һаҡсы ғына,
Күрһәң, үҙеңә лә оҡшар –
«Телдәре» яҡшы ғына.

Мин инде өс көн буйына
Йылғаға килә-китәм.
Һайраясаҡ турғайҙарҙың
Хәлдәрен белә китәм.

Заманы түгел, Үлмәҫбай,
Телдәрҙе ҡайрашырға,
Тубыҡты бөкләп ултырып,
Туйғансы һайрашырға.

Барып өлгөрөргә кәрәк
Әле көн ҡыҙыу саҡта.

Һә тигәнсе эйәрләнде
Ерәнсәй менән Саптар.

Командир ҙа ҡулды ҡыҫты:
«Хәйерле юл – шул теләк.
Барып сыҡһа, бик шәп булыр,
Егеттәр, һеҙҙең бүләк».

Сығып киттек. Соҡор буйлап
Барабыҙ елеп кенә.
Уйлап киләм: Теребай, тим,
Һай, аҫыл егет кенә.

Байтаҡ барғас, аттан төшөп,
Йәйәүгә күстек, малай;
Ҡояш түбәне ҡыҙҙыра,
Йән тиргә төштөк, малай.

Унан һуң кендектән һаҙлыҡ,
Әҙәм үтмәҫлек ҡамыш,
«Алыҫ түгел, – ти Теребай, –
Минең боронғо таныш».

Алдыбыҙҙа ҡусҡылланып
Йәшәреп тора таллыҡ,
Япраҡ аша ялтырап аҡҡан
Йылғаны күреп алдыҡ.

Һыу ситенә барып еттек
Эйелеп, боҫоп ҡына,
Йүткереп ебәрмәҫ өсөн
Тештәрҙе ҡыҫып ҡына.

Теребай бышылдай миңә:
«Был урын арыу, тибеш,
Беҙ ошонда уңышыбыҙҙы
Көтөп торорға тейеш».

Алдан һөйләшеү буйынса
Өҫтө һалдыҡ үҙебеҙ;
Йырҙа әйтелгән шикелле
Теге яҡта күҙебеҙ.

Һыуға ҡарайым, ярайһы,
Йылғаһы тоноҡ ҡына,
Тик ситендә ойоп тора
Һары томбойоҡ ҡына.

Күҙәтәбеҙ. Теге яҡта
Япраҡ та ҡыштырламай,
Эшебеҙҙең пустой булып
Сығыуы бар бит, малай.

Көтәбеҙ. Бына бер заман
Һайыҫҡан шыҡырланы,
Күп тә үтмәй килеп сыҡты
«Әкиәт батырҙары».

Өсәүҙәр. Автоматтарын
Ағасҡа һөйәнеләр.
Һыуға ҡарап мығыр-мығыр
Нимәлер һөйләнеләр.

Ә унан һуң шыр ялағас
Сисенеп ташланылар,
...Күлдәктәрен әйләндереп
Сүпләй ҙә башланылар.

Тфү, йә, был башкиҫәрҙәр
Күпме көттөрөр тағы?..
Йөрәктең, тартҡан йәйәләй,
Тулышып торған сағы.

Бына бер бүкән кеүеге
Йылғаға тәгәрәне,
Үҙе йөнтәҫ, үҙе ҡара,
Гүйә, һарыҡ бәрәне.

Унан һуң икеһе сумды,
Ҡиәфәт – өрәкме ни,
Ҡолаҡтары – һелкеүестәй,
Ҡулдары – көрәкме ни!

Быстырлашып яталар бит
Ярҙың ситендә һаман.

Бер саҡ күрәм фетнәләрен,
Йөҙәләр беҙгә табан.

Берсә сумдыҡ ҡамышлыҡҡа,
Һыу аҫты сәфәренә,
Ата-баба ишетмәгән
Кәсептең хәтәренә.

Һыу төбөндә күргәндәрҙе
Таҡылдап тораһым юҡ,
Эшкә ҡағылмаған яҡҡа
Һүҙемде бораһым юҡ.

Бер заман, башты күтәрһәк,
Алдыбыҙҙа яр булды,
Һыу эсендәге алты күҙ
Ғәжәп алты шар булды.

Шөрләп ҡул күтәргәйнеләр,
Бер-бер артлы баттылар,
Ярай, бәхетебеҙ бар икән,
Кире килеп ҡалҡтылар.

Мин автоматтарын алам,
Теребай ҡарап тора,
Тегеләр шауламаһын тип,
Бармағын янап тора.

Теге ялғаш ҡолаҡлыһы
Ярға сыҡмаҡсы итә,
Ғәйрәтләнеп, Теребайға
Килеп һуҡмаҡсы итә.

Йоҙроҡ тиһәң, Теребайҙа
Суҡмарҙан яманыраҡ,
Анау тынғыһыҙ нәмәнең
Ҡундырҙы яңағына.

Тәкмәс атып, ҡолап төштө,
Эһ тә тип әйтә алманы.
Эштең ҡайҙа барғанлығын
Бүтәндәр ҙә аңланы.

Шулай ғына төшөндөрҙөк
Баш ҡоҙалар килгәнен!
Һөҙәк ярға алып сыҡтыҡ
Гитлерҙың өс имгәген.

«Ҡунаҡтарҙы» көттөрөп, әй,
Борсоу булһа ла инде,
Ярға еткәс, тиҙ-тиҙ генә
Кейеп алдыҡ кейемде.

Юлға сыҡҡас ҡына, ҡәһәр,
Иҫемә килеп төштө:
«Оятыраҡ булмаҫмы, тим,
Алып ҡайтыу был төҫлө?»

Урманды үткәс, үҙебеҙ
Арғымаҡтарға мендек,
Пилотканы ҡырын һалып,
Ауылға килеп индек.

Малайҙар шаулай урамда:
«Ен йөрөй көпә-көндөҙ,
Бейетегеҙ, ағай, – тиҙәр, –
Йә кәмит күрһәтегеҙ!..»

Шунан һуң был тирәләрҙә,
Әллә ысын, әллә юрый,
Башҡорттар ен тотҡан, тигән
Имеш-мимештәр йөрөй.

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Поэманың беренсе бүлеген тасуири уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Поэманың төп геройы кем? Уны рус әҙәбиәтендәге ниндәй герой менән сағыштырып булыр ине? Ни өсөн?
**2.** Үлмәҫбай тыңлаусыларға ниндәй хәлде һөйләй?
**3.** Үлмәҫбай немец офицерын нисек ҡулға төшөрә һәм штабҡа алып ҡайта?
**4.** Үлмәҫбайҙың туйға барыуы ваҡиғаһы тураһында һөйләгеҙ.
**5.** Егеттәр башҡорттарҙың туй йолаһын немецтарға нисек күрһәтә?
**6.** Үлмәҫбай дуҫы Теребай менән ниндәй план ҡора?

**8.** Ни өсөн халыҡ араһында «башҡорттар ен тотҡан» тигән имеш-мимештәр йөрөй?
**9.** Үлмәҫбайҙы һәм партизандарҙы ҡайһы әкиәт геройҙары менән сағыштырып булыр ине?
**10.** Поэманан өҙөк ятлағыҙ (уҡытыусы һайлауы буйынса).

## Хәтергә төшөрәбеҙ

Поэмала башҡорт халҡының ниндәй йолалары иҫкә алына, шулар хаҡында һөйләгеҙ.

## Ижади эш

Үҙегеҙгә оҡшаған эпизодтың һүрәтен төшөрөгөҙ. Поэманы сәхнәләштереп, сығыш яһағыҙ.



Рәми
# ҒАРИПОВ
(1932–1977)

Рәми Йәғәфәр улы Ғарипов Башҡортостандың Салауат районы Арҡауыл ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуа. Һуғыш бөткәндең икенсе йылында тыуған ауылында етенсе класты тамамлағас, ул Өфөгә килеп 9-сы башҡорт мәктәбенә (Р. Ғарипов исемендәге 1-се республика башҡорт гимназия-интернаты) уҡырға инә, шул мәктәп янындағы интернатта тәрбиәләнә.

Урта мәктәпте тамамлағас, Башҡортостан Яҙыусылар союзы тәҡдиме буйынса 1950 йылда Мәскәүҙәге А. М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтына уҡырға инә. Юғары белем алып ҡайтҡас, Рәми Ғарипов 1955 йылдан «Совет Башҡортостаны» гәзитендә эшләй башлай. Һуңынан ул Башҡортостан китап нәшриәтендә һәм «Ағиҙел» журналы редакцияһында эшләй.

1959 йылда Рәми Ғарипов тыуған яҡтарына ҡайта. «Йүрүҙән» колхозында һәм «Һарғамыш» совхозында ул өс йыл комсомол комитеты секретары һәм Салауат район гәзитендә хаттар бүлеге мөдире булып эшләй. Аҙаҡ ул яңынан «Совет Башҡортостаны» гәзитенең әҙәби хеҙмәткәре була. Байтаҡ йылдар «Башҡортостан ҡыҙы» журналының яуаплы секретары вазифаһын башҡара.

Рәми Ғариповтың шиғырҙар яҙыуы Арҡауыл мәктәбендә уҡығанда уҡ башлана, ә Өфөлә 9-сы мәктәптә уҡығанда әҙәби түңәрәктә әүҙем ҡатнашыу, кисәләрҙә яҙыусылар менән осрашыу, кәңәшләшеү уның ижадын йәнләндереп ебәрә. Мәскәүҙә Әҙәбиәт институтында уҡыу уға ижад эшенә яуаплы ҡарарға һәм әҙәбиәт нигеҙҙәрен тәрән белергә ярҙам итә.

Әҙәбиәт институтында диплом эше булған тәүге китабы – «Йүрүҙән» исемле шиғырҙар йыйынтығы 1954 йылда донъяға сыға һәм матбуғатта ыңғай баһа ала. Шулай ҙа уның шағир булараҡ формалаша барыуын 1958 йылда сыҡҡан «Таш сәскә» исемле шиғырҙар йыйынтығы асыҡ күрһәтә. Уның шиғриәте өсөн тәрән моң, фекер тығыҙлығы хас.

Рәми Ғарипов – Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.

## УРАЛ ЙӨРӘГЕ

Урал күкрәгендә йөрәк кеүек
Башҡортостан – тыуған илкәйем.
Шул йөрәктең ҡан тамыры булып
Күкһелләнә Ағиҙелкәйем.

Шул йөрәктең ауыр моң-зарҙарын
Ҡойған саҡта еңел ҡурайы,
Яу юлдары буйлап мин халҡымдың
Үткәндәрен ҡайтып урайым.

Уралҡайым! Һинең һәр ташыңа
Ҡанлы-данлы тарих яҙылған,
Илен ҡурсып үлгән ирҙәреңә
Күпме бында ҡәбер ҡаҙылған!..

Ҡәберҙәрҙә үҫкән аҡ ҡылғандар
Сал сәсеме әллә уларҙың?
Еңел ҡурай түккән ауыр моңдар
Ҡан-йәшеме әллә уларҙың?

Ирек һөйгән өсөн, бығауланып
Ҡарт Уралдың ҡая ташына,
Ни генә һуң кисермәгән халҡым,
Ни үтмәгән уның башынан!

Тырнаҡтарын ҡаҙап күкрәгенә,
Ике башлы йырткыс ҡарағош
Быуат-быуат йөрәк ҡанын эскәс,
Нисек ҡойолмаһын зар-һағыш?

Нисек онотһон ул ил-ояның
Туҙҙырылып утта янғанын,
Ҡыҙған тимер менән Салауаттың
Маңлайына һуҡҡан тамғаны?..

Урман-һыуын, ерен тартып алып
Ҡан-йәш һеңгән аяҡ аҫтынан,
Аҡ батшалар ҡара ҡулдар менән
Муйынынан уның аҫтылар!

Аҫтылар ҙа, мыҫҡыл итеп уны,
Үлем юрап көлдө юраусы:
Имеш, һуңғы башҡорт ҡәберендә
Ҡурай уйнар һуңғы ҡурайсы!..

Юҡ, үлмәне халҡым! Ҡотҡарырға,
Ҡайтарырға ирек, ырыҫын
Килде уға бер мәл Ленин атлы
Мәңге көткән батыр бер дуҫы.

Килде лә ул, ҡылыс бирҙе уға:
– Азат бул, – тип, – Урал тотҡоно!
Ҡарағоштоң ҡара ҡанатына
Сөйҙө үҙе ирек осҡонон.

Утлы дауыл ҡубып шул осҡондан,
Күтәрелде Шәһит, Баһауҙар,
Мәңгелеккә өҙөп ырғытылды
Ҡул-аяҡтан ҡанлы бығауҙар!..

Үткәндәрен ауыр бер моң итеп
Көйләгәндә еңел ҡурайы,
Шат йәшлеген күреп, мин халҡымдың
Сал тарихын ҡайтып урайым.

Монарланып ятҡан Уралтауҡай,
Дан күкрәтеп күккә ашҡанһың.
Алҡаланып аҡҡан Ағиҙелкәй,
Ҡайғы-шатлыҡ менән ташҡанһың.

Ҡаны менән яҙып данын халҡым,
Ҙур йөрәген илткән ирекҡә.

Шуға ла бит Ленин һыны уға
Ырыҫ-бәхет булып ереккән.

Йөрәгем, тим, изге төйәгемде –
Хаҡ яҙмышым шунда ташланған,
Шунда минең бәхет таңым атҡан,
Шунда миңә Ватан башланған!

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Хикәйәтте тасуири уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Әҫәрҙә Башҡортостан нисек һүрәтләнә? Ниндәй тарихи ваҡиғалар, шәхестәр иҫкә алына?

**2.** «Уралҡайым! Һинең һәр ташыңа
Ҡанлы-данлы тарих яҙылған» тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?

**3.** «Һуңғы башҡорт ҡәберендә
Ҡурай уйнар һуңғы ҡурайсы!..» тигән юлдарға нисек яуап бирер инегеҙ?

**4.** Хикәйәттән өҙөк ятлағыҙ (уҡытыусы һайлауы буйынса).

## АМАНАТ

*Жәлил ағай Кейекбаев*
*ҡәберенә бер ус тупрағым*

Телең барҙа илең бар,
Илең барҙа иркең бар,
Иркең барҙа күркең бар,
Ил биҙәргә дәртең бар,

Ерең, күгең – икең бар,
Утың, һыуың – дүртең бар.

Шул дүртәүҙән башҡа заттан
Кешегә һуң ни кәрәк?
Шул дүртәүҙең дүртеһендә
Ул таянған дүрт терәк:

Дүрт күҙ менән бағып торған
Байлығы ла дүртәүҙә;

Дүрт яғын да ҡибла иткән
Барлығы ла дүртәүҙә;

Дүрт терәктең дүртеһен дә
Тыуып үҫкән ил бәйләй;
Ил яҙмышын ир муйынына
Ҡылды ярыр тел бәйләй,
Ҡырҡҡа ярыр тел бәйләй!..

Бәпләп-әрләп тел менән
Кеше иткән инәбеҙ,
Әшле иткән инәбеҙ;
Һөйләп-көйләп тел менән
Хисле иткән инәбеҙ,
Көслө иткән инәбеҙ;
Күҙебеҙҙе тел менән
Нурлы иткән инәбеҙ,
Үҙебеҙҙе тел менән
Йырлы иткән инәбеҙ!..

Терелткән дә тел шуға,
Үлтерткән дә тел шуға;
Тел әйткән һүҙ ел түгел,
Ҡәҙер-хөрмәт бел уға,
Ҡәҙер-хөрмәт бел уға!

Тел асҡысы – ил асҡысы.
Күҙ өҫтөндә ҡаш һымаҡ,
Ҡаштан яҙған күҙҙән яҙып,
Ҡатып ҡалыр таш һымаҡ,
Ятып ҡалыр таш һымаҡ…
Һай, таш булма, таш булма,
Аң ғына бул телеңә,
Аң булмайса, туң булһаң,
Бер имгәк һин илеңә,
Бер түңгәк һин илеңә!

Тел төпкәйе – тал төпкәйе,
Тал төпкәйе – тамыр ул,
Тамырына балта сапһаң,
Талың ҡороп ҡалыр ул;

Тарбағынан ҡан-йәш һарҡып,
Тып-тып итеп тамыр ул;
Туп-туп итеп ҡош ҡундырмай,
Түңгәк булып ҡалыр ул,
Түңгәк булып ҡалыр ул!..

Түңгәгендә ни үҫер?
Ни иркәләп ел иҫер? –
Оян үлән, күл үҫер,
Ҡорт ҡуҙғытып, ел иҫер;
Күлең саҡ-саҡ сайҡалыр,
Саң туҙғытып, сайҡалыр...
Тал төбөндә ни үҫер?
Ни иркәләп ел иҫер? –
Иҫ китерҙәй гөл үҫер,
Гөл иркәләп, ел иҫер;
Гөлдәр нурын таратыр;
Елдәр йырын таратыр;
Телдәр менән тел булып,
Тиңдәр менән тиң булып,
Хөр күңеле киң булып,
Һандуғастай һайрашып,
Ғөрөф-ғәҙәт алмашып,
Халҡың ырыҫ ҡаратыр,
Үҙенә дуҫ ҡаратыр,
Үҙенә дуҫ ҡаратыр!

Әсә теле барында,
Сәсән теле барында,
Кәм-хур булмаҫ табында,
Йөҙ ҡыҙартмаҫ табында,
Дуҫ-ишең ҡоронда,
Ғәҙәтенсә борондан,
Йырлар моңло йырын да,
Түрҙә булыр урын да...
Телең барҙа илең бар,
Илең барҙа иркең бар,
Иркең барҙа күркең бар,
Ил биҙәргә дәртең бар,
Ерең, күгең – икең бар,
Утың, һыуың – дүртең бар.

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Һүҙем әйтеп бөтәйем:
Ни һуң икән киләсәк?
Кемдәр унда киләсәк? –
Яуап биреп үтәйем:
Төрлө гөлдәр үҫәсәк,
Һутлы емеш бирәсәк,
Һәр гөлгә ер етәсәк.
Бер баҡса ул – Киләсәк,
Хөр баҡса ул – Киләсәк!

Шуның өсөн һуғыштыҡ,
Бергәләп ҡан ҡойоштоҡ,
Шул ҡан менән дан алып,
Бер ҡор булып ойоштоҡ;
Яулап алған тел менән
Бер ҡор булып ойоштоҡ;
Яулап алған тел менән,
Һаҡлап ҡалған тел менән
Һәр кем шунда киләсәк,
Сабый булып көләсәк, –
Шул баҡса ул – Киләсәк,
Мул баҡса ул – Киләсәк!
Бар халыҡтың ҡоро ул,
Көйлө, татыу йыры ул!

Ата-бабаң ҡалдырған һүҙ
Аманатым шул һиңә,
Аманатым шул һиңә.
Аманатҡа хыянатһыҙ,
Аҡыктан-аҡ юл һиңә,
Аҡыктан-аҡ юл һиңә!..

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Ҡобайырҙы тасуири уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Рәми Ғарипов был әҫәрҙе ҡобайыр жанрында ижад иткән. Уның ошо жанрға ҡарауын үҙ һүҙҙәрегеҙ менән дәлилләгеҙ.
**2.** Ҡобайырҙа тел һәм уның роле хаҡында нимәләр әйтелә?
**3.** Киләсәк нимә һуң ул? Уны нисек күҙаллайһығыҙ?
**4.** Шағирҙың һеҙгә аманаты нимәнән ғибәрәт, шул хаҡта һөйләгеҙ.
**5.** Ҡобайырҙан өҙөк ятлағыҙ (уҡытыусы һайлауы буйынса).

## УЙҘАРЫМ

Ярты төндә уянып,
Йоҡлай алмай уйланып,
Уйлап ятҡан уйҙарҙы –
Таралышҡан ҡуйҙарҙы –
Ҡалай итеп йыяйым,
Ҡалай итеп тыяйым?

Далалағы ҡамғаҡтай,
Әкиәттәге йомғаҡтай,
Тотоп тыйып булмаҫтай,
Ташлап ҡуйып булмаҫтай,
Ағым мәллә уйҙарым,
Һағым мәллә уйҙарым?

Заманаһы – заманға,
Яҡшылығы – яманға,
Дөрөҫлөгө – ялғанға –
Барыһы бергә ялғанған!..

Ҡалай итеп һүтәйем
Был сыуалған йомғаҡты?
Ҡалай ҡыуып етәйем
Дауыл ҡыуған ҡамғаҡты?

Йөрәгемдең ҡағышы,
Йөрәгемдең һағышы –
Етмеш ете яу күргән,
Етмеш ете дау күргән
Халҡым ғына шул минең,
Ялҡынғынам шул минең!

Аҡҡан ғына ҡандары –
Иҙел түгел, дарья шул,
Сыҡҡан ғына дандары –
Иле түгел, донъя шул;
Ир күңелендә ил булһа –
Уйҙы тартҡан улъя шул!..

Бөгөнгөһөн уйлайым,
Иртәгәһен буйлайым,

Иртәгәһе – ишәккә, тип,
Ҡулым һелтәп ҡуймайым,
Ҡулын һелтәп ҡуйыр ирҙе
Ишәктер тип уйлайым.

Ай Уралым, Уралым –
Ил һаҡлаған ҡоралым!
Ятып ҡалған төнөң бар,
Балҡып янған көнөң бар,
Мең йыл йәйгән түлең бар,
Түл йәйҙергән телең бар,
Телде һаҡлар халҡың бар,
Илде туплар хаҡың бар!..

Һалып илдең оранын,
Ырғыҙ, Туғым, Сораным,
Ҡаҫмарт, Миәс, Һаҡмарым,
Курган, Кама яҡтарым,
Хәлегеҙҙе һораным…
Тик яҡшыға юраным.

Ил яҙмышы ирҙә икән,
Ил иртәһен уйлаһын,
Ил иртәһе – ишәккә, тип,
Ҡулын һелтәп ҡуймаһын;
Ҡарҙың башын ҡар ашап,
Туҙҙырмаһын улъяһын!
Туйған ерҙә йөрөгән дә
Тыуған ерҙән туймаһын!

Айҡап сығам, байҡап сығам
Иҙел, Урал буйҙарын,
Иҙел, Урал буйҙарын,
Ярты төндә уянһам да,
Ниҙе генә уйлаһам да, –
Илем, һиндә уйҙарым,
Иртәгәңдә уйҙарым!..

## Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Ҡобайырҙы уҡып сыҡҡандан һуң һеҙҙә ниндәй хис-тойғолар уянды?
**2.** Шағирҙың туған тел, тыуған ер, Тыуған ил тураһындағы уйҙары, кисерештәре менән ризаһығыҙмы?

**3.** Лирик геройҙың кисерештәре, уйланыуҙары уҡыусыларҙа ниндәй тойғолар уята?
**4.** Уралдың тәбиғәтен һәм кешеләрен тасуирлаған юлдарға иғтибар итегеҙ. Улар араһында ниндәй оҡшашлыҡтар табаһығыҙ?
**5.** Ҡобайырҙан өҙөк ятлағыҙ (уҡытыусы һайлауы буйынса).

## Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ

Был ҡобайырҙа ниндәй мәсьәләләр иң беренсе планға ҡуйыла? Шуларҙан сығып, Башҡортостаныбыҙҙың боронғо хәлен нисек күҙ алдына баҫтырып була?

## Хәтергә төшөрәбеҙ

«Уйҙарым» әҫәрен беҙ ни өсөн ҡобайыр тип атайбыҙ? Үҙегеҙҙең яуабығыҙҙы иҫбатлағыҙ.

## Ижади эш

Ҡобайырҙағы һүрәтләү сараларына иғтибар итегеҙ, халыҡтың йәнле һөйләү телмәре менән сағыштырып ҡарағыҙ.

## Проект эше

«Рәми Ғарипов әҫәрҙәрендә халыҡ ижады традицияларының сағылышы» темаһына телдән сығыш әҙерләгеҙ.



Рауил
# БИКБАЕВ
(1938)

Рауил Төхфәт улы Бикбаев Ырымбур өлкәһенең Покровка районы Юғары Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Күрше Ғабдрахман ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте, Аҡболаҡ педагогия училищеһын, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Аспирантуранан һуң оҙаҡ йылдар Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй. 1995–2011 йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар союзының идара рәйесе вазифаһын башҡара.

Рауил Бикбаев университетта уҡыған йылдарында яҙыша башлай. «Дала офоҡтары» тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы 1964 йылда донъя күрә. Шунан бирле ул ике тиҫтәгә яҡын китап сығарҙы, хәҙерге башҡорт шиғриәтенең кимәлен билдәләрлек күренекле шағир булып танылды. Рауил Бикбаев ижадында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ тураһында һүҙ бара. «Каруанһарай», «Баҙар балтаһы», «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаларында, «Халҡыма хат» шиғырында был бигерәк тә асыҡ күренә.

Рауил Бикбаев – күренекле әҙәбиәт ғилеме белгесе. Ул филология фәндәре докторы, профессор. Хәҙерге башҡорт шиғриәтенең үҫеү проблемаларына арналған күп ғилми хеҙмәттәрҙең авторы.

Рауил Бикбаев республикабыҙҙың Ғ. Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. 1992 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде.

## БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА

Сөн ярынан алыҫтарға баҡтым,
Офоҡтарҙа даръя-баҫыу аҡты,
Бар тарафта донъя ниндәй яҡты,
Ҡан тибешем офоҡтарҙы ҡаҡты:
– Башҡортостан бында башлана!

Туҡтап ҡалдым Яйыҡ туғайында,
Аҡ нур яғыла кеүек һәр ҡайындан,
Талпына ла күңелем күктә тулай,
Яҙ айында һабан турғайындай:
– Башҡортостан бында башлана!

Башҡортостан мине ҡаршы ала,
Ҡайтһам һыуҙар кисеп, ил урап,
Ҡабырғаһын, һыртын бора белмәй,
Ҡояш кеүек ҡарай туп-тура.

– Республикам, бында башландың! – тип
Әйткәнемдә ергә ҡапланып,
Ишетәмен ерем ҡуйынынан
Сабыр ғына тауыш аҡҡанын:

– Яйыҡ туғайынан Сөн ярына,
Юшатырҙан Әйгә ҡәҙәрле
Йәйрәп ятҡан ерҙең күңеленә
Һәр ҡарышы,
Һәр ҡарышы, беләм, ҡәҙерле.

Ҡайтҡан һайын һыйынаһың миңә,
Берсә көлөп, берсә уйланып.
Тик мин һуҡмаҡтарҙан ғына түгел,
Башланам бит һинән, уланым.

Мин бит башланамын һинән, унан,
Кешеләрем, һеҙҙән башланам!
Юлдар һеҙҙе ҡайҙа ғына илтмәй,
Яҙмыш һеҙҙе ҡайҙа ташламай…

Ә мин мәңге бында – Уралымда,
Тик булмышым инде өр-яңы:

Минең янға донъя килмәһә лә,
Үтеп сыҡтым бөтә донъяны.

Моң-шатлығын илдең тигеҙ күреп,
Ил алдында һүҙен тиң әйтеп,
Уландарым ҡайҙа ғына йөрөмәй,
Ҡоласымды минең киңәйтеп.

«Башҡортостан!» – тиеп, улдарыма
Алыҫ ҡитғаларҙа ҡарай ер.
Кешем намыҫында кер күрһәләр,
Ғәрлегемдән йөҙөм ҡарайыр.

Мин башланам һеҙҙән, кешеләрем!
Күңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым.
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек – Башҡортостан кеүек –
Был донъяға тура ҡарарлыҡ.

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Картанан Башҡортостандың шиғырҙа телгә алынған төбәктәрен билдәләгеҙ.
**2.** Башҡортостан ҡайҙан башлана? Үҙ һүҙҙәрегеҙ менән яуап бирегеҙ.
**3.** Башҡортостан тураһында «Ҡабырғаһын, һыртын бора белмәй, Ҡояш кеүек ҡарай туп-тура» тигән юлдарҙан нимә аңланығыҙ?
**4.** Шиғырҙы ятлағыҙ.

## ЙӨКӘЛӘРҘӘН ҺЫҒЫЛЫП БАЛ ТАМҒАНДА

Өлгөрмәҫлек ташып бал ҡорттары –
Йүкәләрҙән
Һығылып бал тама!
Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда,
Ҡулың барыр нисек балтаға?!

Сәскәләрен һыпырып сәйгә һалам –
Шау бал булып аңҡый сәйҙәрем.

Йөрәгемдең бар яфаһын йыуа
Уралымдың шифа йәйҙәре.

Битләүҙәрҙә тулышып еләк бешә,
Устарыма төшә тирелеп.
Бынау аҡландарға тик бер ҡаплан –
Һүнгән хыял кире терелер.

Ҡылығында булмаҫ был тауҙарҙың
Яҙмыштарға мыжыу, һуҡраныу.
Элек йәшкә, ҡанға мансылһа ла,
Баллы булып ҡалған
Тупрағым...

Тайған саҡта таянысың булыр
Был тупраҡтан ҡалҡҡан
Һәр ҡыяҡ.
Тупрағымдан ҡыяҡ ҡалҡҡан кеүек
Йөрәгемдә яңы йыр тоям.

Талпынғанда йырым,
Ысыҡ йырып,
Ҡаршыларға сығам ал таңды.
Йырҙарыма ысыҡ сафлыҡ ҡойһон,
Йүкәләрҙән һығылып бал тамһын...

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Шағир Уралдың шифалы йәйҙәре менән нисек хозурлана?
**2.** Йәйге урманды, бигерәк тә йүкә урманын, күргәнегеҙ бармы? Ул һеҙҙә ниндәй тойғолар уята?

## ДАУЫЛ

Дауылдарҙа минең байрамдарым,
Дауылдарға торам йән атып.
Йәшен күрһәм, күҙ йәштәрем йәшнәй,
Осам ҡанатымды ҡанатып.

Дауыл булһам икән,
Ер өҫтөнән
Иҫкергәнде ҡырып үтергә!
Таяуҙарға, аяуҙарға ышанып,
Ниңә ерҙә донъя көтөргә?
Дауыл булһам икән,
Һулышымдан
Ҡурҡаҡтарҙы – тере ҡурсаҡтарҙы
Ҡан ҡалтыратып
Ҡарап торор инем;
Мещандарҙы
Ығы-зығы батҡағынан йолҡоп алып,
Ҡарундарҙы бәйләп аҡса һандығына,
Күтәргәндәй
Аждаһаны һаҙлығынан,
Күккә күтәрер ҙә
Быраҡтырыр инем.
Булһаң икән дауыл ҡанаты!
Осам, осам дауылдарға ҡаршы
Ҡанатымды ҡанатып.

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

1. Әгәр шағир дауыл булһа, нимә эшләргә теләр ине?
2. Шағирҙың ни өсөн дауыл булғыһы килә?

### Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ

Әгәр һеҙ дауыл булһағыҙ, беренсе сиратта ниндәй күренештәрҙе, кәмселектәрҙе алып осорор инегеҙ?

## ЙӘНШИШМӘБЕҘ ОШО ТУПРАҠТА

Эй, еркәйем! Уттар үткән халҡым
Мәңгелеккә төйәк тапҡан ер.
Тынғы белмәҫ сиктәреңде һаҡлап,
Ир-егеттәр яуҙар сапҡан ер.

Ҡыйратылған йәйләү-ауылдарҙа
Даръя булып ҡандар аҡҡан ер.

Алтын ҡуйынында батырҙарҙың
Изге һөйәктәре ятҡан ер.

Беҙҙе тере иткән тамырыбыҙға
Илталарҙар балта сапмаҡсы.
Харам малдар йыйған ас күҙҙәргә
Ер-әсәне хатта һатмаҡсы.

Күпме малды, балды, урмандарҙы
Һаттыҡмы беҙ?
Бушлай оҙаттыҡ.
Еребеҙҙең аҫыл хазинаһын
Таланылар, белмәй оятты.

Эсәр һыуға ағыуҙарын ағыҙа,
Мәсхәрәләй ерҙе ҡанһыҙлыҡ.
Ҡырылып бөттө башҡорт урмандары,
Башҡорт китабына ҡағыҙ юҡ.

Ҡулыбыҙҙа ниндәй байлыҡ ҡалды?
Таянырға бары ер ҡалды.
Урал ҡоросонан ҡойған балта
Боғаҙына саба Уралдың.

Еребеҙҙең ете ҡатын тунай
Колониаль баҙар балтаһы.
Бар байлығын талап бөткәндән һуң
Ҡалдымы тик ерҙе һатаһы.

Күпме заман тыныслыҡтар эҙләй,
Тик тыныслыҡ тапмай ошо ер.
Палач тураҡлаған Бабичтарҙың
Ғазаптарын һаҡлай ошо ер.

Сабырлығын юймаҫ Уралҡайҙың
Күкрәккәйе тулы ут ҡына.
Һөйәктәре ят яҡтарҙа ҡалған
Вәлидиҙе өҙөлөп юҡһына.

Өмөт-ырыҫ йәшәр көнөбөҙгә,
Моң-ғәм, нур-йәм беҙгә ошо ер.
Телебеҙҙе тере иткән тылсым,
Йырыбыҙға илһам ошо ер.

Меңәр йылдар беҙгә ғәйрәт биргән
Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта.
Ошо ерҙе бөгөн һатырға тип,
Баҙар балтаһымы тураҡлар?

Башҡортостан ерен ботарларға
Күпме уҡталдылар ят ҡулдар.
Барыһы ла ерҙең хәтерендә,
Яралары һаман һулҡылдай.

Эй, еркәйем, һинең яраларға
Йәншишмәнән һыуҙар бөркәйем.
Халҡым үҙе тураҡланып бөтөр,
Тураҡланһа бөгөн еркәйем.

Ерен һаҡлар ирҙәр өнһөҙ ҡалһа,
Хаҡ яҙмышы илдең ҡарайыр.
Урал тупрағына ҡул һуҙғандың
Табандарын өтһөн ҡара ер.

Рәхиме юҡ баҙар балтаһының,
Тик ир булып ҡалһын ир заты.
Ерен һатҡан йәнде ере йотһон,
Ерен һатҡан йәнде ер баҫһын.

Ҡурсалайыҡ ғәзиз еребеҙҙе,
Булғанда ла юлда мең кәртә.
Тыуған ерен һатҡан бәндә оҡшар
Үҙ әсәһен һатҡан мөртәткә.

Ер һатылһа, ярһыуынан Урал
Башыбыҙға таштар яуҙырыр.
Һағыш түгел, ҡарғыш түгер ҡурай,
Ғәрлегенән иңрәп ярылыр.

Ил яҙмышы ҡыл өҫтөндә саҡта,
Ҡул ҡаушырып, ғәмһеҙ ятмайыҡ.
Һаҡлайыҡ беҙ ғәзиз Ер-әсәне,
Үҙебеҙҙе үҙебеҙ һаҡлайыҡ!

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Башҡортостандың үткәндәрен шағир нисек һүрәтләй, шуларҙы үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләп бирегеҙ.
**2.** Шиғырҙа экология, тәбиғәтте һаҡлау мәсьәләләре лә күтәрелә, шул юлдарҙы табып уҡып күрһәтегеҙ һәм үҙегеҙҙең ҡараштарығыҙ хаҡында һөйләгеҙ.

### Төркөмдә йәки парлашып эшләгеҙ

**1.** «Баҙар балтаһы» тигәнде нисек аңлайһығыҙ? Ниндәй балта тураһында һүҙ бара?
**2.** Шағирҙың ерҙе һатыуға ҡарашы нисек?

### Проект эше

Ерҙе һатыу ниндәй эҙемтәләргә килтерәсәк? Бөгөнгө көн күҙлегенән ҡарағанда, бәлки ер һатыу актуаль күренештер. Шул турала фекер алышығыҙ.



# Роберт
# ПАЛЬ
## (1938)

Роберт Васильевич Паль Башҡортостандың хәҙерге Стәрлетамаҡ районы Южный ҡасабаһында тыуған.

Стәрлетамаҡ һәм Белорет педучилищеларында уҡый. 1956–1961 йылдарҙа – Башҡорт дәүләт университетының тарих-филология факультеты студенты.

Университетты тамамлағандан һуң, Ҡырмыҫҡалы районы Подлубов урта мәктәбендә тарих уҡыта. 1962 йылдан Башҡортостан китап нәшриәтендә мөхәррир, бүлек мөдире, ә 1975 йылдан баш мөхәррир булып эшләй.

Роберт Паль ижад эше менән педучилищела уҡыған осорҙа уҡ шөғөлләнә башлай, студент йылдарында иһә шаҡтай активлаша. «Живые маки» тигән тәүге китабы 1964 йылда сыға, хәҙер – ике тиҫтәгә яҡын поэтик һәм проза китаптары авторы.

Роберт Паль шиғырҙары лирик геройҙың граждандлыҡ активлығы һәм һәйбәт кешелек сифаттары менән айырылып тора.

Һуңғы йылдарҙа ул эпик проза өлкәһендә лә актив эшләп килә. Уҡыусылар уның «Иду до конца», «Есть у неба земля» повестарын һәм «Легенды будут потом» роман-хроникаһын йылы ҡаршылаНЫ.

1969 йылдан СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы.

## УРАЛЫМ

Төйәгем һин, Урал, мөхәббәтем,
Ауыр саҡта һиңә таянам.
Әйтер һүҙем төпкөлөңдән килә,
Йөрәккә көс – һинең ҡаянан.

Һиңә киләм шатлыҡ кисергәндә,
Хәсрәттәрем һиңә түгәмен.
Һинән башҡа миңә тоғро юл юҡ,
Фәҡәт һиңә башым эйәмен.

Ҡайындарың күңелен аңлайһың һин,
Олғаштырҙың мине түбәңә, –
Ер кендеге икәнеңде тойҙом,
Тик тиңдәшһең һиңә тиңдәргә.

Мин беләмен: ҡаяң ҡаҡшамаҫлыҡ,
Ләкин һиңә түгел еңелдән.
Ышанамын: һығылмаясаҡһың
Һәм булмаҫһың елдән еңелгән.

Бирешмәҫһең. Һин бит – ер кендеге,
Ил кендеге – уға терәк һин,
Донъялағы барлыҡ вәхшәттәрҙе
Ҡаҡлыҡтырыр ҡалҡан – йөрәк һин.

Әгәр һиңә бәлә-ҡаза килһә,
Шик-шөбһәгә төшһә йөрәгең,
Ораның һал: ҡаяларыңды мин
Йәнем-тәнем менән терәрмен.

*Ихсан Әхтәмйәнов тәржемәһе*

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шағир ни өсөн ауыр сакта Уралға таяна? Ә шатлыҡ кисергәндә ул ҡайҙа килә?
**2.** Автор ниндәй образлы сағыштырыу ҡуллана?



Талха
# ҒИНИӘТУЛЛИН
**(1925)**

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Талха Йомабай улы Ғиниәтуллин Учалы районы Ураҙ ауылында тыуған. Ташкентта һөнәрселек уҡыу йортон тамамлай, заводта эшләй. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша, бер нисә тапҡыр яралана, хәрби ордендар һәм миҙалдар менән бүләкләнә. Һуғыштан һуң төрлө өлкәләрҙә эшләй. 1955 йылдан алып Мәскәү ҡалаһында йәшәй, киске мәктәптә белем ала. Ситтән тороп М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтын тамамлай. Йәй айҙарын Башҡортостанда, тыуған ауылында үткәрә.

Тәүге хикәйәләре XX быуаттың алтмышынсы йылдары аҙағында донъя күрә башлай. Бала саҡтан үкһеҙ етем ҡалып, рус телен ни бары ун алты йәшендә өйрәнә башлаһа ла, әҫәрҙәрен рус телендә ижад итә. Мәскәүҙә сыҡҡан китаптарын Анатолий Генатулин тигән ҡушамат менән баҫтыра. Һуңғы йылдарҙа уның әҫәрҙәре башҡорт телендә лә күпләп донъя күрә. Уларҙы башҡортсаға тәржемә итеүгә күренекле прозаик Әмир Әминев ҙур көс һала.

Талха Ғиниәтуллин – Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Сергей Аксаков исемендәге Бөтә Рәсәй премияһы лауреаты.

## МӘТРҮШКӘ ЕҪЕ

Сафиуллин Хәбибулла – үҙ ауылында ғына түгел, тотош районда, хатта бөтә Башҡортостанда иң хөрмәт ителгән кешеләрҙең береһелер әле. Гәзиттәрҙә уның һүрәтен баҫып сығарҙылар; шундай ҙа иттереп маҡтап яҙғандар, шундайын да иттереп тасуирлағандар, Хәбибулла бер уҡыны, ике уҡыны, тағы баштан төшөп уҡып сыҡты – үҙен танығандай ҙа булды ул гәзиттә, таныманы ла. Бүтән райондарҙа ла, моғайын, грамоталы кешеләр йәшәйҙер бит. «Юлдаш ауылында Хәбибулла Сафиуллин тигән ана ниндәй кеше бар икән дә баһа!» – тип уйлай торғандарҙыр инде. Сөнки уға «Почёт Билдәһе» ордены бирҙеләр. Усыңа һалып ҡараһаң, шундай һәлмәк, үҙен көмөшләп-буталлап ниндәй ҙә матур итеп ҡуйғандар. Тик уны гел генә түшкә тағып йөрөп булмай. Нимә, эш ваҡытында һырмаңа бормаслап ҡуяһыңмы ни? Байрамдар бик һирәк; ҡунаҡҡа барғанда, әллә нисек, уңайһыҙ... Шкафта, ал бәрхәт ҡумтаһында, ята шунда. Ята бирһен, Хәбибулланың ордены барын кеше былай ҙа белә бит. Тик бына Хәбибулла шуныһына ғына төшөнөп етеңкерәмәй: ниңә ул «Почёт Билдәһе»? Орден булғас, ниңә ул «Почёт ордены» түгел? «Билдә» булғас, «тамға» тигән төҫлөрәк ишетелә. Торараҡ ул Мәскәүгә барҙы. Ҡаҙаныштар күргәҙмәһенә.

Кем ул Сафиуллин Хәбибулла? Сафиуллин Хәбибулла – көтөүсе. Ябай көтөүсе генә түгел, өлкән көтөүсе. Дөрөҫөн генә әйткәндә, өлкән көтөүсе ни ул, кесе көтөүсе ни – барыбер көтөүсе инде ул. Башҡалар ыңғайына йүгерә, хаҡы ла бер түләнә. Бына Хәбибулла гәзиттә үҙе хаҡында ла уҡыны, «Почёт Билдәһе»н дә алды, Мәскәүгә лә барып ҡайтты, уның тормошонда барыбер бер үҙгәреш тә булмаған кеүек. Көтөүсеме, өлкән көтөүсеме инде шунда, һаман көтөүсе булып ҡалды. Тик уның күңеле генә әллә ни рәүешле үҙгәреп киткәндәй ине. Әйтерһең дә, уның берҙән-бер тәнендә хәҙер ике кеше йәшәй. Берәүһе – әүәлгеһе, «Почёт Билдәһе» булмағаны; икенсеһе – әлегеһе, «Почёт Билдәһе» таҡҡаны. Дөрөҫөн генә әйткәндә, ул үҙенә орденды ни өсөн биргәндәрен аңлап та еткермәне. Ҡайһы мәлдә был ҡиммәтле нәмәне уға үтескә биргәндәрҙер ҙә шул бурысын ул ғүмере буйы эшләп түләргә тейештер һымаҡ тойола. Әүәле, орденһыҙ сағында, көтөүсе ғәйебе менән һөт кәмеһә, шыйыҡланһа – артыҡ ыжламай тор-

ғайны. Хәҙер, ҡайҙа ул, ярамай – хәҙер Хәбибулланың яуаплылығы министрҙыҡынан кәм түгел.

Бына бөгөн көтөүҙән ҡайтышлай ҙа Хәбибулланың күңеле тулы борсолоу ине, иңен оло яуаплылыҡ баҫҡайны. Ҡыуарып барған ҡоро йәй. Ямғыр юҡлыҡтан хатта Шайтан һаҙы ла шыңғырап ултыра, һары йылға ҡорор хәлгә етте, малҡайҙарға морон сылатыр һыу юҡ. Бәләкәс кенә быуа ла яһап ҡаранылар, тик унда һыу тиҙ үк йәшелләнеп һаҫыны. Һыйыр малы бит ул селтерәп аҡҡан таҙа һыуҙы ярата – нимә әйтһәң дә, унын еленендә һөт ярала... Колхозда бульдозер бармы? Бар. Торба табылырмы? Табылыр. Булғас һуң, ҙур быуа быуығыҙ, торба һалығыҙ, һыу сәскә атып ултырмаһын, ағып торһон. Күпме генә эше бар. Теләһә ҡайһы күләүектән быҡырлатып эсергә һыйыр сусҡа түгел дә баһа! Һыйыр бит ул, кеше һымаҡ, талымлы, һиммәтле, һиҙгер йән эйәһе. Ел тиҫкәренән иҫтеме, ҡапыл һыуытып ебәрҙеме, йәиһә ҡапыл йылыттымы, һауа баҫымы үҙгәрҙеме, көн йонсоуға киттеме – һәммәһе лә һыйырҙың елененә тәьҫир итә... Әгәр ҙә бер-ике көн эсендә быуа булмаһа – райкомға барам. Нимә, Хәбибулла алама кешеме, ошаҡсымы, янъялсымы, ялыу менән йөрөймө?! Бына һиңә! Мин үҙ файҙама сабаммы әллә? Һин, иптәш рәйес, миңә екенмә! Мин нужаны үлән апараһы менән ҡушып һемергәндә, һин ыштанһыҙ көйө ағас атҡа атланып йөрөй инең әле... Нимә?! Мин насар көтөүсеме?! Ишеттегеҙме, Хәбибулла насар көтөүсе! Ниңә, улай булғас, миңә «Почёт Билдәһе» бирҙерттең? Хөрмәт тамғаһы?! Мин уны һинән һорағайныммы? Йә, иртәгәнән ҡалмай, быуа быуҙыраһың, йә орденды кире алаһың – бына шул. Ә хәҙергә иҫән-һау бул!..

Хәбибулла көтөүлектән үҙенең туры атына атланып ҡайтып килә. Башында әлеге шул һыйырҙары хаҡындағы ауыр һәм йөҙәткес уйҙары ҡуҙғып ҡымйыша, күңеленән шундай туҙып китеп, рәйестең яғаһынан ала. Аралаш, башы ошондай ауыр ғәм-хәсрәттәрҙән әҙгә генә арынып, күңел күге аяҙайып торған мәлдәре булып ала. Шул арала ғына ул ғәйре күңеллерәк уйҙарға бирелеп алырға өлгөрә. Әйтәйек, мунса хаҡында, быйыл унынсыны тамамлап, институтҡа инергә әҙерләнеп йөрөгән кинйә улы хаҡында... Быныһы тағы бер ҡайғы. Ә инә алмай ҡайтһа? Шундай тырыша егет, уҡыуға шундай әүәҫ. Һуң Сафиуллиндар нәҫеленән дә берәү юғары белемле булырға тейеш тә инде? Шул арала ла Хәбибулланың хәстәрле зирәк күҙе әллә нәмәләр күреп алырға өлгөрә: бынау бойҙайҙы ҡара

һоло баҫҡан – сабып, йәшел көйө малға ашатырға кәрәк; тау башына аҡ болоттар өйөлгән – их, ямғыр кәрәк хәҙер; юл буйлап рәйестең «бобигы» саң борҡотоп елә – икенсе бригадаға елдерҙе булһа кәрәк... Бына Мышағар тауының итәге. Бында, анау ҡайындар аръяғында, арыу йылда дүрт кәбән бесән ҡойоп ултыртыр ине. Быйыл йыл ҡоро, үлән таҡыр, ҡайын араһынан ҡараштырырға тура килер инде. Ҡайырылып, ҡарап әйләнергә кәрәк әле. Эйе-е, бесән йоҡа.

Ә бына мәтрүшкә бил быуарынан булып үҫкән, ҡотороп сәскә атҡан. Ул талымлы үлән түгел, ҡоролоҡтан ҡурҡмай, тик уны мал һөйһөнмәй. Хәбибулла атынан ырғып төштө лә бер услам мәтрүшкә йыйып алды. Ул мәтрүшкәне ярата. Уның хуш еҫен ярата. Мәтрүшкәнән ниндәй еҫ аңҡый? Юҡ, үлән еҫе түгел унда. Күңелдә шом ҡуҙғата торған әллә ниндәй ҡырҡыу еҫ, кешенең ҡайнар ҡанын хәтерләткән еҫ... Көтөүселәр, бесәнселәр мәтрүшкәне сәй урынына ҡайнатып эсә. Һалҡын алдырғанда мәтрүшкәне ҡаты итеп ҡайнатып эсәләр, шуның менән тәндән сирҙе ҡыуып сығаралар. Мәтрүшкәне ҡайын миндеккә ҡушып бәйләйҙәр ҙә шуның менән рәхәт сигеп мунса сабыналар. Тау битләүҙәрендә, ҡоро ҡашлаҡтарҙа, ҡайын араһында мал ашамай торған ҡырҡыу хуш еҫле ваҡ-ваҡ ҡына алһыу сәскәле ҡаты үлән үҫмәгән булһа, бәлкем, Хәбибулла яҡты донъяла йәшәмәҫ, ҡулына бер услам мәтрүшкә тотоп тормаҫ, алашаһына атланып, көтөүлектән өйөнә ҡайтып бара алмаҫ ине...

Ауыл буйындағы тапандыла ул атын тышаны ла, эйәрен, йүгәнен, һырмаһын, плащын йөкмәп, өйөнә табан тыртанланы. Баҡсаһы аша уҙғанда эсе бошто – картуф бик зәғиф сыҡҡан, ҡоронан ҡыуарып, әлһерәп ултыра. Ә тегендә, тау түбәһендә, ҡабарышҡан болоттар бында ыңғайларға уйламай ҙа, ашлыҡ баҫыуҙарын да ситләп үтергә самалай; ул инде күкшелләнә, бүртенә бара, тик ямғыр булыр булһа ла, йә, мунса ташына һыу һипкән шикелле, тауҙағы таштарҙы ҡойондорор, йә ҡала өҫтөнә табан ҡайырып сығып китер. Кеше нимә генә уйлап сығармай ҙа, нимә генә төҙөп ҡуймай. Айҙа ниндәй ҙә трактор йөрөп ята әле. Ә бына анауы болот ярпыһын иген өҫтөнә ҡамаулап килтереп, һуңғы тамсыһына хәтлем һауып алыу сараһын һаман булһа уйлап таба алмайҙар. Болотто ауыҙлыҡлау ҡайҙа әле, йүнле-башлы быуа быуып ҡуя алмайбыҙ. Бульдозер бар. Торба табылыр. Бер сәғәтлек эш, асыуым да килмәһә. Тик берәүгә лә кәрәкмәй. Бер Хәбибуллаға кәрәк.

Арт ҡапҡаны асып ингәс, ул әсәһен күрҙе. Би-ик ҡартайған инде ул. Нисә йәш инде уға? Һикһәнме, күберәкме икән? Хәбибулла кәләш алғанда уҡ ҡарсыҡ ине бит инде ул. Хәҙер кәләше үҙе олоғайҙы. Әжәл ҡарт әсәне әллә бөтөнләй онотҡан, әллә өнһөҙ-тынһыҙ сибек кенә ҡарсыҡты шәйләмәй, һуңғы һулышын алған бүтән ҡортҡаларҙы алырға уҙып китә. Тамам иҙрәп, туҙып бөткән инде ҡарсыҡ, тик уның тәнендә оҙон ғүмерле, сыҙамлы йөрәк йәшәй, ул күкрәк ситлегендә һаман леп-леп тибенгән була, тамырҙар буйлап йылы, ҡуйы ҡанды ҡыуалай; ҡаны бик яй йүгерә хәҙер, ул ҡарсыҡтың һәммә ағзаларын да, мейеһен дә туйындыра алмай. Шуға күрә ҡарт әсә насар күрә, насар ишетә, кисә ни булғанын бөгөн хәтерләмәй, кешеләрҙе танымай, ауыҙ асып бер һүҙ өндәшмәй; тамағына сәйҙән башҡа тәғәм ризыҡ ҡапмай. Йәш сағында Хәбибулла әсәһенән ҡурҡа, уның һүҙен тыңлай торғайны. Нисә әйтһәң дә, шаҡтай уҫал, өҙә баҫып йөрөгән, тотҡан еренән һындырыусан бөтмөр ҡатын ине бит ул. Ә хәҙер, бөтөнләйе менән йүне киткәс, эшкинмәгән ҡарсыҡҡа әйләнгәс, Хәбибулла уны ҡыҙғаныу ғына түгел, фани донъя мәшәҡәттәре, ығы-зығыһы араһында бөтөнләй онотоп йөрөй. Әсәһе, ҡомған тотоп, күтәрмәнең өҫтән икенсе баҫмаһына баҫҡан. Унда ла ярты сәғәт торор әле, шунан өсөнсөһөнә төшөп, йәнә ярты сәғәт торор. Нишләп тора икән ул? Нимә уйлай икән? Бәлки, бер ни уйламайҙыр ҙа. Бәлки, өйҙән сыҡҡандыр ҙа ни өсөн сыҡҡанын онотҡандыр, икенсе баҫмаға төшкәндер ҙә өсөнсө баҫма ла барын онотҡандыр.

Хәбибулла әсәһен урап уҙҙы ла соланға инде, эйәрҙе иҙәнгә ҡуйҙы, плащы менән һырмаһын сөйгә элде; итеген һалып ойоҡсан ғына өйгә үтте.

Ул түр яҡҡа уҙҙы. Өҫтәлдә сүсәреп бөткән күңелһеҙ дәреслектәр туҙышып ята; шунда уҡ ваҡ ҡына итеп яҙыу яҙылған нәҙек оҙон ҡағыҙҙар гармун картаһы кеүек һырланып һуҙылған.

– Рәмил ҡайҙа?

– Һыу инергә китте.

Уға баш баҫып ултырырға, ултырырға, ултырырға кәрәк, ә ул, йүнһеҙ, әллә ҡайҙа олағып йөрөй. Юҡ, институтҡа инә алмаҫ ул малай аҡтығы, Сафиуллиндар нәҫеленән ғалим сыҡмаҫ.

– Мунса яғыр инең, исмаһам...

– Ағылған ул, – тине бисәкәйе. – Әхмәтйәрҙәр яҡты. Эҫеһе шартлап тора, һыуы ла етерлек. Миндек ал да хәҙер үк бар. Мин тамағыңа әҙерләй торормон.

Бисәкәйе уға гәзиткә төрөп эске кейем, һабын, йыуғыс тоттторҙо; ул соланға сыҡты, итеген ҡуңалтаҡ ҡына кейҙе лә, әлеге мәтрүшкә усламын тотоп, ишек алдына сыҡты. Инде өсөнсө баҫмаға төшкән әсәһен урап уҙҙы, шунан миндек алырға баҫҡыс буйлап аҙбар ҡыйығы эсенә менеп төштө һәм картуф баҡсаһы аша күршеһе Әхмәтйәрҙәр мунсаһына йүнәлде. Мунса соланында сисенде, өҫкө кейемен сөйҙәргә элде, шыраулы иҙән таҡталары буйлап ялан аяҡ атланы, ишекте асты һәм ҡыҙыу бөркөп торған мунса ҡараңғылығына сумды. Мунсаның тығыҙ эҫеһе уны ялмап алды. Хәбибулла миндеген, мәтрүшкә бәйләмен ләүкәгә ырғытты, төргәген کескәй тәҙрә төбөнә ҡуйҙы; әсе тир, ат еҫе, көтөүсе ҡыуышы еҫе аңҡытҡан керле эске кейемен өҫтөнән һыҙырып алды. Шунан ләүкәгә менеп, аяғын һәлендереп ултырҙы. Ҡайнар быуҙан тән ҡабарып бүртенгәндәй була, күҙәнәктәр асыла, һәм тирене рәхә-әт иттереп ҡытыҡлай, буй-буй булып тир аға башлай. Хәбибулла шап-шоп килтереп күкрәген сәпәштерҙе, уң ҡабырғаһында күгелйемләнеп торған ҙур йөйҙө тырнаштырҙы. Шунан ләүкәнән төштө, ҡайын миндектең йүкә бауын систе; көҙгө урман еҫе аңҡытып торған япраҡтар араһына мәтрүшкәне йомдороп кире ҡыҫып бәйләне. Миндек байтаҡ һәлмәкләнә төштө. Хәҙер инде уны бешерергә кәрәк. Миндек йомшарғансы, һабынланабыҙ, тирҙе, керҙе йыуып төшөрәбеҙ. Тән бит ул таҙарынғас, күҙәнәктәр шар асылғас ҡына миндек менән иркәләүҙе ярата. Ә хәҙер миндекте ташҡа һалып бешерергә кәрәк. Төпкәрәк, иң ҡыҙыуға, уты сығып торған ергә! Шышылдай! Ә мунса быуланып бығып бешкән мәтрүшкәнең ҡырҡыу еҫе менән тула. Хәбибулла таш яҡтыһының өңрәйеп, ялҡындай ҡыҙыу бөркөп торған ауыҙынан боҫорлап ҡайнап торған мәтрүшкәле миндекте тартып сығара; икенсе ҡулы менән мискәнән бер сүмес һыу алып ташҡа йәнә тондора. Таш өңөнән янар тауҙар һулышы булып дөһөрләп утлы быу атлыға, уға эйәреп әллә ниндәй йоҡа ҡара юнысҡылар осоп сыға. Тағы бер сүмес, тағы янар тау даһырлауы, тағы ҡара юнысҡылар... Хәҙер йәһәтерәк ләүкәгә. Ә унда... тамуҡ! Танау тишектәрен өтә. Ҡыҙыуҙан башында сәстәрең сытырлап көйгәндәй, бөжраланып-бөжраланып йомарланғандай була. Бына шунда инде татлы һәм ғазаплы сихыр ғәләмәттәре башлана: утлы миндек менән

һелтәнеп-һелтәнеп үҙеңдең ғәзиз тәнеңде ҡайыҙларға тотоноп китәһең, ҡайһы ҡабырғаң ҡысый! Рәхәткәйҙәре! Донъяла инде һыйыр ҙа юҡ, ҡороп бөткән һары йылға ла юҡ, һаҫыған һыулы быуа ла юҡ, рәйес менән алышаһы ла юҡ. Рәмил инә торған институт сәсрәп кенә китмәйме; донъяла бына ошо ләүкә генә бар, ҡыҙарып бүртенгән, ыуыҙ кеүек йомшарған, йәннәт ләззәттәре татыған тән генә бар, ҡайын миндек бар ҙа, быуҙа быҡҡан мәтрүшкә еҫе генә бар. Ох, был мәтрүшкәнең еҫкәйҙәре-е!

Бына, ахыр килеп, үҙен татлы ғына итеп һуштан яҙып барған хәлдә тойоп, Хәбибулла ләүкәнән ишелеп төшә; башына бер тас һалҡын һыуҙы ҡаплай һәм, соңҡаһына миндекте ҡыҫтырып, тар һикегә салҡан һуйҙая. Уның бүртенгән тамырҙарында ҡан яҙғы ташҡын һыуҙары ише гөбөрләп аға, йөрәк ҡағышы уҫлаптай кәүҙәһен тотош гөпөлдәп ҡалтырата, күҙ алдында сатҡы сәсрәтеп әллә ниндәй йәшел тәңкәләр өйөрөлә. Ә мәтрүшкә еҫе, тулҡын-тулҡын булып, уны әленән-әле күмеп китә тора. Һәм ул ҡанының геүләүе аҫтында сәңгелдәктәй бәүелеп, мәтрүшкә еҫенән иҫереп, әллә йоҡомһорап, әллә иҫен юйып, ятты ла ятты...

...Ул вагон һәндерәһендә ята. Юҡ, Хәбибулла хәтирәләргә бирелмәне; ул аңлы рәүештә үҙенең тормош йомғағын әҙмә-әҙ тағатып сыға белмәй. Уның өсөн уҙған ғүмере үле тормош, ташҡа әйләнеп үткәндәргә осҡан йәнһеҙ нәмә түгел. Уҙған ғүмере әле лә уның ҡашында ғына, ул бары бөгөнгөһө көндән йоҡа яры менән генә айырыла, унан йәшәлгән ғүмерҙең тере тауышы геүләп ишетелеп тора, һәм уға шул тормошона, уҙғанына кире әйләнеп ҡайтыр өсөн ни бары шул яры аша үрелеп ҡарарға ғына кәрәк.

Бына ул ғүмеренең бөгөнгөһө көнө буйлап атлап бара, ә әлеге ярының артында уҙғандың тоноғая төшкән ауаздарын, аһәңдәрен ишетә – һәм ҡапыл күҙ алдында, күк ҡабағы асылғандай, ялтлап китә. Был ялтлау – быуланып быҡҡан мәтрүшкә еҫе. Һәм ул вагон һәндерәһендә ята.

Вагон ҡалтырана, бәүелтә, келтерләй, суйын тәгәрмәстәр, туң рельстар ялғауында шаҡ-шоҡ килеп, Рәсәйҙең сикһеҙ киңлегендә саҡрымдар һанай.

Ул бөтә һуғыш осоронда, хатта ғүмерендә беренсе мәртәбәлер әле, һалдат теплушкаһында түгел, йәшел пассажир вагонында бара. Тәндәре шыраулanып тупаҫланған, окоп тупрағы, госпиталь хлоркаһы, йодоформ үтәнән-үтә һеңгән, инде һуғышҡа

яраҡһыҙ рядовой һалдатҡа былай иркәләнеп килеүе нисектер уңайһыҙ ҙа, оят та кеүек. Бер мәнфәғәткә эшкинмәгән әҙәм балаһы ҡыйып баçҡыһыҙ, тап-таҙа пассажир вагонында бер үҙе һәндерә биләп килһен әле. Сафиуллин Хәбибулла, немец снарядының ярсығы үпкәһен үтәнән-үтә тишеп сыҡҡан һуғыш инвалиды, ярты йыл госпиталдә аунағандың һуңынан өйөнә ҡайтып бара. Йәшәргә ҡайтып барамы ул, үлергәме – бары шуны ғына белә: бөтөнләйгә ҡайтып бара. Табип әйтеп ҡайтарҙы: яҡшы ашарға, ауыр эш эшләмәçкә. Ҡар-бурандар артында, ҡырлас тауҙар араһындағы һил ауылында уны ниҙәр көтәлер?

Уны госпиталдең шәфҡәт туташы – йәш кенә ҡыҙ оҙата килә. Ҡыҙ һары сәсен ҡыçҡа ғына ҡалдырып киçкән, ҡолаҡсын бүрек, иçке шинель кейгән. Ул – Хәбибулла өсөн алты айлыҡ госпиталь тормошоноң әле һаман өҙөлмәгән бер дауамы; уның аша әле булһа табиптарҙың, сестраларҙың, палаталағы иптәштәренең тауышы ҡолаҡ төбөндә эйәреп килә төçлө. Шул ҡәҙәре күнегелгән икән, айырылышыуҙары ла бик тә яманһыу булғайны. Шәфҡәт туташы уға үтә лә яғымлы итеп: «Ауырыу!», «Йән киçәгем!» – тип өндәшә. Шул ҡәҙәре лә яҡын, шул ҡәҙәре лә ғәзиз, туғандан да яҡын берҙән-бер йән эйәһе ул был поезда, юҡ-юҡ, бар донъяла... Ул Хәбибуллаға әле ҡыҙғаныусан хәстәрле әсәһе булып, әле өрмәгән ергә ултыртмаусы һөйкөмлө бисәкәйе булып күҙ алдына килә.

Хәбибулла, сибәр ҡыҙға күҙ ташлай-ташлай, бәхет тураһында хыял итеп ята. Поезд тәгәрмәстәре менән рельс өҙөктәрендә таҡы-тоҡо килеп, уны урман, тауҙар аша көнө-төнө елдерә лә елдерә; госпиталь урынлашҡан ҡала алыçайған һайын, тыуған төйәк яҡынайғандан-яҡыная бара... Һәм, ниһайәт: «Йә, йән киçәгем. Бына килеп еттек. Беҙҙең станция», – тип ҡашын сөйөп йылмая шәфҡәт туташы. Көньяҡ Уралдың бәләкәй станцияларының береһендә йәшел вагондан икәү сыға: йәш кенә медсестра һәм яралы һалдат. Станциянан район үҙәгенә ҡәҙәре буран ғәрәсәте ярып етмеш саҡрым ҡайтаһы бар, шунан һуң да ауылға ҡәҙәре егерме саҡрым интегәһе.

Машиналар юҡ инде ул мәлдә, юл ыңғайы ылауҙар булыуы ла икеле. Станцияның шыҡһыҙ бинаһында ҡаты һары эскәмйәләр, дезинфекция, махорка еçе һәм эт сыҙамаç һыуыҡ. «Йән киçәгем, һин ултырып тор. Мин һораштырып киләйем. Әгәр бында була торған булһа, комендантты эҙләп табырмын». Шәфҡәт туташы бер сәғәт самаһынан әйләнеп килде. «Шылтырата-шылтырата район үҙәгегеҙҙе саҡ ала алдым. Ауылығыҙ

менән дә осло-ҡырыйлы ғына һөйләшеүгә ирештем. Ылау ебәрербеҙ, тинеләр. Ә хәҙергә фатир төшәйек. Бында бер бисәкәй менән һөйләштем. Алыҫ түгел».

Иҫке ағас өй, оло яҡтан таҡта менән айырылған бәләкәс кенә бүлмә, тормош ауырлығы һуңғы тамсыһына тиклем ҡанын һурған йонсоу, хәсрәтле йөҙлө һалдат ҡатыны Хәбибуллаға һағайып ҡарай. Берeһенән-бере кесе бер итәк бала. «Хоҙайым, үҙе ниндәй йәш, яраланып та өлгөргән! Уф, минекеләрҙең атаһы ни хәлдә икән унда? Калинин ҡалаһынан һуңғы хатын алғайныҡ. Шунан бирле бер хәбәре лә юҡ!»

«Ағай, ә һин нисә фашист үлтерҙең?» – тип, балалар Хәбибулланың ауыҙына инеп бара. Бөтәүләй бешерелгән бер табаҡ картуф алға килеп ултырҙы. Ай-һай, һағындырған шул. Йылы мейес, йыйнаҡ өй. Кис. Хәбибулла оло яҡтан таҡта менән бүленгән кескәй бүлмәлә ята.

Иртән медсестра тағы ла ҡайҙалыр йүгерә, яралы кешегә ылау ебәргәндәрме тип белешә, талон буйынса ҡайҙандыр паек алып ҡайта.

Өсөнсө көнөнә Хәбибулланың әсәһе менән ҡустыһы килеп төштө. Әсәһе ошо бер-ике йыл эсендә һиҙелеп ҡартайған, йөҙө һөрөнкөләнгән, кәүҙәгә бәп-бәләкәс кенә булып ҡалған. Ул Хәбибуллаға бик ҡыҙғаныс тойолдо.

Иламаны. Улын ҡосаҡланы ла һеңерле бәләкәс ҡулдары менән улының арҡаһынан гөпөлдәтеп һөйҙө: «Әй-й, йөрәккәйем минең! Ҡайһылай ябыҡҡан!» Ғөмүмән, ғүмер баҡый ул иркәләүгә һаран булды, сабыйҙарын бары йоҡлаған мәлдәрендә генә һөйөр ине. Балалар ҙа шуға наҙға ҡырыҫ инеләр, һөйә башлаһа, аяҡ-ҡулы менән тыпырсынып ҡастылар. Әле лә бына, әсәһе әҙ генә иркәләүгә лә, Хәбибулла үҙен сабый һымаҡ һиҙеп, ҡойолдо ла төштө. Әсәһенән һәм ҡустыһынан күптән төңөлөп бөтөлгән әүәлге тормош еҫе, тыуған өй еҫе, тире тун еҫе, усаҡ төтөнө, фәҡирлек еҫе ап-асыҡ булып борҡолдо. «Әсәй, бына был ҡыҙ мине госпиталдән оҙата килде, медсестра». – «Рәхмәт, рәхмәт, ҡыҙым!» Ҡыҙ инде үҙенең хеҙмәт бурысын атҡарҙы, ауырыуҙы өйөнә тиклем оҙатып, әсәһе ҡулына имен-аман тапшырҙы, хәҙер инде ул уларҙан алыҫ, уның уйын яңынан юл мәшәҡәттәре, госпиталь хәстәрҙәре тотош биләп алған. «Һау бул, йән киҫәгем! Һиңә хәйерле ғүмер теләйем. Онотма, беҙгә, госпиталгә хат яҙ». Һәм ошо мәрхәмәт тулы күңелле сибәр мәрйә ҡыҙы Хәбибулланың тормошонан бөтөнләйгә киткәйне...

Бесән санаһы еккәндәр, санаға тәрән ситән алап ултыртҡандар. Хәбибулла атаһы мәрхүмдән ҡалған толопҡа төрөнөп, бесәнгә күмелеп өйөнә ҡайтып бара; әллә үлергә ҡайтып бара, әллә йәшәргә ҡайтып бара Хәбибулла һалдат. Буранлы далала сана табандары бер көйгә һалып һыҙғыра ла һыҙғыра, шуның көйө ыңғайына әсәһе талғын ғына итеп ауыл хәлдәрен һөйләй: кемдәр үлгән, кемдәрҙең ҡара ҡағыҙы килгән, кемдәр һуғышҡа киткән, кемдәр ғәрипләнеп ҡайтҡан...

...Ауылда шундай ҡолаҡ тондорғос тынлыҡ – йылғала лом менән боҙ ватып мәке уйғандары ла, әллә ҡайҙа сана табаны сыжлауы ла бер саҡрымдан ишетелеп тора. Ҡайҙалыр шулай уҡ һаман да фронт гөрләй-гөрһөлдәйме икән, вокзал биналарын һиңкетеп, ауыр хәрби составтар уҙамы икән? Ә ҡышҡы ауылда күҙгә төртһәң күренмәслек ҡараңғы төндәр, тын алғыһыҙ сәсмә бурандар, йылға артындағы әрәмәлә ас бүреләр олоуы... Ә иртән урам аша тәҙрә тиңенте булып мәрмәрҙәй ҡаты йылтыр аҡ һырынты һуйҙайып ятҡан... Ағаһы утыҙ туғыҙынсы йылда уҡ алынғайны, ҡырҡ беренселә хәбәрһеҙ ғәйеп булды... Хәбибулла инде эшкә ярар әҙәм түгел. Хужалыҡ әсәһенә һәм кесе туғандарына терәлеп ҡалды. Табип, яҡшы ашарға кәрәк, тине. Әсәһе ҡул тирмәнен туғыр-туғыр әйләндерә, яртылаш картуф менән ҡушып сөсө табикмәктәр әүәләй.

Ҡыш ахырында Хәбибулла тамам аяҡтан йығылды. Тәне ут кеүек яна, аяуһыҙ йүткерә, ҡан төкөрә, тәне ҡоро һөйәккә ҡалды. Ер ҡуйынына инер көн дә яҡыная, ахыры, инде. Хәбибулла ята, моңая, күңеленән генә госпиталдәге ҡыҙға хаттар яҙа.

Ул инде бер нисә мәртәбә, ҡалҡынып ултырып, ысынлап яҙырға ла тимтәлгәйне, кире уйланы. Ниңә? Хәтерләйме икән инде ул Хәбибулланы? Уның эше һуғышыр әмәле ҡалмаған бәндәләрҙе госпиталдән өйөнә аҙ оҙатҡан тиһеңме ни ул? Бер аяғы ҡәберҙә булған ошондай тере күҙ көйөгө уға ниңә кәрәк?..

Бына тағы ла әсәһе уны атаһы мәрхүмдән ҡалған толопҡа төрөндөрөп бесәнгә күмде лә районға врачҡа алып китте. Үпкә сире! Ҡалаға тубдиспансерға оҙаттылар... Йәнә ап-аҡ стеналар, хлорка еҫе, төрлө порошоктар, уколдар... Барыһы ла госпиталдәге кеүек. Тик ундағы шикелле аҡ икмәк менән бәләкәс кенә дүрткел май киҫәге генә эләкмәй.

«Миңә, бәлки, күп ҡалмағандыр инде!..» Әсәһе ике тапҡыр килде. Әҙерәк аҡ май, ҡорот, туңдырылған һөт килтергән. Шөкөр, һыйырҙары быҙаулаған икән.

Яҙға сыҡҡас, Хәбибулла тамам биреште. Был яҙҙы ла этеп-төртөп уҙҙырһам, көҙҙән дә ҡалмай был донъяны ҡуйырмын, тип уйланы... Үпкә сирлеләр яҙ китә, тиҙәр. Тик был яҙҙа Хәбибулла үлмәй ҡалды. Йәй уртаһында әсәһе тағы ла килде. «Әйҙә, улым, өйгә алып ҡайтайым. Үҙем дауалармын. Колхоз беҙгә бер бейәһен беркетте. Ҡымыҙ эсерһең. Инде һауыҡтыра алмаһам да, исмаһам, үҙ ҡулымда үлерһең...»

Тау араһындағы юлдан арба тыҡырлап бара, арбаға, яңы сапҡан үлән өҫтөнә, Хәбибулла ҡырын ятҡан. Ул саф һауаға иҫергән. Үләндәрҙе күреүенә шатлана, сәскәләргә, ағастарға, йылғаларға, тауҙарға, пырылдап осҡан ҡоштарға һөйөнә һәм йәшәү хаҡында өмөтләнеп уйлай. Кешеләр больницала үлә, ап-аҡ дүрт стена эсендә үлә. Ә бында, зәп-зәңгәр күк көмбәҙе ҡаплаған йәм-йәшел ерҙә, ҡояштың шифалы нурҙары аҫтында кеше үлә тиме ни? Юҡ, үлергә түгел, йәшәргә ҡайтып бара Хәбибулла.

Йәй көнө ауылда ҡышҡы һымаҡ түгел шул. Йылы, саф һауа, яҡты. Хәбибулла тәҙрә тапҡырында бейек мендәрҙәр өҫтөндә ята, ишек алдына ҡарай, урамды күҙәтә, ҡыбырлашҡан һәр төрлө йән эйәһенә, өй тапҡырынан үтеп-һүтеп йөрөгән ҡыҙҙарға күҙ һала. Моғайын, улар: «Бында һуғышта яраланып ҡайтҡан Хәбибулла меҫкен үпкә сире менән ыҙаланып ята», – тип ҡыҙғанып уйлай торғандарҙыр инде. Уны күрергә нәҫел-ырыуы, күрше-күләне килә, ҡарттар, ҡарсыҡтар, бисә-сәсә, йәш-елкенсәк килә, йәиһә үҙе ише һуғышыр рәте киткән, берәүҙәре буш еңен бил ҡайышына ҡыҫтырған, икенселәре һыңар салбар балағын күтәреп тубығынан юғары булавка менән ҡуша ҡаҙап ҡуйған ғәриптәр һирәкләп инеп сыға; йыуатырға тырышалар, хәҙер өйҙәһең инде, төҙәлерһең, бына көҙгә өйләндереп, туйыңда типтерербеҙ әле, тип, күңелен үҫтерәләр.

Бер мәл күрә Хәбибулла: ихата уртаһында, бесәй тарыһы баҫҡан ерҙә, әсәһе менән ҡустыһы соҡор ҡаҙалар. Хәс тә ҡәбергә оҡшаған нәҙек оҙонса соҡор. Әллә, ысынлап та, ҡәбер ҡаҙалар инде? Хәйер, кем үҙ өйөнөң ишек алдына ҡәбер ҡаҙһын инде? Соҡор тәрән түгел. Ҡустыһының бил тиңенте генә. Ҡаҙып бөтөрҙөләр ҙә соҡор янына бер йөктәй сыбыҡ-сабыҡ ташып өйҙөләр. Шунан яланға барып, бер күбә мәтрүшкә тейәп алып ҡайттылар. Шунан соҡор эсенә ҙур итеп усаҡ яҡтылар. Соҡорҙа ут ләүкей. Уның өҫтөнән ҡайнар һауа ағыла, шул ағым үтә ситән дә, уның буйында ҡотороп үҫкән кесерткән һәм башҡа үләндәр ҙә һауа ағымына йыбырлашҡан һымаҡ күренә.

Усаҡ янып бөттө, соҡор эсе ут кеүек ҡыҙҙы, ҡустыһы көрәк менән көлдө соҡорҙоң иң ситенә көрәп өйҙө лә төпкә ҡосаҡлап-ҡосаҡлап мәтрүшкә ырғытырға кереште. Был ни ғәжәп, тип уйлай Хәбибулла. Шул ике арала ҡустыһы соҡорҙо мәтрүшкә менән күмде, өҫтөнә өс таҡтаны арҡыры һалды ла шуға кейеҙ түшәне. Ҡыҙыу соҡорҙа мәтрүшкә быуланып бешә. Ахырҙа әсәһе өйгә инде, Хәбибулланы өйҙән ҡултыҡлап сығарҙылар ҙа соҡор янына килтерҙеләр. «Әйҙә, сисен, улым, өҫтөңдә бер ни ҡалдырма». Шунан: «Әйҙә, улым, соҡорға инеп ят». Хәбибулла соҡорға инеп ятты. Әсәһе уны муйынына тиклем ҡайнарланып боҫрап ятҡан мәтрүшкә менән күмде. «Эҫе, әсәй!» – «Зарар юҡ, түҙ, улым, түҙ...» Һәм өҫтөнән кейеҙ менән ҡаплап ҡуйҙы. Ята Хәбибулла ҡайнар соҡорҙа, кейеҙ аҫтынан башы ғына күренеп тора, ә тәненә шул ҡәҙәре лә эҫе, тир бөртөкләп кенә түгел, йырғанаҡтар булып йыбырлашып аға. Тир менән шашынып Хәбибуллаға баш булып алған сирҙәр сыҙаша алмай сыға. Ауыҙы ҡороно, теле лә әйләнмәй. Үлтереп һыуһатты. «Әсәй, тием, һыу!» – «Һыу бирмәйем, улым. Һаумал бейә һөтө эс». Йылы бейә һөтө үтә шәрбәтле һымаҡ, үҙе сөсө, эсергә тәмһеҙ. Эсәһең, эсәһең – һыуһыңды һис ҡандырмай. Тағы эсәһең. Хәбибулланың ҡыл өҙөрлөк хәле ҡалманы, йөрәге ойоно. Күҙ алдары ҡараңғыланды. «Ярар, бөгөнгә етер, улым». Толопҡа төрҙөләр ҙә, өйгә индереп, түшәгенә кире һалдылар. Икенсе көнөнә һәммәһе лә яңынан ҡабатланды; айырма шунда ғына: Хәбибулла соҡорҙа оҙағыраҡ ятты ла бейә һөтөн күберәк эсте. Һәм... тотондо уҡшып-уҡшып кире сығарырға. «Зарар юҡ, улым, эсең әшәкенән, сир-сорҙан таҙара».

Ул өс көн йәнәш бейә һөтө эсте, ҡайнар соҡорға ла күнегә башланы инде; унан сығыу менән үлек кеүек йоҡоға талды. Дүртенсе көнөнә әсәһе соҡор эргәһенә яңы ғына әсеп сыҡҡан бер сәйнүк ҡымыҙ ҡуйҙы. Хәбибулла ҡайнар мәтрүшкә быуына күмелеп, тоҙло тирен түгеп ята, һыуһаһа, һонолоп ҡына зәңгәр сәйнүкте ала ла моронона һөлөк кеүек ҡаҙалып, ыңҡылдатып һурырға керешә – яңы ҡымыҙ шунда уҡ юлын табып, ҡан тамырҙары буйлап йүгерергә тотона, тәне сәләмәт һәлмәклелек менән ауырая бара, быуындары йомшара, ә башында шул ҡәҙәре бушлыҡ, бер төрлө уй юҡ. Ята Хәбибулла, күкте байҡай, ә унда еңел, йылы аҡ болоттар ағыла ла ағыла. Ҡайҙарға ағыла икән улар? Башҡа ерҙәргә, тауҙар, урмандар артындағы башҡа кешеләр өҫтөнә – икһеҙ-сикһеҙ ер йөҙө өҫтөнә. Күктә төйләгән оса; ул Хәбибулланы күрә лә уйлай

торғандыр инде: «Ана, соҡорҙа бер кеше ята, ул да мине күрәлер». Яҡында ғына тауыҡтар тибенеп йөрөй; әтәс тамағын ярып ҡысҡыра. Ситән бағанаһына һайыҫҡан килеп ҡуна, алалы-ҡолалы ҡойроғон ҡыйғалатып, шыҡырлап ултыра-ултыра ла күрше аҙбарына йомортҡа урларға оса. Ҡайһы берҙә Хәбибулла янына күрше эте Юлбарыҫ хәл белергә килә; соҡор буйында ултыра, аҡыллы күҙҙәре менән унда ятҡан кешегә ҡарай, дуҫтарса йылмайып, ҡойроғон болғай ҙа үҙ йомошо менән ары китә. Хәбибулла йәнә бер тын ҡымыҙ эсә лә тәрән йоҡоға тала. Уны көс-хәлгә уяталар, толопҡа төрөп, өйгә күсерәләр. Килеп тороп аппетиты асылып китте, емереп ашай башланы. Әсәһе һарыҡ һуйҙырҙы, итте бары Хәбибуллаһы өсөн генә бешерер булды. Егет һимеҙ ҡалъяларҙы тумыра ғына, ә әсәһе менән туғандары ҡоро сәй менән ҡорһаҡ йыуҙыра. «Әсәй, ниңә үҙегеҙ ашамайһығыҙ? Юҡ, мин улай яңғыҙым ашай алмайым!» – «Аша, аша, улым, бер ни ҙә уйлама. Беҙ сәләмәт кешеләр, беҙгә ҡайһылай ҙа ярар, бары һин генә сихәтлән!» Шулай бер аҙна үтте, икенсеһе, өсөнсөһө. Иртән Хәбибулла соҡорҙа ята, ҡымыҙ эсә, шунан ит ашай ҙа тәрән йоҡоға тала, аш һеңдерә. Был ямға өйөп инде тауҙай сыбыҡ-сабыҡ яндырҙылар, бер кәбән мәтрүшкә быуланылар. Мәтрүшкәнән инде уның тиреһе зәңгәрһыу-ҡарағусҡылға әйләнде, әйтерһең дә, зәңгәр ҡараға сумып сыҡҡан, мунсала ҡырғыслап йыуып та бөтөрөп булмай. Ул ике тәкә ашап бөтөрҙө, ҡымыҙҙың инде иҫәбе-һаны юҡ. Уның йәш, тормошҡа ҡомһоҙ ағзалары ныҒына барҙы. Уға төҫ ҡунды, көҙгөгә күҙ һалыштыра, әсәһенең тарағы менән сәсен ҡырын тарай башланы. Урам буйлап шырҡылдашып ҡыҙ-ҡырҡын уҙғанда уларҙы күҙҙән юғалғансы иркә ҡараш менән оҙатып ҡалды, күңеле күтәрелгәндән-күтәрелә барҙы. Әсәһенә уллыҡ рәхмәте йөрәгенән ташып түгелеп бара, бөтә донъяны ҡыҫып ҡосаҡлап һөйгөһө килә. Көҙгә табан ул урынынан тороп йөрөү генә түгел, ишек алдындағы ваҡ-төйәк эштәргә лә ярай башланы, ә ҡыш алдынан идараға барып эш һораны.

...Ул баш аҫтына хуш еҫле мәтрүшкә ҡушып бәйләгән ҡайын миндек һалып, мунса һикеһендә рәхәт сигеп ята. Үткәндәре уның мейеһенән ошо рәүешсә бары әлһерәгән йөрәге берике һикергәнсе генә сарпылып үтте... Хәл алғас, ул торҙо ла, йәнә ләүкәгә менеп, күҙ алдарында ҡабатлап йәшел дүңгәләктәр зыр-түңәрәк әйләнә башлағансы, һушынан яҙыр сиккә еткәнсе сабынды. Шунан һалҡын һыу менән ҡойондо. Бөркөү

ҡараңғы мунсанан яҡты соланға бәхетле кеше Сафиуллин Хәбибулла сыҡты. Уның күңеле ғәжәп тыныс ине, ул донъялағы оло ғәҙеллеккә ышана, кешеләрҙең яҡшылығына, түрәләрҙең ғаҡыллылығына инана. Моғайын, иртәгә үк көтөүлеккә бульдозер ебәрерҙәр, ҙур итеп быуа быуырҙар һәм һыйырҙар сәскә тажына ҡунған иртәнге ысыҡ тамсыһы кеүек саф, тоноҡ һыу эсерҙәр. Рәмил институтҡа инер һәм Сафиуллиндар нәҫеленән дә ғалим сығыр... Шкафта, ал бәрхәт ҡумта эсендә, «Почёт Билдәһе»ме шунда, «Почёт ордены»мы – шулай ҙа сикһеҙ ҡиммәтле бүләк ята.

Ул мунсанан сыҡты. Өмөтһөҙ күренгән теге болот, тау һыртынан ысҡынып, тотҡан да был яҡҡа ыңғайлаған, йылға аръяғындағы туғай өҫтөндә һыҙырып яуа ла башлаған инде, хәҙер ул ауыл өҫтөнә килеп етер, баҡсаларҙы туйҙырғансы ҡойор-ҡойор ҙа бейей-бейей иген баҫыуҙары өҫтөндә уйнаҡларға китер...

Картуф баҡсаһы аша үтеп, ул үҙҙәренең ишек алдына инде һәм йәнә иң тәүҙә әсәһе күҙенә салынды. Ул күтәрмәнең икенсе баҫмаһында тора ине, тик хәҙер – аҫтан икенселә, тик хәҙер – ишеккә табан ҡарап тора, кәрәк еренә имен-аман барып әйләнгән икән. Әле генә бит әле, мунса һикеһендә әлһерәп ятҡан еренән, ул әсәһенең элекке, әллә ҡасанғы һынын ап-асыҡ күргәйне; ул мәлдә әсәһе бигүк йәш булмаһа ла, өҙә баҫып йөрөүсе ҡырыҫ холоҡло арымаҫ-талмаҫ ҡатын ине. Хәбибулла уның алдында йыуашлана ла ҡала торғайны. Хәҙер инде Хәбибулла уны бик оҙаҡҡа онотоп йөрөй, иҫкә алғанда ла үҙенең донъяһынан китеп юҡҡа сыҡҡан, онотолған, үлгән итеп кенә хәтеренә ала ине. Баҡһаң, ул бар, имеш, әүәлге үк әсә, имеш, тик бик тә ҡартайған, бәлтерәгән, көс-ҡеүәтенән тамам яҙған, имеш. Хәбибулла әсәһе ҡаршыһына килде, тегеһе уға ғәжәпләнгәндәй итеп, өңрәйеп эскә батҡан күҙҙәренең ҡараңғы төпкөлөнән килгән ҡарашы менән ҡарап торҙо. Был ҡараш хас та әллә ҡайҙан алыҫтан – үткән ғүмерҙән һыҙылып килгәндәй була ине. Уның ҡарашы тыныс, ҡырыҫ, талапсан ине. Хәбибулла әүәлгесә уның алдында ҡаушаны ла төштө. Уның әсәһенә күтәрмәгә менергә булышҡыһы килде, ҡоро ботаҡ кеүек нәҙек кенә булып ҡорошҡан beләгенән тотоп, юғарыға әйҙәне, ләкин ҡарсыҡҡа ҡуҙғалыу сиктән тыш ауыр ине, ул өсөнсө баҫмаға саҡ-саҡ күтәрелә алды. Шунда Хәбибулла әсәһен ике беләгенә күтәреп алды һәм аптырап китте: әсәһе ҡаурыйҙан да еңелерәк ине, әйтерһең дә, эсе буш кипкән ҡурай. Уның элек әсәһен бер генә мәртәбә лә

күтәреп ҡарағаны булмаған икәнсе. Биш бала тапҡан, уларҙы күтәреп йөрөткән, юҡты бар итеп туйындырған, бар ғүмере буйы, шуларҙы әҙәм итәйем тип, бил бөккән, тир түккән, нужаһын да, ҡайғыһын да кисергән, тол бисә татыған михнәттең һәммәһен дә муйындан татыған ҡарт әсәһе ҡаурыйҙан да еңелерәк имеш тә баһа... Хәбибулла уны күтәреп өйгә алып инде...

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Хәбибулланың колхоз, ауыл тормошо менән янып йәшәүе хаҡында һөйләгеҙ.
**2.** Әҫәрҙе төп хәл-ваҡиғалары буйынса нисә өлөшкә бүлергә мөмкин? Бергәләп бүлегеҙ, һәр өлөшкә исем биреге҇.

### Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ

**1.** Ауылда малсылыҡта эшләгән Хәбибулланы ниндәй хәлдәр борсой? Уйланыуҙары буйынса уның булмышын нисек күҙ алдына баҫтырып була?
**2.** Әҫәрҙә ни өсөн әсәнең фронттан яраланып ҡайтҡан улын соҡорға һалып мәтрүшкәләр менән дауалауы һәм аҙаҡ Хәбибулланың мунса инеү эпизодтары айырыуса ентекле тасуирлана?
**3.** Мунсала Хәбибулланың донъя мәшәҡәттәрен онотоп тороуын нисек аңлатырһығыҙ?
**4.** Мунсаға инер алдынан Хәбибулла күтәрмәлә баҫып торған әсәһен ҡабат-ҡабат урап үтә, ә аҙаҡ өйгә күтәреп алып инә. Ошо турала әңгәмә ойоштороғоҙ.

### Телмәрегеҙҙе байытығыҙ

Хикәйәнең телмәренә иғтибар итегеҙ, ундағы айырыуса сағыу һүрәтләү сараларын табығыҙ.

## ӘСӘ ҺӘМ БАЛА

Тыуған ауылыма ҡайтҡан һайын, мин ҡасандыр йәшләй генә белгән, уларҙың эшләп йөрөгәненә үҙем шаһит булған ҡарттарҙың бер-бер артлы үлә барғанын күрәм. Ниндәйҙер мөғжизә арҡаһында ғына өлкән йәшкә еткән һуғыш ветерандары тормоштан туҙып, ерҙә эшләүҙән бөгөлөп үлә, көнөн-төнөн тигәндәй мал-тыуар ҡараған ҡатын-ҡыҙ, һалдат ҡатындары ҡырыла, ҡайһы саҡ уларҙың был үлеме ауыр тормоштан ҡотолоу ҙа һымаҡ – атай ҡәберенә барғанда мин зыяратта әле үлән дә ҡаплап өлгөрмәгән әллә күпме өр-яңы ҡалҡыулыҡ күрәм.

Быйыл япа-яңғыҙ, бөтәһе, шул иҫәптән берҙән-бер улы тарафынан да онотолған Сафия апай үлде. Уйлап ҡараһаң, йәштән үк ирҙәр эшенә егелгән, аслыҡты, һыуыҡты үткәргән һәм, әйтергә яраһа, үҙҙәренең һалдат ирҙәре менән кешелек донъяһының ҡан дошманын еңгән Рәсәй һалдаттарының бере-һенең үлеме ине был.

Иҫтә, ошо Сафия апай, йәки ир Сафия, уны ауылда шулай тип йөрөтәләр ине, миңә, маңҡа ғына малайға, шул йылдарҙа уҡ оло кеше булып күренә ине. Яңы ғына ирегән һалҡын бураҙна буйлап һабан тотоп бара, ялан аяҡ бара (ҡай саҡ йоҡа ғына ҡар яуып үткән саҡтар ҙа була), илай-илай, инәлә-ял-бара, күтәртер хәлгә еткән колхоз аттарын ҡыуа; бригада ерҙә-ренә барыр өсөн Йайыҡ аша сығырға кәрәк, Сафия апай боҙло һыуға төшөп арбаны этә; орлоҡ игене тултырылған ауыр тоҡ-тарҙы ташығанын да, тишек-тошоҡ сарыҡтар кейеп, бәләкәй сана менән йылға аръяғынан сей ерек ташығанын да бик яҡшы хәтерләйем. Әйе, барыһы ла кисә генә булған кеүек.

Һуғыш ауырлығын ирҙәрҙән кәм күрмәгән ошо һалдатка-лар, Рәсәйҙең тарихи ҡатындары, награда, бүләктәр, льгота-лар алып өйрәнмәгән, юбилей йылдарында ла уларға бүләк тәтемәй, улар иҫтәлегенә обелискылар ҙа ҡуйылмай. Улар үҙҙәренең йәшәйешенең ысын бейеклеген аңламайҙар, был хаҡта уйлана ла белмәйҙәр, көнкүрештәре лә бүтәндәрҙән әллә ни айырылмай, хөртөрәк булмаһа әле; колхоздың бәләкәй генә пенсияһына һәм һирәкләп бушҡа килтерелгән утынға ҡәнәғәт булып көн итәләр.

Быға тиклем ҡайтҡандарымда мин Сафия апайҙың гел генә үҙенең бәләкәй өйөнөң тәҙрәһенән ҡарап ултырғанын күрә тор-ғайным. Быяла аша уның тәрән йыйырсыҡтар менән телгелән-гән һары йөҙө лә күҙҙәренә үк төшөрөп ябынған бигүк таҙа булмаған аҡ яулығы күренер ине. Урам буйлап кем үтһә лә, кипкән ҡулын ҡаштары өҫтөнә ҡуя ла, тәҙрә быялаһына терә-леп тигәндәй, һуҡырая башлаған күҙҙәре менән ҡарап оҙатып ҡала. Ул улын көтә.

Юҡ, уның улы, берҙән-бер улы, һуғышта үлмәгән, һуғыш-тан һуң тыуған кеше, төрмәлә лә ултырмай, сит илгә лә сығып китмәгән. Ул күптән инде армияла хеҙмәт иткән, армиянан һуң вербовка менән әллә Төньяҡҡа, әллә Себергә сығып киткән дә кеше диңгеҙе эсенә сумған. Дөрөҫ, һирәкләп, биш, ете йылға бер ауылда күренә торғайны, ул саҡта инде Сафия апай үҙенең берҙән-бер байрам күлдәген кейә, сыбар кешмир яулығын

ябына ла, дермантин сумкаһын тотоп, магазинға йөрөй. Эсеп алғас, йомро күкрәгендә «Үләм, әммә газды кәметмәйем!» тип яҙылған татуировкаһы күренһен өсөн, нейлон күлдәген кендегенә тиклем ысҡындырған улы ауыл ҡыҙыра, тиҫтерҙәре менән осрашып, уларҙың ҡулын ҡыҫа, фильтрлы сигареттар менән һыйлай һәм, нимәлер эҙләгән кеше булып, бер кеҫәһенән икенсе кеҫәһенә аҡсалар төргәгән күсереп һала, йәнәһе, күрегеҙ, бына минең аҡса ниндәй күп. Тиҫтерҙәрен, күрше ирҙәрҙе үҙҙәренә саҡырып эсерә, бөтһә, әсәһенең яңынан араҡыға йүгертә. Иҫергәс, оҙон аҡсалары менән маҡтана, аҡса нимә ул, тфү, минең өсөн ул сүп, мең һумды күҙҙе лә йоммай кәрткә һалып уйнай алам, тип һөйләнә. Һәм ҡапыл, иҫерек йөҙөн етдиләндереп, әсәһенең өйө бик тә иҫкергәнлеге, яңыны һалырға кәрәклеге хаҡында һөйләргә керешә, иртәгә үк ағас белешергә сыға, транспорт килешә, оҫталар таба, хәйер, иң яҡшыһы, ауылда берәйһе өй һатмаймы икән, тип ныҡырға тотона. Һатыусы табылһа, яңыны һалғанға ҡарағанда тиҙерәк тә булыр ине. Көн артынан көн үтә, аҙналар үтә, ә үҙе китмәй эсә, яңы өй тураһында бөтөнләй онота, аҡса төргәге йоҡарғандан-йоҡара, һәм, ниһайәт, бер көн һуҡыр тин дә ҡалмағас, юлға әсәһенең пенсия аҡсаһын ала ла йәнә юғала. Оҙаҡҡа юғала.

Бер ваҡыт ул ғаиләһе менән ҡайтып төштө. Йоп-йомро, ҡыҫҡа аяҡлы ҡатыны һәм ике малайы. Малайҙарының берәһенә өс йәш, икенсеһенә – биш. Көньяҡҡа китеп барыуҙары икән, үтеп барышлай өс көнгә туҡтағандар. Килен кеше ҡәйнәһенә мыҫҡыллы-һауалы ҡараны, ә малайҙар оҙон күлдәкле сәйер генә ҡарсыҡ үҙҙәренең өләсәләре икәнлегенә һис ышана алманы. Балалар ҙа, уларҙың ата-әсәләре лә үҙ-ара тик русса ғына һөйләште. Балалар иһә башҡортса бөтөнләй аңламайҙар ине, әсәләре татар, аталары башҡорт булһа ла. Өләсәләре русса бер һүҙ ҙә белмәй, ҡысҡырыбыраҡ өндәшһә, ейәндәре аңларҙар һымаҡ ине уға, шуға ла ул яратыу, иркәләү һүҙҙәрен тауышын күтәреберәк әйтте, ә ейәндәре уға бүре һымаҡ ҡараны һәм бер көн биш йәшлек ейәне тотто ла өләсәһенең йөҙөнә уйынсыҡ пистолеттан атты ла ебәрҙе – пластмасса пуля уның күҙенә саҡ теймәне. «Ниңә аттың?» – тигән һорауға, малай: «Ә ниңә ул миңә ҡысҡыра?» – тип яуапланы.

Һуңғы тапҡыр улы бынан биш йыл элек ҡайтҡайны. Бер үҙе генә ҡайтҡайны. Ҡартайғайны, башы ла пеләшләнгәйне. Сафия апай хәҙер һыйыр ҙа, ҡаҙ ҙа, тауыҡ та тотмай ине инде, пенсияһына ғына йәшәп ята. Утынды колхоз килтереп бирә,

күршеһе Шәйхелислам ҡатыны менән бысып, ярып ҡуя. Өйө шиңде, бер яҡҡа ҡыйшайып сүкте. Улы, әсәйҙең ғүмеренә ошо йорт етер, яңыһы менән булашып тормам инде, тип уйланы, ахыры, ул турала бүтән һүҙ ҡуҙғатманы. Тағы аҙна буйы эсте һәм китер алдынан күршеһе Шәйхелисламға йөҙ һум тотторҙо: «Әсәй үлеп-маҙар китһә, ерләрһең». Шәйхелислам уның адресын һораны, теге-был булһа, телеграмма һуғырмын, тине, ҡунаҡ бер ҡағыҙ киҫәгенә адресын сыймаҡланы, әммә ҡайтырын-ҡайтмаҫын ныҡлы ғына әйтмәне.

Сафия шым ғына үлде. Күршеләре ҡәбер ҡаҙҙы, кипкән кәүҙәһен йыуып аҡ сепрәккә төрҙө. Шәйхелислам ҡалдырған адрес буйынса телеграмма бирҙе. Уны көттөләр, ике көн ҡарсыҡтың мәйете үҙ өйөндә ятты, көтөп ятты, әммә улы ҡайтманы.

Ә бит уның улы булмауы ла ихтимал ине. Юҡ, ул тыуҙы, законлы иренән тыуҙы, шулай ҙа малайҙың булмауы бар ине; эйе, икенсе кеше булыр, икенсе тарафта көн итер, икенсе атай, икенсе әсәй менән йәшәр һәм, бәлки, алыҫ башҡорт ауылында үҙенең ысын әсәһе йәшәүен башына ла килтермәҫ ине.

Сафия апайҙың ире Ғәзиз ағай, ҡырҡ бишенсе йылда икенсегә яраланып, өс ай госпиталдә ятҡандан һуң, ауылға ҡайтып төштө. Аяҡ-ҡулы иҫән, ә бына үпкәһенә немец снарядының цинклы ярсығы инеп ултырғайны. Ауыл ас һәм һуғыштан арыған, ә аслыҡтан йонсоған һалдаттың ҡанын туберкулёз бациллалары тиҙ еңеп алды. Ул йүткерә, үпкәһен ҡаҡыра башланы. Ғәзиз ағай менән Сафия апай һуғышҡа тиклем үк өйләнешкәйнеләр, әммә балалары булманы, дөрөҫөрәге, тыуып торҙо, бәләкәй көйө үлеп торҙо. Ғөмүмән, балалар үлеме ул йылдарҙа ауылда ғәҙәти хәл ине. Һәм бына дүрт йыл айырылышып йәшәгәндән һуң, яңынан өйләнешкән йәштәр кеүек, улар йәнә бер бала яһаны. Аслыҡ булыуға, үлмәҫлек кенә туҡланып йәшәүгә ҡарамаҫтан, йәштәрҙең балалары таҙа булып тыуҙы. Бала биш айлыҡ булғас, Ғәзиз ағайҙы сереп бөтөп барған үпкәләре менән ҡалаға дауаханаға һалдылар. Ул өйөнә йылы, өмөтлө хаттар яҙҙы. Ҡатын-ҡыҙ йөрәге менән Сафия апай иренә ауыр икәнен аңланы һәм уның янына барып ҡайтырға ниәтләнде.

Уның бер ҡасан да ауылдан сыҡҡаны, район үҙәгенән дә алыҫыраҡ йөрөгәне юҡ, бер тапҡыр ҙа поезға ултырғаны булманы. Ҡатындар уның ниәтен һүндерергә тырышты, күкрәк балаһы менән ҡайҙа йөрөйһөң, харап ҡына булырһың бит,

тинеләр. «Юҡ, барам!» – тине ул ҡаршы килеүселәргә. Йыйған әҙерәк аҡсаһы бар, ләкин йөрөгән кеше, ул ғына поезға етмәй тигәс, туғандарынан алып торҙо, идарала биш килограмм он яҙҙылар, табикмәк, ҡоймаҡ, кипкән алма менән пирог әҙерләне, бер литрлы банкаға май тултырҙы, ике тиҫтәгә яҡын йомортҡа бешерҙе лә арҡаһына киндер тоҡ аҫып, одеял ишаратына ураған балаһын ҡулына тотоп, юлға сыҡты. Күршеләр, мәрхүм Исламгәрәй ағай, Шәйхелисламдың атаһы, һуғышта булған, үҙебеҙҙең, унан сит илдең ерҙәре буйлап атлап Эльбаға тиклем еткән кеше, нисек барырға икәнен өйрәтте. «Поездар төрлө яҡҡа йөрөй, тегеләй ҙә, былай ҙа, тегендә лә ҡала, бында ла ҡала, һин Өфө яғына киткәненә ултыр, поезға эләгер өсөн билет алырға кәрәк. Касса янына бар ҙа әйт: «Уфа» – аңларҙар. Поездар өс кенә минут туҡталып тора, өлгөрөргә тырыш. Һин былай ит. Берәй башҡорт янына бар, ул тирәлә беҙҙең халыҡ күп була торған, берәй ир кешегә өндәшһәң бигерәк тә яҡшы булыр, билет алырға, поезға ултырырға ярҙам ит әле, тиң. Аңлат, шулай, шулай, тиң. Барып етерһең, табырһың, бөтә ерҙә лә кеше, ҡурҡма, һораш...»

Район үҙәгенә тиклем эш буйынса районға барырға сыҡҡан колхоз рәйесе Фазыл ағай ултыртып алып барҙы. Артабан йәйәү китте, сөнки ул йылдарҙа Миәскә автобустар йөрөмәй ине әле. Бер ылау ҡыуып етте – ҡарт район үҙәгенән совхозына ҡайтып бара икән, Поляковкаға ҡәҙәр алып килде, унан тағы йәйәү. Йәй аҙағы, көҙ башы, ямғырҙар ҙа яуып китә. Ҡараңғы төшөүгә бер башҡорт ауылына барып етте, юлда яландан ҡайтып килеүсе бер бисәне тап итте лә шунан ҡундырып сығарыуын һораны. Иртән иртүк йәнә юл. Көнө буйы барҙы, төн уртаһы еткереп бер ауылға керҙе, һыуланып бөткән, аяғында саҡ баҫып торған көйө иң ситтәге өйҙөң ишеген шаҡыны. Урыҫ ауылы икән. Хужабикә, оло ғына йәштәрҙәге мәрйә, ҡайҙа китеп бараһың, тип һорағас, аңланы ла ҡулын һелтәп: «Уфа», – тип яуапланы һәм үҙе белгән бер нисә рус һүҙе араһынан бер һүҙ табып өҫтәп ҡуйҙы: «Мужик, мужик». Хужабикә төшөндө шикелле, тимәк, Өфөгә, ире янына китеп бара. Ул тағы әллә нимәләр һорашты, һөйләнде, әммә Сафия уның борсолоп «Батюшки, батюшки» тигәнен генә аңғарҙы.

Таң һарыһы беленеү менән, ул торҙо ла йәнә юлға сыҡты һәм төш ауыуға Миәскә барып етте. Ҡаланы үтеп, урманлы тау битләүендә ултырған станцияны тапты.

Был уның тимер юл вокзалын, ике оҙон тимер өҫтөндә ултырған паровозды, вагондарҙы беренсе күреүе ине. Паровоз уға оло тауыш сығарып ҡурҡыныс үкергән тимер аждаһа кеүек тойолдо, хатта тере лә һымаҡ бит әле үҙе. Ә вагондар өй ише ҙур. Шуға ултырып йөрөйҙәрме икән ни? Ул, ят, битараф кешеләр менән лыҡа тулы вокзал бинаһына ингәс, бөтөнләй юғалып, аптырап ҡалды. Әллә ни ҙур ҙа түгел, әммә Сафияға ифрат дәү тойолған вокзал эсе кешеләр тауышы, өйрәнелмәгән-күнегелмәгән еҫ, тәмәке, хлорка, дымлы кейем, тағы әллә ниндәй еҫтәр менән тулы – сит-ят ер шундай еҫтә булалыр инде, күрәһең. Төрлө ҙурлыҡтағы тоҡсай, тоҡ, сумаҙандар тотҡан, төрлөсә һәм ярлы ғына кейенгән кешеләр бер нисә рәткә теҙелгән эскәмйәләрҙә ултыра, баҫып тора, тегеләй-былай йөрөй, һыулы бак янына бара ла тимер сынйырға бәйләнгән көрөшкә менән һыу алып эсә; сыға, керә, пружиналы ишекте шарт та шорт яба, шул арала вокзал эсенә һалҡынса һауа керә, күҙгә ямғыр еҫе тула. Станция эргәһенә дөбөр-шатыр поездар килеп туҡтаһа, вокзалдың цемент иҙәне һелкенә, кешеләр урындарынан һикерешеп торалар ҙа тоҡтарын, сумаҙандарын һөйрәп тышҡа йүгерәләр. Ауылда көн һайын гел таныш йөҙҙәрҙе генә күреп өйрәнгәс, Сафияға иң ауыры сит һәм битараф ҡараштарҙы күреү ине. Үҙенең бер кемгә лә кәрәкмәгәнен, үҙенең бындағыларҙың барыһына ла ят икәнен һиҙеп, эскәмйәлә аптырап ултырҙы-ултырҙы ла йәһәт кенә балаһын имеҙҙе, йүргәген алмаштырҙы. Хәҙер билет хаҡында уйларға кәрәк ине. Бәләкәй генә тәҙрә ауыҙына халыҡ йыйылған, тимәк, касса тигәндәре шулдыр, тип уйланы. Бар кешенең дә йөҙө күңелһеҙ, ҡайғылы. Ул ҡыйыуһыҙ ғына сират аҙағына баҫты. Исламгәрәй ағай өйрәткәнсә, берәй башҡорт кешеһенән ярҙам һорарға кәрәк ине. Башҡорттар бар кеше араһында, күренә, тик уларҙың да йөҙҙәре, вокзалдағы бөтә кешенеке һымаҡ, уйсан-ят, шуға кемгәлер барып ярҙам һорарға ҡыйыулығы етмәне. Шинель кейгән, буш еңле, ҡиәфәте менән башҡорт уның артынан күптән инде күҙәтә ине. Сит ҡараштарға өйрәнмәгән Сафия һағайҙы: «Был кеше ниməһенә шул ҡәҙәре итеп ҡарай икән һуң?» – тип уйланы. Ниһайәт, теге кеше урынынан ҡалҡынды ла уның янына килде һәм башҡортса:

– Һеңлекәш, ҡайһы яҡҡа бараһың? – тип һораны.

Сафия ояла-тартына, был кешенең ихлас уй менән янына килеүенә һаман ышанмай, үҙенең Өфөгә, дауаханала ятҡан ире эргәһенә китеп барыуын һөйләп бирҙе.

– Бир аҡсаңды, – тине кеше, әммә ҡатындың шикләнгәнен, үҙенә бик ышанып етмәгәнен һиҙеп өҫтәп ҡуйҙы: – Ҡурҡма, миңә һинең аҡсаң кәрәкмәй.

Аҡсаларын алғас, ир кеше туп-тура касса янына барҙы, русса нимәлер әйтте, унан Сафияға боролоп күрһәтте лә аҡсаны бәләкәй тәҙрәгә һондо.

– Миңә икенсе яҡҡа китергә, шулай ҙа һине ултыртышырмын, – тине ихлас кеше, уға билет һәм ҡалған аҡсаны биреп.

Бер аҙ һөйләшеп торҙолар. Бер сәғәттән поезд килде, ярҙамсыл кеше уны поезға ултыртышты. Ошо һәйбәт, ихлас кеше менән айырылышҡас, Сафияға нисектер күңелһеҙ булып китте, үҙенең исемен дә әйтмәне, Сафия ла уның кемлеген белмәй китеп барҙы.

Поезд ҡуҙғалғас, уның башы әйләнде, күңеле болғанды. Буш урынға барып ултырҙы ла күҙҙәрен йомдо һәм байтаҡ ваҡыт шулай барҙы. Күҙҙәрен асҡас, алыҫта артҡа йүгергән өйҙәрҙе, баҫыуҙарҙы, тауҙарҙы күрҙе, тәҙрә янынан ғына ағастар, телеграф бағаналары ялтлап үтте һәм ул үҙенең өйөндә ултыра, ә йорто ниндәйҙер мөғжизә менән ер өҫтөнән үҙе бара һымаҡ булып китте.

Тәгәрмәс өҫтөндәге өйҙөң хәрәкәт итеүенә Сафия яйлап күнекте, тышҡа хәҙер тынысыраҡ ҡарай башланы. Тәҙрәнән сит-ят ерҙәр, урмандар, туғайҙар, тауҙар йүгереште. Вагонда өйҙәге кеүек ише йылы һәм ҡоро ине, сисенергә лә, баланың аҫтын алыштырырға ла, ашарға һәм бәләкәй өҫтәл артында сәй эсергә лә мөмкин икән. Вокзалда саҡта ят, ҡурҡыныс булып тойолған кешеләрҙең йөҙҙәре лә, күҙҙәре лә икенсе, нисектер йылы, иғтибарлы ине хәҙер. Әллә ялҡытҡыс юлдан, әллә алыҫта ҡалған яҡындарын һағыныуҙан кешеләр, шул вагонда ултырған күршеләре, Сафияның балаһына йылмайып ҡаранылар, күпмелек, тип һоранылар һәм үҙҙәренең балаларын, ейәндәрен хәтерләнеләр. Сафия һаман тартына, ят кешеләрҙән уңайһыҙлана ине, шунлыҡтан һүҙгә бик ҡушылманы, үҙенә төбәлгән һорауҙарға ғына яуап бирҙе, унда ла башҡортса һораһалар ғына. Өфөлә дауаханала ятҡан ирем эргәһенә китеп барам, тип бер үк һүҙҙе ҡабатланы.

Бәпесен биләүенән ысҡындырып, вагон һикеһенә һалды, уныһы ни, аяҡ-ҡулы ысҡынғас, тибенде, тирә-яғына ялт-йолт ҡаранды, тауыш бирҙе.

Вагон буйлап ниндәйҙер бер ҡатын китеп бара ине, ул Сафия янында туҡтаны ла сәйер генә ҡарашы менән балаға

бакты. Ул Сафиянан өлкәнерәк, ҡаласа һәйбәт кейемдә. Ярар, ҡараһын, уның ҡарауында әллә нәмә юҡ, бөтәһе лә бәләкәстәргә ҡарарға ярата инде ул, берәй һүҙ әйтер йәки ҡағылыр ҙа ары китер. Әммә ҡатын китергә ашыҡманы, тора торғас, хатта татарса һөйләшә лә башланы (тышҡы ҡиәфәте һәм ҡаласа кейенгәнлегенә ҡарап, Сафия уны мәрйәлер тип уйлағайны).

– Ой, ниндәй матур бала, ой, ниндәй һөйкөмлө малай! – тине ул һоҡланып, үҙе һикенең бер мөйөшөнә ултырҙы. – Тотоп ҡарарға мөмкинме? Мин бәләкәйҙәрҙе шул тиклем яратам. Был ҡәҙәре лә һөйкөмлө бала булыр икән!

Ҡатын баланы ҡулына алды, һикертте, үпте, нисә айлыҡ, исеме нисек, тип һораны.

Сафия, үҙенең балаһы өсөн ғорурлыҡ тойғоһо кисереп, ҡатындың бөтә һорауҙарына ла яуап бирҙе, үҙе, быны балаһы юҡтыр, ахыры, тип уйлап хатта йәлләп тә ҡуйҙы.

– Ҡана, мин уны иремә күрһәтеп киләйем, ә? Мөмкинме? Ул да бәләкәйҙәрҙе бик ярата, – тине ҡатын. – Беҙ бына күрше вагонда ғына.

Бик оҡшағас, ярар, күрһәтһен һуң, тип уйланы Сафия, мөләйем, ихлас ҡатындың күңеле булыр. Ҡатын малайҙы алды ла күрше вагонға ире янына китте, ә Сафия туалетҡа барып килде, йыуынды, сәсен тарап үрҙе. Урынына килгәндә теге ҡатын балаһын алып килмәгәйне әле, «Әйҙә кинәнһендәр», – тип уйланы битараф ҡына, шул уҡ ваҡытта кеше өсөн ниндәйҙер яҡшылыҡ эшләй алыуына ҡыуанып.

Байтаҡ ваҡыт үтте, ярты, бәлки, бер сәғәт тә булғандыр, Сафия, бер ниндәй насарлыҡ toймай, малайын килтереүҙәрен көттө. Әммә уның күршеһендәге ҡатын тынысһыҙлана башланы һәм Сафияға:

– Ҡыҙым, балаң артынан бар инде. Нишләптер оҙаҡланы лаһа, – тине.

– Килер әле. Кеше балаһын нишләтһен ул?

– Кем белә... Төрлө кеше бар.

Сафия күрше вагонға китте. Унда ла туп-тулы кешеләр – ултыралар, яталар, һөйләшәләр, кәрт һуғалар, тәҙрәнән ҡарап баралар. Ул бөтә вагонды үтте, әммә теге ҡатынды таба алманы. Кейеменән сырамытып, бер башҡорт ҡатынынан, йәш кенә балалы ҡатын ҡайһы яҡҡа китте икән, күрмәнеңме, тип белеште. Теге, беҙҙең вагонда йәш балалы кеше тойолмай шикелле ул, балалы бер ҡатын үтеүен үтеп китте, әммә ул

беҙҙең вагонда түгел, бәлки, алдағыһындалыр, тип яуапланы. Сафия күрше вагонға атланы – ҡатын унда ла булмай сыҡты. Күрше вагонда булмағас, ниңә улай шундабыҙ тип әйтергә инде, тип аптыраны үҙе. Ҡатын артабанғы вагонда ла күренмәгәс, ул борсола, ҡурҡа башланы, әммә үҙе һаман, уға сит бала нимәгә кәрәк һуң, килтермәҫме икән ни, тип уйлауын белде.

Әллә биш, әллә алты вагон үткәс кенә ҡатынды тапты Сафия. Ул погонһыҙ китель кейгән ир янында Сафияның малайын тотоп ултыра ине. Иң ғәжәбе һәм аңлашылмағаны шул: малайы рәхәтләнеп әлеге ҡатындың имсәген имә – имеҙгән һәр ҡатындың һөтө булған кеүек, уның да һөтө бар икән дәһә!

Сафия былар эргәһенә килде лә:

– Баламды бир! – тине.

Ҡатын Сафияға боролдо, ҡарашы бөтөнләй ят кешенеке, беренсе күргәндәге ише ҡурҡыу ҡатыш аптыраулы ине. Ирҙең ирендәрендә йылмайған төҫ сыҡты, әммә ҡарашы ҡаты һәм һынсыл. Ҡатыны иренә русса ниҙер әйтте, шунан Сафия яғына боролдо ла үкереп ебәрҙе:

– Һиңә нимә кәрәк?

– Баланы бир! Был минең бала!

– Ни-мә-ә? Аҡылыңдан яҙҙыңмы әллә?

– Баламды бир!

Ҡатын, йылмайған төҫ сығарып, эргәһендәгеләргә ҡараны, йәнәһе, быңдай ҙа оятһыҙлыҡты күргәнегеҙ бармы, күпә-күндөҙ минең бала тип ныҡыша. Әммә күршеләре өндәшмәне.

– Был минең бала! – Иҫ киткес битһеҙлекте күреп, Сафия юғалып ҡалды, тулҡынлана башланы. – Һин бит, уны тотоп ҡына ҡарайым, иремә күрһәтәм дә килтерәм, тинең. Беҙ күрше генә вагонда, тинең.

– Нимә һөйләйһең һин? Мин һине беренсе тапҡыр күрәм. – Ул иренә русса нимәлер әйтте, йөҙө боҙолдо, ағарҙы, ире өндәшмәй Сафияға ҡараны. – Мин бит уны имеҙеп ултырам, күрмәйһеңме ни?

– Бир баламды!

Сафия малайын тегенең ҡулынан тартып алырға теләп эйелгәйне, ҡатын баланы күкрәгенә ҡыҫты, ә ире Сафияны ҡаты итеп этеп ебәрҙе. Тауышҡа, шау-шыу сығаһын һиҙеп, пассажирҙар йыйылды, юлды ҡапланылар, арттағылар, эй, унда нимә бар ул, тип ҡыҙыҡһындылар.

– Баламды бир! – тип йәнә ҡабатланы Сафия. Ул хәлдең етдилеген аңлай-төшөнә ине инде.

– Был ниткән эш, ә? Ниндәйҙер аҡылынан яҙған бисә минең баланы алырға йыйына! – тип ҡысҡырҙы ҡатын, тирә-яғындағыларҙан ярҙам һорағандай, әле береһенә, әле икенсеһенә ҡаранып. Иң ҡурҡынысы һәм сәйере шул, ике башҡорт ҡатынынан башҡалары, эштең нимәлә икәнен аңламаған пассажирҙар яһил ҡатын яғын алды ла Сафияға ҡырыҫ, күралмай ҡараны – һәр кем әсә, кем үҙенең балаһын кешегә бирер ебәргеһе килһен инде. Барыһы ла төштәге һымаҡ: Сафия был ҡатынды бик яҡшы хәтерләй, ул бит уның эргәһендә ултырҙы, һорап-үтенеп баланы ҡулына алды, һикертте, уйнатты, үпте, унан, иремә күрһәтәм дә килтерәм, тип алып китте; ҡатындың ҡулында Сафияның балаһы, ул бит үҙенең сабыйын таный, һәм ул, уның бәпесе, сит ҡатындың имсәген имеп ята! Сафия, уның әсәһе, ят кеше рәүешендә инәлеп-ялбарып, шулар эргәһендә тора, иҫәрҙер, аҡылы бер төрлөләр, тигәндәрен ишетеп тора. Вагонда, эйе, был ҡатын бала менән ултырҙы, күптән инде бала менән килә, тип ышандырырға тырышыусылар ҙа табылды хатта. Әгәр Сафия саҡ ҡына тәжрибәлерәк булһа, русса белһә, был үҙенең балаһы икәнен аңлата, иҫбат итә алыр ине. Шул ҡәҙәре оятһыҙлыҡ менән осрашҡас, ул телһеҙ ҡалды, үҙен үҙе яҡларлыҡ бер нәмә лә әйтә алманы, һаман бер нәмәне ҡабатланы ла ҡабатланы:

– Минең баланы бир!

Үҙенең вагонына барып, ошо ҡатындың балаһын алып киткәненә шаһит булған күршеләрен дә алып килә алмай ине Сафия, китһә, былар икенсе вагонға күсеп ултырасаҡ, ҡасасаҡ, йәшенәсәк йәки, поезд туҡтаһа, төшөп ҡаласаҡ, эҙлә шунан.

Тауышҡа проводница күренде. Теге ҡатын, бынау иҫәр бисә минең баланы алырға итә, тип аңлатты. Ә проводница уға ышанмай булдыра алмай – офицер кителе кейгән олпат ир, ҡатын үҙе лә матур кейемле, дәрәжәле кешеләр икәнлеге әллә ҡайҙан күренеп тора, минең бала тип бәйләнгән ҡатын йолҡош ауыл бисәһе, етмәһә, русса ике һүҙҙе лә бәйләй белмәй – уға кем ышанһын? Ул да, был ир менән ҡатын поезға бала менән ултырҙы, тип һөйләй башланы. Ҡыҫҡаһы, тегеләрҙе яҡлап, проводница Сафияға бәйләнеп алды ла китте: ҡайҙа ултырҙың, ниндәй вагонда бараһың, бар, үҙеңдең урыныңа кит, юҡһа киләһе туҡталышта төшөрөп ҡалдырам! Ул Сафияны вагондан

көс менән этеп сығарырға маташты, әммә Сафия эскәмйә янындағы тимер тотҡаға йәбеште лә торҙо, ҡуҙғатып ҡара һин уны!

– Баламды бир! – тип ҡабатланы ул йәнә үҙенең бәләкәсенән күҙен алмай. Шым ғына әйтте, сөнки ҡурҡышынан, тулҡынланыуынан уның ҡысҡырырға, иларға көсө ҡалмағайны. Йөҙө ағарған, балаһына текәлгән Сафия, ысынлап та, аҡылын юғалтҡан кешегә оҡшап тора ине.

Шул арала поезд ҙур станцияға яҡынлашты. Ситтәге ағас өйҙәр йүгереште, боролоштан сыҡҡас, ҙур-ҙур йорттар, завод торбалары күренде. Былар, Сафияның балаһын алған ҡатын менән ир, йыйына башланы. Кем белә инде, бәлки, үҙҙәренең ҡалаларына килеп еткәндәрҙер, бәлки, ошо станцияла төшһәләр, Сафия улар артынан йөрөмәҫ, йөрөһә лә, унан күҙ яҙлыҡтырабыҙ һәм вокзал ығы-зығыһы араһында эҙ яҙҙырабыҙ, тип уйлағандарҙыр. Сумаҙандары ла, төйөнсөк-маҙарҙары ла күренмәй, ҡатын бала менән алдан атланы, ир, һикеләр араһындағы юлды бикләп, ҡатыны артынан төшөргә ынтылыусы Сафияның юлын ҡаплап барҙы. Поезд туҡтағас, ҡатын етеҙ генә төштө лә ҡалаға ашыҡты – улар ире менән ҡайҙа осрашырға алдан уҡ һөйләшеп ҡуйғандарҙыр, күрәһең, һәм шунда Сафия, әгәр ҙә хәҙер вагондан сыға алмаһа, үҙенең балаһын мәңгегә юғалтасағын аңланы; үҙендә ярһыу әсә көсө тойоп, ул, йәштән үк ер эшендә, һәнәк, көрәк, балта тотҡан, ер һөргән (уны юҡҡа ғына ир Сафия тип атамағандар шул), ирҙәрсә көслө һәм еңел Сафия, үҙенең алдында барған ирҙе ситкә һирпте лә вагондан һикереп төштө, йүгерә-атлай китеп барған ҡатынды ҡыуып етте, тегене ҡыпһыуыр ише әләктерҙе лә ҡысҡырып ебәрҙе:

– Баламды бир!

– Ебәр, юҡһа хәҙер милиция саҡырам, – тине ҡатын сәрелдәп.

Был һүҙ Сафияны айнытып ебәргәндәй булды, ысынлап та, бында милиция, закон һаҡсылары, тәртип һаҡсылары, кәмһетелгәндәрҙең яҡлаусыһы булырға тейеш тәһә!

– Милиция! – тип ҡысҡырып ебәрҙе Сафия. – Милиция!

Әммә яһил ҡатын милиция менән бик осрашҡыһы килмәне, ахыры, тартылды, килеп еткән ире Сафияның ҡулдарынан тотоп ҡатынынан йолҡа башланы. Сафия балаһының йүргәгенә шундай ныҡ итеп йәбешкәйне, уны ҡатындан тик бала менән бергә генә ысҡындырырға мөмкин ине.

– Бир баламды! Милиция!

Тауышҡа кешеләр йыйылды, бер нәмә лә аңламай, бер-береһенә йәбешкән, ҡысҡырышҡан ике ҡатынға, уларҙы айырырға маташҡан иргә ҡарап тора башланылар.

Ниһайәт, милиционер пәйҙә булды, йыбанып ҡына ҡулын козырёк тәңгәленә тейҙерҙе лә йөҙөнә уҫаллыҡ сығарып һораны:

– Ниндәй тауыш ул, ә?

– Беҙ әле генә поездан төштөк. Бынау иҫәр бисә бәйләнде лә беҙҙең баланы алырға итә, оятһыҙ. Һис ҡотолорлоҡ түгел, – тип аңлатты ҡатын.

Милиционер Сафияға русса ҡаты ғына итеп нимәлер әйтте, күрәһең, теге икәүгә шундуҡ ышанды ла Сафияға быларҙы ебәрергә ҡушты. Әммә Сафия үҙенең балаһына, дөрөҫөрәге, йүргәк хеҙмәтен үтәгән йыуылған иҫке сепрәк киҫәгенә тағы ла нығыраҡ йәбеште.

– Әйҙәгеҙ, бүлеккә, шунда асыҡларбыҙ, – тине милиционер. – Граждандар, таралышығыҙ, таралышығыҙ, кеше күргәнегеҙ юҡмы әллә?

– Беҙ бынау поездан төштөк, һуңлауыбыҙ бар. Бына был ҡатынды алып барығыҙ, ә беҙҙе ебәрегеҙ, – тине ҡатын.

– Поезд егерме минут тора, өлгөрөрһөгөҙ, – тип яуапланы милиционер ҡырҡа ғына.

Бүлеккә киттеләр. Сафия балаһының йүргәген ҡулынан ысҡындырмай, ҡатын эргәһенән бара.

Милиция бүлегендә уға ҡысҡырырға керештеләр: ебәр, наконец, баланы. Ул аңланы, ҡулын ысҡындырҙы, әммә, был минең бала, был икәү минең баланы тартып алды, тип ҡабатланы ла ҡабатланы. Уның әйткәндәренә төшөнмәнеләр, аңламанылар, шуға күрә башҡорт милиционерын саҡырҙылар. Сафия уға был ҡатындың нисек эргәһенә килеп ултырыуын, шунан, иремә күрһәтәм тип, баланы күрше вагонға алып китеүен һәм кире килтермәүен, әле килеп минең бала тип ныҡышыуын һөйләп бирҙе. Башҡорт милиционеры уға ышанды, ул Сафияның хәбәрендә хаҡлыҡ барлығын тойҙо һәм һынсыл ҡарашы менән баланы ураған йүргәктең иҫке, бигүк таҙа булмаған сепрәктең ҡала ҡатынының таҙа кейемдәренә тура килмәгәненә лә иғтибар итте. Үҙенең шиген иптәштәренә лә әйтте – тәүге ҡатынға ышанған йәки ышана яҙған тегеләр икеләнде.

– Һеҙ кемгә ышанаһығыҙ? – тине яһил ҡатын. – Беҙ бына өсәү, ирем, үҙем, бала, ә ул кем, ҡайҙан килеп сыҡҡан бисә һуң?

– Иптәштәр, ҡатыныма бәйләнеүегеҙҙе туҡтатаһығыҙмы, юҡмы? Борсолоуҙан уның һөтө юғалыуы ихтимал, – тип ҡыйыу ғына әйтеп ҡуйҙы ҡатындың ире. – Беҙ поезға һуңлайбыҙ.

Офицер кителе кейгән олпат ир һүҙе милиционерҙарға тәьҫир итте – улар Сафияға шиксел ҡаранылар ҙа теге икәүгә:

– Һеҙгә китергә мөмкин, – тинеләр, шунан Сафияға: – Ә һиңә бер аҙ тотҡарланырға тура килер. Ҡайҙан киләһең, ҡайҙа китеп бараһың, документтарың бармы?

Ир менән ҡатын милиция бүлегенән поезға ашыҡтылар. Балаһын алып киткәндәренән Сафия бер мәлгә генә ҡатып ҡалды, аяҡтары иҙәндән ҡуҙғалмаҫ булды, күҙ алдары ҡараңғыланды, әммә шундуҡ тигәндәй әсәлек хисе, әсәлек тойғоһо, үҙенең бәләкәй генә сабыйын һаҡлап йыртҡысҡа ташланған турғай шикелле, үҙендә ғәйрәт табып, алдындағы милиционерҙы ситкә этәреп ебәрҙе лә, бүлмәнән атылып сығып, теге икәүҙең артынан йүгерҙе. Әммә ир, бының килгәнен күреп, уға боролдо, уны тотто, ҡосағына алды. Сафия унан ысҡынырға тырышып быны этте, һуғышты, ә шул мәлдә поезд ҡуҙғалды. Ҡатын бала менән ишектән инеп китте. Ир бөтә көсөнә Сафияны артҡа этте лә поезға йүгерҙе. Сафия уның артынан. Ир ишеккә һикерҙе, Сафия ишеккә еткәйне генә, проводница ишекте шарт япты ла асҡысҡа бикләп тә ҡуйҙы. Сафия тотоноп менә торған тимерҙе эләктерергә генә өлгөрҙө һәм поезд уны шул килеш алып китте – тәүҙә ул йүгерҙе, поезд шәбәйгәс, әлеге тимергә аҫылынып барҙы, аяҡтары ергә һөйрәлде, әммә ҡулдары, көслө крәҫтиән ҡулдары, тимерҙе ысҡындырманы. Бер ҡулы менән генә эләгеп, аҫылынған көйө ул байтаҡ юл үтте, унан көс-хәл менән аяҡтарын баҫҡысҡа һалды. Көҙгө ҡаршы ел уны кескәй генә баҫҡыстан бәреп төшөрөргә тырышты, үтә һуҡты, өҙгөләне, йолҡто. Ямғыр яуырға кереште, ауыр, тимер кеүек ауыр тамсылар уның ҡулдарына, йөҙөнә һуҡты, йоҡа ғына кейемен лысма һыу итте, һөйәктәренә тиклем һалҡын үтте.

Оҙаҡ, бик оҙаҡ сәғәттәр барҙы Сафия шул килеш. Поезд саҡрым артынан саҡрым һананы. Сафия ошо саҡрымдарҙы иҫен юғалтҡан ҡулдарында тотоноп үтте. Бармаҡтарын айырҙымы, кеше тормошо, улының тормошо икенсе юлдан китәсәк,

кем белә, бәлки, бәхетлерәк юлдан да китер, әммә ул ҡатынҡыҙ, ул әсә, тормоштоң ғәҙелһеҙлегенә, аяуһыҙлығына буйһонорға теләмәй, уның ҡулдары, бармаҡтары тимергә шул ҡәҙәре нығ йәбешкән, уны, әйтерһең, ҡуша йәбештереп йәки бәйләп ҡуйғандар.

Ниһайәт, алыҫта, яуған ямғыр ҡараңғылығы аша, ҡаланың яҡтылары күренде, оҙаҡламай поезд тиҙлеген кәметте һәм күпмелер ваҡыттан һуң станцияға килеп туҡтаны. Вагондың ишеге асылыу менән Сафия проводницаны ситкә этте лә вагон эсенә йомолдо һәм уның балаһын күтәреп сығырға йыйынған теге икәүҙең алдына килеп тә баҫты. Башынан аяғына ҡәҙәр һыу, ағарған, эскә батҡан, әммә мөхәббәт, ҡыйыулыҡ менән тулы асыулы күҙҙәр менән баҡты. Тегеләр шаҡ ҡатты, сөнки уны һис көтмәйҙәр ине. Ҡатын юғалып ҡалды, ағарҙыбуҙарҙы, ҡото алынды, ирҙең йөҙөнә ҡараңғылыҡ ятты, ул күҙҙәрен ситкә алды.

– Баламды бир! – Ҡалын, ҡалтыранған тауыш менән ҡаты итеп өндәште Сафия.

– Бир! – тип бойорҙо ир быларға ҡарамай ғына.

Баланы күкрәгенә ҡыҫҡан килеш, ҡатын ҡапыл түгелеп илап ебәрҙе, күҙ йәштәренә быуыла-быуыла һөйләй башланы:

– Тыңла мине, тыңла, зинһар! Ниңә шулай ҡыланғанымды, бәлки, аңларһың. Балам үле тыуҙы. Бүтән бер ҡасан да балаң булмаясаҡ, тине табип. Беҙ Өфөгә барҙыҡ. Унда, детдомдан бала алып була, тигәйнеләр. Беҙ үҙебеҙ Силәбенән. Мин һинең балаңды күрҙем дә оҡшаттым, яраттым. Бир һин уны миңә! Һин әле йәш, тағы ла табырһың, берҙе түгел, бер нисәне. Аҡса ла бирербеҙ, һағынһаң, беҙгә килеп йөрөрһөң, туғанлашырбыҙ. Мин үтенеп һорайым, инәләм, теләйһеңме, тубыҡланам. Бала таба алмаһам, ирем минең менән йәшәмәйәсәк, китәсәк!

– Бир баламды! – Аҡылынан шашыр сиккә еткән Сафия шул уҡ һүҙҙе ҡабатланы.

Шул саҡ ир ҡатынының ҡулынан баланы тартып алды ла Сафияға бирҙе. Сафия балаһын алды, йә тағы тартып алырҙар тигән һымаҡ, ҡабаланып вагондан сыҡты, ҡатын уның артынан эйәрҙе һәм һаман һөйләнеүен белде:

– Ғәфү ит, кисер инде, зинһар!

Һуңынан, тол ҡалғас (Ғәзиз ағай дауаханала үлде), Сафия улын үҙе үҫтерҙе һәм, тағы урлап ҡуймаһындар, берәй бәхетһеҙлек килеп сыға күрмәһен тип, улы өсөн мәңге ҡурҡып йәшәне. Матур, бөтөн киҫәк – уға, үҙе тишек-тошоҡта йөрөнө,

малайы өҫтөндәге кейем таҙа һәм ямауһыҙ булды, аяғында ла гел рәтле кейем ине. Балаһын юғалта яҙған ваҡиға әленән-әле иҫенә төшөп торҙо, һуңлап булһа ла үҙенең вагон тышында барған сәғәттәрен хәтерләп, тәндәре зымбырлап ҡуйғыланы, саҡ ҡына йомшаҡлыҡ күрһәтһә, бармаҡтарын асһа – ул булмаҫ ине. Уйлай-уйлай төрлө хыялдарға ла бирелә: бына теге икәү уның малайын алып китте, ул япа-яңғыҙы тороп ҡалды, бала ла юҡ, ир ҙә юҡ, яратырҙай бер кем юҡ, ә улы, йөрәк майы, үҙенең әсәһе тураһында бер нәмә лә белмәй, сит-ят кешеләрҙә үҫә, әсәй тип бөтөнләй икенсе кешегә өндәшә – бындай саҡтарҙа Сафияға ифрат ҡыйын, ысынлап та, тап шулай килеп сыҡҡан тиерһең. Йыш ҡына, поезға ултыра алманым, поездан йығылып төштөм, имеш, тип төштәр күрҙе, ә поезд китте, уны һис ҡыуып етерлек түгел, шулай ҙа ул поезд артынан йүгерә, ҡысҡыра, илай, унан ҡото алынып уяна ла, улының янында икәнен күреп, хәҙер инде бәхетенән иларға керешә.

Улы тураһында татлы хыялдары менән йәшәне. Бына ул үҫә, армияла хеҙмәт итеп ҡайта, яңы йорт һала, өйләнә. Килене шул ҡәҙәре һәйбәт, егәрле, күп итеп балалар таба һәм ул тыныс, етеш тормошҡа ҡәнәғәт булып ҡартайғансы ейәндәрен ҡарай. Тормоштан уға бүтән бер нәмә лә кәрәк түгел.

Ул улын ярата, һаман ярата, өмөтөн аҡламаһа ла ярата ине, үҙен ташлаһа ла, хаттар яҙмаһа ла, иҫерек көйө ауыл урамы буйлап йөрөгән һәм, пенсия аҡсаһын эсеп бөтөрөп, яңынан оҙаҡҡа юғалған ваҡыттарында ла ярата ине. Ул үҙенең һуңғы һулышына тиклем улын яратты, тәҙрә төбөндә ултырып һаман көттө лә көттө...

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** «Әсә һәм бала» хикәйәһендә һүрәтләнгән осор хаҡында һөйләгеҙ.
**2.** Ошо осорҙа ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр тормошо, ас-яланғаслыҡ шарттарында йәшәүе әҫәрҙә нисек һүрәтләнгән?
**3.** Сафияның үҙ балаһын яратыуын, уның өсөн ғүмерен дә бирергә әҙер булыуын күрһәткән юлдарҙы табып уҡып күрһәтегеҙ.
**4.** Улының әсәһенә ҡарата мөнәсәбәте, уға рәхмәт әйтеү урынына, уны рәнйетеүе хаҡында фекер алышығыҙ.

### Төркөмдә йәки парлашып эшләгеҙ

Тормошта балаларҙың әсәләренә ҡарата шулай рәхимһеҙ булған осраҡтарҙы күргәнегеҙ бармы?



# Назар НӘЖМИ

(1918–1999)

Назар Нәжми (Назар Нәжметдин улы Нәжметдинов) Дүртөйлө районы Миңеште ауылында донъяға килгән. Н. Нәжми – Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашып, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн татыған яугир шағир. Ете йыллыҡ белемде ул үҙ ауылында ала. Унан Өфөләге металлургия рабфагында, рабфакты тамамлағас, Башҡорт дәүләт педагогия институтында уҡый. Өсөнсө курстан һуң һуғышҡа китә. Һуғыштан ҡайтҡас, уҡыуын дауам итә. Институтта уҡыған йылдарында уҡ әҙәби ижадта әүҙем ҡатнаша, күп уҡый һәм яҙыша. Уның шиғырҙары альманахтарҙа, гәзит-журналдарҙа баҫыла башлай.

Н. Нәжмиҙең «Әсә», «Ҡапҡалар», «Йыр тураһында баллада», «Күлдәк», «Урал» кеүек поэмаларын уҡыусылар яратып уҡый. Шулай уҡ уның күп кенә шиғырҙарына композиторҙар көйҙәр яҙған. «Дүртөйләм», «Һин – ғүмер ағыштарым», «Мине юлдар саҡыра», «Яҙғы урман», «Атай йорто», «Дуҫлыҡ, дуҫлыҡ» тигән һәм башҡа йырҙары яратып йырлана.

Назар Нәжми драматургия өлкәһендә лә әүҙем эшләй. Уның «Яҙғы йыр», «Хуш, Хәйрүш!», «Гармунсы дуҫ», «Ҡыңғыраулы дуға» исемле пьесалары республика театрҙары сәхнәләрендә ҡуйыла.

Н. Нәжми – РСФСР-ҙың дәүләт премияһы һәм Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы лауреаты. Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән батырлыҡтары һәм башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙәге хеҙмәттәре өсөн ордендар һәм миҙалдар менән бүләкләнгән. Назар Нәжмигә Башҡортостандың халыҡ шағиры исеме бирелгән.

## ТЫУҒАН ИЛ ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ

Иңләп-буйлап сыға алмаçлыҡ үҙен,
Ҡар-буранлы, яҡты ҡояшлы.
Ғәйрәтле һәм көслөләрҙән-көслө,
Ҙур аҙымлы һәм киң ҡоласлы.

Башҡаларға, юҡ, ул оҡшамаған,
Һәм үҙенсә ата таңдары.
Йәйҙәре – йәй, ҡыштары – ҡыш уның,
Көҙҙәре – көҙ һәм яҙ – яҙҙары.

Башҡаларға, юҡ, ул оҡшамаған
Ғәҙәте һәм халҡы менән дә,
Урмандары, урамдары менән,
Һулышы менән, холҡо менән дә.

Ул яғымлы, йылы яҙы кеүек,
Ҡаты, уçал ҡышы һымаҡ та,
Кәрәк саҡта йәйе кеүек ҡайнар,
Көҙө кеүек бай һәм йомарт та.

Һөйәм уны шундай булғаны өсөн,
Төрлө булғаны өсөн көндәре.
(Әгәр ерҙә гел яҙ ғына булһа,
Ни яҙлығы уның, ни йәме!)

Мин уныҡы йәнем-тәнем менән,
Уның өсөн ҡан да, һулыш та.
Һөйәм уны һәм төрлөсә һөйәм:
Йәйе, ҡышы, яҙы булып та.



### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.



### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шағир Тыуған илде нимәләр менән сағыштыра?
**2.** «Ул яғымлы, йылы яҙы кеүек,
Ҡаты, уçал ҡышы һымаҡ та» тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?
**3.** Әгәр беҙҙең яҡта тик яҙ ғына булһа, Тыуған илгә мөнәсәбәтегеҙ үҙгәрер инеме?

## АҠ ШИШМӘ

Үрсоҡорҙан аҡҡан Аҡ шишмәнең
Сыҡҡан ерҙәрендә ҡуш уҫаҡ.
Тубыҡланып, амин тотҡан кеүек,
Һалҡын һыуын эсәм ҡуш услап.

Тыуған ерем, туған йырым –
Аҡ шишмәм һин, Аҡ шишмәм!
Донъямдың бар яттарына
Серҙәремде сисмәм.

Үрсоҡорҙан сыҡҡан Аҡ шишмәнең
Аҡҡан ғүмере күпме йылдар ул.
Күпме йылдар күпме кешеләрҙе
Аҡ күңелле иткән һыуҙыр ул.

Тыуған илем, туған телем –
Аҡ шишмәм һин, Аҡ шишмәм!
Сит йәндәрҙе мин үҙ итеп,
Түбәнлеккә төшмәм.

Үрсоҡорҙан сыҡҡан Аҡ шишмәнең
Шифаһынан тәндә көс арта.
Сит ерҙәргә китһәм, тыуған ергә
Һыу тарта ла икән, һыу тарта.

Тыуған өйөм, туған көйөм –
Аҡ шишмәм һин, Аҡ шишмәм!
Үҙ көйөмдән сит көйҙәргә
Һис ваҡытта күсмәм.

Үрсоҡорҙан аҡҡан Аҡ шишмәнең
Сыҡҡан еркәйендә ҡуш уҫаҡ.
Тубыҡланып, амин тотҡан кеүек,
Серле һыуын эсәм ҡуш услап.

Үҙ иманым, инаныуым –
Аҡ шишмәм һин, Аҡ шишмәм!
Иманһыҙға һис ваҡытта
Серҙәремде сисмәм.

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шиғырҙа ниндәй төҫ өҫтөнлөк итә?
**2.** Аҡ шишмә образында ниндәй төшөнсәләр йыйылған?

### Ижади эш

**1.** Аҡ шишмә шағир тормошонда ниндәй роль уйнай?
**2.** Һеҙҙең дә яратҡан шишмәгеҙ бармы? Булһа, уның хаҡында ниндәй шиғыр юлдары яҙыр инегеҙ?

## ҺИНЕҢ НИНДӘЙ УЛЫҢМЫН МИН?

Бөтәһе лә һинән килә миңә,
Бар булмышым һинән, бар моңом.
Әсәйемдең күҙ ҡарашы кеүек
Бөтә төҫөң, бөтә барлығың.

Тыуған илем, тыуған ерем,
Һинең ниндәй улыңмын мин?
Шуны беләм: һин йәшнәһәң әгәр,
Осҡононда булырмын мин.

Матурлығың һинең, бар сафлығың
Йөрәгемә инеп үрелгән.
Улар миңә әсә һөтө менән,
Әсә теле менән бирелгән.

Тыуған илем, тыуған ерем,
Һинең ниндәй улыңмын мин?
Шуны беләм: һин күкрәһәң әгәр,
Күкрәүеңдә булырмын мин.

Һинең исемең бар нәмәнән өҫтөн,
Һәр ауазың – миңә бер ғүмер,
Шуларҙан да әгәр мәхрүм булһаң,
Йәшәүҙәрең йәшәү түгелдер.

Тыуған илем, тыуған ерем,
Һинең ниндәй улыңмын мин?
Шуны беләм: яралана ҡалһаң,
Ҡан тамсыңда булырмын мин.

## Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Ни өсөн шиғырҙың икенсе, дүртенсе, алтынсы куплеттары оҡшаш йөкмәткеле?
**2.** Шағир ни өсөн үҙенә ҡарата «Һинең ниндәй улыңмын мин?» тигән һорау ҡуя?
**3.** «Матурлығың һинең, бар сафлығың
Йөрәгемә инеп үрелгән.
Улар миңә әсә һөтө менән,
Әсә теле менән бирелгән.» тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?



Әмир
# ӘМИНЕВ
**(1953)**

Әмир Мөхәмәт улы Әминев Ғафури районы Һабай ауылында тыуған. Ауылында башланғыс белем ала. Һуңынан Юлыҡ һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә, Өфөләге 1-се һанлы интернат-мәктәптә уҡый.

1975–1980 йылдарҙа Мәскәүҙә М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында уҡый. Уҡып бөткәндән һуң «Ағиҙел» журналы редакцияһында өлкән әҙәби хеҙмәткәр, яуаплы сәркәтип, баш мөхәррир урынбаҫары вазифаларында эшләй.

1998–2002 йылдарҙа республиканың йәштәр журналы «Шоңҡар»ҙың баш мөхәррире була, ә 2002–2016 йылдарҙа – «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире. Ул тәржемә менән дә уңышлы шөғөлләнә. Уның тәржемәһендә уҡыусылар Мәскәүҙә йәшәгән яҙыусы Талха Ғиниәтуллиндың әҫәрҙәрен башҡорт телендә уҡыу бәхетенә ирешә. Бынан тыш ул күренекле рус яҙыусылары В. Белов, В. Распутиндың айырым хикәйәләрен, Ш. Хажиәхмәтовтың, К. Йыһаншиндың әҫәрҙәрен башҡортсаға тәржемә итте. Ә. Әминевте уҡыусылар шулай уҡ әҙәби тәнҡитсе булараҡ та белә.

## ҠЫТАЙ-ГОРОД

*(Повестан өҙөк)*

### 1

Бөтә күрһәткестәр буйынса ла районда артта һөйрәлеүсе «Алға» колхозы рәйесе иртә менән хужалыҡтың баш белгестәрен йыйҙы.

– Мин һеҙҙе бигүк ғәҙәти булмаған хәбәр әйтер өсөн саҡырҙым, – тине ул, барыһы ла ултырып бөткәс. Шунан бер ауым өндәшмәй торҙо, һәммәһенә лә һынсыл ҡарап сыҡты, ҡулындағы ҡәләмен уйнатып алды һәм яһалма пафос менән өҫтәне: – Иртәгә беҙгә район хакимиәте башлығы килә!

Белгестәр хәүефле ҡараштарын хужанан алып өҫтәлгә текәне, тынысланып бер-береһенә ҡараны, шунан яурын һикертте – быны ни ғәжәбе, ул тәүге тапҡыр килмәй ҙәһә, әрләүгә өйрәнелгән баш, был юлы ла үткәреп ебәрербеҙ, тип әйтеп тора ине ҡиәфәттәре.

– Бында аптырарлыҡ бер нәмә лә юҡ, ул беҙгә беренсе мәртәбә килмәй, тиерһегеҙ. Тәүҙә мин дә шулай уйлағайным, тик кисә ауыл хужалығы идаралығы начальнигы шылтыратып, «Ҡытайҙан ҙур бизнесмен килә» тине.

– Кемгә, беҙгәме ни? – тип һораны баш агроном Әкрәм.

– Беҙгә шул. Икенсе колхозға килһә, йыйып әйтеп ултыра буламмы? – Рәйес ҡәнәғәтһеҙ генә агрономға һирпелде.

– Ул бизнесмен беҙҙә нимәһен юғалтҡан икән һуң? – тип һораны өлкән бригадир Мансур.

– Нимә юғалтҡанын килгәс үҙе әйтер: әлегә бар мәғлүмәт шул. Әҙер булайыҡ, һәммәгеҙ ҙә үҙегеҙҙең өлкәләге эштәрҙе ҡарап, тикшереп сығығыҙ. Әкрәм ағай, – рәйес баш агрономға өндәште. – Сөгөлдөр китеп бөттөмө?

– Өс йөк булыр, тип уйлағайным да, ике машинаға һыйҙы. Оҙаттыҡ. Егеттәр һуң ғына әйләнеп ҡайтты.

– Яҡшы. Ҡабатлап әйтәм: эшегеҙ буйынса ҡулығыҙҙа бар мәғлүмәт булһын. Әллә нимәләр менән ҡыҙыҡһынырҙар әле. Тегене-быны һорап торһалар, яуап бирерлек булһын. Әкрәм ағай, тағы бер нәмә, теге батҡан ЗИЛ-ды сығара алдығыҙмы, юҡмы?

– Юҡ. Бер тракторҙың көсө етмәне. Күршеләрҙең К-700 тракторын һорап торҙоҡ. Бөгөн килә, шуның менән һөйрәтеп ҡарарбыҙ, тим. Ныҡ ултырған бит.

– Иçкенең иçке инде, яңы булһа, шунда батмаç та ине. Сығарырға кәрәк, баçыу уртаһында ултырмаһын һерәйеп. Күрһә, Нурислам Нурлығаянович үтте һытыр. Сабит ағай, – рәйес баш зоотехникка төбәлде. – Һыйырҙарҙы ҡасан ҡураларға ябабыҙ?

– Тағы аҙна-ун көн самаһы көтөүҙә йөрөтәйек, тигәйнем. Был арала ғына ҡар яуырға оҡшамаған.

– Ярар, бер нисә көн йөрөтөгөҙ улайһа. Һауым нисек?

– Артым юҡ.

– Кәмемәгәс яраған.

Рәйес артабан бригадирҙарҙан хәл-әхүәлде белеште, иртәгә тап ошо ваҡытта йәнә йыйылабыҙ, һеҙҙән бөгөн башҡарған эштәрегеҙ хаҡында отчёт көтәм, тип йыйылышты йомғаҡланы.

Белгестәр аптырашып сыҡты рәйес бүлмәһенән. Беренсенән, ваҡытһыҙ йыйҙы, икенсенән, бер ҙә конкрет һүҙ, ҡушылған эш булманы, һәр ваҡыттағыса – дөйөм хәбәр. Район хакимиәте башлығы менән ҡытай бизнесмены килә, тиеүҙән башҡаһы. «Үҙаллылыҡ етмәй, үҙаллылыҡ», – тип ҡабатларға ярата йәш рәйес, тик үҙенә ошо һүҙҙе ҡайтарып әйтеүсе генә юҡ. Берәй һүҙенә ҡаршы сыҡһаң, үсегеп, үпкәләп бара, тәгәрмәскә таяҡ тығаһығыҙ, барығыҙ ҙа миңә оппозицияла тораһығыҙ, тип ҙурҙан төшә лә китә. Кем таяҡ тыҡһын, барыһы ла ошо колхоз тип йүгерә бит инде. Ә үҙе хакимиәт башлығының күҙенә генә ҡарап тора, уның һүҙенән сыҡмай.

Агроном туңға һөргән тракторсылар янына баçыуға сығып китте, баш зоотехник Оҙонкүл ярында яҙҙан бирле ятҡан минераль ашламаны ашап үлгән башмаҡ яғына ҡуҙғалды (уныһын рәйес белмәй) – нисек тә емтектәр зыяратына илтеп күмергә кәрәк. Унан, ваҡыты етһә, һауынсыларға һуғылыр. Ә баш инженер ике көн йөрөп тә алып ҡайта алмаған запчасын эҙләп йәнә район үҙәгенә юлланды.

Иртәгеһенә иртүк идара йортона килһәләр, район хакимиәте башлығы ысынлап та шунда ултыра! Коммунистар партияһы заманында уҡ оҙаҡ йылдар беренсе секретарь вазифаһында эшләгән һәм һаман район башлығы булып ҡала алған эре һөйәкле, ҡайһы ҡабырғаһына һалһаң да, юла кеүек тороп китер, йығылһа, бесәй ише тәпәйҙәренә төшөр был кеше улар менән ғүмер буйы етәкселек итә һымаҡ. Коммунистар партияһын тыйыу көнөнән башлап бөгөнгәсә илдә, республикала, районда күпме ваҡиғалар, боролош-түңкәрелештәр булды, байтаҡ түрә-ҡара алмашынды, ә ул утта янмай, һыуҙа батмай торған кеше булып сыҡты. Алдында исем-шәрифе менән

өндәшһәләр, артында уны Хаким ти ҙә ҡуялар. Күберәк боғаҙ менән алдырғанын, унынса эшләмәгәндәргә ҡул күтәрергә лә күп һорамаҫын, эсеүгә, ашауға әүәҫ икәнлеген яҡшы беләләр.

Белгестәр рәйес бүлмәһендәге өр-яңы оҙон өҫтәл артына ултырышып бөткәс, Хаким ярайһы уҡ ҙур ҡорһаҡлы ҡалын кәүҙәһен күтәреп ҡыҫҡа аяҡтарына баҫты, муйынһыҙ дәү башын тура тотоп, гөрөлдәк тауыш менән һүҙ башланы:

– Эшегеҙ шәп бармаһа ла, өҫтәлегеҙ елле, министерский. – Ул был һүҙҙәрҙе ошо бүлмәгә кергән һайын әйтә – әллә мыҫҡыл итеүе, әллә үҙенеке шундай булмағанға көнләшеүе, белмәҫ-һең. – Иптәштәр, мин һеҙгә мөһим хәбәр алып килдем: Өфөнән бер етәксе иптәш килә. Ул дәүләт әһәмиәтендәге эш менән йөрөй, шуға һәммәгеҙ ҙә әҙер булырға, колхозығыҙҙа идеальный тәртип урынлаштырырға тейешһегеҙ. Кемдеке – шунығы! Кстати, сөгөлдөр баҫыуында ниндәй машина ултыра ул? – Хаким ҡаштарын емереп рәйескә текәлде. Ә рәйес, үҙ сиратында, баш агрономға ҡараны, йәнәһе, сығарам, тигәйнең бит кисә. Әкрәм рәйестең был ҡарашын «үҙең яуап бир» тип аңланы ла ҡабаланып аҡланырға тотондо.

– Хаким, әй, ғәфү итегеҙ, Нурислам Нурлығаянович, ул машина кисә кис кенә батты, сығара алманыҡ, тракторҙың көсө етмәне, күршеләргә барғайныҡ та, К-700-тары буш түгел. Бөгөн биреп торорбоҙ, тинеләр.

– Нишләп батты һуң ул баҫыу уртаһында?

– Тейәлгән көйө бер соҡорға төштө лә батты инде.

– Сығарырға, бөгөндән дә ҡалмай тартып сығарырға! – Хаким утлы ҡарашын агрономдан рәйескә күсерҙе. – Ҡытайҙан киләсәк крутой бизнесменды беҙҙең районға алып килеү мин әйткән әлеге иптәшкә тапшырылған. Ауыл хужалығы министры үҙе, ул килә алмаһа, беренсе урынбаҫары булыр әлеге иптәш. Аҙна-ун көндән киләсәктәр, шуға тиклем юл ситендәге үләндәрҙе сабығыҙ. – Район башлығы башҡарылырға тейешле эштәрҙе һанай һәм һәр «эш»кә йыуан бармаҡтарын бөгә барҙы. – Ауыл урамдарын тәртипкә килтерегеҙ, сүп-сар, бүрәнә, утын-фәлән ятмаһын. Ҡоймаларҙы буяғыҙ, иҫкеләрен алмаштырығыҙ, ҡыҙыл туҡымаға аҡ буяу менән «Хуш килдегеҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтар!» тип яҙып элегеҙ ҡапҡа башына. Кемдеке – шунығы! – Район етәксеһе йәнә үҙенең яратҡан һүҙен ҡыҫтырҙы. – Һуңынан миңә Өфөнән, насар ҡаршы алғанһығыҙ, тигән претензиялар ишетергә тура килмә-

һен. Булдымы? Һеҙгә өс көн ваҡыт! Халыҡты йыйығыҙ, ситуацияны аңлатығыҙ һәм – эшкә!

Броневикка оҡшап торған бейек ҡара сит ил машинаһына инеп ултырғас, ул йәнә: «Кемдеке – шуныҡы!» – тип һуҡ бармағын күккә сөйҙө. Уның был ҡыланышы Аллаһы Тәғәләгә күрһәтеүе булдымы, әллә үҙен күҙ уңында тоттомо – оҙатырға сыҡҡандар аңлай алманы. Башҡа ваҡыттағы ише ашап та торманы хатта. Белгестәр, эш ысынлап та етди, ахыры, тигән һығымта яһаны.

Кисенә хужалыҡтың дөйөм йыйылышын йыйып, халыҡҡа, Хаким әйтмешләй, ситуацияны аңлаттылар, һәм бынан теүәл ике йыл элек биш ауыллы ҙур колхоздан «Алға» булып айырылып сыҡҡан Һыбай ауылы кешеләре эшкә лә тотондо: буянылар, алмаштырҙылар, яңырттылар. Был эшкә кеше үҙендә булғанын да тотондо, колхоз, район төҙөлөш ойошмалары бүлгән материалдарҙы ла файҙаланды. Бушҡа түгел, эш хаҡы иҫәбенә. Миңә кәрәкмәй, ниңә көсләп бирәһегеҙ, былай ҙа ике йылдан ашыу аҡса күргән юҡ, тип ҡарышҡандарҙы тиҙ тынысландырҙылар: араҡы тараттылар. Кем белә, бәлки, уныһы ла бушлай булмағандыр. Һөҙөмтәлә, боғаҙҙар тиҙ тығылды – Өфөнән ҙур түрәләр йышыраҡ килһә, эсеп тә ҡалыныр, ауыл да төҙөкләнер ине, тип һөйләп йөрөнөләр хатта.

Өс көндән хакимиәт башлығы ысынлап та килде һәм, ауыл, ихаталар, баҫыу-яландар буйлап йөрөп, ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр менән, нигеҙҙә, ҡәнәғәт ҡалыуын белдерҙе, йәнә эштәр ҡушты. Ә сөгөлдөр тейәп батҡан ЗИЛ өҫтөнә һалам өйгәйнеләр – эҫкерт ултыртҡандар, йәнәһе. Хаким уны әллә аңғарманы, әллә күрһә лә өндәшмәне. Ул ҡайтып киткәс, хужалыҡ рәйесе еңел тын алды: ярар, бәлки, Өфө түрәһе лә күрмәҫ...

Иртәгеһенә белгестәр иртүк идара йортона килһә, колхоз рәйесе, Хаким, уның ике урынбаҫары, бөтөнләй таныш булмаған тағы ике кеше ултыра. Йәнә аптырайҙар: былар әллә кистән үк килеп йоҡлағанмы? Колхозда ғүмер баҡый эшләп, түрәләрҙең был ҡәҙәре лә егәрләнгәнен күргәндәре юҡ ине әле. Тимәк, эш етди, тимәк, ҡытай бизнесмены тигәндәре – ҙур ҡош.

Хужалыҡ рәйесе тороп, тотлоға-тотлоға һүҙҙе район хакимиәте башлығына бирҙе, уныһы эргәһендәге шыма сәсле, шәм кеүек төҙ кәүҙәле кешегә боролоп, республиканың ауыл хужалығы министры урынбаҫары, тип таныштырҙы ла һүҙҙе уға тапшырҙы.

– Мин яҡшы хәбәр алып килдем, иптәштәр, – тине министр урынбаҫары. Пинжәген тартты, галстугын төҙәтте, шыма сәсен артҡа һыпырҙы. – Беҙгә, дөрөҫөрәге, һеҙгә, Ҡытай Халыҡ Республикаһының Ляонин провинцияһынан ҙур бизнесмен килә. Беҙҙең, йәғни һеҙҙең бурыс – шул кешене тейешле кимәлдә ҡаршы алыу, хужалыҡ менән таныштырыу, халыҡ менән осраштырыу. Беҙҙең республика менән Ляонин провинцияһы араһында үҙ-ара хеҙмәттәшлек килешеүе бар. Быйылғы йылдың февралендә беҙҙең Премьер-министр етәкселегендәге хөкүмәт делегацияһы унда булып, сауҙа, иҡтисад өлкәләренә ҡағылған ошо документҡа ҡул ҡуйып ҡайтты. Ул делегация составында мин дә булдым. Беҙгә бер нисә крәҫтиән хужалығын, кооперативтарҙы күрһәттеләр, тирмәнде, шәкәр сөгөлдөрөн эшкәртеү заводын ҡараныҡ. Хәҙер шул провинцияның бер вәкиле яуап визиты менән килмәксе. Беҙҙе ҡаршы алыуҙары, йөрөтөүҙәре юғары кимәлдә булды, тип әйтә алам, тимәк, уларҙы ла шулай уҡ арыу ҡаршы алырға тейешбеҙ.

– Ул кеше беҙгә ниндәй маҡсат менән килә һуң? – Баш зоотехник Сабиттың өркәк тауышы ишетелде.

– Минең алдымда, бына, һеҙҙең һуңғы ике йылдағы күрһәткестәрегеҙ. Малсылыҡ буйынса ла, игенселек буйынса ла эштәрегеҙ хөрт бара. – Министр урынбаҫары һорауға туранантура яуап бирмәне, хәбәрен уратып башланы. – Хөкүмәт эксперимент рәүешендә республиканың хәлһеҙ колхоздарының ерҙәрен сит ил инвесторҙарына бирергә тигән ҡарар ҡабул итте. Мәңгегә түгел, әлбиттә, егерме биш йылға. Беҙҙең Ауыл хужалығы министрлығы һеҙгә туҡталды, йәғни беренселәрҙән булып эште башлап ебәрәһегеҙ. Хөкүмәттең бына ошо ҡарарын халыҡҡа аңлатырға кәрәк. Ҡасан һөйләшәйек? Оҙаҡҡа һуҙмаҫҡа ине. Бөгөн үк булһа, бигерәк тә һәйбәт.

Хаким министр урынбаҫарына, шунан рәйескә ҡарап алды ла:

– Әйҙәгеҙ, бөгөн, – тигән тәҡдим индерҙе.

– Давай, бөгөн. Кискә тиклем ерҙәрегеҙҙе ҡарап әйләнәйек тә кискә халыҡты клубҡа йыяйыҡ.

Баш ҡаланан килгән ҡунаҡты Хаким менән хужалыҡ рәйесе «Алға» биләмәләре буйлап алып китте. Йөрөп сыҡҡас, ашханаға инеп ашанылар ҙа клубҡа атланылар. Халыҡ йыйылғайны инде.

– Иптәштәр, мин һеҙгә шәп хәбәр алып килдем. Беҙгә, дөрөҫөрәге, һеҙгә, Ҡытай Халыҡ Республикаһынан ҙур бизнесмен

килә, – тип идарала әйткәндәрен ҡабатланы ауыл хужалығы министры урынбаҫары, үҙен халыҡҡа таныштырып һүҙ биргәстәре. – Беҙҙең республика менән Ҡытайҙың Ляонин провинцияһы араһында быйыл февралдә үҙ-ара хеҙмәттәшлек килешеүенә ҡул ҡуйылды. Әлеге бизнесмен ошо килешеүгә ярашлы беҙгә, йәғни һеҙҙең колхозға килә.

– Ул ҡытай беҙҙең колхозда нишләй инде?

Алғы рәттә ултырған Фәйзулла ҡарт, мал аяғына сырмалған эт эсәге кеүек, түрә-ҡараның һәр һүҙенә бәйләнергә әҙер торған кеше. Йыйылыш һайын, колхоз етәкселеге менән эшләгән халыҡ араһында бер ниндәй ҙә сер булырға тейеш түгел, мал-тыуарҙың һәр башы, хужалыҡтың һәр тине нимәгә сарыф ителә, береһен дә йәшермәгеҙ, колхоз – ул бер коллектив, тип һөйләй. Унынса, килем-төшөмдө лә, сығымды ла рәйес менән бер рәттән тракторсы ла, һауынсы ла белеп торорға тейеш. Тап ана шуларҙы уртаға һалып һөйләү булырға тейеш дөйөм йыйылыштарҙың маҡсаты, йәнәһе. Уның ошоноң ише хәбәренән түрәләрҙең ҡоттары осоп торһа, колхозсылар ҡарттың һүҙен хуплай, ҡай саҡ хатта, һөйлә, әйт, кәрәктәрен бир, тип ҡоторта ла.

– Колхоз ерҙәрен һорамаҡсы.

– Ҡытай кешеһенә нимәгә кәрәк булған һуң беҙҙең колхоз ерҙәре?

Ай, был Фәйзулла ҡарт! Тығылмай ғына ултырһа булмаймы икән ни? Ҡыбайға ғүмер эсенә бер министр урынбаҫары килгән, шуны тамам үпкәләтеп кенә ҡайтара инде. Унан йәнә көт бер ун йыл шундай дәрәжәле кеше килеүен. Хужалыҡ рәйесе сәхнәләгеләргә һиҙҙермәй генә ҡартҡа йоҙроҡ күрһәтте, йәнәһе, ҡыҫылып ултырма, өнөңдө тыҡ.

– Ә һин, ҡустым, миңә йоҙроҡ төймә! – Ҡарт рәйесте бөтә ғәм алдында фаш итте лә ҡуйҙы, үҙе һикереп тигәндәй тороп баҫты, һуҡ бармағын уның яғына төрттө. – Мине йыйылышҡа саҡырмаҫҡа әмер биргәнеңде еткерҙеләр. Ишшо ун биш йыл буйы «Алға»ны ғына түгел, башҡаларҙан айырылмаҫ элек ҙур хужалыҡты етәкләгән кешегә янап ултыраһың. Йүнле етәксе булһаң, колхоз алға барыр ине, ә һин үҙең артҡа һөйрәйһең. Урыныма һине ҡалдырырға ризалыҡ биргән мин дүрәк.

– Давай, Фәйзулла Сәғитович, юҡ-бар һөйләмә, иптәш министр урынбаҫарына телмәр тоторға форсат бир, – тип район хакимиәте башлығы ҡартты тыймаҡсы булды.

– Нурислам Нурлығаянович, минең юҡ-бар һөйләмәгәнде һин бик яҡшы беләһең. Үҙегеҙ бит, ул ҡытай кешеһенә беҙҙең ерҙәр нимәгә кәрәк, тигән һорауға һис яуап бирә алмайһығыҙ. Үҙем илле йыл бил бөккән колхозға ул әфәнденең ниндәй йомош менән килеүен мин белмәҫкә тейешме ни? Колхоз уныҡы ғына түгел, – Фәйзулла ҡарт бармағын йәнә хужалыҡ рәйесе яғына төрттө, – минеке лә, – ул ҡулын үҙенең күкрәгенә терәне, – барыбыҙҙыҡы ла, – ҡарт артҡа, залға, боролдо. – Һин, ҡустым, ысын рәйес булһаң, йәшермәй әйт, ниндәй маҡсат менән килә ул ҡытай? Түрәләр ҡайтыр ҙа китер, ә беҙгә ошонда йәшәргә, эшләргә кәрәк. Һуңынан барыһына ла үҙеңә яуап бирергә тура килмәгәйе.

– Йәшермәйем, мин үҙем дә иптәш министр урынбаҫары әйткән ҡәҙәре генә беләм, – тине рәйес, үпкәләгәндәй.

– Фәйзулла Сәғитович, председателгә бәйләнмәгеҙ. Әйттем бит, ерҙәрегеҙҙе ҡарарға килә, тип. Оҡшаһа, алыуы ла ихтимал, һәр хәлдә районға ебәргән вәкиле аша предварительно шундай ниәте барлығын белдергәйне, – тип рәйесте яҡлашты Хаким.

– Бына бит где собака зарыта! Килеүенең бер ғилләһе барҙыр, тип уйлағайным да, – тип ярһыны Фәйзулла ҡарт.

Клуб геүләргә тотондо, кешеләр бер-береһе менән һөйләшергә, нимәнелер иҫбат итергә кереште, береһе «да»ны һуҙҙы, икенсеһе һыҙғырып ебәрҙе. Уларға эштең асылы саҡ барып етте, шикелле. Тимәк, ул әфәнде ерҙәрен алырға килә, былар, хужалыҡ рәйесе менән Хаким, – шул ерҙәрҙе һатыусылар. Министр урынбаҫары ла бушҡа йөрөмәҫ, уның да ҡыҫылышы барҙыр. Булмаһа, өгөтләп ултырмаҫ ине.

– Ә һеҙ беҙҙең менән һөйләштегеҙме, беҙҙән, ошо ерҙә тир түккән колхозсыларҙан, һораныҒыҙмы? – ғүмере буйы сөгөлдөрҙә эшләгән, быйыл ғына пенсияға китергә йәше еткән Нәғимә ҡалҡынды ла шулай тине. – Рәйес белгәндер ерҙе һатасаҡты, ә нишләп ошоға тиклем беҙгә әйтмәй йөрөгән? Беҙ үҙебеҙ генә йыйылып һөйләшер-кәңәшләшер инек, ҡапыл килеп төштөгөҙ ҙә беҙҙе ҡаҡ стенаға терәнегеҙ. Беҙҙең йәш рәйескә үгеҙ үлһә – ит, арба ватылһа – утын. Ер хужаһы агроном ниңә өндәшмәй?

Барыһы ла баштарын борғолап агроном Әкрәмде эҙләргә тотондо. Баш белгестәр, бригадирҙар – барыһы ла, шул иҫәптән агроном Әкрәм, зоотехник Сабит та, бер тирәлә, халыҡтан ситтәрәк ултыра булып сыҡты. Халыҡ ҡараштары менән уларҙы

тапҡас, нисектер күҙҙәрен аяҡ остарына йәшерҙеләр. Залдағылар, һөйләһендәр, улар ҙа әйтһен, тип ныҡышһа ла, урынынан ҡалҡыныусы, һүҙ тотоусы табылманы. Быларға, өнөгөҙ сыҡмаһын, тигән бойороҡ бирелгәнен халыҡ шундуҡ төшөндө.

Тауыш бер сама баҫылғас, министр урынбаҫары ҡалҡынды ла былай тине:

– Был мәсьәлә хөкүмәт кимәлендә хәл ителгән, шулай булғас, һеҙҙән һорап тороу кәрәкмәй. – Шунан үҙенең артығыраҡ ысҡындырғанын аңлап, көсәнеп йылмайған булды. – Ер бит бушҡа бирелмәй, апай, бизнесмен уны һатып ала. Күптән түгел Госдума ерҙе һатырға рөхсәт иткән закон проектын ҡабул итте. Федерация Советы ла раҫлап, Президент ҡул ҡуйһа, ул проект закон көсөнә инәсәк.

Клубта йәнә шау-шыу ҡупты.

– Тәүҙә беҙҙән һораһындар, ул законды тәүҙә беҙ, ер кешеләре, ҡарарға тейеш, Кремлдә ултырғандар түгел! – тине сөгөлдөрсө Нәғимә. Был юлы тауышы тағы ла ҡатыраҡ сыҡты.

– Беҙҙә – суверенитет, Мәскәү беҙгә ҡыҫылмаһын! – ти «Белдекле» ҡушаматы йөрөткән уҡытыусы Рәсүл.

– Һатмайбыҙ, беҙҙә һатлыҡ ер юҡ, башҡа колхозға алып барығыҙ ул ҡытайҙы! – тип ҡысҡыра ҡайһыһылыр.

– Улар, ана, Алыҫ Көнсығышта ла, мөстән һыйыр кеүек, беҙҙең территорияға ымһына, – тип йәнә һүҙ ҡыҫтыра Белдекле. – Беҙҙең пограничниктар тотоп, үҙҙәренә кире оҙатып тора, былар килә тора. Саранча кеүек ифрат күп халыҡ.

– Өфөгә кем барған әле, шул әйтә, Ҡытай магазиндары асылған, кухнялары, ресторандары бар, ти. Тамам баҫып алырға ниәтләнәләр, ахыры, – тип йәнә ҡыҫыла Фәйзулла ҡарт.

– Серәшә торғас, Уралға ла килеп еттеләр бит инде.

– Үҙҙәре ваҡ булһа ла, нәфселәре ҙур икән.

– Һатыр булғас, ниңә ҡоймаларҙы алмаштырҙыҡ, йортҡураны ремонтланыҡ һуң? – тигән ҡәтғи һорау ҡуя сәхнәләгеләргә сөгөлдөрсө Нәғимә. – Күпме таҡта, ҡаҙаҡ, бояу сарыф ителде, хәҙер шуларҙың барыһын да ҡалдырып китәбеҙме?

Район хакимиәте башлығы көрәктәй ҡулын күтәрҙе лә өҫтәлгә төшөрҙө. Ҡалын ярҡа ташланымы ни, шап итеп ҡалды.

– Йә, баҙар ойоштормағыҙ! Иптәш министр урынбаҫарынан тартыныр инегеҙ әҙерәк. Ул көн һайын килмәй.

– Йышыраҡ килһә, колхоз был хәлгә лә төшмәҫ ине, – быныһы йәнә Фәйзулла ҡарт. – Юҡһа затлы кабинеттарҙан

ғына бойороҡ бирергә өйрәнде түрәләр. Әүәле, беҙ эшләгән замандарҙа, йөрөрҙәр, күрерҙәр, һөйләшерҙәр, кәңәш-төңәш һорарға ла оялмаҫтар ине. Дөрөҫөн генә әйт әле, иптәш министр урынбаҫары, ул ҡытай тигәнегеҙ беҙҙең ерҙәрҙе ниндәй хәжәт менән ала һуң? Ҡытай ҡайҙа ята ла, Башҡортостан ҡайҙа...

– Ун биш йыл буйы колхозды етәкләгән кеше булараҡ үҙегеҙ үк әйтеп тораһығыҙ, «Алға» артта һөйрәлә, тип. Ни өсөн һөйрәлә? Сөнки эшләй белмәйһегеҙ, социализм осорондағы кеүек, килтереп биргәндәрен көтәһегеҙ, баҙар шарттарына, баҙар закондарына һаман яраҡлаша алмайһығыҙ. Яңыса фекерләү, үҙаллылыҡ юҡ. Ә тормош бер урында тормай, алға бара, үткәндәргә ҡайтыу юҡ. Һеҙ район, республика өсөн – тормоз. Шуға ла хөкүмәт, алда әйткәнемсә, табышһыҙ эшләгән колхоздарҙы бөтөрөп, ерҙәрен сит ил кешеләренә арендаға бирергә, тигән ҡарар ҡабул итте. Ерегеҙҙе егерме биш йылға ала, етештергән продукцияның күпмелер өлөшөн беҙгә тапшыра, ер өсөн налогын түләй, инфраструктураны яҡшырта.

– Ә быларҙың береһен дә үҙебеҙ эшләй алмайбыҙмы? – тип һораны Фәйзулла ҡарт.

– Юҡ, үҙегеҙ эшләй алмайһығыҙ. Эшләр булһағыҙ, быға тиклем эшләр инегеҙ инде. Һеҙ – икенсе формация кешеләре, һеҙҙә потребитель психологияһы, һеҙҙең ергә булған мөнәсәбәтегеҙҙе бер нисек тә үҙгәртеп булмай. Уны үҙгәртеү өсөн хәҙер эволюция түгел, революция кәрәк.

– Революция тип яңынан ҡан ҡойош ойоштораbыҙмы? Башҡорт ҡаны былай ҙа әҙ түгелмәне ул йылдарҙа.

Шул саҡ залдан берәү:

– Ә беҙ, кешеләр, ни эшләйбеҙ, ул ҡытай тигәнегеҙ ерҙе алғас? – тип һорау ҡуйҙы.

– Урынлы һорау. – Министр урынбаҫары йылмайғандай итте. – Һеҙҙең ҡарамаҡҡа ике вариант тәҡдим ителә. Беренсеһе – ауылдан китмәй уға эшләйһегеҙ, икенсеһе – барығыҙҙы ла ҡалаға күсерә. Әгәр уға эшләйһегеҙ килмәһә инде.

– Нисек ҡалаға, ҡайһы ҡалаға?

– Ауылығыҙға яҡын ҡалаға. Бизнесмен күсереү сығымдарын тулыһынса үҙ өҫтөнә ала, квартираларҙы ла һатып алып бирә.

– Ә беҙҙең бындағы өйҙәр нишләй?

– Ҡалдыраһығыҙ, улар бизнесмендың милкенә әйләнә.

Халыҡ телһеҙ ҡалды, ауыҙҙарын асып, бер-берећенә ҡараштылар, шундай эш мөмкинме икән ни, тип иҫтәре китте. Быға саҡлы бындайҙы күреү түгел, ишеткәндәре лә юҡ. Әгәр ысынлап та күсерә ҡалһа тип, һәр кем үҙен, үҙенең ғаиләһен уйлай башланы. Кемдер өсөн ҡалаға күсеү отошло, беренсе сиратта – йорттары иҫке булғандарға, ә яңы йортлоларға ташлап китеүе ҡыйынға тура килер. Ни тиһәң дә, күпме көс, аҡса түгелгән, шуны бер көн эсендә нисек юғалтмаҡ кәрәк?

– Ә мал-тыуарҙы нишләтәбеҙ? – тине сөгөлдөрсө Нәғимә. – Һәр кемдә икешәр-өсәр һыйыр, башмаҡ, быҙау...

– Ул мәсьәлә тулыһынса үҙегеҙҙең ҡарамаҡта. Теләһәгеҙ һатығыҙ, теләһәгеҙ һуғымға һуйығыҙ. Ерҙәрегеҙҙе һатыу, ҡабатлап әйтәм, – колхоз рәйесенең йәки район хакимиәте башлығының, хатта республиканың Ауыл хужалығы министрлығының да ихтыяры түгел, хөкүмәт ҡарары. Ә хөкүмәт ҡарарын үтәргә кәрәк.

– Мал-тыуарҙы, һеҙ әйткәнсә, һатырбыҙ ҙа, һуғымға ла һуйырбыҙ – унан «ҡотолоу» өсөн күп аҡыл кәрәкмәй, ә бына ата-бабалар, туған-тыумаса ятҡан зыярат бар, ҡалала балаларҙы мәктәпкә, яслегә урынлаштырыу, үҙебеҙгә эш табыу, пропискаға инеү, башҡа мәсьәләләр тыуасаҡ...

– Барыһы ла һеҙҙең проблема. Шуларҙы ла башҡарыр хәлдә түгелһегеҙме әллә?

Район хакимиәте башлығы тороп баҫты, ҡулын өҫкә күтәрҙе – көрәктәй ус өҫтәлгә төшкәс кенә, зал тынды.

– Етте, допрос ойошторма, Фәйзулла Сәғитович. Бар һорауҙарыңа ла яуап бирҙе иптәш министр урынбаҫары, ҡалғанын бизнесмендың үҙенә бирерһең.

Бынан һуң да байтаҡ һорауҙар бирелде әле ҡор түрендәгеләргә. Хаким менән министр урынбаҫары ауыл халҡының бар һорауҙарына ла тулыһынса яуап бирә алманы, сөнки мәсьәләнең күп яғы хатта үҙҙәре өсөн дә ҡараңғы ине, шикелле.

Ауыл хужалығы министры урынбаҫары ҡайтып китеүгә аҙна-ун көн үткәндер, бер көн төштән һуң район хакимиәте башлығы колхоз рәйесенә, ҡытай бизнесмены Өфөгә килгән, иртәгә иртәнсәк районға юлға сыға, ҡаршы алып ашатырбыҙ ҙа һеҙҙең яҡҡа тәртә борорбоҙ, көтөгөҙ, тип шылтыратты.

Хакимдың хужалыҡ рәйесенә шылтыратыуы һөйөнсө алыу ғына түгел ине, әлбиттә. Алдан һөйләшкәнсә, ҡунаҡтарға икмәк-тоҙҙо сибәр ҡыҙ тәҡдим итергә тейеш, янына ике һомғол егетте, улар артына арыу ғына кейендереп ауылдың бер нисә

кешеһен баҫтырып ҡуйырға тейештәр. Шуны белешә Хаким, ояТҡа ҡалыуҙан, юғарынан әрләүҙәренән шөрләй. Берәй нәмә күҙ уңынан ысҡындырылһа, мин һиңә әйттем, ҡуштым, иҫкәрттем бит, тип арҡаһын ныҡҡа терәмәксе. Фон өсөн ҡуйылған кешеләр араһында, Алла һаҡлаһын, эсеп килеүселәр була күрмәһен, ҡәнәғәтһеҙлек белдерһәләр, ҡунаҡ ҡайтҡас, үҙҙәрен һыйларбыҙ, анау әрем тел Фәйзулла ише берәйһе кәрәкмәгән һорау биреп торһа, эш харап. Әйткәндәй, ул ҡартты, берәй сәбәбен табып, ауылдан сығарып ебәргәндә иллә лә шәп булыр. Анау бисә, кем әле, Нәғимәме, өйөнә барып, ниндәй проблемаһы бар, белеш, үтәргә вәғәҙә ит, тик һорау-фәлән биреп ултырма инде, апай, тиң. Уйла әле шуларҙы. Танау соҡоп, ауыҙ асып, аҡайып тора күрмәһендәр ғүмерҙә кеше күрмәгән ҡырағайҙар кеүек. Йыйып инструктаж үткәр. Беҙҙең халыҡ сәйәси яҡтан ышаныслы, мораль яҡтан саф, үҙ тормошонан ҡәнәғәт. Ҡытайҙан килгән ҡунаҡҡа беҙ үҙебеҙҙең ошо күркәм сифаттарыбыҙҙы күрһәтергә тейеш. Шуны онотма: уның килгәнен Президент белә, администрацияһы ҡыҙыҡһынып шылтыратып торасаҡ.

Иртәгеһенә, төш яҡынлағанда, район яғынан килгән суғырмаҡланып туңған юлда бер нисә машина күренде. Улар уйпатлыҡҡа төштө, шунан, тулҡын өҫтөндә йөҙгән кәмә шикелле, йәнә ҡалҡты, Бейек күперҙе, Оҙонкүлде үтте һәм ҙур тиҙлектә ауылға яҡынлашты. Һыбай ауылы уйпатлыҡта ултырғанлыҡтан, оло юлдан хәрәкәт итеүсе һәр нәмә күренеп тора. Шуға ла кешеләрҙең өйҙәгеләре, ғәҙәти булмаған ҡунаҡтың килеүен күрергә теләп, тәҙрәләргә ҡапланды, ихатала, урамда йөрөгәндәре, ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйып, юлға баҡты.

Тиҙҙән ҡабырғаларына зәңгәр һыҙыҡ тартылған, башына бер һүнеп, бер янып торған лампалы аҡ «Волга» идара йорто алдына килеп туҡтаны, уға йәнә бер «Волга», ике сит ил машинаһы, арттан тағы бер милиция машинаһы эйәргәйне. Алдағы сит ил машинаһының алғы ишегенән таҙа кәүҙәле бер егет атылып килеп сыҡты ла, артҡы ишекте асып, тәүҙә – ауыл хужалығы министры урынбаҫарын, унан йоҡа ҡара пальто, йылтырап торған ҡара туфли кейгән, ялан баш бер ят кешене сығарҙы. Уның йәшен һис самаларлыҡ түгел, яшыҡ бәләкәй кәүҙәһенә ҡарағанда үҫмер малай кеүек, ә сырайы ярайһы уҡ оло күренә.

Икенсе сит ил машинаһынан Хаким, Һыбайҙарға таныш булмаған тағы бер нисә кеше төштө, ҡаршы алырға сыҡҡан

рәйес, баш белгестәргә ҡул биреп күрештеләр ҙә эйәртенешеп идараға инделәр. Ярты сәғәт самаһынан ҡунаҡтар ҡабаланмай ғына кире сыҡты, машиналарға тейәлеп ашханаға китте, унда оҙаҡ ҡына сәйләп-мәйләп ултырғандан һуң, йәнә тейәлешеп клубҡа йүнәлде.

Клуб ихатаһына арыуыраҡ кейендереп бер нисә кешене генә ҡуйыҒыҙ тигән күрһәтмә булыуына ҡарамаҫтан, майҙан халыҡ менән шығырым тулғайны. Болдорҙа – сигеүле оҙон таҫтамал менән ҡабарып бешкән икмәк тотҡан сибәр ҡыҙ, уның ике яғында – һомғол егеттәр. Улар ихлас йылмая, әйтерһең дә, оҙаҡ сәфәрҙән ҡайтҡан бер туған ағаларын ҡаршылай. Машиналарҙан төшкән түрәләр ике яҡҡа тартылып үҙҙәренә юл биргән халыҡ араһынан яйлап ҡына ишеге шар асыҡ клубҡа атлай. Иң алдан министр урынбаҫары, ҡытай кешеһе, Хаким, йәнә таныш түгел ике егет бара. Был таҙа ике егет ата ҡаҙ шикелле тирә-яҡҡа ҡарана, кешеләрҙе еңелсә генә ситкә этеп хужаларына юл яра.

Ҡунаҡтар болдорға яҡынайғас, артист егеттәр ҡурайҙа уйнап ебәрҙе. Икмәк тотҡан ҡыҙ, уйнауҙарын дауам иткән егеттәр ҡунаҡтар ҡаршыһына бер нисә аҙым яһаны, министр урынбаҫары, тәүҙә бына уға, тип, ҡытай кешеһенә ишараланы, бизнесмен, үҙ сиратында, йылмайҙы ла күпереп бешкән йомро икмәктең йөҙөнән бер ҡабым семтеп алып тоҙға манды һәм ауыҙына оҙатты. Уның үрнәгенә башҡалар ҙа эйәрҙе.

– Ошомо икән инде ҡытай тигәндәре? – тине берәү халыҡ араһынан.

– Шулдыр инде. Һуғыштан һуң Камил ағай ни ғәләмәт менәндер Ҡытайға эләгеп, алтмыш беренсе йылда ғына ҡайтып килгәйне. Үҙен, меҫкенде, үлеп киткәнсе «ҡытай» тип йөрөттөләр. Шул, кәүҙәгә ҡураныс булһа ла, бик егәрле, эшкә бөткән халыҡ, тубыҡтан һыу кисеп дөгө үҫтерәләр, тип һөйләй торғайны. Йәп-йәш күренә, үҙе беҙҙең колхоз ерҙәрен ала, тиме?

– Уларҙа ер аҙ, ә халыҡ күп. Һыймай башлағандарҙыр.

– Кем һөйләй ине, ныҡ үрсеп киткәнгә хәҙер хөкүмәттәре ғаиләгә бер генә бала табырға рөхсәт иткән, имеш, тип. Миллиардтан ашыу кешене ерҙәре ысынлап та һыйҙырмай башлағандыр.

– Һыйҙырмай башлаһа, мотлаҡ Башҡортостанға килергә тейештәрме ни?

– Ботинкаларын ҡара, ботинкаларын. Беҙҙең батҡаҡ, тиреҫ араһында нисек йөрөргә итә икән?

– Уны батҡаҡтан йөрөтөрҙәр тип уйлайһыңмы ни? Түрәләр үҙҙәре теҙелеп ятһа ятыр, әммә бысраҡҡа баҫтырмаҫ.

Ҡунаҡтар, клубҡа инеп, сәхнәгә күтәрелде. Халыҡ урынлашып бер аҙ тынысланғас, район хакимиәте башлығы һүҙ башланы:

– Һаумыһығыҙ, иптәштәр! Беҙ көткән ҡунаҡ килде, ул һеҙҙең алда. Әйҙәгеҙ әле уны «Алға» ерендә тәбрик итәйек! – Хаким үҙе башлап ҡул сабырға тотондо, уға сәхнәләгеләр, унан залдағылар ҡушылды. – Ҡунаҡтың исем-шәрифе, – Хаким алдындағы ҡағыҙҙы ҡулына алды ла хәрефләп тигәндәй уҡыны: – Чжан Син.

Ҡытай кешеһе баҫты, итәғәтле генә итеп билен бөктө, йылмайҙы, йылмайғанда күҙҙәре бөтәште, ирендәре урынында һыҙыҡ ҡына ҡалды. Ул ултырғас, Хаким артабанғы һүҙҙе ауыл хужалығы министры урынбаҫарына бирҙе.

– Иптәштәр, беҙгә, йәғни һеҙгә Ҡытай Халыҡ Республикаһынан ҡунаҡ киләсәген барығыҙ ҙа беләһегеҙ. Бына ошо ҡунаҡ бөгөн һеҙҙең алда. Ул яңғыҙы ғына түгел, улар өсәү, береһе – ҡунаҡтың үҙе кеүек үк ауыл хужалығы белгесе, икенсеһе – тәржемәсе. Тәржемәсе русса ла, башҡортса ла белә, так что ауыҙҙарығыҙҙы үлсәп асығыҙ, – министр урынбаҫары ҡунаҡтарға ҡарап көлөмһөрәне.

– Иптәш министр урынбаҫары, фекер алышыу алдынан шуны асыҡлап китәйек әле, – ораторҙың саҡ ҡына пауза яһауынан файҙаланып, Фәйзулла ҡарт һүҙ ҡыҫтырып өлгөрҙө. – Ер тураһында һүҙ сыҡҡан һайын, беҙҙең Президент, республиканың бер ҡарыш ере лә һатылмаясаҡ, ти. Һеҙ, шул тирәлә ҡайнаған кеше, тем более Ауыл хужалығы министрлығының яуаплы работнигы, ҡайҙа ятҡан Ҡытай һынлы Ҡытайҙан кеше саҡырып, беҙҙең колхоз ерҙәрен уға бирергә йыйынаһығыҙ. Был афераны Президент беләме?

– Бабай…

– Мин бабай түгел, мине Фәйзулла Сәғитович тиҙәр. Илле йыл ошо ергә тир түккән кеше, шуның ун биш йылын «Алға»ның рәйесе булдым, белгегеҙ килһә.

– Фәйзулла Сәғитович, беренсенән, был афера түгел, мин министр урынбаҫары башым менән, һеҙ әйткәнсә, сомнительный сделкала ҡатнашып йөрөмәйем. Икенсенән, ҡунаҡтың килеүе – хөкүмәт кимәлендәге мероприятие. Был турала үткән ошрашыуҙа һөйләгәйнем инде. Шуға күрә мине бүлдермәгеҙ, билдәле әйберҙәрҙе ҡат-ҡат һөйләргә мәжбүр итмәгеҙ.

Ярайһы уҡ ҡаты әйтелгән был һүҙҙәрҙән һуң клубта тынлыҡ урынлашты, һәм, тағы бер нисә ҡыйыуһыҙ ғына һорауҙы иҫәпләмәгәндә, йыйылыш ошоноң менән тамамланды ла. Сәхнәләгеләрҙең эште ҡыҫҡа тотоуының сәбәбе шул: бизнесмен хужалыҡтың баҫыуҙарын ҡарарға тейеш. Яңы бәхәс ҡора күрмәһендәр тигән һымаҡ, залдан халыҡ артынан уҡ сыҡтылар ҙа ҡайһы аралалыр клуб алдына килеп ултырған өс «УАЗ»икка тейәлешеп ер ҡарарға ҡуҙғалдылар. Ә халыҡ клуб алдында бәхәсләшә-бәхәсләшә байтаҡ тапанды әле.

Кисен, өй-ҡуралағы көндәлек мәшәҡәттәр бер сама тамамланғас, ихата беренсә йөрөп ауыл халҡын йәнә йыйҙылар клубҡа. Ҡарау-танышыу һөҙөмтәләрен, ҡытай кешеһенең фекерен тыңларға, тине ебәрелгән саҡырыусылар. Эркелешеп килде халыҡ, көндөҙгө йыйылышҡа бармағандар ҙа килде. Сөнки бизнесмендың ни әйтере барыһына ла ҡыҙыҡ ине.

Йыйылышты оҙаҡҡа һуҙмау маҡсатында, һүҙҙе шундуҡ министр урынбаҫары үҙе алды.

– Полнейший хужаһыҙлыҡ. Ерҙәрҙе һатырға кәрәк. Был килеш әрәм булып ятҡансы, әҙ булһа ла аҡса килтерер исмаһам, – тип йомғаҡланы ул оҙон ғына телмәрен.

Ҡытай бизнесменының хәбәрен уның артында ултырған шулай уҡ бәләкәй кәүҙәле, ҡоңғорт йөҙлө йәш егет – урыҫсаға, ара-тирә башҡортсаға ауҙарып барҙы. Сит телдең яңғырашы мәрәкә ине, шуға ла халыҡ уны иғтибар менән тыңланы.

Бизнесмендың һүҙҙәренә ҡарағанда, хужалыҡтың ерҙәре уға оҡшаған. Шул юҫыҡта оҡшаған: йылға-күлдәр, ағас-ҡыуаҡлыҡтар бар, баҫыуҙарҙы ҡыуан елдәрҙән ҡаплар тау һырттары уратып алған. Тик баҫыуҙар әлегә, хөрмәтле министр урынбаҫары әйткәнсә, ярайһы уҡ ташландыҡ хәлдә, тейешле уңыш алыу өсөн байтаҡ тир, сығымдар түгәһе бар. Әгәр халыҡ риза булһа, ул «Алға» ерҙәрен алыр ине.

Был һүҙҙәрҙе ишетеү менән, йәнә Фәйзулла ҡарттың ябыҡ оҙон кәүҙәһе ҡалҡты ла ораторҙы бүлдереп тигәндәй һөйләй ҙә башланы:

– Иптәш бизнесмен, Ҡытай бик алыҫ ил, беҙҙең ерҙәрҙе килеп эшкәртергә уйлайһығыҙмы, әллә башҡаларға, конкрет әйткәндә, беҙҙең халыҡҡа арендаға бирергә ниәтләнәһегеҙме? Юғары уңыш алыр өсөн бит баҫыуҙарҙы бөгөндән үк тәрбиәләй башларға кәрәк. Һеҙ алған ер өсөн аҡса күсергәнсе, ауылды ҡалаға күсергәнсе, бында техника, кеше килтергәнсе ҡыш үтә, яҙ етә. Ойоштороу мәсьәләләрен хәл итеүгә бер йылығыҙ ҙа

етмәүе бар. Унан килеп, икенсе климат, насар юлдар, илегеҙҙең алыҫлығы, шулай уҡ беҙҙең властарҙың, халыҡтың шиксел мөнәсәбәте. Һеҙҙе шулар өркөтмәйме?

Бизнесмен йылмайҙы, унан йөҙө етдигә әйләнде, бер ауыҡ уйланып ултырҙы, шунан ғына һөйләй башланы. Тәржемәсе уның һүҙҙәрен башҡортса аралаш урыҫсаға ауҙарып барҙы.

– Мин һеҙҙең ерҙәрҙе алып үҙемә ҙур яуаплылыҡ йөкмәгәнемде аңлайым. Ысынлап та, һеҙ әйткән йыраҡлыҡ һәм башҡа мәсьәләләр күп ваҡыт, күп сығымдар, көнө-төнө йөрөү талап итә. Ләкин мин ауырлыҡтарҙан ҡурҡмайым, ҡурҡһам, ҡытай ҙа булмаҫ инем. Рәсәйҙә миңә йыш булырға тура килә, уның менталитетын күпмелер дәрәжәлә беләм. Хәҙер һорауҙарығыҙға ҡыҫҡаса ғына конкрет яуаптар.

Һеҙҙең етәкселәр әйткәндер, һәр хәлдә еткерергә тейештәр ине, минең шарт былай: күсһәгеҙ – бөтәгеҙ ҙә күсәһегеҙ, ҡалһағыҙ – барығыҙ ҙа ҡалаһығыҙ. Мин ярты ауылды ҡалдырып, яртыһын күсерә алмайым. Билдәле, ҡалаһығыҙ икән, миңә эшләйһегеҙ, хеҙмәтегеҙ өсөн эш хаҡы түләнә, киткән хәлдә мин эшкә урынлаштырмайым, квартира ғына һатып алып бирәм. Һәммәгеҙ ҙә бер йортта йәшәйәсәкһегеҙ.

– Ә ауылдағы йорттар нишләй?

– Улары беҙгә ҡала, нишләтеүебеҙ – беҙҙең эш.

Йәнә аптырашты халыҡ. Күпме йәшәп, бындайҙы ишеткәндәре лә, күргәндәре лә юҡ ине. Төшкә инә, тип уйларҙар ине, барыһы ла клубта ултыра – тотош ауылдың төштә йөрөүе мөмкин түгел. Мөғжизә инде, мөғжизә. Халыҡтың күпселеге, моғайын да, күсеү яғын ҡайырыр, бигерәк тә йәштәр. Хәйер, ҡарттар ҙа китеүгә ризалашыр, сөнки ер, колхоз тип күпме бил бөктөләр, әммә һис йәлсей алманылар бит. Аҡсаһын да күрмәнеләр, мал-мөлкәт йыйырға ла хәлдәренән килмәне. Йөрөнөләр инде шунда ғүмер уҙғарып, һаулыҡтарын юғалтып.

– Ҡуҙғалмаған хәлдә, яңы хужаға эшләп байырмын, тигән ышаныс юҡ, шуға ла китеү хәйерлерәк булыр, – тине арттан берәү.

– Эйе, әлеге ише мөмкинлек бүтән бер ҡасан да булмаясаҡ.

– Бәй, алдамаһа, беҙгә бер ниндәй убыток юҡ таһа! – тип йөпләне икенсеһе. – Ҡалала квартир ҡыйбат, ә был, буш бирәм, тип тора.

– Буш түгел инде, бынығын тапшыраһың бит.

– Эх, был Алла бәндәһе бер егерме йыл элек килгәндә!

– Йәй буйы бәрәңге баҡсаһында ҡорт сүпләп йән сыға ине, ҡотолабыҙ икән, – тине бисәләрҙән берәү бик ҡәнәғәт ҡиәфәттә.

– Әтеү, – тип дәррәү ҡушылды уға әхирәттәре.

– Ай, был берәй афера булып ҡуймағайы! – Фәйзулла ҡарттың киҫәтеүле тауышы ишетелде. – Ерен һатҡан – илен һатҡан. Беҙҙең ата-бабалар борон-борондан ер тип күпме ҡан түккән, ихтилалдар күтәргән, бөгөн килеп улар ҡаны һеңгән ошо ерҙе биреп ебәрергә ултырабыҙ түгелме? Исмаһам, үҙебеҙҙең бай ҙа түгел, оҡшамаһа йәки алдаһа, кире булыр ҙа ҡуйыр инек. Берәй төрлө аңлашылмаусанлыҡ килеп тыуһа, уны эҙләп Ҡытайға барабыҙмы? Мәсьәлә бында үтә лә ҡатмарлы, ағай-эне, ҡабаланмайыҡ, бер киҫкәнсе, ете тапҡыр үлсәйек әле.

Зал тәрән тынлыҡҡа сумды. Элекке рәйестең дәлилдәре һағайтҡыс, ҙурҙан фекер йөрөтһәң, ул, әлбиттә, хаҡ әйтә. Ысынлап та, ерҙән ҡолаҡ ҡаҡтыңмы – бөтәһенән дә ҡолаҡ ҡаҡтың тигән һүҙ. Түрәләр, егерме биш йылға, тиһә лә, мәңге ҡайта алмаясаҡтары бик ихтимал. Икенсе яҡтан, оло быуын йәшәгән ҡәҙәре йәшәмәҫ, ҡалған ғына ғүмерҙәрен улар таҙа асфальтта йөрөп, бәҙрәфе эстә булған, крандан эҫе һыуы ағып торған фатирҙа көн иткеләре килә.

– Фәйзулла Сәғитович дөрөҫ әйтә, беҙгә китмәҫкә кәрәк. Уның аҡсаһын барыбер күрәһе башыбыҙ юҡ. Яҡшымы, насармы – бөгөнгө көнгә тиклем йәшәнек бит, артабан да йәшәрбеҙ, – тине быға тиклем өндәшмәй ултырған сөгөлдөрсө Нәғимә.

– Мин бизнесмендың әйткәндәренә ҙур шик менән ҡарайым. Сирек быуат – ҙур ғүмер, кем бар, кем юҡ, беҙҙең ейәндәрҙең ҡайтам тип йөрөүенә ышанмайым. Ҡайтарып биреүҙе талап итеүсе булмағас, ҡытайҙар был ерҙән нишләп баш тартһын? Беҙҙең тарафтан төҙәтә алмаҫлыҡ ике ҙур хыянат эшләнә. Беренсеһе – ер юғала, икенсеһе – тел. Тел ауылда ғына һаҡлана, ҡалала бөтә. Ә тел бөткәс, милләт бөтөүгә бер аҙым, – тине Фәйзулла ҡарт йәнә һүҙ алып.

Район хакимиәте башлығы, йыйылыштың икенсе юҫыҡҡа йүнәлеш алғанын самалап, урынынан ҡалҡынды.

– Иптәштәр, баҙар ойоштормағыҙ! – тип ҡысҡырҙы ул тәүҙә, шунан күрәктәй усы шапылдап өҫтәлгә төштө. – Ҡунаҡ алдында оялыр инегеҙ әҙерәк. Ишетеп ултырҙығыҙ, ул ике вариант тәҡдим итте, һәр ҡайһыһын яҡшылап аңлатты. Нимәһе аңлашылмай һуң? – Хаким күҙҙәрен секерәйтеп залда-

ғыларҙың һәр береһенә тигәндәй ҡарап сыҡты. – Был эште беҙ хакимиәттә лә уйланыҡ, Ауыл хужалығы министрлығында ла ҡарағандар. Орҙом-бәрҙем эшләнгән эш түгел был. Һығымта шул: ерҙәрегеҙҙе һатыу һеҙҙең өсөн күпкә отошло. Быны баҫыуҙарығыҙҙы бөгөнгө ҡарау тағы раҫланы. Ҡоро бушҡа эшләмәйһегеҙ, был бер булһа, икенсенән, колхозығыҙ баҫыуҙары мәңгегә һатылмай, биреп кенә торола – ваҡыт үтеү менән, кире ҡайтасаҡһығыҙ. Ә һин, Фәйзулла Сәғитович, тарихҡа төшөп, кешенең ҡотон алма. Заман башҡа – заң башҡа. Борон бөтәһе лә ер өсөн һуғышҡан, бер башҡорт ҡына түгел. Кем күберәк ҡан түккән, тип хәҙер үлсәп-сағыштырып ултырайыҡмы? Ғөмүмән, мин һеҙгә үткәндәргә әйләнеп ҡарамаҫҡа кәңәш итер инем. Үткәндәргә – салауат, беҙгә бөгөнгөбөҙ ҡәҙерле, бөгөнгө һәм киләсәк хаҡында уйларға кәрәк. – Хаким еңеүсе ҡиәфәтендә тәүҙә министр урынбаҫарына, унан Фәйзулла ҡартҡа ҡарап алды, шунан ҡарашын йәнә залға төбәне. – Уйлағыҙ, риза булмаһағыҙ, һатып алыусының икенсе районға китеүе бар, мин һеҙгә ғүмер эсендә бер килә торған тарихи мәлде ҡулдан ысҡындырмаҫҡа кәңәш итәм. Кемдеке – шуныҡы! – Уҫлаптай ус йәнә шап итеп өҫтәлгә ятты.

Хакимды бүлдермәй генә тыңлаған халыҡ, теге хәбәрен ослау менән, ҡапыл йәнә шаулашырға, бер-береһен бүлдереп үҙҙәренекен иҫбатларға тотондо.

– Бындай бәхет бүтән килмәйәсәк, китәбеҙ, нишләп китмәй, ти? Тиреҫ еҫкәп, батҡаҡ кисеп ғүмер үтте бит инде былай ҙа.

– Ағай-эне, бизнесмен ниндәй генә бай булһа ла, тотош ауылды ҡалаға күсерә алмай. Унда фатирҙың күпме торғанын беләһегеҙме? Теге кемдең малайы, йәй отпускыға ҡайтҡанында, Өфөлә бер бүлмәле квартир өс йөҙ мең тора, тип һөйләне. Беҙҙең Һыбайҙа нисә өй? Ике йөҙҙән ашыу. Һәр өйҙә иң кәм тигәндә лә дүртәр-бишәр кеше, шулаймы? Тимәк, һәр ғаиләгә өсәр-дүртәр бүлмәле фатир кәрәк. Өс бүлмәнән генә һалабыҙ ҙа шуны өскә, йәғни өс йөҙ мең һумға ҡабатлайбыҙ. Туғыҙ йөҙ мең һум килеп сығамы? Был бер квартир хаҡы. Хәҙер шуны ике йөҙгә, йәғни ауылдағы йорттар һанына ҡабатлайыҡ. Йөҙ һикһән миллион һум. Шул аҡса бармы бизнесмен кеҫәһендә? Бумажнигын күрһәткәне юҡ әле. Ғөмүмән, уның кем икәне беҙгә ҡараңғы. Мин бындай тәкдим индерәм: ул беҙгә үҙенең килеме тураһында справка алып килһен. Декларация тиҙәрме әле? Беҙ белмәйбеҙ, бәлки, ул берәй күҙбәйселер? Ерҙе алыр ҙа аҡсаһын түләмәй ҡасыр. Шунан тот ҡойроғон. Ә яҙын

сәсергә кәрәк. Ауылдан ҡыуырҙар, ҡалала фатир бирмәҫтәр. Йөрөрбөҙ шунан ҡайҙа барырға белмәй. Минең иң ҡурҡҡаным ошо, ағай-эне.

Фәйзулла ҡарт ярһып-ярһып һөйләне, сөнки ауылдаштарының күбеһе ҡалаға күсеү яғын ҡайырғанын самалай ине.

– Аб-ба, шулай уҡҡа барып баҫа икән дә! Был ҡытай яман аҡсалы булып сыға түгелме? – тип телен шартлатты йәшерәктәрҙән берәү.

– Барыбер ҙә шикләндерә, – тине икенсеһе. – Бында нимәлер нечисто, шул ҡәҙәре аҡса түгеп, беҙҙең ерҙәрҙә нимә ҡылырға самалай икән һуң? Алтын-көмөш йә нефть ятҡылығы барлығын белеп кенә килмәһә.

– Әллә юлын баҫабыҙмы был байҙың?

– Шымыраҡ, йә ишетеп ҡалыр. Халыҡ-ара ғауға сығыр...

– Мин Хаким менән министр урынбаҫарының беҙҙең ерҙәрҙе һаттырырға тырышҡандарын һис аңлай алмайым. Килмешәк түгелдәр, ә тызрайып тороп өгөтләйҙәр.

– Ришүәт төрлө сүрәткә лә индерә шул.

Хаким яңынан ҡалҡынып, залдағы шау-шыуҙы тыйырға кереште:

– Иптәштәр, йәгеҙ берәмләп. Трибуна бар, сығып һөйләгеҙ. Бында ике фекер, кем ҡайһы яҡты яҡлай? Һүҙ алығыҙ. Йә, кем беренсе?

Зал шып-шым булды. Ҙур түрәләр алдында сәхнәгә менеп һөйләргә береһененең дә ҡыйыулығы етмәй ине. Бер-береһенә ҡараштылар, давай, һин, давай, үҙең, тип өгөтләштеләр, шунан эш барыбер ҙә әлеге лә баяғы колхоздың элекке рәйесе Фәйзулла Сәғитовичҡа килеп терәлде. Ул, мин һөйләйем, тип ҡул күтәреп маташманы, урынынан ҡалҡынды ла ҡабаланмай ғына сәхнәгә күтәрелде һәм Хакимдың һүҙ биргәнен дә көтмәй һөйләй ҙә башланы:

– Ауылдаштар, ағай-эне, әйткәнемсә, бында мәсьәлә ифрат ҡатмарлы, шуға төптән уйлайыҡ, һуңынан үкенергә тура килмәһен. Әгәр беҙ бөгөн ошо аҙымды яһаһаҡ, иртәгә терһәкте тешләрҙәй буласаҡбыҙ. Эйе, ҡала тормошоноң еңеллектәре күп: утын-бесән әҙерләйһе юҡ, мал ҡарайһы юҡ. Әммә әҙәм балаһы бөгөнгө көн менән генә көн итә алмай, ул иртәгеһен дә уйларға бурыслы. Ә иртәгеһе көн – беҙҙең балалар, ейәндәр. Беҙ уларҙы ерҙән айырабыҙ, телдән яҙҙырабыҙ. Телдән яҙҙыңмы – милләт бөттө тигән һүҙ. Башҡорт әүәл-әүәлдән ергә йәбешеп ятҡан халыҡ, күпме яу килеп тә, Уралдан ҡуҙғата алмағандар. Тап

ошо илһөйәрлек арҡаһында ғына беҙ үҙебеҙҙе милләт булараҡ һаҡлай алғанбыҙ. Тартып ала алмағас, күпме килмешәк еребеҙҙе сәйгә, шәкәргә һатып алған, таҫма телләнеп, араға кергән, ошо әләктерә алған ерҙәрен киңәйткән. Шул бер ҡатлылыҡ арҡаһында бит инде республикабыҙҙа бөгөн һан яғынан өсөнсө урынға ҡалдыҡ. Әгәр ҙә беҙ еребеҙҙе һаман да таратып ултырһаҡ, башҡорт тигән халыҡ бөтәсәк, шунан, республикала аҫабалар юҡ бит, тип Башҡортостандың исемен дә үҙгәртәсәктәр. Был – бер. Икенсенән, ете диңгеҙ кисеп килгән бизнесмен әфәнде ниңә тап беҙҙең районға, тап беҙҙең колхозға күҙ терәгән һуң? Республикала бүтән район юҡмы ла бүтән колхоз юҡмы? Сәбәбе – «Алға»ның артта һөйрәлеүендә генә түгел, моғайын да, бизнесмендың башҡаларға теше үтмәүҙә, уларҙың һатмайбыҙ тип ҡаты тороуында, шулай уҡ беҙҙең район хакимиәте башлығының, рәйесебеҙҙең йомшаҡлығында. Өлгөрмәй ҡалырбыҙ, тип ҡурҡаһығыҙмы? Өлгөрөрбөҙ, ваҡыты еткәс, беҙҙән һорап та тормай тартып аласаҡтар. Бәләкәй генә Башҡортостанды былай ҙа яйы сыҡҡан һайын өтәҫләргә генә торалар. Ошо бизнесменға еребеҙҙе һатайыҡ, иртәгә икенсе ҡытай, ҡытай булмаһа, япон, немец, француз «Еҙем», «Салауат», «Ағиҙел» ерҙәрен һорап киләсәк. Бирәсәктәр! Бер йылдан район, хатта республика бөттө, сит ил байҙары менән тулды тигән һүҙ. Ҡыҫҡаһы, ерҙән айырылмайыҡ, ағай-эне, айырылдыҡмы – бөттөк. Шулай тип тауыш бирәйек, йыйылыш протоколын Президентҡа ебәрәйек. Ҡамғаҡ урынына ҡыуып йөрөтәсәктәр, тарихи Ватаныбыҙҙан ҡыуасаҡтар. Бүтән милләттәр һаман ер тип һуғыша, мәҫәлән, Израиль менән Палестина, ә беҙ сит-ятҡа тотторорға ултырабыҙ…

– Оһо-һо, Фәйзулла Сәғитович, целый доклад һөйләп ташланығыҙ, ә! Һеҙҙән бына тигән тарих уҡытыусыһы сығыр ине. – Хаким урынынан тороп мыҫҡыллы ғына шулай тине, йәнәһе, ауыл хужалығы производствоһына китеп яңылышҡанһығыҙ. Үҙе бер министр урынбаҫарына, бер бизнесменға ҡарап алды. Президиумда ултырғандарҙың Фәйзулла ҡарт сығышынан һуң кәйефтәре ҡырылғайны тамам, шуға Хакимдың ҡарауына теләктәшлек белдермәнеләр. Район хакимиәте башлығының саҡ ҡына аҙап ҡалыуынан файҙаланып, элекке рәйес йәнә һүҙ башланы:

– Һәр башҡорт, үҙенең ете быуынын белгән кеүек, милләт тарихын да белергә тейешле. Хәтер юйылдымы, халыҡ маңҡортҡа әүерелә.

– Сығышың ошоноң менән тамаммы? – Хаким ҡабаланып Фәйзулла ҡартты бүлдерҙе. – Давай, пропагандаңды туҡтат, һинең поезд күптән киткән инде, бөгөн – икенсе сәйәсәт, заманға яраҡлаштырылған сәйәсәт, шул иҫәптән милләт, идеология өлкәһендә лә. Бөгөнгө көндә экономика, халыҡтың йәшәү шарттарын, көнкүрешен яҡшыртыу мәсьәләләре беренсе планда тора, күперҙәр һалыу, асфальт түшәү, газ үткәреү, йорттар күтәреү һинең тел, милләт тигән нәмәләреңдән куда важнее. Ас, өйһөҙ, кейемһеҙ кешеләргә тел дә, ер ҙә кәрәкмәй.

– Әгәр ҙә һин әйткән яңы сәйәсәт ябай халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртмай икән, ни бысағыма ул. Һүҙ ҙә юҡ, көнкүрешебеҙ яҡшырырға тейеш, тик мин әйткән төшөнсәләр ҙә онотолмаҫҡа, шул уҡ иҡтисад, социаль үҙгәрештәр менән бер рәттән ҡайғыртылырға тейешле. Культура подождёт, бүтәне подождёт, ти башлаһаҡ, бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ – йөктө күмәкләп эткәндә генә урынынан ҡуҙғала. Перестройка, яңы сәйәсәт, заманса ҡараш, тип кеше күҙенә төтөн өрөргә өйрәнеп алдығыҙ, бына шул лозунгыларҙы үҙегеҙ тормошҡа ашырып ҡарағыҙ, дөрөҫөрәге, тормошҡа ашырыуҙы һеҙ үҙегеҙ, етәкселәр, башлап йөрөргә тейеш, ә һеҙ, производствоны күтәреү, халыҡтың ышанысын яулау, эшкә, колхоз ҡоролошона мөнәсәбәтен үҙгәртеү урынына, иң еңел юлды һайлап, ерҙән ҡотолоу яғын ҡайыраһығыҙ.

Хаким ҡыҙарҙы, бүртенде, ултырғысын шығырлатып артҡа шыуҙырҙы, шулай ҙа тыныслығын юғалтманы, ҡалын кәүҙәһен тура тотоп тора бирҙе.

– Барыһы ла демагогия, Фәйзулла Сәғитович. Һин үҙең дә байтаҡ йылдар етәксе вазифаһында йөрөнөң, нишләп шул саҡта колхозыңда коммунизм төҙөмәнең? Киткәс, тәнҡитләүе еңел, ошо фекерҙәреңде үҙең рәйес саҡта тормошҡа ашырырға ине, шәп булғас.

– Мин эшләгәндә колхоз бөгөнгөгә ҡарағанда байтаҡҡа ҡеүәтлерәк ине. Һинең яҡтан гел генә ҡулға һуғып тороуҙар булмаһа, алға китеш тағы ла ҙурыраҡ булыр ине. Һин уны бик яҡшы беләһең. Бына үҙең сирек быуат районға хужаһың, ә район республикала иң артҡы урындарҙың береһендә һөйрәлә. Күңел биреп, «минеке» тип етәкселек итмәгәнгә шулай ул. Һинең эш стилең, һинең методтарың беҙҙең егеткә лә йоҡто. Әле лә күп нәмә эшләп булыр ине, тик эшләмәйбеҙ. Үҙеңә, поезың күптән китте инде, тип әйтеүсе юҡ. Йүнсел

хужа булһаң, бер ҡарыш ер өсөн талашыр инең, ә һин һатып ултыраһың.

– Ағыуыңды сәсмә, һаман шул рәйеслектән сығарыуҙы ғәфү итә алмайһың.

– Мин уға бер ҡасан да йәбешеп ятманым, осона сыға алмаған эштәрем генә йәл.

Ҡытай бизнесмены борғолана, бер президиумдағыларға, бер Хакимға ҡарап оҙаҡҡа һуҙылған бәхәскә ҡәнәғәтһеҙлек белдерә башланы. Үҙе лә энә өҫтөндә ултырған министр урынбаҫары ҡунаҡтың ризаһыҙлығын шәйләне, Хакимға бер нисә мәртәбә ым-ишара яһаны, тик тегеһе абайламағас, урынынан ҡалҡынырға мәжбүр булды.

– Етте, дискуссиягыҙҙы икәү-ара дауам итерһегеҙ! – тине ҡәтғи генә. – Беҙ бында һеҙҙең бәхәсте тыңларға йыйылманыҡ, ә мөһим мәсьәләне хәл итергә йыйылдыҡ. Башҡаларға ла һүҙ бирегеҙ. Мин икегеҙҙе лә артабан һүҙ алыуҙан тыям.

– Ҡайҙа, мин дә бер-ике һүҙ әйтәйем әле, улайһа, – сөгөлдөрсө Нәғимә ҡул күтәрҙе лә, Хакимдың «трибунаға сығығыҙ» тип өгөтләүенә ҡарамай, урынынан ғына һөйләй башланы. – Фәйзулла ағай бик хаҡ әйтә, ошо тәпәй баҫҡан еребеҙҙе һатһаҡ, бер нәмәһеҙ ҡалабыҙ, тип. Ҡалаға барҙың да йәшәй башланың түгел әле, ҡала беҙҙең тормошто тамырынан үҙгәртәсәк. Өйрәнеп-күнегеп китеүҙәре ауыр буласаҡ. Эш табыуы, балаларҙың уҡыуы, пенсияны күсереү мәсьәләләре. Иң насары – егерме биш йылдан әллә ҡайтаралар, әллә юҡ. Өйөбөҙ сереп бөткән була, килгән халыҡ әллә нимә төҙөп ултыртып та ҡуйыр әле, етмәһә, һүҙем шул: ҡуҙғалмайыҡ!

– Ярай, аңлашылды, – Хаким ҡабаланып сөгөлдөрсөнө өҙҙө. – Тағы кем теләй фекер әйтергә? Бөтәгеҙ ҙә ауылда ҡалыу яғындамы ни? Ә йәштәр ни уйлай? Улар ҙа цивилизацияға барыуҙан добровольно баш тартамы?

– Мин, мәҫәлән, китеү яғында, – тине бер егет, Хакимдың шул һүҙен генә көткәндәй. – Йәштәрҙең күпселеге минең ише уйлай. Сөнки ауылда эш юҡ, эше булһа ла, аҡсаһы юҡ. Беҙ кистәрен ҡайҙа барырға белмәй ҡаңғырабыҙ: клуб онотҡанда бер асыла, кинолар күрһәтелмәй, уйындар ойоштоҙолмай. Йәштәр эсә, һуғыша, тиһегеҙ, ана шул мәҙәниәт усаҡтары булмағандан бит ул. Ә ҡалала бөтәһе лә бар. Ергә йәбешеп ятыу – иҫкелек ҡалдығы. Башҡа милләттәр ҡалала йәшәргә ынтыла. Шул уҡ рус, йәһүд, татар, мәҫәлән. Беҙ уларҙан кәмме ни?

Егет шулай тип әйтеп бөтөп урынына ултырыуы булды, ҡәнәғәтлеге йөҙөнә сыҡҡан Хаким еңел генә урынынан ҡалҡынып, ҡулын өҫкә сөйҙө:

– Во-о! Заман талабын аңлаған берәү табылды, ниһайәт! Энекәш мәсьәләне дөрөҫ самалай, ауыл тормошо ысынлап та ауыр. Со временем ауылдар бөтәсәк, эш шуға бара. Балыҡ тәрәнде эҙләгән һымаҡ, кеше лә еңелерәкте эҙләй, бүтән милләттәрҙән ҡалышырға ярамай, ысынлап та, Фәйзулла Сәғитович әйткән милләт, тел мәсьәләһе лә ҡалала хәл ителә, Һыбайҙа түгел.

Йәнә бер нисә кеше һөйләне, араларында ерҙәрҙе һатып ҡалаға китеүҙе хуп күргәндәр ҙә, ҡуҙғалмаҫҡа өндәүселәр ҙә булды. Ҡыҙып китеп, Фәйзулла Сәғитович урынынан ғына һүҙ ҡыҫтырҙы, уҡытыусы Рәсүл, сөгөлдөрсө Нәғимә уны яҡлап сыҡты, уларға ҡаршы Һыбайҙың йәшерәк быуыны дауылланды. «Алға» колхозы колхозсыларының ер һатыу мәсьәләһен хәл иткән дөйөм йыйылышы шулай бер шаулап, бер тынып байтаҡ дауам итте, оҙаҡҡа һуҙылыуҙан халыҡ та ялҡа төштө, арыны, сәхнәләгеләр ҙә йонсоно. Хаким, һөйләүселәр булмаһа, ошоноң менән фекер алышыуҙы туҡтатабыҙ, әммә йыйылыш бөтмәне әле, тине. Давай, тип кемгәлер ишара яһауы булды, хакимиәттең сос управляющийы, рәттәр буйлап йөрөп, алдан уҡ әҙерләнгән ниндәйҙер ҡағыҙҙарға халыҡтан ҡултамғалар йыйырға ла тотондо. Аптырашып ҡалды халыҡ, быны һис көтмәгәйне. Нишләһен, бер-береһенә ҡараштылар ҙа ҡуйҙылар инде. Дөрөҫ, ҡаршылашҡандар ҙа, тауыш бирмәнек, ҡул күтәрттермәнегеҙ, ниңә бөгөн, һуңғараҡ булмаймы ни, уйлашайыҡ, тип һораусылар ҙа табылды, әммә Фәйзулла ҡарттан, сөгөлдөрсө Нәғимәнән башҡалары ташҡа баҫылған фамилияһы эргәһенә үҙенең ҡултамғаһын ҡуйырға мәжбүр булды. Арыған, баштары ҡайнаған һыбайҙар шулай итеп үҙҙәренә хөкөм ҡарары үҙҙәре сығарып ҡуйҙы. Фәйзулла ҡарт ауылдаштарының был хыянатсыл ҡылығын иҫе китеп күҙәтте, бер нисә кешегә, нишләйһең ул, аҡылыңа кил, тип әсенеп әйтеп тә ҡараны, тик береһен дә туҡтата алманы. Шунан барыһына ла ҡул һелтәне лә, күҙҙәре йәшкә тулып, бәүелә-сайҡала клубтан сыҡты.

Йәнә ике көндән дүрт кеше (үҙҙәренең бригадиры, рус, ҡытай, таныш түгел йәнә бер башҡорт) өй беренсә йөрөп халыҡ, мал-тыуар иҫәбен алды, ҡура-ҡаралтыларҙың хаҡын билдәләне, йәшелсә, бәрәңге баҡсаһын, ихата майҙанын

үлсәне, хужаларҙың китәме-юҡмы икәнен белеште. Хәйер, уныһын әллә ни ныҡышып та торманылар – үҙҙәре ҡул ҡуйған килешеүҙә, Һыбай тулыһы менән ҡалаға күсә, тип әйтелгәйне. Шуға, китәһегеҙ, тинеләр ҙә ҡуйҙылар.

Бер аҙнанан эре-эре машиналарҙа (уларҙың колхозында булһа икән ул техника!) әйберҙәрен тейәп ҡалаға күсерә лә башланылар. Бындай етеҙлекте ғүмерҙәрендә лә күрмәгән кешеләр аһ итте. Ҡул ҡуйып та кире уйлаусыларға килешеүҙәге ҡултамғаларын күрһәттеләр, унан һуң да талашҡандарҙы милиция ярҙамында өйҙәренән ҡыуҙылар. Фәйзулла ҡарт, бейек таҡта ҡапҡаһын бикләп, индермәҫкә маташҡайны ла, оло баҡса яҡлап кереп, саҡ туҡмамай, машиналарына төрткөсләп индерҙеләр.

Тәүге ҡар төшкәнсе ике йөҙҙән ашыу ғаилә, йорт-ҡураһынан, ҙур ырҙын табағынан, техника ремонтлау паркынан, урта мәктәбенән, магазинынан, һарыҡ һәм ат фермаларынан айырып, ҡалалағы ун ике ҡатлы, алты подъезлы өр-яңы өйгә күсерелгәйне инде. Ә сөгөлдөр баҫыуында ЗИЛ машинаһы өҫтөнә һалам өйөлгән көйө ултырып ҡалды – һөйрәтергә тәки трактор таба алманылар. Хәйер, уны юллап йөрөүсе лә булманы – ҡалаға күсеү һымаҡ ҙур эш мәлендә колхоз машинаһы ҡайғыһымы?..

## 2

Элекке ауылдаштарға ҡалала бөтәһе лә яңы: крандан ағып торған эҫе һыу ҙа, өй эсендәге бәҙрәф тә, бешеренер-төшөрөнөр электр плитәһе лә. Утын керетәһе юҡ, сүп-сарҙы ла торба буйлап ҡына ырғыталар, магазиндары ла эргәлә. Аптырашалар, иҫтәре китә ҡала тормошоноң еңеллегенә. Ерҙәрен алып, үҙҙәрен бында күсергән ҡытай кешеһенә рәхмәттәр уҡыйҙар, ҡарттар, ул Алла бәндәһе ниңә элегерәк килмәне икән, тип үкенешә. Тормош шулай булалыр, тип йәшәгәндәр икән, дөрөҫөрәге, йәшәмәгәндәр, көн иткәндәр, ә ысын тормош ҡалала булған.

Шулай ҙа йәшәп китеүҙәре еңел башланманы. Бала-сағаны яслегә, мәктәпкә урынлаштырыуҙары үҙе бер оло мәшәҡәт ине. Уларҙы төрлө юлдар менән таратып бөткәйнеләр, үҙҙәренә, бигерәк тә ир-атҡа, эш табыу мәсьәләһе килеп баҫты. Уларҙы бында бер кем дә көтөп тормаған, ҡайҙа барһалар ҙа, урын юҡ, тип боралар ҙа сығаралар. Әммә һыбайҙар – әрһеҙ халыҡ, бер

ишектән ҡыуһалар, икенсеһен шаҡыйҙар, иғландар уҡыйҙар: колхозда шофёр, тракторист, бухгалтер, механик, инженер булып йөрөгәндәр, ҡулына эш ҡоралы тота белгәндәр, уҡытыусылар, медиктар башҡаларға ҡарағанда тиҙерәк урынлашты. Колхоз рәйесе, министр урынбаҫары ярҙамындалыр инде – Ауыл хужалығы министрлығына, баш агроном Әкрәм – Ботаника баҡсаһына. Белдекле Рәсүл ҡала башҡорт гимназияһына эшкә керҙе, бригадир Мансур вахта методы менән Себер йөрөргә тотондо. Ә бына Фәйзулла ҡарт йөрөп ҡараһа ла, эш таба алманы, сөгөлдөрсө Нәғимә, пенсияға ауылда сығырға өлгөрмәгәнлектән, яңы йылға тиклем район үҙәге менән ҡала араһын тапаны ла ҡуйҙы. Хәрби комиссариатҡа иҫәпкә кергән егеттәргә оҙаҡламай ҡаралыуға йәки армияға алыныуға повесткалар килә башланы. Һыбай ҡыҙҙарына ҡала малайҙары күҙ һалды, Һыбай егеттәре ҡала ҡыҙҙарын оҙатты. Шулай итеп, «Алға» колхозы быға тиклем үҙенә ят булған оло ҡала донъяһына сумды ла уның тормошо менән йәшәргә тотондо.

Тәүҙә бер-береһенә нык йөрөнөләр: тегеһе кәрәк, быныһы кәрәк... Көнкүрештәре бер сама юлға һалынғас, бик кермәй башланылар – һәр кем үҙ хәстәренә сумды.

Ғинуар, февраль айҙары үткәс, аралашыу бер аҙ йәнләнә төштө. Йә яҙғы ҡояш имшеткән һауаны еҫкәп өй алдына йыйылышалар, йә берәйһенең фатирына керәләр. Бындай саҡтарҙа ир-ат ҡарашын ергә сәнсеп тәмәке көйрәтә, ҡатын-ҡыҙ хәтирәләргә, иҫтәлектәргә бирелә.

Һөйләшеү, иҫкә алыу, һағыныу тойғолары, бәләкәй ҡар йомарлағы тау башынан ысҡынып аҫҡа тәгәрәгән һайын ҙурайған һымаҡ, ауылдаштарҙы яйлап етди ҡәнәғәтһеҙлек юҫығына төшөрҙө. Кәңәш-төңәш ҡора торғас, шундай ҡарарға килделәр: ауылды барып күрергә кәрәк. Тәүҙә колхоз рәйесе менән бригадир Мансурҙы – ни тиһәң дә түрәләр – Фәйзулла ҡарт әйткәнсә, разведкаға ебәрергә булдылар.

«Разведчиктар» иртәгеһенә кис кенә әйләнеп ҡайтты. Малай-шалайҙы ебәреп, халыҡты ишек алдына йыйҙылар ҙа ауылдың... юҡлығын әйттеләр. Кешеләр телһеҙ ҡалды, был туҙға яҙмаған хәбәрҙең мәғәнәһе баштарына барып етмәне. Ауыҙҙарын асып бер рәйескә, бер бригадирға текәлделәр. Шунан быуаны йырған ташҡын шикелле ярһыулы хистәр, һүҙҙәр, һорауҙар тулҡыны ике меҫкенде күмеп китте...

– Күҙҙәренә күренгәндер ул. Икенсе берәй ҡалаға барып сыҡҡандарҙыр. Шул арала нисек ҡала төҙөмәк кәрәк?

– Ышанмаһағыҙ, үҙегеҙ барып ҡарағыҙ! – Бригадир Мансур үпкәләгәндәй итте. – Тәүҙә беҙ ҙә аптырап, ышанмай торҙоҡ, шунан әйләнә-тирәне ҡарап сыҡтыҡ. Бөтәһе лә ҡәҙимгесә. Бейек күпер, Оҙонкүл, Сәйет тауы, Мәкәрәй яланы, йылғабыҙ, зыярат...

– Ғәжәп. Шул арала... Ә халыҡ бармы һуң ҡалала?

– Бәй, ҡала тулы кеше!

– Башҡортмо?

– Ҡайҙан башҡорт? Ҡытайҙар!

– Ҡытай-город тинем дәһә! – тип һүҙ ҡыҫтырҙы Белдекле.

– Ызначит, үҙҙәренән килтереп тултырғандар.

– Шулай инде, бер ҡала ҡытайҙы ҡайҙан йыяһың.

– Улар беҙҙең һымаҡ ялҡау түгел, көнө-төнө эшләй. Донъяла иң егәрле халыҡ – ҡытай, тиҙәр бит.

– Тәүҙә япон, шунан ҡытай, – тине Белдекле.

Йәнә аптыраштылар, йөҙҙәргә уйсанлыҡ ятты.

Кискә тиклем һөйләшкәс, шундай ҡарарға килделәр: ауылға күмәкләп барырға. Бер автобус булып. Үҙҙәрен алдаған бизнесменды табырҙар ҙа, килешеүҙән баш тартып, халыҡты киренән ауылға ҡайтарыуҙы талап итерҙәр. Килеп сыҡмай икән, бер-ике кешене Өфөгә, Ауыл хужалығы министрына юлландырырҙар. Ул үҙенең урынбаҫары ниндәй эштәр ҡылып йөрөгәнен беләме икән? Белмәһә, белһен һәм «Алға» ерҙәрен һыбайҙарға кире ҡайтарып биреү хәстәрен күрһен. Былай ҙа булмаһа – Президент. Уныһы һуңғы сара. Кем-кем, үҙҙәре һайлап ҡуйған кеше ярҙам ҡулы һуҙмай ҡалмаҫ.

Һәм бына бер көндө элекке ауылдаштар, хәҙер ярты йылға яҡын инде ҡала кешеләре, автобусҡа тейәлешеп тыуған яҡтарына ҡарай юл тотто.

Апрель уртаһы. Ер йөҙөнә шаулап-гөрләп яҙ килә. Юл ҡарҙан әрселгән, тик оло-оло күләүектәр йәйелгән, ҡалҡыу урындар алас-йолас булып ята. Ә һауа! Дымлы, танау ҡытыҡлағыс тәмле һәм тәнгә, йәнгә яҡын таныш еҫтәр менән аңҡый. Күк көмбәҙе бейек һәм йыуылған кеүек таҙа. Тәбиғәттәге үҙгәрештәр тыуған төбәктәренә ҡайтып барған кешеләр күңелен болоҡһота, һағыныу хистәрен тулата. Һәр ҡайһыһы үҙ алдына, ошо илаһи матурлыҡты, ошо киңлек-иркенлекте ҡала тарлығына, дүрт таш стенаға нисек алмаштырҙыҡ икән, тип аптырай. Аптырай һәм, мотлаҡ кире ҡайтырға кәрәк, тип уйлай. Автобусҡа шаулашып ултырһалар, таныш ерҙәргә яҡынайған һайын, уйсаныраҡ була барҙылар, һөйләшеүҙәре лә өҙөк-йыр-

тыҡ, иғтибарһыҙ. Моғайын, ауылдарында ла яҙҙыр, ихаталарындағы ҡар иреп бөткәндер, лапаҫ арттарындағы тиреҫ өйөмдәре боҫорайҙыр, бәрәңге баҡсалары асылғандыр, ҡыйыҡ баштарынан тамсы тамалыр. Рәйес менән бригадирҙары, ауыл юҡ, тиһә лә, береһе лә ышанмай быға – ике йөҙҙән ашыу йорто булған Һыбайҙың ер йөҙөнән юғалыуы башҡа һыймаҫлыҡ хәл.

Ә «Алға» ерҙәрендә – бөтөнләй яҙғы донъя. Ҡар иреп бөткән, юлдар ҡоп-ҡоро, тирә-яҡ әскелтем бөрө еҫенә тулған, хатта көн дә йылыраҡ һымаҡ. Иң ғәжәбе – сәсеүгә төшкәндәр! Арҡа тип йөрөтөлгән һыртта өс-дүрт сәскес таҡҡан бер нисә көслө трактор саң borҡотоп иген сәсә. Автобустағыларҙың күҙҙәре шар булды. Был ваҡытта, хатта яҙ бик иртә килгән йылдарҙа ла, ҡыйыулыҡтары етмәй торғайны һыбайҙарҙың, ҡурҡа инеләр, ә былар...

Автобус оло юлға сыҡты. Эстәгеләрҙең күбеһе, түҙмәй, урындарынан ҡалҡынды – бына-бына ауылдары, йылғалары, уның ярындағы бейек тирәктәр, таллыҡ, саҡ ҡына арыраҡ быуа күренәсәк. Бәләкәй генә ҡалҡыулыҡты артылғайнылар, улар урынына... ҡатлы-ҡатлы таш йорттар, завод торбалары, торна кеүек оҙон муйынлы крандар, урамдарында автобустар, трамвайҙар, троллейбустар йүгерешкән ҡала пәйҙә булды ла ҡуйҙы! Ҡытай-город! Халыҡ ауыҙын асып ҡатты ла ҡалды. Рәйес менән бригадир алып ҡайтҡан ғибрәт хәбәр дөрөҫкә сыҡты. Күҙҙәренә күренәме әллә, әллә «разведчиктар» һымаҡ үҙҙәре лә икенсе тарафтарға килеп юлыҡтылармы? Юҡ, шул уҡ ерҙәр, шул уҡ тирәк-таллыҡтар, юл, әле генә кергән зыяраттары ла үҙҙәренеке...

Беренсе булып бригадир Мансур телгә килде:

– Әйттем бит, ауыл юҡ, тип, ә һеҙ ышанманығыҙ. – Һүҙенең дөрөҫкә сығыуына ул, гүйә, ҡәнәғәт ине.

– Йә Хоҙай...

– Был ниткән эш, ә?

– Ярты йыл эсендә был ҡәҙәрене нисек төҙөмәк кәрәк? Күктән төшкән берәй төрлө НЛО түгелме икән?

– Клубта әйтте бит, беҙҙең менталитет башҡа, тип. – Быныһы Белдекле һүҙе. – Бер ҙә НЛО түгел, үҙҙәре төҙөгән.

– Ярай, әйҙә, барайыҡ, – тип ауылдаштарының аһ-зарҙарын бүлдерҙе Фәйзулла ҡарт. – Тел сарлауҙан фәтүә булмаҫ.

Халыҡ кире урындарына ултырышҡас, автобус ҡуҙғалып китте, һә тигәнсе, үҙҙәре әйткәнсә, Ҡытай-городҡа барып та етте. Ҡайһы яҡҡа, тип һораны шофёр.

– Ҡайҙан беләйем, мин дә бит һинең һымаҡ беренсе тапҡыр. Әйҙә, бынау урам буйлап барып ҡарайыҡ, центрға илтер, моғайын да. Беҙгә ҡала хакимиәте кәрәк.

Юлдар ялтырап ята, тротуарҙар асфальт менән ҡапланған, һәр ҡайҙа – сәскә, йәшел газон, ваҡ ҡына ҡыуаҡтар. Иң ғәжәбе шул: ошо йыйнаҡ, таҙа урамдар буйлап бәләкәй буйлы, етеҙ хәрәкәтле, бер иш кейемле, теремек ҡытайҙар йөрөп ята! Уларҙың ауылында ғүмерҙә күрмәгән сит халыҡ. Һарғылт йөҙлө, ҡыҫыҡ күҙле, игеҙәктәр ише бер-береһенә оҡшаған ҡытайҙар. Исмаһам, бер башҡорт осраһасы! Хатта урыҫы ла күренмәй күңел өсөн. Тимәк, ысынлап та, бизнесмен үҙҙәренекеләрҙе килтереп тултырған. Хаким, министр урынбаҫары, арендаға ғына бирәбеҙ, ерҙәрегеҙҙе эшкәртер, продукция тапшырыр, һалымын түләр, тигән булды, ә ҡала тураһында бөтөнләй һүҙ алып барманы. Егерме биш йылдан уларҙы бынан нисек ҡыуаһың? Төҙөнөк, юҡ ерҙән бар иттек, тип ҡырталашасаҡтар. Ғәскәр генә алып килмәһәң? Ул саҡында оло һуғыш ҡубасаҡ, ҡан ҡойоласаҡ...

Ҙур ғына майҙанға килеп сыҡтылар. Майҙандың ҡап уртаһында – ҡыйыҡ-кәрниздәре өҫкә ҡайтарылып эшләнгән мөһабәт бина. Һоро төҫтә үҙе. Тәҙрәләре эреле-ваҡлы һәм ниңәлер бер рәүештә түгел. Бина алдында ят ҡыуаҡтар үҫә, төрлө-төрлө сәскәләр күҙҙең яуын ала. Һәр нәмә үҙ урынында – тәртип белгән, матурлыҡты, теүәллекте аңлаған кеше ҡулы тейгәне күренеп тора.

– Беҙ – ошо Ҡытай-город урынында булған элекке Һыбай ауылы халҡы, колхозыбыҙ ерҙәрен һатып алған Чжан Син әфәнде менән һөйләшергә теләйбеҙ, – тип яуапланы Фәйзулла ҡарт.

Һаҡсы ҡарттың теләген телефон аша үҙ телендә кемгәлер еткерҙе, һәм бер-ике минут самаһынан шулай уҡ бәләкәй, йор бәрәү сығып, төркөм алдына килеп тә баҫты. Баҫты ла, ихлас йылмайып, күкрәгенә ҡулын ҡуйып иҫәнләште. Ләкин был Чжан Син түгел ине.

– Чжан Син әфәнде һеҙгә нимәгә кәрәк?

– Беҙ ул күсергән ҡалала йәшәргә риза түгел, беҙ бында ҡайтырға теләйбеҙ. Шуны әйтергә, талап итергә килдек.

– Һеҙ йәшәгән ауыл юҡ бит хәҙер, бында нисек ҡайтаһығыҙ?

– Ошо ҡалаға күсерһен.

– Белеүемсә, килешеүҙә ул пункт юҡ. Һеҙ теләһә ҡайҙа күсә алаһығыҙ, республикағыҙ ҙур, тик бында түгел. Хәҙер был – Ҡытай Халыҡ Республикаһы территорияһы.

– Бер республика эсендә икенсе ил территорияһы буламы ни? Был ерҙәр ғүмер баҡый башҡорт ере булған.

– Элек булғандыр, хәҙер беҙҙеке. Емерек ауылығыҙ урынына ниндәй ҡала төҙөнөк, үҙегеҙ әйтмешләй, Ҡытай-город. Бысраҡ юлдарығыҙға асфальт түшәнек, ашламаның нимә икәнен белмәгән баҫыуҙарығыҙға көҙҙән минераль, органик ашлама индерҙек – ташландыҡ ятҡан баҫыуҙарығыҙҙан быйыл һеҙҙең ише ун бер түгел, илле бер центнер иген аласаҡбыҙ, киләһе йыл – алтмыш берҙе, – маҡтансыҡ ҡытай телен шартлатты, шунан, яуап та көтмәй, хушлашыу билдәһе итеп саҡ ҡына башын эйҙе лә, ҡырт ҡына боролоп, китеп тә барҙы. Уға тәүге сыҡҡаны ла эйәрҙе.

Һыбай ауылыныҡыларға автобустарына кире боролоуҙан башҡа сара ҡалманы.

### Фонохрестоматия

Актёрҙар башҡарыуында өҙөк тыңлағыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Өҙөктө уҡығыҙ, йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
**2.** Ҡытай бизнесмены Һыбай ауылы кешеләренә ниндәй шарттар ҡуя?
**3.** Хакимға тулы характеристика бирегеҙ, фекерегеҙҙе текстан миҫалдар менән дәлилләгеҙ.
**4.** Фәйзулла Сәғитович менән сөгөлдөрсө Нәғимәне ысын башҡорт тип әйтеп буламы?
**5.** Хакимдың телмәренә иғтибар итегеҙ. Уның русса һүҙҙәр ҡушып һөйләүе характерының ниндәй һыҙаттарын аса?
**6.** Ни өсөн министр урынбаҫары менән Хаким ерҙе ҡытайҙарға һатыу яғында? Маҡсатын аңлатығыҙ.
**7.** Һыбай ауылы халҡының ҡалала йәшәп китеүе тураһында һөйләгеҙ һәм баһалағыҙ.
**8.** Яҙ көнө халыҡ ниндәй ҡарарға килә? Ни өсөн?
**9.** Һыбай ауылы халҡының Ҡытай-город вәкиле менән осрашыуы ниндәй һөҙөмтә бирә? Ошо осрашыуҙан һуң халыҡҡа нимә аңлашыла?
**10.** Ер һатыуға фекерегеҙҙе әйтегеҙ. Һыбай ауылы халҡы урынында булһағыҙ, ерегеҙҙе һатыр инегеҙме?

### Проект

Ер һатыуҙың эҙемтәләре нимәгә килтерәсәк?



Хәсән
# НАЗАР
(1942)

Башҡортостандың халыҡ шағиры Хәсән Мөҙәрис улы Назаров Ейәнсура районы Таулыҡай ауылында тыуған. Ситтән тороп Мәскәүҙә М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында уҡый. Бөрйән районының «Таң» гәзитендә, республика ваҡытлы матбуғатында эшләй, «Ағиҙел» журналының шиғриәт һәм сәнғәт бүлеге мөдире вазифаһын башҡара.

«Бөркөттәр төйәге» тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы 1971 йылда донъя күрҙе. «Шоңҡар сөйәм», «Заман заңы», «Асманға ашыу», «Ғүмер һәм дәүер» һ. б. китаптары баҫылып сыҡты.

Х. Назар шиғриәттә тәржемә оҫтаһы булараҡ та билдәле. У. Шекспир, А. Пушкин, В. Брюсов, Р. Ғамзатов һәм башҡа шағирҙарҙың әҫәрҙәрен башҡортсаға тәржемә итте.

Хәсән Назар – Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Зәйнәб Биишева, Рәми Ғарипов исемендәге әҙәби премиялар лауреаты. Шулай уҡ республика Президенты указы менән 2003 йылда «Башҡортостан Республикаһында күрһәткән фиҙаҡәр хеҙмәттәре өсөн» билдәһе менән бүләкләнде.

## ҒӘЗИЗ ЕРЕМ

Күк үләнгә күмелә түмәләстәр,
Сыҡты микән әллә әтмәкәй?
Сабый саҡта йыуа, әтмәкәйҙе
Беҙ тиң күрә инек икмәккә.

Йортта ниғмәт үтә наҡыҫ саҡта,
Әтмәкәй ҙә бирҙе еңеллек.
(Ә кешегә ниндәй ризыҡ та бит –
Юҡ, туйымлыҡ түгел – күңеллек).

Етем ҡалған һалдат йорттарында
Үҙәк ялғатманы һуң ниҙәр!
Онотолормо тәғәм ризыҡ өсөн
Билде бишкә бөккән инәйҙәр?!

Арбап торҙо беҙҙе ҡашлаҡтарға
Әсе оҫҡон, кәзә һаҡалы...
Беҙ аяҡҡа баҫтыҡ ул йылдарҙа
Ана шулай ерҙән һут алып.

Бала сағым яҙҙы йөрәгемә:
Ер – ҡәҙерле, ғәзиз, ер – изге!
Ә йыһан ул – Ерҙең бөйөклөгөн
Сағылдыра торған бер көҙгө.

Йәншишмәнең ерҙән урғылыуын
Онотorға кем һуң өлгөрҙө?
Ҡаһармандар ята ҡуйынында,
Һыуытмаҫҡа тиеп был ерҙе...

Ҡөҙрәтле ер! – Һәр ҡарышың һинең
Эйә икән оло хикмәткә,
Һин ҡарайһың кеүек күҙҙәремә,
Ҡулым һуҙған һайын икмәккә.

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шағирҙы нимә борсой? Яуабығыҙҙы текстан миҫалдар менән раҫлағыҙ.

**2.** Яҙ башланыуын белдереп, иң алда шытып сыҡҡан үләндәр хаҡында нимә беләһегеҙ?
**3.** Лирик геройҙың бөгөнгө тормошҡа ҡарашы нимә тураһында һөйләй?

## АҠҠА ТАБЫНЫУ

Ишеткән бар: аҡ йыланды күрһәң,
Йылан тимә, һөт ҡуй алдына.
Ҡабығын һалыр, имеш, – улъя төшөр.
Күңел хатта шуға алдана.

Әй һин, изге ырым! Башҡорт шулай
Ғүмер баҡый аҡҡа табынған.
Яҙмышына уның хаким булыр
«Аҡ батша»лар хатта табылған.

Һөргөн юлдарында һөрлөкһә лә
Ир-егеткәй менән ат башы,
Арбап торған уны аҡыҡ кеүек
Ирәндеккәй тауҙың аҡ ташы.

...Әй һин, донъя!
Аҡһың шулай, пакһың,
Үҙең фани, үҙең ғали һин,
Ҡыйығыңа аҡ күгәрсен ҡунһын,
Таң нурына ҡойоноп ҡағынһын.

Бәпесен биләп ап-аҡ биләүгә,
Аҡтан өҙмәй ғәзиз балаһын,
Аҡ бәхеттәр теләп яна әсә!
Шул иманы уға – Аллаһы.

Тыуыр көндәрем, һеҙ шул имандан
Яҙлыҡмағыҙ, изге һаҡлағыҙ.
...Аҡҡа табынып, ҡулға ҡәләм алдым,
Алдарымда минең – аҡ ҡағыҙ...

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

### Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ

Башҡорттар ни өсөн элек аҡҡа табынғандар тип уйлайһығыҙ?

## Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Ни өсөн шиғырҙа «аҡ» төшөнсәләре йыш ҡулланыла?
**2.** Шиғырҙан башҡорт халыҡ йыры «Азамат» менән ауаздаш юлдарҙы табып, уҡып күрһәтегеҙ.

## ДАУА

Моң ҡеүәтен ерҙә Хаҡ Тәғәлә
Биргәндер ул башлап башҡортҡа.
Әҙәм түгел, хатта таштар миңә
Әйтә алмаç, һин, тип, шапыртма.

Даһилыҡтар, халҡым, йырҙарыңда,
Моңдарыңда рухың. Ойотма.
Ниңә карар кәрәк Ҡоролтайҙан?!
Үҙеңде һин үҙең онотма.

Һин ут йотмаç инең, туған моңдар
Иң ҙур һабаҡ булһа балаңа.
Ауырлыҡҡа барын япһарып, һин
Яҙмышыңдан яҙма, ҡолама.

Ҡанбабалар рухы дауа һиңә,
Үҙеңде һин үҙең һауыҡтыр:
Уралҡайҙы маҡтап бер йырлаһаң,
Күңелдәргә үҙе зауыҡтыр.

Ер йөҙөндә ҡайҙа тағы бындай
Һандуғаслыҡ менән бөркөтлөк?
Рухың алтындарын һаҡла, халҡым,
Ҡыла алмаç бер кем бер этлек.

Урал батыр бөрккән йәншишмәнән
Ҡотайғандай йәшел был ҡырҙар,
Йәҙрә ала алмаç тылсым итеп
Бирелгән бит һиңә был йырҙар.

Әҙәм түгел, хатта таштар миңә
Әйтә алмаç, һин, тип, шапыртма.
Һынар өсөн, бәлки, Хаҡ Тәғәлә
Моң ҡеүәтен биргән башҡортҡа.

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шиғырҙың ҡайһы юлдарында милләт, тел тураһында проблемалар күтәрелә?
**2.** Бөгөнгө көндә ауырлыҡҡа һылтанып, эшләмәйенсә, кәйеф-сафа ҡороп йәшәүселәргә ҡарата һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек?
**3.** Урал батырҙың исеме шиғырҙа нимәгә бәйле иҫкә алына?
**4.** «Һынар өсөн, бәлки, Хаҡ Тәғәлә
Моң ҡеүәтен биргән башҡортҡа» тигән юлдар менән килешәһегеҙме? Фекерегеҙҙе дәлилләгеҙ.



Ринат

# КАМАЛ

(1954)

Ринат Камал (Ринат Әлтәф улы Камалов) Мәсетле районының Дыуан-Мәсетле ауылында тыуған. Ауылындағы урта мәктәптә уҡый, колхозда эшләй, армияла хеҙмәт итә. Башҡорт дәүләт университетын тамамлағас, биш йыл мәктәптә балалар уҡыта, һуңынан Башҡортостан радиоһында, Яҙыусылар союзында, «Ағиҙел» журналында, Башҡортостан «Китап» нәшриәтенең нәфис әҙәбиәт редакцияһында эшләй. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.

Ринат Камал үҙенең әҫәрҙәрендә иғтибарҙы күберәк шәхестең күңел донъяһына, уның рухи хөрләгәнә, милләтенә мөнәсәбәте мәсьәләләренә, ғаилә проблемаларына йүнәлтә. Әҫәрҙәре нескә лиризм, психологик тәрәнлек менән һуғарылған, иғтибар үҙәгендә кеше психологияһын асыу, характерҙар тыуҙырыу маҡсаты тора.

Мәҫәлән, «Таня-Таңһылыу» һәм «Әлфирә» романдарының сюжеты ваҡиғалар үҫеше нигеҙенә түгел, ә тойғо үҫеше нигеҙенә ҡорола. Уның «Бәлә», «Мөхәббәт дошмандары» «Оҙонтал», «Кеше драмаһы» китаптары донъя күрҙе. Һуңғы ваҡытта әҙип социализм шарттарында йәшәгән бер ғаилә тарихы тураһындағы романдар шәлкеме өҫтөндә эшләй. «Ҡотлояр – Бәхтейәрҙәр» исемле был шәлкемдән «Шаңдау», «Талаҡ!» «Сабыр йән», «Әлфирә» һәм «Бала саҡ» романдары баҫылып сыҡты.

## ТАНЯ-ТАҢҺЫЛЫУ

*(Романдан өҙөк)*

### Беренсе бүлек

«Таңһылыуҙар айырылышҡан! Петрик Ишемьярҙа ҡалған, ә Таня Ригаға осҡан!.. Осҡанмы, ҡасҡанмы шунда...»

Был хәбәр мине шаңҡытты. Әлегеләй хәтеремдә, Таңһылыу әхирәтем туй көнөн ашҡынып-осоноп көткәйне. Ҡайһылай бәхетле ине ул көндә! Ике бит алмаһы айҙай балҡый, күҙҙәре осҡонлана. Кәүҙәһе гүйә аҡҡош һыны: аҡ оҙон күлдәге хәс тә аҡ ҡаурыйҙарҙан ғына теҙелгән тиерһең. Үҙе лә әллә ҡайҙа осоп китерҙәй булып талпына. Шул кеше Петригынан айырыла, ҡаса була тиме ни!

Әлбиттә, мин Ишемьярҙағы хәлдәрҙе яҡшылап белеп тә бөтмәйем... Ҡышҡы каникулда, диплом яҙырға тип, йәйгәсә ял алдым. Ул йылда институт тамамланым – Ишемьярға барырға форсат тыуманы. Ишемьяр ҙа, ундағы иптәштәр ҙә, Таңһылыу ҙа ҡалды. Ишемьяр мәктәбе, тәүге эш урыным – үҙ аллы тормошомдоң юл башы.

Хәҙер бөтәһен иҫләһәм, күҙҙәрем йәшләнә, Ишемьяр ҙа, ундағы көндәрем дә, Таңһылыу әхирәтем дә онотторлоҡмо ни!

### 2

Таңһылыу менән Петрик күптән дуҫлашалар. Бер-береһе өсөн өлтөрәп торалар. Ситтән ҡарағанда ла, былар бер-береһе өсөн генә яратылған, тиерһең.

Петрикты колхозсы тип уйламаҫһың. Юҡ, уның, шундай нәзәкәтле ҡыланышлы, ипле тотоношло кешенең, хатта фермала эшләүенә ышанғы ла килмәй. Юҡ, ул крәҫтиән түгел, ҡупшы бер интеллигент затынан. Ул зәңгәр күҙҙәр, ул аҡһыл сәс, киң яңаҡ, яҫы маңлай... Эйәгенең уртаһында ғына өйөртмәле һыу сөмбөлөләй соҡор хасил була. Шәмдәй буй-һынлы. Алдында гүйә ҡойоп ҡуйған гимнаст! Башты күтәреп ҡарауы ғына көс – һин инде еңелдең тигән һүҙ. Матур көслө кешеләрҙә генә була торған танауы аҫтында саҡ ҡына беленеп мыйығы һыҙылып киткән. Ә ирендәре, ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы кеүек, асыҡ алһыу, ҡурай еләгеләй.

Шулай ҙа мин Петрикты өнәп бөтмәйем. Уның бөтә булмышы – ҡыланыу, ике йөҙләләнеү һымаҡ тойола. Ул үҙен нисек тә яҡшы, сибәр итеп, дан егет итеп күрһәтергә тырышып ятҡан көнө. Аптырайым: Таңһылыу үҙе шуны һиҙмәйме икән?

Һәр хәлдә, Таңһылыу үҙ баһаһын үҙе белмәй һымаҡ. Минеңсә, ул мәктәптәге бөтә уҡытыусыларҙан да һылыуыраҡ. Унда ниндәйҙер сәйер сибәрлек бар. Әхирәтем бик тә аралашыусан, алсаҡ, күңелсәк холоҡло.

Кейем буйынса ла Ишемьярҙа уға еткергән кеше юҡтыр. Һәр миҙгелгә килешле итеп кейенә, һәр аҙна һайын кейемендә бер яңы биҙәк уйлап таба. Шуға мәктәптә ҡатын-ҡыҙ уның менән ярышмай ҙа тиерлек – барыбер Таңһылыуға еткерә алмаясаҡтар! Бер заман сәсте башҡа күбәләй өйөп ҡуйыу ғәҙәте таралғайны. Таңһылыу уны Ишемьярға тәүләп килтерҙе.

## 3

Тар булһа ла, Инәк мул һыулы. Тулҡындары бер ҡалҡына, бер күҙҙән юғала. Ярҙары текә, өҫтөнән быу боҫрай. Ҡайнар йылға ул. Иртәнге мәлдә бигерәк тә ғәмһеҙ, ялҡау булып ҡылана: ҡайһы берҙә ағыуынан да яҙып ҡуйған һымаҡ.

Тирә-йүндәрҙә, йылға әрәмәлектәрендә йәмле йәй башлана. Йәй килә, йәшел балаҫын йәйеп…

Бөгөнгө көндөң үҙенең генә төҫө, айырым биҙәге бар кеүек, һауаһы ла йомшаҡ.

Иртәгә мин институтҡа йәйге сессияға юлланырға тейешмен. Мәктәптә һуңғы уҡыу көнө тип, ҡыҙҙар Инәк буйына сыҡтыҡ.

– Быйыл мин дә институтҡа уҡырға инәм әле, – тип һала Таңһылыу көтмәгәндә. – Фәнисә һымаҡ, ситтән тороп уҡыу бүлегенә барам.

– Ысынлап та, әйҙә, Таня! – Әхирәтем менән бергә уҡыу – миңә буй етмәҫ хыял. – Бергә-бергә химиянан мәсьәләләр сисербеҙ.

Ҡыҙҙар ҡаршы:

– Юҡ, юҡ, Таня, һин былай ҙа универсаль. Телдәһәң, геометрияны, черчениены, арифметиканы, йыр, рәсем дәрестәрен уҡыта алаһың. Әҙәбиәт – үҙ фәнең… Нимәгә һиңә уҡыу? Фәнисә һымаҡ, баш ҡатырырға…

– Ҡыҙҙар, мин педучилище менән наҙан көйө ҡалам бит…

Ҡояш аяуһыҙ ҡыҙҙыра, һыу йылы; кейемдәребеҙҙе бәреп, йылғаға сумабыҙ. Һыуҙа рәхәт, һыуҙа сихәт. Унан тағы уттай ҡом өҫтөнә тәгәрәйбеҙ.

Таңһылыуҙың белмәгән эше юҡ. Беҙ ҡомда тәгәрәгәндә фотоаппаратын шалт та шолт килтерә.

Мин Таңһылыу менән дә ҡосаҡлашып төшәм. Әйҙә, был рәсемдәр бер иҫтәлек булып ҡалһын. Инәк буйындағы сәхрә көндөң хәтирәһе...

– Ҡыҙҙар, элек мин ҡалай баҫылып йәшәгәнмен икән! – Тағы Таңһылыу. – Таисия Алексеевнаның ҡулы аҫтында... Тын да ала алмағанмын. Фәнисә килгәс кенә, күҙем асылды. Рәхмәт һиңә, Фәнисәкәйем! Фәнисә килгәс, ҡайһылай ҡыуандым мин! Ул килгәс, ял итә башланым: Таиска хәҙер миңә түгел, уға тотона. Ә Фәнисә... Фәнисә – молодец, бирешмәй! Ул әрләшкән һайын, ул Таисканың кәрәген биргән һайын, һөйөнәм.

– Ха-ха-ха... – Инәк буйын яңғыратып көлөшәбеҙ.

– Ҡалай насар бәндә һин, Таня, кешеләрҙең әрләшеүенән йәм табаһың...

– Мин эсемдән: «Фәнисә, бирешмә, Фәнисә, сигенмә!» – тип теләйем бит, ҡыҙҙар...

– Ха-ха-ха... Тәңреһенән юрай...

– Дини бәндә, мусульманка!..

Мин иһә эсемдән үҙемдекен уйлайым. Йәнем көйә. Бынау Таиска элгәре көн Таңһылыу менән Петрик тураһында нимә тигән була! «В сельсовет пойдешь, начальник – башкир, на почте – башкир, в магазин зайдешь – башкирка, в школе – опять башкиры. К матери заглянешь – опять башкирка с братом родным в обнимку...»

Ултыра-ултыра, моңһоу булып китә. Күңел былдай көндә әллә ҡайҙа елкенә, әллә ниндәй сихри киңлектәргә етерҙәй була. Бөтәһе лә алда, киләсәктә һымаҡ. Алда, алыҫ алһыу офоҡтар артында беҙҙең өсөн әле башланмаған, асылмаған донъя ята. Ҡыҙҙар йәйҙе нисек үткәрергә йыйыныуҙары хаҡында һөйләй. Урман һауаһы күкрәктәргә тула, һулыштарҙы иркенәйтә. Донъя шундай йәмле, хозур кеүек. Йәйҙең башында ғына, иртәләрҙә генә кеше тормоштоң рәхәтлеген, ғүмерҙәрҙең оҙонлоғон тоя, үҙен азат тип хис итә. Йәй, йәй башлана алда, алда – азатлыҡ, каникулдар осоро!

– Таня, ҡарәле, һин Түбәңде һөйләйһең дә һөйләйһең, ә Петригың тураһында – ләм-мим! – ти ҡыҙҙарҙың берәүһе.

Бына һиңә иҫке ауыҙҙан яңы хәбәр! Бисуралар, ҡайҙа барып төштөләр. Тағы ни һөйләрҙәр, ниндәй һүҙ ҡуҙғатырҙар икән.

Ниһайәт, мин дә серемде сисергә баҙнат итәм. Эстә ята буламы ул: беҙ ише тишеп сығып килә. Тағы нисек итеп уны бынан үҙем менән алып ҡайтып китәйем!

Ҡыҙҙар күтәреп алдылар яңылыҡты, сәпәкәй итергә тотондолар. Хәс тә ҡаҙ бәпкәләре – һөйөнөшөп, ҡанаттарын ҡағып емгә табан ябырылдылар.

– Ысынмы?

– Ҡасан әйтте?

– Юрый шаярта...

– Юҡ, ҡыҙҙар, мин ышанам! – тине Таңһылыу етди ҡиәфәттә. – Николай Григорьевич Фәнисәнең дәрестәрен гел маҡтай. Фәнисәнән завуч сыға ул!

– Мин уға: «Йәшмен, Таисия Алексеевнаның үҙе шикелле булдыра алмам», – тинем...

– Һи алйот! – Ҡыҙҙар шаулашты.

– Туҡтағыҙ, ҡыҙҙар! – Таңһылыу алға сыҡты. – Ҡарәле, Фәнисә. Хәҙер һин директорға бар ҙа: «Мин уйланым, мин – риза!» – тип әйт.

– ...

– Әләйһә, беҙ үҙебеҙ директорға барабыҙ. Әйҙәгеҙ, ҡыҙҙар!

– Кәрәкмәй! – Минең ҡобарам осто. – Кәрәкмәй, ҡыҙҙар. Эсендә һүҙ ятмай, тиер...

– Һи алйот. Теге әтәстең кикрегә төшөр ине.

## 4

Башым ҡайнай, аңҡы-тиңке баҫып барһам, артымдан Таңһылыу ҡыуып етте. Уны ла көтөп тормай һыпыртҡанмын.

– Фәнисә, Фәнисә! Ниңә көтмәйһең? Ҡарәле, аҡса муҡсаһын юғалтҡан кешеләй ҡыланасы. Башыңды күтәр, күҙҙәреңде ас! Ҡара, донъя ниндәй йәмле.

– Ҡояш йылмая, ҡоштар һайрай... – Үсекләйем.

– Күктәр ниндәй зәңгәр, һауа саф... Ысын алтын көҙ тыуған!

– Көҙ тыумаған әле, белгең килһә – йәй дауам итә.

Таңһылыу сер бирмәй.

– Йәйҙең һуңғы балҡышы, һуңғы наҙҙары... Йәй киленсәктәй һылыуланып, матурланып киткән; үкенескә ҡалмаһын тигәндәй, биҙәкле күлдәктәрен кейеп сыҡҡан тышҡа.

– Эй хыялый шағирә! Һиңә сәскә лә биҙәкле күлдәк инде. Миндә башҡа ҡайғы...

– Һи, тапҡанһың хәсрәт. Беләм: директор һине завучлыҡҡа өгөтләй инде. Ризалаш та ҡуй. Һиңә һүҙем бар. Әхирәтем, директорыбыҙ Николай Григорьевичтың ҡатыны Полина Сергеевна ял көнөнә үҙҙәренә саҡыра, алма йыйышырға. Барабыҙмы?

– Һин бар, мин...

– Фәнисә...

– Ярай, һин мәктәп директоры өйөндә үҙ кеше.

– Полина Сергеевна ғәжәп итәғәтле ул. Алсаҡ. Һине ныҡ оҡшата. «Берүк, килтер Фәнисәне», – тине.

– Йә, ярай ул турала... Каникулды нисек үткәрҙең?

– Һөйләһәң – һүҙ, төртһәң – күҙ, тигәндәй. Килде-киттеле үтте лә китте.

Таңһылыу Петрикты үҙҙәренә алып ҡайтҡан икән. Атаәсәһе һис тә ыңғайламаған. «Юҡ, егетең беҙҙең зат-ырыуҙан түгел, килешә-яраша алмаҫһығыҙ, туғандары ла тиңһенмәҫ, – тигәндәр. – Динебеҙ ҙә, ғәҙәттәребеҙ ҙә башҡа, бер ҙә генә йәбешмәй, юҡ менән булашмайыҡ, килешмәгәнде», – тип торалар, ти. Әсәһенең: «Һөймәгәнгә һөйкәлмә, ҡыҙым», – тип өгөтләүенә Таңһылыу: «Ул мине ярата, мин дә унан башҡа йәшәй алмайым», – тип өҙә һуға. Бисара әсә ауыҙын баҫып илай башлай. Петрик буш ҡул менән ҡайтып китә.

«Береһе лә яҡламай мине, берәү ҙә йылы һүҙ әйтмәй. Бөтәһе лә өйҙә арттары менән әйләнеп тора», – тип балауыҙ һыға Таңһылыу. Үҙе лә ауылынан әрнеп, ҡанаттары ҡайырылған ҡоштай, йәберһенеп китә.

– Ҡағылып-һуғылып йөрөргә яҙған микән ни беҙгә? Тегендә – әсәйемдәр ҡаршы, бында – Петриктың туғандары. Тегендә – кафыр, бында – басурманка, тиҙәр. Ҡырын ҡарайҙар, бер ҙә ризалыҡтары юҡ кеүек. Әсәйем күрәҙәселәй дөрөҫ әйткән икән... – Таңһылыу йәнә танауын тартып ҡуя.

Мин ни тиәйем инде, өндәшмәйем, башымды аҫҡа эйгәнмен. Дуҫҡайымды нисек йыуатайым, уға нисек ярҙам итәйем? Ниндәй һүҙҙәр табайым? Хуплаһам, килешерме, йәне баҫылырмы?.. Үҙ-үҙемә ҡаршы барайыммы, үҙ инаныуҙарымды ашатлайыммы? Риза булмаған еремдән, ризамын, һин хаҡлы, һин дөрөҫ ҡыланаһың, тиәйемме? Үҙ-үҙемде алдау, Таңһылыуымды әүрәтеү, ҡыланыу килешерме? Файҙа бармы унан?.. Ер, һыу, һауа, нисек итеп баҫылдырайым әхирәтемде? Ҡайһылай итеп, ҡайҙарҙан, ниндәй саралларын табайым?

## 5

Таңһылыу ай-вайыма ҡуйманы барыбер, алып китте бит. Ул ярай Полина Сергеевналарға өйрәнеп бөткән. Улар өйөндә үҙ кеше, осрашһалар, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй. Полина апай ҙа, Таңһылыу ҙа ҡул эшенә оҫталар. Икеһе лә музыка ярата. Әллә ниндәй концерт, пьеса, прелюдияларҙы, фугаларҙы беләләр... Полина апай пианинола уйнай, Таңһылыу баянда һыҙҙыра, мандолина сиртә. Таня-Таңһылыу, һәр хәлдә, мин түгел инде: башҡорт булһа ла, әллә ни саҡлы рус романстарын белә, моңло итеп йырлай... Ни тиһәң дә, пар килгәндәр улар – Полина Сергеевна менән Татьяна Владимировна, башҡортса әйткәндә – Таңһылыу Шәрифовна.

Полина Сергеевна беҙҙе һөйөнөп ҡаршыланы. Николай Григорьевич өйҙә юҡ.

– Петяны беләбеҙ инде, өсөнсөлә, дүртенселә үҙем уҡыттым. Бәләкәйҙән ялҡау ине. Диктант яҙҙырһаң, башын баҫып ҡына ултырған була. Дәфтәрен алып тикшерһәң, диктант юҡ. Баҡһаң, ул дәфтәр өҫтөнән ҡулын ғына йөрөтә икән. Ярты йыл шулай этләне. Йә тағы... шиғыр ятларға ҡушһаң, яртыһын ғына ятлай ҙа – вәссәләм. Эшенең осона сығып ҡуймай... Шунан үҙен бик яҡшы итеп күрһәтергә тырышып ятҡанын да әйтәйем. Көндәлегендәге «икеле», «өслө»ләрҙе «дүрт»кә йә «биш»кә төҙәтә лә ҡуя. Йыйылышта насар уҡыуын әйтһәм, атаһы аптырай...

– Һе-һе... – Рәхәтләнеп көлөшәбеҙ.

– Көлкө түгел был, ҡыҙҙар, ә кешенең бәйһеҙлеге, ҡатлы-ҡатлы булыуы. Әнә, хәҙер ҙә йүнләп эшләмәй, эсә.

Һыу уртлағандай ултырабыҙ: Полина апай ҙа, аптырап, ҡоластарын йәйә:

– Исмаһам, шул эсеүе булмаһа ла... – Полина Сергеевна өгөт-нәсихәтен туҡый ғына. – Иҫәр күбәләк төн заманында бер осҡон күрһә, шуға йомола. Имгәнермен, ебәк төҫлө йоҡа, үтә күренмәле ҡанаттарымды көйҙөрөрмөн, тип уйламай. Ҡабаланып-тоноп бара. Һин дә үҙеңде һәләк итә күрмә. Петяны ғына түгел, ата-әсәһен дә, бөтә нәҫел-нәсәбен дә беләбеҙ. Улар заты менән һағыраҡ булыуың хәйерле.

– Уларға яҡын юлама, тиһең инде, Полина Сергеевна?

– Нәҡ шулай тим, Таня. Һынап, күрә белеп әйтәм. Ҡыҙ кеше бигерәк тә һаҡланырға тейеш.

– Һеҙ ҙә ҡаршы, Полина Сергеевна!

– Ҡаршымы-түгелме, үҙеңдең дә башың етергә тейеш. Сабый бала, аҡылһыҙ кеше түгелһең. Һинең йәштә аҡты ҡаранан, йәшелде ала-соланан айыра белергә ваҡыт.

Николай Григорьевич ҡайтҡас, һүҙ өҙөлдө.

– Әйҙәгеҙ, ҡыҙҙар, етешеп ултырығыҙ! – Полина Сергеевна ҡыҫтай ғына; голубцы, гуляштарын, салаттарын алдыбыҙға теҙә. Телеңде йоторлоҡ. Уңған хужабикә менән ихлас хужа өлтөрәп тора. Таңһылыуҙың да әҙерәк йөҙө асыла төштө. Мин йылмайырға ла, иларға ла белмәйем. Шулай ҙа был алсаҡ кешеләрҙә күңелле. Һине әрһеҙ ауыр ҡараш әҙәрләмәй, ниҙер ыҙаламай, рәхәтләнеп, ирәйеп тын алырға мөмкин. Николай Григорьевич эш тураһында ләм-мим өндәшмәне. Рәхмәт уға, рәхмәт ихлас кешеләргә!

## 7

Аңламайым мин Таңһылыуҙы: бер ҡараһаң, етди, аҡыллы кеүек, икенсе ҡарағанда, йүләрлек ҡыла ла ҡуя. Кеше, күрәбаға тороп, шул эскесегә ҡараймы? Марфа әбей менән Полина Сергеевналарҙың «был Таняның күҙе юҡтыр ул» тигәндәре лә дөрөҫтөр. Улар инде әйтмәне түгел, әйтте, хатта кәрәгенән артығын.

Аңламайым, кисерә алмайым мин Таңһылыуҙы.

Ҡара, Николай Григорьевич та киҫәткән бит әле, тыйған хатта, күҙенә тура ҡарап: «Аҡылыңа кил, ҡыҙый, бәхетеңде аяҡ аҫтына һалма!» – тигән, һәр хәлдә, мин директор һүҙен тыңлар инем. Николай Григорьевич – Петриктың элекке уҡытыусыһы. Петрик, эш һөймәҫ йән, етенсене теүәлләгән дә уҡыуына ҡул һелтәгән. Өҫтәүенә, һуңынан директорға үпкәләп, өйөнә эсеп килеп: «Һин мине уҡытманың, һин – буржуй, мәктәпкә хужа булдың», – тип тәмһеҙләшеп йөрөгән.

Ярай, Петрик бөркөт егет тә, ти. Ҡараштарын бер һирпеүгә ҡыҙҙарҙың йөрәге янып көлгә лә әйләнһен, ти. Кеше шулай, бер сибәрлеккә генә әүрәп, ғаилә ҡорамы?

Юҡ, аңламайым мин Таңһылыуҙы, зиһенем етмәй, үҙенә кемде иш иткән! Ниндәй кеше ул, ҡайҙа, нисек тәрбиәләнгән? Ҡайһылай ул Таңһылыуҙан Таняға, Татьяна Владимировнаға әйләнгән? Кем тыуҙырған уны, кем үҫтергән, тәрбиәләгән? Ҡайҙа тыуған ул? Ниндәй күктәр аҫтында йәшәгән?..

Марфа әбей менән мин әйтеү менәнме ни! Таңһылыу бер кемгә лә ҡараманы, бер кемде лә тыңламаны.

Октябрь байрамы көндәрендә уларҙың туйы булды. Ишетеүемсә, туй ҡыҙ яғында ғына үткән. Петриктың туғандарынан берәү ҙә Түбәгә бармаған.

## 9

Йыш ҡына Таңһылыу янына барып ултырам. Әлбиттә, Петрик өйҙә булмаған мәлде һайлайым.

Бындай саҡтарҙа беҙгә күңелле. Гүйә бөтә донъябыҙҙы онотҡан сабыйҙарбыҙ. Гүйә Таңһылыу ҙа тормошта түгел, ә бер елбәҙәк ҡыҙ. Ә Петрик өйҙә саҡта ул минең менән ипле һөйләшә, үҙен әҙәпле күрһәтергә тырыша. Килештерә. Сит-ят алдында ул тотанаҡлы, мәҙәниәтле әҙәм. Интеллигенттарса мөғәмәлә итә. Үҙен тотошона, теленең үткерлегенә, тыйнаҡлығына иҫең-аҡылың китер. Мәғлүмәтле, уҡымышлы бәндә, тип торорһоң... Үҙе әхирәтем тирәһендә өлтөрәп торған була: әле был, әле теге әйберен ала, йүгереп һыуын индерә. Кеше күҙе өсөн генә түгел микән, тим.

Уларға барған һайын, Таңһылыуҙың зауығына хайран ҡалам. Тыштан ҡарағанда, Митя зимагорҙың йортон өй тиһәң, хәтере ҡалыр. Тауыҡ кетәге. Ә эскә инһәң, ялт итеп тора. Таңһылыу иҙәндәрен балауыҙҙай асыҡ һарыға буятҡан, стеналарын аҡлаған, тәҙрәләрен йыуған. Оло мейесе лә фәрештәләй аҡтан ғына кейенеп ултыра. Гүйә ул аҡҡош: саҡ ҡына ҡағылһаң да, осоп китер. Эй был Таңһылыу, таҙалыҡ, бөхтәлек ярата; шул лапаҫ түшәменән дә тәпәш түбәле өйөн ҡурсаҡтай итеп йыйыштырып ҡуйған. Ҡасан килмә, карауатын, өҫтәлен, комодын яңыса ултырта – шулай өй эсенә яңы төҫ бирә. Йыһазы инде: төпкөлдә бер карауат ултыра, йәнәшендә өҫтәл; икенсе башта – комод, шифоньер... Үтеп йөрөр өсөн тар ғына ара. Таңһылыу барыбер ҡәнәғәт, һөйөнөсөнән башы түбәгә тейгән кеүек.

– Ике башыбыҙға ни... – ти көлөп.

Таңһылыуҙың кинәнестәренең сиге юҡ. Мәктәпкә лә дәртләнеп килә, күңелсәкләнеп йөрөй. Ҡулында бер эш сыҙамай. Әле пионерҙар менән сборға әҙерләнә, әле концерт ҡуя. Мәктәптә үткәрелгән бер саранан да ҡалмай. Ҡыҫылмаған ере юҡ.

– Вот наша Таня, вот молодец! – тип маҡтай директор.

…Мин Таңһылыуға теклəберəк ҡарап киткəнмен, ахырыһы.

Ул да, сəйерһенеп, миңə төбəлə. «Ни булды? Күҙ тейҙерəһең бит», – тип əйтергə йыйына һымаҡ.

– Əйт əле, костюмыңды ҡайҙа тектерҙең? Əллə əҙер килеш алдыңмы? Тəнеңə һылашып тора лаһа…

– Яҙ буйы ни шуны теГеп мəж килдем дə. Петрик əрлəшə. Былай тегенең ауыҙын тиҙ яптым ябыуын. Вельветтан үҙенə куртка тегеп бирҙем. Шəп килеп сыҡты. Бына. – Əхирəтем байлығын күрһəтə. – Минең Петрушты белəһең инде, үҙемə оҡшап, фырт кейенергə ярата.

– Ə зоотехник ағай нишлəп һинең йəнеңдə үртəй ул?

Таңһылыу ауыр көрһөнə.

Кисə мəктəптəп ҡайтышлай уны колхоз зоотехнигы туҡтата. «Татьяна Владимировна, ирегеҙҙе əҙерəк тыйһағыҙсы, бигерəк бəйһеҙлəнде лə, – тип шелтəлəй икəн был. – Элгəре төн йəнə ике быҙауын үлтергəн… Котельныйҙа эсеп ятҡан».

Зыянды ҡаплау өсөн, акт төҙөп, малдарҙың хаҡын Петрик өҫтөнə күтəрткəндəр. Уныһы ярай əле, Таңһылыу бигерəк тə зоотехниктың «ирҙе ир иткəн дə, хур иткəн дə ҡатын, тиҙəр, əҙерəк тыйырға кəрəк» тигəн һүҙҙəренə ғəрлəнгəн.

## 13

*Һаумы, Фəнисəкəйем, ҡəҙерле əхирəткəйем!*

Һин көлөрһөң, мине йомшаҡҡай, йүлəр, тип атарһың. Бер ҡатлы, хыялый бəндəлəрҙе бик өнəп бөтмəгəнеңде лə белəм. Шулай ҙа мин уны онота алмайым. Йыш ҡына бергə йəшəгəн йылдарыбыҙҙы күңелемдəн кисерəм. Бөтəһе лə насар булмаған бит, күңелле, һөйөнөслө көндəребеҙ ҙə бар ине.

Үҙемде тыйып та, киҫəтеп тə ҡарайым, тағы… Бөтəһе лə үткəн, кире ҡайтмаҫ ярҙарҙа ҡалған бит инде, тим; шулай ҙа йөрəк тыңламай – болоҡһой ҙа болоҡһой.

Юл ыңғайы һинең янына кергəс, əллə нишлəп күңелем тулышты ла китте. Ошо мəлдə, үҙемде нисек кенə шелтəлəһəм дə, ғорурлыҡ хисем уяныуын тойҙом. Мин – кеше, берəүҙең ғəзиз балаһы. Һис тə Петриктан кəм түгелмен! Мусульманка булһам да, икенсе сортлы зат түгелмен. Өйөмə əллə нишлəп сəмлəнеп, бəҫем-баһамды тойоп ҡайтып индем Ҡырымдан.

Ҡайтһам... һөйөклө кешем мин юҡта араҡы эсендә йөҙгән. Бөтә донъямдың аҫтын-өҫкә килтергән. Минең арттан уҡ кеше йыя башлаған... Өйгә инерлек түгел. Мөгәрәптәге вареньеларҙы, һары майҙы сығарып, түккән-сәскән. Ун бер банка ғына варенье ҡайнатҡайным, берәһе лә ҡалмаған. Ҡайһыһын түккән, ҡайһыһын араҡыға алмаштырған.

Быны̇ң түҙемдәрен ахыр сиккәсә һынайым тине микән? Артымдан «донъяны көтәм, малдарҙы ҡарайым» тип ҡалғайны; донъяны ла көткән, һыйырҙы ла һыуалтҡан. Өҫтәүенә, үҙен ферманан ҡыуғандар. Аҙна буйы эсеп ятҡан.

Аптырап, өйҙө ҡабат аҡлап, ҡырып-һепереп, йыуып сығарҙым. Мәйтәм, ҡасып китһәң дә, сәсеп кит. Донъям артымдан ташландыҡ хәлдә ҡалмаһын... Ни генә тимә, ныҡ икеләндерә. Йә эргәмдә, исмаһам, һин юҡһың. Һинән кәңәш һорар, эс серҙәремде түгер инем. Марфа әбейҙән ҡыйынһынам. Тағы унан һорамаһаң да була. Полина Сергеевна ла хуплай. Барыһының да һүҙе бер – китергә кәрәк һиңә, Таңһылыу! Айырылырға кәрәк Петригыңдан!

Эй Фәнисәкәйем, ни хәл итәйем инде? Һеҙ бөтәгеҙ ҙә, бөтәгеҙ ҙә ҡаршы! Берегеҙ ҙә уны яҡламай...

Һаман шомланам, һуҙам. Үҙемә: «Ярай, киттең дә, ти... Унан ни эшләрһең, унһыҙ ни ҡылырһың?» – тим. Башым ҡайнай. Петригымдан башҡа көнөмдөң ни йәме ҡала? Ул, үс иткәндәй, һаман туҡтамай эсер. Кем тыйыр, кем киҫәтер уны? Төпһөҙ упҡындан кем йолор?

Башымды ҡайҙа ҡуйырға белмәй оҙаҡ ҡаңғырҙым. Бер ни ҡыла алмайым; епте өҙөп кенә ҡуйырға ла көсөм етмәй. Аңҡытиңке баҫам. Гүйә йәшәмәйем, ә ике ут араһындамын. Ваҡыт ағышын, тәнемде бөтөнләй тоймайым да... Ахыр сиктә күңелемдән Ишемьяр менән бәйләүсе бөтә ептәрҙе өҙөп бөтөрҙөм. Полина апайҙарға, Марфа әбейгә, хушлашайым тип, һуңғы ҡат барҙым. Ҡапылдан ауылдан да, кешеләрҙән дә биҙҙем. Бөтәһе лә шул көйһөҙ арҡаһында.

Ер менән күк араһында һымаҡмын. Табандарым аҫтында ҡатыны тоймайым, тирәмдәге кешеләрҙе шәйләмәйем. Партком секретары кабинетынан (ул мине, Петя ферманан ҡыуылғас, саҡырып алғайны), Ишемьярҙан китәм, тип, үҙемде нығытып сыҡтым. Күтәрмә төбөндә тапанам, һауа етмәй, башым әйләнә.

«Эй Таңһылыу, Таңһылыу, һин мәңге шулай китап буйынса йәшәнең инде. Үҙең уҡыған китаптарҙағы героиня-

ларҙың фиҙаҡәрлеген, ҡаһарманлығын үҙеңә күсерҙең», – тиерһең. «Ярай, бәлки, һине улар урынына күсереп ҡуйып булалыр ҙа ул, ә уларҙы һинең хәлеңә ҡуйып ҡарарға мөмкинме икән?» – тип һорарһың. Беләм мин һинең ни әйтереңде. Һин шулай уйлайһың. Тағы: «Һин үҙең яҡтылыҡҡа, игелеккә инанған бер бәндә булһаң да, Петригың улай түгел бит. Күктән ергә төш, әҙерәк ер ҡыҙы була бел. Һин Петрикты хыял күгеңдәге йондоҙ-образыңа яҡынлаштырырға ынтылдың, ә ул ҡарыша, хыялыңдағы образың менән ҡатышырға теләмәй», – тиерһең. Һин хаҡлы, Фәнисәм.

## ИКЕНСЕ БҮЛЕК

### 1

*Һау ғынамы, Фәнисәкәйем, яҡыным минең!*

Ни хәлдәрҙәһең, эштәрең уңмы? Кейәүеңә сәләм.

Бында ысын Балтика яҙы: томанлы, дымлы һауа. Яҙғы әсе елдәр елеккә үтә, тик ара-тирә генә көн аяҙытып ебәрә. Беләһеңме, Фәнисәкәйем, бына шул ҡыҫҡа ғына аяҙ мәлдәрҙә икән Балтика яҙының йәме! Шул мәлдәрҙә бар донъя нурға ҡойона. Йылы нурҙар бейек йорттарҙың һорғолт, көрәнһыу, йәшкелт таштары йөҙөнә төшә. Риганың боронғо таш һырттары ындай ваҡытта, бихисап төҫтәргә мансылып, бихисап төҫтәрҙә сағылып ялтырай, баҙлай, күҙҙе ҡамаштыра.

Был көндәрҙә бигерәк тә яр буйҙары хозур һыу өҫтөндә иҫ китмәле төрлө төҫтә тәңкәләр емелдәй.

Мин күбеһенсә ял итергә киләм. Иртә яҙҙың һирәк көндәрендә бында үтә аяҙ, үтә хозурлы. Балтикаға яҙ бик иртә килә, һуң китә. Ҡояш юғарыраҡ күтәрелгән һайын, даръя ла таша. Ара-тирә гәлсәр боҙҙарҙың йылтырап китеүе яҙҙың көс туплауын иҫкәртә.

Һирәк аяҙ көндәрҙә бында халыҡ тула. Латыштар үҙ ҡалаларын, Балтиканы сикһеҙ һөйә, көн оҙоно өйҙәренә ҡайтып әйләнмәй. Киләһе хатымда Рига тураһында айырып яҙырмын әле. Ғәжәп ҡала бит ул. Эх, һиңә лә күрһәтергә!

Диңгеҙ сите, кеше күмәк йыйылғанғамы, һәр саҡ йәнле. Миңә лә күңелле. Бында яңғыҙлыҡ тиҙ онотола. Бик иртән һәм бик һуң сәғәттәрҙә генә кеше әҙ. Ләкин мин нәҡ шундай саҡ-

тарҙы үҙ итәм. Ятҡан урыным – ике арыҫлан һыны эргәһе. Яңғыҙым ҡалһам, Башҡортостаным хәтергә төшә. Ишемьярҙағы тормошомдо уйлайым. Йыш ҡына Марфа әбейҙе күҙ алдыма баҫтырам. Петригым да шунда. (Көлмә!)

Полина Сергеевна менән Николай Григорьевичтар ҙа ифрат матур кешеләр ине. Ни хәлдәләр икән? Бөтәһе лә, бөтәһе лә иҫемдә, бөгөнгөләй ҡаршымда ғына һымаҡ. Ҡайһы берҙә мин үҙемде һаман Ишемьярҙамын тип хис итә башлайым. Бер ни үҙгәрмәгән, барыһы ла әүәлгесә, Ишемьярҙа йәшәп ятам... Мин – Ишемьяр кешеһе. Унда тыуғанмын, унда тәрбиәләнгәнмен. Нишләптер бөтә нәмәгә уның күҙлегенән, ундағы үлсәүҙәр аша ҡарайым. Һиңә нисектер, минең өсөн Ишемьяр онотолмаҫ инде. Мин, күрәһең, уны ғүмеремдең иң яҡты, иң аҫыл бер киҫәге тип һағынырмын. Кеше тәүләп эшләй башлаған ерен онотмай.

Фәнисәм, артыҡ сөсөләнеп киттем, ахырыһы. Кисерә күр. Нишләйһең бит, күңел тигәнең... Ярай инде, эшкә лә ваҡыт. Әлегә иҫән-һау бул. Оҙаҡламай яҙырмын. Үҙеңдән хат-хәбәр, ҡыуаныслы яңылыҡтар көтәм. Үбәм ҡыҫып-ҡыҫып. Таңһылыуың. Рига, апрель, 1978 йыл.

*Алыҫтағы яғымлы дуҫым минең!*

Фәнисәкәйем, оло ҡалалар беҙҙе тиҙ генә ҡабул итергә йыйынмай икән. Үпкәләүҙәреңә лә иҫе китмәй, күҙ йәштәреңә лә ышанмай. Шулай инде, беҙҙең бәхетһеҙ башҡа. Саҡырылған ҡунаҡ түгелбеҙ, әйҙә, күҙ йәше түкмә! Фатирын да эҙлә, тамағын да йүнлә, өҫтөңдө лә бөтәйт, аҡсаһын да тап.

Маргаретталар әле ҡыумайҙар ҡыуыуын, тик уларға ла ҡыйын. Ике бүлмәле фатирға дүрт кеше һыйған. Фатир юллау киләсәктә минең иң оло хафам булмаҡсы... Хәйер, теге бәлә алдында был нимә? Сүп кенә!

Яңы йылдан бирле Полина Сергеевнанан ҙур хат көтәм. Яҙам да яҙам тип вәғәҙәләр яуҙыра ғына. Петрик тегендә ниндәйҙер бәлә ҡуптарған, ахырыһы. Уны бер ҡайҙа ла эшкә алмайҙар. Иптәштәр суды булған. Полина Сергеевна, ул ғәйепле түгел, тип яҙа. Йә Хоҙай! Йәштәр һуғышҡан ергә барып ҡыҫылған. Тағы дөрөҫөн Хоҙай үҙе генә белә. Шулай ҙа иптәштәр суды халыҡ суды түгел бит әле.

Әләгеп кенә тора унда минең йәтимемә. Үҙем генә ғәйепле: яҙмыш ҡосағына ташлап киттем, кәкүк кеүек остом алыҫтарға. Туҙҙырып киттем оямды. Хәҙер берәү ҙә уны йәлләмәй.

Йыш ҡына Петрикты төшөмдә күрәм. Никахыбыҙҙы рәсми өҙҙөк. Бөтәһе лә закон нигеҙендә эшләнде... Тик шунда, ҡағыҙҙарҙы тултырғанда ғына, мин уны мәңгегә юғалтыуымды аңланым. Ысынлап та, үткәндәргә юл юҡ! Хуш, иҫәр йәшлек! Һин бүтәнсә ҡабатланмаҫһың.

Хатың кәйефемде күтәрҙе, күңелемде нығытты, рәхмәт. Бигерәк тә «капитан, капитан, улыбнитесь, только смелым покоряются моря» тигән девизың күңелде күтәрә.

Беләһеңме, йәй был яҡтарҙан бөтөнләй китергә йыйынам. Бер ниндәй ҙә өмөт юҡ. Ғүмерҙә лә фатир бирмәйәсәктәр: климат ярамай; һаулығым юҡ; йөрәгем эшкинмәй. Һеҙ август башында уҡ ауылға ялға китәһегеҙме? Быйыл да осраша алмайбыҙ микән ни, ҡәҙерлем?

Үҙең хаҡында төпсөрләп яҙ. Үбәм. Һинән ҡабат рухландырғыс хаттар көтәм. Таңһылыуың. Рига, июль, 1980 йыл.

P. S. Әгәр Өфөлә төпләнһәм, сентябрь, октябрь айҙарында осрашырбыҙ ҙа әле, кем белә.

* * *

Ярай Хат бар донъяла. Кеше хыялының тиңһеҙ емеше. Ҡөҙрәтле вә илаһи көс. Араларҙы яҡынайта, һағыныуҙарҙы баҫа, йөрәктәрҙе бергә тибергә мәжбүр итә... Таңһылыу менән мин дә шул арҡала йәнәш кенә йәшәйбеҙ, бергә тын алабыҙ төҫлө. Бының өсөн рәхмәт һиңә, и мәрхәмәтле Хат!

*Фәнисә, яҡыным!*

Күптән һиңә яҙғаным юҡ, әммә мин ғәйепле түгел.

Был хаҡта һиңә яҙҙым микән? 12 июлдә больницаға һалдылар, 1 августа операция яһанылар, ә 8 сентябрҙә өйөмә ҡайттым. Фатирыма... Бары 26 сентябрҙә генә эшкә сыҡтым. 11 октябрҙә Риганан остом, ә 13-дә кис Түбәлә инем... Хатта ышанғы ла килмәй: мин тере, мин тағы өйҙә! Тупһаны ашатлау менән әсәйем: «Фәнисәңдән хат бар», – ти. Эй һөйөндөм инде! Башҡортса дөрөҫ яҙҙыммы? Хатаһы булһа, үпкәләмә. Беҙҙә Түбәлә рус мәктәбе генә бар ине. Хаталарын үҙең төҙәтеп уҡы!

Ә Латвияла, беләһеңме, туған телгә, үҙҙәренекенә иҫ киткес иғтибарлылар. Өйҙә гел латышса һөйләшәләр. Кеше бишектән алып үҙенсә генә ишетеп үҫә. Яслеләр латышса, руссаһы аҙ. Ясленән мәктәпкә килгәс, уҡытыу тағы тик үҙҙәренсә генә. Рус теле предмет булараҡ ҡына инә! Теләһәң, рәхим ит! Тик былай бөтөн ерҙә латышса. Хатта магазинда ла, автобуста ла. Магазинда латыштар ғына һатыусы, латышса һөйләшмәһәң, сауҙаға, транспортҡа, етәкселеккә, больницаға эшкә алмайҙар ҙа. Магазинда латышса һорамаһаң да, һиңә арттары менән әйләнеп баҫалар. Хәтәр! Ә беҙҙә? Аңлайһыңмы? Автобуста латышса өндәшмәһәң, урын юҡ. Аяғыңда тораһыңмы, ҡултыҡ таяғына таянғанһыңмы, эштәре юҡ, латышса өндәш! Латышса өндәшһәң, донъя һинеке, Латвия һинеке. Бөтәһе лә ҡоласын аса, йөҙөн балҡыта, үҙҙәренә әйҙәй. Мин дә хәҙер әҙерәк латышса һупалайым... Шулай хәлдәр бында, әхирәткәйем. Уйын эш түгел. Латвияла латышса ғына бара донъялар. Ә беҙҙә, төпкөлдөң төпкөлө Түбәлә, бишектән төшкәненән алып атҡа атланғанына, унан таяҡҡа таянғанына тиклем русса һупалай... Башҡортса һорама икмәкте; башҡортса һораһаң, тәғәм ризыҡты, бер йотом һыуҙы, бирмәҫтәр, валлаһи; русса һора, русса үтенһәң, лутсы алдыңа ҡуйырҙар. Әле Түбәләмен. Ер менән күк араһы. Рига, Түбә... Түбәлә тик үҙебеҙсә фәстерәләр, бишектә ятҡанынаса «мамма», «паппа» тип кенә өҙҙөрә. Ха-ха, Фәнисәкәй, мин националистка булып барам, буғай. Ригала йәшәп, латыштар араһында боҙолам. Кем әйтер хәҙер, һинең Таня-Таңһылыуың үҙгәрмәгән, тип. Попробуй, әйтеп ҡараһындар! Үҙгәрҙем, европалаштым, диңгеҙ һәм цивилизация һауаһын һулап боҙолдом.

Ярай, Фәнисәкәй, пока. Хат яҙ. Мин өйҙә оҙаҡ ятам әле. Ял итәм рәхәтләнеп тыуған илемдә. Алда ваҡыт күп, икенселәй үҙеңә ҙурыраҡ хат яҙырмын. Сәләм менән Таңһылыуың. Түбә, октябрь, 1980 йыл.

## 2

Эштән ебәреүҙәрен үтендем. Директор ҡаршыһына баҫып, тубыҡланып, башты иҙәнгә генә орманым инде... Теге «мин РОНО мөдире алдында яуап тотам» тип күҙҙәрен таҫрайта.

Ҡул һелтәп, йәнә шөғөлөмә тотонам: директор РОНО-ға ҡайтҡан яңы дәреслектәрҙе мәктәп өсөн айырып алырға ебәр-

гәйне. Төшкәсә бөтәм дә фатирыма йүгерәм, йәнәһе. Иптәшем дә ашыға. Башты ла күтәрмәйбеҙ...

Ҡайҙа ул: төшкә шәйе ослай алманыҡ, бер башлағас, түңәрәкләйек тип тырышабыҙ. Сәғәт көндөҙгө ике, өс тулды. Үҙемде эстән йыуатам: бына-быና теүәлләйбеҙ. Кис бар, олоғара бер буш көн – Таңһылыу менән серләшергә, күгәрсендәр ише гөрләшергә өлгөрөрбөҙ. Етәксенән һүҙ ишеткәнсе...

Дүртенсе яртыла ҡайтып инһәм, фатирҙа берәү ҙә юҡ. Әллә килмәне микән, тим, шатланырға ла, көйөнөргә лә белмәй. Өҫтәлдә ҡағыҙ киҫәге. Таңһылыуҙың кисәге телеграммаһы бит. «Уфа. 10.15 часов буду у вас. Ждите. Таңһылыу...» Телеграмманы өҫтәлдә ҡалдырып киткәнбеҙ.

Телеграмманы әйләндереп-тулғандырып ҡарайым. Икенсе яҡ биттә – яҙыу... Таңһылыуҙың ҡулы! Юҡ, ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәйем. Ул әле генә бында булған!

Ҡағыҙ киҫәге ҡулымдан төшөп китә. Уның артынан кәүҙәм дә, үлән һабағылай, бөгөлә; йәнһеҙ кешеләй, һынһыҙ булып ятам.

– Таңһылыуым...

Бисаралар, иң тәүҙә эш, тибеҙ. Тәүҙә – йәмәғәт тормошо, унан – үҙеңдеке... Шулай өйрәнгәнбеҙ. Эш, тибеҙ, сәсәйбеҙ; тормош һиҙҙермәй йәнәштән үтә. Үҙебеҙҙе бөткөһөҙ мәшәҡәттәр, ваҡ ығы-зығы биләй, ә ысын эшкә ваҡыт юҡ. Гел йәмәғәт йөгө, гел уның йомошо... ә йәндәй дуҫтарыбыҙға, яҡындарыбыҙға ғүмер ҡалмай. Йәнәһе, эшемде теүәлләйем, йәнәһе, Таңһылыу көтә, ҡуна ҡала була.

## 4

– Марфа әбей, эҫе ҡаба лаһа, нишләп ҡояшта кибәһең?

– Әйттең һүҙ. Хәҙер эҫе ҡаба тиме ул? Июль ҡояшының ҡайнарлығын да ташҡа үлсәйем.

– Марфа әбей!..

– Бәй, минең ҡыҙҙарым килгән! Таня! Фәнисә! – Ҡарсыҡ яҙыла. – Онотмағандар... – Әүәлге бөкрәйгән ҡарсыҡ йәһәт кенә һынын турайта, йөҙөн һыпыра. – Ҡана, ник улай Ишемьярға килергә йыйынып киттегеҙ?

– Ана, Таняң инде, – тим, әхирәтемә төртөп. – Риганан ҡайтҡан да миңә тейгән. «Ишемьяр ҙа Ишемьяр» тип быуынға ғына төшә.

– Ха-ха... Марфа әбей, көскә өтәҫләп килтерҙем үҙен, тыңламай ҙа ҡуя. «Минең ир, бала», ти, саҡ-саҡ күндерҙем.
– И шилма, әбеһен, Ишемьярҙы онотҡан шул...

* * *

Ишемьяр... Һаман да шул Ишемьяр икән. Беҙҙең матур йәшел бишегебеҙ. Тәбиғәттең ҡырағай бер төбәге. Ул урман менән ҡатышҡан тиерлек. Әйтерһең дә, бындағы өйҙәргә, аласыҡтарға кеше ҡулы теймәгән дә: ауыл тәбиғәт ҡеҙрәте менән генә яралған да ҡуйған. Өйҙәре һалынмаған, мунсалар буралмаған, ә шул көйөнсә үлән, ҡыуаҡтар менән бергә үҫеп сыҡҡан. Улар, өйҙәр, аласыҡтар, аҙбарҙар, кетәктәр, үлән менән, ҡарама, өйәңкеләр менән бергә үрелеп йәшәй. Ишемьяр йәшел бишек кенә. Ҡомалаҡ һабаҡтарынан, кесерткән япраҡтарынан үрелгән бишек.

Мин, бары ауылға килеп ингәс кенә, уны нисек һағыныуымды аңланым. Уны күреү күптән күңелем теләге булған. Мин был осрашыуҙы көткәнмен, уға оҙаҡ әҙерләнгәнмен...

Беҙ – һаман да Ишемьяр балалары! Һаман да уның уҡытыусы ҡыҙҙары! Ишемьяр мәктәбе, Ишемьяр өйҙәре таныш тиҫтерҙәребеҙҙәй күҙҙәребеҙгә төбәлә, үҙҙәренә инергә саҡыра, буғай.

Юлыбыҙ – мәктәпкә табан. Марфа әбей, ғәҙәттәгесә, ҡайтыуыбыҙҙы бешеренеп көтөп торасаҡ! Беҙ ҡабаттан Ишемьярҙың уҡытыусы ҡыҙҙары! Эштән ҡайтабыҙ...

Бөтәһе лә таныш, ҡәҙерле бында. Бәхеткә ҡаршы, берәү ҙә осрамай. Көпә-көндөҙ ел ҡыуабыҙ, бушты бушҡа ауҙарабыҙ. Көн үҙәге, ә йән эйәһе күренмәй.

Мәктәп тышында – Николай Григорьевичтың Совет власы тураһындағы һүрәте. Художник, ысын художник инде ул. Хәҙер, ялға киткәс тә, мәктәптә уның рухы йәшәй.

Мин шулай тип уйлап өлгөрмәнем, алдыбыҙҙа оҙон бер ир пәйҙә була. Петрик бит! Петрик яй ғына баҫып беҙгә табан яҡынлаша. Суҡынғыр, ғорур бәндә: башын юғары күтәреп, күкрәген киреп ебәргән; ергә хужа һымаҡ баҫа. Эйе, ул, нәҡ үҙе – ике күҙе!

Мин ҡурҡынып әхирәтемде күҙәтәм. Ҡаушар, ҡойолоп төшөр микән?

Петрик үҙен, ғәҙәтенсә, интеллигенттарса тыйнаҡ тота. Йомшаҡ итеп һөйләшә, йәнәштән һаҡ ҡына баҫып атлай. Бер яңылыш ишара яһаһасы, бер артыҡ һүҙ ысҡындырһасы...

– Эйе, ауылдамын... Ҡәйнәм әйтмешләй, ситтә лә ситәнгә элеп ҡуймағандар...

– Дөрөҫ...

– Ҡайһы берҙә генә күңел тулышып китә. Ауылда күңелһеҙерәк бит, ҡалалағы ише ығы-зығы юҡ... Хәҙер Марфа әбейҙәргә бараһығыҙмы?

– Эйе...

Марфа әбей ихатаһына ингәс, мин өйгә ашығам, улар тышта ҡала. Марфа әбей өлтөрәп йөрөй, йәһәтләнеп ашын өлгөртөргә тырыша.

– Ите бешеп сығып килә, хәҙер...

– Уғата сәсәп барма, Марфа әбей, ваҡыт күп бит әле.

– Һин сабыйым тип ҡабаланаһың инде...

Петрик, күпме генә ҡыҫтаһаҡ та, ашҡа инмәне. Таңһылыу уны оҙатып керҙе. Әллә шуға хәҙер үҙе бойоҡ; ауыҙына һыу уртлағанмы ни, ләм-мим.

Марфа әбей әллә ниндәй өгөттәрен тылҡый, әллә ниндәй хәтирәләрен иҫләй. Уға ла ҡыйын инде. Ҡәҙерле ҡунаҡтары күҙгә күренгәндәй иттеләр ҙә тағы юҡҡа сығалар.

Ихатаға сығабыҙ ғына тип торғанда, солан ишеге шығырлап асылды. Бәлә – Таңһылыу юлдашым терт итеп ҡалды! Әллә нимәнән өрктө, бисараң. Йөҙө ағарынды, күҙҙәре ҙур асылып китте. Ул ауыр сумаҙанын дөңк итеп кире иҙәнгә ҡуйҙы, үҙе ағас карауатҡа лыпын ултырҙы.

Петрик йөрөй икән. Мин быға һөйөнөргә лә, көйөнөргә лә белмәнем. «Петрик Таңһылыуы, элекке ҡатыны менән хушлашырға килгән! Йәне бар икән әҙерәк», – тип уйлайым эсемдән.

Шунда әхирәтем тынлыҡты боҙҙо:

– Юҡ, Фәнисә, мин бер ҡайҙа ла бармайым. Мин хәл иттем! – Үҙе ҡараштарын туфли йөҙлөктәренә төбәп ҡатҡан, миңә лә, Марфа әбейгә лә, Петрикка ла күтәрелеп ҡарарға ҡыймай.

Мин бер ни ҙә аңламайым.

– Нимә хәл иттең? – тим, аптырап.

– Мин күп уйландым, Фәнисә, әбей; ахырыһы, яҙмышым шулдыр. Мин Петрик менән ҡалам! Беҙ һөйләштек инде.

– ...

– Фәнисәкәйем! – тип миңә уҡтала был. – Марфа әбей! Асыуланмағыҙ, йәме! Кисерегеҙ мине! Мин башҡаса булдыра алмайым, башҡаса юлым юҡ минең.

Улар – Таңһылыу менән Петрик – икәүләшеп мине ауыл осонаса оҙата баралар. Таңһылыу ҙа, Петрик та өндәшмәй, бары мин генә, ыҙалы тынлыҡтан ҡурҡып, өҙлөкһөҙ тәтелдәйем, телемә килгән тәүге һүҙҙәремде теҙәм.

Шулай көтмәгәндә, тәҡдир ҡушыуына буйһонопмо, әллә йәштәрҙең йөрәк тибешенә эйәрепме, әхирәтемде ҡабат Ишемьярҙа ҡалдырып киттем. Икенсе ҡат.

## Эпилог

Таңһылыуҙың ауылын күргәнем юҡ ине. Ишемьярҙа эшләгәндә лә, былай ҙа әллә нишләп юл төшмәне. Түбәне әхирәтемдең һөйләүе буйынса ғына күҙ алдына баҫтырам.

Ҡырыҫ, көйһөҙ сырайлы төбәк. Тотошлайы менән оло хафаға тарыған төҫлө. Беҙҙе лә ятһынып-сәйерһенеп ҡаршылай. Эреле-ваҡлы, ҡалай башлы, ҡалайһыҙ ҡыйыҡлы өйҙәре лә сәләмләргә ашыҡмай. Улар араһында – Таңһылыуҙың өйө. Шул йорттарҙың береһендә минең әхирәтем донъяға килгән. Бынан теүәл утыҙ өс йыл әүәл.

Кем уйлаған...

Мин уның ғәзиз тупрағы өҫтөндә баҫып торам. Бихисап дәүерҙәр, борон-борон замандар буйы уның ата-бабалары йәшәгән, хәләл тирен, ал ҡанын түккән ер битендә... Мейемде ярып үткән уйҙан иҫһеҙ-һушһыҙмын. Бөтәһе лә уға әйләнеп ҡайта бит! Бөтә нәмә ошо изге тупраҡҡа әүерелә кире. Әхирәтем дә инде ата-бабалары, төп төркиҙәр янындалыр, йә уларға етер юлдалыр...

Мин ҡымшанырға ла, ҡыймылдарға ла ҡыймайым. Ҡәҙерлемде тыуҙырған һәм кире үҙенә алған ер...

Кем уйлаған...

Алдымда өнһөҙ, ҡобараһы осҡан Түбә. Ҡайҙа, ҡайһы тәңгәлдә һуң әхирәтемдең өйө?

Бихисап илдәр гиҙеп, иҫәпһеҙ-һанһыҙ ер-һыуҙарҙы күрепкисереп, ярты донъяны айҡап сыҡһа ла, Балтика ярҙарына – Ер сигенә етеп, аяҡтарын һәлендереп ултырһа ла, яҙмышы уны барыбер һиңә алып ҡайтҡан, Түбә. Барыбер һиндә башланып, һиндә килеп осланып ҡуйған юлдары ғәзиз балаңдың. Быныһы – иң мөһиме!.. Иҫләйһеңме икән: ниндәй ҡыҙың, ниндәй затың ине ул? Һиндә тыуған, һиндә тәрбиәләнгән. Нишләп, ҡайһылай ул Таңһылыуҙан Таняға әйләнгән? Һин тәрбиәләгәнһең, ошо күктәр аҫтында тыуған ул... Һине яҡын күрә, кисерә

белә, ярата инеме ул? Уны аңлай, кисерә алаһыңмы һуң һин үҙең? Әллә...

Дала өнһөҙ. Барыбер яуап ҡайтармаясаҡ. Ян-яғымды байҡайым. Ҡайһы тапҡырҙа икән, тим. Һөйөклөмдөң бишегебиләүе, тәү тәпәй баҫҡан йәшел сиҙәме?

– Үтегеҙ, үтегеҙ! – Таңһылыуҙың әсәһе. Нәҡ ул... Әсә былай ҙа шешенеп-бөтәшеп бөткән күҙҙәрен яулыҡ остары менән ҡаплай.

Кем уйлаған?.. Әсәһенә тартһа ла, әсәһе яҙмышын ҡабатламаны. Әсәһе ише, үҙ илендә үҙ ояһын үреп, ҡошсоҡтар осорманы.

...Шәриғәт буйынса ҡатын-ҡыҙға тыйылһа ла, эскә үтәм. Яңы балсыҡлы, яңы ғына буялған рәшәткәле... Ташындағы һүрәттән (Ригаға осҡанда фатирыбыҙҙа ҡалдырған фотоның ише!) моңһоу-болоҡһоу йөҙлө ҡатын ҡарай. Минең яҡыным...

Тора-торғас, уның ҡараштары йәнә йомшара, төҫһөҙләнә... Ул битараф килеш ҡайҙалыр алыҫҡа, минән аша, убалар тарафына баға. Хәҙер миндә эше лә юҡ. Был донъя ғәмдәренә иҫе лә китмәй.

...Беҙ китәбеҙ, һин ҡалаһың, яҡын кешем. Тағы яҙҙар килер ергә... Сәскәләр атыр, үләндәр йәшәрер тупрағың өҫтөндә, һин хаҡлы уларға! Һин үҙең дә ошо гөлдәй инең; ғүмерҙәрең дә гөл ғүмереләй ҡыҫҡа булды: иртән сәскә атты, ә кисен, кисен инде шиңде.

Ҡырау һуҡты ул бисара сәскәне. Ят тарафтың, сит рухтың ҡырауы...

## Фонохрестоматия

Актёр башҡарыуында өҙөк тыңлағыҙ.

## Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Әҫәрҙе уҡып, йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
**2.** Таңһылыу менән Фәнисә Ишемьярға ниндәй маҡсат менән киләләр? Таңһылыу ни өсөн ауылда кире тороп ҡала?
**3.** Петрикка, Таня-Таңһылыуға, Фәнисәгә тулы характеристика яҙығыҙ.
**4.** Әгәр ҙә һеҙ яҙыусы булһағыҙ, әҫәрҙе нисек тамамлар инегеҙ?

## Нәфис әҙәбиәттең ҡайһы бер теоретик төшөнсәләре

1. Һеҙгә билдәле булған сәнғәт төрҙәрен һанағыҙ. Нәфис әҙәбиәттең улар менән оҡшашлығын һәм айырмалыҡтарын билдәләгеҙ.

2. 8-се класта өйрәнгән әҫәрҙәр буйынса халҡыбыҙҙың үткәне, тормош-көнкүреше һәм киләсәккә уй-хыялдары хаҡында нимәләр белдегеҙ? (Миҫал өсөн бер-ике әҙәби әҫәрҙе файҙаланығыҙ.)

3. Өйрәнгән әҫәрҙәрҙән иҫегеҙҙә ҡалған геройҙарҙың исемдәрен атағыҙ.

### Әҙәби әҫәрҙәрҙең композицияһы, сюжеты һәм сюжет элементтары

Һәр бер нәфис әҫәр – яҙыусы тарафынан ижад ителгән тормоштоң тәрән нигеҙҙәрен, кешеләр характерын, уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәрен художестволы сағылдырған айырым бер донъя ул. Һәр бер әҫәрҙә художестволы ысынбарлыҡ һәм авторҙың күңел донъяһы сағыла. Художестволы образдар, тормош картиналары әҫәрҙә тема, идея (төп фекер), яҙыусының тойғолары, уның ысынбарлыҡҡа ҡарашы менән бәйләнә.

Әҙәби әҫәр билдәле бер ваҡытты үҙ эсенә ала – реаль тормошта беҙ ул ваҡыттың башланыуына йәки аҙағына иғтибар итеп бармайбыҙ. Яҙыусы уны сюжет ярҙамында, йәғни башланыуы (экспозиция), конфликттың сәбәбе (төйөнләнеү), ваҡиғалар үҫеше, кульминация һәм сиселеш сиктәрендә бирә.

Матурлыҡ ҡанундарының береһе булараҡ, әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларҙың, күренештәрҙең һәм уй-тойғоларҙың образлы

ойошторолош формаһы, йәғни әҫәрҙең төҙөлөшө **композиция** тип атала.

Композиция ифрат ҡатмарлы төшөнсә, шуға күрә уның бөтә асылын бындай ябай билдәләү генә биреп бөтөрә алмай. Композиция үҙенең эсенә әҙәби йөкмәткене лә, форманы ла һыйҙыра. Икенсе төрлө әйткәндә, композицияның мөһим бер өлөшө булып характерҙар һәм яҙмыштар тарихы – сюжет тора.

**Сюжет** – ул әҫәр композицияһының мөһим компоненттарының береһе, хәл-хәрәкәт, күренеш, художестволылыҡтың өҫтәлмә саралары менән бәйләнешле ҙур өлөшө. Эпик һәм драматик әҫәрҙәрҙең нигеҙендә хәл-ваҡиғалар ята икән, ваҡыт һәм аралыҡ та сюжеттың шулай уҡ органик киҫәгенә әүерелә. Сюжеттың төп өлөштәре:

Әҫәрҙең инеш өлөшөн, ғәҙәттә, *экспозиция* тип атайҙар. Унда, ҡағиҙә рәүешендә, алдағы ваҡиғаларҙың урыны, ваҡыты, төп персонаждар менән таныштырыла.

*Төйөнләнеү* – әҫәрҙә һүрәтләнгән хәл-ваҡиғаларҙың билдәле бер йүнәлеш алыуын, төп ситуацияның, конфликттың башланыуын күрһәтә. Төйөнләнеүҙән һуң *хәл-ваҡиғалар* етеҙерәк үҫешә башлай.

Артабан сюжеттың төп бер элементы – *кульминация* килә. Ул сюжет үҫешендә хәл-ваҡиғаларҙың иң көсөргәнешле мәле, юғары нөктәһе.

Унан һуң хәл-ваҡиғалар, ғәҙәттә, асыҡланып, ыңғай йәки кире *сиселеш* менән тамамланыусан.

## Әҙәби төрҙәр

Халыҡ ижады һәм әҙәби әҫәрҙәр йөкмәтке һәм форма оҡшашлығы буйынса өс төркөмгә бүленә: эпос, лирика, драма.

**Эпос.** Эпик әҫәрҙәрҙә авторҙар донъяның ҡатмарлы картиналарын хәл-ваҡиғалар һәм геройҙарҙың үҙ-ара мөнәсәбәте аша һынландыра. Әҫәрҙәр үҙ сиратында жанрҙарға бүленә. Халыҡ ижадында, мәҫәлән, төп жанрҙар – ҡобайырҙар, әкиәттәр, легенда-риүәйәттәр, йырҙар, бәйеттәр һ. б.

*Ҡобайыр* башҡорт фольклористикаһында бер нисә мәғәнәлә ҡулланыла.

Беренсе мәғәнәһе – башҡорт эпосының милли атамаһы. Ошо мәғәнәһендә рустар үҙ эпосын «былина», украиндар «дума», яҡуттар «олонхо» тип әйткән кеүек, башҡорт халҡының айырым эпик ҡомартҡыларын «ҡобайыр» термины менән йөрө-

төргә мөмкин. Икенсе төрлө әйткәндә, эпос һәм ҡобайыр – бер-береһенә ҡарата синоним терминдар. «Урал батыр», «Аҡбуҙат» ҡобайырҙары быны асыҡ миҫалы.

Икенсе мәғәнәһендә «ҡобайыр» тип тыуған ил һәм батырҙар тураһындағы героик, фәлсәфәүи йәки дидактик йөкмәткеле әҫәрҙәр атап йөрөтөлә. «Ай, Уралым, Уралым», «Уралып ятҡан Уралда», «Сура батыр», «Ил тигәндең кеме юҡ» кеүек ҡобайырҙар ана шундайҙарға миҫал булып тора.

*Хикәйәт* – башҡорт халыҡ эпосының бер төркөмө. Был атама халыҡ ижадында йыш ҡына осрай. Башҡорт хикәйәттәрендә, нигеҙҙә, ырыу-ара мөнәсәбәттәр, башҡорт ырыуҙарының бер халыҡ булып ойоша барыуына бәйле проблемалар сағылып ҡала. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алдар менән Зөһрә», «Бабсаҡ менән Күсәк» ҡомартҡылары – башҡорт хикәйәттәренең аҫыл өлгөләре.

*Әкиәттәр* – халыҡ ижадының әҫәрҙәре сәсмә телмәр менән сығарылған, уйҙырмаға ҡоролған боронғо жанрҙарының береһе. Улар батырҙар, хайуандар тураһындағы, тылсымлы, тормош-көнкүреш төрҙәргә бүленә.

*Легенда-риүәйәттәр, йырҙар* һәм башҡа жанрҙар ҙа төрлө тематик төркөмдәргә бүленә.

Яҙма әҙәбиәттә эпос – киң таралған һәм универсаль төр. Ул халыҡ тормошоноң ҡатмарлы яҡтарын киң масштабта һәм төрлө яҡлап хикәйәләй. Эпик әҫәрҙең нигеҙен эҙмә-эҙлекле үҫкән сюжет тәшкил итә, геройҙарҙың үҙ-ара мөнәсәбәте, эске кисерештәре, хис һәм тойғолары был төрҙә тәрән сағылдырыла. Тормошсан характер – рухи башланғыстан тыш мөмкин булмаған әйбер. Хәҙерге роман, повесть һәм хикәйәләрҙә лирик йылылыҡ – тәбиғи һыҙаттарҙың береһе.

Эпик төрҙөң киң таралған жанры – *роман*. Унда ҡатмарлы тормош ваҡиғалары сағылдырыла. Кешеләр яҙмышы романда төрлө яҡлап күрһәтелә. Хикәйә һәм повестан айырмалы рәүештә, романдар яҙмыштары һәм мәнфәғәттәре үҙ-ара бәрелешкән күп геройҙарҙы үҙ эсенә ала. Төп темалары буйынса тарихи, социаль, фәлсәфәүи, ғаилә-көнкүреш, мажаралы һ. б. романдар була. Романда геройҙарҙың характеры үҫеш-үҙгәрештә һүрәтләнә.

Әҙәбиәттә дилогия (ике роман), трилогия (өс роман) һәм романдар циклы булырға мөмкин. Башҡорт әҙәбиәтендә тәүге романдарҙың береһе – Ғ . Хәйриҙең «Боролош» әҫәре. Артабан был жанрҙы Д. Юлтый, А. Таһиров, И. Насыри, Һ. Дәүләт-

шина, С. Агиш, Ә. Бикчәнтәев, Ә. Вәли, К. Мәргән, З. Биишева, Я. Хамматов, Б. Рафиҡов, Ғ. Хөсәйенов, Д. Бүләков һәм башҡа яҙыусылар үҫтерҙе.

Романда хикәйәләү төп геройҙың үҙ исеменән йә өсөнсө заттан алып барылырға мөмкин.

*Повесть.* Эпик төрҙөң был жанрында бер нисә хәл-ваҡиға һүрәтләнә. Шуға ярашлы, геройҙарҙың һаны ла шаҡтай ғына була. Персонаждарҙың образ булараҡ формалашыуын, улар характерындағы үҙгәрештәрҙе биреү мөмкинлектәре хикәйәгә ҡарағанда бында сағыштырмаса киңерәк. Икенсе пландағы геройҙарҙың сюжет өсөн иң кәрәкле эш-хәлдәре генә алынғанлыҡтан, төп геройҙы төрлө яҡлап ҡылыҡһырлау юлдары повеста шулай уҡ күберәк.

Повесть роман жанрынан да айырыла. Әгәр ҙә романда үҙ-ара тығыҙ бәйләнештәге бер нисә сюжет һыҙығы бирелһә, повестың композицияһы башлыса төп герой яҙмышы тирәһендәрәк ҡорола. Романдағы ҡайһы бер геройҙарҙың эш-хәрәкәттәре төп образдыҡынан ниндәйҙер дәрәжәлә үҙ аллыраҡ булырға мөмкин. Повестың сюжеты иһә бер пландараҡ үҫә: ҡалған персонаждар, ғәҙәттә, төп геройға мөнәсәбәтле яҡтары менән генә һүрәтләнә.

*Хикәйә* – эпик төрҙөң бәләкәй жанрҙарының береһе. Уны бәләкәй эпос тип тә йөрөтәләр. Икенсе төрлө әйткәндә, хәл-ваҡиғаларға ҡоролған бәләкәй күләмле сәсмә әҫәрҙәрҙең иң төп жанры, тиһәк тә ярай. Хикәйәнең сығанаҡтары – халыҡ ижадындағы әкиәт, күләме яғынан ҙур булмаған хикәйәт, легенда һәм риүәйәт жанрҙары. Шулай уҡ боронғо дөйөм төрки әҙәбиәтендә киң урын алған парса, хикмәт жанрҙары ла башҡорт хикәйәһенең барлыҡҡа килеүенә һиҙелерлек йоғонто яһаған.

Хикәйә күләме яғынан повестан бәләкәйерәк, унда ҡатнашҡан геройҙар сағыштырмаса әҙерәк була. Был жанрҙа, ғәҙәттә, бер генә проблема күтәрелә. Ул, алғы пландағы бер төп герой менән бергә, бер сюжет (бик һирәк осраҡта – ике йә бер нисә) һыҙығына ойоша.

Был жанрҙың жанр формалары араһында тарихи хикәйәләр ҙә осрай. Улар, тарихи повестар һәм романдар кеүек үк, әҙәби әҫәрҙәрҙәге тарихилыҡ принцибына нигеҙләнә. Йәғни бындай хикәйәләрҙең нигеҙендә ҡасандыр ысынбарлыҡта булған берәй тарихи ваҡиға, уның конкрет тарихи урыны ятырға, берәй тарихи шәхес хәрәкәт итергә тейеш.

Ғайса Хөсәйеновтың «Ете ырыу» хикәйәһендә башҡорт ырыуҙарының йыйындары тураһында һүҙ бара, ырыу башлыҡтарының исемдәре телгә алына. Дөрөҫ, был әҫәрҙә ысынбарлыҡтағы ҡайһы бер ваҡиғалар икенсе дәүергә күсерелгән, төрлө осорҙа йәшәгән шәхестәр бергә ҡушылған. Хикәйә – тарихи яҙма түгел; нәфис әҫәр булараҡ, унда авторҙың төп маҡсатына ярашлы, ошондай ҡайһы бер уйҙырмалары ла ҡатнашырға мөмкин.

*Очерк*. М. Горький «факттан уның мәғәнәһен һығып сығара белергә кәрәкле» тигән фекерҙе ҡабатларға яратҡан. Уның был һүҙҙәрендә очерк жанрының бөтә тәбиғәте сағыла, тиергә мөмкин. Хикәйә, новелла, повесть кеүек жанрҙарҙан очерк шуның менән айырыла, уның төп йөкмәткеһен тормошта ысынлап та йәшәгән кеше һәм хәл-ваҡиғалар тәшкил итә. Был йәһәттән ҡарағанда, тормош ысынбарлығына очерк башҡа бөтә жанрҙар менән сағыштырғанда ла яҡыныраҡ тора. Шулай булғас, унда ижад хыялы ла аҙыраҡ урын ала тигән һүҙ.

**Лирик** төрҙөң иң ныҡ таралған жанры – *шиғыр*. Башҡорт шиғриәтенең тамыры булған боронғо төрки поэзияһында шиғри әҫәрҙәр, тематикаһына һәм формаһына ҡарап, төрлө жанр формаларына бүленгән: ғәзәл, робағи, мәснәүи, ҡасида, ҡитға, хикмәт һ. б. Көнбайыш әҙәбиәтендә лә буколика, гимн, идиллия, инвектива, мадригал, ода, элегия кеүек жанр формаларының борон үҙ тарихы булған.

XX быуатта, совет осоро башҡорт шиғриәтендә боронғо традициялар онотолоп, бәләкәй күләмле лирик әҫәрҙәр барыһы ла шиғыр тип кенә аталды. Уның традицион формаларынан баш тартылғанлыҡтан, лирикалағы идея-тематик бүленештең кәрәклеген бөтөнләй инҡар итеү дөрөҫ түгел ине. Күренекле ғалим Ким Әхмәтйәнов тормоштағы бөтә хәл һәм күренештәр ҙә был жанрҙың һүрәтләү объекты булып килә алыуын күҙ уңында тотоп, һүрәтләү рәүеше буйынса шиғырҙарҙы бер нисә төргә бүлде. Уларҙың ҡайһы берҙәре түбәндәгеләр:

*Шиғыр-монолог*. Тәрән фекер һәм көслө тойғо уятҡан берәй хәл йәки ваҡиға тураһында шағирҙың уйланыуҙары, тормош күренештәренә авторҙың үҙ мөнәсәбәттәрен белдереүе. Шиғыр-монологта беҙ авторҙың үҙен генә тыңлайбыҙ. Лирика – шағирҙың донъяға ҡарата поэтик мөнәсәбәте булғанлыҡтан, шиғыр-монолог формаһы шиғыр жанрының иң таралғаны булып тора. Шуға күрә уға миҫалды һәр бер шағир ижадынан күп итеп килтереп булыр ине.

*Шиғыр-өндәшеү.* Һүрәтләү объекты булған кеше йәки әйбергә мөрәжәғәт итеү рәүешендә яҙыла. Шиғыр-өндәшеү – ярайһы уҡ ҡатмарлы жанр формаһы. Сөнки һүҙ бара торған предметтың туранан-тура үҙенә ҡарап фекер йөрөтөү яланғас өгөт-нәсихәткә, нотоҡ уҡыуға юл аса. Шиғыр-өндәшеүҙең һәйбәт үрнәктәрен Ғ. Туҡай менән М. Ғафуриҙан да, Ш. Бабич менән С. Ҡудаштан да күпләп табырға була. Ш. Бабич шиғырҙарының исемдәре үк был төрҙөң үҙенсәлектәрен һыҙыҡ өҫтөнә алып тора: «Эй, китап», «Эй, дуҫтарым», «Ғашиҡ дуҫыма», «Әйҙә, милләт», «Әйҙә, күңелем», «Эй, большевик», «Эй, мулла абзый» һ. б.

*Шиғыр-диалог* формаһы ике шәхестең йәки предметтың, күренештең үҙ-ара һөйләшеүенә ҡорола. Миҫалға Р. Бикбаев шиғырынан түбәндәге өҙөктө килтерәйек.

– Ниндәй шатлыҡ иң ҡәҙерле?
– Балам килтергән шатлыҡ.
– Ниндәй ҡайғы иң ҡәһәрле?
– Балам килтергән ҡайғы.

Лирик төргә тағы *ода, элегия, марш, эпиграмма* кеүек шиғри формалар ҡарай.

Хәҙерге ваҡытта шағирҙар лириканың боронғо традицияларын, жанр формаларын ҡабаттан тергеҙеү өлкәһендә уңышлы эшләй: ғәзәлдәр, робағиҙар, мәдхиәләр, нәсихәттәр һ. б. әҫәрҙәр ижад итеЛә.

**Лиро-эпик** төр – үҙенең бөтә тәбиғәте менән бер үк ваҡытта эпосҡа ла, лирикаға ла ҡарай торған жанрҙарҙы үҙ эсенә ала. Улар рәтенә әҙәбиәт ғалимдары поэма менән балладаны, мәҫәлде индерә.

**Драма** – художестволы әҙәбиәттең төп төрҙәренең береһе. Эпик әҫәрҙән айырмалы рәүештә, драмала автор телмәре булмай. Бөтә әҫәр персонаждарҙың үҙ-ара һөйләшеүе рәүешендә төҙөлә, йәғни диалогтарҙан, монологтарҙан һәм полилогтарҙан тора.

Эпик әҫәрҙәрҙә (хикәйә, повесть, роман һ. б.) геройҙар күп яҡлы һүрәтләнә. Геройҙар йәшәгән мөхит, уларҙың уй-кисерештәре йыш ҡына автор телмәре аша бирелә. Ә драма әҫәрҙәрендә быларҙың барыһы ла тик диалогта һәм герой хәрәкәтендә асыла (грекса *драма* хәрәкәт тигәнде аңлата).

Драма төрө үҙе бер нисә жанрға бүленә: трагедия, комедия, драма һ. б.

*Трагедия* – драманың боронғо жанры. Унда башлыса хәл итеп булмаҫлыҡ ҡаршылыҡтар һүрәтләнеп, геройҙарҙың характеры фажиғәле хәлдәрҙә, һәләкәткә илтә торған тиңһеҙ көрәштә асыла. Трагедияның нигеҙенә һалынған конфликт төп геройҙың фажиғәле үлеме менән хәл ителә. Башҡорт әҙәбиәтендә трагедияның юғары өлгөһөн Мостай Кәрим бирҙе: «Ай тотолған төндә», «Салауат», «Ташлама утты, Прометей!» әҫәрҙәре Башҡортостанда ғына түгел, бөтә ил күләмендә ҙур баһа алды.

*Комедия*, трагедияға ҡапма-ҡаршы булараҡ, ижтимағи тормоштағы йәки көнкүрештәге көлкөлө яҡтарҙы сағылдыра. Унда кеше характерындағы етешһеҙлектәр, тормоштағы кире күренештәр тәнҡит ителә. Х. Ибраһимовтың «Башмағым», М. Кәримдең «Ҡыҙ урлау» исемле комедиялары был жанрҙың милли драматургияла үҫеш кимәлен билдәләүсе әҫәрҙәр рәтенә инә.

*Драма* жанры комедияның да, трагедияның да үҙенсәлектәрен эсенә ала. Ләкин драмала конфликт, трагедиялағы йәки комедиялағы кеүек, бер яҡлы ғына (йә фажиғәле, йә көлкөлө генә) булмай, ә ҡатмарлы һәм етди, тормошсан итеп бирелә. Башҡорт әҙәбиәтендә һәйбәт драма үрнәктәре күп. С. Мифтахов драмалары, Д. Юлтыйҙың «Ҡарағол», Б. Бикбайҙың «Ҡарлуғас», М. Кәримдең «Яңғыҙ ҡайын», Н. Асанбаевтың «Ҡыҙыл паша», А. Абдуллиндың «Ун өсөнсө председатель» һ. б. сәхнә әҫәрҙәре ана шундайҙар.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


**Рәшит Назаров.** Башҡорт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 4
**Абдулхаҡ Игебаев.** Башҡортостан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 5
**Хәким Ғиләжев.** Башҡорт теле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 6
**Хәсән Назар.** Башҡорт теле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 7
**Мәүлит Ямалетдинов.** Халҡым хазинаһы . . . . . . . . . . . . . . . 8
**Мәхмүт Хөсәйен.** Башҡорт теле ғорур яңғырай . . . . . . . . . . 9
**Валентин Распутин.** Француз теле дәрестәре . . . . . . . . . . . . 11
**Дини әҙәбиәт** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 37
Тәрбиәле булайыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 40
**Рауил Бикбаев.** Хәҙистәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 41
**Мәүлит Ямалетдинов**. Әл-Фатиха сүрәһе . . . . . . . . . . . . . . 42
Әл-Ихлас (Пакланыу) сүрәһе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 43
Әл-Кәүҫәр (Муллыҡ) сүрәһе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 43
**Шафиҡ Әминев-Тамъяни** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . 44
Урал . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 44
Башҡорт бабаларының тарихы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 46
**Ғәли Ибраһимов** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 48
Кинйә (*романдан өҙөк*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 49
**Әйтештәр** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 77
«Бер тигәс тә ни яман?..» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 79
Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсән әйтеше (*өҙөк*) . . . . . . 80
**Ҡобайырҙар** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 82
Ил тигәндең кеме юҡ (*өҙөк*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 83
Салауат батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 84
**Мостай Кәрим.** Сәсән . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 85
**Яныбай Хамматов** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 87
Төньяҡ амурҙары (*романдан өҙөк*) . . . . . . . . . . . . . . . . . 88
«Төньяҡ амурҙары» тураһында . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 119
**Ғайса Хөсәйенов** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 123
Ете ырыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 124
**Булат Рафиҡов** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 137
Эйәрләнгән ат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 139
**Рәшит Солтангәрәев** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 164
Осто бөркөт (*повестан өҙөк*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 165
**Кем ул Муса Мортазин?** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 180
**Ғәлимов Сәләм** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 181
Республика иртәһе (*поэманан өҙөк*) . . . . . . . . . . . . . . . . 182
Шоңҡар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 186
**Баязит Бикбай** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 206
Ер (*поэманан өҙөк*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 207
Ҡаһым түрә (*драманан өҙөк*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 211
**Зәйнәб Биишева** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 236
Йәшәү – хеҙмәт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 237

Һөнәрсе менән Өйрәнсек . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 238
**Мостай Кәрим** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 257
Ҡайын япрағы тураһында . . . . . . . . . . . . . . . . . . 258
Россиянмын . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 260
Йәшәйһе бар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 262
Айһылыуҙың күҙ йәштәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . 262
Ҡоролтайға ҡотлау . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 264
Үлмәҫбай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 264
**Рәми Ғарипов** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 283
Урал йөрәге . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 284
Аманат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 286
Уйҙарым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 290
**Рауил Бикбаев** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 293
Башҡортостан бында башлана . . . . . . . . . . . . . . . 294
Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда . . . . . . . . . 295
Дауыл . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 296
Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта . . . . . . . . . . . . . . . 297
**Роберт Паль** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 301
Уралым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 302
**Талха Ғиниәтуллин** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . 303
Мәтрүшкә еҫе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 304
Әсә һәм бала . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 317
**Назар Нәжми** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 332
Тыуған ил тураһында һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . 333
Аҡ шишмә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 334
Һинең ниндәй улыңмын мин? . . . . . . . . . . . . . . 335
**Әмир Әминев** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 337
Ҡытай-город (*повестан өҙөк*) . . . . . . . . . . . . . . 338
**Хәсән Назар** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 366
Ғәзиз ерем . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 367
Аҡҡа табыныу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 368
Дауа . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 369
**Ринат Камал** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 371
Таня-Таңһылыу (*романдан өҙөк*) . . . . . . . . . . . . . 372
**Нәфис әҙәбиәттең ҡайһы бер теоретик төшөнсәләре** . . . . . . . . . 391

*Учебное издание*

**Юлмухаметов** Миндибай Бахтиярович
**Идельбаев** Мирас Хамзович

**БАШКИРСКАЯ ЛИТЕРАТУРА**

**Учебное пособие для 8 класса общеобразовательных организаций с родным (башкирским ) языком обучения**

*( на башкирском языке )*

*Уҡыу баҫмаһы*

**Юлмөхәмәтов** Миндибай Бәхтиәр улы
**Иҙелбаев** Мирас Хәмзә улы

**БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ**

**Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 8-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

Тышлыҡта – *Н. Ғәлиев,* форзацтарҙа *А. Данилов* фотолары файҙаланылды

Редакция мөдире *Г. А. Раянова*
Мөхәррире *З. И. Ҡазыева*
Биҙәлеш мөхәррире *З. И. Кәримова*
Рәссамы *А. Ә. Васılов*
Техник мөхәррире *Г. Р. Исхаҡова*
Корректорҙары *А. Х. Хәкимова, Г. Р. Попова, Л. Ф. Саниева*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 25.08.2017. Форматы 60×90 1/16. Офсет ҡағыҙы. BTSchoolBook гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 25,00+0,25 форз. Шартлы буяу отт. 51,50. Иҫәп-нәшер таб. 16,28+0,40 форз. Тиражы 6 400 дана. Заказ 1.0142.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.



КИТАП